# Ағиҙел

Өфө,
сентябрь
2010

9(1049)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаçары),*
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире),*
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаçары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү
буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августа теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды • һәм биттәргә һалынды.
Баçырға ҡул ҡуйылды 01.09. 2010. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
"Times" гарнитураһы. Офсет ысулы менән баçылды.
Шартлы баçма табаҡ 15,6. Иçәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 739 экз. Һатыуҙа хаҡы иркле. Заказ № 2.0122.10.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баçма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баçылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2010 (9,1049)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Кәтибә Кинйәбулатова.** Зая түгел ғүмер… Ш и ғ ы р ҙ а р . ............5
**Сәрүәр Ғәләүетдинов.** Егеттәр китәләр һалдатҡа. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................................................14
**Мар. Сәлим.** Арҙаҡлыларға арнауҙар. Ш и ғ ы р ҙ а р . .................20

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Спартак Ильясов.** Йөрөк ҡола. Бәйән. .........................................29
**Мәхмүт Хужин.** Яңғыҙ сағыл. Э с с е . *Аҙағы.* ................................70

ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ

**Флүрә Низамова**. Тел. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................129
**Наилә Тимерханова.** Әйтәм һүҙ – түҙһәң түҙ! .............................132
**Кинйә Абай**. Ҡоштар осоп етмәҫ ерҙә… Ш и ғ ы р ҙ а р . ............134

*Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

**Ғайса Хөсәйенов, Фәнил Күзбәков.** Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн? ......................................................................135

РУХИ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ

**Әхмәт Сөләймәнов.** Әхмәтзәки Вәлидиҙең халыҡ ижады менән дуҫлығы. ...........................................................................147

БАШҠОРТ ХӘТЕРЕ

**Ғариф хәҙрәт Ғабдрахманов.** Туҡаевтар – арҙаҡлы башҡорт имамдары. ...........................................................................166

*2010 – Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу йылы*

**Мәхмүт Хужин.** Ғаилә: батша Рәсәйе, социализм һәм баҙар капитализмында. ......................................................................178

БЕҘ ЙӘШӘГӘН ҠАЛА: КҮМЕРТАУ

**Тәлғәт Шаһманов.** Һоро күмер биргән ғүмер. ............................183

«АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**К. Киньябулатова, С. Галяутдинов, Мар. Салим.** *Стихи.*

ПРОЗА

**С. Ильясов.** Славный Рысак. *Повествование.*
**М. Хужин.** Заветный косогор. *Эссе. Окончание.*

ТВОРЧЕСТВО НАШИХ ЧИТАТЕЛЕЙ

**Ф. Низамова, Н. Тимерханова, Кинзя Абай.** Стихи, афоризмы.

*Встречая съезд писателей Башкортостана*

**Г. Хусаинов, Ф. Кузбеков.** Является ли литература учебником жизни?

ДУХОВНЫЕ КОРНИ

**А. Сулейманов.** Народное творчество и Ахметзаки Валиди

ПАМЯТЬ БАШКИРА

**Г. Гадрахманов.** Тукаевы – именитые башкирские имамы.

*2010 – год Всероссийской переписи населения*

**М. Хужин.** Семья: в царской России, при социализме и рыночном капитализме.

ГОРОД, ГДЕ МЫ ЖИВЕМ: КУМЕРТАУ

**Т. Шагманов.** Жизнь, которую дала бурый уголь.

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары –292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

**Кәтибә**
**КИНЙӘБУЛАТОВА**

# ЗАЯ ТҮГЕЛ ҒҮМЕР...

## *Тұҙәм*

*Шатлыҡтарға күмелгәнһең,*
*Йөҙҙәрең нурлы — күрәм.*
*Миндә шатлыҡ һирәк ҡунаҡ,*
*Уныһын яҡшы беләм...*
*Һин бәхетле,*
*Ә мин моңһоу,*
*Ҡайғы күлендә йөҙәм.*
*Һәр кемдең үҙ күрәсәге,*
*Хоҙайҙан, тим дә түҙәм.*

1996

## *Ул бит...*

(Хәҙерге заман һалдат
әсәләре ауыҙынан)

*Әле генә эңер яҡтыһында*
*Хат алғайны ғәзиз улынан,*
*Хәҙер бына ярты төн уртаһы,*
*Бер генә эш килмәй ҡулынан.*
*Кем ҡулында — шуның ауыҙында, тип*
*Әйтеүҙәре хаҡ ул борондан.*
*Мәрхәмәтһеҙ яҙмыш,*
*Ни ҡылмаҫһың,*
*Ниҙәр килмәҫ һинең ҡулыңдан.*

---

*Кәтибә Кинйәбулатова (1920) — күренекле шағирә. Өс тиҫтәләгән китап авторы. Хөрмәтле ҡәләмдәшебеҙҙе оло юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ. Ҡоростай һаулыҡ, рух ныҡлығы, яңы ижади артылыштар теләйбеҙ.*

*«Кем ҡулында — шуның ауыҙындамы?» —*
*Һорайым мин бик йыш үҙемдән.*
*Бала ҡайғыларын бирмә, Хоҙай,*
*Ул бит ауыр хатта үлемдән.*
*Кем ҡулында — шуның ауыҙында шул...*

1995

## Һыҙҙы

*Беҙҙең егет*
*Ғашиҡ итте*
*Ҡыҙҙы.*
*Шул минуттан*
*Ҡыҙ аҡылдан*
*Яҙҙы.*
*Әммә ғөрөф-ғәҙәт*
*Артыҡ-артыҡ*
*Тыйнаҡ итте*
*Ҡыҙҙы.*
*Һөйөү булһа ла ул*
*Иретерлек*
*Боҙҙо.*
*Егет ҡауышырға*
*Ҡыҙға хәбәр итте.*
*Шунан бирле күпме ваҡыт*
*Елдәй үтте, —*
*Егет яуап көттө.*
*Көтөп көтөк булғас,*
*Түҙемлеге бөттө.*
*Ғәрләнде лә егет,*
*Үпкәләне, туҙҙы,*
*Йөрәге түҙмәне,*
*Уттай янды,*
*Ҡыҙҙы.*
*Ә ҡыҙ бик тә ғорур:*
*Яуап бирмәй*
*Түҙҙе.*
*Түҙеп эште*
*Боҙҙо.*
*Егет нишләһен —*
*Ташланы ла*
*Ҡыҙҙы*
*Бер мәрйәгә*
*Һыҙҙы.*

1996

## Төнгө хыял, аң тамаша

*Төнгө хыял минең*
*Ҡыҙыҡ.*
*Йөрөй ҡаянан ҡаяға*
*Бер туҡтамай*
*Осоп-ҡуныҡ.*

*Берсә бөркөт булып*
*Саңҡый,*
*Берсә Ҡояш булып*
*Балҡый.*
*Ҡояш көлә,*
*Нурын һибә,*
*Ырыҫ-бәхет*
*Теләп беҙгә.*
*Ә ғүмеркәй*
*Ауыр һулай,*
*Яралы ҡош*
*Булып уйнай.*
*Халҡың өсөн*
*Ни ҡылдың, ти,*
*Ниңә яндың,*
*Ник туңдың, ти.*
*Бахырлыҡҡа*
*Күндеңме әллә,*
*Өмөтөңдән*
*Дүндеңме әллә?*
*Балаларың*
*Аҙа-туҙа,*
*Изге ғөрөф-*
*Ғәҙәт боҙа.*
*Туған телдән*
*Сабыйҙарың*
*Айырыла.*
*Ҡаурыйҙарың,*
*Ҡанаттарың*
*Ҡайырыла.*
*Аптырағас...*
*Һикереп торам,—*
*Төндө ҡыуам,*
*Һәм ҡысҡырам:*
*Сыҡсы, Ҡояш!*
*Сыҡсы, Ҡояш,*
*Минең мәңге*
*Тоғро юлдаш*
*Булсы, Ҡояш,*
*Булсы, Ҡояш!*

1999

## Уйҙар ҡара урман

*Йоҡоһоҙ мин,*
*Уйҙар ҡара урман.*
*Моңһоу нурын һибә*
*Тулған ай.*
*Йөрәк ҡаға...*
*Әйтерһең, ул — бәйһеҙ*
*Аҡлан буйлап сапҡан*

*Яңғыҙ тай.*
*Таң яҡынлай.*
*Уйҙар ҡара урман,*
*Тәҡәтем юҡ,*
*Әйтсе, ни ҡылмаҡ?*
*Шулай ярһый, тиҙәр,*
*Ситтә кеше,*
*Тыуған яғы тартһа*
*Ер-тупраҡ.*

1998

## Шайтан шатлығы

*Шайтан килеп керҙе кисә*
*Хәл-әхүәл һорашырға.*
*Туҙған сәстәре өҫтөнән*
*Кәпәс кейгән башына.*
*Керҙе лә ул түргә уҙҙы*
*Бер эшлекле кешеләй,*
*Ауыҙына ҡабып алған*
*Сигареты кишерҙәй.*
*Көпә-көндөҙ ҡиәфәтһеҙ*
*Йөрөйһөң, тинем, ниңә?*
*Кәпәсе бар, сыр яланғас,*
*Ни әйтәһең пәрейгә?*
*Шарҡылдап көлөп ебәрҙе,*
*Ҡушаяҡлап һикерҙе.*
*Кәйефе шәп, усын ыуып,*
*Ҡулдарына төкөрҙө.*
*— Нимә һиңә оҡшамай?— ти.—*
*Бар ағзам да урынында,*
*«Яланғас» тиһегеҙҙер ҙә,—*
*Беҙ күбәйҙек, эш шунда...*
*Һөйләргә керҙем шатлыҡты:*
*Гендар үҙгәрә беҙҙең,*
*«Ҡара шайтан» тип әрләмәң,—*
*Аҡтарын үҙем күрҙем.*
*— Кем балаһы, кем ҡыҙы?— тим,*
*Күлдәге ыштан ғына.*
*Ыштаны ла бот төбөнән,*
*Йылмая, ҡуштан ғына.*
*Йот та ебәр, сәйгә һалып,*
*Кейем юҡ тотонорға.*
*Хәйерһеҙең йоп-йомро*
*Әп-әҙер йотолорға.*
*Тәмәкеһен борхотоуы*
*Нәҡ тә беҙ: шайтан инде,*
*Әйтәм бит: ҡәһәрең көлә,*
*Аҙҙырғыс ҡуштан инде.*

*«Ниңә килдең, ниңә көлдөң*
*Күргем килмәйсе һине»,—*
*Тигәс, аптырап китә ул:*
*«Мин замананың ене.*
*Беҙҙе һаман да белмәгәс,*
*Артта ҡалғанһың»,— тине.*

1997

## Йәш ғүмерҙе иҫкә алдым

*Үкенмәйем, юҡ, бер тамсы!*
*Уға артыҡ табынмайым,*
*Әле ошо көндәрҙә лә*
*Йәшлегемде һағынмайым*

*—Ниңә?— тиһең,— һорайһыңмы?*
*Һиңә барыһы билдәле лә,*
*Ни көлөргә, ни иларға...*
*Аптыраткан көндәре лә.*
*Ҡотորғанда тышта буран*
*Ҡейеп сығыр ни туны юҡ.*
*Йәнең, тәнең туңғанда ла*
*Дөрләтергә утыны юҡ.*

*Таҡмаҡ әйтеп бейейбеҙ ҙә*
*Яғылмаған өйөбөҙҙә,*
*Әле һыктап, әле көлөп.*
*Ҡосаҡлашкан көйөбөҙгә.*

*Ир-егеттәр яуға киткән*
*Дошмандарҙы ҡыйратырға.*
*Ә ҡыҙҙарҙың йәше еткән,—*
*Егете юҡ һоратырға.*

*Йәшен йәшлек ятып ҡалған*
*Һыйыр ярған бураҙнала,*
*Утлы һуғыш ҡырҙарында.*
*Ҡайтһын, тиеп һорама ла,*
*Иҫкә төшә тик шулай ҙа,*
*Йәшлек йырын йырлағанда.*

1998

## Яҡын дуҫым

*Яҡын дуҫым!*
*Бер һүҙем бар һиңә,*
*Алдан әйтеп ҡуям серемде...*
*Ҡәберемә килереңде беләм,*
*Кем теләһен инде үлемде...*
*Етер инде,*

*Етер ундай бер көн,*
*Ундай яҙмыш тик бер Хоҙайҙан.*
*Сәскә күрһәң минең тупрағымда,*
*Кем ултыртҡан, тимә, һеҙ ҡайҙан?*
*Умырзая сығыр, бәлки, унда,*
*Күк сәскәләр, бәлки, сығырҙар,*
*Улар әйтер: «Беҙ бит шиғырҙар,*
*Шағирҙәнең үҙе тере саҡта*
*Яҙып өлгөрмәгән шиғырҙар.*
*Һеҙҙе өҙөлөп һөйгән шиғырҙар...»*

2002

## Зая түгел ғүмер

*Әле генә донъя аҡ ҡар ине,*
*Тып-тын ине урман, убалар.*
*Бөгөн бына йәшел нурҙар кисеп,*
*Һикереп уйнап йөрөй ҡоралай.*

*Һары сәскә яуған яландарға*
*Теҙелешеп төштө торналар.*
*Йә ҡыш итеп, йәки яҙҙар итеп*
*Үтә икән ғүмер аралар.*

*Зарланмайым, һыҡранмайым, мәгәр*
*Ҡыш өшөһәм, яҙын йылындым.*
*Зая түгел ғүмер, дуҫ ишетһә*
*Йөрәк ярып сыҡҡан йырымды.*

2000

## Китә инде кеше

*Китә инде кеше.*
*Был донъялар фани.*
*Мәңгелеккә килмәй берәү ҙә.*
*Мин дә китермен ул,*
*Күп ҡалмаған,*
*Йән иремәй хәҙер көйләүгә.*

*Китһәм әгәр,*
*Килер туғандарым,*
*Яҡын күргән ихлас дуҫтарым.*
*Дошман йөрөмәй ул үлгәндәргә,*
*Табутыма килмәҫ дошманым.*

*Дуҫтарыма минең бер үтенес:*
*Тотоп ҡараһындар ташымды.*
*(Тере саҡта яҙмыш һаран һөйҙө)*
*Һыпырғандай булыр башымды.*

2001

## *Әй, ғүмеркәйҙәрҙең үтеүҙәре*

*Әй, яҙмышҡайҙарҙың яҙғандары —*
*Ҡайҙан-ҡайҙа килеп юлыҡтым.*
*Ожмах ҡына ине тыуған яғым,*
*Бында белдем эҫе-һыуыҡты.*

*Ташла ла кит, имеш, тыуған-үҫкән*
*Ата йортон, һыулау кисеүҙе...*
*Ней ғүмерҙәр үткәс һыҡтай күңел:*
*Ситтә шунса ғүмер кисерҙең.*

*Ҡәҙерһеҙ ҙә булдым, ҡәҙерле лә,*
*Ярау ауыр инде «яттар»ға,*
*Күпме тартмаҡ кәрәк,*
*Арыйҙар бит*
*Дүрт аяҡлы хатта аттар ҙа.*

*Башҡа булмышым юҡ,*
*шиғриәткә*
*Хеҙмәт итеү — барлыҡ бурысым...*
*Бер әйтмәһә, бер әйтерҙәр әле,*
*Йәшәне, тип, ихлас йыр өсөн.*

2002

## *«Ағиҙел»ем*

*Етмеш бишең елеп килеп еткән,*
*«Ағиҙел»ем, туған журналым.*
*Күпме тарих, яҙмыш һинән үткән,*
*Дан-шөһрәтең ҙур, тип уйлайым.*

*Яҡын дуҫы ла һин мәғрифәттең,*
*Туған телебеҙҙе ҙурланың.*
*Усағы һин матур шиғриәттең,*
*Халҡым күңелдәрен нурланың.*

*«Ағиҙел»ем!*
*Ҡәҙер, хөрмәт һиңә,*
*Үҫтерәһең рухым байлығын.*
*Туған халҡың, тыуған илең өсөн*
*Оло терәк һинең барлығың.*

*Аҡмуллалар, Бабич моңдарында*
*Һуғарылған һинең йәндәрең.*
*Улар һымаҡ хаҡлыҡ юлдарында*
*Ил хәстәрен тарта иңдәрең.*

*Етмеш бишең елеп килеп еткән,*
*«Ағиҙел»ем, туған журналым.*
*Һин үлемһеҙ, йәшә мәңге-мәңге —*
*Йәшәгәндәй мәғрур Уралым!*

## Байлығым

*Байлығым бар, байлығым —*
*Ап-аҡ ҡар тирә-яғым.*
*Һауалар саф, күктәр зәңгәр,*
*Офоҡта аға сағым.*

*Кәрәкмәй, кәрәкмәй бер ни,*
*Булһа ла алда сағым.*
*Яратам ап-аҡ донъяны —*
*Ерҙең илаһи сағын.*

*Күк алдамай, Ер алдамай,*
*Барыһы миңә ихлас.*
*Минең менән моң шишмәһе —*
*Шиғриәт — Хызыр Ильяс.*

## Тирәк

*Һеҙҙең тирәк*
*Ерҙә һирәк:*
*Яҙҙар етһә,*
*Эй-й, тиҙерәк*
*Япраҡтарын*
*Ярған була,*
*Йәшел нурға*
*Сумған була...*

*Тигәйнең һин*
*Оҙаҡ-оҙаҡ*
*Ҡарап тороп*
*Тирәгемә.*
*Ошо ваҡыт*
*Күҙҙәреңдең*
*Нуры төштө*
*Йөрәгемә.*
*Әйтсе, егет,*
*Тирәгемә*
*Ҡараның һин*
*Ниңә, ниңә?*
*Хәҙер ҡайҙан*
*Табайым, тим,*
*Дауаларын*
*Йөрәгемә?*
*Әйтсе, егет!..*

## Ай, йондоҙҙар

*Ҡыйырсыҡ ай йөҙә,*
*Зәп-зәңгәр күк.*
*Йондоҙҙар күп,—*

*Ем-ем гөлләмә.*
*Мине генә, мине генә күреп*
*Һибелерҙәр төҫлө эргәмә.*
*Һибелерҙәр шул.*
*Унда берәү*
*Ҡурай уйнай. Ҡурай һағышлы.*
*Мөхәббәтле төн был.*
*Ҡем менән кем,*
*Кем менән кем икән ҡауышыр.*
*Әй, яҡты ла күктәр!*
*Йондоҙ, йондоҙ ғына...*
*Сертләп, сертләп нурҙар тарала.*
*Ҡемдәр тыуған, кемдәр китмәҫ тиһең*
*Йондоҙ сертләп яуған арала.*

## Яңы

*Балта сапҡан араларҙа*
*Түңгәк ял итеп ҡала.*
*Түңгәк ялы менән генә*
*Донъяла йәшәп ҡара.*

*Түңгәк ялына ла хатта*
*Күптәр йәшәргә риза,*
*Тик эшһеҙлек хаттин ашты,*
*Нимә уйлайҙыр «Хужа».*

*Анау завод, фабрикалар*
*Оло йоҙаҡ таҡҡандар,*
*Һирәк-мирәк кенә йәштәр*
*Төшөмлө эш тапҡандар.*

*Урамға сыҡһаң, тамаша —*
*Күреп күңелең тула.*
*Газондарҙа сәскә түгел,*
*Алыпһатарҙар тора.*

*«Яңы Рәсәй» тибеҙ ҙә ул,*
*Башҡортостан да яңы.*
*Элеккеһе элек туҙған,*
*Ҡалғаны туҙа яңы.*

*Ҡала матурлана, тибеҙ,*
*Бик хуп, тип килешәбеҙ.*
*Тик яңылар беҙгә түгел,*
*Иҫкеһен бүлешәбеҙ.*

1993



**Сәрүәр**
**FӘЛӘҮЕТДИНОВ**

## *Егеттәр китәләр һалдатҡа*[*]

*Егеттәр китәләр һалдатҡа,*
*Иңгә-иң терәшеп сафтарҙа.*
*Әсәләр оҙата улдарын —*
*Ватанды гел уяу һаҡларға.*

*Ауылда, әйтерһең, ҙур байрам,*
*Берәйһе һалдатҡа алынһа.*
*Йән арбар моңдары тальяндың*
*Тарала йәм өҫтәп табынға.*

*Егеттәр китәләр һалдатҡа,*
*Әсәләр бешергән бауырһаҡ.*
*Һылыуҙар ҡулъяулыҡ сиккәндәр,*
*Аһ... Айырылышыу ауыр ҙа...*

*Егеттәр китәләр һалдатҡа,*
*Хеҙмәтен тултырғас ҡайтырҙар.*
*Әсеһен-сөсөһөн тормоштоң*
*Өйрәнеп үҙ аллы татырға.*

---

[*]*Композитор Нур Дауытов көйө.*

---

*Сәрүәр Ғәләүетдинов (1950) Әбйәлил районының (хәҙер Бөрйән районына ҡарай) Ҡолғана ауылында тыуып үҫкән. Баймаҡ ауыл хужалығы техникумын, Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлай. Әлеге көндә Ҡолғана мәктәбендә уҡыта, юғары категориялы уҡытыусы.*

*Ул — Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Журналистар, Яҙыусылар союздары ағзаһы.*

## Ҡиләм әле

*Һағындырған. Ҡиләм әле*
*Дуҫтарыма — Ҡыпсаҡҡа:*
*Ҡот өҫтәргә — ут өҫтәргә*
*Бергә яҡҡан усаҡҡа.*

*Менәм әле Аҡбейеккә,*
*Бейергә сусағында.*
*Сер һөйләрмен*
*Һөйгәнемә*
*Иркәләп — ҡосағында.*

*Ҡинәнеп бер гиҙәйем мин*
*Ҡамабар буйҡайҙарын:*
*Күңелдәге юшҡындарҙы*
*Бушатып, дуҫҡайҙарым,*
*Ҡиләм әле...*

## Юлдарыбыҙ айырылған*

*Юлдарыбыҙ айырылған,*
*Ҡанаттарым ҡайырылған,*
*Йылдар ята арала.*
*Ҡайтһаң икән яҙҙар булып,*
*Күңелемә наҙҙар алып...*
*Уңалһасы яралар.*

*Тоташтырып араларҙы,*
*Уңалдырып яраларҙы,*
*Яҡсы өмөт уттарын!*
*Мин бит, иркәм, һаман көтәм,*
*Һаман әле өмөт итәм*
*Осрашыу минуттарын.*

## Учалы

*Әллә ниңә ашҡынамын,*
*Һиңә — күлдәр иленә*
*Йәнем тартты. Сәфәр ҡылам*
*Шиңмәҫ гөлдәр иленә.*

*Бында — йәннәт. Ҡош моңдарын*
*Тыңлар инем таңғаса.*
*Дуҫтар менән бер серләшеп,*
*Танһыҡтарым ҡанғанса.*

*Эй, Учалы — мәғдән иле,*
*Күңелем һиңә тарта.*

---

*Композитор Нурия Абдуллина көйө.

*Ирәмәлгә килгән һайын,*
*Хис-тойғоларым арта —*
*Мин йәшлегемә ҡайтам.*

## *Бейеш*

*Хәмит яғы — Бейеш тауы,*
*Үткәндәрҙән тарих һаҡлай:*
*Заман еле бында илткәс,*
*Бейеш килгән толҡа тапмай.*

*Зыңлап торған ҡурай моңо,*
*Ҡыраҡанан — Хәмиттәргә.*
*Зарын шулай еткергән ул,*
*Аңлармы тип, егеттәргә.*

*Күптәр уның моңон тыңлап,*
*Һоҡланған, ти, көйҙәренә.*
*Ә берәүҙәр был ҡасҡынан*
*Йәшеренгән — өйҙәренә.*

*Кем булған һуң, ҡай төбәктән,*
*Яҙмыш уны ник шаяртҡан?*
*Әллә батша ярандары*
*Рәнйеткәндәрме нахаҡтан?*

*Ҡусҡар егете Бейеш тә*
*Ил сиген һаҡлап торғандыр.*
*Изге бурыс үтәлгәс тә,*
*Ҡайтырға хыял ҡорғандыр.*

*Егерме биш йыл әрмеләр*
*Бик күптәрҙе бахыр иткән.*
*Берәүҙәрҙе ҡасҡын иткән,*
*Бәғзеләрен батыр иткән.*

*Заводчикка, бай-түрәгә*
*Уҡытҡанһың аҙмы һабаҡ.*
*Ҡыл өҫтөндә ҡалһаң ҡалдың,*
*Яҙмышыңды аямайса,*
*Татығанһың мең-мең ғазап.*

*Хәмит яғы — Бейеш тауы,*
*Үткәндәрҙән тарих һаҡлай:*
*Заман еле бында илткәс,*
*Бейеш килгән толҡа тапмай.*

## *Мине бәхет үҙе тапты*

*Мине бәхет үҙе тапты,*
*Эҙләмәнем юлымда.*
*Алтын да юҡ, көмөш тә юҡ,*
*Байлыҡ та юҡ ҡулымда.*

*Мине бәхет үҙе тапты,*
*Ләззәт тойҙом йәнемдә:*
*Йәшәүҙең бит мәғәнәһе*
*Был тормоштоң йәмендә.*

*Мине бәхет үҙе тапты,*
*Үкенмәйем — үткәнгә:*
*Мин һаман да һиңә ғашиҡ,*
*Юҡ! Юҡ! Булмаҫ үпкәм дә.*

*Мине бәхет үҙе тапты,*
*Күңелемә нур яҡты:*
*Хыял ҡошом ҡанат ҡаҡты,*
*Таң йондоҙом да ҡалҡты...*
*Мине бәхет үҙе тапты.*

## Мин ышанам

*Һәр заманда булған, тиҙәр,*
*Ялағай ҙа, урғы ла.*
*Ә шулай ҙа тыуған, тиҙәр,*
*Ватанына тоғро ла.*

*Һәр замандың үҙ ҡануны —*
*Ялағайҙар тыуып тора:*
*Хужаһына ярар өсөн*
*Аяҡ-ҡулын йыуып тора.*

*Ялағайға дан кәрәкме*
*Кейгән өсөн ҡара битлек?*
*Юҡ! Юҡ! Улар һыҙланалар,*
*Ҡылмай ҡалһа берәй етлек.*

*Осрап тора был тормошта*
*Әллә күпме урғылар.*
*Мин ышанам: булған, булыр*
*Ватанына  тоғролар.*

## Эх, Сәриә...

*Сәриәнең тауығы ҡаҙҙай,*
*Һай, үҙе ҡыҙ кеүек,*
*Шул уңғанды күргән саҡта*
*Йөрәккенәм ҡуҙ кеүек.*

*Сәриәнең бесәйе эттәй,*
*Һунарсы ла, иркә лә.*
*Бесәйен тоттом, үҙен ҡостом*
*Һандуғаслы иртәлә.*
*Эх, Сәриә...*

## Тигеҙһеҙ

*Уғры йәшәй май эсендә,*
*Бирәүҙәр — ыҙалыҡта:*
*Көн-төн эшләп тир түкһә лә,*
*Мандымай донъялыҡта.*

*Борондан был ндай сифаттар*
*Һаҡланған бит халыҡта:*
*Барыбер тормош ҡануны*
*Тигеҙһеҙ — донъялыҡта.*

## Аңламаның...

*Болон сәскәләрен йыйҙым,*
*Алдарын һиңә һайлап.*
*Сәскә бирҙем.*
*— Билсән, — тинең,*
*...Ҡараманың абайлап.*

*Инде сәскәләр йыймайым,*
*— Сәскә тиҙ шиңә, — тинең, —*
*Шиңгән сәскәгә оҡшаған*
*— Һөйөүең ниңә? — тинең.*

*Аңламаның... Әллә ниңә,*
*Һағыш-уттарға һалып,*
*Киттең. Ник хыял ҡошомдо*
*Һин үҙең менән алып?..*

## Ҡалды исемең генә

*Килтергәйне яндарыңа*
*Күңелем һиңә тартып.*
*Өмөттәремде юғалттым,*
*Уй-хыялымды сыуалттың —*
*Китәм ғазаптар татып.*

*Килгән инем яндарыңа*
*Тик һинең өсөн генә.*
*Кем уйлаған — һин сит йәрҙә...*
*...Йөрәгемде телгеләргә*
*Ҡалды исемең генә.*

## Йөрәктә арта яра...

*Килгән һайын арағыҙҙа*
*Тойманым тормош ҡото.*
*Ҡайҙа булған йәш саҡтағы*
*Мөхәббәтегеҙ уты?*
*Ике йөрәк... Ғазап сигә...*
*Ә ғүмер үтеп бара.*
*Ғүмерҙәр үткән һайын шул,*
*Йөрәктә арта яра.*

## Һағыштарым булып

*Ни арала йәй ҙә үтеп киткән,*
*Ишек шаҡый, ана, һары көҙ.*
*Хис-һағышҡа сумған уйсан ҡыҙҙай,*
*Ялҡын бөркөр кеүек наҙлы көҙ.*

*Ни арала йәй ҙә үтеп киткән,*
*Көҙ һарыһы — ҡояш нурында.*
*Эшләнмәйсә ҡалған күпме эштәр,*
*Һағыштарым булып — йырымда.*

## Атайыма

*Ил эшендә бил бөктө,*
*Арыманы-талманы.*
*Дан артынан сапмаһа ла,*
*Ул артта ла ҡалманы.*

*Ил эшендә бил бөктө,*
*Ғүмере шулай үтте.*
*Тормошто ныҡ яратҡанға,*
*Татыны шуға күпте.*

## Яңғыҙлыҡтан ҡотолдо

*(Шаярыу)*

*Йөрәк менән шаярма,*
*Холҡом бик тә алама.*
*Аҙағынан ут йотоп,*
*Күҙ йәш түгеп илама.*

*Холҡома ҡараманы,*
*Бер кемдән һораманы.*
*Тотто ла ғашиҡ булды,*
*Яңғыҙлыҡтан ҡотолдо.*

## Бер иркәләп

*Гөлфинәгә*

*Уйһыу ерҙән елә генә*
*Ҡайынлыҡтың еләгенә.*
*Күҙ ҡамашыр һиләгенә,*
*Элеп алған беләгенә.*

*Үҙе бешкән еләк кеүек,*
*Бер хәйләһеҙ көлә генә.*
*Шул уңғанды бер иркәләп,*
*Күңелкәйен белә генә.*



**Мар. СӘЛИМ**

# АРҘАҠЛЫЛАРҒА АРНАУҘАР

## *«Тиле» шағир*

«Ялған томанында миңрәүләнеп
Күпме йәшәгәнмен мин — тиле»

Назар Нәжми.

*Дүртөйлөләр — шыр тиләләр,*
*Тип кемдер әйткән, тиҙәр.*
*Әйткәндер инде, аҙмы ни*
*Донъяла әсе телдәр.*

*Шулай ҙа мин дөрөҫлөктө*
*Күрәм был һүҙҙәр аша —*
*Бөтә донъя урлашҡанда,*
*Дүртөйлө эшләп ашай.*

*«Тиле» тиҙәр шул ундайҙар*
*Хаҡында беҙҙә хәҙер.*
*Аҡыллы баштар тора бит*
*Әҙергә генә бәҙер.*

*Тиләләрҙән дә тилерәк*
*Дүртөйлө ире Назар:*
*Йырҙарын дан өсөн түгел,*
*Йөрәк ҡушҡанға яҙар.*

*Мар. Сәлим (1949) — егерменән ашыу китап, шул иҫәптән башҡорт, урыҫ, татар телдәрендә сыҡҡан бер нисә шиғри йыйынтыҡ («Мөхәббәтле ҡәләм», «Горит мое сердце», «Мәңгелек мөхәббәт» һ.б.) авторы, юмористарҙың Халыҡ-ара «Алеко» (Болгария) премияһы лауреаты.*

*Шиғырҙары йырлап тора,*
*Йырҙары уйлаттыра.*
*Яҙғандары йә көлдөрә,*
*Йә һине илаттыра.*

*Үҙ хаҡында уйламаны,*
*Ил хаҡында уйланы.*
*Һүҙе менән ғүмер буйы*
*Хаҡлыҡ яҡлап туйманы.*

*Әгәр булһа бөтә кеше*
*Назар кеүек «шыр тиле»,*
*Беҙҙең һантый илебеҙ ҙә*
*Аҡыллы йәшәр ине.*

## *Ул ғына юк...*

*(Юмористың моңһоу шиғыры)*

Динис Бүләковты һағынып

*Динис менән аҙмы-күпме*
*Ғүмерем бергә үтте.*
*Шул ғүмерҙә әллә күпме*
*Изгелек эшләп китте.*

*Армияла бергә йөттоҡ*
*Ырымбур туҙанын да.*
*Бер йортта эшләп, һиҙмәнек*
*Ваҡыттың уҙғанын да.*

*Ҡешеләрҙең ҡайғыһын ул*
*Йөрәгенән үткәрҙе.*
*Үҙен генә һаҡламаны,*
*Һаҡлап ҡалды күптәрҙе.*

*Бер саҡ шулай мин дуҫымды*
*Ҡунаҡҡа алып ҡайттым.*
*Һәм шунда ул һөйләгәнде*
*Тыңланым да шаҡ ҡаттым.*

*— Еңгәң әле больницала,*
*Саҡ иҫән ҡалды, — тине. —*
*Ул булмаһа, был донъяла*
*Мин дә йәшәмәҫ инем.*

*Ҡайҙа ғына булһам да мин,*
*Һәр ваҡыт еңгәң иҫтә.*
*Мөхәббәт ул ғәжәп нәмә:*
*Ҡартая белмәй һис тә.*

*Һөйөшөп, үбешеп кенә*
*Ғүмерҙәр үтһен, әйҙә.*
*Ниндәй бәхет: ҡайтҡан һайын*
*Ҡосаҡлап ала Рәйлә.**

*Динистәр юҡ...*
*Бына шуға*
*Күңелем минең китек...*
*Белмәйем ошо китекте*
*Ямарға нисек итеп...*

## *Бәхетле уҙған ғүмер*

«Эштең ниндәйе лә еңел түгел,
Эштең ниндәйе лә арыта...»
Әнғәм Атнабаев.

*Һеҙгә һөйләйәсәк һүҙем*
*Һис тә әкиәт түгел.*
*Уның «сам-зам» булып*
*Үтте туғыҙ йыл ғүмер.*

*Хәтеремдә: бер кисәлә,*
*Һыҙҙырып йөрәк майын,*
*Әйткәйне:*
*— Минең «баш»тарым,*
*Алмашына йыл һайын.*
*Баштар оса, муйын ҡала,*
*Тырпайып ҡала муйын.*
*Ғәйепһеҙгә осһа баштар,*
*Ай-һай, бигерәк ҡыйын.*

*Туғыҙ йыл ғүмер эсендә*
*Булһа ла төрлө саҡтар,*
*Уртаҡ йөктө тигеҙ тарттыҡ —*
*Әйтерһең дә, пар аттар!*

*«Аҡыл сабата» ине ул*
*Юлдан яҙған йәштәргә,*
*Самаһыҙ ҙурайып киткән*
*Бәләкәс иптәштәргә.*

*Атнабайға мәңгелеккә*
*Ҡағылған шиғыр ене.*
*Урын баҫыу түгел уйы,*
*Баҫылып эшләү ине.*

---
*Рәйлә Мөхәмәт ҡыҙы — яҙыусының ҡатыны.

*Ул ваҡытта гәзитсенең –*
*Ни аҡсаһы, ни даны.*
*Ялға сыҡҡанда, ниһайәт,*
*Булды һыңар миҙалы.*
*(Ветерандар миҙалы.)*

*Бөгөн бына ултырамын,*
*Уйға һалып баштарым.*
*Һағынам һине, Атнабай, –*
*Иң шәп урынбаҫарым!*

*Һеҙгә һөйләгән һүҙҙәрем*
*Һис тә әкиәт түгел.*
*Уның менән бергә эшләп,*
*Бәхетле уҙған ғүмер.*

## Мәңгелек эҙ

Марсель Хужин иҫтәлегенә

*Машинаһына ултыртып*
*Район хужаһы уны*
*Колхозға алып килде лә*
*Рәйес итеп тә ҡуйҙы.*

*Тиҫтә йыл буйы хужалыҡ*
*Күрмәне һис бер нужа,*
*Сәскә атты, емеш бирҙе*
*Хужин булғанда хужа.*

*Әммә ҡапыл көтмәгәндә,*
*Буранлы ҡыш көнөндә,*
*Рәйестең ҡайнар йөрәге*
*Туҡтаны... йәш көйөнә...*

*Тыуған ауылына китте*
*Машиналар теҙелеп.*
*Колхозсылар илап ҡалды*
*Бәғерҙәре өҙөлөп...*

*Ҡотора буран, һеперә,*
*Кешенән эҙ ҙә ҡалмай.*
*Эҙҙе һеперһә лә буран,*
*Эште һеперә алмай!*

*Оҙатып ҡалдылар уны*
*Дуҫтары күҙ талдырып.*
*Ҡайтып китте ул... исемен*
*Колхозына ҡалдырып.*

## *Тимер кеше*

Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре Тимерғәле Тимеркәевҡа

*Шарандарҙы шаҡ ҡатырып*
*Тыуған, ти, тимер малай.*
*Бына шул Тимер кешенең*
*Иң елле сағы, малай!*

*Ғүмер буйы төҙөнө ул*
*(Ә кемдәрҙер емерҙе).*
*Тормош үҙе, сүкей-сүкей,*
*Сыныҡтырҙы Тимерҙе.*

*Хөкүмәттә ҙур вазифа*
*Тәҡдим иткәс Тимергә,*
*Өс көн ултырмай «Аҡ йорт»та,*
*Һыпырта тыуған ергә.*

*Тыуған яғын шул тиклем дә*
*Яратыр икән кеше.*
*Шарандарҙы данға күмеп*
*Күтәреү — бөтә эше.*

*Теләктәрҙең иң кәттәһе*
*Тимеркәев Тимергә:*
*— Сыныҡтырылған тимерҙәй,*
*Ныҡ булып ҡал ғүмергә!*

## *Ат яраткан табибә*

БР Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты, балалар табибәһе Римма Үтәшеваға

*Ир-егеттәрҙән уҙҙырып*
*Ат ярата был ҡатын.*
*Гүйә, ул бәйгегә сыҡҡан,*
*Йүгәнләп заман атын.*

*Сәләмәт тормош юлынан*
*Арымай-талмай саба.*
*Кешегә бәхет биреүҙән*
*Үҙенә ләззәт таба.*

*Эш ауыр, тип һис зарланмай,*
*Аттай егелеп тарта.*
*Бала һаны артҡан һайын,*
*Шатлыҡ-ҡыуаныс арта.*

*Әйтерһең дә, ябай түгел,*
*Тылсымлы уның ҡулы.*
*Шул ҡулдан кескәй кешенең*
*Башлана оло юлы.*

*Ат яратҡан табибәгә*
*Әйтер һүҙем шул минең:*
*— Ҡөҙрәтле һинең ҡулыңдан*
*Яңынан тыуыр инем!*

## Римгә

Атаҡлы хирург,
профессор Рим Ғариповҡа

*— Бөтә юл Римгә илтә, — тип*
*Әйткәндәр борон заман.*
*Ошо әйтем хаҡлы һымаҡ*
*Бөгөн дә беҙгә һаман.*

*Ғүмер юлында әгәр ҙә*
*Юлыҡһа кемдер сиргә,*
*Яҙмыш уны мотлаҡ илтә*
*Рим атлы затлы иргә.*

*Ә доктор Рим киң күңелле:*
*Һәр кемгә урын етә! —*
*Батшаны ла, бомжды ла*
*Бер тигеҙ ҡабул итә.*

*Римгә килгән ауырыуҙар*
*Һауығып ҡайтып китә.*
*Шуға хәҙер халыҡ әйтә:*
*— Бөтә юл Римгә илтә!*

## Алты брат

Бер туған Марс, Харис, Ғәли, Хәйҙәр,
Әхәт, Альберт Шаһиевтарға

*Беҙ беләбеҙ ғаиләләрҙең*
*Ниндәй эштәр ҡылғанын.*
*Ләкин минең был донъяла*
*Бар үҙ иткән кланым.*

*Был ғаилә ағзалары*
*Һәр саҡ изге эштәләр.*
*Хеҙмәттәре емешенән*
*Һығылалыр өҫтәлдәр.*

*Алты браттың алтыһы ла*
*Бына тигән егеттәр —*
*Республикабыҙҙы алға*
*Тартыусы ат кеүектәр!*

*Беләбеҙ был ғаиләнең*
*Яҡшы эштәр ҡылғанын.*
*Бына шуға яратабыҙ*
*Шаһиевтар кланын.*

## Мәшһүр кәтүк

Әхәт Уразмәтовҡа

*Тегәр епле бер Кәтүктән*
*Көнләшә, ти, күп кәтүк.*
*Сәхнәләге был Кәтүктең*
*Даны ашҡан күккә үк.*

*Күпме һүҙһаң да, һүҙылып*
*Бөтмәҫ уныңептәре.*
*Етмештә лә ебеп тормай*
*Шишмәнең егеттәре.*

*Үҙен Кәтүк тиһәләр ҙә.*
*Хеҙмәте — хас бағана!*
*Был Кәтүкһеҙ бик күңелһеҙ*
*Үтер ине замана.*

*Бейей ҙә ул, йырлай ҙа ул,*
*Хатта гармунда уйнай.*
*Үлтергәнсе көлдөрмәйсә*
*Бер минут та торалмай.*

## Баҫ, баҫ, Зөлфиә!

Зөлфиә Ҡудашеваға

*Тыпыр-тыпыр бейер өсөн*
*Филармония кәрәк.*
*Зөлфиә кеүек бейеүсе*
*Был донъяла бик һирәк.*

*Бейеһен әйҙә, бейеһен —*
*Ҡурҡмағыҙ күҙ тейә тип.*
*Тамашасылар аһ итеп*
*Торалар Зөлфиә тип.*

*Өҙә баҫып бейегәндә,*
*Ҙур сәхнәләр һелкенә.*

*Унын кецек шәп бейеусе*
*Илебеҙҙә бер генә!*

*Баҫ, баҫ, Зөлфиә,*
*Һине бөтә ил һөйә!*

## *Сөндә тыуған дуҫыма*

«Әнкәй беҙҙе
Сөндән алып ҡайтҡан...»

Роберт Миңнуллин.

*— Ҡулыңдан килһә, маҡтап яҙ*
*Минең һөйөклө Сөндө, —*
*Тигән ине Сөн буйында*
*Роберт дуҫым бер көндө.*

*Ә бит уны ошо Сөндән*
*Алып ҡайтҡан әнкәһе.*
*Шул Сөндө ҡүргәс, минең дә*
*Килде ниҙер әйтәһе.*

*Әйтеп булмай...*
*Кұңелдәге*
*Ул йырҙың тынаһы юҡ.*
*Роберт кецек тә яҙмаһас,*
*Яҙып та тораһы юҡ.*

## *Дуҫлыҡ юлы*

Ислам Әхмәтйәновҡа

*Бар ине ҡыҙыҡ замандар,*
*Бар ине шәп саҡтар ҙа...*
*Үткәндәрҙе кәрәк бит ул*
*Кұңелдәрҙә һаҡларға.*

*Милләтенә ҡарап баһа*
*Бирелмәне кешегә.*
*Баһа биреүде һәр кемгә*
*Ҡарап ҡына эшенә.*

*Дуҫлыҡ байрағы аҫтында*
*Үтте беҙҙең ғұмерҙәр.*
*Шулай ұткән ғұмерҙәрҙе*
*Бер саҡ данға ҡұмерҙәр...*
*(Тиһәм, ҡайһы бер иптәштәр,*
*Бәлки, минән көлөрҙәр.)*

*Йәшәмәнек ҡұршеләрҙең*
*Баҡсаһына таш атып.*

*Йәшәнек бер-беребеҙҙе*
*Ихлас ҡына маҡташып.*

*Айыҡ аҡыллы булдылар*
*Зыялы аҫыл ирҙәр.*
*Хаҡ һүҙҙе генә хупланы*
*Башлы баш мөхәррирҙәр.*

*Ҡәләмдәштәр-туғандаштар*
*Сыҡтылар оло юлға.*
*Дуҫлыҡ маршруттары буйлап:*
*Яңауыл*... Алабуға*...*

*Татар журналистарының*
*Ҡаруанбашы һин инең.*
*Ҡазан ҡояшындай балҡып*
*Башҡорт иленә килдең.*

*Аҡтаныш-Илеш сигендә*
*Дыу килеште туғандар.*
*Ғәлим** менән Ислам,** гүйә,*
*Ҡосаҡлашып тыуғандар!*

*Гөрләшеп туя алмайҙар*
*Булат***, Рауил***, Тәлғәттәр***.*
*Һиҙелмәй ҙә үтеп китте*
*Минуттар һәм сәғәттәр.*

*Минут, сәғәттәр нимә ул,*
*Үтте байтаҡ йылдар ҙа.*
*Һикәлтәләр һикертмәне*
*Беҙ елдергән юлдарҙа.*

*Башҡорт, татар бергә барһа,*
*Юлдары булыр таҡыр.*
*Шулай булһын тип бит инде*
*Ҡайнаштыҡ ғүмер баҡый.*

---

*Башҡортостан менән Татарстан журналистарының ижади осрашыуҙары Яңауыл (1996) һәм Алабуға (1997) ҡалаларында булғайны.

**Башҡортостан һәм Татарстандың матбуғат министрҙары Ғәлим Хисамов менән Ислам Әхмәтйәнов.

***«Ағиҙел», «Казан утлары» журналдарының һәм «Башҡортостан» гәзитенең баш мөхәррирҙәре Булат Рафиҡов, Рауил Фәйзуллин,Тәлғәт Сәғитов.



Спартак
ИЛЬЯСОВ

# ЙӨРӨК ҠОЛА

## БӘЙӘН

Тәүләп күҙен асҡанда күрҙе ул зәп-зәңгәр күкте. Унан һуң ниндәйҙер бәрхәттәй йомшаҡ йөнлө нәмә уның танауын һурып еҫкәне, ситкәрәк бышҡырҙы ла йылы йомшаҡ ел бөрктө. Рәхәт, бик рәхәтлек тойҙо Һарыҡай. Был йылы, тәмле еҫ – уның тәүге һиҙемләүе. Ғүмере буйына онотолмаҫлыҡ, әйтеп бөтөргөһөҙ яҡын, үҙ, тәмле генә түгел, ләззәтле еҫ ине ул. Мәңгелеккә һеңеште ул тәүге еҫ Һарыҡайға. Иртә яҙҙың ыжғыр әсе елен дә, кибеп бөтмәгән еүеш ерҙең һалҡынлығын да һиҙмәй әлегә Һарыҡай. Һиҙмәй.

Өҫтөндәге лайлалы еүешлеге бер ни тиклем кибә биргәс, оҙон аяҡтарын килешһеҙ терәп, тәүге тапҡыр торорға ынтылды. Әммә булдыра алманы. Быуындары тотманы, ә бәләкәй генә йомро тояҡтары еүеш ерҙә ян-яҡҡа тая ине. Шулай тырышты ла тырышты торорға. Аяҡтарына баҫырға ынтылған сағында тәмле, йылы тын өргән ҙур шәүлә, уға ярҙам итергә теләгәндәй, ян-яғына сыҡты. Башы менән эсе яғынан күтәргәндәй ҙә итте. Шулай ҡаты үлән өҫтөнә бер күтәрелә, бер йығыла торғас, ниһайәт, дүрт аяғы өҫтөнә саҡ-саҡ баҫты. Бейеклекте тойоуҙан башы әйләнде. Атлағыһы, хәрәкәт иткеһе килде уның. Кәүҙәһен саҡ-саҡ күтәргән аяҡтарын алға ташлаһа ла, торған еренән күп китә алманы. Хәлһеҙлектән, дүрт аяғын да тарбайтып баҫып, саҡ йығылмай ҡалды. Эсе һурылып асыкты. Инәһе менән кендеклегенең өҙөлөүенә ике сәғәттәй ваҡыт уҙып киткән ине. Тәмле еҫле оло шәүлә уның алдына ла, артына ла сыҡты. Йә, мә, ризыҡлан, хәл кереп китер, тигәндәй, алдына уҡ сығып баҫты. Һарыҡай, үҙе лә аңламаған ниндәйҙер көс ҡушыуына буйһоноп, бәләкәс кенә йомшаҡ ирендәре менән тәмле еҫле шәүләнең аҫҡы яғын һәрмәргә тотондо. Бына ул иҫ киткес йомшаҡ, тәмле еҫле әпес. Телдәрен һоҙғаҡландырып әпесте өҫкө уртына һығыуы булды, иҫ китмәле тәмле һут ауыҙына бөркөлдө. Шулай

---

*Спартак Ильясов — Учалы районы Ҡорама ауылында тыуған. К.А. Тимирязев исемендәге Мәскәү ауыл хужалығы академияһын тамамлай. Район ауыл хужалығы идаралығында эшләй, колхоз рәйесе, совхоз директоры вазифаларын башҡара, Силәбе педагогия университеты филиалында уҡыта. Республика гәзит-журналдарында әүҙем сығыш яһай. «Ағиҙел» журналында беренсе тапҡыр баҫыла.*

ғүмеренең тәүге ләззәтен ғазабынан алдараҡ татыны Һарыҡай. Супылдатты ла супылдатты ул әпесте. Ҡапыл уға илаһи көс керҙе. Шул саҡта ғына ул был тәмле еҫле ҙур шәүләһеҙ йәшәп булмағанлығын, барлыҡ булмышы тик уға ғына мохтаж икәнлеген белде. Төшөнмәне, әммә эске һиҙеменең һаҡланыу һәм теләк шарттарының бойороғо ине был.

Оло кәүҙәле йылы, тәмле йәнде барлыҡ булмышы менән ҡабул итте. Инәһен тәүләп шулайыраҡ аңлай ине Һарыҡай. Тамағы туйғас, шундай рәхәт булып китте уға. Хатта ян-яҡҡа һикрәнләп тә маташты. Әҙ генә ваҡыт үтеү менән, тәнгә иҫерткес рәхәтлек таратыусы тәмле, шәкәрле йылы һөттө тағы ла танһығы ҡанғансы һурҙы. Тәмле һөт ҡанын туйындырҙы, көс бирҙе, хатта ирәйеп тә киткән төҫлө тойҙо үҙен. Инәһе уның янынан бер аҙым да китмәне, өйөрөлдө лә өйөрөлдө. Донъяға, ғөмүмән, йылҡы көтөүе мөхитенә яңы килгән сибек, селгәр генә йән эйәһен күрергә тип яҡынырак килгән тай-тулаҡты тешләп, Һарыҡай янынан йыраҡҡа ҡыуҙы. Тамағы туйғас, Һарыҡай тау үңерендәге ҡырсынлыҡ араһында, ҡышҡы тибенлектән ҡалған ҡаты ҡылғанлыҡҡа аунап, һуҙылып йоҡланы ла йоҡланы. Асығып уянғас, тәүләп һалҡын елде тойҙо. Әммә ул ел, һалҡын булһа ла, яҡында ҡоро үләнде, йәй көндәге кеүек айырмайынса, бөтәһен дә ҡырҡып ашап йөрөгән инәһенең наҙлы еҫен килтерә ине. Бына ул, Һарыҡайҙың уянғанын күреп, уның ҡаршыһына килде. Шул тиклем ҙур, йөнлө, ә үҙе йомшаҡ икән уның инәһе! Шундай таныш, башҡа һис бер еҫ менән бутамаҫлыҡ тәм бөркә инәһе.

Былдай тәмле, ләззәтле көндәр, тыныс төндәр үттеләр ҙә үттеләр. Тиҙҙән Һарыҡай инәһе кеүек үк ҙур һәм бик күп башҡа ереле-ваҡлы туған-тыумасаларын, оло ағай-апайҙарын, хатта әбейҙәрен дә күрҙе. Һарыҡай һиҙелерлек үҫте. Хәҙер инде ул инәһе артынан көндәр буйы йөрөй ала. Башҡалар менән сағыштырғанда, Һарыҡайҙың инәһенең бер холҡо ҡырҡа айырыла ине. Ул һәр саҡ өйөрҙөң алдынан йөрөр булды. Йыраҡҡараҡ китеп айырылыр булһа, көтөүсе бабай эте Ҡашҡар менән, уларҙы сыбыртҡыһын болғай-болғай баҫтырып, өйөргә килтереп ҡуша. Ҡашҡар иһә өрөп-абалап бер алға, бер артҡа сыға, инәһенең ҡойроғон тешләргә ынтыла. Тик булдыра алмай. Тилбер, сапсан инәһе артҡы аяҡтары менән Ҡашҡарға тондорғаны ла булды. Тик ул һабаҡ алманы булһа кәрәк. Һиҙеп ҡалһа, уларҙы өйөр айғыры ла ситкә ебәрмәне.

Киң түшле, тулы ҡойроҡло һәм яллы, тороҡло был айғыр Һарыҡайҙың атаһы, буғай. Уның ҡайһы мәл яндарына килеп еҫкәп киткән саҡтары ла була торғайны. Көтөүсе бабай уға һәр саҡ “Лидер” тип өндәшер ине. Шулай ҙа Һарыҡай Лидерҙан ҡурҡа, атаһы килә башлаһа, ул һәр саҡ ауыҙының тик аҫҡы яңаҡтарын үсекләшкәндәй ҡыбырлатып, бер асып, бер йомоп, уға буйһонғанлығын һәм тыңлаусанлығын белдерә. Шулай эшләгәндә айғыр уға теймәй. Юғиһә, уның көслө аҙау тештәрен татырға ла тура килеүе ихтимал. Инәһе уны, Һарыҡайҙы, Лидерҙан ҡурсалай алмай. Өйөрҙә Лидер – баш, Лидер – хужа. Уға бер бейә лә, инде үҙҙәре аҙау айғыр булырҙай ҡонан-дүнәндәр ҙә, тай-байталдар ҙа ҡаршы килә алмай.

Йәйҙең һуңғы айы ла етте. Үләндәр ҡата башланы. Эскән һыу ҙа ҡуйыраҡ кеүек тойола Һарыҡайға. Хәҙер ул үҫте, яҙғы кәүҙәһенең ике ҡәбендәй булды. Инәһенең генә һөтөнә туймай, ваҡ ҡына йәшел йомшаҡ үләндәрҙе, хатта оҙон ҡыяҡтарҙы ла кертләтеп, рәхәтләнеп сәйнәй. Иртәнге ысыҡҡа бүрткән сүклыҡай үлән баштары, еүешләнеп тулышҡан япраҡ-һабаҡтар эй һутлы, эй тәмле ине. Төнө буйы һалҡынлыҡта бер туҡтамай ашаған барлыҡ көтөү ҡояш ҡалҡҡас, уның йылылығында ҡыҙынып, ҡапыл ашауҙан туҡтай. Хәрәкәттәре һалмаҡ, яй була биреп, ниһайәт, бер ергә ойошоп, йәштәр ергә ятып, ә ололар торған килеш артҡы аяҡтарының береһен бушатып, тояҡ битен генә ергә терәп, күҙҙәрен йомоп юшай – ял итә йәки торған килеш кенә йоҡлай башлайҙар.

Һарыҡай йомшаҡ мороно менән инәһенең еленен төрткөсләп, һөтөн имсәктәренә төшөрөп ала ла туйғансы татлы һут имә. Унан һуң, арлы-бирле йөрөштөрөп, уйнар иш таба алмаҒас, инәһе янына йомшаҡ үлән өҫтөнә ятып, тәрән йоҡоҒа тала. Шулай байтаҡ таңды ҡаршыланы ул. Ғүмеренең иң ҡайғыһыҙ, иң ғәмһеҙ осоро булды Һарыҡайҙың ул көндәр. Татлы хәтирә булып иҫендә ҡалған Ҡола йөрөктөң бала – ҡолон сағы! Эй, ул көндәр! Тағы ла килһәсе һуң әйләнеп Ҡола йөрөккә! Юҡ шул...

*Үткән генә ғүмер – ҡалған хәтер,*
*Әйләнепкәй килмәйсе тағы ла...*

Шул көндәрҙән әҙ генә һуңғараҡ, көндәр һалҡынайып, төндәр оҙая, ҡараңғылана башлаҒас, тәүләп йөрәк өшөтөрлөк шомло, ҡурҡыныс тауыш ишетте ул. Йылҡы көтөүсе сыбыртҡыһын шартлатып, Ҡашҡарҙы һөсләп өрҙөрөп, тайтулаҡты һәм башҡаларҙы бер ергә өйҙө лә ҡапыл ҡайҙалыр китеп юҡ булды. Әллә елдән ышыҡланып, сәнсеп ҡуйылғандай текә таштар араһына кереп ятты, әллә ауылға ҡайтып китте. Уны Һарыҡай ҙа, инәһе лә белмәй. Көтөүсе бабайҙың ҡайҙа юҡ булыуын хатта Лидер ҙа белмәй. Йылҡылар өйөрөп ҡуйылған ерҙә байтаҡ ваҡыт тик кенә торҙолар, тик ара-тирә ҡайһыһынындыр баш һелкеүенә муйынына бәйләнгән дөңгөр тауышы бөтә тау итәген, сауҡалыҡтарҙы тултыра ине. Оло малдар урынынан ҡыбырламаһа ла, йәш ҡонан-дүнәндәр, тай-байталдар оҙаҡ тороп сыҙай алманы. Ҡырмыҫҡалар таралғандай, яйлап ҡына үңерлеккә һибелделәр. Был юлы һәр саҡтағыса көтөүҙең алдында түгел, ә уртаһында тыныс ҡына йомшаҡ үләнде кертләтә ине Ситдиҡа бейә ҡолоҡайы Һарыҡай менән. Ситдиҡа тигән исем уға үткән быуаттың утыҙынсы йылдарында хужаһынан кулакһың тип колхозға тартып алынған ҡартинәһенән мираҫ булып ҡалған. Хужаһының ҡыҙы Ситдиҡа булғас, колхозға күскән байталға ла шул исемде бирҙеләр. Ситдиҡаның оло ҡартинәһе лә, уның инәһе лә бер исем йөрөттөләр. Ҡыҫҡаһы, ул тоҡомдан тыуған һәр орғасы ҡолонсаҡ Ситдиҡа исемле булды.

Ситдиҡа көтөүҙе байҡар өсөн башын ғына күтәреүе булды, яҡында, бик яҡында, текәлек янында ғына, һуҙып, бер моңға, бер янауға оҡшаған саҡырыу һәм ҡурҡытыу ауаздары менән тирә-йүнгә шом һалып, бүре олоп ебәрҙе. Уға икенсеһе, өсөнсөһө, дүртенсеһе ҡушылып, барлыҡ ҡыр-яланға ҡурҡыу, шом һалынды. Тәне өшөп китте Ситдиҡаның был тауышҡа. Бүренең ҡурҡыныс дошман булыуын ул ҡолон сағынан уҡ белә. Уға ла ҡартинәй-инәләре бүренең йән өҙгөс, ҡотолғоһоҙ ҡәбәхәт, ҡан ҡойоусы булыуын аңына һеңдереп үҫтерҙеләр. Етеһигеҙ йыллыҡ ғүмере ағышында ла ул әҙ ишетмәне, әҙ осраманы бүреләрҙең йыртҡыслығына. Үҙен онотоп, иң алда ҡолонсағын, Һарыҡайҙы, янына уҡ һырыҡтырҙы. Олоу бер ни тиклем тымыу менән, тап та топ сабышыу, дөңгөрҙәрҙең һуғыуы, ҡыңғырауҙарҙың сылтырауы тирә-яҡты тултырҙы. Йылҡылар, ҡурҡышып сабышып, бер ергә тупланырға тырышалар ине. Әммә уларҙы баҫтырыусылар, айырып алырға тырышыусылар асыҡ ине. Эске һиҙемләүенә таянып, Ситдиҡа бейә Һарыҡайы менән башҡалар өйөрөлгән ергә эскә үк сабып барып инде.

Йылҡылар ҡолонсаҡтарҙы, ҡолоҡайҙарҙы, тай-тулаҡтарҙы уртаға алып, ситтәрәк дүнән-ҡонандар, ололар урын биләне. Тик Лидер ғына өйөр ситендә ялдарын туҙҙырып, ҡалын ҡойроғон күтәреп, ҡуңшырыҡтарынан быу өрөп, күҙҙәренән ут сәсеп өйөр тирәләй сабып йөрөй ине.

Лидерға дүрт-биш бүре ян-яҡтан һөжүм итә. Береһе – арттан, икеһе – ике ҡабырғаһынан, икеһе алдан – муйынына аҫылынырға самалайҙар. Ләкин айғыр уларҙы алғы аяҡтары менән сапсый, артҡы аяҡтары менән тибә, хатта береһен, елкәһенән эләктереп, ситкә лә бырағтырҙы. Арттан сандырына ынтылғанына ҡуш аяҡлап шул тиклем ныҡ типте – бүре, күтәрелә биреп, әллә ҡайҙа барып төштө. Һөжүмдән әҙ генә арынған айғыр бүреләрҙе үҙе кеҙәләргә тотондо. Алғы

аяҡтары менән тағы ла береһенә көслө генә тондорғас, ҡалған икеһен ялан буйлап үҙе баҫтырырға кереште. Бүреләр хәҙер берҙәй булып ташланмайҙар, таралып ситкә тайпылдылар. Ҡараңғылағы ҡыуғында дошмандарын күҙ уңынан ысҡындырғас, Лидер, күркәмлеген юғалтмай, башын текә тотоп, ҡойроғон үргә сәнсеп, йылҡы өйөрөнә һалмаҡ ҡына юртып килде. Туҡтап: “Барығыҙ ҙа иҫәнһаумы”, – тигәндәй бышҡырып, көслө итеп уҡранып ҡуйҙы. «Был ер, был өйөр минеке» тигән билдә һалып, ерҙе еҫкәп, тиҙәк өйгәс кенә, ул бер ни тиклем тынысланды.

Ул арала көнсығыштағы өҙөк-һурыҡ йолҡолған болоттар ситенән, офоҡ артынан сыҡҡан тоноҡ ҡына яҡтылыҡ та күренә башланы. Түшенән һәм һул яҡтан – эсе менән ҡашаға араһынан һарҡып ҡан тама ине Лидерҙың. Алыштың ҡайһы осоронда тешләп өлгөргәндәрҙер, әммә яра ярайһы уҡ тәрән, умырылып йыртылған. Йылҡылар таң атып, яҡтырғансы өйөрҙән таралманы. Ҡояш ана-бына күренәм тигәндә генә, алыҫтан һайтылдап, Ҡашҡарын һөсләп көтөүсе бабай йылҡылар янына килде. Уларҙың бер урында ҡымшанмай тороуҙарының сәбәбен аңламаны ул. “Теүәл микән малдар, ай-һай, айырып алып, баҫтырып, береһен йыҡҡандарҙыр инде”, – тигән һығымтаға килеп, таң һарыһында тирә-йүнде ҡараштыра башланы. Яланда, сауҡалыҡ ситендә, тау үңерендә туптайып ятҡан һәр бер ҡараҫҡыға барҙы. Ләкин береһе лә йығылып ашалған мал түгел. Бүре еҫен һиҙеп, Ҡашҡар ялан буйлап киткән хужаһына эйәрмәне, өйөр янында ҡалды.

Яҡтырғас ҡына малдары янына килде Ишмөхәмәт. Бабай килеүгә малдар бер ни тиклем таралышҡайны. Иҫәпләп, йылҡыларҙың теүәл булыуына тамам ышанғас ҡына, малдарының яралымы-түгелме икәнен тикшерә башланы. Теүәл, һау ине малҡайҙары. Тик күңелһеҙләнгәндәй ситтәрәк торған өйөр айғырының умырылған түшен һәм эсен күргәс кенә, төнгө алыштың ни тиклем көсөргәнешле булыуын аңланы. Ҡояш күтәрелгәс, ауылға ҡайтып, идаралыҡҡа кереп, төндә өйөрҙө бүреләр баҫҡанын, Лидерҙың бүреләр менән нисек алышҡанын, үҙ күҙҙәре менән күргәндәй, түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе.

Төш алдынан көтөүгә бер төркөм ят кешеләр килеп, Лидерҙы арҡан менән тотоп, арбаға бәйләп, аҡһата-аҡһата алып киттеләр. Һарыҡай быларҙың бөтәһен дә үҙ күҙе менән күрҙе. Лидер киткәс тә Һарыҡайҙың көндәлек тормошо әллә ни үҙгәрмәне. Инәләре ашауҙан туҡтап ял иткәндә, ҡолоҡайҙар бер төркөмгә йыйылалар ҙа уйнарға тотоналар. Йүгөнләшеп бер-береһенең тубыҡтарын тешләргә самалаумы, һикереп теп-текә тороп сәйнәшеүме, бер-береһен уҙырға маташып, яландың бер осонан икенсе осона тиклем ҡыуышыуымы – барыһын да башҡарҙы ҡолондар. Уҙышмаҡ сабышыуҙа ниңәлер береһе лә Һарыҡайҙы үтә алмай ине. Һарыҡай уларҙы әллә ҡайҙа ташлап китә лә, ялан осона сығып кире боролғанында, башҡаларға ҡаршы осрай. Ярышыу яңынан башлана. Тағы ла әллә ҡайҙа артта ҡала тиҫтерҙәре. Был ярыштар көн һайын ҡабатлана, әммә һөҙөмтәһе бер була. Һарыҡай үҙенең һәр саҡ алдан килеүенән, ә иптәштәренең уға етешә алмауынан ниндәйҙер ҡәнәғәтлек таба ине. Шулай көн һайын сабышып уйнай торғас, Һарыҡай үҙенең һәр саҡ алдан килеүенә шул тиклем өйрәнде, хатта уларға ҡушылып уйнарға тотонған бер йәшлек тайҙарҙы ла етештермәй башланы. Уны әҙ генә ҡыуып уҙҙылармы, бар көсөн биреп һуҙылып саба башлай һәм алда барған тай-тулаҡты уҙып, алға сыҡмайынса күңел тыныслығы таба алмай. Намыҫлы, бик сәмле ине шул. Был ал сығармаҫ сәм оло ҡартаталары Ҡола Амангилденән һәм көмрө танаулы Ҡорҡанан килә, буғай. Бер атҡа ла тиҫтә йылға яҡын бәйгеләрҙә ал бирмәне улар.

Лидер киткәс, уның урынын биләү өсөн йәш ҡонан-дүнәндәр араһында көрәш ҡупты. Ҙур көтөүҙе бүлеп, һәр береһе үҙенә ваҡ өйөр-ғаилә яһарға тотондо. Һәр береһе үҙенә егерме-утыҙ баш бейәне тай-тулаҡтары, йәш ҡолоҡайҙары менән

бүлеп алып, айырым ғаилә ҡора башланы. Дөйөм өйөр, дөйөм ғаилә ҡанундары боҙолдо. Йәш дүнәндәрҙе тиңһенмәгән оло бейәләр үҙҙәре бер туп булып беректе. Йәш бейәләр, тай-байталдар биш-алты өйөрсөккә бүленеп, һәр береһенә йә өс йәшәр ҡонан, йә дүрте тулған дүнән баш булды.

Көтөүсе бабай өйөр янына килеп, Ҡашҡарын һөсләтеп бергә ҡушһа ла, ул китеү менән тағы ла алты, хатта ете өйөрсөк хасил була. Һарыҡайҙың инәһе Ситдиҡа бейәгә быңдай тырым-тырағай йөрөү оҡшай. Бәй, берәү ҙә ҡыумай, берәү ҙә тик өйөр эсендә генә йөрөргә мәжбүр итмәй. Ишмөхәмәт бабай көтөү янында булмағанда ла, Лидер береһен дә ситкә ебәрмәй, башын түбән эйеп, арҡа йөндәрен торғоҙа биреп, киткәндәрҙе хәҙер үк өйөр эсенә баҫтырып кертеп ебәрә ине. Ә хәҙер... Хәҙер рәхәт Ситдиҡа өсөн.

Бына бөгөн дә Арҡырсаҡ йондоҙо баш осона менеп торғас, Ишмөхәмәт тағы ла ҡайҙалыр китеп юғалды. Хәҙер уның тәмәке уты ла күренмәй, көрһөнгәне лә, Ҡашҡарының тайҙарҙы баҫтырып өргән тауышы ла ишетелмәй. Яйыҡ үҙәне, ҡаршы Бурһыҡ үңере тик дөңгөр һәм ҡыңғырау тауыштарына ғына сорналған.

Һарыҡай инәһенә эйәреп ситкәрәк, ҡуйы тубылғы менән ҡапланған текә яр өҫтөнә килеп менде. Был ерҙе яҡшы хәтерләй ул. Тауҙың арғы яғы бик текә, ваҡ ҡайынлыҡ менән ҡапланған. Аҫта, ҡуйы шырлыҡ эсенән, батҡыл йылға аға. Йылға буйында үлән йәп-йәшел, йомшаҡ. Уны туйғансы ашағандан һуң, инәһе һыу эсер ҙә йылға аръяғында сәселгән һоло игененә килеп инер ине. Их! Тәмлелеге һуң өлгөрөп етер-етмәҫ һолоноң! Ҡапһаң, ҡайһы береһенән һутлы аҡ һөт ағып ауыҙыңды тултыра. Өлгөрөп ҡата башлағандарын кетерҙәтеп кенә иҙеп йотаһың да йотаһың. Күрәһең, инәһе бабай килгәнсе тағы ла шул һоло баҫыуына юл алды. Тауҙы менеп етергә ун аҙымлап сама ҡалған. Һарыҡай инәһенән тағы ла биш аҙымдай артта килә. Алда – текә таштар һәм бейек, ҡуйы тубылдыҡ ағастары. Ҡапыл таштар араһынан Һарыҡайҙың инәһенә ҙур дүрт бүре ташланды. Үҙенә һикергәнен ул һауала сағында уҡ шәйләп алып, бик сос ситкә, артҡараҡ, тайшанды. Ҡолоҡастың муйынына аҫылырға ниәтләгән был бүре яҙлыҡты, тешләп өлгөрә алмай, Һарыҡайҙан аша барып төштө. Ул барлыҡ көсөн биреп, инәһен күҙҙән юғалтып, кешнәп түбәнгә, йылҡылар янына, сапты. Һарыҡайҙың ҡолаҡ төбөндә инәһенең ауыр һулағаны, быуылып мышылдағаны, йән асыуы менән тулап сыйылдағаны, бүреләрҙең уҫал ырылдауы, тулаған, гөрөшкән тауыштар ап-асыҡ ишетелә ине. Ниндәйҙер ҙур хәүеф һиҙеп, йәш дүнәндәр, оло бейәләр ойоша биреп уға ҡаршы сабып килә башланылар. Үҙенә ярҙам килгәнен күреп, Һарыҡай кешнәй-кешнәй кире инәһе ҡалған ташлыҡҡа сапты.

Һарыҡай улар янына килеп еткәндә, инәһе әле ергә йығылмағайны. Әммә алғы аяҡтары менән ергә тубыҡланған да тик тора. Күрәһең, уның ҡуҙғалып, бүреләрҙе күтәреп сабыр хәле ҡалмаған. Арлы-бирле башын борғослап ҡараһа ла, тештәрен һис ысҡындырмай ине бүреләр.

Эх! Бирмәгән бит Ситдиҡа бейәгә Тәңре дүрт ҡаҙау теш! Бүренең бит шул дүрт тешенән башҡа һис ҡоралы юҡ. Ҡулы, ҡойроғо ла бүрәнә түгел, арҡа ышҡыр бумала кеүек кенә. Әгәр бейәлә шул дүрт ҡаҙау теш булһа... Үҙенең биш, хатта алты-ете шул ағзаһын өҙә тешләп ян-яҡҡа бырағтырыр ине. Юҡ шул, юҡ ул ҡаҙау тештәр! Үлән ҡырҡыр ғына ҡырҡма тештәр ни эшләй ала? Ә иң мөһиме – Ситдиҡа бейәгә тәбиғәттән йыртҡыслыҡ ҡануны, йыртҡыслыҡ булмышы һалынмаған. Тамағына, соңҡаһына батҡан йыртҡыс тештәре уның аңын юғалтырҙы. Әлегә быуындары тотҡас, тубыҡланып тороп булһа ла йығылмаҫҡа тырышты. "Ҡолонсағым, ҡолонсағым ҡасып өлгөрҙөмө икән?" тигән әрнеүле уй ҙа тоноҡ аңын телеп үтте. Күрәһең, был уның һуңғы уйы булғандыр...

Бик ҙур бүре инәһенең тамағынан алған. Икенсеһе елкәһенән, муйыны башына тоташҡан ерҙән, тештәрен батырып һелккесләй. Береһе арттан, бот араһынан, еленен айыра, ә ҡалған икеһе ике яҡтан эсен йырта ине. Оҙаҡ тора алманы

Ситдиҡа бейә, йығылды. Хәҙер инде уны бишәүләп иркенләп өҙгөсләргә керештеләр. Һарыҡайға иғтибар ҙа итмәнеләр, барлыҡ йыртҡыслыҡ зиһендәре тик йығылған табыштарында булды. Тағы ла бер аҙ ваҡыт үткәс, инәһе тулап йән бирҙе. Табыштары тынысланғас, бүреләр уны шунда уҡ йыртҡыслап ашарға тотонманылар. Ситкәрәк сигенеп, тыныслыҡ алып, башта оло инә бүренең табыштың эсен йыртып, эс-ҡарынын йолҡа башлауын көткәндәй, тора бирҙеләр.

Нәҡ шул мәлдә, йыраҡ та түгел, аҫта, йылҡылар янында, сыбыртҡы шартланы. Ишмөхәмәт ҡарттың тоноҡ ҡына итеп тай-тулаҡҡа ҡысҡырғаны, Ҡашҡарҙың өрөп уларҙы баҫтырғаны, дөңгөр тауыштары, ҡыңғырауҙар сыңы ишетелде. Һарыҡай үлеп ятҡан инәһен күҙҙән юғалтты, тик уға ынтыла биреп, тешен шаҡылдатҡан йәш бүрене ап-асыҡ күрҙе лә ҡурҡыуынан йән-фарман тағы ла түбәнгә, Ҡашҡар өргән ергә, уҡталды. Күҙенә аҡ-ҡара салынмай, өйөр эсенә сабып килеп кергән саҡта Ишмөхәмәт ҡарттың: “Шилма, йөрөй әллә ҡайҙа аҙып”, – тип сыбыртҡы һелтәп ҡалыуын ғына абайланы. Бүреләр көтөүсе тауышын ишетеп һағайҙылар. Бына Ишмөхәмәт ҡарт ауыҙ эсенән мөңгөрләй-мөңгөрләй йырлап, ниҙер эҙләгәндәй, тауға менә башланы. Уның менгән атының бышҡырыуы, йыраҡтағы юлдан һирәк-һаяҡ үткән машиналарҙың тауышы төн ҡараңғылығында әллә ҡайҙарға таралып юғала.

Күпте күргән оло ата бүренең шиге артҡандан-артты. Арҡаһына мылтыҡ аҫҡан көтөүсе хәҙер яндарына килеп сығырҙай тойолдо. Ҡалғандар торһа ла, ул һиҙылып күкрәгенә ятҡан ине. Бына ул торҙо. Тубылғылар араһынан текә ярға килеп етте лә, ер аҫтына төшкәндәй, текәлектән аҫҡа сапты. Ҡалған дүртәүһе теләр-теләмәҫ кенә уның артынан эйәрҙе.

Әле ҡараңғы булғанлыҡтан, Ишмөхәмәт ҡарт Ситдиҡа бейәнең ҡайҙа ятыуын шәйләмәне. Тау өҫтөнә менгәс, белгәндәй, бүреләр төшөп киткән яҡҡа ҡарап ҡысҡырҙы. Арҡаһынан иҫкереп, терәгесе ярылып бөткән бер көбәкле мылтығын алып, түбәнгә төбәп атып ебәрҙе. Мылтыҡ көбәгенән көлтәләй ут сыҡты. Ҡара дарының һаҫыҡ еҫен ел үҙ ыңғайына таратты. Арттарынан мылтыҡ атылғанын ишеткән бүреләр шырлыҡ ситләп өҫкә, йылға башындағы һаҙлыҡҡа табан, һәлмәк кенә сабалар ине. Бара биргәс, йыртҡыстар туҡтаны. Шул саҡта көтөүсенең, бүреләргә янағандай, тағы ла ҡысҡырған тауышы ишетелде. Хәҙер инде юлдарын юртып дауам иттеләр.

Өйөрөлгән йылҡылар араһына кергәс, Һарыҡай үҙен бер аҙ тынысланғандай тойҙо. Әле ул инәһенең үлгәнен дә, уның янында юҡлығын да тоймай. Күҙ алдында тик йәш бүренең тештәрен шаҡылдатҡаны тора.

...Ҡараңғыла малдарҙың теүәлме-түгелме икәнен белеү мөмкинлеге булмағас, Ишмөхәмәт көтөүҙе таратманы. Өйөрҙән ара-тирә айырылып сыҡҡан тай-тулаҡты Ҡашҡар кире эскә баҫтырып индерә торҙо.

Таң сулпаны тауҙар өҫтөнә ауышып, тыуа башлаған яҡтылыҡ эсендә шиңеп юғалыуға әҙерләнде. Күңеле менән ниҙер һиҙенә ине карт. Уйында шик-шөбһәләр ҡайнаны. “Нишләп яңғыҙ ҡолоҡай ситтән, тау үңеренән, ялбарып, ярҙам һорағандай сырҡырап, кешнәп, өркөп сабып килеп өйөр эсенә инеп китте әле? Нишләп уны инәһе, уҡранып, ҡаршы алманы?” Әле был һорауҙарға яуап юҡ. Урыҫ үлгән тауы артынан яҡтылыҡ һибелә башланы. Оҙаҡ көттөрмәне – барлыҡ ерҙе ап-аҡ яҡтылыҡ солғап алды. Йылҡылар яйлап таралыша башланы. Өйөр эсендә бер-береһенә һырығып, йылынып йоҡлап торған ҡолоҡайҙар, ел үтеп инеүенә иләүерәп, уянып киттеләр ҙә, асығып, һәр береһе инәләрен супылдатып имергә кереште. Һарыҡай йоҡлай алмаһа ла, өйөр тороуынан ул да айныны. Асыҡты ул, бик асыҡты. Тирә-яҡҡа һөрән һалып кешнәп инәһен эҙләһә лә, яуап булманы.

Өйөрөп, бер туп итеп тотоусы Лидер булмағас, йылҡылар, таралыу менән, ваҡ

өйөрсөктәргә бүленәләр. Бүленмәҫ тә ине улар, әммә һәр бер ҡонан өлөшөнә тейгән көмөшөнә хужа булыр өсөн даулаша, талаша, һуғыша. Һәр бер өйөрсөктө йөрөп сыҡты Һарыҡай. Әммә уны йә тешләп, йә бер аяҡ менән генә һелтәп тибеп ҡыуып ебәрҙеләр. Бигерәк тә йәш бейәләр яҡын ебәрмәне Һарыҡайҙы. Инәһе менән бергәрәк йөрөгән оло Ҡара бейә уны имеҙгәндәй ҙә итте. Эй еҫкәне, эй еҫкәне ул Һарыҡайҙы. Унан һуң, тешләмәһә лә, мороно менән генә ситкә этте. Ни эшләргә инде, тип бер аҙ аптырап торғандай итте лә тағы Ҡара бейәне имергә ынтылды Һарыҡай. Йәнә этеп ебәрҙе уны Ҡара бейә, әммә теймәне. Имеп, тамағын туйҙырып алған үҙе кеүек ҡара ҡолоҡайы Һарыҡай менән уйнарға кереште. Йә уның ялынан, боттарынан тешләй, йә арт аяҡтарына текә баҫып өҫтөнә ята. Әммә һис уйнағыһы килмәй Һарыҡайҙың. Асыҡты, бик асыҡты ул. Тирә-йүндәге бейәләргә тағы ла ынтылып ҡараны. Тик ҡайҙа инде ул имеү! Ахырҙа кешнәп, ян-яҡты эҙләп, бөтә өйөрҙө тағы ла бер тапҡыр сабып әйләнеп сыҡты ла инәһен юғалтҡан тауға, ташлыҡтар араһына, яр башына сапты. Ҡанға батып, тулышып, эсе күбеп арҡаһында ята ине инәһе. Тубылғылар һынған, үләндәр тапалып, ергә түшәлгән. Бүре айырған елене тулышып, яраһыҙ һау имсәгенән һөт тама ине.

Бына ята лаһа Һарыҡайҙың инәһе! Тик нишләп әле һуң ул ҡыбырламай, ғәҙәттәгесә уҡранып, ҡолонсағын еҫкәмәй? Инәһенең еҫе, фиғеле үҙгәрһә лә, ул ҡурҡманы. Башҡа еҫтәрҙе еңеп, тик инәһенең еҫе танауын ҡытыҡланы. Йомшаҡ бәрхәттәй бәләкәй генә мороно менән ул ғәҙәттәгесә эҙләнеп, инәһенең эсенә төрттө. Унан, хәҙер инде йылы, йомшаҡ булмаған берҙән-бер имсәген ауыҙына ҡабып, һура башланы. Тәүге ике-өс һурыуҙа, ысынлап та, тәмле, шәкәрле һөт килде. Унан һөт ҡапыл бөттө. Әскелтем, тоҙлораҡ еүешлек килә башлағас, Һарыҡай имсәкте ысҡындырҙы. Аптырап ян-яҡҡа ҡаранып, инәһенең кәүҙәһе ятҡан ерҙән йәшел ҡыяҡ үләндәрҙе сүпләп йолҡоштороҙо. Тәм дә бар ҡабымда, әммә әллә ниндәй ауыр, сөскөлт һәм һаҫыҡ еҫ тә килә ине үләндәрҙән. Тағы ла кибә башлаған имсәкте ҡабып, һурып ҡараны, тик һөт килмәне, инәһе лә ҡатҡан килеш ята бирҙе. Йөрөй торғас, ул үҙенең япа-яңғыҙ икәнен тойҙо. Бер нисә тапҡыр кешнәп ҡараһа ла, яуап биреүсе булманы. Бик алыҫта, тауҙар араһында ҡыңғырау сыңы ишетеп, йән-фарман шул яҡҡа сапты. Түбәнгә, бик түбәнгә төшкәс, күптән түгел генә йылҡылар йөрөгән яландың буш булыуын күрҙе. Туҡтап, тиҙәкһенеп, тағы ла үҙән буйын яңғыратып сырҡыратып кешнәне. Берәү ҙә яуап ҡайтарманы. Саңдауға – ағас йырмаларға һалынған тоҙлоҡтар янына ла барҙы. Таҡырлыҡ, иҫкерә биргән тиҙәк, ҡатҡан батҡаҡтар ғына ята.

Ҡайҙа барһын инде яңғыҙ Һарыҡай? Бында, саңдауҙа, шулай ҙа күңел тыныраҡ. Өйөр еҫе аңҡып тора, ерҙәге йөҙәрләгән тояҡ эҙҙәре, кибеп бөтмәгән тиҙәктәр ҙә киң яландың хужалары – йылҡыларҙың был тирәнән әллә ни йыраҡ та түгеллеген дәлилләй. Әҙ генә тынысланғандай булды ул.

Ҡояш болоттар артына бер керә, бер сыға торғас, көндөң яртыларын күрһәтеп, өҫкә, иң юғары нөктәгә, менеп ултырҙы. Тоҙлоҡ янында торған килеш ойоп, йоҡлап китте Һарыҡай. Татлы йоҡола күпме булғандыр, күпме торғандыр – билдәһеҙ. Ҡапыл яҡында, Талышман йылғаһы тамағында, һайыҫҡандың ғауға һалып шыҡырлауына уянып китте. Ян-яҡты бик ентекләп тыңлағандан һуң, тағы ла сырҡыратып кешнәне. Тирә-йүндә һис йән эйәһе беленмәне. Ахырҙа, үлән өҙә-өҙә, тағы ла инәһе ятҡан тауға, текәлек ситенә китте. Күпме барғандыр инде бер туҡтап тыңлап, бер тирә-яҡты ҡарап. Шул уҡ урында, шул уҡ фиғелендә ята ине инәһе. Хәҙер инде сит-ят еҫте лә, инәһенең һөтлө сөсө еҫен дә айырырлыҡ түгел. Тирә-яҡҡа бер төрлө ауыр еҫ таралған. Өйрәнгән алым менән яртыһы айырылып, ҡабарып шешкән елендәге һыуынып, һерәйеп ҡатҡан имсәкте ҡапты. Бәләкәс генә ауыҙында имсәк йомшара барһа ла, һурғанда ҡанлы әсе һут

килә ине. Төкөргәндәй итеп, теле менән кире сығарҙы имсәкте ауыҙынан. Имгеһе, бик имгеһе килһә лә, башҡаса ынтылманы.

Көн кискә ауышты. Был ваҡытта Талышман башындағы һаҙлыҡ ҡамышында кис булыуын көтөп ятҡан бүреләр шырлыҡ буйлап йыйып ҡалдырылған ҡорбандары янына туйғансы һутлы ит ашарға киләләр ине. Бына улар йылға таллығынан теҙелеп кенә ярға боролдолар. Текәлеккә, тамырҙары менән йәбешеп үҫкән йәш ҡайындар араһына кереү менән, тиҙерәк, беренсе булып ашарға тотонор өсөн, таралышып болашмаҡ өҫкә саптылар. Бурҙай кеүек алғыр инә бүре, был бәхетте берәүгә лә бирмәҫ өсөн, алға сыҡҡан һәр береһенә ҡаҙау тештере менән өлөш сығара торҙо. Тегеһен дә, быныһын да талап артҡа ҡыуа-ҡыуа, үҙе алға ынтылды. Бүреләрҙең бүреләй холҡо ҡотҡарҙы ла инде үлемдән Һарыҡайҙы. Иғтибарһыҙыраҡ килеп сыҡтылар улар емтек өҫтөнә.

Ҡапыл ер аҫтынан пәйҙә булғандай, ташлыҡтың ике яғынан аллы-артлы биш бүре килеп сыҡты ла, Һарыҡайҙы күреп, уға ташланды. Яҡын, бик яҡында ине береһе уға. Сослоғо, тәбиғәттән бирелгән тиҙ һиҙемләү һәләте һәм йүгереклеге ҡотҡарҙы Һарыҡайҙы. Ҡобараһы осоп, йән-фарманға тубылғылар, таштар аша һикереп, түбәнгә, саңдауға, осто ул. Сәмләнеп байтаҡ ара баҫтырҙылар. Алдан ныҡышмалығы менән айырылып торған инә бүре килде. Әммә Һарыҡай уларҙы ҡалдырғандан-ҡалдырҙы. Артта көтөп ятҡан әҙер ит тә тегеләрҙең дәртен һүрелтте. Тороп ҡалдылар. Емтеккә кемуҙарҙан сабыу яңы төҫ алды.

Саңдауҙа тағы ла берәү ҙә ҡаршы алманы ҡолонсаҡты. Шул уҡ тоҙ кәмәһе, йылға буйында үҫкән тал башында шул уҡ һайыҫҡан шыҡырлай ине. Етемһерәне, тамам етемһерәне Һарыҡай.

*Кемдәр өсөн кем балаһы ғәзиз,*
*Үҙ ата-әсәһе булмаһас...*

Һарыҡай ҙа тамам йырҙағы яҙмышты кисерә башланы.

Бушлыҡ, тирә-йүндә һис йән эйәһе лә, тауыш та юҡ. Асығып, тамам йәнһерәп, тоҙло ерлекте лә ялап ҡараны... Тағы ла ярһыбыраҡ, көслөрәк, асырғаныбыраҡ кешнәне Һарыҡай. Көтмәгәндә Талышман йылғаһының аръяғында ауаз яуапланы. Ҡолаҡтарын ҡайсылап, тауыш килгән яҡҡа бик иғтибарлап ҡарап торҙо. Йылға аръяғында ат бышҡырған тауыш ишетелде. Икеләнмәйенсә шул тауышҡа ҡарай сапты. Йылғаның көнсығыш яғы асыҡ булһа ла, ҡаршы яҡ таллыҡтар менән ҡапланған, аша сыға алмай интекте. Ҡаршы яҡ йә батҡыл, йә ҡуйы таллыҡ, йә ярайһы уҡ текә ярлы ине. Байтаҡ ҡына тырышҡандан һуң, сара таба алмай, төшөнкөлөккә бирелеп, тамам етемһерәп, тағы ла тоноҡ ҡына тауыш менән кешнәгәндәй итте. Яуапты шунда уҡ алды. Һыу аръяғында уны уҡранып саҡыралар ине. Батҡылмы, текә ярмы, ҡуйы таллыҡмы – ҡарап торманы Һарыҡай. Эсенә тиклем лысма һыу кисеп, һерәйеп торған ботаҡҡа ҡорһағын, сандырын сыйып, килешһеҙ атлап сыҡты ул яланға. Унда алғы аяҡтары тышаулы өс ат ғәмһеҙ генә үлән ашап йөрөй. Баштарын күтәреп, бер һирпелеп ҡарап алдылар ҙа, уға башҡаса иғтибар итмәй, ашауҙарын дауам иттеләр.

Иң алда яҡындараҡ торған көр ат янына килде. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт еҫкәшеп, аңлашып алғас, көр ат, бар кит, йөрөмә, тигәндәй, уға осаһы менән боролдо. Яҡшы мөғәмәлә ала алмағас, ул урталағы атҡа йүнәлде. Уныһы бөтөнләй иғтибар итмәне, хатта кеселеклеген, буйһонғанлығын белдереп, үсекләшкәндәй, аҫҡы ирендәрен бәлшәйтһә лә, ҡараманы уға эш аты. Ҡойроғо менән бот араһына ҡаты ғына һуҡҡыслап алыуы эш атының кәйефе насар булыуын, ризаһыҙлығын белдерә ине.

Ситтә шаҡ ҡатып тора биргәс, ул сыбыртҡы менән туҡмалып, ҡабырғаһында йөндәре ҡойолоп, тиреһе ҡайыш булып бөткән, аҫҡы ирене һәлберәп төшкән ҙур алаша янына килде. Йылҡы ғәҙәтен, мөнәсәбәт билгеһен күрһәтте тағы ла Һарыҡай ҡартласҡа. Еҫкәштеләр, аңлаштылар. Теге ашауынан туҡтап, үҙ телендә Һарыҡайҙан нимә күреүен, ниҙәр кисереүен һорап, уның менән бергә ҡайғырғандай, башҡа-баш терәп тигәндәй оҙаҡ ҡына торҙолар. Ҡарт ат уны, өйөрҙәге йәш бейәләр кеүек, йомрайып ҡыуманы, тибергә аяҡ та күтәрмәне. Баштары менән муйынына ышҡынды, бет ҡарашҡандай, ял сәстәрен дә тешләп сыҡты, артына сығып, ҡойроғона ла өйкәнде. Ни эшләһә лә, ирек ҡуйылған ине Һарыҡайға. Инәһе үлгәндән бирле тәүге иркәләнеүе, ҡурсалаусыны осратыуы ине Һарыҡайҙың.

Тышаулы йөрөгән был аттар өйөрҙәге ҡолонло йәш бейәләр кеүек типмәнеләр Һарыҡайҙы, оло Ҡара бейә кеүек арт аяҡтарын ергә һуғып, ярамай, тигән хәрәкәт тә күрһәтмәнеләр.

Әллә үҙенең бала сағын хәтерләне, әллә етемһерәп йөрөгән балаҡайҙы йәлләне һоро ҡарт ат. Үҙенән ҙур һәр йән эйәһе мине имеҙә ала, тип аңлаған ҡолон ирене һәлберәп бөткән был йыуаш ҡарт аттың эс яғын һәрмәкләй башланы. Тик ауыр эш эшләп өйрәнгән был хайуан, әллә донъялағы барлыҡ ваҡиғаға битараф, әллә эске һиҙемләүе, тоҡомдо үҫтереүҙе, һаҡлауҙы тормош ҡушыуы тип аңлап, хатта ашауҙан туҡтап тик торҙо.

Һарыҡай үҙе белгән ерҙән ҙур, ҡалын имеҙлек табып, һурып имә башланы. Ҡытығы килһә лә, нисектер бик килешһеҙ, бөтөнләй ят хистәр тыуҙырған был хәрәкәттәргә түҙҙе һоро ат. Ҡашағаһы һыҙлай башлаһа ла: әйҙә, балаҡай, һөтө булмаһа ла, үҙең теләгәс, ләззәт ал, тигәндәй торҙо ул.

Тик Һарыҡай ғына ләззәт ала алманы ҡашаға имеүҙән. Һөтө булмағас, тиргә ҡатҡан ҙур, ҡалын һәм ҡаты был «имсәк»те теле менән этәреп сығарып, ҡапыл имеүҙән туҡтаны. Һоро ат та башын бороп, уны еҫкәне лә оҙон йәшел аҡтамырҙарҙы өҙөп ашай башланы. Башҡаса ымһынманы ла, ынтылманы ла Һарыҡай был һөтһеҙ әсе имсәккә. Асығыуы сиктән аша башлағас, ул да, был оло аттар өлгөһөндә, ҡыяҡ япраҡтарҙы ғына өҙөп кертләтергә кереште. Бөгөн ниңәлер был аттарҙы төнгөлөккә бирәү ҙә алып ҡайтманы. Ҡараңғы төшә башлағас, улар бер-береһенә яҡыныраҡ килеп, ысыҡтан йомшара биргән үләнде тағы ла ҙурыраҡ ҡабым менән ашай башланылар. Төн тыныс үтте.

Таң атып, ҡояш сығыр алдынан яландың арғы осондағы юлдан арбаға егелгән ат үтеп бара ине. Келтер-келтер килгән арба тауышы ла, моңһоу, тоноҡ тауыш менән йырланған йыр ҙа Һарыҡайға таныш төҫлө. Бәләкәс ҡолаҡтарын ҡайсылатып, иғтибар менән ҡарай торғас ҡына һиҙемләне: көтөүсе Ишмөхәмәт ҡарт! Ана, туры бейәһе лә, ҡолоҡайы ла, хатта өрөп маҙаһыҙлаған Ҡашҡары ла эйәргән. Бигерәк тә инәһенә эйәреп алған ҡолоҡайҙы күргәс, ул үҙенә бик таныш, бик туған күренеште һиҙемләне. Сырҡыратып кешнәп, ҡыҫҡа ҡойроғон болғайболғай улар артынан сапты.

Шулай Һарыҡай ҡарттың арбаһына эйәреп кире килде көтөүгә. Өйөр хәҙер элекке саңдауҙа түгел, көнсығыштараҡ, ваҡ түбәләр, оҙон ҡырҙар бүлгеләнгән бай үләнле, ике-өс шишмәһе булған яланда ине. Ҙур булмаған текәлек аҫтынан сыҡҡан шишмә башында үҫкән ҡайынлыҡ ситендәге тағанлыҡ янына туҡтап, Ишмөхәмәт ҡарт бейәһен туғарып, эйәрләп ҡуйҙы. Арбаға сабып һалынған йәшел үләнде йолҡоп ашай ғына башлаған Һарыҡайҙы Ҡашҡар, өрөп, өйөр эсенә тиклем баҫтырып индереп ҡуйҙы. Арба янына барырға бер нисә тапҡыр ынтылып ҡараһа ла, Ҡашҡар уны яҡын ебәрмәне. Тағы ла башланды ул бейәгә лә, был бейәгә лә төртөлөү. Берәү ҙә һырыҡтырманы. Тешләнеләр, хатта типтеләр ҙә.

Ҡыйырһытылған көндәр үтте лә үтте. Ҡояш көн уртаһында ярайһы уҡ ҡыҙҙырһа ла, кистәрен һәм төндәрен һалҡынайтты. Көҙгә тартым ҡараңғы төндәр оҙонаяя төштө.

Нисек килеп сыҡҡандыр, көндәрҙән бер көндө, һыулауҙан һуң саңдауға өйөрөлгәс, элекке таныштары ҡарт Ҡара бейә һәм уның ҡолоҡайы менән бергә тура килделәр. Еҫкәштеләр, бер-береһен иҫкә төшөрҙөләр. Тора-тора ҡолоҡайҙар ялыҡтылар. Башта торған урындарында бер-береһенең ялын тешләп, бет ҡараштылар. Унан һуң тубыҡтарын, сандырҙарын тешләп, ҡытыҡлап уйнарға керештеләр. Өйөрҙө урап сабыуҙар, ҡосаҡлашып, текә тороп алышыуҙар барлыҡ көтөүҙең ҡолоҡайҙары һәм тай-тулаҡтарҙың дөйөм уйынына әйләнде. Оҙаҡ уйнанылар Һарыҡай менән Ҡара ҡолоҡай. Өйкәшеп, бер-береһенең еҫен һеңдергәнен генә төшөнмәнеләр.

Өйөр таралып, инәһе улар янына килгәс, асыҡҡан, сарсаған Ҡараҡай супылдатып имә башланы. Ҡара бейә тирәһендә имергә баҙнат итмәй өйөрөлдө лә өйөрөлдө Һарыҡай. Унан тәүәккәлләне, ынтылды һәм Ҡараҡайҙың моронон ары этәреп, йылы, йомшаҡ имсәкте ҡабып алды. Ҡара бейә тешләмәне лә, типмәне лә. Тик муйынын бороп, еҫкәп-еҫкәп алды. Аралаш булһа ла, ҡолононоң да еҫе килә ине Һарыҡайҙан. Шул көндән алып улар өсәү булдылар. Бер тотам да ҡалманы Һарыҡай Ҡара бейәнән. Тик шуныһы: үҙ ҡолоҡайы имгәндә генә имсәк ҡаба алды Һарыҡай. Яҡлау ҙа таба алманы. Ҡараҡайҙы тешләргә йә тибергә йыйынһалар, Ҡара бейә шунда уҡ ярҙамға ташлана ине. Ә Һарыҡайҙы ҡыйырһытһалар, иғтибар бирмәне. Әллә инәле, әллә инәһеҙ ҡалды – Һарыҡай быны аңламаны. Имһә, Ҡара ҡолоҡайҙан болашмаҡ ҡына имсәк һура алды. Ҡара бейә үҙ ҡолоно имеп алһа, атлап сыға ла китә, Һарыҡай имәме-юҡмы – көтмәй, туҡтап тормай. Әлегә һайлап ашай белмәгәс, ниндәй үлән эләгә, шуның менән тамаҡ ялғаны етем ҡолаҡай.

Тағы ла шулай айға яҡын ваҡыт үтте. Шишмәлек, йылғасыҡтарҙа һыу кимәле кәмене. Һайыҫҡан шырлығында оялағы һайыҫҡан балалары күптән инде осоп таралды. Әммә иртә таңдарҙа һәм тын кистәрҙә, өйөр саңдауҙа ял иткәндә, ситтән кем килеүен белдереп, шыҡырлап тирә-йүнгә һөрән һалдылар. Күпте күргән, тирә-яҡтағы һәр йән эйәһен белгән оло һайыҫҡан оя тирәһенә йәки өйөргә яҡынлаған һәр тереклек тураһында үҙенсәлекле айырым тауыш менән хәбәр итә. Ҡуян күрһә, шыҡырлауы бер төрлө була, шырлыҡ буйлап өҫтән төшкән бүрене икенсе төрлө тауыш менән ҡаршы ала. Был осраҡта шыҡырлауының һикәлтәләре эре, көслө һәм шомло була. Ҡашҡар был тауышты аңлап бөткән. Ала һайыҫҡан шомланып шыҡырлай башлаһа, арба аҫтында ятҡан еренән сыға ла, шул яҡҡа ҡарап ырылдай биреп, бер нисә тапҡыр өрөп ҡуя. Һаҡ һайыҫҡандың һиҙгерлеген һис алдап булмағанын күптән инде төшөнөп бөткән бүреләр, саңдауға йә таң һарылыуҙан алда, йә кис, һайыҫҡандар шырлыҡтағы йоҡо ботағына ултырғас, килә.

Бөгөн дә шулай булды. Ҡараңғы төшкәс, Ишмөхәмәт ҡарт йылҡыларҙы саңдауға өйөрөп ҡуйҙы. Көнө буйы ҡалҡыу түмһәлдә, ҡырсынлыҡ араһында, ятҡан бүреләр кискә табан Һайыҫҡан шырлығының тауына килеп туҡтанылар. Саңдауҙа йылҡы өйөрө булмағанда ла уны һәр саҡ тикшереп торған бүреләр бөгөн шырлыҡ тауына ниндәйҙер өмөт менән килделәр. Быныңүҙ сәбәптәре бар ине. Киске һунарға сығырға ятҡан урындарынан торғас, ололар, ата менән инә бүре, ҡоҙғондарҙың ҡорҡолдап осоу йүнәлешенә иғтибар иттеләр. Бер-береһенә туҡтауһыҙ тауыш биреп осҡан ҡоҙғондарҙың йүнәлеше бер ине. Бөтәһе лә Һайыҫҡан шырлығына төбәп осалар. Һарыҡайҙың инәһе кеүегерәк һәр саҡ ситтәрәк, үҙ алдына йөрөгән туры бейәнең ҡолононоң эсенә шырлыҡ араһында

ослайып торған кипкән тал кергән ине. Көтмәгәндә тәрән кергән ағасты һикереп һурып сығарып, инәһе артынан сапты ҡолон. Үлемесле яранан аҡҡан ҡан тура ергә төшөүе һөҙөмтәһендә, уны Ишмөхәмәт ҡарт күрә алманы. Көнө буйы һыҙланған ҡолон ҡараңғы төшөүгә инәһен имә алмаҫлыҡ хәлдә ине инде. Төндә эсәктәре тишелгән ҡолон шешенеп, атлай алмаҫ хәлгә килде. Туры бейә уның янынан китмәне. Таң атып, ҡояш ҡыҙҙыра башлағас, хәле тамам бөткән ҡолон Һайыҫҡан шырлығы өҫтөндәге шишмәлек үрендә, ҡуйы үлән араһында ята ине. Башын саҡ-саҡ күтәреп, тороорға ынтылып ҡараһа ла, ҡуҙғала алманы. Кисә кистән янында торған инәһе һыу эсергә лә төшмәне, үлән дә йолҡоп ҡапманы.

Төш ваҡытында йылҡыларын йыйып йөрөгән көтөүсе ҡарт, йыраҡтан туры бейәне күреп, уға Ҡашҡарҙы һөсләне. Туры бейә ҡолоно янынан китергә теләмәһә лә, Ҡашҡар уны, ай-вайына ҡуймай, саңдауға баҫтырҙы. Үҙе кеүек туры ҡолоҡай ҡылған аралаш үҫкән бейек үлән араһында күренмәй ятып ҡалды.

Йәне сығып бөтмәй ятҡан ҡолондо бейектән осоп үтеп барған ҡоҙғон күрҙе. Өйөрөлөп осоп төшә-төшә, үле ҡолондо күргәс, был турала үҙ телендә тирә-яҡҡа тауыш таратты. Был ауаз бүреләргә лә барып етте. Аслыҡтан эсе тартылған көмөрөрәк инә бүре, башҡаларын артҡараҡ ҡалдырып, шырлыҡ буйлап түбәнгә юртты. Алда, яҡында ғына, ҡоҙғондарҙың ғарҡылдаған һәм табыш бүлешкән саҡтағы ауаздарын ап-асыҡ ишетте ул. Таш өҫтөндә ултырған ҡоҙғон ғына бүрегә ҡолон ятҡан ерҙе күрһәтеүсе билдә ине. Табыштың бына алда ғына булыуына тамам төшөнгән инә бүре эре-эре һикереп сабырға тотондо. Үлән араһында ятҡан ҡолондо күреү менән уға ташланды. Нәҙек кенә нәфис муйынының тамағынан алды. Йыртҡысланып һелкте лә һелкте. Ҡолондо быуып үлтереүгә, артта ҡалған дүртәүһе килеп етеп, берҙәй булып болашмаҡ ҡолонға ташландылар. Кем күпме өҙөп ала, шул тиклем итте ситкә китеп ҡомһоҙланып, һоғалап йоталар ҙа тағы ла килеп йолҡоп алалар.

Бер сәғәт үтеүгә туры ҡолондан бер нәмә лә ҡалманы. Ғарҡ булып туйған бүреләр аунап ятып йә тубыҡланып ҡанлы ауыҙҙарын үләнгә һөрттөләр ҙә теҙелешеп кенә атлап кире Бурһыҡ тауына менеп киттеләр.

Тулышып, елене шешеп, имсәктәренән нәҙек кенә булып һөт саптырып торған туры бейә бер туҡтауһыҙ кешнәп, ҡолонон эҙләп тирә-яҡҡа сабып йөрөнө. Кешнәй, унан һуң яуап көтөп, туҡтап тыңлап тора.

Бына анау түбә тирәһендә туры бейәгә яуап итеп сырҡырап, келтерҙәтеп кенә бер ҡолон кешнәне. Йыраҡтан кем тауышы икәнлеген айырыу ҡыйын булғанлыҡтан, туры бейә шул тауышҡа ҡарай сапты. Һарыҡай Ҡара бейә янында йөрөй ине был ваҡытта. Тағы ла кешнәшеп ауаз алышҡандан һуң, туры бейә үҙе килде Һарыҡай янына. Еҫкәштеләр. Әрһеҙләшеп, кемде булһа ла имергә ынтылырға өйрәнеп бөткән Һарыҡай тулып, һөт саптырып торған еленде ҡабып алды. Күптәнән, бик күптәнән был ләззәттән мәхрүм булған Һарыҡай имде лә имде. Туры бейә лә уны тыйманы, туйғансы имде Һарыҡай. Шулай, ҡуктән түгел, ерҙән бирҙе уға яҙмыш яңы инәйҙе.

Шул көндән ул ике инәле булды. Еленен тәүләп рөхсәт иткән Ҡара бейә янынан да китә алманы. Шуға ла дүртәүләп бергә йөрөр булып киттеләр. Ә был Һарыҡайға бик уңай ине. “Ауыҙы йомшаҡ ҡолон ике бейәне имер” тигән әйтем тормошҡа үҙенән-үҙе ашты. Аҙна үтеүгә Һарыҡай көрәйеп, ыҫпайланып китте. Ҡолондар, тай-тулаҡтар менән сабышып уйнағанда алдынғыны бирмәне. Уға хәҙер Ҡашҡар ҙа етешә алмай. Баҫтыра башлаһа, өрөп әллә ҡайҙа артта ҡала. Туҡ һәм ғәмһеҙ көндәр үтә торҙо. Бер көндө ят ике кеше, арбаға егелгән атҡа йәнәш бәйләп, Лидер атайҙы алып килделәр. Ул һимергән, йоп-йомро, ослайып торған бер һөйәге лә беленмәй. Сандырындағы һәм түшендәге йыртыҡ яралар

бөтәшеп төҙәлгән. Ишмөхәмәт ҡарттың нуҡталарын сисеп ебәреүен түҙемһеҙлек менән көтөп, арлы-бирле йөрөп, тартылып, ер тырнап, аҡтарып бөттө. Ысҡындырып ебәреү менән, кешнәп, һөрән һалып, ҡойроҡтарын текә сәнсеп өйөргә табан сапты. Тояҡтары аҫтынан ҡыртыш, үләндәре менән ҡырҡылып, киҫәк-киҫәк булып ян-яҡҡа ырғып бара ине. Тырым-тырағай булып биш-алты ергә таралған ваҡ өйөр башлыҡтары – ҡонандар аҙау айғыр Лидерға ҡаршы сығып баҫтылар. Сабып килгән килеш береһенең елкәһенән алып ситкә быраҡтырҙы. Икенсеһен һәм өсөнсөһөн түше менән һуғып йыҡты, саяраҡ дүртенсеһенең биленән сапсыны. Ҡалған икеһен талап, бөтөнләйгә ситкә баҫтырып ебәрҙе лә, башын ергә эйеп, йомояндап, барлыҡ бейәләрҙе, ҡолондарҙы, тай-тулаҡтарҙы бер өйөргә йыйырға кереште. Ҡайһы бер оло бейәләр тыңламайыраҡ ситкә тайпылһа, янбаштарына, осаларына айғырҙың үткер теше эләкте. Бер нисәһен тибеп тә ебәрҙе. Башҡа сара ҡалмағас, аҙауҙың хакимлығын танып, бер ергә өйөрөлдөләр. Өйөрҙө әйләнеп, түңәрәкләп йөрөнө ул. Башбаштаҡлыҡ ҡылған ҡонандар йә өйөр эсенә инеп торҙолар, йә ситкә ҡастылар. Шулай тағы ла туплап алды аҙау айғыр тарҡалыуға йүнәлеш алған йылҡы өйөрөн. Хәйер, барлыҡ йән эйәләренең үҙҙәренә генә хас эске ҡағиҙәләре була. Шул эске ҡағиҙәләр тышҡы ваҡиғалар, хәл-әхүәлдәр менән бәйләнеп, дөйөм үҫеш юлын билдәләй. Был өйөр ҙә киләсәктә тарҡалыр. Йылҡыларҙың теләктәренән башҡа сәбәптәр тыуыр... Юлбашсы булырҙай йәш ҡонандар үҫеп, ғәйрәт алыр, ә аҙау айғыр ҡартайыр. Киләсәктә ул өйөрҙө бергә тота ла алмаҫ, көсө, ғәйрәте ҡайтыр.

Көндәрҙән бер көндө Лидер атай Һарыҡайҙың инәләренә яҡынлашты. Еҫкәштеләр, һөйләшеп алғандай сайылдаштылар, алғы аяҡтары менән ергә һуғып-һуғып алдылар. Етеҙ хәрәкәттәр яһап, ҡойроҡ болғаштылар. Һарыҡай башҡа ҡолондар менән уйнаған кеүек, алмаш-тилмәш ике инәһенең дә өҫтөнә һикерҙе Лидер атай. Һарыҡайҙы ла, Ҡараҡайҙы ла еҫкәне. Шул көндән башлап яҡлаусы ла тапты, ахыры, Һарыҡай. Көтөүҙә йөрөгәндә лә, өйөрҙә булғанда ла һәр саҡ Лидер атай янында торорға күнекте. Уның янында йөрөһәң, бер кем тешләмәй ҙә, типмәй ҙә. Йәш, һөтлө туры бейә Һарыҡайҙың тамағын туйҙыра ине. Тормоштоң һәр уңайлы осрағын ҡулланып йәшәргә өйрәнде Һарыҡай. Хәҙер инде ул ярайһы уҡ үлән ашай ҙа белә. Ашарға ғына түгел, ә һайлап ашарға өйрәнде.

Көҙ етте. Үләндәр һарғайып ҡатты. Уҫаҡ япраҡтары ҡыҙарып, әҙ генә елгә лә ҡыптырлап оса башланы. Ҡайын япраҡтары ла һарғайҙы. Тағы ла бер төн ҡырау төшөп һалҡынайтһа, уның да япраҡ тотҡаларының төбө өшөп, елдә ҡалтырап, ботаҡтан айырыласаҡ. Әллә ни һиҙмәне Һарыҡай япраҡ ҡойолоуын да. Әммә ҡараңғы төндәрҙә, тирә-яҡҡа шом-шөбһә, ҡурҡыу һәм янау һалып, күңел өшөтөрлөк тауыш менән бүреләр олой башланы. Иң алда береһе башлай. Уға икенсеһе ҡушылһа, ҡапыл башҡалары күтәреп алып, дөйөм ауаз, дөйөм шомлоҡ тирә-яҡты солғай. Был осраҡта Ҡашҡар өрмәй, киреһенсә, йә Ишмөхәмәт ҡыуышына килеп инә, йә уның бото араһында урала. Бүреләрҙең олоуын ишетһә, ҡарт уянып, ҡулына бер көбәкле мылтығын тотоп, ҡыуышынан тышҡа сыға. Уларҙың олоуын тыңлап, бөтә тау үҙәнен яңғыратып ҡысҡыра. Унан һауаға атып ебәрә. Бынан һуң тирә-йүн тынып ҡала. Йылҡылар ҙа өйөрөлөп тик кенә тора, бүреләр ҙә оломай, Ҡашҡар ҙа өрмәй. Көндәрҙән бер көндө алыҫтағы ҙур, оҙон тауҙар артынан ҡуйы, ҡалын ҡара болоттар сыҡтылар ҙа күҙ күремендәге офоҡто ҡаплап алдылар. Кис етеп, ҡараңғы төшөр алдынан ҡапыл һалҡынайтты. Ҡара болоттар ап-аҡ булып ағарҙы, ел сыҡты. Унан ябалаҡлап эре ҡар яуа башланы. Төнө буйы яуҙы ҡар. Иртә менән яҡтырғанда барлыҡ ер ҡалын ҡар аҫтында ине. Ҡар өҫтөндә әллә нисә ҡышты үткәргән оло бейәләр, өс-дүрт йәшлек ҡонанбайталдар, әллә ни аптырамай, ҡарҙы тибеп, епшек үләнде ашай башланылар.

Йәш тайҙар, ҡолоҡайҙар был алымға әле яраҡһыҙ ине. Тәбиғәт уларҙы әлегә тибен тибергә яраҡлаштырмаған. Кәүҙә-фиғелдәре быға камиллашмаған. Аяҡтары оҙон, кәүҙәләре һәм муйындары ҡыҫҡа, тояҡтары ҡатмаған һәм бик бәләкәй.

Ике көн ҡар өҫтөндә улай-былай йөрөгән йәш малдар асыҡты. Ваҡ ағастарҙың үҫенте ботаҡтарын сүпләп ашай башланылар. Өсөнсө көнгә бөтә йылҡыны ауылға ҡыуып, кәртәгә индерҙеләр ҙә барлыҡ йәш малдарҙы айырып алып ҡалдылар.

Тәмле имсәктән йәнә айырылды Һарыҡай. Был юлы – мәңгегә! Имсәктән айырылып өйрәнгән Һарыҡайға башҡаларға ҡарағанда бигүк ауыр булманы. Кәртә эсе бер туҡтауһыҙ кешнәү һәм арлы-бирле сабып йөрөп инәләрен эҙләгән тиҫтерҙәре менән тулы.

Башҡалар ике-өс көн буйы бер туҡтауһыҙ кешнәп инәләрен эҙләгәндә, Һарыҡай тыныс ҡына утлыҡҡа һалынған бесәнде кертләтә. Эскеһе килгәс, кәмәнән һыу эсергә лә өйрәнде. Тәүлегенә бер тапҡыр бирелгән ҡатнаш аҙыҡты ла туйғансы ашаны, сөнки башҡалар йә ашай белмәй, йә һаман да инәләрен эҙләү менән мәшғүл.

Ҡураға кергәс, ул үҫеп, һимереп китте. Мал ҡараусыларҙың арба йәки санаһында ятҡан тоҡтарҙы сәйнәп тишеп һоло ашауҙан да, тоҡсайҙарын йыртып төшкөлөккә килтергән икмәк киҫәктәрен ашауҙан да тартынманы. Был ҡылығы өсөн уға сыбыртҡы ла эләкте, эттәр ҙә абалап өрөп ситкә ҡыуҙы. Тик ул ташламаны был ғәҙәтен. Кешеләр арба-саналарын ҡалдырып китеүе була, ул шунда уҡ килеп, тун йәки башҡа әйбер менән ҡапланған тоҡсайҙарҙы туҙҙыра ла башлай. Уның был ҡылығын яҡындағы мәктәп уҡыусылары белеп ҡалды. Тәнәфес булдымы, ҡулдарына икмәк тотҡан малайҙар Һарыҡай эргәһенә йүгерә. Һарыҡай сиратлап һәр береһенең ҡулынан икмәктәрен алып ашай.

Яҙ етеп, көндәр йылыныуға, малайҙар уны менә лә башланы. Ләкин ул икмәктәрен ашап бөтөрмәйенсә урынында тик тора. Ул арала дәрескә ҡыңғырау шылтырай. Малайҙар, кәртә аша болашмаҡ һикереп төшөп, мәктәпкә йүгерә. Көндәр оҙайҙы, йылынды. Йылғасыҡтар ағып, ер өҫтө ҡарҙан әрселде. Был ваҡытҡа инде ярайһы уҡ үҫеп утыҡҡан Һарыҡай малайҙар телендә Ҡола тайға әйләнде.

Ялыҡтылар, бик ялыҡтылар бер төрлө кәртә тормошонан барлыҡ тайҙар. Күңелдәре йылылыҡтан, еүешлектән бүртеп ҡыҙарған бөрөлө ҡайын урманына, тауҙар һәм яландар ҡосағына тартыла ине.

Бер көндө уларҙы кәртә эсенән ҡыуып сығарҙылар ҙа ҡырға, көтөүгә, алып барып ҡуштылар. Ҡыш буйына ҡар ҡаҙып тамаҡ туйҙырып сыҡҡан бейәләрябыҡҡан, ял-ҡойроҡтары һирәкләнгән, ҡыҫҡарған, эстәре лә ярайһы уҡ һәлберәп төшкән. Ҡайһы бер бейә янында сибек кенә, елгә бәүелеп торғандай бик йәш ҡолонсаҡтар ҙа күренә. Әммә инәләре бер тайҙы ла таныманы тиерлек. Ара-тирә тайҙар яғына ҡарап уҡранып ҡына ҡуйҙылар. Ҡайһы берәүҙәре инәләрен тапҡан һымаҡ булһа ла, тегеләре имергә яҡын ебәрмәне. Бер-береһенә ят булып өлгөргәйне улар алты ай эсендә. Ҡараҡай менән Һарыҡай кәртә эсендә лә, ашағанда ла бер-береһе менән йәнәшәрәк торҙо. Бына хәҙер ҙә, Ҡараҡай инәһен эҙләп тапҡас, һары тай улар янына килде. Әммә уларҙың икеһен дә Ҡара бейә ҡабул итмәне, хатта тибергә артын борғас, тайҙар ситкә китеп торҙо. Барлыҡ тайҙарҙы ла шул яҙмыш көттө. Хәҙер улар инәләренә һырыҡмай, үҙҙәре айырымланыбыраҡ, бергәрәк йөрөйҙәр. Ҡонандар ҙа был йәш бейә тайҙарҙы иғтибарға алмай. Һары тай янында һәр саҡ Ҡараҡай йөрөнө. Йәнәш йөрөп үлән ашанылар, һыу эстеләр, бер-береһенең бетен ҡараштылар.

Яҙ үтеп, һутлы үлән менән туҡланып, тамам утығып алған Һарыҡай тағы ла

үҫеп, оҙонаяа биреп, киң түшле ҡола тайға әйләнде. Көтөүҙә лә нисектер үҙ аллы булып китте. Һәр саҡ көтөү алдынан йөрөй. Ишмөхәмәт ҡарт ярҙамсылары менән көтөүҙе икенсе урынға ҡыуып күсергәндә, юлда осраған һаҙлыҡҡа ла, батҡыл үткәүелгә лә иң алда Ҡола тай керә. Уның артынан башҡалар эйәрә. Лидер атай ҙа уны алдан барыуы өсөн ҡайырып бармай, таламай ҙа. Бындай хәлдә күреп, уға башҡа тайҙар ылыҡты. Бигерәк тә Ҡола тайға һылыу ерән бейә яҡын йөрөнө. Ҡараҡай ҙа йыраҡ китмәне.

Күгәүен-серәкәйҙәре бер аҙ бимазалаһа ла, йәй ҙә үтеп китте. Бәхеттәренә, быйыл ҡар кисәү төшһә лә, былтырғы кеүек бер юлы ҡалын булып яуманы. Тояҡ бейеклегендәй ҙә булманы ул. Шуға ла әлегә тибендең ни икәнен дә белмәгән тайҙар, йомшаҡ ҡарҙы бәләкәй морондары менән этеп, епшек, йомшаҡ үләнде һайламайынса, йәш, ослo тырма тештәре менән иҙеп йоталар. Көр, йәш тайҙар тиҙ туялар, унан һуң ялан тултырып, ҡойроҡтарын күтәреп, уйнаҡлашып сабышып йөрөйҙәр. Тағы ла ҡар яуҙы. Тәбиғәт, был мәхлүктәрҙе тамам тибен тибергә өйрәтәйем тип, тағы ла ҡыҫҡа ойоҡ ҡунысы бейеклегендә генә ҡар яуҙырҙы. Морон менән генә этәреп үлән ашап булмағас, улар тояҡтары менән ҡарҙы артҡа туҙҙырып туҡлана башланы.

Төрлө михнәттәр күреп, һыуыҡҡа, аслыҡҡа түҙеп, йәй булһа иркен, хөр, туҡ тормошто ла кисереп, тағы ла ике ҡыш үтте. Ҡола тай хәҙер өсөнсө йылғы ҡола тай түгел. Хәҙер ул – Ҡола ҡонан! Яҙын өсө тулып, дүртенсе йәшкә сыҡты. Ҙурыраҡ булһа ла, ҡаҡ башлы, тороҡло, мундаһы бейек, көслө тибенлекле, ыштанлы ҡаты тояҡлы, тулы яллы һәм ҡойроҡло йәш айғырға әйләнде.

Яландарҙа ҡар бөтөп, умырзаялар ҡарайып кибер ваҡыт еткәйне. Өйөрҙө бер ергә йыйғас, еңел машинала ике кеше килеп төштө. Ишмөхәмәт ҡарт менән берлектә бик ентекләп бөтә өйөрҙө ҡарап сыҡтылар. Ҡар күп ҡышта ла тибенде еңел сыҡҡан, әле булһа ла көр Ҡола ҡонанға айырыуса иғтибар иттеләр. Ике-өс көндән дүрт-биш ҡонанды, бер нисә байталды ат һарайына алып ҡайттылар ҙа, нуҡта кейҙереп, һәр береһен айырым тораҡҡа ҡуйҙылар. Көн һайын ҡонандарҙы берәмләп йә икешәрләп ҡайҙалыр алып китә торҙолар. Сират Ҡола ҡонанға ла етте. Оҙонса битле йәш кеше уны башынан һыйпап алып сыҡты ла егеүле атҡа йәнәш бәйләп ҡуйҙы. Ҡараҡай менән ерән байталды ла сығарып, икенсе атҡа бәйләнеләр. Әллә ни йыраҡ та барманылар кеүек, әммә егеүле аттар тирләп өлгөрҙө. Йылға буйында ултырған ауылға еткәс, тағы ла ат һарайына бергә ҡуйҙылар. Ашаттылар, эсерҙеләр, әммә йылға буйында йөрөгән аттар янына ебәрмәнеләр. Ҡараҡайға ла, Ерәнсәйгә лә бик эйәләшеп китте Ҡола ҡонан. Бигерәк тә икеһен дә тороҡтороп алғас, байталдар ҙа бер аҙым да унан ҡалмаҫ булдылар. Ҡола ҡонанды алып ҡайтҡан кеше, көнөнә ике тапҡыр килеп, уға тоҙ һибелгән икмәк йә шәкәр ҡаптырып китә. Тора-бара уның ашатыуына шул тиклем өйрәнде – килерен кәртә аша ҡарап торор булды.

Һуңғараҡ был ағайҙың килеүен ул ҡапҡа янына уҡ килеп көттө. Ағай уны башынан, ҡулбашынан ҡағып һөйҙө, еңел генә ҡайыш йүгән дә кейҙереп ҡуйҙы. Тиҙ өйрәнде Ҡола ҡонан Айҙарға. Кисә ағаһы ҙур киҫәк шәкәр, ике-өс телем икмәк алып килде лә, ҡапҡаны асып, тауға табан атланы. Шәкәр тәмләргә өйрәнгән Ҡола бының артынан эйәрҙе. Уларға ике байтал да ҡушылды. Тау үңерендә Айҙар Ҡолаға икмәк бирҙе, башына менеп еткәс, шәкәр ашатты. Бер аҙ тирә-йүнде күҙәткәс, улар дүртәүләп кире төштөләр. Кәртә эсендәге кәмәлә һоло көтә ине уларҙы.

Бер көндө уның арҡаһына эйәр һалып ҡуйҙылар. Уға ла еңел өйрәнде Ҡола ҡонан. Икенсе көндө таныш түгел кеше Ҡола ҡонандың йүгәненән тотоп торҙо, ә Айҙар, өҙәңгегә баҫып, арҡаһына менеп ултырҙы. Сәйер тойғо кисерҙе ул,

әммә насар уҡ түгел. Етәкләп киттеләр. Еңел генә атлап була икән. Әҙ генә бара биргәс, йәнәшәләренә икенсе һыбайлы килеп сыҡты ла, уға эйәреп үҙ аллы атланы ла китте Ҡола ҡонан. Көнө буйы тигәндәй йөрөнөләр. Тауҙарға ла менделәр, батҡыл һыуҙар аша ла сыҡтылар, юрттылар ҙа, саптылар ҙа. Сабышҡанда йәнәш килгән атты уҙып китергә ынтылды ла ынтылды Ҡонан. Әммә ауыҙлыҡты ҡаты тотто Айҙар. Ә ҡонан йәнәш килергә йә артта ҡалырға өйрәнмәгән. Һәр саҡ алдан сабырға ҡолон сағынан сыныҡҡан ул.

Тора-бара арбаға өйрәттеләр. Иң алда арбаға еңелерәк йөк һалһалар, һуңғы көндәрҙә ҡырҙан ауыр бүрәнәләр, утын ташыны. Йөк тарта алмай сигендәмәне. Күпме тейәһәләр, шунса тартып ҡайтты. Ҡайтҡас, башынан, яурындарынан һөйөп, Айҙар уға ҡалын телем икмәк һона. Һөйөүҙе, яратыуҙы татып үҫмәгән ҡонан өсөн рәхәт минуттар... Бигерәк тә ул хужаның бәләкәй ҡыҙын һәр саҡ көттө. Көнөнә ике тапҡыр, ҡайһы ваҡыт өс тапҡыр тоҙ һибелгән икмәк телеме бирә лә, башынан һыйпап, һөйөп оҙаҡ ҡына ҡарап тора. Йыш ҡына атаһы уны ҡонанға мендерә лә һыу эсерергә ебәрә. Был осраҡта улар тиҙ генә ҡайтмай. Йылға аръяғына сығып китәләр ҙә үҙән һәм яландар буйлап йөрөйҙәр. Оҙон, киң яланда, тауҙар араһына инеп киткән юл ситендә ҙур таш ята ине. Шул таш янына етә лә аяҡтары менән ҡонанға ҡағып ебәрә. Китә ҡонан осоп! Еңел генә ине йыраҡҡа ла сабыу Ҡола өсөн, бик еңел. Әйтерһең дә, икеһе бер булып анау тау өҫтөнән ҡаршы йөҙгән аҡ болоттарға табан осалар, тулы мәғәнәһе менән бергә осалар. Йомшаҡ ел битенә һуғылып, ҡыҙыҡайҙың сәстәрен туҙҙыра, күҙҙәренән бөрсөк-бөрсөк йәш сығара.

Ҡонанға алға ынтылыу шул тиклем еңел, хатта ҡыҙыҡайҙың аяғынан һурылып сығып килә. Урманға яҡынлай башлаһалар, ҡыҙыҡай уны тартып туҡтата башлай. Тыңлаусан ҡонан ййлай, унан атлауға күсә. Киргә атлап ҡына ҡайталар.

Көн һайын шулай ҡабатланды. Әммә атаһы Гөлсөмгә тик бер генә шелтә әйтте:

– Һыу эсергәс, сабырға ярамай, ҡыҙым. Сабыр булһаң, йылға аша сыҡҡанда өс-дүрт уртламдан артыҡ эсермә. Йөрөтөп, һыуындырып, кире ҡайтҡанда ғына эсер, әгәр тирләмәһә. Тирләгән булһа, тиреһе ҡатҡансы көтөргә, бәйләп ҡуйырға кәрәк, – тине.

Гөлсөмдөң атаһын йәш малдарҙы көтөү эшенә күсерҙеләр. Ул көндө ваҡытлыса ғына атаһын алмаштырырға Гөлсөм барғайны. Ҡонандың өҫтөндә ултырған килеш, ете-һигеҙ малайҙың менгән аттарын уйнатып, юл буйлап үтеп киткәнен күрҙе. Уйланып йөрөп, онотто ҡыҙыҡай уларҙы. Көтмәгәндә башмаҡтар араһында үлән утлап йөрөгән Ҡонан алға ынтылды. Аты өҫтөнән йығылып осоп төшөп барғанда, юл буйлап ҡыйҡыулап болашмаҡ сабышып, ауыл яғына үтеп барған малайҙарҙы абайлап ҡалды.

Ергә төшөп аяғына баҫҡанда, Ҡола ҡонан аттар араһында алға елә ине. Икеөс сәғәт үтеүгә, атаһы Ҡоланы етәкләп көтөүгә килде.

– Бөтә аттарҙы ла күҙ күреме тигәндәй ергә ҡалдырып, һыбайлыһыҙ үҙе алдан килеп керҙе. Беҙ буласаҡ һабантуйға йүгерек аттар һайлай инек. Ваҡытлыса беҙгә Ҡола ҡонандан айырылырға тура килә, уны һабантуйға әҙерләргә алалар, – тине.

***

Ҡола ҡонанды һабантуйға Айҙар үҙе әҙерләне. «Әҙерләне» тип, боронғо ата-олатайҙар ҡулланған алымдарҙы белмәй ине. Әммә төп шарт: туйҙырғансы таҙа һоло ашатыу, йөрөтөү, үҫтерә килеп төрлө йыраҡлыҡҡа сабыу күнекмәләрен

башҡарҙы. Ҡатыны риза булмау сәбәпле, Айҙар ҡыҙын Ҡола ҡонанға мендереп һабантуйҙа саптыра алманы. Бик тә, бик тә һабантуйҙа сапҡыһы килә сая, үҙ һүҙле ҡыҙҙың. Шуға күрә лә Гөлсөм үрге урамда йәшәгән Шамил бабайға килде лә ул әҙерләгән туры атҡа менеп сабырға рөхсәт һораны. Риза булды Шамил бабай, тик атаһынан ризалыҡ һораны. Атаһының ризалығын белә Гөлсөм, тик инәһенә әйтергә ҡушманы.

Һабантуй яланы гөж килә. Һәр ерҙә ҡаҙандар эленгән, арбалар, еңел машиналар, төрлө-төрлө төҫлө күлдәк кейгән кешеләр ҡайынлыҡ менән уратып алынған яланға матурлыҡ, биҙәктәр өҫтәй.

Һабантуй бәйгеһенә ике тиҫтәләй ат әҙерләнгән. Барыһы ла көр, эстәре бурҙай эттеке кеүек тартылып, үҙҙәре суртан кеүек йылғыр күренәләр. Бына бер ваҡыт барлыҡ аттарҙы ла урманлыҡ һәм яландар аша үткән юл менән алып киттеләр. Башҡа аттар өс-дүрт йыл рәттән бындай ярыштарҙа ҡатнашҡас, алдан ярһып, тыпырсынып, баштарын ташлап, гөрөшөп барҙылар. Тик Ҡола ҡонан ғына әлегә буласаҡ ярышты аңлап етмәй ине. Шуға ла ул тыныс ҡына атлап барҙы. Тейешле урынға килеп еткәс, килгән юлға бороп теҙҙеләр ҙә ҡысҡырып оран һалдылар.

Ҙур быуаны ҡапыл йырып аҡҡан көслө һыу шикелле, алға ынтылды арғымаҡтар. Малайҙарҙың дәртле ҡысҡырыуы, хатта үҙ-ара ҡамсы менән һелтәнеүе һүлпән, бошмаҫ ҡына саба башлаған Ҡола ҡонанға сәм өҫтәне. Һуҙылғандан-һуҙылды Ҡола. Дағалы тояҡтарҙан осҡан таш, батҡаҡ киҫәктәре башына, түшенә ярайһы уҡ ныҡ бәрелеүҙән янтайып, юл ситенән саба башланы. Берәмләп, икешәр-өсәрен уҙа-уҙа алға икенсе булып килеп сыҡты Ҡола. Унан егерме-утыҙ аҙым алда итәктәре елберләп, туры ҡонанға атланған Гөлсөм бара ине. Ҡонанды менгән Юлай, Гөлсөмдөң беренсе булып килеүенә көнләшеп, теҙгенен бушатты. Туры атҡа еткәндән-етте Ҡола. Бына тигеҙләштеләр. Юлай ҙа, Гөлсөм дә Туры аттың йүгереклеген белә. Бер ваҡытта ла һабантуйҙарҙа сабышмаған Ҡоланың Туры атҡа етеп йәнәшләүе икеһе өсөн дә көтөлмәгән хәл булды. Йәнәш сабырға өйрәнмәгән Ҡола һурылып алға сыҡты. Китте, китте барыһын да артта ҡалдырып. Тамам яҙылып, үҙ теләгенә кирелеп саба ғына башлаған ине, юлға арҡыры аҡ балсыҡ һибелгән һыҙыҡты үттеләр. Ярыш бөткәнен һиҙеп, үҙенән-үҙе туҡтаны Ҡола. Бер ни тиклем атлап барғандан һуң, йәш үләнгә тартылды. Шул саҡта ғына берәм-берәм башҡа аттар һабантуй майҙаны уртаһына керә башланы.

Ул арала йүгерешеп килеп, Ҡоланың өҫтөндәге малайҙы төшөрөп, һауаға сөйә башланылар. Тик береһе лә Ҡоланы һөймәне, ул тыныс ҡына йәшел үлән сүпләне. Һуңғараҡ хужаһы Айҙар килеп етте. Үҙ аллы йөрөгән Ҡоланы тотоп яратты, һыйпаны, ике-өс телем икмәк, күмек-күмек шәкәр ҡаптырҙы ла комиссия торған ергә йүнәлде. Ҡола ҡонан уның артынан эйәрҙе.

Ике-өс көн үтеүгә алғы аяҡтары ҡыҫҡа, кәүҙәһе оҙон, талтайыңҡырап баҫҡан көслө тибенгеле, бейек булмаған Туры йүгерек менән Ҡола ҡонанды күршеләге ҙур хужалыҡ һабантуйына алып килделәр. Бәхәсләштеләр-бәхәсләштеләр ҙә Туры йүгеректе – алты саҡрымға, ә Ҡола ҡонанды ун саҡрымға саптырырға яҙҙылар. Шамил бабай менән Айҙар теләктәренә ирештеләр. Ҡыҫҡараҡ араға шәп саба торған Турыны алты саҡрымға ебәреү – һабантуйҙа беренсе урындарға дәғүә итеү ине. Туры ат та, Ҡола ҡонан да өмөттө тормошҡа ашырҙылар. Икеһе лә беренсе булып, икенсе атты йөҙ ҡуһайҙан артыҡ ҡалдырып, һабантуй һыҙығына керҙеләр. Үҙҙәренең аттары уҙа алмауына, ахыры, – һабантуй халҡы дәррәү ҡысҡырманы, нисектер тотанаҡлы ғына ҡаршы алдылар йүгеректәрҙе. Аттарға йөлдә, ә Гөлсөм менән Юлайға бүләк эләкмәне, дөрөҫөрәге, сит хужалыҡтан булған өсөн бирмәнеләр.

Туры йүгеректе арба артына, Ҡола ҡонанды төп аттың йәнәшәһенә бәйләп, Юлай менән Гөлсөмдө ултыртып, ҡайтыр юлға сыҡтылар Шамил бабай менән Айҙар. Юлда үҙәнлектән йәшел үлән сабып, арбаға һалдылар. Тау үңеренә мен-гәс, Шамил ҡарт атын ситкә бороп, ҡайынға бәйләне лә, ергә, үлән өҫтөнә, бүлек йәйеп ултырҙылар. Бөкөлө бәләкәй генә ағас сапсаҡтан балауыҙҙа әсетелгән әсе бал икеһенең дә телен тиҙ асты. Балаларҙы маҡтанылар, мәхрүм булмаһындар тип, унар һум аҡса бирҙеләр. Бынан тыш, Айҙар ҡыҙына – күлдәк, ә Юлайға төлкө ҡапҡаны бүләк итергә вәғәҙәләне.

Балалар өсөн бынан да ҙур дан-шөһрәт булмағандай тойолдо. Беренсенән, һабантуйҙа бүләк ала алмаһалар ҙа, барыбер уларҙы бөтә ғәм данлап һөйләйә-сәк, бигерәк тә Гөлсөмдө маҡтаясаҡтар. Был үҙе ҙур баһа ине. Икенсенән, атайым мин теләгән күлдәкте, үҙем һайлағанды, алып бирәсәк, тип һөйөндө ул. Үҫә килә, Юлай ҡыш көндәре таллыҡҡа ҡуянға тоҙаҡ ҡороп, көндәр буйы уның килеп эләгерен һағалап ултыра ине. Сөнки көҙ тәүге ҡарҙан һуң уның тоҙаҡтағы ҡуянын төлкө ашап киткеләй. Бына, исмаһам, хәҙер ул күрмәгәнен күрһәтер ул төлкөгә! Юлайҙың ҡапҡаны буласаҡ! Ура!

Әсе бал балаларҙы ла, аттарҙы ла ныҡ маҡтатты, һөйҙөрҙө. Шулай ҙа районда буласаҡ һабантуйға аттарҙы ныҡ әҙерләргә һүҙ ҡуйыштылар.

Шул көндө кис Турыҡай менән Ҡола ҡонандың уҙып килеүе тураһында хужа-лыҡ етәкселәре лә белде. Хәҙер инде йүгеректәрҙе бергә ҡуйып, ярата башланы-лар. Балалар дәрестән сыҡҡансы, иртә таңдан ҡояш күтәрелгәнгә тиклем, аттар-ҙы Айҙар үҙе йөрөтә. Сабыштырыу оҙонлоғон күнекмәләр үткәргәндә Шамил бабай билдәләне. Һолоно тик йыуып килтереп, ҡыҙҙырып ҡына ашаттылар. Сикләмәнеләр аҙыҡты. Сифатлы ҡоро бесән дә алдарынан өҙөлмәне. Шәкәр ҙә, ветеринар биргән дарыу өҫтәмәләр ҙә ашаттылар. Балыҡтай һимереп, тағы ла йомролана биреп, эстәре тартылды.

Әлегә тиклем дағаһыҙ сапҡан йүгеректәргә тар, еңел генә даға эшләп, уның аҫтына киндер тоҡтоң септәһен һалып дағаланылар. Был алым, әгәр аттарға таш юлдан сабырға тура килһә, аяҡ һөйәктәре яңғырамаһын өсөн ине. Боронғо алымды ҡулланды Шамил бабай. Ҡыш булһа, тояҡ менән даға араһына махсус әҙерләнгән ҡаты йоҡа кейеҙ, ә йәй көнө киндер туҡыма һалып дағалаталар ине, тип хәтерләне ул.

Туры йүгерек менән Ҡола ҡонанды район һабантуйына Шамил бабайҙың йыуан саптар атының арбаһына бәйләп алып киттеләр. Ашыҡманылар, таш юлға сыҡмай, ситләп, һанама юлдарҙан кис етә башлағас барып еттеләр һабан-туй яланына.

Һабантуй яланының сите тирмәләр, тышап ебәрелгән аттар, уларҙың бер туҡ-тауһыҙ бышҡырыуы менән тулған. Ҡола ҡонандың уҫал, тешләшкәк булып, башҡа аттарҙы һолоға ебәрмәүен белгән Айҙар, йүгеректәрен айырым-айырым бәйләп, туйҙырғансы ашатты. Төнө буйы һаҡланы, күҙен дә йомманы. Таң менән самалап һыу эсерҙе. Юлай менән Гөлсөмдө уятып, аттарҙы йөрөтөргә, еңеләйтергә сығарҙы. Ике сәғәттәй сапмай ғына йөрөп килгән аттар еңеләйеп, тәндәре яҙылып китте. Шул осорҙан ғүмеренең ҡалған өлөшөн ентекләп хәтер-ләй, буғай, Ҡола.

Тәүләп шул тиклем күп йыйылған кешеләрҙе, әллә ниндәй ҡоролмаларҙы һәм үҙе кеүек нәҙек, һимеҙ, йомро бик күп аттарҙы күрҙе. Улар араһында бик оҙон аяҡлы, бейек, әллә ҡайҙан ситтән килтерелгәндәре лә бар ине. Ҡола ҡонан бында ниңә килгәнен хәҙер аңлай. Шул аттар менән ярышырға килтергән икән уны хужаһы Айҙар. Буласаҡ ярыш уны ла ярһыта башланы. Шул ярһыу аттар

менән теҙелеп торорға ла, ҡулындағы әләмле кешенең ҡысҡырып ҡул һелтәүе менән, алға осаһы...

Оҙаҡламай икеһен дә тештәренә ҡарап йәш айырмалыҡтарын һәм ярыш оҙонлоғон билдәләүсе кешеләр янына килтерҙеләр. Ҡысҡырып-ҡысҡырып бәхәсләште ағайҙар. Туры ат янында ла ҡулдарын һелтәй-һелтәй ниҙер ҡысҡырыштылар. Унан уларҙы биш-алты төркөмгә бүлделәр. Ҡола ҡонан менән Туры йүгерек икеһе ике төркөмдә булып сыҡты. Бына халыҡтың дөйөм ҡысҡырышыуы, әсе һыҙғырыуҙары аҫтында ярыш башланды. Башта теге оҙон аяҡлы аттар төркөм-төркөм булып ике, өс, хатта бер нисә йөҙ метрға ла сабыштылар. Ел кеүек нисек сабып сығып киттеләр, шул тиҙлектә килеп тә еттеләр.

Оҙон уҡ булмаған араға ҙур тиҙлек менән сапҡан ҡыҙыу Туры аттың төркөмө алты саҡрым аралыҡҡа бишенсе сиратта ярыш башланы. Уйнап торған Туры ат, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, шунда уҡ алға сыҡты. Ярыш сәмен белеп, аңлап, үҙен үҙе аямай сапты Туры. Береһен дә алға сығарманы. Барлыҡ көсөн баштан уҡ һалғанға күрә, ярыш бөтөү һыҙығына етмәҫтән алда ул һүлпәнәйә төштө, шулай ҙа бирешмәне, йән-фарман сабып килеп керҙе. Ауыҙынан аҡ күбек, эсенән тир аға ине уның. Алты саҡрымға беренселекте алды Туры ат.

Сират Ҡола төркөмөнә етте. Аралыҡ ун ике саҡрым булып, бөтә һабантуй халҡы өсөн иң ҙур күренешкә әйләнде. Бәйгелә иң оҙон аралыҡҡа саба торған аттар янына әллә бөтә һабантуй халҡы йыйылды...

Егермеләгән йүгеректең һәр береһен ҡарайҙар, фотоға төшөрәләр, бәхәс итәләр, усҡа-ус һуғышалар. Тимәк, отош уйнайҙар. Был тиклем һайланмыш йүгеректәр менән ярышҡаны юҡ әлегә тиклем Ҡола ҡонандың. Барлыҡ райондан һайланып килгән йүгеректәр бит. Улай ғына ла түгел, сит, йыраҡ ерҙәрҙән – Силәбе, Троицк, хатта Ырымбур яҡтарынан да килгән икән йүгеректәр. Анау оҙон ботлолар бөтәһе лә шул яҡтарҙан, буғай. Һәр береһе уҙып килеүенә шул тиклем ышана – түҙә алмай уйнап торалар, уйнап. Кешнәйҙәр, арт аяҡтарына баҫалар. Барлыҡ халыҡ хайран уларға. Был тиклем уйнап торған аттар уҙмай, анау тик кенә, түҙем генә торғандар уҙмаҫ инде... Эй маҡтанылар, эй хупланылар ят аттарҙы. Тағы ла шуны хәтерләне Ҡола ҡонан: тәүләп шул һабантуйҙа ул оҙонға түгел, ә түңәрәкләп сапты.

Бына Ҡола ҡонандың төркөмөн ярыш башлар өсөн иғлан иттеләр ҙә шунда уҡ ҡысҡырып, ҡыҙыл сепрәк һелтәп тә ебәрҙеләр. Инде алты-ете йыл төрлө ярыштарҙа тик түңәрәкләп кенә сапҡан оҙон боттар шунда уҡ алға йомолдо. Шулай тоҡтан ҡойолған һоло кеүек һуҙылды бәйгеселәр. Ҡола ҡонан үҙен белә. Ниндәй генә аралыҡҡа йүгерһә лә, ниндәй генә тиҙлек менән башлаған, шул тиҙлек менән ярышты тамамланы әлегә тиклем. Бер урауҙы үтеүгә йүгеректәр оҙонға һуҙылған ине. Алда оҙон боттар саң туҙҙыра, күрерлек тә, етерлек тә түгел кеүек. Икенсе урауҙа уларҙың саң томаны асылғандай булды. Әллә ни күп алда ла түгелдәр икән дә. Ҡола ҡонандың артынан башҡа тыныс аттар килә. Өсөнсө урауға Ҡола үҙенән алда барған тәүге оҙон ботҡа йәнәшәләне. Уны еңел генә үтеп киткәндә, оҙондоң аяҡтары тарбайып, кәүҙәһенән ян-яҡҡа һелтәнгәнен генә күрҙе ул. Өсөнсө урауҙы яртылағанда тағы ла икәүһен үтте. Ә уны тамамлап, дүртенсеһен башлар алдынан оҙондар тамам талып, аяҡтары кәүҙәләренән айырым һелтәнгәндәй хәрәкәттәр яһап, артта ҡалдылар. Ҡоланың артынан килгән ялбырҙар, бурылдар, һоролар, бергә өйөрөлгәндәй, сәмле ярыша. Ҡола ҡонан хәҙер иркенлеккә сыҡты. Алда ул ғына, тик ул ғына.

Үҙ ғәҙәте буйынса сапты Ҡола. Тиҙлекте арттырманы ла, кәметмәне лә. Өҫтөндәге Юлай Ҡоланы төшөнөп бөткән. Теҙгенде тартмай ҙа, әлегә ҡабаландырмай ҙа. Ҡола ҡонан, дағалары аҫтынан таштарҙы, балсыҡтарҙы бәрә-бәрә,

дүртенсе, бишенсе урауҙы уҙып, һуңғыһын башланы. Юл ситендә оҙон аяҡтарҙың икеһенең өнтәйҙәренән һаҡалары тайып сығып, тора алмай аунап яталар. Ҡола ҡонан уларҙың ни өсөн ятыуын аңламай. Бына етеп килә ул һыҙыҡҡа. Хәҙер бер кем дә ҡайһы ат уҙасағы тураһында бәхәс итмәй. Ҡола ҡонандың артынан йөҙ илле ҡуһай самаһы ерҙә уның ерҙәштәре: уның кеүек үк ҡолалар, бурылдар, ҡобалар, күктәр һәм башҡалар килә. Килә улар, килә! Оҙонға сабып, ата-олаталары кеүек түҙемле, инсафлы, ҡылыҡтарын артыҡ күрһәтеп бармаусы, тыныс ҡына үҙ яҙмыштарын ғәмәлгә ашырыусы ерҙәштәре килә...

Тура һыҙатҡа сыҡҡас, Ҡола ҡонан үҙенән-үҙе енләнде. Ниңә икәнен үҙе лә белмәй. Шул тиклем тиҙлек менән алға ынтылды – өҫтөндәге Юлай саҡ-саҡ һыпырылып, артҡа шыуып осоп төшөп ҡалманы. Йөҙәрләгән кешеләрҙең ҡул сабыуҙары, хуплап ҡысҡырышыуы аҫтында аҡ һыҙыҡты үтеп китте лә ғәҙәттәгесә тып туҡтаманы. Оҙон аяҡтарға үсен ҡандырырҙай, эске ярһыуы менән туҡтарға теләмәйенсә Ҡола тағы йөҙ илле ҡуһай самаһы сапты. Тағы ла, тағы ла ун – ун биш урау сабыр ине. Һиҙә ине үҙ көсөн! Ҡоланың ҡеүәтен, ҡарыуын белһендәр! Биҙәүле йүгән кейҙерелгән, еңел күн эйәр һалынған, бәкәлдәре аҡҡа бәйләнгән, текә һикереп сапҡан был оҙон аяҡлыларҙы күккә күтәреп маҡтауҙары, дәрәжәле исемдәр биреүҙәре аптырата ине ҡонанды. Минән ни ерҙәре менән артыҡ һуң ул йоҡа яллы, оҙон ботлолар! Арбаға егелеп, бүрәнә ташый алалармы? Тәүлектәр буйы ашамай-эсмәй эйәр аҫтында йөҙәр саҡрым ер үтәләрме? Ғәләмгә күрһәтәм тип, ер тырнап, үрәпсеп, һикереп тормаһа ла, бөгөнгө сабышыуҙа үҙ ҡеүәтенә, ғәйрәте барлығына, тыны иркенлегенә инанды. Оҙон ботлоларҙан сабырлы, күп тапҡыр түҙемле һәм ғәйрәтле ерҙәштәре менән осрашты ул бөгөнгөнән бик күп, бик күп йылдарҙан һуң да.

Малайы өҫтөнән төшкәс, яй, ашыҡмай ғына атлап, етәкләнеп кире килде. Ғәҙәттәгесә, Юлайҙы һауаға сөйҙөләр. Башҡаһын Ҡола  ныҡ уҡ хәтерләмәй. Әммә... Эскеһе, бик эскеһе килә ине. Тағы ла йыуан саптар ат янына килтереп бәйләнеләр ҙә оноттолар ҡонанды. Эх, һыу эсәһе ине! Арба янында ултырған ағайҙар кискә тиклем йырлаштылар. Ҡояш йыраҡтағы армытҡа – Әбәрәшбаш артындағы Ирәмәлгә төкәлгәс, ниндәйҙер күнәктән ҡалпағына ҡойоп, Айҙар Ҡола ҡонанға ла, Туры йүгереккә лә берәр ҡалпаҡ һыу эсерҙе. Ҡалпаҡтан тир һәм сөсө кеше еҫе килһә лә, һыуға ул тәм ныҡ уҡ бирелмәгән. Өҫтәүенә, шул тиклем сарсаны Ҡола ҡонан, шул тиклем... Эй ул һыуҙың тәме, эй ул һыуҙың таты! Элек был тиклем тәмле һыу эскәне булманы, буғай!

Ҡола ҡонандың даны бөтә районға ғына түгел, күрше өлкәләргә лә таралды. Аптырап та, һоҡланып та һөйләнеләр уның тураһында. Ат һатып аҡса эшләгән кешеләр өсөн дә был хәбәр бик урынлы булды. Күрше өлкәләге ат ҡараҡтары шунда уҡ Ҡола ҡонандың көйҙәрелгәнме-юҡмы икәнен белер өсөн кеше яллаһылар. Әле айғыр малы булыуын белгәс, шунда уҡ, һис кисекмәҫтән, уны урлау тураһында төрлө фараздар ҡора башланылар. Бик күп, бик күп аҡса эшләп буласағын иҫәпләнеләр. Урлауы ҡыйынлыҡ тыуҙырмаҫ, тип уйланы бурҙар. Әлбиттә, ун ике саҡрымға бөтә аттарҙы уҙыуы, бигерәк тә саф ҡанлы, махсус тотолған йүгеректәрҙе лә әллә ҡайҙа ҡалдырыуы – йүгерек аттар үрсетеү өсөн ҙур табыш. Тик махсус ат һарайҙарының тоҡомлолоғон билдәләүсе ҡағыҙ булғанда ғына ҡиммәт хаҡҡа алырҙары хәүефкә һалды һалыуын бурҙарҙы. Ә Ҡола ҡонандың ундай бер ҡағыҙы ла юҡ. Булһа ла, уны алып булмай... Тимәк, был юл ябыҡ. Исеме сыҡҡан атты был тирәлә һатһаң – барыбер табасаҡтар. Бер юл ҡала: ҡаҙаҡ далаларына һатыу. Ҡиммәт хаҡҡа һатыр өсөн йүгеректең бик йүгерек булыуы тураһында иҫбаты кәрәк. Нишләргә? Уның алдан сабып килеүе төшөрөлгән фотография ла юҡ. Шулай баш ватты бурҙар.

Ә Ҡола ҡонан ауылында ваҡиғалар ҡәҙимге, үҙ ағымы менән барҙы. Һабантуй яланында тағы ла ҡунырға мәжбүр булдылар, ҡараңғылыҡ ҡуйырҙы. Иртәгәһен таң ҡыйылыу менән юлға сыҡтылар. Уларҙың ҡайтып килеүен күргән кешеләр йә юлға сығып, йә Айҙарҙың өйөнә үк килеп ҡул биреп ҡотланылар. Айҙар атта сапҡан балаларға бирелгән бүләктәрҙе, иң мөһиме, Ҡолаға бирелгән суҡлап, еҙләп тегелгән егеү монаяттарын, Турыға бирелгән күнле эйәрҙе күрһәтте.

Ике-өс көн үтеүгә аттар тураһында хәбәрҙәр баҫыла төштө. Аҙна-ун көн үтеүгә онотолдо кеүек Ҡола ҡонандың даны. Уны, ниңәлер, йыш ҡына йөгән ҡыйыш тейәп йөрөгән Ғиниәтуллаға бирҙеләр. Ғиниәтулла Айҙарға йыш ҡына килеп йөрөгәс, Ҡонан уны ныҡ уҡ ятһынманы. Яҙмышына буйһонғандай, етәккә эйәрҙе. Ғиниәтулла алып ҡайтты ла, йылға буйына төшөрөп, башҡа аттар янына тышаны. Йомшаҡ, тығыҙ үләнде гертелдәтеп йота-йота асығыу танһығын ҡандырып бара ине. Ҡояш тауҙар артына төшөп китергә лә бер ғауым ваҡыт үтте. Уйһыулыҡҡа шыйыҡ ҡына томан ята башланы. Ҡолон ваҡытынан тирә-йүнде ҡарап йән эйәләрен һиҙемләргә өйрәнгән Ҡонан ағаслыҡтар араһынан килеп сығып, аттарҙы өйрәнгәндәй, һәр береһен ҡарап йөрөгән кешене шәйләне. Яйлап ул Ҡола ҡонан янына килде. Юғалған әйберен тапҡандай, Ҡоланың янына сығып ҡараны ла, ашауынан туҡтап, сит еҫле был кешегә нимә кәрәклеген аңлай алмай торған Ҡонанға тимер ауыҙлыҡҡа нәҙек бау бәйләп, йүгәнде кейҙереп тә ҡуйҙы. Унан һуң тышауын сисергә тотондо. Тышауҙың төйөнөн сисә алмай оҙаҡ мәшәҡәтләнде, ахырҙа бысағын сығарып ҡырҡырға тотондо. Ят кешенең бимазалауына асыуы килеп торған Ҡола уның бишмәтенең елкә яғаһынан тешләп ырғытып ебәрҙе лә һикерә-һикерә ҡасып китте. Тағы ла бер нисә һикереүгә аяҡтары ысҡынды. Аяғына баҫҡан ят кеше, Ҡолаға уңдан да, һулдан да яҡынлашып, һәлберәп торған теҙгендән тоторға маташты. Әммә Ҡола һәр саҡ уға артын ҡуйҙы. Тешләшергә лә, тибешергә лә ярайһы уҡ әүәҫ Ҡола ят кешенең сираттағы һөжүменән һуң тиҙ генә боролдо ла ҡуш аяҡлап бик ныҡ тондорҙо. Баһышыусы өс-дүрт метрҙай осоп барып төштө лә ҡыбырламай ятты. Иртә менән һәр хужа үҙ атын алырға килгәндә, ҡаты яра алған, иҫенә саҡ-саҡ килгән ят кешене табып, ауылға алып ҡайттылар. Ҡайҙан, ни өсөн килеүен, кем туҡмауын бирәүгә лә әйтә алманы теге. Ауыл бригадиры «Тиҙ ярҙам» машинаһы саҡырып оҙатты. Шулай ҙа зирәктәр был ят кешенең ҡайҙан һәм ни өсөн килеүен фаразлап әйтеп бирҙеләр, тик нисек яра алыуы сәбәбен генә белмәнеләр. Һуңғараҡ фараз раҫланды, хатта яра алыу сәбәбе лә.

Шул уҡ көн арбаһына эйәр, балта, һәнәк, салғы, әллә ниндәй тоҡтар, кейемдәр һ.б. әйберҙәр тейәп, Ҡола ҡонанды егеп юлға сыҡты Ғиниәтулла. Ҡонан ҡайһы яҡҡа, ни өсөн барғанын белмәй ине. Ауылдан тура тауҙар яғына киткән юл менән тилбер генә юртып сығып китһәләр ҙә, остағы өй күҙҙән юғалыу менән Ғиниәтулла Ҡонанды бөтөнләйгә ситкә борҙо. Ун ике саҡрым самаһында ятҡан ауылға барҙылар. Оҙон магазин янында оҙаҡ ҡына торҙолар ҙа бер ят кеше менән, ҡонанды ҡапҡаға бәйләп, кереп юғалдылар. Торҙо ла торҙо ҡонан. Ялыҡты. Тартылып та ҡараны, асыҡты, һыуһаны. Тәҙрә аша ҡыҙыу-ҡыҙыу һөйләшкән, хатта йырға оҡшаған ауаздар ишетелә.

Хужа төш ауышҡас ҡына алпан-толпан баҫып килеп сыҡты. Арбаға ултырғас, былай ҙа шәп юртып барған ҡонанды сыбыртҡыһы менән ярҙы. Тәгәрмәстәр ергә әллә тейә, әллә теймәй инде. Саҡ ултыра Ғиниәтулла арбала. Шулай ҙа ул ҡонанды ҡалын урман менән ҡапланған тауҙарға барған юлға борҙо. Елеп барған килеш киң генә йылғаны ла һыу сәсрәтеп, туҡтамайынса сабып үтеп киттеләр. Эскеһе, бик эскеһе килә – эсермәне Ғиниәтулла ҡонанды. Йылғаны сыҡҡас, юл ҡайын урманы буйлап барҙы-барҙы ла яйлап тауға тартылды. Тау

оҙонайғандан-оҙоная килеп, текә-текә үрләүҙәре аша һаман да юғарыға күтәрелә. Ә юл шул үрләүҙәрҙе йә менә, йә төшкәндәй була ла тағы үргә үрмәләй. Тауға ла, түбәнһеүгә лә Ҡола арбаны һелкә-һелкә тартып юрта ла юрта. Ғиниәтулланың сыбыртҡы менән һуҡҡан ере осаһында күбеп сыҡһа ла, уға иғтибар итмәне. Иң мөһим ергә тиҙерәк етергә ине, һәм һис бер ат уны юлда уҙып китергә тейеш түгел. Оҙон, бик оҙон үрҙәр шундай уҡ оҙон ташлы, соҡорло түбән төшөү менән алмашынды. Урман йә ҡуйыра, йә асыҡ ерҙәр, хатта ялансыҡтар осрай. Ғиниәтулла арбала һис ни белмәй йоҡлай. Тауҙан төшөү менән күп һыулы ташлы кисеү осраны. Дилбегәләрҙең бушанғанын һиҙеп, һыу эсергә туҡтаны. Ағын һыу эсенә кереп үк китеп ынтылды, ләкин дуға сыңғаһына тартып бәйләнгән теҙген менән ыңғырсаҡ аша бәйләнгән һырттыҡ ауыҙын һыуға еткерергә ирек бирмәй ине. Төрлөсә ынтылды Ҡола ҡонан һыуға. Һыуҙың тәрән ерен эҙләп, уңлы-һуллы боролдо, ахырҙа һыуҙы бер туҡтауһыҙ сапсый башланы. Һыу сәсрәтеү менән генә һыуһын ҡанмай шул. Унан тубыҡланып эсәйем тип иңкәйһә лә, тартып бәйләнгән теҙген ирек бирмәне. Уңайын эҙләп тағы боролғайны, арба ҡыйшайып, иҫ белмәй йоҡлаған Ғиниәтулла батҡаҡлы һыуға ҡоланы. Үҙе генә түгел, тоҡсайҙары ла, буш тоғо ла. Ҡола ҡонанға ашарға бирелгән бер тоҡ һоло, шыйыҡ аҡ һыуға әүерелеп, Ғиниәтулланың эсенә стакандан ҡойолғайны.

Батҡаҡлы һыуға шап итеп барып төшкәс, ауыҙы, ҡолағына бысраҡ һыу кереп, сәсәй-сәсәй килеп торҙо Ғиниәтулла. Килеп торҙо ла бик йәмһеҙ һүҙҙәр менән һис ғәйебе юҡ Ҡолаға: “Тырр-р-р-р!” – тип ҡысҡырып ебәрҙе. Арба алдына төшөп, батҡаҡ һыуҙа ятҡан дилбегәне эйелеп алып, ауыҙлыҡлы Ҡоланың башын шул тиклем итеп тартты, бахырҡайҙың урты йыртылып, ауыртыуға түҙә алмай, арт аяҡтарына текә баҫты. Шул арала Ғиниәтулла сыбыртҡыһын һәрмәп алып, Ҡоланың арҡаһына ярҙы. Йән асыуы менән һикергән Ҡонан, ғәрлегенән, һыҙланыуҙан ярһып, юлмы-түгелме икәнлеген айырмай енләнеп, алға сапты.

– Эсерермен мин һиңә, эсермәй! – тип дилбегәне ике ҡуллап тотоп артҡа тарта ине Ғиниәтулла.

Шулай, үрҙе үр тимәй, батҡылды батҡыл тимәй, йән-фарман сабып, Ҡола ҡонанды аҡ күбеккә төшөрөп, ҡараңғы төшөүгә таналар бикләнгән кәртә янындағы ағас өйгә килеп туҡтаны Ғиниәтулла. Уны төш ваҡытынан бирле көткән Хәсән иҫерек алмашсыһын яҡшы һүҙ менән ҡаршы алманы.

– Дә, һинең менән эшләп булырмы икән? Килгән һайын иҫерек, килгән һайын ярты тәүлек һуңлап киләһең... Утыҙ саҡрым ергә хәҙер төндә нисек ҡайтайым мин?! – тип ҡысҡырынды. – Ҡара атты эшлектән сығарып ташланың, ҡаҡ һөйәккә ҡалдырҙың, хәҙер Йүгерек ҡолаға тотондоңмо? Кем биргән һуң һиңә уны ышанып?

Хәсәндең һүҙҙәренең яртыһын ишетте, яртыһын ишетмәне Ғиниәтулла. “Иртәгә ҡайтып ошаҡлар, төнгөгә лә сығарманы малды, тиер. Ҡайҙа, һуң булһа ла сығарайым”. – Кәртә ҡапҡаһын асты ла күбеккә батҡан ас ҡонанды эйәрләргә тотондо.

Йоҡоһо килһә лә, Хәсән янына инеп ятҡыһы килмәне, төнө буйы йоҡомһорап ат өҫтөндә йөрөнө. Бер уянып китеүенә таң атып, яҡтырғайны. Көтөү янда юҡ. Ҡыңғырау тауышын тыңлап-тыңлап ҡараны ла кәртәгә табан юртты. Малҡайҙар туйып, ял итергә кәртә янына һибелеп ятҡандар. Хәсәндән елдәр иҫкән – атын егеп күптән ҡайтып киткән. Иркен ҡалды Ғиниәтуллаға донъя. Ҡола ҡонанды ҡаҡ арбаға ныҡ итеп бәйләне лә, кереп, тәрән йоҡоға талды.

Әллә мөйөштәге сысҡан ҡыштырҙауына, әллә ҡоҙғондарҙың ғарҡылдауына уянып китте. Ҡояш ағастар башына килеп ҡунған. Кәртә янында бер малҡай ҙа

юҡ. Ҡола ҡонан ғына эсе эскә йәбешеп, ҡаҡ арбала һаман да бәйле тора. Ирендәре кибеп һыуһаны Ғиниәтулла. Биҙрәһен алып, шырлыҡ эсендәге шишмәлектән һыу килтерҙе. Биҙрәләге һыуҙың сайпылғанын ишетеп, Ҡола арлы-бирле тыпырсынды, уҡранып та ҡараны, тик уға иғтибар итмәне Ғиниәтулла. Сәй эсеп алғас, ҡонанды менеп таналарын эҙләргә китте. Киң урмандың иңенә сыға алмай эҙләнә торғас, көтөүҙең ҙур бер өлөшөнә тап булды. Ярай әле, араларында ҡыңғыраулыһы булды. Иҫәпләп-иҫәпләп ҡараны ла, ун биш-ун һигеҙ башты тултыра алмай ҡуйҙы. Хәсән уға: “Мал теүәл, иҫәплә, йөҙ ҙә егерме биш”, – тине шикелле. Әммә Ғиниәтулла ул һанды хәтерләмәй. “Әллә, йөҙ ҙә егерме, тине микән, – тип икеләнде. – Эй был баш! – тип үҙ башын әрләп ташланы эстән генә, – ни булһа ла булыр инде”. Кәртәгә килтереп, булған малды бикләне лә ут яҡты, тамаҡҡа йүнәтә башланы. Һуңғараҡ, иҫенә төшөп ҡалғандай, эйәрен һалып, Ҡола ҡонанды шырлыҡ ситенә сығарып, оҙон арҡан менән бәйләне. Икенсе тәүлек тигәндә тәүге ҡабымы ине ҡонандың.

Өй тирәһендәге үләнде малдар тапап-иҙеп, тиҙәкләп бөтөү сәбәпле, ни тиклем һайлаһа ла, тамаҡ туйҙыра алманы. Таң атыуға ла ул ас ине. Өҫтәүенә, һаман да һыу эсермәй. Төндә ул анау тауҙар араһында таналарҙың үкерешкәнен, ә береһенең йән асыуы менән ҡысҡырғанын ишетһә лә, Ғиниәтуллаға аңлата алманы.

Тәрән йоҡо менән йоҡлай алманы Ғиниәтулла үҙе. Күңеле һиҙә ине. Малдар теүәл түгеллегенә күңеле менән ныҒыраҡ ышана башланы. Яҡтырыуға ул тороп, ас ҡонанды йылғасыҡҡа төшөрөп эсерҙе. Нисәмә көнгә тәүләп туйғансы һыу эсте Ҡола. Унан Ғиниәтулла эйәр һалып, тирә-яҡты ҡараштырып килергә сығып китте. Мал көтөргә өйрәнгән оҫта көтөүселәр кеүек ҡуйы урмандар, тауҙар араһында ғына түгел, аралаш асыҡлыҡ ерҙә лә мал эҙләй белмәй ул. Оҫта көтөүселәр ҙур урманда мал эҙләгәндә бара-бара ла туҡтап тыңлай, малдарҙың ғәҙәти йөрөү юлын билдәләй, кисеүҙәрҙә эҙҙәр тикшерә, ысыҡҡа, үләндең ауышына иғтибар итә, һайыҫҡан шыҡырлауын, ҡоҙғон ғарҡылдауын, уның урынын билдәләй. Төп саңдауҙан тура, бик төпкә китмәй, малдар булыу ихтималлығы йүнәлешендә урап эҙләй. Тауҙарға, түбәлектәргә, арҡалыҡтарға менеп, тирә-яҡты байҡай. Ә Ғиниәтулла бындай алымдарҙы белмәй тиерлек.

Урта мәктәптә йүнләп уҡый алмағас, һөнәрселек мәктәбенә барып керҙе. Бөтә йәшлек осорон арлы-бирле һуғылып, ни эшләмәй, ни уҡымай, күберәк ваҡытын эсергә араҡы эҙләп үткәрҙе. Эшләмәне тип тә әйтеп булмай, эшләне ул, әммә бер етәксеһе лә эшенән ҡәнәғәт булманы. Ауылға ҡайтып йәшәй башлағас, крәҫтиәндең көнкүреш алымдарын тиҙ генә өйрәнә алманы, ҡайһы берҙәрен үҙләштерһә лә, еренә еткереп эшләй алманы.

Йөрөй торғас, ҙур аҡландың битендә малдарына тап булды. Был кисә айырылып ҡалған ун дүрт баш ине. Көтөүсене күргәс, малҡайҙар теҙелешеп алдылар ҙа түбәнгә уйнаҡлашып саптылар. Һыуһағандарҙыр, тип уйланы Ғиниәтулла. Бер ни тиклем төшкәс, малдарының өйөрөлөп үкерешеп торғанын күрҙе. Барып еткәс, ҡанға батып таланған ике йәшлек үгеҙ ятҡанын күрҙе. Эсе йыртылып, эсәк-ҡарындары бер ни тиклем ашалған, ҡалған кәүҙәһе сатыр-сотор, балсыҡ, йолҡолған ҡамыл менән күмелгән. Тиҙ генә малдарын кәртәлеккә ҡыуҙы. Айыуҙың ҡорбанын инәү өсөн әҙ-мәҙ генә тартҡылап ашап, унан һуң ашҡаҙанында тиҙ эшкәртелһен өсөн һаҫытыу өсөн күмеп ҡуя торған ғәҙәтен дә белмәгәс, ғәйепте бүреләргә япты эстән генә.

Төш ауышып бара ине инде. Ас малдарын кәртәнән сығарып ебәрҙе лә үҙе сәй әҙерләргә тотондо. Башынан уй китмәне. “Нимә тип яуапларға үгеҙ тураһында? Бөгөн алмаш килә. Хәҙер үк килеп етеүе мөмкин. Ике тәүлек тулып килә бит

уның эшкә килеүенә. Ғиниәтулла насар көтә, тигән хәбәр сыҡмаһын... Эштән ҡыуып сығарырҙар, үгеҙҙең хаҡын түләтерҙәр. Алмашҡа килгән кеше хәҙер килә лә малдарҙы иҫәпләй башлаясаҡ. Быны эшләтергә ярамай. Һис ярамай. Шуның өсөн мин ҡараңғыға тиклем көтәйем. Ҡараңғыла иҫәпләй алмаҫ ул. Мал теүәл, туйған, һыу эскән, тип шымартып ебәрермен. Тапшырып ҡайтып китһәм, унда бәхәскә урын ҡаласаҡ. Миңә лә бит Хәсән иҫәпләп тапшырманы", – тип йыуатты үҙ-үҙен.

Шулай эшләне Ғиниәтулла, нәҡ ул уйлағанса барып сыҡты. Ҡараңғыға тиклем көттө ул. Белһендәр Ғиниәтулланың нисек яҡшы эшләгәнен, белһендәр. Иртә сығара, кисәүгә тиклем көтә. Артым, ай-һай, күп буласаҡ. Ҡараңғыла алмашсының эттәре өрөп ҡаршы алды. Малдарҙың теүәллеген, туйғанлығын һөйләне лә, арыған Ҡоланы тиҙ-тиҙ егеп, төн булһа ла, юлға сыҡты. "Котолдом, почти ҡотолдом, – тип уйланы ул. – Хәҙер үгеҙҙе кем бүренән ашатҡанын иҫбатлап ҡараһындар".

Ҙур артылышты менеп еткәс, ҡапыл атын туҡтатты. "Әгәр хәҙер атты эйәрләп шым ғына барып кәртә ҡапҡаһын асып килгәндә... Малдар үҙҙәре сығып таралаcаҡ. Йоҡлар ул бөгөн Аҙнабай. Хәйер, ышанып та булмай, һаҡ, сос кеше инде үҙе. Өҫтәүенә, эттәре лә бар. Төн ҡараңғы, һыбай барып, аттан төшмәй генә ҡапҡаны әҙерәк кенә асып киткәндә... вәт шәп була". Шул уйын башҡарыр өсөн тиҙ генә Ҡола ҡонанды туғарҙы ла эйәрләп менеп тә алды.

Бик тә кире барғыһы килмәй ине Ҡонандың. Әммә өҫтөндәгеһе үксәләре менән типкесләп түбәнгә ҡыуҙы уны. Бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына тигәндәй, шыптырлап ваҡ ҡына ямғыр яуырға тотондо. "Бик ваҡытлы, бик ваҡытлы яуа, – тип кинәнде Ғиниәтулла. – Аҙнабайҙың эттәре, ямғырҙан һаҡланып, өй аҫтына уҡ кереп ятҡандыр, ямғырҙа үҙе лә йөрөмәҫ".

Ҡараңғы, бик ныҡ ҡараңғы төшкән. Ағастар шау килә, әллә ҡайҙан өрәлер был ел. Кәртәнең өҫкө яғынан килеп, һаҡ ҡына ҡапҡалағы тимер сыбыҡты ысҡындырып асты ла яй ғына кире китте. Кәртәнең өҫкө яғынан аҡҡан йылғасыҡ кисеүенә тиклем атлатып барҙы. Тауға артыла башлағас, Ҡонанды ҡыуырға тотондо. Ҡылған ҡылығына ҡыуанып, тау башына тиклем сапты. "Ямғырҙа малдар батҡаҡ кәртәлә ятмаҫ, берәм-һәрәм сығып таралырҙар. Шәп бит инде был", – тип кинәнде Ғиниәтулла. Бала саҡтан хәтеренең бер мөйөшөндә кемдеңдер шиғырын иҫкә төшөрҙө. "Һарыҡты кем ашаған?" Һарыҡты түгел, үгеҙҙе! Белһендәр хәҙер кемдең кемде ашағанын.

Ҡола ҡонан ҡараңғыла ла, хатта тумар араһында ла һис һөрөнә белмәне. Ышаныслы ат ине ул, ҡайтыр юлға юртты ла юртты. Ауылға боролор юл сатына еткәс, тағы ла туҡтатты Ғиниәтулла атын. "Ҡайтырғамы, әллә Разияға барып йоҡлап сығырғамы?" Юл сатынан ауылға – инәһе йортона ла, күрше ауылдағы Разияға ла ун саҡрым самаһы булыр. Юл оҙонлоғо бер үк.

Болоттар бөтә күк йөҙөн ҡап-ҡара булып баҫып алһа ла, әлегә өҫтән яумай. Разияға әйтеп киткәйне Ғиниәтулла, утын тейәп килермен, тип. "Минең утын тейәп килгәнде көткән Разия бер аҡ «малай»ҙы алып ҡуйған бит инде... Ашы ла бешкәндер... Ә өйгә, инәйгә, ҡайтһаң, ярты юҡ, өй ҡараңғы, инәй күптән йоҡлай, бешкән ашы булһа ла, ул да күптән һыуынған. Уңайһыҙ шул, утын булманы бит әле Разияға барыр өсөн".

Әммә һәр хәлдән сығыу юлдары бихисап. Нишләргә? Фекерен утын йүнәлешендә туплай-туплай торғас, ҡапыл иҫенә төштө: күргәйне бит ул, күргән ине...

Разияның ауылы артынан аҡҡан йылға буйындағы баҡсалар артында бысылған, ярылған ике утын өйөмө ята бит... "Булды. Киттем Разияға. Бөтәһе лә була, бөтәһе лә. Утын да, яртыһы ла һәм башҡаһы ла." Ул Ҡола ҡонанды, ҡайыра

тартып, һулға, Разияның ауылына табан, ҡыуҙы. Киткәндә сабып сыҡҡан кисеүенән һыу сәсрәтмәй, яй ғына сыҡты. Туҡтап тыңланы, ынтылғас, Ҡола ҡонанды ауыҙлығын алмайынса ғына эсерҙе. Яр буйлап әҙ генә барғас, күрҙе ул утындарҙы. Ташламай, берәмләп тигәндәй өйҙө арбаға утындарҙы. Бәхете бит, тағы ла ямғыр һибәләй башланы. Тимәк, урамда кешеләр ҙә йөрөмәй, эттәр ҙә өрмәҫ. Уйлаған уй – эшкә ҡағылған ҡул... Һә тигәнсе тейәне ул. Атын атлатып, яй ғына килеп туҡтаны Разияның ҡапҡаһы янына. Ҙур ҡапҡаны асты ла эскә инде. Һөйләшә-һөйләшә утынды һарайға кертеп өйҙөләр ҙә, Ҡола ҡонанды ныҡ итеп бәйләп, өйгә кереп юҡ булдылар. Торҙо, төнө буйы торҙо бер ҡабым үләнһеҙ Ҡола.

Таң атты. Разия ла, күрше-күләне лә һыйырҙарын көтөүгә ҡыуҙылар. Бик-бик нык асыҡты Ҡола. Тартылып та ҡараны, ергә сапсып та ҡараны. Һис ысҡынырлыҡ түгел ине. Ысҡынһаң да, бикле ҡапҡа эсенән ҡайҙа сығып була... Арыған ине, яҭҡыһы ла килде. Ҡолағына ҡайҙандыр биҙрә тотҡаһының сыйылдағаны ишетелде булһа кәрәк. Әйтерһең дә, Айҙар ағаһы Ҡола ҡонан күреп өйрәнгән ҙур ҡара биҙрә менән һоло килтерә... Юҡ, ҡара биҙрәнең ҡолағы былай уҡ сыйылдамай ине, ҡалынраҡ, ҡыҫҡараҡ бының тауышы. Был бит сыйылдай, тимәк, буш, тип үҙ-үҙен тынысландырҙы ҡонан.

Ҡояш төш башына менгәс кенә ҡайтып еттеләр. Ҡапҡаһы эсенә кергәс, Ғиниәтулла иң алда тәртә араһында уҡ Ҡоланы тышаны, унан һуң туғара башланы. Йүгән-теҙгене менән арҡаһына һуғып, ҡыуалап сығарып ебәрҙе. Йылға буйындағы уйһыулыҡҡа тиклем ярты саҡрымдай ер бар. Һикерҙе лә һикерҙе ҡонан үҙәнгә тиклем. Үҙ ғүмерендә тәүләп үлән ашағандай ҡомһоҙланып, тамырҙары йолҡолһа, шулар менән бергә иҙеп йота башланы йәшел үләнде.

Ҡола ҡонандың Ғиниәтулла ҡулында күргән михнәттәрен Аллаһы Тәғәлә бер йән эйәһенә лә күрһәтмәһә ине. Яҡшылыҡты ла, яуызлыҡты ла тере йәндәр үҙҙәре өсөн дә, башҡалар өсөн дә үҙҙәре тыуҙыра. Уның тәмен дә, сәмен дә үҙҙәре татыйҙар. Әммә Ҡола ҡонан тыуғандан бирле һис бер кемгә насарлыҡ эшләгәнен хәтерләмәй. Ашына болашһалар, үҙенекен дауланы, һуғышырға ынтылһалар, үҙен яҡланы. Өс йома үтеүгә ул бик нык ябыҡты, күҙҙәре аҫҡа батты, арҡа һөйәктәре ҡалҡып сыҡты. Һабантуйҙа сабышырға тип ҡағылған йоҡа еңел дағалар күптән инде йоҡарып, тупаҫланып, һынып ырғып бөттөләр. Ғиниәтулла аяу белә торған кеше түгел... Ҡаты, ташлы юлға сыҡтымы, иң алда сыбыртҡыһы менән яра. Аяғың ауыртамы-юҡмы, унда уның эше юҡ. Йән-фарман ҡыуа бирә. Ә таш юлда аяҡтар ауырта, бигерәк тә тояҡ йөрәге ҡырлы таш өҫтөнә тура килһә. Әсетеп һыҙлай. Ә ташлы ҡаты юлда саба башлаһаң, аяҡ һөйәктәре яңғырап үҙәккә үтә. Йомшаҡ ергә, таш юл ситенә сығырға тартылып ҡарай ул, әммә ауыҙындағы ауыҙлыҡты шундай көслө итеп тартып, тағы ла ҡаты юл өҫтөнә бора. Ауыҙ урты йырылып, тимер ауыҙлыҡ тел төбөнә килеп еткәндәй тойола. Ал да, ял да бирмәй Ғиниәтулла Ҡола ҡонанға. Ауылдан утыҙ саҡрым ерҙә ятҡан мал йәйләүенән ҡайтҡан һайын ағас тейәп алып ҡайтып, күрше ауылға һата ла төнө буйына юғала. Ауыр, бик ауыр була йөк. Ике ҡуһайҙай йыуан дүрт-биш ағастың өҫтөнә менеп ултырып ала, үргә ҡаршы ла төшмәй. Бигерәк тә оҙон, текә оло армытты үтеүе ауыр. Тәгәрмәс эҙҙәренән яуын һыуҙары ағып, уны тәрәнәйтеп бөттөләр. Алғы үҙәктең кендеге, тәгәрмәс көпсәктәре ерҙе йыртып, былай ҙа ауыр йөктө ҡара суйын тейәгәндәй итә. Ҡасан бөтөр икән Ҡола ҡонан өсөн был михнәттәр?

Берҙән-бер көн Ғиниәтулланың ҡапҡа эсенә бер ағай килеп керҙе лә, ҡулдарын һелтәй-һелтәй, ҡонанға күрһәтте, ниҙер бик ҡыҫҡырып һөйләштеләр. Кис Ғиниәтулла етәкләп көр ерән бейә килтерҙе. Ярым ҡаҡ арбала бәйле килеш төн торҙолар. Иртә менән ерән бейәне ҡуштанға егеп, йәйләүгә – алмашҡа киттеләр. Арба бик еңел тойолдо ҡонанға. Өҫтәүенә, ерәндең дилбегәһен ҡаға,

сыбыртҡыһы менән дә һелтәп ебәрә. Башҡа ваҡыттағыға ҡарағанда тиҙ ҙә, еңел дә барып еттеләр йәйләүгә. Етеү менән сергеһеҙ, аҫтына ике киндер тоҡ ҡына һалынған эйәр Ҡола ҡонандың арҡаһына менеп ята торғайны. Ә бөгөн ул ерән бейә арҡаһына ятты. Болғанды, тулғанды ерән бейә. Эйәрҙе һалдыртмаҫҡа төрләсә борғоланды. Ләкин алмашҡа йөрөгән ағай менән берлектә маташа торғас, эйәр һалынды. Бер аҙҙан ерән бейәне менеп, мал көтөргә китте Ғиниәтулла.

Нисек булғандыр ваҡиға. Кис, ҡараңғы төшөр алдынан, Ғиниәтулла малдарҙы кәртәгә йәйәүләп ҡыуып килтереп бикләне. Ҡола ҡонанға атланып кире ауыл яғына сапты. Ауылға етер саҡта теҙгене аяғына уралып, атлап ҡына ҡайтып барған эйәрле Ерәнсәйҙе ҡыуып еттеләр. Тотторманы ерән бейә. Ауылға уҡ барып еттеләр. Унда уны ҡамалап тотоп, эйәрен Ҡола ҡонанға һалдылар ҙа кире юлға сыҡтылар. Етәккә йөрөмәй ҡаңғыртты Ерәнсә. Алыша-һуғыша төнө буйы барҙылар. Таң алды булды, буғай. Аттарын ағасҡа бәйләне лә кереп йоҡоға талды Ғиниәтулла.

Ана шулай, крәҫтиән тормошоноң алымдарын белмәгән, күңеле менән унан ситтә йәшәгән кеше мөхиттә үҙенә лә, яҡындағы йән эйәләренә лә тыныслыҡ бирмәне. Серәкәй талауына, кәртәләге малдарының асығып баҡырыуына уянып китте лә, ашыҡмай ғына сәй эсеп туйғас, ас Ҡоланы менеп көтөү көтөргә йүнәлде. Малдарының ҡараңғы төшкәс үҙҙәре килеүен һөйләгәйнеләр алмашсылар. Шуға ла иртәрәк килеп, ағас йығып, арбаға тағы ла бүрәнәләр тейәне.

Иртәгәһен алмаш килгәс, ерән бейәне ҡуштанға егеп, ҡараңғы төшөр алдынан сыҡтылар юлға. Был юлы арба бик ауыр тойолдо. Ерән бейә һис тартмай, йәнәштә уйнап, тыпылдап ҡына килә. Ғиниәтулла уның тартмағанын күреп ҡалһа, сыбыртҡыһы менән һелтәп тә ебәрә. Шул осорҙа ерән бейә тартып ҡала. Еңеләйеп китә Ҡолаға йөк. Унан тағы ла тыпыслай башлай. Ҡараңғы төшкәнгә тиклем аҙмы-күпме мәжбүри тартышты арбаны. Унан оҙон, бейек, текә ҡашағалары булған ҙур армыт башланды. Ерән бөтөнләй тартмаҫ булды. Ғиниәтулла уны күрмәй, сөнки хәҙер ҡараңғы. Буш килеүенән файҙаланып, Ерән бейә юл ситендә үҫкән бейек үләндәрҙе өҙөп ашай. Йөктө тиҙерәк етер еренә еткереп, бергәләп ашарға ине лә, ҡайҙа ул... Һылыу ерән бейә Ҡола ҡонанға ҡуштан булманы. Ул килгәс тормошо еңеләйер урынға, киреһенсә, ауырайҙы. Ике ат тип ышанып, Ғиниәтулла ла арбаға элеккегә ҡарағанда йөктө күберәк тейәй. Уларға бирелгән тоҡ ярым һолоноң да, исмаһам, бер бөртөгө эләкһәсе. Әллә Ерәнсәйгә генә ашата микән, тип уйлай ине, аҙаҡ тамам ышанды: Ерәнсәй ҙә һолоноң ни икәнен белмәй икән. Аттарына күрһәтмәй генә уны Ғиниәтулла үҙе ашағанын белә Ҡола ҡонан.

Интекте, бик интекте тормошоноң мәжбүри булған ауыр йөгөн алып барырға ярҙам итмәгән һылыу Ерән бейә менән Ҡола ҡонан. Тормош йөгөн тартмаған һылыу байталдар, үкенес, хәҙер күбәйҙе шул, бик күбәйҙе. Уларҙың төп маҡсаттары: йәш, ҡарыулы төп ат булһын йәнәшәлә. Йөклө арбаны тик ул тартһын, үҙе егелмәһен дә, тартмаһын да. Тик йәнәш йөрөһөн. Ҡолоноң булмаһа, иркенерәк йәшәйһең, имеҙмәйһең дә, ҡурсаламайһың да, ҡайғыһы ла юҡ. Булһа ла – тик үҙ теләге менән һәм берәү генә.

Төпкө ат өсөн тормош – ул арба. Бөтә ауырлыҡтар, ҡайғы-хәсрәт һәм кәрәкяраҡ... арбаға тейәлгән. Әлбиттә, ҡуштан булһа ла, хоҡуҡтар артмай, ирек тә өҫтәлмәй, киреһенсә, сикләнә, ә бына бурыстар өҫтәлә. Йәнәшләп, ярҙам итеп йөктө тартышҡан ҡуштан булһа, арба еңелерәк була ла бит. Алға барыуы ла еңелерәк һәм күңеллерәк тә. Барыр ереңә етеү өсөн маҡсат була, ә маҡсат булһа... тиҙерәк етәһең. Унда туғарылаһың, ашайһың, эсәһең, ял итәһең. Барлыҡ ғазаптар йә бергәләп тартмауҙан, йә төп ат тартмауҙан килә. Ҡуштан тартһа ла,

ҡыйыш тарта, арба ситкә тәгәрәй, юлдан сыға. Ауылға ҡайтып, һыу буйында үрештә йөрөгәндә, ҡайһы ваҡыт ул ҡоба төҫлө ҡолоно менән Ҡара бейәне лә осрата. Бер-береһенең еҫен онотмағандар. Осрашһалар, еҫкәшеп оҙаҡ торалар. Ҡоба ҡолоҡай ҙа килеп Ҡола ҡонанды еҫкәй. Ул боролҡа, үсекләшкән кеүек, аҫҡы ирендәрен бер-береһенә һуғып бәлшәйтте. Тулыһынса буйһоноу билгеһе был. Ҡоба ҡолоҡайҙан үҙенең дә еҫе килеп торған кеүек Ҡолаға. Белә ул уның үҙ улы икәнен. Етемлектең әсе аҙмышын күреп үҫкән Ҡола, инәһе янында булһа ла, баланың ярҙамһыҙ һәм был донъяла һис бер кем алдында ғәйепһеҙ булғанын аңлай. Унан ҡолоҡай, бет ҡарашырға саҡырғандай, буйы етмәһә лә, ҡонандың ялына үрмәләргә самалай. Оҙағыраҡ тороп китһәләр, улар янына Ерән бейә килә. Ҡара бейә менән еҫкәшәләр, алғы аяҡтарын ергә һуғып, сайылдап ебәрәләр. Береһе тиҙ генә артын борһа, икенсеһе ҡасып ситкә китә, күп осраҡта шаҡ та шоҡ тибешеп алалар. Шулай мөнәсәбәттәрен асыҡлағас ҡына, ашарға тотоналар.

Бейәләр һис шикһеҙ Ҡола ҡонанды үҙ итәләр. Бер төндө, Ҡола ҡонандың бәхетенә, һәр саҡ һыуҙа, еүешлектә йөрөгән тышау сереп өҙөлдө. Ауыр эштән һуң да бейәләрҙе ситкә ебәрмәй өйөрөп, кинәнеп, иркенләп йөрөүе, хатта уларға һикереп алыуы уға ҙур ләззәт ине.

Йәй үтеп бара инде. Көндәр һалҡыная, төндәр ҡараңғыланды. Кәртәләге малдарға йә кис, йә таң алдынан айыу килә башланы. Малдар үкерешһә, Ғиниәтулла йүгереп сыға ла һауаға атып ебәрә. Был ваҡиғаларҙан һуң Ғиниәтулла ҡайҙандыр бәләкәй генә сәүек алып килде. Ләкин ул махсус эшләнгән кәртә янындағы урында ятманы. Төнө буйы Ҡола ҡонан янында йөрөнө. Мылтыҡ атылһа, ул да сәңкелдәп өрә башлай, әммә ҡалын урмандың шаулауы, бейек тауҙар күкрәге ул тауышты йота ла ҡуя.

Тағы ла аҙна-ун көн үтеүгә ямғырҙар башланды. Хәҙер бимазалаған күгәүендәр бөттө, сәрәкәйҙәр ҙә һирәгәйҙе. Эйәр аҫтына кейеҙ йә башҡа йомшаҡ әйбер һалып йөрөмәгәс, Ҡола ҡонандың арҡаһы бик ныҡ өйкәлеп, сей яра барлыҡҡа килде. Шеште, эренләп боҙола башланы. Ғиниәтулла уны һаман да менер өсөн эйәр һалып маташты. Һыҙланыуға түҙмәне Ҡола: Ғиниәтулланың ҡулбашынан тешләп, ситкә быраҡтырҙы. Бәйле торған ҡонанды Ғиниәтулла сыбыртҡы менән ярҙы. Ләкин бынан һуң да арҡаһына эйәр һалдыртманы Ҡола. Алмаш ваҡыты нисек үткәндер, әммә нәүбәттәге бүрәнәле арбаны, ҡуштанда буш йөрөгән Ерән бейәне ауылға алып ҡайтҡас, башҡаса уны мал йәйләүенә екмәнеләр. Һыҙланып бер-ике көн буш йөрөнө. Тыңлаусан, ғәйрәтле атты егә алмауҙарына микән, төрлө кешеләр йүгәндәрен тотоп, ауыл аттары йөрөгән туғайлыҡҡа килеп, Ҡола ҡонанды ҡарайҙар ҙа баштарын һелкеп кире китәләр. Әҙерәк төҫ алды, тәненә ит ҡунды. Үнжей алмай, мантымай йөрөгән түгел ул. Ашаһа, ерҙең кәҫен тигеләй һыпырып ашаны, ашамаһа, аҙналар буйы аслыҡҡа түҙҙе. Йәшлектән егетлеккә сығып алған мәл кеүек, утығып, бауыр күтәреп, ғәйрәтләнеп, дәртләнеп алған ҡонан ауыл бейәләренең бөтәһенә лә хужа булды ла ҡуйҙы. Хәтерләй ул ҡолоҡай сағында Лидер атайҙың йөҙәрләгән баш өйөрҙө берҙәм тотоуын. Хәҙер ауыл аттарына көтөүсе лә кәрәкмәй. Берәйһе атын тышарға етәкләп килтерһә, уны йылға ярына барып ҡаршы ала. Бейә булһа, өйөргә ҡуша. Өйөр тигәс тә, өйөрө ун – ун ике бейәнән артмай. Эш аттарын алып килһәләр, уларҙы ситкәрәк ҡыуа. Әммә улар Ҡола ҡонандың ун ике бейәнән торған "өйөр"өн ташлап китмәй, төн сыҡҡансы йәнәш йөрөйҙәр. Бик йәтеш булды Ҡола ҡонандың айғырланып өйөр тотоуы төнгө ат көтөүсеһе Ғаил ҡартҡа. Тәбиғәте менән аҡыллы, һаҡ, үҙ эшенә яуаплы ҡараған оло йәштәрҙәге уҙаман, тыштан берәүгә лә әйтмәһә лә, эстән Ҡола ҡонанға мең рәхмәтле. Ҡола ҡонан килгәндән алып йоҡоһо

туйып ҡалды, сөнки был туғайҙа ярым үле кеше тапҡандан бирле Ғаил ағайға йоҡо тәтемәне. Ҡола ҡонан мәрхәмәтле холоҡло был кешене үҙ итте. Һөйҙөрҙө, һыйпатты. Ғаил ҡарт уға бер ваҡытта ла йүгән кейҙерергә ынтылманы. Ә бөгөн? Ә бөгөн! Эсе ҡабарып торған бүртә күк бейәһе менән сабып килде лә, ҡонанға йүгән кейҙереп, ул ҡарышһа ла, ай-вайына ҡуймай, ситкә, ваҡ ҡайынлыҡтар араһына, кертеп бәйләп ҡуйҙы. Күп тә тормай, эш аттары тип аталған көтөүгә ике арбала биш кеше килде. Ситтә башҡа аттарҙы ҡыуып йөрөгән Ғаилгә ҡысҡырып, Ҡола ҡонандың ҡайҙалығын, ҡушылған буйынса ниңә әле һаман бәйле түгеллеген бойороҡло тауыш менән һоранылар.

Шау-шыулы һөйләшеү булды. Кешеләрҙең уны саҡырғандай тауышын ишетеп, биш эт һейеме ваҡыт эсендә бейәләрен һағынып өлгөргән Ҡола ҡонан ер тырнап, ярһып кешнәй башланы. Таныш тауыш ул ялҡып бөткән Ғиниәтулланыҡы булһа ла, уны ишеткеһе, күргеһе килмәһә лә, өйөрөн һағынып кешнәне лә, кешнәне ҡонан.

– Ана уның тауышы, – тип алып килергә бойорҙолар.

Ә кемгә? Ғаил ҡарт ҡулын һелтәп, туғайлыҡты ташлап, йылғаның ауыл яҡ ярына сыҡты ла ҡомло ярға арҡаһын терәп ултырҙы.

– Әрәм итәләр ахмаҡтар, әрәм итәләр ҡонанды. Уны тоҡом айғыры итеп торорға ине. Хәҙер унан тоҡом алып булмаясаҡ. Шул Ғиниәтулла менән иҫерек ветврач Талханың ғына эше был. Эштең, әттәхиәттең төбөн уйлай белмәйҙәр бит. Ҡарғанан – ҡарға, бөркөттән бөркөт тыуғанын белмәйҙәрме, – тип бик көйҙө. – Йә, исмаһам, Айҙар өйҙә юҡ, бөтмәҫ уҡыу буламы?.. Бармайым, ҡарай алмайым йөрәктө көйҙөргәндәрен, – тип ауылға табан атланы.

Ғиниәтулла ҡонанды кешнәүе, тауышы буйынса табып, етәкләп килтерҙе. Шаулап-шаулап һөйләштеләр ҙә, Ҡола ҡонандың муйынынан артҡы аяғының сасағы аҫтынан арҡан алып тартып, ергә йыҡтылар. Башҡаһын хәтерләмәй ҡонан. Тик йығылып ятҡас, йылы ғына ҡулдарҙың артҡы бото араһында ҙур үрмәкес кеүек леберҙәүен, унан һуң үҙәккә үткес әсетеү тойҙо. Башын күтәреп һыпырылып торорға ла ынтылды. Йыуан арҡандар менән ҡуша бәйләнгән аяҡтарҙы ҡыбырлатыр хәле юҡ. Ҙур йыуан ҡуллы бармаҡтар ҡашаға тоҡсайы ҡарын эсенән әллә нәмәләрҙе ҡутарып һурып сығарҙы. Һыҙлауы... Күҙҙәрен йомоп, аңын юғалтты. Эҫе ҡан бото буйлап аҡты ла аҡты. Аңына килгәндә аяҡтары арҡандан сиселгән ине. Ҡола ҡонан күҙҙәрен асҡанда өҙөк-йыртыҡ ҡапҡара болоттар бер-береһен ҡыуалап тотоша алмайынса, йөҙөп үтәләр. Ғаләм йүгеректәре менән сабышҡандағы кеүек ғәйрәтле тибенгеләрҙе бер һелтәп тороп китәһе ине. Эс-бауыры бысаҡ менән киҫеп төшөрөлгәндәй әсетеп һулҡылдай. Ята торғас, ғәйрәтен йыйып, алғы аяҡтарын кирә баҫып, "бүрәнә тейәлгән" арт һанын саҡ-саҡ күтәрҙе ҡонан. Ергә ҡарынынан һуп-һуп итеп әллә ниндәй төйөндәр бер-бер артлы төшкәндәй тойолдо. Һыҙланыуҙан хатта күҙ алдары күкле-йәшелле булып киткән ҡонан барлыҡ ғаләмдә, барлыҡ тереклектә яуыздар һәм изгелеклеләр барлығын төҫмөрләне. Һыҙланыулы көндәрҙең таңы ла, шәфәғе лә, ҡара төнө лә булманы; таң һыҙылып атманы. Һыҙланы ғына эс-бауыры! Өс көн уға килтереп ашатыусы ла, һыу эсереүсе лә булманы. Тарбаҡлы муйыл төбөндә ҡаҡланып торҙо. Таң атыуы, ҡояш сығыуы, унан һуң ап-аҡ көн, зәп-зәңгәр күк булыуы Ҡола ҡонан күңелендә йылы елле рәхәт бер тойғо ине.

Бөгөн дә шулай булды. Ҡояш сығыр алдынан, күк зәп-зәңгәр булғас, янына таныш тауышлы, игелекле, күптән көткән Айҙар ағаһы килде. Һыҙланыуын еңеп, тоноҡ ҡына тауыш менән уҡранды ҡонан. Яй ғына ҡайттылар. Шунан бирле Ҡола ҡонандың тормошо еңеләйҙе. Аҙна-ун көн үҙ йортоноң һарайында тотто Айҙар. Яҡшы бесән, һоло ашаны ҡонан. Көнөнә ике тапҡыр етәкләп, өс-

дүрт саҡрым йөрөттөләр. Менерлек түгел, эйәр япҡағы төртөп тишкән мундаһынан ҡан аралаш эрен аға. Көн һайын ниндәйҙер дарыу менән яраһын йыуа ине Айҙар. Йыуғандан һуң яра ҡымыржып, рәхәт кенә булып, еңелсә ҡысый.

Көндәр үтә торҙо. Ҡола ҡонандың һыҙланыуы баҫылғандан-баҫыла биреп, тағы ла ун биш – егерме көн үтеүгә, ул бөтөнләй тиерлек һауыҡты. Мунда яраһы ла кибеп, сөрөшөп ҡатты. Тик яра булған еренә йөн үҫмәне, ҡара-көрән күн кеүек асыҡ тире тороп ҡалды. Тора-бара Айҙар уны еңелсә егә башланы. Көрлөгө килде. Һәлберәп төшкән буш эсе тартылды, еңеләйеп, нәҙегәйеп киткәндәй булды. Ашауға һайланманы. Ни бирһәләр, шуны ашаны. Картуф ҡабығы ла, шалҡан киҫәктәре лә, хатта айыртылған һөттө лә эсә лә ҡуя, шуғалыр ҙа, бәлки, йөрөүгә талымһыҙ булды. Яралары төҙәлеп, үҙе лә апаруҡ төҫ алғас, Айҙар уны ат һарайына урынлаштырҙы. Бында, күмәк булғас, күңелле. Йөк тартмаҫ, мендермәҫ Ерәнсә менән Ҡара бейә генә түгел, башҡалар ҙа байтаҡ. Егерме-утыҙлаған булыр. Ҡола ҡонан айырым тораҡта торҙо. Уға ла бесән, ҡатнаш аҙыҡ, ер аҫтына күмелгән әсе йәшел йомшаҡ үлән дә бирәләр. Бынан тыш, Айҙар ағаһы көн һайын бәләкәй биҙрә менән һоло ауҙарып китә. Ат һарайы ҡапҡаһынан керә лә һыҙғырғыс менән һыҙғырып ебәрә. Ҡола ҡонан уны таный. Тәрән итеп бышҡырып яуаплай ҙа, уҡранып, торған урынына һыймай арлы-бирле йөрөргә, алғы аяҡтары менән ерҙе сапсырға тотона.

Үҙендәге үҙгәреште һиҙҙе Ҡола ҡонан. Бот араһындағы аяуһыҙ һыҙлауға тиклем бейәләргә, бигерәк тә ҡолонло Ҡара бейәгә, бик аяулы, һаҡлыҡ, ҡәҙерлелек, яҡынлыҡ тойғоһо менән ҡарай ине. Хәҙер, гүйә, тойғоларҙың тик береһе – күңелгә яҡынлығы ғына ҡалды.

Йылғаға һыу эсергә барғанда йә дөйөм кәртәлә торғанда яҡындан күрә ул бейәләрен. Тик элекке кеүек ажарланыуы бөттө лә ҡуйҙы. Дөрөҫөрәге, ҡыҙыҡһынмай бейәләр менән. Ҡара бейә лә, һылыу Ерәнсәй ҙә, башҡалар ҙа, хатта Ҡола ҡонан үҙе лә быны сәбәбен аңламай. Тыныс ҡына еҫкәшәләр ҙә шулай уҡ тыныс ҡына айырылышалар. Тик ҡолон тотмаҫ Ерән бейә генә уның артынан ҡалмай эйәреп тик йөрөй. Ике тапҡыр буйға ҡалды ул Ҡола ҡонандан. Тик һаусәләмәт тыуған ике матур ҡолоҡайҙы ла ҡараманы Ерәнсә. Имеҙмәне ҡолондарын. Ярай әле, береһен, көс-хәл менән көсләп, саптар бейәгә ҡушып өйрәттеләр. Ә икенсе ҡолонсағы астан үлде. Хәҙер ул өсөнсөһөн эҙләй, тик ул юҡ. Ҡола ҡонан хәҙер уға ҡолон бүләк итә алмай. Ә ул, Ерәнсәй, төшөнмәй, Ҡола ҡонандың йә ҡойроҡ төбөн, йә ялын, йә күнгә әйләнгән мундаһын тешләй.

Ҡара көҙ ҙә үтеп, ер өҫтөн ап-аҡ ҡар ҡапланы. Ҡола ҡонанды ауыр эшкә екмәнеләр. Ауыр тип, хәҙер ауыр эш тә юҡ. Соҡор төбөнән силос тип аталған еүеш үләнде ике тапҡыр һарайға кертәһең дә, эш бөтә. Бөтә аттар өсөн дә шулай. Быйыл ҡыш һалҡын. Ҡар өҫтәй-өҫтәй, февраль айына ат тубығына тиңләне. Ә бурандарҙа өрөп һырыған урындары ярты ҡуһайға, хатта унан да күберәккә барып етте. Эшләп һәр саҡ хәрәкәттә булған ҡонан ирекһеҙләнде. Кәртәнән сығырға мөрхәт тыуһа, йылғалағы уйылған мәкегә лә туҡтамай, ары саба. Кирелеп, ҡойроҡтарын һелтәп, башын сайҡап саба ул ялан буйлап. Уның артынан төшкән аттар береһе лә эйәртешә алмай, ҡайһы саҡта, әгәр ысҡындырмаһалар, йүгерек туры ғына башҡа-баш тиңләп килә ала. Көндәр яҙға тарта башланы кеүек, ни тиһәң дә, буранай артта ҡалды. Ҡола ҡонанды хәҙер Шамил бабай ҙа, Айҙар ҙа, уларға эйәреп, бүтәндәр ҙә "Ҡола дүнән" тип йөрөтә башланы. Шулайҙыр, ни тиһәң дә, уға яҙғы ташҡын һыуҙар ағыу менән биш йәш тулып, алтыға китә.

Буран булһа ла, йылы елле бер көндө ат һарайының өйө янына ап-аҡтан кейенгән ике һыбайлы килеп туҡтаны. Арҡаларында мылтыҡтары бар. Кешеләр

менән оҙаҡ ҡына бәхәс иткәндәй, ҡулдарын һелтәй-һелтәй һөйләштеләр. Армыт тауҙарға бармаҡтары менән төртөп күрһәтәләр. Айҙар ағаларын да саҡырып килтергәс, һүҙҙәре тағы ла ҡыҙҙы. Шул көндө Ҡола дүнән менән Туры йүгеректе айырым тораҡтарға бәйләп, күп итеп бесән, туйғансы ашарлыҡ һоло һалдылар. Кис тояҡ аҫтарын ҡатҡан тиҙәктән таҙартып, эйәр һалып, дүрт-биш саҡрым ер атлай-юрта йөрөп килделәр ҙә, тағы ла ашарҙарына һалып, таралыштылар.

Ҡараңғы ине әле. Таң атыуға ла байтаҡ ваҡыт барҙыр. Ауылда оҫта һунарсы тигән дан алған Нияз ағай менән Айҙар, Ҡола дүнән Туры йүгеректе менеп, тауҙар итәгенә киттеләр. Урман ҡатнаш яландар сигенә еткәс, кәбән янында туҡтап кемдәрҙелер көттөләр. Бер аҙ ваҡыт үткәс, таң беленеп килер саҡта, күрше ауыл яғынан тағы ла өс һыбайлы килде. Яҡтырғансы шул урында торҙолар ҙа ҙур йылғаның шырлығына юл алдылар. Таллыҡ аралаш тумарлы туғайлыҡта улар бер-береһенән йөҙ илле-ике йөҙ аҙым самаһы ерҙә ятҡан ике йылҡы кәүҙәһен күрҙеләр. Тирә-яҡ ҡанға туҙған, тапалған, бот ите, эс-ҡарыны аҡтарылып ашалған, арлы-бирле тартҡыланған.

Нишләптер бөгөн Ҡола дүнәнде Нияз һунарсы менгәйне. Ул атынан төшөп, бик ентекләп ҡарҙағы эҙҙәрҙе тикшерҙе, иҫәпләне, бер нисәүһенә бармағы менән баҫып ҡараны. Унан, иптәштәренә ҡарап, һығымта яһаны.

– Байталдарҙы йыҡҡан көнө һәм бөгөн, әле генә, килеп тағы ла туйғансы ашағандар, ә кисә килмәгәндәр, – тине.

Уның һүҙҙәре дөрөҫ ине.

– Эҙҙәре йомшаҡ, тимәк, беҙҙең килеүҙе ишетеп киткәндәр. Алтау-етәү булырға тейештәр...

Нияздың иптәштәренә һөйләүе буйынса, ваҡиға былай була. Уйһыу, тумарлыҡ ерҙә тибенгә үлән күп булған өсөн йылҡы көтөүен бында ҡыуалайҙар. Ялан ерҙә, түбәлектәр битендә үлән дә әҙ, өҫтәүенә, һыҙма бурандан ышыҡланыр урын да юҡ. Йылҡы көтөүен һәр саҡ һағалап йөрөгән бүреләр ҙә, эйәртенешеп, бында килә. Уңайлы, бик уңайлы шарттар тыуа уларға. Ике өйөр бергә ҡушылып һунарсылыҡ итә. Ике инә бүрегә биш ата бүре эйәреп йөрөй. Ләкин улар бөтөнләйгә бергә ҡушылмаһалар ҙа, йылҡы артынан бер йүнәлеш, бер маҡсат менән йөрөй.

Өсөнсө көн кис, ҡараңғы төшкәс, ике йәшлек тайҙы айырып алып, күмәкләп еңел генә йыҡтылар. Төнө буйы етеһе ете яҡтан йолҡҡолап ашанылар. Таң алдынан ятыр ергә китер юлда тағы ла ситтә йөрөгән байталды йыҡтылар. Әммә ашай алманылар, көн яҡтырҙы, көтөүсенең эте өрөүе, үҙенең ҡысҡырып мал ҡыуғаны ишетелгәс, китергә мәжбүр булдылар. Ҙур йылғаның ярһыҙ уйһыу ерендә, йәй көнө лә үтеп кергеһеҙ тумарлы һаҙлыҡ эсендә, ҡоро түпһәл бар. Ғәҙәттә, ян-яҡта ҡурҡыныс барлыҡҡа килһә, шул шырлыҡлы түбәгә инә торғайнылар элек тә. Тамаҡтары туҡ бүреләр шул түпһәлгә кереп яттылар. Бында әле лә һыбайлы керә алмай. Һаҙ туң түгел, күтерле соҡорҙар, йотам тигәндәй, ҡар менән ҡапланып ята. Кеше түпһәлгә тик саңғыла ҡуйы ботаҡтарҙы ҡайҙа айыра, ҡайҙа балта менән ҡырҡып үҙенә юл һалғанда ғына үтә ала. Тимәк, уларға аңғартмаҫтан барып сығып булмай. Бүреләрҙең ҡәлғәһе ине был түпһәл. Әммә кешеләрҙең аҡылы бүре аҡылынан өҫтөн.

Төп бурыс итеп бүреләрҙе шырлыҡтан, һаҙҙан ялан яҡҡа – вағыраҡ тау һәм түбәләр яғына ҡыуалап сығарыуҙы ҡуйҙы Нияз. Нисек булһа ла Урал армыттарына, ҡалын урманға ебәрмәҫкә! Йылға шырлығын, уның бөтә үҙәнен, оло урман менән киңлеге ни бары бер саҡрымдай ялан ғына айырып ята. Ул да был тирәлә ике ваҡ йылғасыҡ үҙәне менән тоташа. Бүреләрҙең ҡайҙа ятыуын Нияз һунарсы яҡшы белә. Итте йыраҡ уҡ ташлап китмәҫ улар, тип һығымталай. Ерҙе яҡшы белгәнлектән, һәр атлының бурысын ентекләп аңлатты. Ике атлы һаҙлыҡ башынан йылға ағымы буйынса түбәнгә тауыш бирә-бирә, һауаға ата-ата утрау-

түпһәл яғына төшә. Береһе ҙур йылғаның һул ярында торған текәлек өҫтөнән бүреләрҙең ҡайҙа йүнәлгәнен күҙәтә. Бүреләр Урал тауҙары яғына ҡасыу ихтималлығын тойомлаған Айҙар менән Нияз, икеһе ике йылға башына аттарын бәйләп, алғараҡ килеп, мылтыҡ менән боҫҡонға ултырҙылар. Тау башында урынлашҡан Мөхәммәткә ҡысҡырыу, ҡул һелтәү бүреләр тик ялан яғына сығып ҡасҡан шартта ғына рөхсәт ителде. Барыһы ла бурыстарын аңлап таралыштылар.

Сәғәт ярымдай ваҡыт үтте. Бына алыҫта, шырлыҡ башы яҡта, тоноҡ ҡына атыу тауышы ишетелде. Ун – ун биш минуттан һуң ул тағы ла ҡабатланды. Әлегә тыныс ҡына торған һауаға тауҙар яғынан еңелсә ел килде. Ябалаҡлап-ябалаҡлап эре ҡар яуа башланы. Елләп яуған ҡар Нияздың битенә, ирендәренә, күҙкерпегенә ҡунып, ҡарарға ҡамасаулай. Таллыҡ эсенән, йылғасыҡ йырынынан, елберләп нимәлер киләгән төҫлө тойолдо уға. Күҙҙәрен һыпырып, ипләберәк ҡарағас, йыуан талдар артында торған бик ҙур бүрене күреп ҡалды. Артта тағы ла икәүме-өсәүме күренә. Шиге ҡалманы Нияздың. Көн ағышында йүнәлешен үҙгәрткән ел хәҙер уның артынан иҫә. Ҡаршы килгән бүреләр уны йөҙ – йөҙ егерме аҙымдан һиҙҙеләр. Һыҙма мылтыҡ булмағас, был аранан ул ике йәҙрә менән шыма мылтыҡтан атыуҙың файҙаһы юҡ. Өҫтәүенә, ҡуйы таллыҡ. Мылтығын бүреләргә тоҫҡаған килеш көттө ул. Кил, кил, тағы ла егерме-утыҙ аҙым атла, исмаһам. Юҡ. Торалар. Һауаны еҫкәйҙәр. Бүреләрҙән өҫтә ултырған Нияздың еҫен ел йә өҫкә, йә аҫҡа һуғып өҙөк-һурыҡ еткерә уларға. Ҙур бүре ҡапыл кире боролдо. Түҙмәне Нияз – бармаҡтары тәте кәкреһен тартты. Йәҙрәләре бүреләргә барып етмәүен йә теймәүен белгән Нияз артҡа, бәйле торған Ҡола дүнәнгә, йүгерҙе. Ул дүнәнгә атланғанда дүрт бүре ҙур йылға шырлығына кире кереп баралар ине. Бүреләр артынан йылға шырлығына йән-фарман сабып төшөп барған Нияз уң яҡта, тау өҫтөндә, торған Мөхәммәттең ҡулына бүреген алып ялан яҡҡа һелтәүен күрҙе. Тимәк, бүреләр ҡамалғанлыҡтарын белеп, урманлы, яланлы бейек ҡаҡ тауҙар яғына йүнәлде. Хәҙер иң мөһиме – кисеү, асыҡ урын табып, ҙур йылғаның һул ярына сығыу.

Ул арала ярһыған Турыһын тотоп, Айҙар ҙа килеп еттте. Уға ла ҡаршы өс бүре сыҡҡан, тик, йыраҡтан уҡ боролоп, кире йылға шырлығына кергәндәр. Ҡола дүнәндең тәүәккәллеге, батырлығы булмаһа, ай-һай, туңыр-туңмай ятҡан ағымлы йылғаны шунда уҡ арҡыры сыға алырҙар ине микән? Туҡтап та тормайынса, талдар араһындағы тар ғына асыҡлыҡҡа керҙе лә китте Ҡола дүнән. Боҙ гөрһөлдәп емерелде. Ул алға һикерҙе, тағы ла ҙур боҙ киҫәге ватылып, алғы аяҡтары боҙ аша батҡыл ергә баҫты. Тағы ла, тағы ла һикереп, бер бата, бер ҡалҡа биреп, ҡаршы ярға килеп сыҡты. Бәхеткә ҡаршы, йылға төбө батҡылыраҡ булһа ла, аҫты ҡаты ине. Туры йүгерек тә Ҡола дүнән артынан хорҡолдай-хорҡолдай килеп сыҡты. Ярға сығыу менән күрҙе бүреләрҙе Нияз. Уң яҡтан, тауҙан төшөп, уларҙы бейек, осло тауға мендермәҫкә маҡсатлап, ялан буйлап Мөхәммәт саба. Алдағы бәләкәй генә түңәрәк сауҡалыҡта бүреләр әҙ генә тотҡарланды. Мөхәммәт менән саптар атҡа уларҙы текә тауға мендермәй, юлдарына арҡыры төшөргә шул ваҡыт етә ҡалды. Шуға ла йыртҡыстар, тауға тартыла алмайынса, һул яҡтағы түбәлектәргә, ваҡ сауҡалыҡтарға тартылды. Ҡола дүнән көрттө көрт итмәй, бүреләрҙең ике, хатта өс һикергәнен бер һикереп, алға йомолдо. Бүреләрҙең эҙенә төшөү менән танауына ҡолоҡай ваҡытынан уҡ һеңешеп ҡалған һаҫыҡ, әскелтем дә, сөсө лә еҫ килеп тулды. Инәһен шул һаҫыҡ еҫле вәхшәттәр быуып, терелэй тартҡыслап ашағандары иҫенә килде, ахыры. Йылҡы малының тик үҙҙәренә генә аңлайышлы телдәрендә бүреләрҙең ҡот осҡос ҡурҡыныс дошман булыуы тураһында бер-береһенә бирешкән мәғлүмәттәре лә бар Ҡола дүнән хәтерендә. Әммә бөгөн улар Ҡола дүнәндән ҡасалар. Ул ҡурҡмай, киреһенсә дәртләнеп, ажарланып китте. Уның өҫтөндә мылтығын эйәр

ҡашағаһына кистән элеп ҡуйған Нияз ағаһы бар. Ҡола дүнәндең бүреләрҙе ҡыуып етеп, уларҙы пыран-заран килтерергә шул тиклем зәһәрлеге артты – Нияздың ауырлығын да һиҙмәй ине ул. Бына түбәлек, унан оҙон ғына арҡалыҡ. Күҙ күреме ерҙә генә теҙелешеп саба ҡәбәхәттәр. Арҡалыҡ бөткәс, ҙур уҡ булмаған ҡайынлыҡҡа барып керҙеләр, аръяғы – ялан, ә унан – тағы ла бейек тау. Нияз сабып килгәндә үк самаланы: ҡайынлыҡта улар туҡтамаясаҡтар, туп-тура үтә сығып текә тауға ынтыласаҡтар. Шуға ла ул ҡайынлыҡ ситенән ҡыйҡыулай-ҡыйҡыулай сабып үтеп китте.

Бына улар алда, ике йөҙ аҙым самаһы ерҙә генә, баралар. Ә ниңә улар өсәү генә? Ҡайҙа береһе? Нияз шунда уҡ төшөндө: иғтибарҙы алырға йә үҙе ҡасып ҡотолорға теләп, береһе сауҡалыҡ эсендә йәшенеп ҡалған. “Артта килгән Айҙар менән Мөхәммәт уға «хужа» булырҙар әле”, – тип уйланы ул. Еткәндән-етә килде Нияз бүреләргә. Йән-фарман сабып барған килеш арҡаһынан мылтығын алып маташҡанда, бүреге осоп ҡалды. Арттан еттем тигәндә, ҡапыл бүреләр таралып китте. Араларына кереп уҙып барғанда, һыңар ҡулы менән нисек етте шулай төбәп атып ебәрҙе. Ҡабырғаһына йәҙрә тейгән бүре баш аша тәкмәсләп барып төштө лә, ғырылдау аралаш сайылдау ауазы сығарып, ситкә саба башланы. Алда барған ҙур башлы бүре текәлеккә ана етәм, бына етәм тип ынтыла. Ярһыған дүнән, Нияз бороп өлгөрмәһә лә, бының артынан төштө. Уға егерме аҙым самаһынан тағы ла атып ебәрҙе, тик тейҙерә алманы, ә ҡабаттан мылтыҡ яһарға ваҡыт та, мөмкинселек тә юҡ ине. Эйәренә ҡыҫтырылған киҫтәнде һурып маташҡанда, ҡулынан мылтығы төшөп китте. Киҫтәнде алып, ҡулына яйлап тотоуы булды, Ҡола дүнән бүрегә барып етте лә, йыртҡыстың сапҡанда күтәрелә биреп барған ҡойроғонан ғәҙәте буйынса тешләп күтәреп, уңға бәреп ебәрҙе. Әле һауала уҡ бөгәрләнеп, дүнәндең башынан йә муйынынан тешләргә ынтылған бүренең башына Нияз көслө итеп киҫтән менән һуҡты. Әллә күҙе, әллә теше – әммә бармаҡ башындай ҡан төймәләге ҡар өҫтөнә осто.

Ҡола дүнән үс алыу, ҡон ҡайтарыу тигән тойғоно белмәй. Әммә ҡолон саҡтағы үҙәк өҙгөс әрнеү, аслыҡ, шул сөсәрәк һаҫыҡ еҫ, ыржайып торған теш, ут кеүек сәскән күҙ ҡараштары, һалбырап торған йыуан ҡойроҡ менән бәйле ине. Ауыҙынан ҡара ҡан китеп бөгәрләнеп барып төшкән йомшаҡ кәүҙәгә ике алғы аяғы менән баҫып, аша һикерҙе лә килгән юл менән кире ҡасҡан өсөнсө бүре артынан сапты.

Ҡуйылыҡҡа кереп ҡотолорға иҫәп тотто йыртҡыс. Әммә Ҡола дүнән уға һә тигәнсе етте. Ҡайҙа ҡасырға белмәгән бүре, боролоп, алғы аяҡтарына сүкәйә биреп, тештәрен ыржайтып ҡаршы торҙо. Сабып барған килеш киҫтән менән башына киҙәнһә лә, нисектер ашараҡ һуғып, бүренең таз һөйәген имгәтә һуҡты Нияз. Артыҡ ынтылыуҙан аты өҫтөнән бүре янына үҙе лә осоп төштө. Ике артҡы аяғы ла хәрәкәтһеҙләнгән бүре дошманының һул ҡулбашынан ҙур итеп ҡабып әләктереп алды. Бәйләмә күлдәк, ҡырылған бишмәт аша бүре тештәре тәненә етеп, әсе һыҙланы. Хәҙер, хәҙер ул тешләгән ерен ысҡындырыр ҙа, бүре ғәҙәте буйынса, муйынынан алыр. Ул саҡта үлемдең төштә түгел, өндә булыу ихтималлығы Ғаяздың аңына бик тиҙ барып етте. Уға ынтылып үлемесле ерҙән алырға, бәхеткә күрә, артҡы ике аяғының хәрәкәтһеҙлеге ирек бирмәне. Нияздың да һул ҡулы төптән үк хәрәкәтһеҙ ҡалды. Аңын, зиһенен туплап, бил ҡайышына эленгән хәнйәрен уң ҡулы менән һурып алды ла тотҡаһына тиклем бүренең күкрәгенә ҡаҙаны. Шылҡ итеп һулып, аҫылынып төштө бүре кәүҙәһе, әммә тешен ысҡындырманы, ауырлығы менән Нияздыерге ауҙарҙы. Сабып килеп еткән Айҙар, ҡамсы һабы менән бүренең ауыҙын ҡайырып асып, һаҡ ҡына Нияздың ҡулбашын ысҡындырҙы. Ул сауҡалыҡ эсендә йәшенеп ҡалған инә бүрене атып, Туры йүгерек ҡойроғона бәйләп, һөйрәттереп килтергәйне.

Алда атылып яраланған бүре, иҫ йыйып, тауға менеп ҡотолдо әлегә, әммә

уның да көндәре һанаулы ғына ҡалғанлығын белделәр. Ҡарға йығылып ауа-түнә китеүе, ҡан ағыуы быға дәлил ине.

***

Был ваҡиға тирә-яҡта ҙур ғына шау-шыу тыуҙырҙы. Маҡтаныу менән маҡтау һүҙҙәре бергә йөрөнө. Һә тигәнсе өс бүрене ике йүгерек ат арҡаһында һуғып ал әле! Тауға ҡасҡан яралы бүрене икенсе көн Мөхәммәт менән иптәштәре алған.

Иң ныҡ маҡталғаны шулай ҙа Ҡола дүнән менән Туры йүгерек булғандыр. Уларҙың исемдәрен яҡын-тирәләге һәр ауыл малайы ауыҙынан төшөрмәне. Берәйһенең ҡапҡа төбөндә йыйылып һөйләшеп торғандамы, аят ашындамы – яҙға тиклем ирҙәр ауыҙында ла йыш ҡына Ҡола дүнәндең ҡарыулығы, Туры йүгеректең ҡыҙыулығы маҡталды.

Яҙ етеп, ташҡын һыуҙар ағып, сәсеү эштәре бөткәнгә тиклем Ҡола дүнән менән Туры йүгеректе онотоңҡорап торҙолар, быға халыҡ күңеленә яҙғы миҙгел килеүе һәм сәсеү эштәре, мал-тыуарҙы ҡара ергә баҫтырып ебәреү мәшәҡәттәре сәбәпсе ине. Ауыл кешеләренең йыл һайын тыныс ҡына үткәреп ебәрә торған шөғөлө һәм кисектергеһеҙ бурысы ине был эштәр. Шул мәшәҡәттәрҙе үҙҙәре башҡарһа ла, шул уҡ кешеләрҙең үҙҙәренә үк һиҙелмәй ҙә үтеп китте яҙғы эштәре. Йәбешкәкләп торған ҡайын бөрөләре бер тиндәй генә япраҡ яралтты. Торналар, өйрәктәр, сыйырсыҡтар ҡайтып оя ҡороп, үҙ-ара мәж килделәр. Моңло, һағышлы ҡысҡырыштылар, быжҡылданылар, ҡапҡа бағаналарына ағылған оялары өҫтөндә ҡанаттарын елпей-елпей һайраштылар, ҡолонсаҡ булып кешнәнеләр.

Ҡола дүнән өсөн яу алды тыныслығы ине был. Көрлөгө бар, тамағы туҡ, тик күңеле нимәлер теләп ҡытыҡлаһа ла, аңлай алмай. Ҡара бейә лә, Ерәнсәй ҙә уның янына килеп ҡымсыҡлай, ботон, сандырын тешләгән кеүек ирендәре менән ҡыҫҡылай. Әллә нимә булды ла ҡуйҙы Ҡола дүнәнгә. Күңеле теләй, мөрхәте булдыра алмай. Шуға ла ул енләнә, тиктән-тиккә йәнәш торған аттарға тибә, тешләп ала. Дөйөм кәртәлә бейәләр менән тороу ҡапыл өҙөлдө. Ҡола дүнәнде лә, Туры йүгеректе лә айырым тораҡҡа бәйләнеләр. Аҙыҡ өҫтәнеләр, көн һайын йә етәкләп, йә менеп иртәле-кисле алты-ете, хатта ун саҡрым ер йөрөттөләр. Көн аша, ике саҡрымдан башлап оҙонлоҡто яйлап өҫтәй килә, саптырҙылар. Туры йүгерек менән һәр саҡ бергә саптырҙылар, әммә бербереһен уҙып китергә ирек бирмәнеләр.

Ун – ун биш көн үтеүгә һабантуй булды. Һигеҙ саҡрымға Ҡола дүнән беренсе, Туры йүгерек икенсе килде. Шундай уҡ һабантуйҙар күрше хужалыҡтарҙа ла булып, Шамил ҡарт менән Айҙар Ҡола менән Турыны уларға ла алып барып, башҡа аттарҙы әллә ҡайҙа ҡалдырып, уҙып ҡайттылар.

Тағы ла ун көн үтеүгә район һабантуйына алып барҙылар. Быйылғы йылда бәкәлдәренә аҡ бәйләнгән оҙон аяҡлы бейектәр күп ине. Өҫтәрендә ултырған кешеләре лә аҡтан кейенеп алған. Ярһыуын тышҡа сығармай сабыр ғына көттө Ҡола. Белә ул хәҙер ҙур ярыш буласағын. Бына аттарҙы бүлгеләп, бер өлөшөн бер түңәрәк оҙонлоғона – ике саҡрымға ебәрҙеләр. Унан ике, өс түңәрәк саптылар. Дүртенсе түңәрәк һигеҙ саҡрым ине. Уға оҙон аяҡлылар ҙа, урындағы тәпәштәр ҙә, Туры йүгерек тә эләкте. Оҙон аяҡлылар башта уҡ алға ынтылды. Ләкин үҙен уҙҙырып өйрәнмәгән Туры, араларында йомғаҡтай тәгәрәп, әлегә һис икенселекте бирмәй елә. Дүртенсе түңәрәккә боролғанда, алдағы оҙон аяҡ буйға түгел, нисектер өҫкә, текә һикереп саба башланы. Туры йүгерек талһа ла, быға етеште. Түңәрәктең дүрттән бер өлөшө ҡалғас, ул алға сыҡты. Ҡарап торған халыҡ шау-гөр килә. Милли кейем кейгән Гөлсөм өҫтөндә күбәләктәй елпенеп, Туры йүгеректең йомарланып елеүенә тағы ла матурлыҡ өҫтәп, беренсе булып килеп керҙеләр. Тағы ла бер түңәрәкте шул тиҙлек менән сыға алыр инеме йүгерек? Былай тиҙлекте тоторға тәҡәте бөтөп барғандай. Быны үҙе лә

һиҙә. Туры йүгерек ҡыҫҡараҡ араға сабышыу аты ине шул. Ә бына Ҡола дүнән! Уға барыһы ла бер. Һигеҙ ни ҙә, ун ике ни, хатта ун алты, егерме саҡрым да – уға барыбер.

Быйыл оҙон бәйге – ун ике саҡрым. Йөлдәһенә, беренсе урынға, автомашина тиҙәр. Бик күп ерҙән исемле һәм һыналған аттар килгән. Сит өлкәнең йәнәш ятҡан барлыҡ райондары, йүгерек аттар тәрбиәләгән махсус ат һарайҙары бөтәһе егермегә яҡын йүгерек килтергән оҙон бәйгегә. Уҙған атҡа, төп йөлдәгә өҫтәп, бер тонна һоло ла ҡуйылғас, сабыу оҙонлоғо тағы ла өҫтәлеп, ун дүрт саҡрымға етте. Бәйге шартының ҡапыл ҡатмарлашыуы башҡалар өсөн хафалы булһа ла, Ҡола дүнән өсөн ҡулай кеүек. Сөнки ниндәй йыраҡлыҡҡа булмаһын, ниндәй тиҙлек менән сығып китә, шул тиҙлек менән етер еренә етә торған ҡарыуы бар Ҡола дүнәндең. Бына әле лә теҙҙеләр ҙә ҡысҡырып та ебәрҙеләр. Киттеләр йомолоп алға.

Бәйге ниндәй йыраҡлыҡҡа булмаһын, тәүге әйләнештә үк сылбыр булып һуҙыла торған аттар. Ә был бәйгелә әлегә башҡасараҡ. Бер-бер артлы туп-туп булып өскә бүленгәндәр ҙә, сәмле ярыш дауам итә. Йүгеректәрҙең арҡаларында ултырған малайҙар түгел, ә йүгеректәр үҙҙәре ярышалар. Сөнки һәр береһе тәүге тапҡыр ярышмай. Хатта аттар ҙа бер-береһен танып-белеп бөткән тиерлек. Ҡола дүнән тәүге өйөрҙөң ситендә барҙы. Бында әҙ генә алда барған аттарҙың тояғынан осҡан таш та, балсыҡ та юҡ кимәлдә, хатта саң да юҡ. Шулай туп-туп булып дүрт әйләнеште, йәғни һигеҙ саҡрымды үттеләр. Сабыш юлының яртыһын шулай туп-туп булып үтеү был бәйгелә бик көслө, бик йүгерек аттарҙың йыйылғанлығы тураһында һөйләй. Бишенсе әйләнештең яртыһында сылбыр һуҙыла башланы. Кемдер алғы туптан икенсеһенә ҡалды, кемдер икенсеһенән алға күсте. Әммә Ҡола дүнән, танауы көмрө һоро, бейек туры, аҡ яллы, аҡ ҡойроҡло саптар һәм оҙон күк тәүге тупта ныҡ беректеләр. Алтынсы әйләнештә улар ҙа һуҙылды. Көмрө танаулы Һоро юл башланы. Башын уның ҡойроғона терәп Ҡола дүнән килде. Башҡалар артта, кем кем артынан киләлер, Ҡола дүнәндең унда эше юҡ.

Көмрө танауҙы хәҙер үк уҙып китер ине, өҫтөндәге Юлай ауыҙлыҡты ысҡындырмай, тота-тота килә. Алтынсы әйләнеш бөткәндә, бер тигеҙ тиҙлек менән сапҡан Ҡола дүнән еңел генә көмрө танауҙы уҙып, алға сыҡты. Көмрө танау Һоро тынсыға башлағайны, әммә улар башҡа аттарҙан байтаҡ ара алда баралар. Етенсе – һуңғы әйләнеш... Ҡола дүнән енләнгәндән-енләнде. Ауыҙлығын тештәре менән ҡыҫып алды ла, өҫтөндәге Юлайҙы бар тип тә белмәй, осто ла осто. Еңел ине уға сабыуы. Әйтерһең дә, Ҡола үҙ һалмағына атлап бара. Йәшәрен йәшәгән, ашарын ашаған оло кешеләр ҙә Ҡола дүнәндең сабыу алымына аптырай ине. Дүрт аяҡлы барлыҡ йән эйәһе артҡы һәм алғы аяҡтарын алмашлап бергә йөрөтөп йәки артҡы ҡуш аяҡтары алға киткәндә, был алғы ҡуш аяҡтары артҡа китеп саба ине. Ҡола ҡонан юрға булмаһа ла, сапҡанда юрға алымы менән сапты. Алғы уң аяғы менән артҡы уң аяғының тибенгеһе бер булды. Улар ҡушлап этәргәндә, һул аяҡтары алға ынтыла ине. Шуға ла уның сабыуы аңҡытиңке атлап барған кеүек тойолһа ла, өҫтөндә ултырған малай өсөн йомшаҡ, уңайлы.

Етенсе әйләнештең яртыһына еткәндә, көмрө моронло Һоро ла бер ҡауым артта ине. Халыҡ гөж килә. Бөтәһе лә бер тауыштан: “Ҡола йөрөк килә, Ҡола йөрө-ө-өк!” – тип ҡысҡыра, ҡул сабалар. Был – Ҡола йөрөктө барлыҡ ғәләмдең данлауы, ҡотлауы, ә күбеһенең сикһеҙ ихтирамы һәм ғорурланыуы. Еп-еңел, һис арымай, хатта йүнләп тирләмәй ҙә килеп инде таҫма һыҙығына. Әҙ генә барғас, ул туҡтаны. Халыҡ Ҡола йөрөктөң өҫтөнән Юлайҙы һөйрәп төшөрөп, һауаға сөйҙө. Ҡола йөрөккә тик һоҡланыулы ҡараш ҡына ташланылар, бөтәһенең иғтибары – Юлайҙа.

Шул һабантуйҙан һуң Ҡола дүнәнде бөтә район "Ҡола йөрөк" тип кенә йөрөтөр булды. Унының Ҡола ҡонан, Ҡола дүнән тигән исемдәренә өйрәнгән ауыл халҡы ла, малайҙар ҙа иҫке исемен башҡа әйтмәне. Ҡола дүнән бөтәһе өсөн дә "Ҡола йөрөк", ҡайһы ваҡыт "Йөрөк ҡола" булды ла ҡуйҙы.

...Аҙна ла үтмәне, Ҡола йөрөктө, Туры йүгеректе машинаға тейәп әллә ҡайҙа, иге лә, сиге лә булмаған дала иленә алып киттеләр. Далаһы ла дала, исмаһам, – осо ла, ҡырыйы ла юҡ. Алда ла, артта ла һәр тарафта күк тик дала менән тоташҡан. Тау ҙа, түбә лә, ағас та юҡ. Ҡайһы саҡта уяҙ-уяҙ булып ятҡан уйпаттары бик оҙон, осона сығырмын тимә. Бына шул киң диңгеҙ-далаға килделәр ярышҡа. Меңәрләгән кешеләр, аттар, машиналар... Ҡола йөрөк үҙ ғүмерендә күрмәгән арҡаһында үркәсе булған хайуандар, йәмһеҙ аҡырған оҙон ҡолаҡлы йәшәмеш "тайҙар"... Сабып ҡайта торған ергә машинала барҙылар. Егерме дүрт саҡрым, тинеләр.

Уҙышыу шарттары бында бөтөнләй башҡаса. Бер ниндәй ҙә бүлгесләү һәм төрлө аралыҡҡа сабыу булманы: йөҙәрләгән атты теҙҙеләр ҙә оран һалдылар. Дала киң. Юл да юҡ, хатта ҡайһы йүнәлештә сабыуыңды ла белмәҫһең. Килгән яҡҡа сабырға, кире... Бик шәптәр туҙан болото күтәреп алға ынтылды. Уңда ла, һулда ла тиҫтәләгән аттар саба. Ҡом ауыҙға, күҙгә керә, алға ҡарарға ҡамасаулай. Ҡола йөрөк шул ҡом бураны эсендә сарғаланып һуҙылды ла һуҙылды. Бер һыҙмаға һуҙылған аттарҙы уҙа-уҙа, бына ул ҡом буранының шыйыҡланған һәм үтәнән-үтә күренгән еренә килеп сыҡты. Алдан алты-ете ат бара. Оҙон, бик оҙон уяҙлыҡтың тартымына үрләгәндә, бишәүһен еңел генә, йөҙгәндәй уҙып китте. Тағы ла икәүһе алда, еңел сабалар, ҡәһәрҙәрең. Бейектәр, оҙон аяҡлылар. Кәүҙәләре лә, баштары ла ҡаҡ һөйәк кеүек. Төҫтәре нәҡ тә шул аяҡ аҫтында ятҡан ҡом инде. Хәс тә ҡом аттарының төҫө. Кешеләр уларҙы "Ахал-текин" тип атайҙар ниңәлер. Бөтәһенә лә бер исем, шикелле. Ай-һай, бик сыҙамлы тарамыштар икән! Ҡырыйһыҙ далала күпме алышабыҙ, әлегә бушамайҙар, киләләр әле, киләләр... Шулай ҙа бер оҙон үрләүҙә, йомшаҡ һәм ярты тубыҡҡа тиклем батҡан ерҙә, килеп етте Ҡола йөрөк Ахал-текиндарға. Етте, иркен етте. Тегеләрҙең тайҙыҡындай бәләкәй генә тояҡтары ҡомға тайаҡ кеүек керә лә китә. Ҡола йөрөктөң текә, ҡаты, киңерәк, оҙонораҡ тояғы ҡомға ныҡ уҡ батып бармай.

Ахал-текиндарға нисек еңел еткән – шулай иркен алға һурылып үтеп китте Ҡола йөрөк. Алда даланан башҡа һис нәмә күренмәй. Ҡайҙа, ҡайһы нөктәгә уҡталырға һуң тигәндә, ҡапыл алда, бик йыраҡта, әләм елберләтеп машина барғанын күрҙе. Уның юл күрһәтеп барғанын аңлап, тура артынан төштөләр. Хәҙер инде артта ҡалған ер кеүек батҡыл ҡомлоҡ бөттө. Аяҡ аҫты ҡаҡ, дыңғырлап, ярылып ята. Ашыҡмай, һуҙылып, хатта яйлап ынтылды Ҡола йөрөк. Әммә уның һикереүе оҙон ине. Сапты ла сапты ул. Бына бер ваҡыт, үҙ аттарын уҙҙырыу өсөн, ҡаҙаҡ һыбайлылары пәйҙә булды. Ҡола артынан, ахалдарҙы ҡалдырып, бер йөҙ ҡуһай ерҙә ала ат һыпырта ғына. Ҡаҙаҡтар, Ҡола йөрөктө ҡыя һуҡтырыу, икенсе йүнәлешкә бороу өсөн, сыбыртҡылары менән һелтәнеп алға сыҡты. Ләкин арттарынан Туры йүгеректе менеп, әллә нимә тиеп ярһып ҡысҡырып, сыбыртҡыһын болғай-болғай Айҙар килеп етте. Ҡаршы алыусылар үҙ-ара әҙ генә һелтәшкәндә, Ҡола йөрөк араларынан йылп итеп уҙҙы ла китте. "Тура, тура!" – тип ҡысҡыра ине арттан Айҙар. Бына офоҡ ситендә йыйылған кешеләр, «жыйын» –- һабантуй урыны күренде.

Ҡола йөрөк һабантуй яланына килгәндә кешеләрҙең уға юл биреп, ике яҡҡа оҙон булып теҙелеп тороуҙарына өйрәнгән. Ә бында улай түгел, имеш. Барлыҡ халыҡ киң далаға тигеҙ булып торған да аттарҙы көҙәтә. Халыҡтың ҡайһы тирәһенә барып туҡталырға икәнлеге билгеһеҙ. Ике яҡҡа ярылып, юл биреүсе юҡ. Шуға ла ул яйлай бирҙе. Өҫтөндәге малайы Юлай ҙа аптыраны. Дөйәләр һәм балаҫ-келәмдәр йәйелгән арбалар, машиналар тирәһенә ситкә үтеп, халыҡ

алдынан сабып буйлап, ситкә тиклем барып, яйлап атлауға күсте. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, ала ат туп-тура арбалар янына барып туҡтаны. Малайы өҫтөнән төшөп, машиналар алдына ҡуйылған өҫтәлдәр артында ултырған йыуан-йыуан кешеләргә баш эйҙе. Ул арала ала аттың өҫтөнә биҙрә-биҙрә һөт һиптеләр, уҡалы-суҡлы еңел балаҫ ябып, кеше күҙе теймәһен тип, ситкә алып киттеләр. Намыҫтары килгән хужалар Ҡола йөрөктө ҡарарға ғәрләнһәләр ҙә, халыҡ уға ҡыҙыҡһыныуын йәшермәне. Күп кеше, Ҡола йөрөктө ҡарарға тип, ул йөрөгән яҡҡа ағылды. Хужалар уға иғтибар итмәҫкә тырышты, әммә, күп аҡса вәғәҙә итеп, Ҡола йөрөктө һатып алырға яусылар ебәрҙеләр. Ала ат иһә дала иленең бик ҙур, бик оло дәрәжәле кешеһенеке ине. Баш ҡаланан үҙе килмәһә лә, уның өсөн бөтә Көнсығыш Уралға, дала яғына даны сыҡҡан Ҡола йөрөк менән Мәскәүгә ҙур йыйынға алып барырға әҙерләнгән Ала атты һынап ҡарау зауығы ине был йыйын.

Ала аттың оло жыйында уҙып килеүе тураһында дала иленең гәзиттәре яҙып сыҡты, радиоһы ҡат-ҡат һөйләне. Ә Ҡола йөрөктөң дала илендә ҡаҙанған даны иленә ҙур булып килеп етмәне, тик Шамил ҡарт менән Айҙар ауыҙынан ғына данланды. Бесән әҙерләү, малдарҙан көндәлек артым алыу менән мәж булғанда, рухи күтәренкелекте тотоусы бер аттың уҙыуы мөһим хәбәр түгел, тип баһаланы урындағы район етәкселәре. Ҡола йөрөк тураһында яҙылған мәҡәлә районда ла, республикала ла урын таба алманы – уның сит ерҙә, мәртәбәле жыйында уҙыуы, рухи күтәренкелекте тотоусы, ғорурланырға хаҡ биреүсе, еренең, халҡының бәҫен арттырыусы ҙур еңеү, тип үҙ ерендә баһаланманы.

Был илдә башҡортто ҡо кеүек төрлө ярыштар менән үткәрелгән һабантуй юҡ. Уны бында күберәк жыйын тип атайҙар. Жыйындың төп мәғәнәһе йәки урындағы ваҡиғаға, маҡсатҡа ярашлы төп уйыны, төп ярышы була. Ҡыҙ ҡыуыу, оҙон бәйге йә көрәшселәр алышы.

Бөгөн йыйындың төп маҡсаты оҙон бәйге ине. Ҡола йөрөктө ҙур аҡсаға һатып алыуҙарына ышанған яусылар, тәҡдимдән һуң кире яуап алғас, аптырап, ҡаушап ҡалдылар. Һис төшөнмәнеләр Айҙар менән Шамил ҡарттың баш тартыуына. “Юҡ, ул бит беҙҙең ат түгел, колхоз аты”, – тигәс, аптырауҙары сиккә етте. “Бер атҡа ла хужа була алмайһығыҙмы? Хәҙер машинағыҙ артынан ун машинаға тейәп өйөр ебәрәбеҙ, ризаһығыҙмы? “ – тинеләр. Кире яуап алғас: “Машинағыҙ ҡайтып етмәүе лә мөмкин бит”, – тигәнерәк хафа әйттеләр. Ҡола йөрөктөң көйҙөрөлгән икәнлеген белгәс, ябай эш аты хаҡына төшөрөп тә һөйләшеп ҡаранылар. Аш-һыуға саҡырҙылар.

Эштең бигүк ыңғай бармағанын һиҙенгән Шамил ҡарт тиҙерәк ҡайтыу юлына сығыуҙы хуп күрҙе.

Иҫән-һау ҡайтып еткәс, Ҡола йөрөк әҙерәк ял итте. Ҡоро бесәндән ялҡҡайны. Йылға үҙәнендә туйғансы йәшел үлән ашаны. Бер нисә көн булһа ла, Ҡара бейә, ҡолоно, Ерәнсә һәм башҡа аттар менән тышауһыҙ йөрөнө. Аҙна үтеүгә элекке кеүек ғәҙәти эш башланды. Әллә эш аттары етешмәне, әллә йыраҡ ерҙәге йәйләүгә тик Ҡола йөрөктө бирһәләр генә риза буласағын шарт итеп ҡуйҙылар. Быйылғы йылда уны тағы ла шул уҡ Ғиниәтулла алды. Шул уҡ алыҫ юл, ауыр йөк, көндәр, ҡайһы саҡта төндәр буйы ас бәйле торған ваҡыттар ҡабатланды ла ҡабатланды. Ҡуштанға шул уҡ Ерән бейә. Ерән бейәнән һаман да ҡуштанлыҡ та, ауыр йөктө тартышыу ҙа ярҙамын тойманы Ҡола йөрөк. Йөклө арбаны бер үҙе тартты ла тартты. Ҡайһы саҡта арттан ҡыуалау тойһа, Ерән бейә ваҡытлыса бер үк арала тартып та ала, әммә ауыр батҡыллыҡта йә оҙон, текә тауға табан ул һис тартмай. Тауҙан төшкәндә, ғәҙәттә, ул саба башлай. Арбаны ҡыя тартып, йә юлдан сығара, ағасҡа һуға, йә булмаһа ҙур таштарға бәрҙереп тәгәрмәсте вата. Шунан башлана Ҡола йөрөк өсөн тәгәрмәсһеҙ арбаны көпсәгендә ер йыртып ауылға тиклем тартыу.

Тик ҡыш етһә генә, Айҙар уны үҙенә ала. Йәшәү еңеләйә, тамаҡ иркенәйә. Яҙ булһа, тағы ла шул уҡ бәйгеләр. Әллә нисә йыл шулай үтеп китте. Ҡола йөрөк һаман да районда һәм күрше тирә-яҡта бер атты ла алға сығарманы. Хәҙер уның данына күнегеп тә бөттөләр кеүек. Берәү ҙә, ҡайһы ат уҙыр, тип бәхәсләшмәне, алдан хәл ителгән ярыштың тик һөҙөмтәһен генә күҙәтәләр ине.

Ҡола йөрөк, йылдар үтеү менән, ярайһы уҡ олоғайҙы. Яҙ етһә, ярыш булырын белеп йөрәкһей башлай. Үҙ-үҙен бәйгегә әҙерләгән кеүек, күнегеү сабыштарын көтөп кенә тора. Шулай ҙа һуңғы йылдарҙа Ҡола йөрөктөң иҫендә ҡалырҙай ике ваҡиға булды.

...Быйыл һәр йәй ауыр йөклө арбаны тартышмаған Ерәнсә урынына Ҡара бейә ҡуштан булды. Еңелгә, күпкә еңелгә төштө йәйен йәйләүгә йөрөү Ҡола йөрөк өсөн. Ҡайҙа ла йөктө тигеҙ генә тарталар. Көтөү көткәндә алмашлап ял итәләр. Арба ла юлдан сыҡмай, ватылмай ҙа. Төпкө ат булараҡ, Ҡола йөрөк тәртәне нығ тота, төп ауырлыҡты ул һөйрәтә, ә Ҡара бейә уға ысындан да ҡуштан булды. Шуға ул ҡышҡылыҡҡа көрлөгөн әллә ни ташламай керҙе.

Яҙ булды. Ғәҙәттәгесә әҙерлек башлап йөрөгәндә, Ҡола йөрөктө машинаға баҫтырып ҡайҙалыр алып киттеләр. Машинаның артына ҡыҫтырып бәйләнгән бесән төктәре, таҡта һауытта етерлек һоло, хатта көплө сапсаҡта таҙа һыу ҙа бар. Аяҡ аҫты йомшаҡ, унда ҡалын итеп ағас онтағы һалғандар. Ҙур тауҙар, урмандар аша барҙылар ҙа барҙылар. Киң йылғалар аша үтеп, ҙур ҡалаға барып еттеләр. Яҡшы һарайҙа бер көн ял иткәндән һуң, тимер менән уратылған ҙур түңәрәккә алып сыҡтылар.

Халыҡ бында һабантуйҙағы кеүек аяҡ өҫтө тормай. Бөтәһе лә түбәһе ябылған япма аҫтында ултыра. Бында аттар бөтәһе лә оҙон аяҡлылар. Һыбайлылары ла оҙон ҡуныс күн итекле, һәр береһенең арҡаһына һан яҙылған. Ҙур баш ҡаланан илдең иң ҙур етәксеһе килеү айҡанлы, Ҡола йөрөктө бәйгегә әҙерләп сығарыу әлеге Айҙарға йөкмәтелгән. Милли кейем кейгән ҡыҙ атланһын, тип тә бойорҙолар. Атта йөрөп өйрәнгән, буйға етеп килгән ҡыҙын – Гөлсөмдө лә килтерҙе Айҙар. Һәр бер төрлө аралыҡта ла ярышта ҡатнашырға тәҡдим ителһә лә, тәүгеләрендә ҡатнашыуҙан Айҙар баш тартты. Сөнки тәүге сығыштарҙың араууғы бик ҡыҫҡа. Ҡола йөрөк оҙауға сабып өйрәнгән. Шуға ла Айҙар ике араға: алты һәм ун ике саҡрымға ярышта ҡатнашырға ризалашты. Тәүге алты саҡрымға ярышҡанда Ҡола бер аҙ тирләп яҙылһа, унан һигеҙ, ун саҡрым ярыштары араһында ял итһә, ун ике саҡрым оло бәйгелә ул бөтә Урал, хатта ялан яҡ аттары менән ышаныслы ярышасаҡ, тип уйланы.

Бында ул Ала атты тағы осратты. Ҡола йөрөктөң ҡатнашасағын белмәйенсә килтергәндәр икән, алыҫ ерҙе алыҫ тимәй. Ҡола йөрөктөң ун ике саҡрымға сабырын белгәс, Ала атты ун саҡрым арауыҡҡа күсерҙеләр. Мәскәүҙән Өфөгә ил башлығы үҙе килгән дәһә ҙур йыйынға. Шунда уға “Аҡбуҙат” тигән йылҡы һарайы асып, тәүге бәйгене лә күрһәтергә ҡарар иттеләр. Бына, сират еткәс, алты саҡрымға – өс әйләнешкә ярыш башланды. Ҙур тиҙлек менән оҙон аяҡтар, ғәҙәттәгесә, алға сыҡтылар. Ләкин туңҡалаҡлап оҙон-оҙон һикереп ынтылған Ҡола йөрөк уларҙан ҡалманы. Өсөнсө әйләнештә алда барған ерән ҡашҡаға етте, тигеҙләнде, һәм ярыш һыҙығын да үттеләр. Мәскәү тиклем ерҙән килгән оҙонға, әлбиттә, беренсе урын бирҙеләр. Имеш, ул ярты башҡа алда булған. Ҡола йөрөк үҙенең тәүге тапҡыр икенсе урынды алыуын белмәне. Алда килде ул, алда!.. Уның алдында башҡа ат юҡ ине бит. Был араға сабышыу уға, ысынлап та, тик файҙаға ғына булды: тәне яҙылып, ҡаны таралып, дөйөм еңеллек килде. Башҡа аттар һигеҙ-ун саҡрымға ярышҡан арала, Айҙар уны етәкләп кенә йөрөттө, өс ижауҙай һыу эсерҙе, бер услам ваҡ күмекле шәкәр ҡаптырҙы. “Аҡбуҙат” һарайына халыҡ ағылды ла ағылды. Барлыҡ ултырырлыҡ урындар шығырым тулғанлыҡтан, сабыш яланы ситенән дә теҙелешкән кешеләр бик шаулы ине бөгөн.

Көндөң матурлығы ла һорап алған кеүек. Зәңгәр күктә һирәк-һаяҡ аҡ болоттар йөҙә. Ҡариҙел һыуының уйһыулығы ҡарағусҡыл йәшеллек менән төрөнгән дә офоҡҡа барып тоташҡан. Аҫта, тын ятҡан тонйороҡ күл шикелле, үҙенең ағышын һиҙҙермәй генә түбәнгә, Ағиҙелгә, ашыҡтырып, күгелйем һыулы даръя ята.

Ат бәйгеләре өсөн ҡулайлаштырып эшләнгән был һарайға кешеләрҙең бөгөн бик күп килеүенең ике сәбәбе бар ине. Беренсенән, ил башлығын күреп ҡалыу, сөнки бөгөн был ҙур ярыш һарайының асылыу тантанаһында уның ҡатнашыуы тураһында ҡалала иғлан, күп хәбәр йөрөнө. Ә ҙур илдең барлыҡ мөйөштәренән дә юртыу һәм сабыш аттарының ҡатнашыуы ла ғәйәт ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Ҡала халҡы ғына түгел, яҡын-тирә район халҡы ла был көндө ипподромға кереү билетына эйә булһа, үҙен бәхетле тойҙо.

Сабышыуҙар арбаға егелгән юртаҡтар ярышы менән аралаш барҙы. Әллә оло ҡунаҡҡа дәртле, көсөргәнешле ярыш ләззәтен оҙайтыу маҡсатында, әллә уҙғандарға, еңеүселәргә кинәт кенә бүләктәрҙең ҡиммәте артып китеүгә инде, ярыш арауыҡтары артты ла китте. Төп бәйге лә, оло бәйге тип аталып, һигеҙ урауға – ун алты саҡрымға етте. Ун алты саҡрымға сабышыу буласағы үҙенән-үҙе кешеләргә сәм һәм көсөргәнешлек өҫтәне.

Йөлдә, хәҙергесә әйткәндә, бүләк тә үҫте: еңел автомашина ҡуйылды. Ярыштар һәлмәк һәм етдиерәк төҫ алды. Ярышҡа сығыу ваҡытына бик әҙ ваҡыт ҡалһа ла, һәр кем уға үҙенсә әҙерләнде. Айҙар Ҡола йөрөккә бер телем икмәк биреп һәм биш-алты тамсы йода тамыҙып, тағы ла ике ижауҙай ғына һыу эсерҙе лә ярыш сәғәтен көттө. Тағы ла бер сәғәттәй ваҡыт үтте. Бына радио аша Оло бәйге иғлан иттеләр. Бында Мәскәү, Украина, Төньяҡ Кавказ, Урта Азия, Ҡаҙағстан, Урал, Ҡырғыҙстан, хатта Себер өлкәләренән дә бәйге аттары килгән ине. Һәр бер аттың тоҡом ҡағыҙын ҡарап, тикшереп сыҡтылар. Тоҡом ҡағыҙы булмағас, өҫтәренә ярыш аттарын тәрбиәләгән махсус ат фермаһы вәкиле түгел, ә ябай бер хужалыҡтыҡы булыуы өсөн, Ҡола йөрөктө ярышҡа индермәҫкә ҡарар итеүҙәре өмөттө бөтөнләй һүндерҙе. Тик Ҡола йөрөктөң хужалығы етәксеһенең юғары дәрәжәле кеше менән таныш булыуы мәсьәләне ыңғай хәл итте. Ҡола йөрөк бәйгелә ҡатнашасаҡ!

Тәүҙә аттарҙы тоҡомдарына ҡарап, айырым-айырым ярыштырырға уйлаһалар ҙа, быңдай ысул Оло бәйгенең мәғәнәһен ебәргәнлектән, барлыҡ тоҡомдарҙы бергә ебәрергә ҡарар иттеләр. Ҡырҡлаған баш ат йыйылды. Ала аттар икәү булып сыҡты. Береһе таныш ала – Ҡаҙағстандыҡы, икенсеһе әллә Тува, әллә Бүрәт иленеке. Уларҙың да тышҡы ҡиәфәттәре Ҡола йөрөк кеүегерәк. Баштарын текә тотмайҙар, тояҡ һаҡалары һәм өнтәйҙәре ҡыҫҡа, әммә текә, ял ҡойроҡтары ла урта тулы, оҙон тороҡло, күкрәкле, мундалары ҡалҡыу. Әммә баштары бәләкәйерәк булһа ла, итлерәк күренә. Ни тиһәң дә, Ҡола йөрөктөкө кеүек ҡаҡ түгел, атлағанда ҡойроҡтары ла осоп тормай.

Ярыш башланыр алдынан Ҡоланың ҡойроғо күтәрелә биреп, елдә елберләй башлай. Был – уның әкренләп кенә ярһый башлауының билгеһе.

Төрлө өлкәләрҙән килгән аттарҙың ярышы төрлө төбәктәрҙең, хатта милләт вәкилдәренең ярышы һымағыраҡ ҡабул ителде. Башҡортостандан төп бәйгесе булып өс ат ҡатнашырға тейеш булһа ла, исеме сыҡҡан Ҡола йөрөк һынамаҡҡа, ҡушымта кеүек кенә итеп саҡырылғайны. Сәғәт үтеүгә тантаналы рәүештә ярыштарҙың иң сағыу, иң көсөргәнешле, сәмле, иң һуңғы өлөшөнә – Оло бәйгегә саҡырҙылар. Тәүге алым – алты саҡрымға сапҡанда, Ҡола йөрөккә милли кейем кейгән Гөлсөм ултырһа, һуңғы бәйгегә Айҙар ҡыҙын ултыртырға шикләнде. Исемдәре сыҡҡан, спорт өлкәһендә дәрәжәләре булған тәжрибәле, жокей тип аталған еңел ир-егеттәр йүгеректәрҙә ярышалар. Шуға ла Айҙар Ҡола йөрөктә инде нисәмә йыл ярышҡан, әммә атҡа ауырая башлаған Юлайҙы мендерҙе.

Йылдар үтә, Юлай ҙа үҫә, хәҙер ул ярайһы уҡ һәлмәкле. “Нисек тә түңәрәктең эске ситенә алға, бик булмаһа, икенсе рәттә урынлаш”, – тип бойорҙо уға Айҙар ағаһы. Аттар бер һыҙыҡҡа һыймағанлыҡтан, уларҙы өс ҡат итеп теҙергә мәжбүр булдылар. Юл оҙон, ун алты саҡрым үткәнсе һайланырҙар, араларында ярышты аҙағына тиклем еткермәүселәр ҙә булыр, бәлки.

Юлай теләгән урынға тороу өсөн болаш та булып алды. Ҡулына үрмә ҡамсы тотҡан Юлай, һелтәнеп, үҙенә урын алды. Һуғышып китеү өсөн ваҡыт юҡ. Хәҙер, бына хәҙер ярыш башланыуға һөрән буласаҡ. Һәм ул булды. Ташҡын быуаны йырып аҡҡан кеүек һурылып киттеләр атҡайҙар! Ә беләләрме һуң хәйләһеҙ малҡайҙар ни өсөн сабышҡандарын? Танһыҡтарын ҡандырырғамы? Уҙыу данын, дан-шөһрәтен беләләрме, тоялармы? Уҙһа-уҙмаһа ла уларға барыбер түгелме? Кирелеп ялан киңлегендә сапҡас булған. Ғүмер генәләренең һәр көнө, һәр сәғәте менән хакимлыҡ ҡылған был кешеләр генә малҡайҙарҙың дан-шөһрәтен тоя ла, ҡуллана ла ала, тик аттар үҙҙәре түгел. Донъя бына шулай яралған. Телем-телем итеп туралған.

Ҡола йөрөк ташҡын ярһыулығы менән гөрөлөп сапҡан аттар араһында үҙ алымы менән оҙон-оҙон итеп тик алға ынтылып саба бирҙе. Икенсе түңәрәктә үк текә, өҫкә һикереп сапҡандар артта ҡала башланы. Ләкин төп ағым, төп йомғаҡ әҙ генә таралып, туп-туп булып еләләр. Һәр йомғаҡ биш-ете иҫәпләү араһында бер-береһенән айырылалар. Башҡаларынан айырылып, алты йүгерек бер туп булып алда бара. Ҡола йөрөк арттағыһының ҡойроғона башын еткерер-еткермәҫ саба.

Өсөнсө түңәрәкте үтеп, дүртенсеһен яртылағанда алғы йомғаҡ та һүҙылды. Уны тамамлағанда алдағы оҙон аяҡтарҙың өсәүһен Ҡола йөрөк артыҡ ашыҡмаған төҫлө еңел генә артта ҡалдырҙы. Бишенсе түңәрәктә алда барған өсәүҙең береһе бәкәлдәре ҡаймығып йығылып ятып ҡалды, ҡалған икеһе арып, сапмаҫ хәлгә килде. Бушаҡ ҡына һикереүҙән тинтәк-тинтәк атлауға күстеләр, ә Ҡола йөрөк барыһына лидер булып ҡалды. Шулай алға сығыуға дәғүәсеһеҙ алтынсы түңәрәкте тыныс ҡына үтте. Өҫтөндәге малайы артына боролоп ҡарағанда, артта дүрт ат өймәкләшеп баҫып килгән кеүек күрҙе. Алда тағы ла ике, юҡ, бер түңәрәктән әҙ генә артыҡ ара ҡалған. «Уҙабыҙ, уҙабыҙ, тағы ла уҙабыҙ» тигән ҡыуаныслы уй-зиһенен солғап алды. Әллә ҡайҙан күктән, йомғаҡ ут-бәхет, унан ғорурлыҡ булып осоп күкрәгенә килеп керҙе лә, осҡондары сәсрәп, эстә ярылды. Мейеһенән табан осона тиклем зымбырлап, әллә нимәләр йүгерҙе. Ҡалын йөн ойоҡ эсендәге аяҡ тәпәйҙәре, ҡолағы ут булып яна. Алда – бер генә урау, шикелле. Киләләрме, әллә ҡалдылармы артан килгән баҫҡаҡтар?

Һуңғы урауға боролғанда Юлай арттағыларҙың күпме арауыҡта килеүҙәрен самалар өсөн тағы ла боролоп ҡараны. Нәҡ шул ваҡытта Ҡола йөрөк әллә ниндәй хәрәкәт яһаны ла ҡуйҙы. Уның алдында нимәлер эткәме, бүрегәме оҡшап ята ине. Шуға ҡарасҡынан ҡапыл өрккән йөрөк ситкәрәк һикерҙе. Өҫтөндәге Юлай, тигеҙлек һаҡлап ҡала алмайынса, осоп төшөп ҡалды. Хәҙер Ҡола йөрөк өҫтөндә ултырып ауыҙлығын йә тарта, боролмаларҙа йә бора биргән етәксе юҡ. Ғүмер буйы бәйҙә тороп, ҡапыл сиселеп ебәрелгән тай кеүек, иреккә сыҡты Ҡола йөрөк. Еңел дә булып ҡалды. Иреклекте һиҙгәс, тағы ла ғәйрәтләнде ул, ҡойроҡтарын күтәреп, көтөүен эҙләгән аҙау айғыр кеүек ғәйрәтләнеп, кешнәп ебәрҙе. Ҡола йөрөк ғүмере буйы бәйгеләрҙә сабышып, әлегә тиклем уны бер аттың да уҙғаны булмауға күнеккән. Иҫәп белмәһә лә, күңел хисабы бар уның. Бәйгенең аҙағы булыуын ул кешеләрҙең йүгерешкәненән, ҡул болғауынан, ҡысҡырышыуынан, ярыш яланының айҡан-сайҡан килеүенән белә. Шуға күрә, туҡтатыусы булмағас, үҙенән-үҙе, арҡаһында кешеһеҙ һуңғы түңәрәккә йомолдо. Сапмай ине ул, оса. Уҙыуға, беренсе килеүгә ныҡлы маҡсат ҡуйған кеүек ине

малҡай. Ҡуйғандыр, һис шикһеҙ ҡуйғандыр, сөнки өҫтөнән осоп төшөп ҡалған Юлайға ла ул туҡтаманы. Ҡамасаулама, тиҙерәк бөтәйек беренсе булып, тигәндәй, юлға сыҡҡан Юлайҙы тапай яҙып, көслө итеп бышҡырып, ҡотороноп үтеп китмәҫ ине.

Һуңғы ураүҙың һуңғы саҡрымы башланды. Әйтерһең дә, Ҡола йөрөктө кемдер ҡыуалап саптыра, арҡаһында ултыра. Белгәндәй тырышып, йомолоп саба ла саба. Өс йөҙ ҡуһай самаһы йәнәш тип әйтерлек арттан килгән ике ала, уларға баш терәп сапҡан ҡара туры кавказ атына, бәйге һыҙығын хәҙер йыртам тип, уға етеп килгән Ҡола йөрөктө уҙыу мөмкин түгел ине. Һәм ул үтте. Үтте, жокейһыҙ, үҙе үтте! Ғәйрәте булғанға тағы ла бер үҙе бер саҡрымдай сапҡас, ҡаршы сығып туҡтаттылар. Ярһыған, тамам ҡыҙған... Саҡ-саҡ тотоп етәкләй алдылар.

Бөтә халыҡ гөр килә. Хатта трибунала ултырыусылар ҙа аяҡ өҫтө баҫты. Тик был тиклем ҙур баһаны Ҡола йөрөк үҙе белмәне. Ҡола йөрөккә баҫып баһа биреүҙәрен ил етәкселәре үҙҙәре лә ҡапыл ғына аңлай алмай ҡалдылар. Сәм, ярыш сәме күтәрҙе-күтәреүен уларҙы. Халыҡтан айырылмайыҡ, тигән уй, халыҡ торғас, торорға кәрәклеге урындарынан күтәрһә лә, ысынбарлыҡта менгән кешеһеҙ – малайһыҙ, улар телендә жокейһыҙ сабып беренсе килеүсе атты данлау ине был.

Бөтә халыҡ өйрәтеп ҡуйған кеүек: “Лидер, Лидер, Лидер!” – тип Ҡола йөрөктөң үҙ исемен әйтмәй, әллә ниндәй таныш ауаз ҡысҡыралар. Сит ҡәүемдәрҙән килгән, исемле-тоҡомло, дәрәжәле аттар уҙа алмай, урындағы ябай ат, хужалыҡ аты ал бирмәгәс, әллә ил етәкселәренең күңелен күрергә, әллә барлыҡ нәмәгә баҫымсаҡлыҡ күҙлеге менән ҡарап өйрәнгән кешеләр, Ҡола йөрөктө үҙ ғүмерендә күрмәгән-белмәгән, ҡулдарынан бер бөртөк һоло, бер ижау һыу эсермәгән кешеләр даирәһенә лә күсереп ҡуйҙылар. “Слава, слава русскому скакуну!” – тип ҡысҡырып һикерештеләр. Шау килде баш ҡала. Ҡола йөрөк тураһында иртәгәһе көнө дәүләт ишектәре артында ла хәбәрҙәр булып алды. Уның һәм хужалығы тураһында радио, телевидение аша ла тапшырыу ойошторолдо.

Ҡола йөрөктө нисек һаҡлап, имләп кенә килтерһәләр, шулай йәйләп, туҡтайтуҡтай ял иттереп алып ҡайттылар. Тыуған еренә ингәс, машина өҫтөнән Ҡола йөрөк үҙенең йөрөгән ерҙәрен танып, иптәштәрен эҙләп, эҙергеләнеп кешнәп ебәрҙе.

Ауылға ҡайтҡас, ғәҙәттәге көндәр бер-береһен алмаштырҙы. Шулай ҙа ике-өс көн тағы ла йәшел үлән ашап ҡалды. Унан һуң тағы ла ҡоро бесәнгә һәм ҡыҙҙырылған һоло ашатыуға күсерҙеләр. Ҡола йөрөккә хәҙер оҙон-оҙаҡҡа һуҙылған яратыу – тәненән артыҡ һыуҙы ҡыуыу, шуның менән бергә һимертеү, маҡсатлы күнегеүҙәр – йөрөтөү һәм сабыу кеүек алымдар әллә ни кәрәкмәй. Ул урта көрлөктә, иттәре тығыҙ, ҡаты, аяҡтары ныҡ, тояҡтары еңел даға менән дағаланған, эс-бауыры тартылған: торғаны менән алғыр бурҙай кеүек.

Биш-алты көн үтеүгә Шамил ҡарт, йыуан саптар атҡа йәнәш бәйләп, Ҡола йөрөктө тағы ла алып китте. Юл таныш ине йөрөккә. Район һабантуйы юлы. Йәйләп, ғәҙәттәгесә, кискә барып етеп туҡтанылар. Быйыл яҙ уңай килде. Ҡалын ҡар йәйләп иреп, ерҙе йомшаҡ һуты менән еткелекле туйындырҙы. Унан һуң елһеҙ йылы көндәр торҙо. Йәшел үләндәр мыжғып сығып, аҙна эсендә буйҙары сирек – сирек ярымға етеп, сабып алырлыҡ булып китте. Сәсеү эштәре тотҡарлыҡһыҙ һәм үҙ ваҡытында үтте. Оҙон ҡыш буйы һарайҙарҙа тороп ялҡҡан малтыуар ҙа йәйге көтөүгә, сәхрәгә сығып китте. Ғәҙәт буйынса, йәйләүгә сығып таралмаҫ борон һәм уңышлы сәсеүҙе тамамлау уңайы менән ойошторолған һабантуй ине был.

Ҡояш көнсығышта урмандар менән ҡапланған түпһәләр өҫтөн япҡан ап-аҡ

томан араһынан ҡып-ҡыҙыл, ҙур булып тыуҙы. Томан таралған һайын ул бәләкәйләнгән кеүек булып, һарғайып, үҙ төҫөн алды. Ул ярайһы уҡ күтәрелгәндә, һабантуй яланы халыҡ менән шығырым тулды. Көн аяҙ, йылы. Ҡаршылағы Ҡалҡантау, алыҫта, көнбайышта, күкһелләнеп күренеп ятҡан Әүәләк армытының Әбәрәшбаш түбәһе, уларҙан аша ҡарап ятҡан Ирәмәл тауы һабантуй яланына бөтмәҫ гүзәллек өҫтәп, байрам тантанаһына йәм бирә.

Йыл һайын уҙа алмай ҡайтыуҙарына эҙергеләнеп ҡайтҡан ир-егеттәр быйыл айырыуса һайланмыш аттарҙы килтерҙеләр. Нисек кенә әҙерләмәнеләр ул йүгеректәрҙе. Ситтән, башҡа райондарҙан да исемле йүгеректәр килде. Автомобиль ине Оло бәйге йөлдәһе быйыл да.

Төрлө арауыҡтарға ҡатнашыусыларҙы яҙыу башланғас, кешеләр араһында оло бәхәс тыуҙы. Йүгеректәр хужалары баш ҡалала ла бәйгелә ҡатнашып, еңел автомобиль отоп алып ҡайтҡан йөрөктө, алдан һөйләшеп ҡуйғандай, ярышта ҡатнаштырыуға ҡырҡа ҡаршы төштөләр. Әгәр Ҡола йөрөк бәйгелә ҡатнашһа, береһе лә аттарын ярышҡа ебәрмәйәсәген белдерҙеләр. Китте талаш, китте бәхәс. Әгәр ярышҡа береһе лә аттарын ебәрмәһә, тимәк, һабантуй күрке, һабантуй биҙәге Оло бәйге булмаясаҡ. Йүгеректәрҙе ҡарайбыҙ тип килгән меңәрләгән кеше мәхрүм булып, ойоштороусыларға ризаһыҙлыҡ белдереп, байрам тиҫкәре фекергә, хатта ғәйбәткә әйләнәсәк.

Бәхәс оҙаҡ дауам итте. Ахырҙа талапсылар икенсе алымға күстеләр. Ҡола йөрөктө оҙон бәйгегә, автомобиль өсөн көрәш арауығына ебәрмәҫкә, тик ҡат-ҡат ҡыҫҡа араларға: ике, дүрт саҡрымға ғына сабыуын шарт итеп ҡуйҙылар. Талап итеүселәрҙең бында үҙ иҫәптәре бар ине. Беренсенән, яҡын араға оҙон аяҡтарҙың Ҡола йөрөктө уҙыуҙарының ихтималлығы ярайһы ҙур. Был арала Ҡола йөрөктө уҙһалар, уның даны бермә-бер кәмейәсәк. Оҙон аяҡлыларға еңеү, тимәк, сит ҡалаларҙа, һәр төрлө башҡа ярыштарҙа ҡатнашыу хоҡуғы яулай саф токомлолар. Исемдәрен, дандарын таратыуға әлегә тиклем Ҡола йөрөк уларға бейек ҡойма булып торҙо. Сөнки «сафтар»ҙың хаҡы ла, сит ярыштарҙа ҡатнашыуҙары ла урындағы ярыштарҙа ҡатнашып, һөҙөмтәләре буйынса төҙөлгән протокол тип аталған ҡағыҙҙа ине. Өҫтәүенә, махсус йылҡы фермаһында тәрбиәләнгән аттар өсөн генә түгел, фермаға, ферма хужаларына кире йоғонто ине Ҡола йөрөктөң йөрөклөгө. Унан һуң бит йөлдә лә ҙур: автомобиль! “Сафтар”ҙың береһе уҙып, автомобиль алһын әле!..

Ферма етәкселеге ҡайһы аттың ниндәй арала күпме ваҡыт күрһәтеүен, бүләккә автомобиль алыуын шунда уҡ яҡын-тирә ат заводтарына хәбәр итәсәк. Аттарға баһа, хаҡ артасаҡ, дан өҫтәләсәк. Әммә был турала Ҡола йөрөк тә, хатта Шамил ҡарт та белмәй ине. Ул да, үҙ шартын ҡуйып, бындай осраҡта йөрөктө саптырмауын, бәйгенән баш тартыуын белдерҙе. Шуны ғына көткәндәй, дәғүәселәр ҙә, бәйге ойоштороусылар ҙа өндәшмәй ҡалдылар.

– Ярай, ҡатнашмаһаң ҡатнашма, – тип ярышҡа яҙыуҙан баш тарттылар.

Тиҙ, аҫтыртын ғына эшләнде был. Ҡатнашырға кире саҡырмаҫтармы, тигән уй менән бер аҙ ваҡыт йөрөктө етәкләгән килеш тора бирҙе Шамил ҡарт. Ниңәлер, һәр ваҡыт төбөнә етеп, тоҙ ҡойоп йөрөгән хужалыҡ етәксеһе лә янда күренмәй. Ышана ине ул. Нисек инде Ҡола йөрөктө бәйгегә индермәһендәр! Инде һигеҙ йыл алдына ат сығармаған йөрөктө бәйгенән кем мәхрүм итә ала? Хужалыҡ халҡы ла, уны һәр саҡ ҡурсалап ҡарап торған мал-тыуар белгесе Алмас та, хатта хужа үҙе лә Ҡола йөрөктө бәйгелә ҡатнаштырмауҙарын баштарына ла кертмәй ине.

Бәйге башланды. Кемгәлер ни тип әйтергә белмәгән Шамил ҡарт, Ҡоланы етәкләп, күңелһеҙ генә арбаһы янына уҙҙы. Ғәрлеге килеп, һабантуйҙы ташлап

ҡайтырға булып... Ҡола йөрөктө Оло бәйгегә индермәүҙәренең сәбәптәре кешеләрҙең ижтимағи-сәйәси һәм ғәҙәти тормоштарында көн һайын осрай. Аҡты ҡараға әйләндереү, яҡшы булғанды насар итеп күреү, көнләшеү, күңел тарлығы, барлыҡ халыҡтың теләгеn танымай, ваҡиғаны үҙ ҡулына алған өймәкәй кешеләрҙең теләген тормошҡа ашырыу ине был. Ҡола йөрөктөң йөрөклөгөнә һоҡланып ҡарап тора торған меңләгән кеше ул ләззәттән, ҡыуаныстан, уның тиңһеҙ бәйгесе булыуына инаныуҙан мәхрүм булды. Ул үҙенең тоҡомон аслыҡҡа, һыуһауға, ауыр йөккә, көндәлек эшкә, ярышҡа – барыһына ла ҡулайлашҡан тоғро дуҫ, ярҙамсы, оҙон юлда ал бирмәҫ талымһыҙ итеп танытты. Аңға эйә булған беҙ, халҡым, илем-ерем, тип янып йөрөгән, уның үткәненә һәм бөгөнгөһөнә матди һәм рухи өлөш индергән шәхестәребеҙгә тейешле баһа бирә алабыҙмы? Быны аңлап, ҡул һәм тауыш күтәреү өсөн халыҡтың рухи баҫҡысы булыуы мотлаҡ. Милләтте етәкләүсе ижтимағи-сәйәси, сәнәғәт эштәрен, уның мәнфәғәтен тормошҡа ашырған етәкселәребеҙгә, һәр саҡ алда йөрөгәндәргә көс-ғәйрәт биреү, таяныу, ҡуҙғалмаҫ, сыйылмаҫ нигеҙ булыу – бөтәбеҙҙең дә оло бурысы түгелме?

Әҙерәк дәрте ҡайтыр, Саптарға ла еңел булыр, тип уйлап, Шамил ҡарт Ҡола йөрөктө арбаһына төпкә екте лә, боролоп, ҡайтыр юлға йүнәлде. Шул саҡ эргәләренән елеп, бер-бер артлы сабышып бәйгеселәр үтеп бара ине. Аңламаны Ҡола: ни өсөн һуң әле ул ярышмай? Ниңә шулар менән болашмаҡ кирелеп сапмай, ҡеүәт төйнәлеп алға уҡталмай? Ҡапыл Ҡола йөрөктөң йөрәге эсенә ут ҡапты. Ауыҙлығын ысҡындырырға теләп, башын оҙон-оҙон итеп алға тартып алды ла, боролоп, арбаһы-ние менән бәйгеселәргә йәнәшләп сабырға тотондо. Арба артына бәйләнгән йыуан Саптар, етешә алмайынса, йүгәненең теҙгене өҙөлөп тороп ҡалды. Шамил ҡарт арбаһы төбөнә ултырып, алғы бүкәндәргә аяғын терәп дилбегәһен артҡа тартһа ла, башы көслө Ҡола йөрөк ғәйрәтләнеп һәм эҙергеләнеп аттар артынан саба бирҙе. Арба менән сабып килгән «хулиган ҡарт»ты туҡтатыу өсөн бәйләнеш аша барлыҡ тәртип һаҡсылары йәлеп ителде. Тапалып яра йәки ғәриплек алыусылар осрағы ҙур ине. Туҡтатыр өсөн, беренсенән, арбаға тейәлделәр; әҙерәк тиҙлек кәмеүҙән файҙаланып, ҡырҡыуыраҡтары башындағы ҡайыш йүгәнгә йәбештеләр. Көс-хәл менән уны һабантуй ситенә сығарып, тейешенсә аңлашып, ҡайтыу йүнәлешенә төшөрҙөләр. Шул ваҡытта ситтә бәйгеселәрҙең икенсеме, өсөнсөмө ярышы бара ине. Ҡола йөрөктөң бәйге бәҫенән ҡотолмаған ярһыу йөрәге тағы ла ҡупты ла китте. Ул ҡапыл боролдо һәм тағы ла сабырға, ярышырға кереште. Ләкин был юлы дуғаға ҡыҫҡа итеп бәйләнгән теҙген дә, бейек күтәреп бәйләнгән һыртлыҡ та, махсус рәүештә теле аҫтынан алынған ауыҙлыҡ та, дилбегәһе менән аяғын терәп тартҡан Шамил ҡарт та йөрөккә ярышырға ирек бирмәне. Туҡтаны, үрле-ҡырлы һикерҙе ат, елп итеп тағы алға ынтылды, артҡа сигенде, аптырағас, ике артҡы аяҡтарына баҫып, аттар сапҡан яҡҡа бер-ике аҙым атланы ла ҡапыл, киҫеп төшөргән кеүек, ергә, тәртәһе өҫтөнә, йығылды. Ауыҙы, ҡолағы аша ҡуйы ҡара ҡан аға башланы. Ғүмеренең һуңғы һулышында тоноҡ ҡына аңы аша инәһе янында Һарыҡай аҡ ҡолон булып сапҡаны, ауыр йөк тартыуҙа һәр саҡ ярҙамсыл, һөйкөмлө Ҡара бейә, артынан йыраҡ ҡалмай килгән дәғүәсе Ала ат күренгән кеүек булды.

Зәп-зәңгәр күктә ап-аҡ болоттар, бер-береһенә йә йәбешеп, йә тотоношоп, йә ҡапыл айырылышып, ҡабаланып, етешә алмай, бер-береһен ҡыуалап йөҙә ине. Сабышаһы, эх, сабышаһы ине шул аҡ болоттар менән, уҙаһы ине шуларҙы! Ҡола йөрөктөң күҙе мәңгелеккә йәйлап йомолғанда, ысынлап та, аҡ болоттар араһындағы күк зәп-зәңгәр ине!

**Мәхмүт**
**ХУЖИН**

# ЯҢҒЫҘ САҒЫЛ*

**ЭССЕ**

V

Колхоз эштәре менәнентекле генә танышып сыҡҡандан һуң, Фәруҡша ҡайһы бер тәртиптәрҙе үҙгәртергә ҡарар итте. Ҡайһы бер етәкселәрҙе алмаштырҙы. Табылдыға бригадир итеп Мансур тиҫтерен, Шәкәргә Сәйфетдинде тәғәйенләне. Ҡунаҡбайҙы сығарып, Йомағолдо Шәкәр фермаһына мөдир эшенә ҡуйҙы, Төбәк урамында фермаға яҡын ғына йәшәгән Ғәйнулланы шунда мөдир итеп ебәрҙе. Ә бына йылҡы ҡарарға кеше табыу өсөн байтаҡ ҡына баш ватырға тура килде. Ат йәнле кешеләр ҡалмаған, барыһы ла бисә-сәсә лә ҡарт-ҡоро. Ә йылҡы малына ысынлап та сабый балаларға булған кеүек тәрбиә кәрәк. Ҡарап торған, бар нужаны күндергән шулар бит. Сатан Тимерғәлене ҡуйыр ине, ҡаты холоҡло, малды ла аяп тормаҫ. Аптырағас-йөҙәгәс, Фәруҡша үҫмерлектән сығып килгән Фәйзрахманға туҡталды. Ат ихатаһынан ҡайта белмәй, бигерәк тә мал йәнле малай. Ишетеүенсә, уҡырға бер ҙә барымы ла, һәләте лә юҡ кеүек. Бер көн малайҙы урамда осраҡҡас, председатель:

– Туғаным, һиңә нисә йәш әле? – тип һораны.

Буйға тиҫтерҙәренән бер аҙ ҡалынырaҡ, яурындары ла киң генә эре һөйәкле үҫмер яуап бирерҙән алда танауын тартып алды. Тамаҡ ҡырған булды. Киң, яҫы бите буйлап йылмайыуға оҡшаған тулҡын йүгереп үтте.

– Быйыл ун алтың тулды, тигәйне әсәйем. – Малай ҡулындағы сүс йүгәне менән тегеләй-былай һелтәнде. – Мин хәҙер мәктәпкә йөрөргә оло инде. Миңә эш бир әле, Фәруҡша абзый, – тине ул, председателгә ҡарамай ғына.

– Маладис, туған. – Фәруҡша ниәтенең шулай тиҙ тормошҡа ашып тороуына ысын күңелдән шатланды. – Мин һиңә, дубрға* куних** булып бармаҫһыңмы икән, тип әйтергә тора инем.

---

* *Дубрға (диалект) — йылҡы аҙбары.*
** *Куних (руссанан боҙолоп әйтелгән һүҙ: конюх) — ат ҡараусы.*

---

* *Аҙағы. Башы 7-8-се һандарҙа.*

– Барам, абзый, барам. – Фәйзрахман бала кеүек шатланды. Былай ҙа оло ауыҙы ҡолаҡтарына етерҙәй булып йырылды. Хатта баҫҡан ерендә тыпырҙап та алды. – Ат ҡарарға яман яратам мин. Башҡа берәйһен ҡуя күрмә, – тип ул инәлесле ҡарашын Фәруҡшаға йүнәлтте.

– Атайың риза булырмы һуң? – Фәруҡша был яғын уйлап еткермәгәнен әле саҡ иҫенә төшөрҙө. – Хәйбрахман абзый менән һөйләшмәгәнмен әле.

– Ризалашмай ҡайҙа барһын. Анау көн үҙе лә, Фәйзрахман, балаҡай, хәҙер һин кәләш алырлыҡ йәшкә еттең, берәй эшкә сыҡ калхузға, тип торғайны.

– Ярар. Иртәгә иртүк дубрға кил. Эште һинең елкәгә һалырбыҙ, – тине лә Фәруҡша, малайҙың арҡаһынан ҡағып, китеп барҙы.

Төштән һуң, берәй яйын табып, Ҡарамалыға барып килергә ниәтләп йөрөй ине. Теге кисте күргәндән бирле Оксана иҫенән сыҡмай ҙа ҡуя. Көндөҙ хәтергә төшөп интектермәй ул, сөнки көндөҙгөһө эш менән үтә. Ә бына кисен йоҡларға ятыу менән тып итеп иҫкә килә лә төшә. Был йәш ҡатындың һомғол буйы, сөмҡара сәстәре, шулар менән һис тә ярашмаған зәңгәр күҙҙәр шундай яғымлы итеп баға. Ҡайһы саҡ: «Юҡты уйлайһың, Фәруҡша, Оксана – хохол ҡыҙы, башҡа дин кешеһе. Уның менән бер ҡасан да бергә буласаҡ түгелһең»,– тип үҙ-үҙен тыйып та ҡарай. Ысынлап та, Табылдыла ғына түгел, тирә-йүндә башҡа диндән ҡатын алған бер кеше лә юҡ. Эйе, татар-мишәрҙән алалар. Хәйер, атаһы ла ҡасандыр урыҫ ҡыҙы менән йөрөп алған. Әммә өйләнмәгән.

Һуңғы осорҙа Василий ҙа күренмәй бит әле. Исмаһам, унан һорашырға булыр ине. Шулай уйлана торғас, колхоз идараһына килде лә арлы-бирле эштәрен бөтөргәс, ат егеп килтерергә ҡушты. Мансур тиҫтеренә:

– Дуҫ, мин төштән һуң булмайым. Һин мында күҙ-ҡолаҡ булып тор инде, – тине. – Райондан килһәләр, Тажит яғындағы баҫыуҙарҙы ҡарарға сығып китте, тейерһең.

– Ярар. – Мансур тиҫтеренең уйсан моңһоу йөҙөнә күҙ ташлап алды ла һүҙҙе оҙайтманы. Үҙенең дә һаулығы шәптән түгел, һуңғы осорҙа үпкәһе яфалай.

Туры ат лерт-лерт юртып ауылды сығып киткәндә, йәй ҡояшы түбәнә ҡыҙҙыра башлағайны. Ҡарамалыға тура юл бар, ләкин ике ауыл араһында тығыҙ бәйләнеш булмағанға, уны үлән баҫып киткән. Бына туры ат, кырандасты еңел генә тартып, Өй тауының уң яҡ итәгенә артыла башланы. Был ҡалҡыулыҡты табылдылар, ауылға терәлеп тиерлек торғанғалыр инде, Өй тауы тип йөрөтәләр. Эйе, Табылдынан ҡояш байышына табан Ҡоро Күндрәктең һул яҡ яры буйлап ошо Өй тауылай ҡалҡыулыҡтар теҙмәһе һуҙылған. Оҙон ғына ул, ошонан һигеҙ саҡрымлап Баҡый тигән татар ауылына тиклем араны биләп ята. Өй тауының күршеһе Ҡыҙлар тауы, унан – Йылан тауы һ.б. Элек был ҡалҡыулыҡтар өҫтөн ҡаплап ағастар үҫкән, имеш, тиҙәр. Бәлки, шулай булғандыр ҙа, ләкин Фәруҡша белә-белгәне бирле был тауҙар, башы бәке менән ҡырып алынған кешенекеләй, яп-ялանғас, йәй айҙарын ғына ҡылғанға күмелеп, һарғылт-йәшел булып ултыра. Элегерәк ҡарттар ошо ҡылғанды сабып, малына бесән әҙерләй торғайны. Хәҙер бер кем дә тотонмай. Көҙөн ут төртөп яндыралар ҙа, йәй тағы яңыһы өлгөрә.

Ана, туры ат Өй тауының һөҙәк битләүен артылып, юртып түбәнгә төшә башланы. Ары ҡалҡыулыҡтар теҙмәһе юҡ, өҫтәл кеүек яландар китә. Уң яҡта Ерекле йылға шишмәһе. Имеш, уның буйын да элекке замандарҙа ерек ағасы биләп ятҡан. Табылдыларҙың мәрхәмәтһеҙ балтаһы был ағастарҙы ла йәлләмәгән. Хәйер, балтаның исеме лә нужалыр инде.

Ошо юл буйлап һигеҙ саҡрымдай туп-тура төньяҡҡа атлаһаң, Ҡарамалы ауылына барып юлығаһың. Быны Фәруҡша бәләкәйҙән белә. Ул үҫмер саҡтарҙа әле

Табылды улыҫ үҙәге булып торғанда, ауылдың бирге урамында баҙар эшләп, тимер-томор әйберҙәрен тейәп, Ҡарамалы мужиктары ла килгеләй торғайны. Һаҡалтай урыҫтар үткән юлдан һуңынан әбей-һәбей үтергә ҡыйынһына ине:

– Кафырҙың гонаһы йоға күрмәһен.

Туры атты бик ҡыуманы Фәруҡша. Йәйге көн оҙон, киске яҡҡа барыбер ҡайтып өлгөрәсәк. Өйҙә йә эш ҡушырға ашҡынып, йә көнләшеп ултырырға ҡатыны юҡ. Төрлө уй-хәтирәләргә бирелеп килә торғас, Фәруҡша Берлин соҡорона килеп еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалған. Бында кемдеңдер хәстәрле ҡулдары менән хан замандарында ултыртылған ҡайын ағастары ныҡ ҡына олонланып, тирә-йүнгә йәм биреп шаулаша. Ҡайынды бигерәк тә ярата Фәруҡша. Әллә һындары аҡ булғанға, әллә хуш еҫле япраҡтары менән мунсала сабынырға уңайлы булғаны өсөн. Һәр хәлдә был һорауға яуабы юҡ унып.

Әле атлауға, әле юртыуға күсеп килгән туры ат бер заман ҡапыл туҡтаны ла бышҡырып ебәрҙе. Хыял даръяһынан ысынбарлыҡҡа шулай ҡапыл ғына күсерен уйлап еткермәгән Фәруҡша ҡапыл тертләне: әллә бүре-фәлән йөрөймө? Ул атының әле уң, әле һул яғынан алға ҡараны, әммә ҡуйы ағас ботаҡтары аша бер ни ҙә күрә алманы.

– На, малҡай! На! – Ул дилбегә ҡаҡҡанға туры ат ыжламаны ла. Аяҡтарын алмаш-тилмәш баҫыу менән сикләнде. Фәруҡша сыбыртҡы йөрөтөргә яратмай ине, юғала ла ҡуя. Ул үҙе менән тал сыбығы йөрөттө. Шыйыҡ тал уң ботон көйҙөрөп һыҙырғанға туры ат арт һанын күтәреп үрәсәгә тибеү менән яуаплағас, Фәруҡша арбанан төшөргә мәжбүр булды.

Ағастар араһынан биш-алты аҙым атлағайны, бер йыуан ҡайын төбөндә ҡара-йылтыр нәмәне шәйләне. «Машина булырға оҡшаған», – тигән уй йүгереп үтте уның башынан. Әллә Головинмы? Мындай машина белән башҡа кем йөрөһөн? Фәруҡша кире барып, атын йүгәненән етәкләне лә теге машина янына яҡынланы. Йыуан ҡайын эргәһендә ысынлап та Головиндың «Виллис»ы тора ине. Ә хужаһы арҡаһы менән ҡайын олонона терәлгән дә йоҡомһорап ултыра. Олеся уның тубығына ятҡан. Аҡрын ғына иҫкән тиреҫ еле уның шаҡмаҡлы юбкаһының итәктәрен күтәреп, яланғас боттарын бер аса, берсә яба. Һөттәй аҡ тулы балтырҙарҙы күргәс, Фәруҡшаның йөрәге дөпөлдәп тибә башланы. Ул үҙендә ирлек хисенең ҡапыл тоҡаныуын һиҙеп уңайһыҙланды. Әммә кире китергә һуң ине. Уны Головин да күреп ҡалды.

– Мухаметович, какими ветрами? – Ул башын ҡалҡытып, Олесяны йомшаҡ ҡына ситкә этәрҙе. – Әллә аҙашып йөрөйһөңмө?

– Һеҙгә ҡунаҡҡа китеп барам. – Фәруҡша йылмайҙы. Василийҙы осратыуына ул шат ине. Бәлки, Ҡарамалыға барып йөрөү ҙә кәрәкмәҫ. – Колхоз эше ялҡытып китте. Бер аҙ күңел асырға иҫәп бар.

Фронтташ дуҫының ҡәҙимгесә ярым хәрби формала булмауын, өҫтөнә сағыу биҙәкле күлдәк менән яңы һоро салбар кейгәнен күреп, Фәруҡша ғәжәпләнеүен әйтмәй булдыра алманы:

– Ну как байрам итеп йөрөйһөгөҙ? Пасхамы әллә? – Башҡа төрлө православный байрамды ул белмәй ине.

– Ниндәй «пасха?» Һин нимә, коммунист Ниғмәтуллин! Рота парторгы, имеш. Әллә ниндәй дини төшөнсәләр менән һаташаһың.

– Әйт һуң. Байрам итеүегеҙҙең сәбәбе нимәлә? – Фәруҡша, һиҙер-һиҙенеп, ныҡышыуын белде.

Василий көрһөндө:

– Юҡ, Мухаметович, байрам итмәйбеҙ. – Аҙ ғына тын торғандан һуң: – Беҙ Оксана менән хушлашырға йыйындыҡ, – тип өҫтәне.

Быныһы Фәруҡша өсөн көтөлмәгән хәбәр ине. Тәки ҡайтып китергә булған икән. Уның бөтә тәне буйлап ниндәйҙер ток йүгереп үтеп, аяҡ остарына төшөп юғалды.

– Оксана китәме ни? – Уның тауышы нисектер ҡарлығып, тамаҡ төбөнән ишетелер-ишетелмәҫ сыҡты. – Ҡасан?

Фронтташ иптәшенең хәлен Василий тиҙ аңланы. «Ҡара һин уны, эҫенеп тә өлгөргән. Хәйер, Оксана күҙ төшмәҫлек ҡатын түгел. Олеся булмаһа…» Бындай уй башына килеүҙән Головинға әллә нисек уңайһыҙ булып китте. – Юҡ, юҡ, Олесяның булмауы мөмкин түгел».

– Ҡайғырма, Мухаметович. Һин әле Оксананы күреп өлгөрәһең. Ана, ул теге яланда, – Василий Ҡарамалы яғына ымланы. – Аҡ сәскәләр йыйып йөрөй. Бар янына.

Йыуан ҡайынды урап үтеп, биш-алты аҙым атлағас та, Фәруҡшаның күҙенә өҫтәл өҫтөләй киң ялан салынды. Сәсеп үҫтергәндәй, ап-аҡ сәскәләр менән тотош ҡапланғайны ул. Ялан уртаһынан бер ҡосаҡ сәскә күтәреп, кемдер был яҡҡа табан килә. Күрәһең, Оксана. Фәруҡша, бер аҙ оялыңҡырап тороуына ҡарамаҫтан, уға ҡаршы китте. «Барыуын бара ла, тик ни тип әйтер икән? Оксана, һин бынан китмә инде. Ошонда ҡал. Мин һине яратам бит. Өйләнешәйек, тиерме?»

Уларҙың араһы ҡыҫҡарғандан-ҡыҫҡарҙы. Бына Фәруҡша Оксананың иҫ киткес һылыу йөҙөн ап-асыҡ күрә. Бер аҙ моңһоулыҡ, уйсанлыҡ йәш ҡатынды тағы ла сибәрерәк итеп күрһәтә. Сөм-ҡара сәстәре урталай ярып таралған. Уның остары яурындарына төшөп тора. Өҫтөндә иҫкерәк булһа ла сигелгән кофта менән шаҡмаҡлы юбка. Үҙенә килешеп тора. Фәруҡшаны күргәс, Оксана ихлас йылмайғайны, бит алмалары соҡорайып, уны иҫ китерлек сибәр яһаны ла ҡуйҙы.

– День добры, Фарукша. Нисек килеп сыҡтың был яҡтарға? – Йәш ҡатын яҡын уҡ килеп, Фәруҡшаның еңенә ҡағылды. – Кәйефең яҡшымы, яраларың борсомаймы?

– Яҡшы. – Бындай мөғәмәләгә ireп киткән ир башҡа һүҙ таба алманы. – Һин ҡайтып китергә булдыңмы ни, Оксана? – тип ул баянан бирле тел осон ҡысытып торған һорауын сығара һалды.

– Эйе, шулай хәл иттем. Һуғыш тамам, Украинаны азат иттеләр. Беҙ – хәҙер ирекле ҡоштар, Фәруҡша. Тыуған яҡ тарта бит ул. Мин киткәне бирле Украинаны уйламаған сағым булманы. – Оксана әҫәрләнеп һөйләй башланы. – Бына һин дә сит тарафтарҙа һуғышып йөрөгәндә ауылыңды һағынғанһыңдыр. Шулай бит? Яҙмыш һине һаҡланы, Ватаныңа ҡайтырға мөмкинлек бирҙе. Хәҙер сират – миңә.

Фәруҡша баш ҡаҡты. Оксананың да тыуған яҡтарына шулай ашҡыныуын ни эшләп башына ла килтермәгән. Хәйер, нишләп был хаҡта уйланһын инде. Киреһенсә, уны ошонда ҡалдырырға тырыша ла баһа. Фәруҡша аңланы: ҡатынды бер ни менән дә тыйып тоторлоҡ түгел. Ул барыһын да хәл иткән.

– Нишләп улай ҡапыл ғына хәл иттең? Теге саҡта улай һөйләмәй инең, шикелле. – Фәруҡшаның һорауы нисектер бер ҡатлы килеп сыҡты.

– Теге ваҡыт беҙ, Фәруҡша, тыуған яҡтар тураһында һөйләшмәнек. Ул саҡта беҙҙең кәйефтәр икенсерәк ине. – Оксана бер аҙ тынып торҙо. – Мин фашистарҙы Украинанан ҡыуып сығарғас та хат яҙҙым. Әммә оҙаҡ ваҡыт яуап булманы. Таныштар күп ҡалғайны, барыһына ла яҙып һалырға тура килде. Шулай йылдан ашыу үтеп тә китте. Ә бынан өс көн элек бер хат килде. Ике туған ағайымдан. Ул Ивано-Франковск ҡалаһында йәшәй – уҡытыусы. Мине саҡырған. Мәктәптә эш бар икән.

– Мәктәп бында ла бар, Оксана, – тип һүҙ ҡыҫтырҙы Фәруҡша.

– Эх, Фәруҡша, – тине Оксана, уның һау ҡулынан ике ҡуллап тотоп. Үҙенең һылыу йөҙөнә бер аҙ ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. – Ни әйтергә теләүеңде һиҙеп торам. Беҙ, ҡатын-ҡыҙ, ирҙәргә ҡарағанда һиҙгерерәк бит. Ләкин мин хәл иткәнмен инде. Һуңланың һин бер аҙ. Теге ваҡыт…

Оксана әйтергә теләгәнен әйтеп бөтөрмәне. Уңайһыҙ тынлыҡ урынлашты. Фәруҡшаның иһә бер генә лә әйтер һүҙе ҡалмаған. Ул йә «ҡайтма», йә «яратам» тип кенә әйтә ала. Ә уларҙан бер ниндәй ҙә файҙа юҡ.

– Хәйер, был һылтау ғыналыр, – тип дауам итте йәш ҡатын. – Мин уны әйтергә уңайһыҙландым. Беҙ бит – икебеҙ ике халыҡ вәкиле. Уҡытыусы булғас, яҡшы беләм. Беҙҙең культура, донъяға ҡараштар ныҡлы айырыла. Һеҙ, мосолмандар, – икенсе халыҡ. Унан һуң һинең ата-әсәйең, туғандарың мине, хохлушканы, тупһа аша ла үткәрмәйәсәк.

Оксана, ҡапыл үрелеп, Фәруҡшаны ныҡ итеп ҡосаҡланы ла, сикәһенә иренен тейҙереп алғас, тиҙ генә ситкә тайпылды. Ир кеше ни ҙә булһа эшләргә өлгөрмәй ҙә ҡалды.

– Прощай, милый!

Шул ыңғай йәш ҡатын бик шәп йүгереп Василий янына килде лә ҡыҙып-ҡыҙып ниҙер һөйләргә, ҡулынан тотоп, машина яғына һөйрәргә тотондо. Ләкин тегеһе ныҡ ҡына ҡаршылашты. Фәруҡша улар яғына ашыҡмай ғына атланы. «Бөттө, барыһы ла бөттө, – тип уйланды ул. – Нишләп мине яҙмыш улай аяуһыҙ һынап ҡарарға булған?» Бына Василий уға тиҙерәк килергә ым яһаны. Оксана ул арала машинаға инеп ултырҙы ла шап иттереп ишекте ябып та ҡуйҙы.

– Мухаметович, һин бөгөн Табылдыла йөрөп торһаң, күңелең дә тыныс булыр ине, – тине Головин, дуҫына ҡаршы килеп. – Оксана һинән ҡасырға самалай бит.

Василий ҡулын фронтташ дуҫының ҡулбашына һалды ла үҙенә тартып, ҡыҫып ҡосаҡланы. Был минуттарҙы, ысын дуҫ булараҡ, ул да бик ауыр кисерҙе.

– Беләһеңме, – тине ул, ҡапыл Фәруҡшанан айырылып, – минең башҡа бик яҡшы уй килде: әйҙә, тыуасаҡ көндө беҙ бергәләп үткәрәйек. Хәҙер Ҡарамалыға барабыҙ ҙа. Ҡалғанын шунда уйлашырбыҙ.

– Минең атты ҡайҙа ҡуйбыҙ һуң? – Фәруҡша ҡапылғара ни әйтергә лә белмәне. Берҙән, шатлыҡ кеүек тойғо тыуа биреп ҡуйһа ла, кире һүрелде. Бер төн. Нимә хәл итә ул бер төн? Оксананы бер төндә генә күреп-һөйөп туйып буламы?

– Һин атың менән беҙҙең арттан ҡалмаҫһың. Яҡын бит. Өс-дүрт саҡрым ғына. Ә беҙ Олеся менән ҡайтып табын әҙерләй торорбоҙ. Килештекме? – Василий, кәйефе күтәрелеп китеп, Фәруҡшаға текәлде. – Ризаһыңдыр, тим.

– Еще бы. – Фәруҡша, боролоп, «Виллис»ҡа күҙ һалды. Оксана машинанан сыҡҡан да Олеся менән ҡыҙып-ҡыҙып нимәлер тураһында бәхәсләшә. Украинса. Фәруҡшаға арбаһына ултырып көтөргә ҡушып, Василий ҡатын-ҡыҙҙар янына йүнәлде.

– Хәҙер үҙем барыһын да яйлайым, – тип күҙ ҡыҫты ул. – Комиссарға ышан.

Бына ул Оксана янына килде лә ниҙер әйтте. Ҡатын ҡаршы бер ни ҙә өндәшмәне, ниңәлер башын түбән эйҙе. Ул арала Василий Олесяһын машинаһына ултыртты ла, саң туҙҙырып, Ҡарамалы яғына елдерҙе. Оксана ла оҙаҡ көттөрмәне, аҡрын ғына килеп кырандасҡа менеп ултырҙы. Уның яҡынлығын тойоуҙан Фәруҡшаның ҡапыл кәйефе күтәрелеп китте.

– Әйҙә, Табылдыға, – тине ул, турысайын ҡайтыр юлға бороп.

Оксана дилбегәгә йәбеште.

– Иҫәрләнмә, кире уйлауым бар. Унан мине мәңгегә күрмәҫһең.

Хужаһы ҡушҡас, туры ат иренеп кенә Ҡарамалыға илткән юлға төштө. Ҡыуаламаны уны Фәрүҡша. Ҡайҙа ашығырға? Оксана эргәлә бит. Ысынлап та, ҡасан ғына донъяла барлығын да белмәгән был йәш ҡатын янында ул үҙен күктең етенсе ҡатындағылай хис итте. Ауыр уйҙар шунда уҡ баштан сығып осто. Яраларҙың һыҙлаштырып тороуы ла онотолдо. Хатта уң ҡулының терһәктән түбән юҡлығы ла. «Бәй, шулай ғашиҡ булдым да микән ни? Йәш егет кеүек ни. Ебенем дә төштөм». Фәрүҡша үҙен еңелсә шелтәләне. Бер аҙ өндәшмәй барҙылар. Һөйләшмәһәләр ҙә, күңелле ине Фәрүҡшаға. Һөйләшеп тә ни әйтә алаһың? Һөйәм, типме? Аныһын Оксана, былай ҙа күреп торам, тине бит.

– Беләһеңме, Фәрүҡша, – тип тыныслыҡты боҙҙо Оксана. – Беҙгә осрашмаҫҡа кәрәк булған. Барыбер бер ни ҙә үҙгәртә алмайбыҙ. Шуны беләм: бында ҡала алмайым. Ят миңә был күк, был тупраҡ, был һауа. Беҙ әле ошонда айырылышһаҡ, һин уны еңелерәк кисерер инең. Ә минең янда булған минут-сәғәттәр ни тиклем оҙонораҡ булһа, һинең ғазаптарың да шулай көслөрәк буласаҡ.

Йәш ҡатын тынып ҡалды. Өндәшмәй генә ситкә ҡарап бара башланы. Фәрүҡша күңеленән генә ул һөйләгәндәр менән риза ла кеүек. Тик йөрәк бит икенсене кисерә, икенсене көҫәй. Ошо һылыу ҡатындан айырылырға һис кенә лә теләмәй. Ул уйҙы нисек кенә ҡыуырға теләмәһен, барыбер хәленән килмәй.

– Оксана, беҙ һинең менән коллегалар булып сыҡтыҡ бит әле, – тине ул, һөйләшеү өсөн уңайлы тема таба алыуына ҡыуанып. – Мин дә һуғышҡа тиклем бер аҙ мәктәптә эшләп алдым бит.

– Шулаймы? – Йәш ҡатын исем өсөн битараф яуапланы.

– Эйе. Тик оҙаҡ уҡытырға тура килмәне. Колхозға иҫәп-хисап белгән кеше кәрәккәс, политотдел мине шунда күсерҙе. Алар белән ҡаршылашып булмай ине.

– Фәрүҡша, һин дә һуғышҡа тиклем өйләнеп ҡарағанһың. – Оксана өсөн был теманың бер ҙә ҡыҙығы юҡ ине, ахырыһы, ул һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа күсерҙе. Күрәһең, әңгәмәләшенең кисерештәрен белергә теләй. – Ни эшләп айырылыштығыҙ?

– Мин… айырылышманыҡ. – Фәрүҡша дилбегәһен кырандас үрәсәһенә ҡыҫтырҙы ла махорка сығарып төрә башланы. Оҙаҡ ҡына маташты. Сөнки арба барған ыңғайға ҡулдары һелкенеп, тәмәкеһе ҡойола ла төшә. Быны күҙәтеп барған Оксана ҡыҫҡырып көлөп ебәрҙе лә атты туҡтатты.

– Йә, һалдат, аҡрынлап төр тәмәкеңде.

Ҡуҙғалып киттеләр. Ҡатындың ҡыҙыҡһыныуы көслө ине, түҙмәне:

– Һин, Фәрүҡша, һөйләп бөтөрмәнең, – тине.

– Мин фронтҡа киткәндә ҡатыным өйҙә ултырып ҡалды. Мин ҡайтҡанда өйҙә юҡ ине. Бары шул ғына. Уның нимәһен һөйләп тораһың? – тине ул, тәмәкеһен йыш-йыш һурып.

– Ә ниңә ҡайтып киткән ҡатының? – Оксана һаман ныҡышты. – Яратмай инеме ни?

– Уныһы миңә ҡараңғы. Өйләнешкәндә ярата кеүек ине. – Фәрүҡшаның, ғәрип ир менән торорға теләмәй ҡайтып киткән, тип әйткеһе килмәне. Үҙ-үҙенде кәмһетеү кеүек килеп сыға.

– Яратмаған, – тип үҙенсә һығымта яһаны Оксана. – Беҙ, ҡатындар, яратмаған ир менән йәшәргә күнә алмайбыҙ. Ҡатының менән яғымлыраҡ булмағанһыңдыр, Фәрүҡша. Йылы һүҙҙәр әйтмәгәнһеңдер. Ҡатын-ҡыҙ ҡолаҡтары менән ярата, тигәнде, моғайын, ишеткәнең барҙыр.

– Юҡ. Беҙҙең башҡорт ҡатындары улай түгел. Беҙҙә бер тапҡыр кейәүгә сыҡтыңмы, ирең менән үлгәнсә йәшәргә тейешһең. Ярataһыңмы-юҡмы – уныһы мөһим түгел, – тип Фәрүҡша үҙенекен тылҡыны. – Борон-борондан шулай килгән.

Оксана бер аҙ өндәшмәй торҙо. Күрәһең, яуап ҡайтарырға ышаныслыраҡ һүҙ эҙләгәндер.

– Ана, күрәһеңме, – тип һуҙҙы ул, ауыр тынлыҡты боҙоп. – Бая мин әйткәндәрҙе, үҙең теләмәһәң дә, иҫбат итеп ҡуйҙың. Беҙ һинең менән икебеҙ ике донъя кешеләре. Һин ҡатын-ҡыҙға енси объект булараҡ ҡына ҡарайһың. Бәлки, өй эштәрен алып барыусы эш аты ла итеп күрәһеңдер.

Фәруҡша үҙенең уңайһыҙ хәлдә ҡалыуын аңланы. Бына бит үҙен үҙе тоҙаҡҡа илтеп тыҡты. Уйламай һөйләгән – ауырымай үлгән. Шул миндер инде.

– Ғәфү ит, Оксана, – тине ул, мөмкин тиклем яғымлыраҡ булырға тырышып. – Шундай тәрбиә алынған инде. Ана һөтө менән инмәгән, тана һөтө менән инмәй, тиҙәр. Традицияларыбыҙ икенсерәк шул. Ни хәл итәһең.

– Мине лә шул традициялар рухында тәрбиәләр инеңме? – Оксана ҡапыл шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Ни ҡыҙығын тапҡандыр, ләкин Фәруҡша төшөнә алманы. Йәш ҡатын нисек ҡапыл көлә башлаһа, шулай тиҙ туҡтаны. Күҙ йәштәрен ҡул һырты менән һыпырып төшөргәс, Фәруҡшаға ҡарамай ғына: – Теләһәң, мин һиңә бер нәмә тураһында һөйләйем, – тине.

– Һөйлә. Тыңлап ҡарайыҡ. – Фәруҡша уңайлабыраҡ ултырҙы.

– Мин тыуып үҫкән кескәй генә ҡала Карпат тауҙарының бер үҙәнен төйәк иткән. Тәбиғәте шул тиклем матур. Ул ағастарҙың ниндәйе генә үҫмәй! Ниндәй генә хайуандар ҙа ниндәй генә ҡоштар юҡ унда. – Был минуттарҙа Оксана нисектер илһамланып, балаларға дәрес аңлатҡан уҡытыусыға оҡшап китте. – Ана шул гүзәл тәбиғәт бер заман туптар гөрһөлдәүенә, винтовкалар дөпөлдәүенә, яралыларҙың асырғанып ҡысҡырыу тауыштарына тетрәнгән. Һуғыш килгән беҙҙең яҡтарға. Бер яҡтан – австриецтар, икенсе яҡтан – урыҫтар ер-дәүләт өсөн ҡан яғалаша башлаған. Ул саҡта беҙҙең Буковина Австро-Венгрия империяһына ҡараған булған. Урыҫтар көслөрәк булып сыҡҡандыр, улар австриецтарҙы көнбайышҡа ҡыуып ебәреп, ҡалабыҙға ингән.

Хәбәрен тамамлап өлгөрмәне Оксана, туры ат, лерт-лерт юртып, Үрге Ҡарамалы урамына килеп инде. Василий менән Олеся «Виллис» янында төйөнсөктәр тейәп маташа.

– Ярар, һуңынан һөйләп бөтөрөрһөң инде, – тине Фәруҡша, туры атын тиҙләтеп. – Ана, беҙҙе Головиндар зарығып көтә.

– Оҙаҡ мыштырҙайһың, – тип еңелсә шелтәләне өй хужаһы. – Беҙ Олеся менән, былар әллә Табылдыға киттеме, тип уйлап бөттөк. Ха-ха-ха!

Оксана тиҙ генә арбанан төштө лә йүгереп ихатаға инеп юғалды. Ауыр ҡапҡа асылулы ыңғырашты.

– Әллә үпкәләттеңме? – Василий шелтәле ҡарашы менән Фәруҡшаны бырауланы. – Белмәһәң, әйтәйем, Оксананың тиҙ генә ҡылтая торған ғәҙәте бар. Һаҡ булырға кәңәш итәм.

– Нисек мөмкин? – тип төҙәтергә ашыҡты Фәруҡша. – Улай уҡ булманы. Моғайын, бәҙрәфкә һыпыртҡандыр.

– Улайһа, ярай. – Головин көлдө. – Беҙ Олеся менән закускаларҙы машинаға тейәп алдыҡ. Йәмле йәй уртаһында тынсыу өйҙә ултырыу эшме ни! Китәбеҙ яланға! Сәхрәгә! – Ул шап иттереп дуҫының яурынына һуғып алды.

– Хужа – ҡунаҡтың ишәге, – тип көлдө Фәруҡша, дуҫының теге саҡта башҡорт мәҡәлен иҫенә алыуына төрттөрөп. – Шулаймы?

– О, юҡ. Мин беләм: ҡунаҡ – хужаның ишәге, – Василийҙың хәтере сос икән.

Ауыл осонан тар ғына Ҡарамалы йылғаһын кисеп сыҡтылар ҙа, тирә-йүндә иң бейеге булған ҡалҡыулыҡ өҫтөнә менгәс, Головин машинаһын һүндерҙе.

– Әйҙәгеҙ, пока ошонда дислокация яһайыҡ. Ауыл – ус төбөндәгеләй. Мине кем дә булһа эҙләп килә ҡалһа, күреп ултырырбыҙ.

Олеся машинанан был яҡтар өсөн ят төҫтәге затлы ашъяулыҡ алып, ҙур өйәңке төбөнә йәйҙе. Головин, тубыҡланып ултырып, арыш икмәге киҫте, сусҡа майы тураны ла йәшел һуғанды шул килеш таратып һалды.

– Башҡа һый юҡ, туғандар. Ни бар шуның менән һыйланығыҙ, – тине ул, Фәруҡша менән Оксанаға алмаш-тилмәш ҡарап.

– Һый шәп. Фронтта быныһы ла юҡ ине. – Фәруҡша ашъяулыҡ эргәһенә аяҡтарын мосолмандарса сәнсеп ултырҙы. Уның хәрәкәттәрен иғтибар менән күҙәткән Василий:

– Ҡайҙан шулай уңайлы ултырырға белә башҡорт? Тәки шуға өйрәнеп булманы, – тип Фәруҡшаға оҡшатып ултырырға иткәйне лә быуындары ауыртыуҙан сырайы боҙолоп, үҙенсә тубыҡланырға мәжбүр булды.

– Бәләкәйҙән мәҙрәсәгә йөрөтһәләр, һин дә өйрәнер инең. – Фәруҡша көлдө. – Но, зыяны юҡ. Һин начальник бит. Өҫтәл артында ултырыу өсөн мосолман ғәҙәтен белеү мотлаҡ түгел.

Ул арала Олеся машинанан бер оло шешә менән көмөшкә лә күтәреп килтерҙе. Стакандарға ҡойғас, Василий:

– Туғандар, – тип һүҙ башланы. – Тормошта төрлө хәлдәр була. Бөтөнләй ситят кешеләр ҡайҙалыр табыша, ғишыҡ тота, бер-береһен һөйә, туғанлаша. Ҡауышып та ҡуялар. Айырылышырға тура килгән саҡтар ҙа була. Ни хәл итәһең – яҙмыш. Тормош, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, гел генә шатлыҡтарҙан тормай шул…

Головиндың һүҙе оҙон булды. Фронттан Ҡарамалыға нисек ҡайтып төшөүен иҫләп алды. Олесяһын күреүен, Оксана менән танышыуын да ҡушырға онотманы. Тағы ла һөйләр ине, тик Олеся уны йомшаҡ ҡына бүлдерҙе:

– Васенька, ҡәҙерлем. Ҡунаҡтарыңдың тамағы кипкәндер. Әйҙә, тотайыҡ.

Головин мөхәббәт тулы күҙҙәрен һөйгәненә төбәне лә:

– Эйе, йән киҫәгем, эсәйек. Дуҫлыҡҡа. Ирҙәр менән ҡатындарҙың ҡаҡшамаҫ дуҫлығына, – тине. Ғәҙәттәгесә ул стаканды төпләп ҡуйҙы. Оксана менән Олеся ирендәрен генә терәп биргәйнеләр, Василий:

– Улай ярамай, – тип стакандарын кире ҡайтарҙы. – Йоланы боҙмағыҙ. Беҙҙә, рустарҙа, тәүге аяҡты бөтөргәнсе эсәләр.

Фәруҡша иһә Головин ҡыҫтағанды көтөп торманы. Әсе көмөшкә ас ҡорһаҡты яндырып барып, ашҡаҙандан элгәре башҡа менеп китте, артабан барлыҡ күҙәнәктәр буйлап йүгерҙе. Үҙен ут йотҡандай хис итте Фәруҡша. Тиҙ генә һуған менән сусҡа майы алып ауыҙына оҙатты. Шунда уҡ тәне буйлап рәхәт йылылыҡ таралды. Был минуттарҙа уның башында бер уй ҙа юҡ ине. Күрҙе: Оксана менән Олесяның да эскәндән һуң бит алмалары алһыуланып, күҙҙәре йылтырап китте.

Бер аҙ өндәшмәй генә ҡапҡылап алдылар. Мәжлес хужаһы икенсе аяҡты ла ҡойҙо:

– Әйҙә, хәҙер һин әйт, Мухаметович, – тине ул, ҡырлы стаканды фронтташ дуҫына тотторop. – Мәктәптә лә эшләп алғанһың. Һиңә һүҙҙе һатып алырға түгел инде. – Фәруҡша быны көтмәгәйне. Тост әйтергә, ғөмүмән, табындарҙа тел сарларға һәләте самалы ине. Әммә юғалып ҡалыуы ла бер аҙға ғына булды. Көмөшкә – тел асҡысы бит ул, хатта йомоҡ кешеләрҙән дә әллә нимәләр әйттереп ҡуя.

– Иптәштәр! – тип башланы ул һүҙен. Барыһына ла күҙ йүгертеп сыҡҡас. – Беҙ…

– Һин нимә, әллә үҙеңде партия йыйылышында тип хис итәһеңме әллә? – Головин уны бүлдереп, шарҡылдап көлдө. – Рота парторгы тигәс тә.

– Дуҫтар, – тип төҙәтте үҙен Фәруҡша. Нисек ошо һүҙ шунда уҡ башҡа килмәгән? – Дуҫтар! Әлеге мәлдә мин үҙ ғүмеремдәге иң һоҡланғыс минуттарҙы кисерәм. Һеҙҙең менән миңә шул тиклем рәхәт, күңелле. Нисеклеген әйтеп аңлатып бөтөрөрлөк тә түгел. Ошондай Василий Силантьич кеүек һоҡланғыс кеше менән дуҫлашыуыма ҡыуанып бөтә алмайым. Ә һеҙҙең, Оксана, Олеся, менән танышыуыма мин сикһеҙ шатмын. Мин Табылдыла йөрөгәндә лә гел һеҙҙең турала уйландым. Һеҙҙең менән бергә булғым килде.

Ошо урынға еткәс, уның күңеле нескәреп китте. Тамағына төйөр тығылғандай тойолдо.

– Туғандар, әйҙәгеҙ мөхәббәт өсөн күтәрәйек. Ысын кешеләр дуҫлығы өсөн!

– Молодец, парторг! Бик матур әйттең. Мөхәббәт – ул мәңгелек! – Головин сәпәкәй сапты. – Тәүҙә үҙең эсеп күрһәт инде.

– Ниməһен күрһәтәһең уның? – Фәруҡша, урыҫтарға оҡшатып, башын артҡа ташланы ла стаканды тулыһынса ауыҙына ҡойҙо. Был юлы ул тәүгеһе кеүек иҫереү һиҙмәне. Күрәһең, организм күнегә, ҡаршы тороу һәләте барлыҡҡа килә.

Икенсе аяҡтан һуң, арыу ғына ҡыҙмаса булып алған был ике пар төрлө көлкө хәлдәр тураһында иҫкә алып, бер-береһен мәрәкә итеп, байтаҡ ваҡыт тел сарлап ултырҙы. Табындың ошолай ҡыҙған бер мәлендә Василий, ҡатын-ҡыҙға һиҙҙермәй генә, Фәруҡшаға Оксананы ситкә алып китергә ымланы. Йәнәһе, бар, бөгөн уны һуңғы тапҡыр күрәһең. Ултырма бында миңрәп, мөхәббәт утында йылынып, эс-бауырыңды бушатып кил.

Ысынлап та, ниңә был уй Фәруҡшаның башына килмәгән? Әлеге эске инде, шул бар донъяңды оноттора, иҫ-ҡоҫоңдо, һиҙгерлегеңде юҡҡа сығара. Тик бына нисек Оксананы әүрәтеп алып китергә? Хәйләһен ҡайҙан табаһың уның? Бер ниндәйе лә килмәй бит әле башҡа? Ошолай план ҡороп ултырғанда, Василий үҙе ярҙамға килде:

– Оксаночка, һин иртәгә беҙҙең гүзәл яҡтарҙы ташлап китәһең бит. Ҡабат әллә күрә алаһың, әллә юҡ. Бар, ана Фәруҡшаны эйәртеп, беҙҙең яландар буйлап йөрөп кил. Ҡаның ойоп та киткәндер. Минең дә Олесяға ғына әйтер һүҙҙәрем бар, – тине.

Оксана аңланы. Уның көмөшкә эскәндән һуң тимгел-тимгел ҡыҙарынған йөҙөндә ниндәйҙер йылмайыуымы, әллә ғәжәпләнеүме кеүек сатҡылар күренеп ҡалды. Итәктәрен төҙәткеләне лә алға эйелә биреберәк тороп баҫты.

– Шулай ҡыуып уҡ ебәрәһеңме ни, Василий? – Әллә үпкәләне, әллә шаяртты Оксана. Эйелеп ҡылған услап алды ла, ауыҙына ҡабып, ситкә атланы. «Әйҙә» лә тимәне. Фәруҡша ла тиҙ генә урынынан ҡалҡынды. Хатта уң аяғының яралары һулҡылдап ҡуйыуына ла иғтибар итмәне ул.

Бына улар һөҙәк битләүҙән төшөп, ярайһы киң йырынға барып сыҡты. Йырын уртаһында яҙ һыу мул аҡҡанғамылыр, үлән бил тиңенте булып үҫкән. «Мал йөрөмәй ахыры, беҙҙә, Табылдыла, ғәҙәттә йырындар таҡыр була»,– тип уйланды Фәруҡша. Оксана атлауын белде, туҡтарға уйламаны ла. Ир кеше башлап һүҙ ҡушыр, тип самалағандыр инде. Әммә Фәруҡша ла ни өсөндөр өнһөҙ ине. Ни әйтергә белмәй шулай аҙапланып килә торғас, ул Ҡарамалыға килгән юлда Оксана һөйләй башлаған хәтирәне иҫенә төшөрҙө.

– Оксаночка, – тине ул, Василийға оҡшатырға тырышып. – Бая ҡуҙғата биреп ҡуйған тарихыңды тамамла инде. Ату, үҙең менән алып китәһең бит.

Оксана ҡапыл туҡтап, Фәруҡшаға боролоп ҡараны. Уның ике күҙе тулы йәш ине. Ни өсөн тулҡынланғандыр: хушлашыуы ҡыйын булғандырмы йәки башҡа берәй ваҡиға иҫенә төшкәндерме (эскәс, күңел йомшара бит ул) – Фәруҡшаға билдәһеҙ. Ҡатындың үҙенән һорарға ул баҙманы, үпкәләтеп ҡуйыуҙан ҡурҡты.

Ҡалҡыуыраҡ урын һайлап, Оксана ергә сүгәләне. Фәруҡшаға үҙ эргәһенән урын да күрһәтте. Ултыр, йәнәһе. Шунан ҡарашын офоҡҡа төбәне лә аҡрын ғына һүҙ башланы.

– Урыҫ ғәскәрҙәре беҙҙең ҡаланан көнбайышта окоп ҡаҙып урынлаша ла, хәрби тел менән әйткәндә, оборонаға күсә. Сөнки австриецтарға ярҙамға күп кенә немец частары килә һәм урыҫтарҙы ҡаланан бәреп сығарырға ынтыла. Ләкин германдарҙың һөжүме уңышһыҙлыҡҡа осрай. Урыҫтар беҙҙең ҡалала бер нисә ай тора. Һалдаттар ҡала халҡы менән аралаша. Минең әсәйемә ул саҡта ун һигеҙ йәш кенә була әле. Үҙен бер һылыу ғына һалдат күреп ҡала ла сат йәбешә. Әсәйем дә оҡшата уны. Бер-береһенең телен йүнләп аңламаһалар ҙа, дуҫлашып китәләр. Үҙең беләһең, мөхәббәт йыш ҡына тыуасаҡ балаға нигеҙ һалыуға килтерә. Әсәйем ауырға ҡала, әммә был турала теге һалдатҡа әйтеп өлгөрмәй. Сөнки урыҫ армияһы һөжүмгә күсеп, ҡаланы ҡалдырып китә лә кире килмәй. Ә инде киләһе йылдың йәйендә донъяға мин килгәнмен.

Тарих ошоноң менән тамам. Оксана бойоҡ ине. Ҡыҙыҡлы һәм ғибрәтле тарихты һөйләүе лә ҡойто ғына килеп сыҡты.

– Ә теге һалдат кем булған һуң? Әсәйең исемен әйтмәнеме ни? Ҡайһы халыҡтан, тигәндәй? – Фәруҡша һаҡ ҡына Оксананың һул ҡулын үҙенең усына алды.

– Һалдат ошо Урал яҡтарынан булған. Матур, үҙәккә үтерлек итеп оҙон йырҙар йырлар булды, тип иҫкә ала торғайны әсәйем. Ә бына исеме иҫендә ҡалмаған. Беҙҙең өсөн ят исем. «Б» хәрефенән башлана шикелле, – тип үҙ алдына һөйләнгәндәй дауам итте йәш ҡатын.

– Оҙон йырҙар йырлағас, ул һалдат, моғайын, башҡорт булғандыр. – Фәруҡша ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. – Тимәк, һин дә башҡорт ҡыҙы! Беҙҙең ҡан. Кем булған икән ул? Исеме «Б» хәрефенә башлана, тиһең инде? Байдәүләтме, Бакирмы, Бәҙрәтме? – тип теҙеп алып китте ул.

– Юҡ, белмәйем. – Оксана башын һелкте. – Әйтәм бит, хәтеремдә ҡалмаған. Унан әсәйем һөйләгәндән һуң әллә күпме ваҡыт үтте. Мин ул саҡта бала ғына инем.

Эйе, утыҙ йылдар элек булған ваҡиғалар тураһында Оксана ҡайҙан белһен инде. …1915 йылдың көҙөндә Карпат тауҙарына һыйынып ултырған Галиция украиндары ҡалаһына бәреп ингән часта Түңгәүер ырыуы егете Баҡый Ишбулатов та бар ине. Тик ябай һалдат түгел, ә артиллерия командаһында унтер-офицер. Йәш, мөхәббәткә һыуһаған саҡ. Украин ҡыҙы Яринаны бер күреүҙә оҡшатты ул. Баҙар уртаһында булды был хәл. Ярина алма һатырға сыҡҡайны. Баҡый уны башҡорт ҡыҙҙарына оҡшатты ла ҡыйыу атлап янына килде.

– Һаумы, һылыу? – тине ул саф башҡортса. – Нимә һатаһың?

Ярина зәңгәр күҙҙәрен тултырып уға ҡараны ла украинса:

– Мин һеҙҙе аңламайым. Ни тинегеҙ? – тип яуапланы.

Баҡый тәүҙә ихлас көлдө. Шаяртыуын күрһәтергә теләүе ине был. Унан русса ғаға күсте.

– Мин һеҙҙе башҡорт ҡыҙы икән тип торам, – тине ул, бер алманы тешләргә лә өлгөрөп. – Исемең нисек, гүзәлдәрҙең гүзәле?

Ҡыҙ уның һөйләгәндәрен ярым-йорто ғына аңланы. Был халыҡтың теле русса нан ныҡ айырыла икән. Шулай ҙа был ҡыйыу егеткә яуап бирмәй булдыра алманы. Моғайын, исемемде һорайҙыр, тип уйланы ҡыҙ.

– Ярина тип йөрөтәләр мине. – Ул ап-аҡ тештәрен күрһәтеп, иҫ китерлек матур итеп йылмайҙы. Уның ике бит алмаһының соҡорайып китеүе тағы ла сибәрерәк күрһәтә.

Баҡый бер аҙ ауыҙын асып, һоҡланыуынан ни әйтергә лә белмәй торҙо.

– Мин Баҡый булам. – Ул уң ҡулын күкрәгенә ҡуйып, итектәрен бергә шаҡ иттереп баҫты ла бер аҙ алға бөгөлдө.

– Ба-а, – тип һамаҡланы ҡыҙ. – Тағы ла әйт әле. Исемең ғәләмәт ҡыҙыҡ. Урыҫ түгелһеңме ни?

– Юҡ. – Баҡый етдиләнде. Исемен боҙғанды ене һөймәй, хәтере ҡала ла ҡуя. – Ба-ҡый, – тип ул исемен ижекләп әйтте. – Урыҫ телендә «вечность» тигәнде аңлата.

– Аң-ла-ным, – тине ҡыҙ һуҙып ҡына. – Мәңгелек икәнеңде аңланым. Йә, Мәңгелек, алма алаһыңмы?

– Алмаларыңды биҙрәһе менән алам. – Баҡыйҙың күңеле күтәрелеп китте. Тиҙ генә аҡса сығарҙы. – Күпме? Һалдаттарҙы һыйлармын.

Бер-береһен йүнләп аңлап еткермәһәләр ҙә, төрлө ымдар менән һөйләшеп-көлөшөп байтаҡ торҙо улар. Һуңынан Баҡый ҡыҙҙы өйөнә тиклем оҙатып ҡуйҙы. Уның ҡайҙа йәшәгәнен белгеһе килде. Кем белә, бәлки, тағы ла осрашып булыр.

Ап-аҡ балсыҡтан һыланған, ихатаһы һайғауҙар менән унан-бынан ғына тот-торолған алты мөйөшлө ҙур ғына өйҙә йәшәй икән Ярина. Йортто уратып алмағастар үҫә. Ишек алдындағы бер түмәрҙә оло ғына йәштәге бер ир ултырып тора. Ул ни өсөндөр Баҡыйға сәйер ҡараш ташланы, сәләмен дә алманы. Урындағы халыҡтың урыҫтарға мөнәсәбәте яҡшы түгеллеген белә ине Баҡый, шуға күрә тиҙ генә китеү яғын хәстәрләне.

– Яриночка, ярай хуш. Һинең менән танышыуыма мин сикһеҙ шатмын, – тине ул, мөмкин тиклем теге иргә ишеттермәҫкә тырышып һәм урындағы халыҡ һүҙҙәрен мул ҡушып. – Бәлки, кискә осрашырбыҙ.

Ҡыҙ өндәшмәне. Оялсан ғына башын баҫып китеп барҙы. Тимәк, ҡаршы түгел. Баҡый кәүҙәһен тура тотоп, тиҙ-тиҙ атлап китеүгә ыңғайланы. Теге оло йәштәге ир, күрәһең, Яринаның атаһы булған. Уның асыулы тауыш менән ҡыҙын шелтәләй башлауын Баҡый ҙа ишетте. Ҡолаҡ һалып ҡараһа ла, күп һүҙҙәрен аңлай алманы.

– Һин, ҡыҙый, ниңә москалдәр эйәртеп йөрөйһөң? – тип һуҡранды атай кеше, урынынан ҡуҙғалып. – Тағы ла берәйһе менән күҙемә салынһаң, миңә үпкәләмә.

Ләкин башҡорт егете Баҡый Яринаның мөхәббәт хистәренә иҫерә торған мәленә тап килеп, кескәй генә йөрәгенә ныҡ инеп ултырғайны. Кисен егет килеп күренеү менән ул һиҙҙермәй генә урамға сыҡты. Күрештеләр, һөйләштеләр. Ҡыҫҡа ғына булды был осрашыу, сөнки ҡыҙ ысынлап та атаһынан шөрләй ине. Иртәгә кис берәй аулаҡ урында оҙағыраҡ бергә булырға һүҙ ҡуйыштылар.

Украин ҡыҙы, ғәмәлдә ҡасандыр далалар иңләп йәшәгән ҡыпсаҡ нәҫеленең бер осмото булған Ярина менән Баҡыйҙың мөхәббәт уты шулай көтмәгәндә көслө булып балҡыны. Атаһының ҡаты ҡаршылығына ҡарамаҫтан, тәүге мөхәббәтенән ҡыҙ баш тартырға уйламаны ла. Күҙгә кистәрҙең береһендә һөйөү ялҡынында тамам башын юғалтҡан ҡыҙ егеттең енси ынтылышына юл ҡуйҙы…

Күп тә үтмәй, урыҫ ғәскәрҙәре һөжүмгә күсеп, ҡаланы ҡалдырып китте. Был шул тиклем тиҙ булды, Баҡый Ринаһы менән хушлашырға ла өлгөрә алмай ҡала. Бының өсөн уның һуңынан үкенеүҙәре…

Йылдар үтер, Оксана үҙенең ысын атаһы кем икәнлеген дә күрмәй-белмәй үгәй ата ҡулында тәрбиә алыр. Үҙ атаһы, Баҡыйҙың, был ваҡыттарҙа әллә ҡайҙағы Уйғыр илендә яуыздар тарафынан үлтерелеүен ул, әлбиттә, бер ҡасан да белмәйәсәк.

…Тирә-йүнде иләҫләтеп ҡапыл йыр яңғыраны. Тәүҙә ул күкрәк ситлегенән ҡыҫылып сыҡҡандай тоноҡ ҡына ағылды. Артабан күтәрелә барып, сихри, күңел арбағыс көслө тауышҡа әүерелде. Йырҙың һүҙҙәрен аңламаны Фәруҡша. Әммә күңеле менән һиҙенде: был йырҙа кеше күңеленә генә хас көслө тойғолар: һоҡланыу ҙа, үкенес тә, тағы ла әллә ниндәй кисерештәр – бөтәһе лә бар кеүек. Йыр беленер-беленмәҫ иҫкән ел менән ары китә, күңелдәге ниндәйҙер һағышлы ла, яғымлы ла хистәрҙе ҡуҙғытып ебәрә. Йыр – кешенең шатлығын да, хәсрәтен дә асып һалған, әҙәм балаһы ғына тыуҙыра алған күңел хазинаһы. Йырына ҡарап халыҡты, моңона ҡарап кешене белеп була икән.

Оксана йырлай. Күңелендәге һағышын, күрәһең, шулай бušата. Яҙмыш бойороғо буйынса ата-бабалары аяҡ та баҫмаған, йыраҡ Урал яҡтарына килеп сыҡҡан украин ҡыҙы үҙенең Карпат тауҙары ҡуйынына һыйынып ятҡан гүзәл Ватанын юҡһынып-һағынып йырлай. Бәлки, илайҙыр ҙа. Был бәләкәй генә кәүҙәле йәш ҡатында ҡайҙан шундай көс: ул хатта әллә ниндәй кәртәләрҙе лә аша сығырлыҡ. Фәруҡша тамам айныны. Ҡапыл өҫтөнә килеп ишерелгән кисерештәр айнытты уны. Әле бер-ике сәғәт кенә бөтә ҡан тамырҙарын юллаған көмөшкә бөтөнләй баштан сығып осто. Башы сәғәт кеүек эшләй башланы, зиһене элекке хәленә ҡайтты. Украин йыры уға башҡорттарҙың ошо ҡырҙарҙай иркен, бала саҡтарҙан бирле тыңлап үҫкән үтә лә яҡын йырҙарын хәтерләтте. Уртаҡ мотивтар күп ине уларҙа.

Йыр ҡапыл өҙөлдө. Оксана ни рәүешле ултырған булһа, шул килеш тынып ҡалды. Әйтерһең дә, ҡайҙандыр килгән күренмәҫ илаһи көс уны тынырға мәжбүр итте. Фәруҡша иҫән ҡулын аҡрын ғына Оксананың яурынына һалды. Йәш ҡатын уны алып ташламағас, уның кәүҙәһен үҙенә табан тартты. Оксана был юлы ла ҡарышманы, киреһенсә, һыйына төшкәндәй итте. Бына уларҙың икеһененең дә йөҙө бер-береһенә тап килде. Күрҙе Фәруҡша: йәш ҡатындың ҙур зәңгәр күҙҙәре дымлана төшкән, ирендәре бер аҙ асылған. Белә ул: ҡатын-ҡыҙ ошондай хәлдә тулыһынса сит кеше ихтыярына бирелеүсән. Шул саҡ ирҙә тыйып торғоһоҙ енси көсәү хисе тоҡанды, һәм ул йәш ҡатынды ипләп кенә арҡаһына яҡтырҙы ла үбергә кереште. Йәш ҡатын да яуапһыҙ ҡалманы, ике ҡуллап ирҙе ҡосаҡланы. Бер нисә минут тирә-йүн уларҙың йыш-йыш тын алыуына, Оксананың һуҙып-һуҙып ыңғырашыуына шаһит булып ҡарап торҙо.

Фәруҡша үҙен сикһеҙ ләззәт донъяһына сумғандай хис итте. Гүйә, уның иңендә ошоға тиклем тауҙай йөк йөрөгән дә, шуны бына әле генә алып ташланылар. Ул әлеге минуттарҙа сикһеҙ бәхетле ине. Ауыр кисерештәр менән тулы һуңғы көндәр ҡайҙалыр китеп юғалды. Әммә Оксананың тауышы уны ысынбарлыҡҡа кире ҡайтарҙы.

– Фарукша, көн кисләп бара бит. Әйҙә, унда беҙҙе көтәләрҙер, – тип ҡатын тороп аяғүрә баҫты, өҫ-башын төҙәткеләне. – Атлайыҡ.

– Беҙ кемгә булһа ла кәрәкбеҙҙер, тип уйлайһыңмы? – Фәруҡша зәңгәр күккә төбәлеп, битараф ҡына ята бирҙе. Уның хатта ҡуҙғалғыһы ла килмәй. – Кәрәк булһаҡ, Василий сигнал бирер, тип уйлайым.

– Әйҙә, ҡайтайыҡ. Миңә лә йыйынырға кәрәк. – Оксана ҡуҙғала ла башланы. – Иртәгә юлға бит.

Фәруҡша ҡапыл тороп ултырҙы. Әле генә булған хәлдән һуң, бәлки, Оксана кире уйлар, тигән кеүегерәк фекер ҙә тыуып ҡуйғайны. Ҡатын һаман элеккене һөйләй.

– Мин һине, ҡалырға булды, ахырыһы, тип торған булам бит, – Фәруҡша Оксананы ҡосаҡларға итте. Ләкин ҡатын тиҙ генә ситкә тайпылды.

– Ә мин ҡалам тимәнем. – Йәш ҡатындың йөҙөндә ҡәтғилек билдәләре сағылып китте. – Һин бутама. Әлегенең бер ниндәй ҡыҫылышы ла юҡ.

Фәруҡша өндәшмәне. Һуңғы һүҙҙәр уны ауыр ысынбарлыҡҡа ҡайтарҙы.

– Ундай минуттар һәр кем менән була торғандыр, – тип Фәруҡшаға ҡарамай ғына дауам итте Оксана. – Мин иң элек ҡатын бит. Яратырға, яратылырға хаҡым бар. Ә әлеге минуттарҙы һин ниндәйҙер әжер итеп ҡабул итмә. Онот һин уны. Булманы, тип иҫәплә.

– Нисек, булманы? Булды бит. Әле генә булды. Бына ошонда. – Фәруҡша ғәжәпләнде. – Мин…

– Эйе, һин. Һинең фронтта йөрөгәндә ошондай минут-ләззәттәрең – булманы, тип әйтергә итәһеңме? Юҡ, әлбиттә! – Оксана ҡыҙып китте. – Улай бер ҡатлыланма! Тормош бит ул бик ҡатмарлы. Бер алдын, бер артын күрһәтә.

Ир кеше яуап ҡайтарманы. Бәхәс ҡуптарыуҙан ни файҙа? Ни тип әле ул ошо гүзәл йән эйәһенең күңелен ҡайтарырға итә? Юҡ, ярамай. Гүзәл минуттар күңелдә ана шул гүзәллеге менән һеңеп ҡалһын.

Был кисте ул Оксана янында ҡалып үткәрергә иткәйне лә, ҡатын ҡырҡа ҡаршы төштө.

– Юҡ, ҡайтаһың! Минең үҙеңде дошман күрә башлауымды теләмәйһеңдер бит? – тигәс, Фәруҡшаға буйһоноуҙан башҡа сара ҡалманы.

VI

Көс еткеһеҙ уйҙарға сумып ҡайтты ул һигеҙ саҡрым араны. Кеше кисерештәренең ниндәйе генә булмай икән. Ниндәй нужалар кисерелде, күрелде. Күпме туңып, күпме ирене! Яралары ҡанһырап, әжәл күҙгә туп-тура ҡарағанда ла тере ҡалып, яҡты донъяға, дүрт аяҡлап булһа ла, кире сығылды. Эйе, ағзалары пыран-заран имгәтелһә лә, һыҙланыуҙар үҙәккә үтһә лә, бының ише ауыр булмай ине. Бынытеү ниндәй хис һуң ул? Ҡайҙан килә? Ниңә шул тиклем бәғерҙәрҙе телгеләй?

Әлбиттә, дүрт йылға яҡын окоптарҙа аунап, төрлө михнәттәр күреп күңеле тамам ҡатып өлгөргән ир уртаһы Фәруҡша быңдай нескә хистәрҙе тәү тапҡыр кисергәнгә шулай ҡойолоп төшкәнен абайламай ине. Һуғыш үҙенә башҡа, ул тамам. Хәҙер тыныс тормошҡа ҡайтылды. Уға өйрәнергә, уның ҡағиҙәләре буйынса йәшәргә кәрәк.

Ҡояш байышы ҡып-ҡыҙыл нурҙарға күмелгәндә, уның туры аты атаһы ихатаһының артҡы яғындағы ситән ҡоймаға килеп терәлгәйне. Оҙон юл буйы бер хәлдә, ауыр уйҙар диңгеҙенә сумып килеп аяҡтары ныҡ ҡына ойоған Фәруҡша һыҙлаша-ауыртына арбанан төшөп, артҡы ҡапҡаны асты. Әсәһе һыйыр һауып ултыра икән, улын күреп:

– Берәй яры йыраҡ йөрөнөң мени? Әллә кемнәр һорашып бөттө, – тине.

– Кемнәр, әсәй? – Атын туғарырға тотонған Фәруҡша битараф ҡына һораны. Уға барыбер ине.

– Эстәрлебаштан, ахыры. – Өммөгөлсөм эшен бөтөрөп, һөтлө биҙрәһен уң ҡулына алды ла ишек яғына табан атланы. – Хәҙер палнамушлар* күп йөрөй бит. Барыһына ла брсиҙәтел кәрәк.

Улы ҡомған менән бит-ҡулын йыуып ингәндә, әсәһе түрьяҡта уға сәй әҙерләп булаша ине. Йөҙө бик бошонҡо күренә. Улына йыш-йыш күҙ һалғылап та ала.

– Фәруҡша, балам, нишләптер һуңғы осорҙа бик бөтөрөнөп киттең әле. Ни

*Палнамушлар – (руссаның боҙолған варианты: уполномоченный. Йәғни район үҙәгенән ебәрелгән вәкил.)

ашауыңдың рәте юҡ, – тине әсә, улы ашъяулыҡ ситенә килеп терәлгәс. – Әллә ауырып торалһыңмы?

– Юҡ, әсәй, бер ерем дә ауыртмай. – Фәруҡша сәйгә үрелде. – Нишләп алай тиһең?

– Төҫөңә яҙылған. – Өммөгөлсөм улы алдына һыйыр майы менән бешкән бәрәңгене яҡынрыраҡ этәрҙе. – Эсең һау түгел һинең, улым. Һағыш-ҡайғы баҫа. Һаман бер үҙең бит. Бисә алырға кәрәк һиңә. Кешене Хоҙай Тәғәлә парлы итеп яратҡан.

– Ярар, әсәй. – Фәруҡша әсәһенең нотоҡ уҡый башлауы менән эстән генә килешмәне. – Бисә лә алырбыҙ. Ғүмер буйы яңғыҙ йәшәмәм инде.

Әсәһе менән улының һөйләшеүен төп яҡта ишетеп ятҡан Мөхәмәтша ла ул арала алғы яҡҡа килеп сыҡты. Өндәшмәй генә бер ни тиклем улына ҡарап торҙо.

– Әллә киленде кире алып ҡайтаһыңмы? –  тип аҡрын ғына дауам итте әсә кеше. – Өйрәнгән кешең бит.

– Юҡ, әсәй, – тип ҡырт киҫте Фәруҡша. – Бер теленгән икмәктең кире йәбешкәнен кемдең күргәне бар? Аны мин айырмаған, үҙе ҡайтып киткән. Булмай.

– Дөрөҫ әйтәһең, улым. – Һүҙгә атаһы ла ҡушылды. – Ҡатын-ҡыҙ бөткәндәй итеп  ни? Бисәләр хәҙер ил тулы. Йәнең теләгәнен һайлап ал. – Ҡарт дәртләнеп киткәндәй итте. Күҙенән ниндәйҙер осҡондар һибелгәндәй булды.

– Ҡарт дуңғыҙ! Бисәләр тиһәң, ҡотора ла китә. – Өммөгөлсөм йыуаш ҡына һуҡранды. – Ҡартая белмәгән ҡарт ишәк.

– Йөрәк ҡартаймай, ҡарсыҡ! – Мөхәмәтша яуапһыҙ ҡалманы. – Мына мин нимә уйланым: һин, улым, ошо арала Һынташҡа барып, Мәрхәбәне күреп ҡайт. Бәлки,  ул берәйһен димләр. Күҙләп ҡайтырһың. Мәрхәбә – бик аҡыллы ҡыҙ ул. Һиңә тиңде таба алыр, тим.

Мәрхәбә – Фәруҡшаның кесе һеңлеһе. Табылдынан 50-60 саҡрымдар самаһы ҡояш байышында урынлашҡан рәсми телдә Ишмөхәмәт, ә халыҡ араһында Һынташ тип йөрөтөлгән ауылда кейәүҙә ине. Табылдыға бик һирәк ҡайта. Фәруҡшаның уны ҡайтҡаны бирле күргәне лә юҡ. Ысынлап та, барып килергә кәрәк, тип үҙ-үҙенә фекер төйнәне ул. Оксана китте. Ни эшләп әле һуҡыр ғишыҡ йылыһына әүрәп йөрөргә? Егет саҡ түгел дә.

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ. Өс- дүрт көн үтеү менән ул киске яҡҡа мунса яҡтырып инде лә таҙа кейемдәрен кейеп, туры атын эйәрләп юлға сыҡты. Йәйге үләндә йөрөп, туры ат ярайһы көрәйҙе, шуға күрә йылдам юрта. Урыны менән үҙе сүкетеүгә күсә. Ат – аҡыллы мал инде ул, оҙон ғына юлға сыҡҡанын белә һәм уны үҙенсә шулай ҡыҫҡартырға тырыша.

Мәрхәбә, ҡайны менән ҡәйнәһенән тыш, егет ҡорона инеп бөткән бер ир бала, уға етәһе ике ҡыҙлы ғаиләлә килен булып йәшәп ята ине. Һуғыш сыҡҡан йылда ун бише менән генә барған үҫмер ҡыҙ, ун һигеҙен дә тултырмай, һоратып алған бер егеткә, ғәмәлдә олоғайыуы еткән, ата-әсәһен ҡарашыу өсөн, кейәүгә бирелгәйне. Үҙ балаһы әлегә юҡ, берәү тыуған да ауырыуҙан үлеп тә ҡуйған.

Мәрхәбә ағаһын бик йылы ҡаршы алды. Күҙенән йәштәр ҙә сыҡты шикелле. Әммә йәш ҡатын ҡарашын тиҙ генә ситкә бороп, яулыҡ осо менән һөртә һалды. Ишле ғаилә ишле инде, тамаҡ туйҙырыу үҙе бер хәсрәт, бер һыйырға ҡарап торалар. Ҡайныһы менән ҡәйнәһе былай арыу кешеләр күренә, алсаҡтар.

– Килен эшкә бик шәп! – тине ҡайныһы, ҡәнәғәтлек менән кәзә һаҡалын һыйпап. – Ҡоҙа белән ҡоҙағыйға рәхмәт инде, игелекле бала тәрбиәләгәннәр.

Сәй эсеп арлы-бирле иткәнсе ҡараңғы ла төштө. Фәруҡша үҙенең кискә ҡарай

юлға сығыуына үкенә биреп тә ҡуйҙы. Кем белгән ошондай ҙур ғаиләгә килгәнен. Ни атаһы, ни әсәһе, исмаһам, өндәшмәгән.

Мәрхәбә менән ихаталағы йыуан бүрәнәгә сығып ултырҙылар. Фәрүҡша кеҫәһенән папирос сығарып тоҡандырҙы. Уны хәҙер барлыҡ түрәләргә лә бирәләр ине. Һыңар ҡул менән махорка төрөп аҙапланыу бөттө.

– Кейәү белән арлы-бирле һүҙгә килешмәйһегеҙҙер бит, – тип белеште ул, тәмәкеһенең төтөнөн ситкә өрөргә тырышып. – Былай ипле егет күренә.

– Ю-уҡ, – тип һүҙҙы һеңлеһе. Ул ғаиләлә иң кесеһе булғанғалыр инде, сабыр холоҡло, төптән фекер йөрөтөүсе һәм үтә лә һалҡын ҡанлы бала булып үҫте. – Икебеҙ ҙә яндырай түгелбеҙ.

– Аныһы яҡшы. – Фәрүҡша килеште.

– Атайымнар анда ни хәлдә һуң? – тип белеште Мәрхәбә. – Ауырып-нитеп тормайлармы? Үҙең һыҙлашаһыңдыр... – Ул ағаһына шундай йәлләп ҡараны, хатта Фәрүҡшаға ла уңайһыҙ булып китте.

– Һин дә, туғаным, мине йәлләргә булдың инде? – Фәрүҡшаның был турала һүҙҙе оҙайтҡыһы килмәне. Йәлләтергә яратмай ине ул.

Артабан һүҙ донъя көтөү, бала-сағa темаһына төшөп китте. Фәрүҡша һеңлеһенең килеп ултырғаны бирле ниҙер әйтергә ынтылыуын, ләкин ни өсөндөр ҡыймауын һиҙеп, уйынлы-ысынлы:

– Мәрхәбә, баянан бирле тел осоңдо ҡысытып торған хәбәреңде асып һал, – тине.

– Әсәйем хәбәр еткергән, – Мәрхәбә, нисегерәк килештереп әйтергә тигәндәй, яулыҡ осо менән булашты. – Абызыйың яңғыҙ башы бик яфалана, берәй утырған ҡыҙмы, айырылған тол ҡатынмы ҡарашып бирһен әле, тигән.

– Ҡыҙыҡ. – Фәрүҡша йәнләнеп китте. – Әсәйем үҙе мине башлы-күҙле итергә булған. Ниәте изге – һүҙ ҙә юҡ. Тәк, тәк. Таптыңмы һуң үҙеңә еңгәне?

– Һин алай мәрәкәгә борма әле. – Мәрхәбә үҙенең сабыр холҡлолоғона хыянат итмәй генә. – Ошолай буйҙаҡ булып тағы күпме йөрөргә итәһең? Һинең өҫ-башыңды һаман әсәйем йыуһынмы, ашарға бешерһенме?

Һуңғы һүҙҙәр Фәрүҡшаның йөрәгенә барып тейҙе. Ысынлап та, нишләп ул был турала уйланмаған әле? Әсәһенең мәшәҡәте унан башҡа ла аҙ түгел бит.

– Һуң? – Ул һеңлеһенә текәлде. – Таптыңмы, тим бит, берәйһен?

– Эйе, таптым, абзый. – Мәрхәбә шымыраҡ яуапланы.

– Бөгөн үк күрһәтә алаһыңмы? – Фәрүҡшаға ҡыҙыҡ булып китте.

– Теләһәң, хәҙер үк алып киләм. – Һеңлеһе ҡалҡынған кеүек итте.

– Алып барам, тиң, – тине Фәрүҡша уйынлы-ысынлы.

– Юҡ, алып бара алмайым. – Мәрхәбә ҡәтғи ине. – Килешмәҫ урам буйлап эйәртенешеп йөрөү. Кеше әллә ни уйлар.

– Алай булғас, алып кил һуң.

Ярты сәғәт тә үтмәне, Мәрхәбә аҡ ҡына йөҙлө, ҡыйғас ҡаштары юғары сөйөлгән, сибәр ҙә, әммә йәмһеҙ тип әйтеү ҙә мөмкин булмаған урта буйлы, йомро ғына ҡатынды эйәртеп ҡайтып та килде. Ҡайны менән ҡәйнәһе, уларҙы аулаҡта һөйләшһен тип, күршеләргә инеп киткәйне. Йәш-елкенсәк иһә – уйынға.

– Мына, абзый, был Факиһа апай була инде. Ире һуғышта үлеп ҡалды. Бала-сағаһы юҡ. Үҙегеҙ генә һөйләшә тороғоҙ. – Мәрхәбә ағаһын ҡунағы менән таныштырҙы ла алға яҡҡа, йәнәһе, сәй ултыртырға сығып китте.

– Йә, Факиһа һылыу, миңә, фронтовикка, хәләл ефетлеккә барырға ризаһыңмы? – Фәрүҡша ярым ысын, ярым шаяртып, ҡасандыр ололарҙан ишетеп ҡалған һүҙҙәрҙе ҡабатланы. Ни өсөндөр ҡапыл ғына ҡыйыуланып киткәйне ул.

– Ашыҡма, абзый. Бер күреүҙә ҡапланырға торған ҡатын түгелмен. – Фаҡиһа ла төшөп ҡалғандарҙан түгел, имеш. Хәйер, былдай хәл һалдаткалар араһында була торған. – Бер-беребеҙҙе ҡарашайыҡ, һынайыҡ. Һуҡыр әйткән ти бит, посмотрим.

Ҡыйыу ғына түгел, йор һүҙле лә булып сыҡты Фаҡиһа. Донъяның әсеһен дә, сөсөһөн дә буйтым татығаны күренеп тора. Һалдатка шул, улар әҙәп һаҡлап тормай. Әллә ниндәй ҡыҙыҡ хәлдәрҙе исҡә төшөрөп, бер нисә тапҡыр көлдөрөп тә алды. Ләкин оҙаҡ ултыра алманылар, ҡайны менән ҡәйнә ҡайтып килмәҫ элек Фаҡиһа ҡайтырға сыҡты. Фәрүкша яңы танышынан ҡалмаҫҡа итеп ҡарағайны:

– Атаҡ, абзый, мине үгеҙ эйәртеп ҡайтҡан һыйыр хәленә ҡуйма инде, – тип ҡатын уны тиҙ генә кире һүрҙе.

Йоҡларға урынды ҡунаҡ аласыҡта һалдырҙы. Башы мендәргә тейеү менән йоҡоға талды. Төшөндә Оксананы күрҙе. Имеш, улар Ҡарамалыла икәүләп мөхәббәт ялҡынында иҫергән урында осрашҡан. Оксана үтә лә күңелһеҙ күренде. Ниҙер һөйләгән дә кеүек. Ләкин Фәрүкша уны ишетмәй. Тертләп, һиҫкәнеп уянғанда таң яңы беленеп килә ине. Ул бер аҙ уйланып ятты: был төш нимәгә булыр икән? Тиҙ генә тороп, ихатаға сыҡты. Ишек алды тып-тын. Ҡунаҡ ишеккә барып һаҡ ҡына дөбөрҙәтте:

– Мәрхәбә, туғаным, мин ҡайтайым инде.

– Абзый, сәй эсеп китерһең. Хәҙер самауырға һалам. – Йоҡоло күҙҙәрен ыуалай-ыуалай, ишектә Мәрхәбә күренде.

Фәрүкшаның сәйләп ултырып ваҡыт үткәргеһе килмәне.

– Сәйҙе ҡайтҡас эсермен, – тине ул һәм шәп-шәп атлап лапаҫ яғына, туры атына ҡарай китте. – Фаҡиһаға әйт, берәй аҙнанан килеп сығырмын. Көтһөн.

Туры ат, әйтерһең дә, ошоно ғына көтөп торған, хужаһы эйәргә менеп ултырыу менән дәррәү юртып та китте, ә инде ауылды сыҡҡас, сабыуға күсте. Мал да тыуған ерен һағына, тиҙерәк ҡайтырға ашҡына, имеш.

Тағы ла бер аҙнанан Фәрүкша, ысынлап та ат егеп, Ишмөхәмәткә килеп төштө. Бер үҙе түгел, Мансур тиҫтере менән. Кәләш алып ҡайтырға. Шартына килтерҙеләр. Бер кис ҡунаҡ булғандан һуң, Фәрүкша Табылдыға башлы-күҙле булып ҡайтып килде.

… Киске яҡҡа Фәрүкшаларҙың ҡапҡа төбөнә Головиндың «Виллис»ы килеп туҡтаны. Машинанан сыҡманы Василий, сигнал ғына бирҙе. Фәрүкша утынлыҡта атаһы менән һөйләшеп ултыра ине, тиҙ генә ҡаршы сыҡты.

– Салям алейкум, Мухаметович, – тине дуҫы. Ҡыҙмаса икән. – Айда, отъедем, разговор есть.

Машинала Ерекле йылға ярына килеп туҡтанылар. Саф, эсеп туйғыһыҙ һыулы йылға аҡрын ғына үҙенең тулҡындарын көньяҡҡа табан ҡыуалай. Яр ситендә бер көтөү ҡаҙ тын ғына йәшел үлән йолҡҡолап йөрөй. Арыраҡ ауыл көтөүенә сыҡмаған быҙауҙар ҙа ялҡау ғына көйшәп ята.

Көн инде кисләп килә. Ҡояш офоҡҡа йәшеренергә ус аяһындай ара ҡалған. Головин машинаһынан күн сумка алып сыҡты ла йәшел сиҙәмгә тубыҡ сәнсте. Фәрүкша ла уның янына сүгәләне. Сумкаһын асып, Василий бәләкәй генә гәзит сығарҙы ла шуның өҫтөнә арыш икмәге киҫәктәре, бер баш һуған, бер нисә тоҙло ҡыяр, суҫҡа майы һалды. Шешәнән араҡы ҡойҙо.

– Тәүҙә тотайыҡ әле, – тине ул. – Баш ауыртыңҡырап тора.

Фәрүкша стаканының яртыһын ғына уртланы. Иртәгәһен баш ауыртырынан ҡурҡыңҡырай. Головин уға нисектер сәйер итеп ҡараны, ләкин өндәшмәне.

– Беләһеңме, Мухаметович, мин әле райкомдан киләм, – тине ул, ауыҙындағыһын сәйнәй-сәйнәй. – Унда минең бер таныш бар. Шул һөйләне: оҙаҡламай партия конференцияһы була, имеш. Унда бюроның яңы составын һайлаясаҡтар.

– Уны мин дә ишеттем, – тине Фәрүҡша вайымһыҙ ғына. – Фронттан коммунистар байтаҡ ҡайтты бит. Бында ғәжәпләнерлек бер ни ҙә күрмәйем.

– Мин уныһын әйтмәйем. Һин башта тыңлап бөтөр.– Василий тағы ла эсергә ҡойҙо. – Бюроға мине лә тәҡдим итмәкселәр икән.

– Индерһә! Минеңсә, һин райком секретары булып эшләрлек кеше. Батальонный комиссар! Бармы беҙҙең арала тағы ла шундайҙар? Юҡ бит.

– Һин мине аңламаның. – Головин стаканын эсеп тә ебәрҙе. Артынан тоҙло ҡыяр, сусҡа майы ҡапты. – Беләһеңме, бюроға инеү минең иҫәпкә инмәй.

– Нишләп? Әллә үҙеңде коммунист һанамай башланыңмы? – Һуңғы арала фронтташ дуҫының ҡайһы бер ҡыланыштары Фәрүҡшаны ысынлап та ғәжәпкә ҡалдыра башлағайны. Йыш эскеләй. Үҙенең алпауыт улы икәнлеген торған һайын иҫкә төшөрә. Тиктәҫкә түгел былар. – Тағы ла шул балыҡ башымы?

Головин тороп баҫты. Бер аҙ йөрөп әйләнде. Һүҙен ҡайҙан башларға белмәй яфалана ине шикелле ул. Ахырҙа Фәрүҡшаның алдына килде лә, ике ҡулын да билен ҡыҫып быуған ҡайыш аҫтына ҡыҫтырып:

– Теге ваҡыт беҙ Олеся һәм Оксана менән ҡайындар араһында ултырғанда һин килеп сыҡҡайның бит әле. Иҫеңә төштөмө? Ул ҡайын минең тормошомдоң ниндәйҙер бер һынылышлы мәленең шаһиты булған икән.

– Нисек, нисек? Һин, политрук, философтар кеүек һөйләй башланың. – Фәрүҡша ла аяғүрә баҫты. – Ниндәй «һынылышлы мәле», «ниндәй шаһит»? Аңғартыбыраҡ әйтергә булмаймы ни?

– Ярай, тик бүлдермә. – Василий тағы ла стаканына араҡы ҡойоп эсте. Дуҫына тәҡдим итеп тә торманы. Күрәһең, хәтере сыбалған саҡ булды.

– Мин һине теге ваҡыт, беҙҙең янда ҡунаҡ булғандан һуң өйөңә илтеп ҡуйғайным бит әле. Шунан ҡайтышлай мин шул мөһабәт ҡайындар янында туҡталғайным. Бик тә таныш кеүек тойолдо миңә шундағы бер ағас. Ҡасандыр бик алыҫ үткәндәрҙә күргән кеүекмен. Шул саҡ ҡапыл хәтер асылды, һәм мин үҙемдең ошо ҡайын янында кемдәрҙәндер ҡасып барған олатайымдар арбаһынан осоп төшөп ҡалыуымды хәтерләнем. Дөм-ҡараңғы көҙгө төн ине. Ергә барып бәрелеү менән иҫте юғалттым. Иртән генә аңыма килдем. Ошо ҡайын төбөндә тиерлек ята инем. Оҙаҡ итеп иланым, сөнки эргәмдә бер кем дә юҡ ине. Ныҡ итеп ҡурҡтым. Берәйһе килеп йыуатыр, тип уйлағанмындыр, күрәһең. Ләкин бер кем дә күренмәне. Ошо юл менән төньяҡҡа табан киткәнмен. Аҙаҡ ике башҡорт мине юлда осратып, Силантийға килтереп тапшырҙы.

Головин туҡтаны. Нисек баһалайһың тигәндәй, иптәшенә ҡараны. Был юлы араҡыны Фәрүҡша үҙе ҡойоп эсте. Бер аҙ уйланып торғас:

– Әкиәт, тиер инем, ысынға оҡшаған. Ысын, тиер инем, әкиәтте хәтерләтә. Һин ул саҡта нисә йәштә инең һуң? – тине.

– Өс йәштәрҙә булғанмындыр. – Василий быны бер аҙ уйланып торғандан һуң әйтте. – Шуныһы ғәжәп: бығаса бер ҙә иҫкә килмәгән нәмә бит. Нишләп утыҙ йыллап үткәс хәтергә төшә һуң ул?

– Белмәйем. – Фәрүҡша ла уйға ҡалды. – Кеше хәтере – ҡатмарлы нәмә. Унда ҡайһы саҡ әллә нимәләр йәшереп һаҡлана. Булғылай ундай хәлдәр. Минең үҙем менән дә булғаны бар.

– Бала саҡ хәтирәләре хәтеремде яңыртҡандан һуң мин үҙемдә ике кеше йәшәгәнен аңланым. – Василий шаулатып тын алды ла ныҡ итеп киреде. –

Береһе – алпауыт улы, икенсеһе – уның дошманы, коммунист. Хәҙер миндә ошо ике кеше сәкәләшә. Айыҡ саҡта коммунист Головин өҫкә сыға, эсеп алһам – алпауыт улы.

– Һин шуға йышыраҡ эсергә тырышаһыңмы, Василий Силантьич, то ись Николаевич? – тип төрттөрҙө Фәрүҡша. – Алпауыт улы булыу ныҡыраҡ оҡшай, тимәксеһең инде.

Яуап булманы. Ҡайһыһына өҫтөнлөк бирергә теләгәнен Василий үҙе лә аңлап етмәй. Ләкин шуны белә: икегә бүленеүгә сик ҡуйырға кәрәк. Әлбиттә, Тыуған илендә бай улы булып ҡыланыу зыяндан башҡа бер ни ҙә килтермәҫ. Тәүҙә партиянан сығарып ташларҙар, һуңынан төрмәгә тығырҙар. Кәрәкмәй, ул да кеше балаһы. Донъяла бер генә тапҡыр йәшәй. Идея, принцип – яҡшы нәмә. Әммә…

– Бына шуға мин бюроға инеүҙән баш тартам да инде, – тине Головин, бәхәсте төпкә үк ебәрмәҫкә тырышып. – Беләһең, ике йөҙлөлөк – миңә хас сифат түгел. Тағы ла бер шигем бар: минең пролетар сығышлы түгеллегем райкомға яҡшы билдәле. Берәй хаслыҡ ҡылырға самаламайҙармы икән, тим.

– Һин дә, Василий, райкомға пятно ташлайһың. Яҡшы түгел. – Фәрүҡша һаман дуҫының тел төбөн аңлай алмай ине. – Минән нindәй ярҙам көтәһең һуң?

– Мин, конференцияла фамилиям аталһа, самоотвод алырға йыйынам. Һин мине яҡларһың. Фронтта бергә булдыҡ. Головин – һәйбәт боец, ләкин тыныс тормошта үҙен нисек күрһәтер – билдәһеҙ. Әле уға бюроға инергә иртә, тиерһең. Уйлан, ышандырылыҡ итеп әйтергә тырыш. Минеңсә, һин дәлилле итеп һөйләй, ышандыра беләһең. Фронтта мин быны күп тапҡырҙар һынаным.

Головин тағы ла сиҙәмгә тубыҡланды. Араҡының ҡалғанын стакандарға бүлеп һалды ла сәкәштермәй генә эсеп ебәрҙе. Ҡапҡыланы. Өндәшмәй генә ишаралап, Фәрүҡшаны ла табыны янына сүгәләтте.

– Ярай, ни булһа ла булыр, – тине ул, бер аҙ тын торғас. – Һин нишләп Оксананы һорамайһың әле? Мөхәббәтең һүрелделәме ни?

– Уның нимәһен һорап тораһың инде. – Фәрүҡша юрамал вайымһыҙлыҡ күрһәткән булды. – Янды ла һүнде. Торонбаштары ғына тороп ҡалды. Алыҫтағы ҡояш йылытмай, тиҙәр беҙҙә. Оксана тю-тю.

– Яңыраҡ Олесяға хаты килде. – Головиндың кәйефе ҡуҙгә күренеп күтәрелде. – Һине лә һорашҡан, сәләм әйтергә ҡушҡан. Хатын юлдан һалып ебәргән икән.

– Рәхмәт. Яуап яҙһағыҙ, минән дә сәләм ҡуйығыҙ. Фарукша Мухаметович колхоз йөгөн төптән егелеп тарта, тип. Ҡалғаны үҙегеҙҙән булһын.

Яңыраҡ ҡапыл ғына икенсегә өйләнеүен, әммә йәш ҡатындың йөклө булып, ғәрлегенән был ҡатынды ҡыуып ҡайтарыуын, билдәле, Фәрүҡша йәшерҙе. Оксана тураһында иң яҡшы хәтирәләр күңел түрендә юйыла башлағайны. Ниҙелер иҫенә төшөрҙө Василий. Ҡапыл ҡалҡынды ла табын ҡалдыҡтарын Фәрүҡшаға йыйырға ҡушып, ашығыс ҡына һаубуллашты:

– Ярай, Мухаметович, башҡаса күрешә алмаһаҡ, һин конференцияла, йәме. Әйткәндәрҙе еткерерһең инде.

«Виллис» түбәнерәк Ерекле йылғаны кисте лә йән-фарман Сусаҡ түбәһе үрен менә башланы. Тиҙҙән ул бөтөнләй күҙҙән юғалды.

***

Май аҙаҡтары. Париж йылы ҡояш нурҙарына, күҙҙең яуын алып ултырған сәскәләргә, ихаталарҙа һәм киң урамдарҙа йәм-йәшел япраҡтары менән ҡояш нурҙарын ҡосаҡлаған ағастарҙың хозурлығына кинәнә. Биш йылдан ашыуға һуҙылған Германия оккупацияһы, ниһайәт, тамам. Француздар ҡәнәғәт, улар көндәлек тормош мәшәҡәттәре менән мәшғүл, киләсәкте хәстәрләй.

Франциялағы Советтар Союзы илселеге урынлашҡан бина алдына сығышы Азия тарафтарынан икәнлеген ҡыҫығыраҡ күҙе, киң яңаҡтары күрһәтеп торған, ҡуңыр йөҙлө урта йәштәрҙәге бер ир килеп туҡтаны. Яҡшы туҡыманан тегелгән зәңгәрһыу-ҡара төҫтәге костюм, аяғына ҡиммәтле туфлиҙар кейгән был ир тәүәккәл рәүештә ишек ҡыңғырауын тартты.

– Мин Советтар илсеһен күрергә теләр инем, – тине ул сығып ҡаршы алған хеҙмәткәргә.

Һаҡ, унан да бигерәк шикле ҡарашлы хеҙмәткәр үҙ сиратында:

– Һеҙ кем, йомошоғоҙ нимәлә? – тип белеште.

– Мин Тетюшев булам. – Теге ир кеҫәһенән паспортын алып, асып күрһәтте. – Йомошомдо илсе әфәнденең үҙенә еткерергә ине. Әллә һеҙ илсенең үҙеме?

– Тәртип буйынса, мин илсегә һеҙҙең ни йомош менән йөрөгәнегеҙҙе еткерергә тейешмен, – тине хеҙмәткәр, бәхәсләшергә урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп.

– Яҡшы. – Ҡунаҡтың ирен ситтәре генә йылмайҙы. – Советтар Союзында минең туғандарым бар. Шул хаҡта төплөрәк белге килә.

– Саҡ ҡына сабыр итегеҙ. – Хеҙмәткәр кире боролоп инеп китте. – Һеҙҙе ҡабул итерҙәр.

Бер нисә минуттан, ысынлап та, Тетюшевтың документтарын ентекле ҡарап сыҡҡандан һуң, эскә үткәрҙеләр. Тәҙрә ҡорғандары ҡалын булып, яҡтылыҡ аҙмаҙ ғына төшкән иркен бүлмәлә уны йыуантыҡ, көмрәйә төшкән кәүҙәле, һытыҡ йөҙлө бер кеше ҡабул итте. Үҙен илселек секретары тип таныштырҙы.

– Тәүҙә үҙегеҙ тураһында тулы мәғлүмәт бирегеҙ әле, – тине ул, килеүсегә ултырғыс тәҡдим итеп.

Ҡунаҡ үҙенең кемлеге, ниндәй йомош менән килеүе тураһында ентекле булырға тырышып һөйләп бирҙе.

– Дөрөҫ аңлаһам, аҡ эмигранттар ғаиләһенән булаһығыҙ? – Секретарь ҡунағын, үтәнән-үтә күрергә теләгәндәй, оҙаҡ итеп һынамсыл ҡараны.

– Аҡ тип ни. – Тетюшевтың был һүҙҙе ишеткәне бар ине. Уның ни өсөн ҡулланылғанын да белә. Был һүҙ, дөрөҫөн әйткәндә, уға оҡшаманы. Шуға күрә бер аҙ сырайын һытып ҡуйҙы. – Әсәйем ағалары менән егерменсе йылдарҙа Рәсәйҙән сығып китеп, ошонда төпләнгән.

– Әсәйегеҙ Совет власын ҡабул итмәгән икән. – Секретарь алдындағы ҡағыҙға ниҙер яҙып ҡуйҙы. – Мин һеҙҙе дөрөҫ аңланыммы?

– Әфәндем, был һорауҙы әсәйемдең үҙенә биреү отошлораҡ булыр, – тине Тетюшев, мөмкин тиклем битарафлыраҡ булырға тырышып. – Ул саҡта мин бик бәләкәй булғанмын. Һеҙҙеңсә әйткәндә, синфи аңым үҫешмәгән булған.

– Әле әсәйегеҙ иҫәнме? Ҡайҙа? – тип һораны секретарь. Ул урынынан тороп китте лә, тәҙрә ҡаршыһына баҫып, ҡорғандың ситен генә ҡайтарып, урамға текәлеп тора башланы.

– Иҫән. Көньяҡ Францияла йәшәй. – Тетюшев Марсель ҡалаһынан йыраҡ түгел бер кескәй генә ҡаланы атаны. – Тик ул сәйәсәт менән шөғөлләнмәй. Шөғөлләнмәне лә.

– Һеҙ “ағайҙары” тинегеҙ. Улар иҫәнме? – Секретарь яңынан өҫтәл янына килеп, ултырғысын биләне. – Ҡайҙалар?

– Миңә билдәле булыуынса, эйе. – Тетюшев уңайлабыраҡ ултырҙы. Һөйләшеүҙең тиҙ генә бөтмәйәсәген аңлап алғайны ул. – Тик улар Францияла түгел. Береһе Төркиәлә, икенсеһе Африканың көньяғында Тунис дәүләтендә йәшәй.

– Улар менән һеҙҙең арала бәйләнеш барҙыр бит? – Секретарь тағы ла ҡағыҙына ниҙер билдәләне.

– Эйе. Үҙҙәре йылына бер тапҡыр килеп китәләр. Ҡайһы саҡ әсәйемде ҡунаҡҡа саҡыралар.

Тетюшев сабырһыҙлана башланы. Был һорауҙарҙың йомошона бер ниндәй ҙә ҡағылышы булмауы борсоно уны.

– Нимәләр тураһында һөйләшәһегеҙ? – тине секретарь, өҫтәлгә ике терһәген дә ҡуйып. – Советтар Союзын хурлайһығыҙмы?

– Юҡ, беҙ Советтар Союзын бөтөнләй иҫкә алмайбыҙ. – Был юлы Тетюшев һорау биреүсенең үҙенә оҡшатып яуапланы. – Унда беҙҙең бер кемебеҙ ҙә ҡалманы.

– “Ҡалманы” тиһегеҙ. – Һорау дауам итте. – Элек бар инеме ни?

– Эйе, олатайым иҫән булған. Хәҙер вафат.

– Уның исем-фамилияһы нисек ине? – Секретарь һәр бер һүҙен ижекләп тигәндәй әйтте.

– Головин Фрол Петрович.

Секретарь ҡағыҙына ниҙер теркәп ҡуйҙы.

– Ә хәҙер йомошоғоҙға күсәйек, – тине ул, тағы ла ҡурғаштай ҡарашы менән баҫырға тышырҡандай.

Тетюшев Өфө губернаһында үҙенә атай булырға тейешле кешенең йәшәгәнен һәм уның тураһында ни ҙә булһа белергә теләүен, мөмкин булһа, Советтар Союзына инергә виза һорауын һөйләп бирҙе. Секретарь бүлдермәй тыңланы, уның әйткәндәрен яҙып барҙы.

– Ысын атайығыҙҙың фамилияһы нисек һуң? – тине ул, ирен ситтәре менән генә йылмайып. – Хәтерегеҙҙә юҡмы ни?

– Уның фамилияһы билдәле түгел. – Тетюшев үпкәләгәндәй итте. – Исеме – Мөхәмәтша, ауылы ла билдәле.

Секретарь ҡағыҙына бер аҙ текәлеп ултырғандан һуң, ҡапыл урынынан торҙо.

– Тетюшев әфәнде, – тине ул рәсми тонда. – Мин һеҙҙең үтенесте илсегә әйтермен. Ниндәй ҡарар сығарыр – шуны һеҙгә еткерербеҙ. Хәҙергә хушығыҙ.

Ике айлап ваҡыт уҙғандан һуң Тетюшевтарға кескәй генә конверт килтерҙеләр. Унда, һеҙҙең ысын атайығыҙ Ниғмәтуллин Мөхәмәтша Мөхәмәтҡужа улы иҫән-һау, ғаиләһе менән (ҡайҙа йәшәгәнлеге тураһында ентекле мәғлүмәт яҙылған) йәшәй, ләкин сәйәси сәбәптәр арҡаһында (һеҙ аҡ эмигранттар нәҫеленән, Советтарға дошман элемент) һеҙгә виза бирә алмайбыҙ, тип яҙылғайны.

Хатты өнһөҙ генә уҡып сыҡҡандан һуң, Тетюшев уны үҙенең ҡумтаһының иң төбөнә һалып ҡуйҙы. Әсәһенә бер ни ҙә өндәшмәне. Үҙ-үҙенә, ыңғай яуап ала алһам ғына хәбәр итермен, тигән һүҙ биргәйне.

## VII

Аҙна самаһы ваҡыт үткәс, ысынлап та, район коммунистарын конференцияға йыйҙылар. Алпауыт Головиндың элекке өйөнөң ҡыйығы алдына ҡыҙыл сепрәккә аҡ буяу менән «Партия конференцияһы делегаттарына – сәләм!» тип яҙылған. Райком алдындағы иркен урынды арба, һирәк-һаяҡ машина тултырған. Орден-миҙалдарын сыңлатып фронтовиктар ҙа йөрөп ята. Бер-береһен шаяртып та алалар:

– Әхмәтсолтан! Бисәңдең ҡоймағы харап килешкән үҙеңә. Тултырылған тауыҡ кеүек һимереп киткәнһең.

– Үҙеңде ҡара. Һуғымға һимерткән үрҙәктән бер ҙә кәм түгелһең.

– Сафа! Ҡана, берҙе тарттыр әле. Һинең «Казбек» шәберәк була торған.

– Һаман һаранлығыңды ҡыуаһың, әй! Нишләп үҙеңә лә «Казбек» һатып алмайһың?

Шул саҡ ишек асылып китте лә, тупһала Ғабдуллиндың секретары күренде.

– Товарищи! Заходите! Начинаем, – тип ҡысҡырҙы.

Фәруҡша ян-яғына ҡаранды. Василийҙың «Виллис»ы һаман күренмәй. «Әллә килмәҫкә итәме икән?» хафаланып, уйының осона ла сығып өлгөрмәне, боролмала саң туҙҙырып килгән ҡара йылтыр машина күренде. Яңғыҙ түгел комиссар, Олесяһын да ултыртып алған. Әммә фронтташ дуҫын көтөп торманы Фәруҡша, тиҙ генә залға инеп, алға рәттәрҙең береһенән урын алды. Артҡы рәттәр тулып өлгөргәйне. Тирләп-бешкән Головин да, Ғабдуллин алдынан ғына инеп, дуҫы эргәһенә ҡунаҡланы.

– Здорово? Саҡ һуңға ҡалманым бит. Ҡатын-ҡыҙ менән тиҙ йөрөп буламы ни, – тип һөйләнде үҙе.

Ғабдуллин райондағы хәлгә анализ яһаны. Уның фекеренсә, маҡтанырлыҡ бер ни ҙә юҡ, ә сиселмәгән мәсьәләләр тулып ята. Ҡайһы берәүҙәргә тәнҡит тә эләкте. Доклад буйынса фекер алышып торманылар.

– Ваҡыт тар, – тине Ғабдуллин, залға ҡараш ташлап. – Һүҙ бутҡаһы бешерер мәл түгел. Икенсе көн тәртибенә күсәйек. Бюро ағзалығына кандидаттар күрһәтеү буйынса ниндәй тәҡдимдәр булыр?

Арттан кемдер ҡул күтәрҙе, ахырыһы.

– Әйҙә, Зарифуллин иптәш. Фекереңде әйт, – тип трибунаға саҡырҙы уны секретарь.

Трибунаға Айҙарғәле ауылында колхоз председателе булып эшләгән Әҙһәм сыҡты. Колхоз рәйестәре араһында өлгөр әҙәм булараҡ танылып өлгөргәйне ул. Ярамһаҡланырға тиһәң, унан да татлы теллене таба алмаҫһың. Зарифуллин ҡулындағы дүрткә бөкләнгән ҡағыҙҙы тағатып асты ла уҡырға тотондо. Исемлектә Головин да бар ине. Үҙенең фамилияһын ишеткәс, Василий бер аҙ ҡыҙара биреп ҡуйҙы. Шым ғына Фәруҡшаның ҡулын ҡысты. «Мин һиңә ышанам», йәнәһе.

– Исемлек буйынса фекерҙәр булырмы? – тине Ғабдуллин урынынан ғына. – Бәлки, өҫтәргә теләүселәр булыр? Уңайһыҙланмағыҙ, әйҙә.

Головин ҡул күтәрҙе һәм, урынынан ҡалҡынып, ярайһы көслө тауыш менән:

– Мин самоотвод бирәм, – тине.

– Самоотвод ҡабул ителмәй. – Ғабдуллиндың тауышы ла киҫкен ине. – Конференция ихтыярына ҡаршы бара алмайһың, коммунист Головин!

– Тауыш бирмәнек бит әле, – тип ныҡышты тегеһе.

– Хәҙер тауышҡа ҡуйырбыҙ. – Секретарҙың тауышы был юлы тынысыраҡ сыҡты. – Тағы кемдә ниндәй фекер бар?

Фәруҡша ҡул күтәрҙе:

– Миңә бер-ике ауыҙ һүҙ әйтергә рөхсәт итегеҙ!

Ғабдуллин баш һелкте. Головин мәсьәләһе буйынса икәнлеген аңлап алғайны, буғай.

Фәруҡша тороп баҫты.

– Ярар, мин трибунаға сығып тормайым инде. Ошонан да ишетерләр әле. Мин, Василий Силантьич менән фронтта бергә йөрөгән коммунист булараҡ, уның фекере менән килешәм. Һуғыш – бер эш, һөнәр тиһәң дә була, ә колхозда эште алып барыу – бөтөнләй икенсе нәмә. Мында ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек кенә етмәй, эштең айышын белеү, кешеләрҙе мобилизовать итеү һәләте лә кәрәк. – Фәруҡша был сығышына алдан ентекле әҙерләнгәйне. Бүлдереп кенә ҡуймаһындар, тип ҡурҡты ул. Бар фекере тарҡаласаҡ. – Головиндың колхозы, үҙегеҙ беләһегеҙ, ауыр. Иң ҡыйыны – кеше етмәй. Һуғыштан һуң ҡайһы бер ирләр

анда ҡайтып та тормаған. Аның эше, дөрөҫөн әйткәндә, маҡтанырлыҡ түгел. Ә бюро члены – партия шулай ҡуша – алдынғы булырға тейеш. Минеңсә, аны бюроға һайларға әле иртәрәк. Эш күрһәтһен.

– Белеүебеҙсә, Василий Силантьич фронтта комиссар булған. Ә был уға ҙур өҫтөнлөк бирә. Һәр хәлдә бюро членына торорлоҡ, – тип һүҙ ҡыҫтырҙы Ғабдуллин. – Башҡаларҙа ниндәй фекер булыр?

– Теләмәһә, икенсе кешене һайлайыҡ.

– Эйе, көсләп асылған күҙҙең яҡтыһы булмай.

– Һайлайыҡ, ана, Мусинды, – тип ҡысҡырыштылар урындарҙан.

– Тихо! – Ғабдуллин алдындағы графинға ҡәләме менән һуҡҡылаһы. – Урындан ҡысҡырмағыҙ. Был һеҙгә колхозсылар йыйылышы түгел. Сығып, һүҙ алып һөйләгеҙ.

Трибунаға Мусин сыҡты. Табылдыла колхозды Фәруҡшаға тапшырғандан һуң, ул Стәрлебашта заготконтора мөдире булып эшләй башлағайны.

– Монда агай-эне дөрес әйтте, – тине Мусин бик эре ҡиәфәттә. – Теләмәгән кешегә көчләшеп булмый. Партийный дисциплина – бер нәрсә, внутрений убеждение – икенче. Мин уйлыйм, башка кешене күрсәтик.

– Үҙеңде предлагать итәһеңме ни? – Ғабдуллин төрттөрҙө. – Бюро члендарының барыһын да район үҙәгенән һайларға ярамай. Колхоздарҙан да кеше кәрәк.

– Эйе лә баһа, – тип артҡы рәттәрҙән берәү ҡысҡырҙы. – Лотфулла Алтынбаевты һайлайыҡ. Ул фронтҡа киткәнсе силсәүит сикритары булды. Хәҙер брсиҙәтел. Самай эшләй торған кеше.

– Тәк, улай булғас, Головинды списоктан һыҙабыҙмы ни? – Ғабдуллин берсә залға, берсә Василийға ҡараны.

– Һыҙайыҡ, – тинеләр бер нисә урындан.

Лотфулла Алтынбаев бюро ағзаһы булып еңел үтте. Башҡалар менән бер ҡатарҙан. Конференция тамам булып барғанда, Ғабдуллин Фәруҡшаны туҡтатты:

– Фарукша Мухаметович, һин ҡал әле. Һөйләшәһе һүҙ бар. – Секретарь Головинға ҡарап ҡына ҡуйҙы, әммә өндәшмәне.

– Һиҙеп торам, бында Головиндың ниндәйҙер, более значительный тип әйтәйемме, причинаһы бар. – Кабинетына ингәс, Ғабдуллин тәмәке тоҡандырҙы. Тәрән итеп, бер нисә тапҡыр һурғандан һуң, Фәруҡшаға ҡараны. – Һеҙ бит фронтовой дуҫтар. Секретно ғына әйткәндә, ниндәй причина ул? Как коммунист коммунисту әйт әле?

– Тимерйән Хәбирович, ысынлап та, Василий Силантьич бюро члены булып эшләрлек уровенға етмәгән әле. Аның әле үҙ мәшәҡәттәре күп. Шуларҙан арына алмай.

– Һин хатын мәсьәләһен әйтәһеңдер?

– Юҡ, аныһы хәл ителгән инде. Колхозында эш бармай бит. Кешеһе лә, техникаһы ла етмәй. Бюро члены булғас, аңа пример күрһәтеп эшләргә кәрәк. – Фәруҡша һаман үҙенекен тылҡыны.

– Ярай инде, черт с ним. Ҡалһын. – Ғабдуллин тәмәкеһен тәрилкәгә баҫып һүндерҙе. – Мин һине задерживать итмәйем.

– Хушығыҙ. – Фәруҡша ошолай тиҙ аңлаша алыуына ҡыуана-ҡыуана урамға сыҡты. Василийҙың үҙен көтәсәгенә шикләнмәй ине ул.

– Нимәгә саҡырған? – Машинаһы янында тегеләй-былай йөрөштөрөп торған Головин дуҫына ҡаршы атланы.

– Һине һорашты. Более значительный причинаһы барҙыр, ти. Мин шул элекке әйткәндәрҙе ҡабатланым инде, – тине Фәруҡша, тәмәке тоҡандырып. Секретарь кабинетында тартырға баҙнат итмәгәйне.

– Шул ғынамы? – Головиндың ниҙер белергә тырышҡаны йөҙөнә сыҡҡайны. – Башҡа бер ни менән дә ҡыҙыҡһынманымы ни?

– Юҡ, – тине Фәруҡша өҙөп кенә. – Ҡайтабыҙмы?

– Олесяны көтөргә тура килер. РОНО-ға киткәйне. Уны Ҡарамалыға мәктәп мөдире итеп тәғәйенләмәкселәр икән.

– Әллә ашханаға кереп сығабыҙмы? – Фәруҡшаның байтаҡтан бирле эсе ҡырып тора ине – гастрит. Асыҡһа, түҙҙермәй. – Урыҫтар әйтмешләй, иртәнән бирле ауыҙҙа ысыҡ тамсыһы ла булғаны юҡ.

– Хуп. Минең эстәге ас бүреләр ҙә шулай ти.

Райкомдан йыраҡ түгел урынлашҡан район үҙәгендәге берҙән-бер ашханала ризыҡты телеңде йоторлоҡ итеп әҙерләгәндәрен Фәруҡша яҡшы белә. Килгән һайын инеп, ҡайнар борщҡа ҡаймаҡ һалып ашарға ярата. Әле лә шул ашты алды. Тәҙрәгә яҡын ултырып, ашай башланылар. Василийҙың асыҡҡаны күренеп тора: йүнләп сәйнәмәй генә йота бирә. Бына ул, тәҙрәгә ҡарай-ҡарай, йәнәһе, Олеся күренмәйме, борщын һоғаланып та бөттө.

– Беләһеңме, мин һиңә тағы ла бер важный хәбәремде әйтергә онотҡанмын, – тине ул, икенсе блюдоға тотоноп. – Мин ата-бабаларымдың бында ҡайһы яҡтарҙан килеп төйәкләнгәнен асыҡланым бит әле.

– Дә-ә. – Фәруҡша, быға әллә ни әһәмиәт бирмәй, ашауын дауам итте. – Ну, ҡайҙан?

– Һамар яҡтарынан. Кәмәлек тигән йылға буйынан икән.

– Кемдән белдең-ишеттең инде?

– Өфөгә бер барғанда, архивҡа инеп сыҡтым, – тине Головин етди итеп.

Фәруҡша аңланы: былар тиктәҫкә әйтелмәй. Тимәк…

– Нишләргә уйлайһың? – тине ул, күҙҙәрен ҡыҫа төшөп.

– Тыуған яҡтарға барып әйләнергә ниәтләйем. Нәҫел-нәсәпте юллап. Тик әле түгел. Ураҡты тамамлап, малдарҙы ҡураларға бикләгәс.

– Нәҫел-нәсәпте беҙҙә һәр башҡорт белергә тейеш. Ниәтең изге, Василий.

Һүҙгә әүрәп китеп, Головин ҡатынының машина янына килеп баҫҡанын да күрмәй ҡалған. Ул ҡалағын һалды ла тышҡа ашыҡты.

– Олеся! Кил бында! Төшкө аш ашап алайыҡ.

Юлда бергә ҡайттылар. Василий дуҫын Табылдыға тиклем илтеп ҡуйҙы.

– Ну, Мухаметович, рәхмәт һиңә. Хуш.

Һуғыштан һуңғы тәүге йәй ауыл халҡы өсөн уңайлы килде. Йылы, хатта көн үҙәгендә үләндәрҙе шып киптерерҙәй эҫе көндәр ямғырлылары менән сиратлашты. Үлән күпереп үҫте, мал көтөүҙә йөрөп көрәйҙе. Ҡабырғалары һанарлыҡ булып, ҡышты көс-хәл менән сыҡҡан йылҡы малы ла, йәшелгә аяҡ баҫҡас, ашҡаҙандары үләнгә туйып, матурайып йомроланды.

Кешеләрҙең дә күңеле үҫте. Яҙҙан улар Ҡоро Күндрәк туғайында быйыл мул булған ҡаҡы, ҡымыҙлыҡ, балтырған, йыуа менән ас ҡарынын алдаштырһа, йәй уртаһына Ҡайын соҡоронда, Сатрала, Моронаҡта, Ҡаратал соҡоронда тәгәрләп ер еләге лә бешә башланы. Үкенескә ҡаршы, халыҡтың уның өлгөрөп еткәнен көтөп алырға түҙемлеге етмәне, саҡ ҡына ҡыҙара башлау менән һыҙырып йыйып алып бөтөрҙөләр. Ҡараяр туғайындағы муйылға ла ас халыҡ дәррәү ябырылды. Ҡайһы бер һөмһөҙҙәре ботағы менән һындырып, күп ағасты имгәтте. Түҙмәне Фәруҡша, Самсоновҡа туғайҙы ҡарауылларға берәйһен тәғәйенләргә ҡушты.

Август баштарында Сейәлектә сейә өлгөрә башланы. Уны ла ятылаш бешкән килеш йыя башлағайнылар, Фәруҡша асыуы килеп туҡтатты:

– Аҙна-ун көн сыҙап торорға була бит. Нейә әсәмәкләнәһегеҙ? Бешкәс йыйырһығыҙ, – тип Фәйзрахманды һәм тағы ла бер-ике малайҙы Сейәлекте ҡарауылларға ҡушты.

Ләкин малай-шалайҙы кем тыңлаһын! Бер кис килеп, Борисовка урыҫтары Фәйзрахманды туҡмап киткән. Фәруҡша ауылға барып, бригадирҙың үҙен күреп һөйләште. Ғәйеплеләрҙе табышыуын һораны. Тыңламаһа, милицияға мөрәжәғәт итергә мәжбүр буласағын да әйтте. Антошкин уны тыныс ҡына тыңлаған-дан һуң, йөрөйһөң шунда аҙап арттырып, тигәндәй:

– Мин уларҙы хәҙер по дворам эҙләп йөрөйөммө ни? Алып килегеҙ теге туҡмалған малайҙы. Тапһа, наказать итербеҙ, – тине.

Теге юлбаҫарҙар өсәү булған икән. Өсөһөн дә танinfoны Фәйзрахман. Хатта ҡыҙып китеп, береһенә сыбыртҡыһы менән дә һыҙырҙы:

– Сабакы! – тип ыҫылданы ул асыуҙан. – Фашис!

Фәйзрахманды тыйҙылар. Теге өсәү Стәрлебашта ун биш тәүлек ултырып сыҡты.

Ураҡҡа төшкәс, халыҡ председателдән һуғым һуйҙырыуҙы һорарға тотондо:

– Күптән һурпа төҫө күргән юҡ. Исмаһам, берәй тәкә салдырыр инең, – тине ауылда саялығы һәм төртмә теллелеге менән даны сыҡҡан Зөбәйҙә. – Нейә, үҙ ауыллаштарыңдан йәлләйһеңме? Ҡоро балтырған өйрәһе эсеп кенә эшләп булмай.

Фәруҡша оло йәштәгеләр төҫө ингән ҡатындың йөҙөнә күтәрелеп баҡты. Ни яҙылған унда: үтенесме, әллә талап итеүме? Күптән түгел генә ҡырҡын тултырған был ҡатындың яҙмышы ысынлап та әсе ине. Ире Закир һуғышҡа тиклем үк урлашып, төрмәгә ултырғандан һуң ҡайтып та ураманы. Моғайын, берәй ерҙә башын һалғандыр. Ике ир баланы ҡатын бер үҙе үҫтерә, улдары мәктәпкә йөрөй. Ир балаларҙың үҫә, ашарға һорай торған сағы шул. Күрәһең, ҡатын балаларына ла берәй ризыҡ алып ҡайтырға өмөтләнә.

– Зөбәйҙә апай, – тине Фәруҡша мөмкин тиклем ышаныслыраҡ тауыш менән, – мин үҙем дә һурпаны бик рәхәтләнеп ашар инем. Һуйыр мал юҡ шул колхозда. Барыһы ла иҫәпле. Аларҙы быйыл уҡ тамаҡлап бөтөрһәк, киләһе йыл нишләрбеҙ? Хөкүмәт минән план трибыват итә бит.

– Һы! Үҙең бер ҙә ас йөрөмәйһеңдер әле? – Зөбәйҙә, күрәһең, бөгөн һул аяғынан торған, туҙҙы ла китте. – Түрәләрҙең ас йөрөгәнен беҙҙә кемдең күргәне бар? Ярар, итең үҙеңә булһын! – Ҡатын енләнеп китеп барҙы.

Һүҙгә шул саҡ быға тиклем әңгәмәгә ҡушылмай, тыныс ҡына тыңлап торған Ғәйфулла ҡушылды:

– Зөбәйҙә, нейә брсиҙәтелде әрләйһең? – тине ул тәмәкене күп тартыуҙан ғыжылдап торған тауышы менән. – Дөрөҫ әйтә ул: малға тейергә ярамай. Берәйһен бысаҡлаһа, иртәгә үк үҙен төрмәгә һаласаҡлар. Закун ҡаты, беләһең, – тип тамамланы ул һүҙен, председатель яғына ҡарап.

– Мына бәхеткә минең һыйыр быйыл икене быҙауланы. Көҙгә мин аны һуям. Нәҫел яңыртырға кәрәк. Бар ауылды ашҡа саҡырмаһам, исемем Ғәйфулла булмаһын! – Ул, былай ҙа ялпаҡ битен тағы ла ялпағыраҡ итеп йылмайып, кеҫәһенән янсығын сығарҙы ла махорка төрөргә тотондо.

Шул саҡ ҡайҙандыр Ғәйфулланың ҡатыны Ғәтиә килеп сыҡмаһынмы! Ул да саялыҡҡа Зөбәйҙәнән бер ҙә ҡалышмай.

– Ней тиһең, ярыҡ барабан? Һуйҙырырмын мин һиңә һыйырҙы! Балаларҙы һөт-ҡатыҡһыҙ ҡалдырырға итәһеңме? Алар һинең кеүек махуркаға туймай. – Асыуҙан ҡып-ҡыҙыл булған Ғәтиә, төкөрөк сәсеп, иренә урағы менән һелтәнергә кереште. – Ҡара һин аны, ыштанһыҙ, ҡайһылай йомартлана.

– Ғәтиә еңгә, ҡуй. Ҡартыңды имгәтеп ташлаһаң, беҙ һиңә яңы бабайҙы ҡайҙан алырбыҙ? – тип көлкөгә һабыштырҙы Фәруҡша. – Аны райкумдан алып бумай.

Ғәтиә яуап ҡайтарманы. Ҡулын һелтәне лә ситкә китте.

Был хәл Фәруҡшаны тәрән уйға һалды. “Зөбәйҙә апай дөрөҫ әйтә бит. Инде нисәмә йыл халыҡтың тамағы ризыҡ күргәне юҡ. Элекке йылдарҙа “Бөтәһе лә фронтҡа!” тип тартып алып торғандар. Яҙын күгәргән башаҡ ашап күпме кеше ағыуланып үлгән. Хәҙер һуғыш та юҡ, ләкин һаман тыялар. Райкомда барған һайын туҡып ҡына торалар: “Малдың бер башына ла теймәҫкә! Үрсетергә кәрәк. Ҡала беҙҙән ашарға һорай. Ҡарағыҙ уны!” Ҡала ашарға һорай тип, мындағы кешеләр астан үлергә тейешме ни? Ярай инде булмаһа, бар өҫтөнә? Юҡ, былай ярамай, иртәгә үк Ғабдуллинды күреп һөйләшергә кәрәк. Әтеү халыҡты эшләтеп булмаясаҡ”.

...Уны иғтибар менән тыңлаған секретарь күңелһеҙ йылмайҙы.

– Фарукша Мухаметович, сезнең дворда сарык-кәҗә бармы? – тине ул нисектер сәйер ҡараш менән.

– Ауылда йәшәгәс, нишләп булмаһын, бар, – тине Фәруҡша, секретарҙың ни өсөн ошондай һорау биргәненә аптырабыраҡ.

– Так вот, шуларның берсен суй да ашат колхозникларга. Көзен мин сиңа баш на баш колхоз көтөүеннән кайтартырмын.

Әллә Ғабдуллин шаяртамы, тип Фәруҡша уға текләп ҡараһа ла, бер ниндәй ҙә шаярыу тойғоһо таба алманы.

– Ярай, аңлашылды. – Ул хушлашмай ғына сығып китте.

Юл буйы секретарҙың тәҡдиме тураһында уйлап ҡайтты ул. Атаһы менән әсәһе риза булырмы? Ихатала берҙе бәрәсләгән бер кәзә лә ике бәрәсле бер һарыҡ. Әле бәрәстәре лә бәләкәй, имәләр. Ни эшләргә?

– Һуй һуң, – тине Мөхәмәтша, улын тыңлап бөткәс. Уның сырайы үҙгәреп, борсолобораҡ киткәйне. Ҡаршы төшөргә ҡарт ҡыйманы. Улы колхоз башлығы, кеше көнлө кеше бит.

Өммөгөлсөм иһә бөтөнләй өндәшмәне, иренен генә ҡымтып ҡуйҙы. “Бындайҙы кемдең күргәне бар? Калхуз эше өсөн үҙ малыңды бысаҡлағанды”, – тип уйланы ҡарсыҡ. Һиҙҙе Фәруҡша: атаһы ла, әсәһе лә өнәмәй.

Был ваҡиға Мөхәмәтшаға колхозға инеүҙе иҫенә төшөрҙө.

...Ҡышҡы һалҡын көндәрҙең береһендә егерме йәшлек Сафа менән ун етеһе лә тулмаған Фәруҡшаһы урамдан бышлығып ҡайтып инделәр. Икеһенең дә йөҙҙәре ҡыҙарған, ниндәйҙер тантаналы тойғо кисергәндәре һиҙелеп тора.

– Атай, беҙ калхузға керҙек! – Ишектән аша атлау менән һөрән һалды Сафа. – Аръяҡҡа палнамуч килгән. Барыһын да яҙалар.

Колхоз сығыуы тураһында Мөхәмәтшаның ишеткәне бар ине. Малдарҙы тотош колхозға аласаҡтарын да кемдер һөйләгәйне. Шул көн еткән икән.

Әсәләре ултырткан сәйҙе арлы-бирле эскәндән һуң, ике ул да ихатаға сығып китте. Арттарынан аталары ла эйәрҙе: был малайлар ни ҡылырға йөрөй икән? Икеһе лә туп-тура аҙбарға атланы. Ҡапҡанан туры алашаны етәкләп килеп сыҡтылар.

– Аны ҡайҙа алып бараһығыҙ? – Мөхәмәтша белә тора һораны.

– Калхузға атһыҙ алмайлар, атай, – тип яуапланы Фәруҡша, алашаны һыбай менеп. – Шунда апарабыҙ.

– Алай икән. – Мөхәмәтша ни әйтергә лә белмәне. Малайҙар барыбер уны тыңламаясаҡ. Ата – улды, инә ҡыҙҙы белмәгән саҡ бит. Уның ике күҙенән дә эре йәштәр һытылып килеп сыҡты. Атһыҙ нисек донъя көтмәк кәрәк?

Үҙенең кисерештәрен күрһәтмәҫ өсөн, ул ҡапыл боролдо ла өйгә инеп китте. Ат башы ғына булған икән, хәҙер, ана, бәрәсле һарыҡҡа ла сират етте, тип уйланы Мөхәмәтша. Күрәһеләр алдалыр әле.

Кисен Фәруҡша Фәйзрахманды килтереп, бәрәсле һарыҡты һуйырға ҡушты. Бер ни аңламаған үҫмер һүҙһеҙ тыңланы. Һуңынан һарыҡтың түшкәһен колхоз келәтенә илтеп элделәр. Инәһеҙ ҡалған ике бәрәс төнө буйы баҡырышып сыҡты. Иртә менән уларҙы көтөүгә ҡыуманылар. Ике бәрәс йәй буйы ҡырҙан алып ҡайтҡан үлән менән туҡланып, бикле торҙо.

Иртәгәһен Тажит яланында ҡаҙан аҫтылар. Аш-һыуға оҫта Хәлимә шунда уҡ туҡмас ҡырҡты. Итте, бешеп сыҡҡас, өлөштәргә бүлгеләне. Тәмле ит еҫе аҡрын ғына иҫкән ел менән бөтә яланды тултырҙы. “Касан ашарға саҡырырлар инде” тигәндәй, ураҡсылар ауыҙҙарына тулған һеләгәйҙәрен йота-йота, түҙемһеҙлек менән төшкө ашты көттө. Эш ҡайғыһы бөтөнләй китте.

– Таштан да йүкә һуйып була, – тип һөйләнде Зөбәйҙә, урағын бер яҡ ситкә ҡуйып. Ул яулығын сисеп ебәрҙе лә йәшел үләнгә сүгәләне. – Тапҡан брсиҙәтел малды. Маладис.

– Эйе лә баһа. Хәҙер емертеп эшләргә лә була.

– Әллә ҡасандан бирле танау ҡысыта ине.

– Уңдыҡ брсиҙәтелдән, ағай-эне. Теге ҡарун Мусин түгел инде, – тип Зөбәйҙәне йөпләне ураҡсы ҡатын-ҡыҙ. Ирҙәр генә ҡушылманы.

– Фәруҡша абзыйҙың һарығы тәмлеме? – тине һыбай килеп туҡтаған Фәйзрахман, атынан һикереп төшөп. Ул да, һурпа эләкмәҫме, тип килгәйне.

– Калхуз һарығы түгелме ни? – тине төҫө үҙгәреп киткән Зөбәйҙә. – Мин ни...

– Юҡ, кисә брсиҙәтел үҙенең һарығын һуйҙырҙы минән. Мал булыр әле, тине. Тик эш кенә барһын. – Алып килгән сеүәтәһен Хәлимәгә һуҙып, Фәйзрахман шулай һөйләнде. – Апай, миңә лә өлөш сығар инде һин. Һуйған байына.

Ураҡсылар өндәшмәне. Председателдең колхозсыларҙы һыйлау өсөн үҙ малын тәләфләүенә улар берҙәй ғәжәпләнде. Ҡара һин уны. Шәп иткән бит!

Ураҡты табылдылар дәррәү, районда беренселәрҙән булып тамамланы. Быны ишеткән Ғабдуллин ауылға үҙе килеп сыҡты. Яңғыҙы түгел ине секретарь. Эргәһендә тәбәнәк буйлы, ас яңаҡлы, оҙон ҡырлас танаулы, ҡырыҫлығы бар тәбиғәтенә сыҡҡан дәүләт именлеге капитаны ла бар ине. Уны күреү менән Фәруҡша ниҙер һиҙенде.

– Ну, Фарукша Мухаметович, котлайым. Молодец! Һеҙгә райкомдың переходящий вымпелы бирелә, – тине Ғабдуллин, председателдең ҡулын ҡыҫып. – Бик тырышып эшләнегеҙ.

– Эйе, Тимерйән Хәбирович. Һарыҡ помогать итте, – тип көлдө Фәруҡша.

– Ниндәй һарыҡ? Аңламайым. – Ғабдуллин ысынлап та ғәжәпкә ҡалды.

– Теге уахыт рөхсәт һорап барғайным бит. Ураҡсылар һурпа һорай, тип. Шунан һуң һуйырға туры килде инде. – Фәруҡша аңлатты.

– Колхоздыҡынмы?

– Юҡ, үҙемдекен, шулай һөйләшкәйнек бит.

– Ә-ә. – Секретарь көлдө. Шунан ҡапыл етдиләнеп: – Ярай, рөхсәт итәм: иртәгә үк колхоздың бер һарығын һуйып, ураҡсыларҙы һыйлағыҙ. Әйҙә, кешеләр заслужили быны, заслужили. Эйе, эйе.

Был турала һүҙ тамам тигәндәй, Ғабдуллин тамаҡ ҡырҙы ла теге капитанға күҙ төшөрҙө. «Һеҙҙең йомошҡа күсәбеҙ», йәнәһе. Капитан һиҙелер-һиҙелмәҫ баш ҡаҡты.

– Был иптәштең, Фарукша Мухаметович, йомошо һеҙҙә. Уфанан специально

килгән. Ҡайҙа һөйләшәһегеҙ? – тине секретарь, уларға алмаш-тилмәш күҙ төшөрөп.

– Ошонда инде. Бер аҙ ситкәрәк китәйек тә. – Фәруҡша теге хәрбигә үҙенең артынан барырға ымланы.

Ситкәрәк, бағанаға бәйле торған председателдең кырандасына йәшел бесәнгә барып ултырҙылар. «Ғәжәп… Уфа һынлы Уфанан килгән. Госбезопасность кешеләре үҙләрен алай мәшәҡәткә ҡуймай торғайны. Ни булды икән? Уфаға үҙен саҡыртмағаннар бит. Значит, ниҙер бар. Ни булыр?»

Капитан һүҙ башларҙан алда ҡулындағы папкаһын асып, ниндәйҙер ҡағыҙҙар сығарҙы, ашыҡмай ғына уларға күҙ йүгертеп сыҡты. Оҙаҡ ҡына ошолай маташты. Ниһайәт:

– Фарукша Мухаметович, миңә билдәле булыуынса, һеҙ фронтта байтаҡ йөрөгәнһегеҙ. Ҡаты яраланғанһығыҙ ҙа. Пленда булырға тура килмәнеме? – Капитандың тауышынан да, ҡарашынан да ҡәбер һалҡынлығы һирпелде.

– Юҡ, ундай ғазапҡа дусар ителмәнем,– тине Фәруҡша мөмкин тиклем битараф тауыш менән. Уның был капитан алдында дәрәжәһен төшөргәһө килмәне. – Пленға эләкһәм, бында ултыра алмаç инем. Йә фашистар дөмөктөрөр, йә…

– Эйе, тел төбөгөҙҙө аңланым. – Капитан ҡарашын ситкә алды. – Тормош бик ҡатмарлы шул. Н-да. Ә һеҙҙең сит илдәрҙә туған-тыумасағыҙ бармы? – Капитан бышылдауға күсте. – Был һорауға предельно откровенно яуап бирергә тәҡдим итәм. Информацияны йәшереп ҡалдырһағыҙ йәки дөрөçөн әйтмәһәгеҙ, үҙегеҙ беләһегеҙ.

– Белмәгән ҡайҙа! Һеҙгә бит ер аçтында йылан көйшәгәне лә билдәле. – Фәруҡша тәмәке тоҡандырҙы. – Һеҙҙең менән шаярырға ярамағанын мин фронтовик та белмәһә. Һорауығыҙға, капитан, предельно откровенно яуап бирәм. Минең, беҙҙең ғаиләнең сит илдәрҙә туған-тыумасалары юҡ һәм булманы ла. – Ул тәмәкеһен ныҡ итеп һурҙы ла, төтөнөн ситкә өрөп, капитанға текәлде. – Яуабым ҡәнәғәтләндерәме, капитан?

– Юҡ. Һеҙ ялғанланығыҙ, йәғни скрыли информацию. Специально, тип уйламайым. Возможно, һеҙ информацияны белеп етмәйһегеҙҙер. Бына ошо ҡағыҙҙа яҙылыуынса, – капитан папкаһынан бер бит ҡағыҙ сығарҙы, – һеҙҙең Францияла бер туғанығыҙ бар. Дөрөç, уның исем-фамилияһы икенсе. Славяндарса.

– Ә-ә, – тип көлөп ебәрҙе Фәруҡша, – Тетюшевмы? Эйе, ишеткәйнем. Яңыраҡ ҡына.

– Ана бит. – Капитан йылмайғандай итте. – Ә үҙегеҙ «юҡ»тан һалдыраһығыҙ.

– Бына нимә, капитан. – Фәруҡша етдиләнде. – Аны беҙҙең родня һанау, бәлки, дөрөçтөр ҙә. Ләкин беҙ уның тураһында бер ни ҙә белмәнек. Связь поддерживать итмәнек. Ишетеүемсә, атайымдың йәшлектә аҙашып ҡалған мөхәббәт емеше ул.

Фәруҡша Силантийҙан ишеткәндәрҙе капитанға һөйләп бирҙе. Тегеһе бүлдермәй генә тыңланы.

– Әйтегеҙ әле, капитан, алпауыт Головиндың ейәне әллә Мәскәүгә хат яҙғанмы? – тине Фәруҡша, хәбәрен тамамлап.

– Уныһы һеҙгә ҡайҙан билдәле? – Капитан ысынлап та ғәжәпләнде.

– Шулай булмаһа, һеҙ был хаҡта ҡайҙан белер инегеҙ? – тине Фәруҡша битараф ҡына. – Мин аҙыраҡ донъя күргән кеше бит. Аҙ-маҙ булһа ла фекерләй беләм.

Капитан бер аҙ өндәшмәй ултырҙы. Нисегерәк яуап ҡайтарырға уйлағандыр.

– Тәк, шулай. Сит ил министрлығына Тетюшевтан хат килгән. Үҙенең туғандарын табышыуҙы һораған. Кемде эҙләгәнен әйтеп, үҙенә билдәле адресты

атаған. Ул кеше, ысынлап та, һеҙҙең атайығыҙ. Бында Тимерйән Хәбирович ҡайһы бер нәмәләрҙе һеҙгә әйтмәй генә асыҡлаған.

Капитан, артығын ысҡындырмайым тигәндәй, ҡапыл тынып ҡалды. Бер аҙҙан:

– Билдәле, мин ул хатты күрһәтә алмайым, сөнки үҙем дә күрмәнем. Хат – Мәскәүҙә. Беҙгә уның буйынса нимәләр асыҡларға кәрәклеген генә әйттеләр. Үҙемдән шуны өҫтәргә тейешмен: һеҙ Головин тураһында бер ни ҙә белмәйһегеҙ. Был турала онотоғоҙ, бер ҡайҙа ла һөйләмәгеҙ. Аңлашыламы?

– Һис һүҙһеҙ, капитан. – Быны Фәруҡша ихлас әйтте.

– Тағы ла бер деталь. – Капитан тағы папкаһында соҡсонорға кереште. – Һеҙҙең ағайығыҙ Әхмәтша Мухаметовичтың дошман ғәскәрҙәренә сығыуы, бәлки, һуғышып та йөрөүе һеҙгә билдәлелер. – Капитандың ауыр ҡарашы тағы ла Фәруҡшаға ҡаҙалды. – Шулаймы?

– Эйе, ишеткәйнем. Ҡайтҡас. – Фәруҡшаның сырайы һүрәнләнде. Тулҡынланыуы йөҙөнә бәреп сыҡты. – Беҙҙең һөйләшеүгә уның ни ҡыҫылышы бар? Ағайымдың немецтар яғында йөрөүе иҫбатланғанмы, әллә уйҙырма ғынамы – миңә билдәһеҙ. Мин ағайым өсөн яуап бирмәйем.

– Әхмәтша Ниғмәтуллиндың 1941 йылдың йәйендә Бобруйск тирәһендә дошманға әсир төшөүе тураһында беҙҙә ышаныслы мәғлүмәттәр бар. Ул иҫән ҡалған. Һуғыш аҙағында союздаштар биләгән территорияға эләккән. Артабан Латин Америкаһына киткән. Шунда уның эҙе юғала, – тине капитан, ҡырыҫ йөҙөнә ҡәнәғәтлек билдәләре сығарып. Йәнәһе, беҙ ер аҫтында йылан көйшәгәнен, ысынлап та, беләбеҙ.

– Ағайым өсөн мин яуап бирмәйем, – тип ҡабатланы Фәруҡша. – Һуғыш сыҡҡандың тәүге йәйендә пленға миллиондар төшкән.

– Ә 250-се приказ тураһында ишеткәнегеҙ булманымы ни? – Капитан тағы ла ҡырыҫланды. – Пленға төшкәндәрҙең туған-тыумасалары өсөн яуаплылыҡ ҡаралған унда.

– Беләм, капитан. – Фәруҡша ҡапыл ҡырыҫланды. – Тик беҙ, башҡорттар, әйтмешләй, аҡ эттең бәләһе ҡара эткә төшөргә тейеш түгел.

– Ярай. – Капитан түш кеҫәһенән сылбырлы сәғәтен алып ҡараны. – Бәхәсләшеп ултырырға ваҡыт та, уның кәрәге лә юҡ. Мин әйткән һүҙҙәр көсөндә ҡала.

– Яҡшы, капитан. – Фәруҡша кырандастан төштө.

– Ә Силантий Машаковты беҙ хәҙер үк барып күрербеҙ. – Капитан аяҡтарын яҙып, бер аҙ кирелде. – Аңлатыу эше үткәрербеҙ. Ә һеҙгә мин һаулыҡ һәм уңыштар теләйем.

Капитан уң ҡулын йәшел фуражкаһына терәне:

– Хушығыҙ.

Ғабдуллин ураҡсылар менән йылмайып хушлашты:

– Иптәштәр, тормош яйлана. Тағы ла өс-дүрт йылдан гөрләшеп йәшәрбеҙ әле. Ауыр көндәр төш кеүек кенә иҫтә ҡалыр. Иҫән булығыҙ.

Райком машинаһы, саң туҙҙырып, Ҡаратал соҡоро яғына елдерҙе. «Ҡарамалыға киттеләр»,– тип уйланы Фәруҡша.

## VIII

Ураҡты тамамлағас, Фәруҡша үҙенә ике көн ял бирҙе. Тәүге көндө яҡшылап мунса инде, бер ҡайҙа ла сығып йөрөмәне. Иртәгәһен, Сафа ағаһына эйәреп, Ҡоро Күндерәккә мурҙа һалырға төштө. Ағаһы – бик оҫта балыҡсы. Йылғалағы эре суртан, опто, алабуға ул һалған мурҙаға күпләп инер булды. Ҡустыһын, көн дә булмаһа ла, йыш ҡына балыҡ ашарға саҡыра ине Сафа.

Август аҙағы етеп килеүгә ҡарамаҫтан, көндәр эҫе тора. Сафа салбар балағын төрҙө лә, һыуға төшөп, ҡулындағы һайғауы менән йылғалағы мурҙаһын эҙләне. Табып, өҫкә күтәргәйне, мурҙала балыҡ күп булып, һайғау ауырлыҡтан шартлап һынды. Сафа, тигеҙлекте юғалтып, кейеме менән һыуға йығылды. Лысма һыу күлдәк-ыштанына күҙ һалып, асыуланманы, көлдө генә:

– Йыбанһаң, шулай була ул. Сисенергә кәрәк ине. – Ул шул килеш мурҙаһына ҡарай йөҙөп китте, лә эләктереп, ярға һөйрәп сығарҙы. Мурҙаның эсе тулы балыҡ ине.

– Һинән, Фәруҡша, бер ярты. – Ағаһы киң итеп йылмайҙы ла, төбөнән тотоп, мурҙаны ергә һелкте.

– Минән эш ҡалмаҫ. – Фәруҡша һыңар ҡулы менән мурҙанан ҡойолған балыҡтарҙы кесерткән тоҡҡа тултыра башланы. – Тик мыны кем таҙартыр?

– Балыҡты, ҡустым, еңгәң бик матур таҙарта. Аныһы өсөн баш уатма.

Табала телеңде йоторлоҡ итеп ҡурылған балыҡты ашағанда, һүҙ үҙенән-үҙе Фәруҡшаға ҡатын, Сафаға килен алыуға төшөп китте. Ҡатынының ҡулы тәмлелеген сираттағы тапҡыр маҡтағандан һуң, өй хужаһы ҡустыһына былай тип төрттөрҙө:

– Килендең балығын ҡасан тәмләп ҡарарбыҙ икән? – тине ул, сираттағы рюмкаһын эсеп бөтөргәс. – Һин, туғанҡай, буйҙаҡ булып күпме йөрөргә уйлайһың?

– Әллә берәйһен димләйһеңме, абзый? – Фәруҡшаның да күңеле күтәренке.

– Димләргә мин һиңә Рәхимә әбейме ни? – Ағаһы еңелсә һыҡранды. – Бисәсәсә донъя тулы ла баһа.

– Бисәләр донъя тулы – аныһы дөрөҫ. Тик ҡатын булырҙайы кәрәк миңә. – Фәруҡша һике ситендә ятҡан таҫтамалды алып, ирендәрен һөрттө. – Әйҙә, абзый, ишек алдына сығып һөйләшәйек.

Тәмәке көйрәткән арала Фәруҡша үҙенең Ҡарамалыла бер йәш ҡатынға ғашиҡ булыуы, хәҙер уның Украинаға ҡайтып китеүе тураһында һөйләп ташланы. Сафа бүлдермәй генә тыңланы, оҙаҡ ҡына өндәшмәй торҙо. Маңлай, сикә һырҙары тәрәнәйгәндәй тойолдо.

– Ғишҡыңдың ғүмере ҡыҫҡа булыуы насар, – тине ул уйсан ғына тауыш менән. – Ни тип ул марйалар белән сыуалаһың? Аларҙың беҙгә хатын була торғаны бармы? Алһаң да, барыбер тора алмаҫ инең.

Сафа бер аҙ ситкәрәк китеп, ситән ҡоймаға һөйәлде.

– Атайым да, һин дә ҡыҙыҡ кешеләр икәнһегеҙ. Ул да йәш сағында Ҡарамалыла бер марйа белән сыуалған, имеш, тип һөйләгәйнеләр. Һин дә шул юлды ҡыуаһың.

– Атайымда минең эшем юҡ. – Фәруҡшаның ҡапыл ғына кәйефе боҙолдо ла китте. – Беҙ аны хөкөм итә алмайбыҙ. Ярай, абзый, һиңә балыҡ өсөн рәхмәт.

– Туҡта, туҡта! – Сафа ҡустыһының яурынынан эләктерҙе. – Беҙ бисә мәсьәләһен бөгөн үк хәл итеп ҡуйайыҡ. Әсәйем дә шуны тылҡый.

Фәруҡша туҡтаны.

– Рабиғаға нисек ҡарайһың? – Сафа ҡулын ысҡындырмай ғына ҡустыһына текәлде. – Матур ҡатын ул. Бисә булмаҫлыҡ түгел.

– Аръяҡ Рабиғамы? – Фәруҡша уны белә ине. – Ул кейәүгә сыҡҡайны түгелме ни?

– Ире һуғышта үлеп ҡалған. Балаһы юҡ. Әле ата-әсәһе менән йәшәй. Әйҙә, бөгөн үк шуны алып ҡайтайыҡ. – Сафа тамам дәртләнеп китте. Әйтерһең дә, ҡатынды уның үҙенә алалар.

– Юҡ, юҡ, – тине Фәруҡша ҡәтғи итеп. – Мал алырға барғандай өтәләнәһең, абзый. Ашыҡма, уйлашырға кәрәк. Һине түгел, мине өйләндерәбеҙ бит.

Сафа ағаһының ихатаһынан сыҡҡас, Фәруҡша Өй тауы яғына күҙ һалды. Иртә ине әле, ҡояш байырға байтаҡ ваҡыт бар. Көн аяҙ, күктә болот әҫәре күренмәй. Талғын. Сафаның аҙбар яҡлап үҫкән тирәктәренең япраҡтарын һелкетерлек тә ел юҡ. Урам да һил, хатта бала-саға уйнағыны ла күренмәй. Кешеләр ураҡтан һуң ял итә.

Фәруҡша атаһы өйөнә табан ыңғайлай биреп ҡуйғайны ла, кире уйлап, үҙ йортоноң ҡапҡа алдындағы оло яҫы ташҡа барып ултырҙы. Тәмәке тоҡандырҙы. Уйҙар төпкөлөнә инеп китте уның күңеле. Ә бит ошо ихата ҡасан ғына кеше-ҡара тауышынан былай уҡ мәхрүм түгел ине. Ниҙер иҫенә төшөрөп, Фәруҡша артына боролдо ла ситән ярығы аша урамына күҙ ташланы. Уны бил теңенте булып ниндәйҙер әрһеҙ, һары сәскәле үлән баҫып үҫеп киткән. “Хәйерһеҙ, – тигән уй йүгереп үтте уның башынан,– ошо урамды ҡарарға ла уахыт етмәй. – Ул ирекһеҙҙән үҙенең зәғиф ҡулына күҙ ташланы. – Әлеге шул сулаҡлыҡ ғәйепле”.

Ауыр итеп торҙо ла, ситән ҡапҡаны асып, ихатаһына үтте. Уның артынан тапалып иҙелгән әрһеҙ үлән, ниндәйҙер һаңғырау тауыштар сығарып, ергә эйелде. Тәҙрә янына килеп, эскә ҡараны Фәруҡша. Ул был мәлдә ҡола ялан кеүек буш. Һикелә генә ниндәйҙер сепрәк киҫәге күренгән кеүек. Күрәһең, әсәһе килтереп япҡандыр. Ишек төбөндәрәк һуғышҡа тиклем Фәруҡша үҙе әтмәләгән ултырғыс тора.

Ошоғаса өйөн килеп күрмәгәнгә бер аҙ аптырабыраҡ Фәруҡша тупһа яғына атланы. Эскә үк инеп күҙ һалғыһы килеп киткәйне, ләкин ишектәге оло йоҙаҡ уны был теләгенән төңөлдөрҙө. “Йоҙаҡлы булмай һиңә, аны кем асыҡ килеш ҡалдырһын”, – тип үҙенән үҙе көлөп ҡуйҙы.

Арыраҡ – ситән аҙбар. Уның тышҡы ҡапҡаһы күптән иҫкереп, йүкә бауынан ысҡынған да ерҙә аунап ята. Фәруҡша уны һыңар ҡулы менән күтәреп, һөйәп ҡуйҙы ла аҙбар эсенә үтте. “Бынағайыш, әллә аҙбар эсен мин киткәндән һуң сығарып та аҙапланмағандар? – Ысынлап та, тиреҫ бер һәнәктәй ҡалынайған. – Сығарырға кәрәк, сығарырға! – тип көйөндө Фәруҡша. – Малайларҙы ҡушып булһа ла”.

Шул саҡ уның артында кемдер йүткерҙе. Ир кеше булһа кәрәк. Әйләнеп ҡараһа, Мансур дуҫы. Ҡыҫҡа еңле матур күлдәген кейеп алған. Шул һалдат салбары, аяғында һуғышҡа тиклем кейеп йөрөгән итеге.

– Нимә, кәләш китерергә булдыңмы? Донъяңды барлап йөрөйһөң, – тип шаяртты Мансур. Кәйефле икәне күренеп тора. Һуңғы осорҙа уға бер аҙ ит ҡунып, биттәре йомролланып киткәйне.

– Иҫәп бар, дуҫ – Фәруҡша уның янына килеп, ҡул бирҙе. – Күпме инде бер үҙең мендәр ҡосаҡлап ятырға була? Ни эш ҡыйратып йөрөйһөң?

– Ну, председатель. – Мансур ҡулдарын йәйҙе. – Оноттоңдамы ни? Ғабдуллин һиңә калхузникларыңды уборканы бөтөрөү уңайы белән һыйларға ҡушты бит.

– Ҡушманы, Мансур, рөхсәт итте. – Фәруҡша етдиләнде. – Калхуз көтөүенән бер һарыҡ һуйырға. Онотманым. Көтөү ҡайтҡас, үҙеңә барырға тора инем.

– Эйе, мин дә шуны уйлап киләм. – Мансур ситән буйында ятҡан йыуан бүрәнәгә барып ултырҙы. – Һарыҡты бөгөн үк һуйҙырырға ла иртәгә яланға сығырға кәрәк. – Ул күккә ҡарап алды. – Көннәр боҙолорға тора. Минең барометр, – Ул күкрәгенә төртөп күрһәтте,– шулай ти.

– Ярар, бригадир. – Фәруҡша ла тиҫтере янына килеп сүгәләне. Бүрәнәгә ултырманы, осалары ябыҡ булғанлыҡтан, ҡатыла оҙаҡ ултыра алмай ине ул. – Берәйһен ҡушаһыңмы, тигәндәй?

– Үҙем, гадук, үҙем. Бер һарыҡ һуйырға ғына үҙебеҙҙең дә ҡулдан килә.

Эс-ҡарынын Биби йыуыр. – Мансур Фәруҡшаның иҫән ҡулынан тотоп алды. – Һин, дуҫ, бер һарыҡ белән генә ул хәтлем кешене туйҙыра алмаҫһың. Бармаҡ башындай ит эләгә инде.

Мансурҙың күҙҙәрендә әллә ниндәй аңлайышһыҙ ситкылар сағылып китте. Был уйын әйтерҙән алда күп башынан үткәргәйне ул. “Иллеләп кешегә – бер һарыҡ нимә генә инде. Бер һыйыр ҙа самай ғына булыр ине лә. Икәү иткәндә...”

– Әллә тағы. – Фәруҡша был турала уйлап ҡарамағайны әле. – Дөрөҫ әйтәһең, ул хәтле халыҡҡа бер һарыҡ “оло телдән үтмәне, кесе телгә етмәне” кеүек була инде ул. – Председатель бер аҙ уйланып торҙо. “Өҫтө һуйһаң, арыу булыр ине лә. Юҡ, ярамай. Күрәләтә райкомға ҡаршы барып булмай. Анан бөтөрөрләр. Төрмәгә илтеп һалмаһалар әле. Партбилетты тартып алырлар”. Ә үҙе икенсене әйтте: – Тәүәккәлләнек, гадук. Булғас, байрам булһын. Фашист һынлы фашисты еңгәс, һарыҡларҙы үрсетерлек кенә эш ҡулдан килер инде.

Дуҫтар ҡул ҡыҫышты.

– Ҡайҙа йыябыҙ халыҡты? – тине Мансур, ҡәнәғәтлеген йәшермәйенсә. – Аръяҡлар, Ҡайынүҙәк, тип нығыша. Беҙҙең яҡлар, Ҡайын соҡоро, Ерекле йылға, тип еңешә. Әйт һүҙеңде, председатель!

– Ҡайынүҙәктә булмай. – Фәруҡша өҙә әйтте. – Оло юл өҫтөндә байрам итергә башҡа тай типмәгән әле. Үткән-һүткән күҙенә салынып. Юҡ, булмай. Әйҙә, лутсы Ҡаратал соҡорона.

– Йыраҡ бит. – Мансурҙың төҫө үҙгәрҙе. – Ул хәтлемгә ҡасып ни, урлағанды ашамайбыҙ ҙа инде.

– Йыраҡ булһын да ул. – Фәруҡша ниңәлер көләмһөрәне. – Эх һин, дуҫ! Донъя күргән кешеһең үҙең. Һуғыш юлларында йөрөп ҡайттың. Кем әйтмешләй, күп туҡмалдың, ә үҙең хәйлә белмәйһең.

– Туҡта әле, мында хәйләнең ней ҡыҫылышы бар? – Мансурҙың хәтере ҡала биреп ҡуйҙы. – Һин што-то тимниш.

– Беҙҙең байрам иткәнде ситләр белмәһен. Ерекле йылға буйында ултырһаҡ, Шәкәр ауыллары күрәсәк. Шулай бит? Байрам итә торған саҡ түгел әле. Нейә кеше күҙенә күренергә? Кәрәкмәй!

Мансурҙан яуап булманы. Фәруҡшанан тартырға һорап алды ла ҡайтып китте.

Иртәгәһен Табылды урамы ҡояш кәртә буйы күтәрелмәҫ элек ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләтә ине. Кешеләр бер тегеләй, бер былай йүгерҙе. Йыйындылар, төйнәлделәр. Берәүҙәр ат екте, сыр-сыу килеп ултырыштылар. Бер нисә ҡатын хатта балаларын да эйәрткән.

– Йомабикә, был Фәритеңде ҡайҙа алып бараһың? – тине бер оло ҡатын икенсеһенә. – Кәмит ҡарарғамы ни?

– Бәй, барһын! Тамаҡ туйҙырып ҡайтыр, – тип яуапланы Йомабикә. – Өйҙә ас утырһындармы ни?

– Ҡалдыр. Анда барыһы ла балаларын тейәп барһа, сиған табыры була ла баһа. Ҡалдыр. – Бынығы ашнаҡсы Хәлимәнең тауышы ине.

Төшкө яҡҡа Ҡаратал соҡоронда табылдылар илленән дә артыҡ булып китте. Мансур Бибие менән таңдан килеп, ҡаҙан аҫып ҡуйғайны. Хәлимә лә шунда уҡ туҡмас киҫте. Ҡайҙандыр ярты тоҡтай итеп килтергән бәрәңгене әрсеп һалдылар. Йәшел һуған да табылды. Аш өлгөргәнсе халыҡ күләгәлә ял итте. Ирҙәр кәрт һуҡты, ҡатын-ҡыҙ бәйләме менән булашты.

– Йә, Хәлимә апай, ашҡаҙанда баҡалар ҡысҡырыша. Ашың әҙер буламы? – тип ҡысҡырҙы Ғәйфулла.

– Сабыр ит, туғаным, – тине ашнаҡсы яғымлы ғына тауыш менән. – Хәҙер туҡмас һалам. Саҡырырмын.

Ғәйфулла үҙе менән бер бәләкәй генә ағас мискәгә һалып әсеткән бал да алып килгән икән. Аш янына ултырыу менән ул бер сүмескә ағыҙып Фәруҡшаға ла бирҙе. Балы үткер ине, шунда уҡ башҡа менеп китте. Председатель артынса Мансур ҙа, башҡа ирҙәр ҙә тәмләне балды.

– Маладис, Кәйпүш. Нисек башың етеп, килтерә белдең? – тинеләр.

– Ана, Ғәтиәне маҡтағыҙ. Аның эше. – Ир кеше ҡәнәғәт ине.

Бер ҡаҙан аш шул тиклем халыҡҡа етер-етмәҫ кенә булып ҡалды. Бал эсеп ҡыҙып алғас, ирҙәр араһында һүҙ шәбәйҙе.

– Фәруҡша туған! Мына һин бер түгел, ике һуғышта булып, сит ерләрҙе күреп ҡайттың, – тип һүҙ башланы ауылдың иң сабыр һәм аҡыллы һаналған ирҙәренән Янғол. Уның ике улы ла – Яҡуп менән Яхъя һуғышта үлеп ҡалғайны. – Анда халыҡ нисек йәшәй? Шул турала һөйлә әле.

– Аны һөйләп бөтөрөп буламы ни? – Фәруҡша өсөн был һорау әллә ни ҡатмарлы булмаһа ла, көнбайышта күреп ҡайтҡандарҙы маҡтап һөйләү партия тарафынан тыйылғанлыҡтан, ни әйтергә белмәй ине. Беҙҙеке кеүек, тиһәң, алдау була. Яҡшы тиһәң, дошман һүҙен һөйләйһең. Төрлө ерҙә төрлөсә йәшәйләр инде. Ярлыһы бар, байы бар, тигәндәй, – тип яуапланы ул теләр-теләмәҫ кенә.

– Ғәйнулла, нимес халҡы бик бай йәшәй, тип ҡайтҡан да баһа, – тип ныҡышты Янғол. – Һин күрмәнеңме ни?

– Эй, абзый! Мин Германияға уҡ барып етә алманым бит. Күрһәм, һөйләгән дә булыр инем.

– Бәй, һин Дин пабидыҙан һуң ҡайттың бит. Һуғышта йөрөмәнеңме ней? – тип һүҙ ҡыҫтырҙы үрге остан Мөхәмәҙғәле ҡарт.

– Һуғышта, абзый, һуғышта. Ярты йыл гүспитәлдә яттым. Аны ла һуғыш тиләр. – Фәруҡша сулаҡ ҡулы менән емерелгән яңағына күрһәтте. – Мына ошоларға римунт эшләтеү тиҙ эш түгел бит.

– Алай. – Мөхәмәҙғәленең эскә батҡан яңағы әле генә ашаған иттән ҡалған киҫәктәрҙе тамаҡ төбөнә ебәреү менән мәшғүл. Үҙе барыбер һөйләнә. – Күргәнһең инде, туған, эт тә күрмәгәнде. Мынан ары күрергә яҙмаһын.

– Ғәйнулла ҡайҙа булды әле? – тип ян-яғына ҡаранды Янғол. – Минең Яхъям да Бирлин янында үлеп ҡалды бит. Хатында бер ҙә нимес тормошон маҡтамағайны. Белдем, яҙырға ҡушмағаннар икән.

– Янғол абзый, мында мин. Әйт, нимә һорағың килә? – Бер яҡ ситтәрәк ирҙәр менән тәмәке көйрәткән Ғәйнулланың ҡалын тауышы ишетелде. – Нимесләрҙең нисек бай йәшәүен белгең киләме? – Ул, урынынан тороп, ҡарт янына килде.

– Һөйлә әле, туған. – Янғолдоң сырайында ниндәйҙер ҡыҙыҡһыныу осҡондары баҙлап китте. – Ишбулат абзый теге гирман һуғышынан ҡайтҡас һөйләгәйне лә. Ышанманым, булмаҫ, тинем. Нимес яҡшы йәшәһә, беҙгә һуғыш асыр инеме ней?

Ишбулат ҡарт та ошонда ине. Һуңғы йылдарҙа ныҡ ҡына бирешеп китеүенә ҡарамаҫтан, колхоз эштәренән ҡалмай ине ул. Салғы сүкеһенме, тырма йүнәтһенме. Ҡулы эш белә ине ҡарттың.

– Ышанмағас, һиңә һуғышҡа үҙеңә барып күрергә ине, – тип асыуланды ул. – Малайларыңа эйәреп китергә ине.

– Барыр инем, алманылар. – Янғол ҡарт ысынлап үпкәләне. – Бер фашисты дөмөктөрөр инем, исмаһам. Мужит, улларым иҫән дә ҡалған булыр ине.

– Йә, ярар. Ҡысҡырышмағыҙ! – Мөхәмәҙғәле ҡулдарын сәбәләнгәндәй һелтәнде. – Һөйлә, Ғәйнулла! Ҡарама шуларға.

Ғәйнулла хәбәрен әллә нисә тапҡыр һөйләп, ятлап бөтөрөүенә ҡарамаҫтан, нисек башларға, тип уйланды. Башҡа ерҙә нисек һөйләһәң дә бата. Ә мында брсиҙәтел бар. Камунис. Белә бит Ғәйнулла, ниместе маҡтап һөйләргә ярамай.

– Беҙ гирман еренә аяҡ баҫҡас, тәү күргән нәмә шул булды: анда өйҙө беҙҙеке кеүек балсыҡтан йә ағастан һалмайлар. Кирбес тә таш. Андай өйләр тиҙ туҙмай, ике-өс быуынды ҡартайтырға етә.

Артабан ул немец хужалығын һүрәтләүгә төшөп китте. Тәфсилләп, тәмләп тасуирланы ул. Ҡалаларын маҡтарға ла һүҙ йәлләмәне. Фәруҡша уны тыйырға бер нисә тапҡыр уҡталып ҡуйғайны ла, ҡыйманы. Сөнки ауылдаштары бигерәк тә ихлас, ә ҡайһы берҙәре ауыҙҙарын асып тыңлай ине. Хатта ҡатын-ҡыҙ ҙа был яҡҡа ҡолаҡтарын ҡарпайтҡан.

– Белһәң, нимес беҙҙең кеүек батҡаҡ кисмәй, таш юлдан ғына йөрөй. – Ғәйнулла һөйләп арыны. – Әбрәкәйгә лә, Мөхәмәҙғәле абзый, һинең ише арбаҙға түгел, ә списиально һалынған бәләкәй генә карупкаға йөрөй.

Мөхәмәҙғәле ҡарт уңайһыҙланды, ниҙер әйтергә уҡталғайны ла, ҡулын ғына һелтәне.

– Анда, Ғәйнулла туған, калхуз бармы? – тип һүҙ ҡыҫтырҙы ул.

– Ниндәй калхуз булһын ниместә? – Ғәйнулла көлдө. – Юҡ. Анда крәҫтиәнде “бүргер” тип йөрөтәләр. Ана шул һәр бүргер үҙенә эшләй. Байырағы, беҙҙең элекке Әфтәх, Ғарифуллалар кеүек, көнләксә тота. Аны Ишбулат абзый белә инде.

Һүҙен тамамлап, Ғәйнулла Ғәйфуллаға өндәште:

– Ҡана, Кәйпүш, мискәң төбөндә ҡалғандыр. Һал әле әҙерәк.

– Ҡалған, ҡалған. – Ғәйфулла мискәһен күтәрә биреп, һелкетте. – Мында әле һиңә генә етерлек. – Ул мискәһен ҡыйшайтып, сүмескә бал ағыҙҙы. Әсегән балдың ҡырҡыу еҫе тирә-йүнгә таралды. – Мә, эс.

Ғәйнулла аяғын-йөҙөн сытайтмай ғына ғолғолдатып эсте. Яҡын ултырған ирҙәр уның ҡаҙығының бер тегеләй, бер былай йөрөүен ҡыҙыҡһынып күҙәтте.

Икенсе аяҡты Ғәйфулла Фәруҡшаға һондо. Әммә рәйес баш тартты, колхозсылар алдында ауыҙ күтәреп эсеп ултырыуҙы килештермәне.

– Дауай, брсиҙәтел туған. Биргәндән баш тартыу килешмәй ул. – Ғәйфулла ныҡышты, ахыры эсеүе еткәйне. – Күңелең күтәрелеп китер. Ҡасан ошолай геүләшеп утыра алабыҙ әле? Ҡыҙған баштан, мужит, үҙеңә бөгөн хатын алып биреп ҡуйырбыҙ. – Ғәйфулла ҡалын тауышын ғыжғылдатып, көлгәндәй тауыш сығарҙы. – Брсиҙәтел булһаң да, минән кесеһең әле. – Бармаҡ йыуанлыҡ итеп төргән махоркаһын һурҙы ла артабан дауам итте. – Алып ҡайтайыҡ, панимаеш, Ҡарамалынан берәй марйаны. Димләшергә үҙем барам. Балаҡты тыштан һалам да.

Ул һүҙен әйтеп тә бөтөрмәне, ирҙәр ғауғалашып көлөшә башланы. “Төрттөрә. Минең Ҡарамалыға барғанды кемдер һөйләп тә өлгөргән. Кем, ҡайҙан белде икән? – тигән уйҙар йүгереште Фәруҡшаның башынан. – Туҡта, туҡта, Головиндың килеп йөрөүенә ҡарап әйтәләрме?”

Ул, кәйефе ҡырылып, тороп баҫты:

– Абзый, шаяртҡаныңды аңлап торам. Тик грубо килеп сыҡты, – тине ул, Ғәйфуллаға тура ҡарап. – Ә марйаға килгәндә, ниңә, алар кеше түгелме ни?

– Мин дә шулай тим бит. – Ғәйфулла һаман һүҙҙе шаярыуға борҙо.

– Ҡуй әле, Кәйпүш. Ни тип брсиҙәтелде яфалайһың? – Һүҙгә Ғәйфулланың ут күршеһе – аҙ һүҙле, ғәҙәттә йыуаш йылмайыу менән сикләнгән Низам ҡушылды. – Ауылда бисәләр бөткәндәй итеп, марйа һөйләп утыраһың.

– Эйе лә баһа! – Ғәйфулла Низам яғына әйләнеп китте. – Ана, Рабиға ҡасанан бирле Фәруҡша тип һарғая.

Рабиғаның исемен ишеткәс, Фәруҡша ҡатын-ҡыҙ яғына күҙ һалды. Улар һаман үҙ эштәре менән булашып, ирҙәр әңгәмәһенә ара-тирә ҡолаҡ һалып ултыра ине. Күрҙе Рабиғаны Фәруҡша. Төҫө уңып бөткән, бер нисә урындан ямау һалынған сәскәле ситса күлдәк кейгән был йәш ҡатын бәйләмһеҙ генә, ҡатындар араһында һүҙ тыңлап ултыра. Исемен ишетеү менән ул тертләп китте. Ябыҡ йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе.

– Һинән кем ир һорап утыра әле, Кәйпүш абзый? – тине ул, асыуланып. – Ана, Орҡояңды бир Фәруҡшаға. Алай бик теләгәс.

– Орҡоя ҡыҙымды бирер инем дә, маңҡаһы кипмәгән. – Ғәйфулла һаман шаяра ине. – Ә мына һин какрас.

– Ғәтиәңде бир, алай булғас. – Рабиғаның да үҙ туҡһаны туҡһан. – Айыр ҙа бир.

– Һай, иҫәүән! – Ғәйфулла үпкәләне. – Ҡарт бит ул. Минән башҡа кемгә яраһын?

Ҡатын-ҡыҙҙар араһында берәүҙәр Рабиғаны яҡланы, икенселәр – Ғәйфулланы:

– Шаярта ғына бит Кәйпүш.

– Уйындың да ысыны була.

– Эйе, уйындан уймаҡ сыға.

– Ҡуй, ярар, брсиҙәтел бисәне һеҙҙән һорап алмаҫ инде.

Ул арала Рабиға тиҙ генә урынынан торҙо ла йән-фарман ауыл яғына йүгерҙе. Бик ныҡ хәтере ҡалғайны, ахырыһы.

– Бар, туған, атың белән артынан төш! – Янғол ҡарт Фәруҡшаға ҡараны. – Кеше белән алай яман булышырға ярамай.

– Бар, бар, брсиҙәтел. Һин артынан төшһөн өсөн ҡасты бит ул, – тине ҡатын-ҡыҙ араһынан кемдер.

Фәруҡша ирҙәрҙән тиҙ генә туры атын ектерҙе лә Рабиғаның артынан төштө. Ләкин ҡатын һис кенә лә ауылға таймаған, ә Ҡаратал соҡорон артылған да бер уяла туҡтап ҡалған. Фәруҡшаның йән-фарман ат ҡыуып килгәнен күргәс, ул яулығын төҙәтеп бәйләне, итәктәрен рәтләп япҡан булды. Ләкин урынынан ҡуҙғалманы, Фәруҡшаға ла күҙ һалманы.

– Тр-р! – Председатель атын туҡтатты. – Әйҙә утыр, ауылға хәтле итеп ҡуям.

Рабиға өндәшмәй генә ултырыуын белде. «Ҡаты үпкәләгән, күрәһең»,– тип уйланы Фәруҡша. Ул кырандасынан төштө лә атының арҡалығын ысҡындырып, йәшел үләнгә ебәрҙе. Бығаса ла үләндә иркен ашап йөрөгән турысай, бышҡыра-бышҡыра, тағы утларға кереште.

Ир кеше аҡрын ғына атлап йәш ҡатын янына килде лә эргәһенә сүгәләне. Был юлы ла теге ҡымшанманы. Фәруҡша ла өндәшмәне. «Былай үсеккән кеше кеүек утырып булмай бит инде, – тине ул эсенән генә. – Йә берәй һүҙ ҡушырға, йә атты алып, кире китергә кәрәк. Күрәһең, был бисәкәй ауылға ҡайтырға йыйынмай».

– Кәйпүшкә үсектеңме ней? – тине ул, ҡатындың яурынына ҡағылып.

– Үсектем! – Рабиғаның ярһыуы һаман үтеп етмәгәйне. Осҡон-асыу сәсеп торған һоро күҙҙәр Фәруҡшаға төбәлде. Танау тишектәре ярһып тын алыуҙан бер киңәйҙе, бер урынына ҡайтты. – Нейә Ҡарамалыны китереп ҡыҫтыра ул? Марйаға ҡуша һине?

Фәруҡша шарҡылдап көлөп ебәрҙе. «Ана нисек! Эх, был ҡатын-ҡыҙ бигерәк бер ҡатлы шул. Ни өсөн үпкәләгәндәрен дә белмәҫһең. Минең өсөн икән…»

– Иҫәркәй. Әллә… – «Мине яратаһыңмы?» тип саҡ ысҡындырманы ул. Йәш ҡатындың күҙҙәрендәге ихласлыҡ, эскерһеҙлек тап шул хаҡта һөйләй икән шул. «Бисәләр бисәләр инде, эсендәге – тышында».

Фәруҡша таң һарыһы менән аяғөҫтө йөрөп арығайны. Кепкаһын баш аҫтына һалды ла арҡаһы менән йәшел үләнгә һуҙылып ятты. Күк йөҙө, бер-ике болотто иҫәпләмәгәндә, салт аяҙ. Август ҡояшы көн үҙәгендә ерҙе яҡшы йылытыуға ҡарамаҫтан, тупраҡ һалҡыны арҡаға килтереп бәрҙе. Көнө буйы көсөргәнеп йөрөгән быуын-мускулдар иркенлек һиҙеп, рәхәтләнеп йомшарҙы. Беленер-беленмәҫ иҫкән көньяҡ еле рәхәт итеп сәстәрҙән иркәләй. Тирә-йүн тып-тын. Уны ара-тирә кырандас ҡуҙғалған йәки туры ат бышҡырған тауыш ҡына боҙа. Ошолай ята торғас, Фәруҡша ойой башланы. Әммә Рабиға тыныслыҡты боҙҙо.

– Фәруҡша абзый, әйҙә тор. Ҡайтҡас йоҡларһың, – тип ул председателдең өҫтөнә эйелде.

Ҡатындың эҫе тыны Фәруҡшаның битенә килеп бәрелде лә эстә тулышҡан нәфсеһен ҡотортоп ебәрҙе. Ул һау ҡулы менән йәш ҡатындың муйынынан эләктереп алды ла үҙенә ҡыҫты. Тәүҙә ҡатын бер аҙ эйелә биргән кеүек итте лә ҡапыл артҡа тайшанды. Күҙҙәре йәмһеҙ итеп ҙурайҙы.

– Шашма, абзый! – Рабиға йыш-йыш тын алды. – Мында һиңә марйалар бар тип беләһеңме?

Ул ҡапыл торҙо ла, шәп-шәп атлап, кире Ҡаратал соҡорона табан атланы. Фәруҡша өсөн был көтөлмәгән, иң мөһиме, хурлыҡлы хәл ине. «Ней тип йәбештем икән? Бар халыҡ алдында рисуай итә бит хәҙер был. Эй, юҡ, тауыш сығармаҫ. Үҙең ҡыйшаңлағанһыңдыр, тип көлөүҙән ҡурҡыр. – Фәруҡша тороп ултырҙы. Туры ат, ашана-ашана, йыраҡ ҡына китеп өлгөргән. – Хәйерһеҙ, ауылға китеп ҡуймаһын», – тип ул ятып йомшарған быуындарын ауырлыҡ менән яҙа-яҙа, алпан-толпан аты артынан йүгерҙе.

«Лутсы ураҡсылар янына барайым. Ауылға ҡайтыу килешмәҫ,– тип уйланды ул. – Председатель әллә ҡайҙа ҡасты, тирләр». Ул туры атҡа һуйылы менән берҙе һыҙырҙы ла, кырандасҡа йәтешләп ултырып, Рабиғаға ни әйтәсәген уйларға тотонды. «Тәүәккәл булырға кәрәк, ҡатын-ҡыҙ тәүәккәллек алдында юғалып ҡала торған».

Көр ат саң туҙҙырып атлаған йәш ҡатынды шунда уҡ ҡыуып етте. Ләкин Рабиға Фәруҡшаға әйләнеп тә ҡараманы. Председателдең зитына тейҙе был, ул кырандасынан һикереп төштө лә йәш ҡатынды ҡулынан эләктереп алып, көс менән кырандасына ултыртты. Ни өсөндөр был юлы тегеһе ҡарышманы, өндәшмәне лә. Шулай ярышлап ултырып, Ҡаратал соҡорона килеп еттеләр. Халыҡ аттарын еккән, ҡаҙанды, башҡа кәрәк-яраҡты тейәп алып, ҡайтырға сығырға торалар.

– Ну, дуҫ, ҡотлайым. Һин эште яйлағанһың бит. – Мансур, йылмайып килеп, Фәруҡшаны уң ҡулы менән ҡосаҡланы ла арҡаһынан ҡаҡты. – Ҡасан загсҡа барабыҙ?

– Ҡуй әле, Мансур абзый! – Рабиға кырандастан һикереп төштө лә, йүгереп барып, Фәйзрахмандың арбаһына ултырҙы. – Белһәң, Фәруҡша абзый миңә, бисәлеккә кил, тип әйтмәне лә.

– Ана, ана, үҙенде һаттың да. – Ғәйфулла ҡажғылдап кешнәп тә ебәрҙе. – Әйтһә, риза икәнлегең төҫөңә сыҡҡан бит.

– Сыҡһа, брсиҙәтел бисәһе булыу кемгә эләгә әле. – Рабиға ла телләште. – Мин брсиҙәтел бисәһе булырлыҡ түгелдер шул! Кемдән ҡайһы ерем кәм?

– Артыҡ. Артыҡ, туғанҡайым. – Ғәйфулла көлөүен дауам итте. – Ныу, Фәруҡша, бөгөн үк яусы ебәр Зәйнетдин ҡартҡа.

Барыһының да ҡарашы үҙенә төбәлгәненән уңайһыҙланып, Фәруҡша еңелсә ҡыҙарҙы.

Яусы ебәреп маташманы Фәрүҡша. Кисен ҡояш байып, аяҡ аҫты һил булғас, тотто ла үҙе китте. «Яусылап йөрөргә мин элекке заман кешеһеме ни? Коммунист, етмәһә, колхоз председателе, – тип уйланды ул. – Төшөп ҡалғанды табып алған мин түгел әле».

Оло улы Ғәйнетдин һуғыштың тәүге йәйендә үк «хәбәрһеҙ юғалып», кесеһе Миңлеғаяз Берлинда һәләк булған Зәйнетдин ҡарт, ҡарсығы һәм ошо Рабиғаһы менән өсәүләп, аръяҡ урамдың бирге осондараҡ йәшәй. Нәҫел-нәсәбе егәрле булды уның, етеш донъя көттөләр. Колхоз сыҡҡас, башҡа ҡайһы берәүҙәр кеүек, тартҡылашып торманылар. Зәйнетдин, ул саҡта ҡырҡты ҡыуған ир уртаһы – ике атын етәкләп, өс һыйырын ҡыуалап килтерҙе: «Яҙығыҙ, мин калхуз булырға риза. Ҡарсығым да, балаларым да». Ул саҡта комсомолдар башлығы булып йөрөгән Мостафа көлдө:

– Абзый, арбаҙыңда үҙеңә һыйыр ҡалдырҙыңмы? – Ауылдашының бер ҡатлылыҡҡа хас был эскерһеҙ ихласлығы уны ихлас аптыратҡайны.

– Юҡ, арбаҙҙа кәзә-һарыҡ ҡына ҡалды, – тип ғәйепле кешеләй яуап ҡайтарҙы Зәйнетдин. – Аларын да упшый итәһегеҙме ней?

– Юҡ, абзый. Бер һыйырыңды кире алып ҡайт. Һөтлөрәген. Әтеү ҡарсығың белән балаларың ас утырыр бит. Калхуз андай уҡ ҡомһоҙ түгел. – Мостафа – шуның менән эш бөттө тигәндәй, ситкә боролдо.

Колхозда ферма ойошторолғас, Зәйнетдин тәүҙә көтөүсе ине, һуңыраҡ мөдир булып китте. Эшкә шәп булғас, халыҡ алдында һәр саҡ йөҙө яҡты, һүҙе үтемле.

Фәрүҡша солан ишеген ҡаҡҡайны, эстән:

– Ин әйҙә, урыҫ кеүек ней, ишек шаҡып тораһың, – тигән ирҙәр тауышы ишетелде. Зәйнетдин ҡарт та, ҡарсығы ла өйҙә инеләр. Күрәһең, яңы ашап-эскәндәр, Рабиғаһы ҡаҙан яғында һауыт-һаба йыуа. Фәрүҡша, башын эйеп, тәпәш тупһа аша атланы.

– Әле арыумыһығыҙ? – тине ул, ишек төбөндә туҡтап.

– Атаҡ, брсиҙәтел килгән икән дә. – Хужа урынынан ҡалҡынып, ҡунаҡҡа яҡынланы. – Әйҙә, туғаным, һикегә үтеп ултыр. – Фәрүҡшаның аяҡ кейеменә ҡарауын күреп, – Ярар инде, сисеп торма, – тип өҫтәне. – Иҙән йыуырлыҡ кеше бар беҙҙә.

Фәрүҡша, уңайһыҙланыуын еңеп, һике ситенә килеп ҡунаҡланы.

– Яманлап йөрөйһөң, тиер инем, оҡшамаған, – тине Зәйнетдин ҡарт, мөмкин тиклем итәғәтлерәк булырға тышырып. – Әле генә сәйләп алғайныҡ. Һуңланың. Ней, ҡыҙым, ҡунаҡҡа сәй яһап бир инде, – тип Рабиғаһына өндәште.

– Юҡ, юҡ, Зәйнетдин абзый. – Фәрүҡша ҡаршы төштө. – Сәй артынан ғына торҙом.

– Ихтыярың, әләйһәң. – Хужа көсләшмәне. Ҡарсығы иһә шым ғына бәйләме менән булашты. – Нисек ураҡты бөтөрҙөгөҙ? Быйыл йәй яҡшы килде шул. Хоҙайҙың мәрхәмәтенән булып. Икмәкле итте халыҡты. Иншалла, ҡышты ла имен сығырбыҙ.

– Эйе, абзый. Шулай булһын. – Фәрүҡша йомошон әйтергә баҙнат итә алмай яфа сигә ине: «Оҙаҡлап ултырырға килмәгән бит ул. Ҡара, өйҙән сыҡҡанда харап ҡыйыу кеүек ине лә баһа. Ҡайҙа сығып осто ҡыйыулыҡ?» Ул көсөргәнеп, бар ихтыярын тупланы ла:

– Зәйнетдин ағай. Мин һеҙгә бик важный йомош белән килдем бит әле, – тине.

– Знамы, йомошоң булмаһа, килмәҫ инең. Кешене шул йомош йөрөтә инде аны, – тип һөйләнде ҡарт. – Әйт, йомошлай алһам, йомошларым. Нейә йомошламай тей.

– Үҙең беләһең, абзый, мин – буйҙаҡ кеше. Биби минең һуғыштан ҡайтҡанды көтмәгән. Фәғилә… – Фәруҡша, быныһы нигә кәрәк тағы тип, туҡтап ҡалды. – Үҙең беләһең, ир кешегә яңғыҙ донъя көтөүе бик ауыр.

Ҡаушап ҡалыуына, кәрәкле һүҙ таба алмай интегеүенә асыуы килеп, Фәруҡша тынды.

– Алай. – Зәйнетдин ҡарт ҡунағына шылыбыраҡ ултырҙы. – Һин, туған, беҙҙең Рабиғаны һоратырға килгәнһең. Тел төбөң шуңа бара. Шартына китереп, берәй ҡарсыҡ ебәрәһең булған.

Шул саҡ һүҙгә быға са ҡыҫылмай ултырған Хәсбиямал ҡарсыҡ ҡушылды. Аҙ һүҙле, әммә тос фекере менән танылған ҡатын ине ул Табылдыла.

– Эй ҡарт, ҡарт. Һин ҡайһы заманда йәшәгәнеңде онотоп бараһың, ахыры, – тип уфтанған кеүек итте ул. – Фәруҡша камунис бит. Ул нишләп яусылап торһон? Брсиҙәтел башы белән. Теләһә, ул ҡыҙыбыҙҙы етәкләп тә алып ҡайта алыр ине. Ә ул, оло башын кесе итеп, беҙҙән фатиха һорап килгән.

Өйҙә бер килке тынлыҡ урынлашты.

– Рабиға, ҡыҙым. Һинең ихтыярыңда инде. Әйт һүҙеңде, – тине Зәйнетдин ҡарт.

– Мин риза! – Йәш ҡатын был һүҙҙе шул тиклем асыҡ һәм шат тауыш менән әйтте, өйҙәгеләр хатта йылмайышып ҡуйҙы.

Иртәгәһен яҙылыштылар. Никах уҡылманы. Рәсми теркәлеү үткәс, Фәруҡша ҡатынын йортона алып ҡайтты. Шартына килтерҙеләр: Мансур дуҫы кырандаста кейәү егете булып килеп алды, әсәһе килененең аяҡ аҫтына мендәр ырғытты:

– Әйҙә, балаҡай! Төклө аяғың белән.

Тәүҙә өйҙө рәткә килтерҙеләр. Әсәһе килен булып төшкәс тә һуҡтырған, ләкин тотонмай һаҡлаған балаҫын килтереп һикегә йәйҙе. Мендәр-юрғанды килен үҙе менән алып килде. Һауыт-һабаһын да хәстәрләнеләр. Баш-күҙ алғас, Фәруҡша өмә үткәреп, мал аҙбарын да һипләп ҡуйҙы. Тик унда бикләргә малдары ғына юҡ.

– Берәй ерҙән быуаҙ тана алмағанда, – тип һөйләнде Фәруҡша. Һыйырһыҙ йәшәүҙе ул күҙ алдына ла килтерә алмай ине. Һуғышта юҡ-бар ашап, ас йөрөп, ашҡаҙан тамам боҙолған, һөт-ҡатыҡ, эремсекһеҙ торормон тимә.

– Атайым, һыйыр бирәм, тигәйне лә ул, – тине Рабиға икеләнеп кенә.

Ысынлап та, ҡырпаҡ ҡар яуып, мал көтөүгә сығыуҙан туҡтағас, Зәйнетдин ҡарт иртә менән ала һыйырын етәкләп килеп тә етте.

– Мына, ҡыҙым, әйткән һүҙ – атҡан уҡ, – тине ул, ихлас йылмайып. – Әйҙә, игелеген күрергә яҙһын үҙегеҙгә. – Ихатаға инеү менән ҡарт һыйырҙың бауын ысҡындырҙы, арҡаһына еңелсә генә һуғып алды. – Хәҙер һинең йәшәр урының ошонда булыр инде, малҡай. Әйҙә, әйҙә, ана, арбаҙ яғына атла.

Әммә ала һыйыр урынынан ҡуҙғалманы, хужаһына ҡарап тора бирҙе.

– Йә ярар, яйлап өйрәнер әле. Беҙгә шул, ҡыҙым, көн һайын сәйлек һөт биреп торһаң, яраған.

Ҡарт өйгә инеп торманы. «Сельпола йомошом бар», – тип ҡайтып китте.

Ул йылды ҡыш иртә килде. Сентябрь аҙаҡтарында яуған ҡар иремәне. Көн үҙәгендә ҡояш аҙыраҡ йылытһа, төндәрен тиреҫтән иҫкән ел ауыр, ҡыш һалҡынын килтерҙе. Әллә ҡасанғы замандарҙа һалынып, стеналары төрлө бөжәктәрҙән йырғыланып бөткән өйҙәрҙә йәшәгән кешеләр өшөнө. Көн һайын тигәндәй бер нисә кеше утын алып ҡайтырға ат һорап килә.

– Киләһе йыл тиҙәкте күберәк һуғығыҙ! Былай булмай, – тип әйтә-әйтә Фәруҡша арыны.

Тиҙәк – бында берҙән-бер тигәндәй ышаныслы яғыулыҡ. Быйыл халыҡ нишләптер ялҡауланған. Ҡыш буйы ирҙәр бригада йортона йыйылып, нисек колхозды алға ебәреү тураһында әңгәмә ҡуйыртты. Ахырҙа килештеләр: яҙ етеү менән тауыҡ фермаһы һалырға, Туғай ауылының көнбайышында йәшелсә баҡсаһы асырға, ҡымыҙға бейәләр бәйләргә, Тажитта умарталыҡ ойоштороорға. Шулай итеп, бер нисә йылдан колхоз аяҡҡа баҫты ла китте. Табылдыларҙы район кимәлендә лә өлгө итеп ҡуя башланылар. Колхозды хурлаусылар бөттө, мәктәп тамамлаған йәштәр ҙә ошонда нығына башланы.

IX

Һуғыштың «демократик импульсы» Мәскәү, Воронеж, Свердловск, Силәбе ҡалаларында Сталинға ҡаршы йәштәр төркөмдәренең барлыҡҡа килеүендә сағылды. Һуғышта сағыштырмаса үҙ аллы ҡарар ҡабул итә алған, һуғыш бөтөү менән Сталин системаһының әүәлгесә бер «шөрөбө»нә әүерелгән офицер һәм генералдар ризаһыҙлыҡ белдерҙе.

ГУЛАГ системаһы үҫештең иң юғары кимәленә ирешә, унда «халыҡ дошмандары»ның яңы миллиондары өҫтәлде. Беренселәрҙән булып ауырлыҡ хәрби әсирҙәргә төштө, уларҙың 2 миллионы фашист ҡоллоғонан азат ителеп, Себер һәм Ухта ҡалаларына ебәрелде. Был йылдарҙа ГУЛАГ системаһы 12 миллион кешегә етте. Печорала, Салехардта, Кингирҙа, Экибастузда, Воркутала, Норильскиҙа 1948 – 1953 йылдарҙа тотҡондарҙың көслө сығыштары булып үтте.

«Ленинград эше» буйынса 2000 кеше ҡулға алынып, 200-е атыуға хөкөм ителде. 1948 – 1953 йылдарҙа 6,5 миллион самаһы кеше золом ҡорбанына әүерелде. Көнбайыш Украинанан 300 мең, Литванан 400 мең, Латвиянан 150 мең, Эстониянан 50 мең кеше ҡыуып ебәрелде. 1,5 миллион Ҡырым татары, Волга буйы немецтары, чечен, ингуш, ҡалмыҡ, ҡарасәй, балкарҙар мәжбүри рәүештә иленән сығарылды.

Бәләкәй халыҡтарҙың мәҙәниәтенә, йолаларына баҫым көсәйҙе. 1951 йылда мосолман халыҡтарының эпостарын «халыҡҡа ҡаршы» тип тәнҡитләү башлана. Властар урыҫ халҡын СССР составына ингән «иң бөйөк халыҡ» тип күтәрҙе. Был иң элек етәксе кадрҙар сәйәсәтендә урын тапты.

Төн уртаһында нык итеп урам яҡ тәҙрәне ҡаҡтылар.

– Фәруҡша туғаным, был мин – Йомабикә апайың, – тине борсоулы ҡатынҡыҙ тауышы. – Сыҡ әле. Ғәйнулланы алып киттеләр бит.

«Ғәйнулланы алып киттеләр». Йоҡонан ҡапыл уянған Фәруҡша бер ни аңламай торҙо.

– Ҡайҙа алып киттеләр? – Ул тиҙ генә кейенеп, ишек алдына сыҡты.

– Беләһең инде кемнәр алып киткәнен. – Йомабикә һыҡтай башланы. – Ҡара машина белән килделәр. Дүртәүләр. «Һин Ғәйнулла Мазитовмы?» – тип һоранылар. Өйҙөң аҫтын өҫкә килтереп ҡорал эҙләнеләр. Беҙҙә ҡорал ҡайҙан булһын инде.

– Ғәйнулла абзый ни тине һуң? Аны нәмәлә ғәйепләйләр?

– Сәүит власын яманлағанһың, тиләр. Ғәйнулла, юҡ, тип ҡарай ҙа, тегеләр ышанмай. Машинаға утыртып алып киттеләр инде.

– Ярар, Йомабикә апай, хәҙер бик һуң. Һин ҡайтып ят. Мин иртәгә районға шылтыратып белешермен. – Фәруҡша өйөнә инергә ынтылды.

Йомабикә урынынан ҡуҙғалманы ла.

– Ҡурҡам бит әле, – тине, ул урынында тапанып. – Тағы килерләр.

– Аларға һин кәрәкмәйһең. Ике йөрөмәй алар. Бар, бала-сағалай булып торма.

Иртәгәһен ул райкомға шылтыратты. Раймилицияның телефонын алғас, Фәруҡша бер аҙ ҡыймайыраҡ торҙо. «Ни тип әйтергә? Анда һинең ни эшең бар, тиһәләр? – Оҙаҡ икеләнде ул. Аҙаҡ ихтыярын туплай алды: – Бәй, Ғәйнулла ферма мөдире лә баһа. Ҡайтармаһалар, яңы кеше ҡуйырға кәрәк бит».

– Мазитовтың эше иртәгә судҡа бирелә, – тине милициянан берәү. – Судниндәй решение сығарһа, шулай булыр. – Трубканы һалып уҡ ҡуйҙылар.

Ғәйнулла ҡайтманы. Уны «совет ҡоролошон хурлаған өсөн» биш йылға иркенән мәхрүм иттеләр. Свердловск өлкәһенә урман ҡырҡырға ебәрелгән Ғәйнулла биш йыл срогын көнөнә тиклем тултырып ҡайтты. Бик ныҡ бирешкәйне ул: ике яңағы ла, ике күҙе лә эскә батып кергән. Шул тиклем ябыҡ, йәне ҡайҙа эленеп торалыр. Ирен көтөп алған Йомабикә уны өрмәгән урынға ултыртманы. Имсәк балалай күреп тәрбиәләгәс, Ғәйнуллаға бер аҙ ит ҡунған кеүек булды. Йөҙөндә лә йылмайыу балҡыны. Хатта бер көн идараға эш һорап килде.

– Фермаға кире бар, – тине Фәруҡша.

– Юҡ, туған. Хәҙер андай эш ҡулдан килмәҫ. Ҡарауылсы кәрәкмәйме, тигәйнем.

– Ярар, келәт ҡарауылларһың.

Икенсе йылына барлыҡ ауылды аптыратып, Йомабикә ул тапты. “Бынағайыш,– тип бот сапты бисәләр. – Ғәйнулла урман ҡырҡҡанда ирлеген көсәйтеп ҡайтҡан, имеш!”

– Фәриткә иптәш булһын, тинек инде, – тип уңайһыҙланып йылмайҙы Йомабикә. – Әтеү бер үҙе бит. Бер бала ни баламы ни.

Ғәйнулла өндәшмәне. Күҙен көлдөрөп кенә ҡуйҙы. Малайға Ғәле тип исем атанылар.

Ғәлегә дүрт йәш тулғанда, радионан Сталиндың үлеме тураһында хәбәр иттеләр. Табылды халҡының күпселеге был ҡайғылы хәбәрҙән шаңғып ҡалғанда, барыһын да аптыраушта ҡалдырып, Ғәйнулла урам уртаһында:

– Хаин! Дөмөктөрҙө Хоҙай Тәғәлә палачты! Йәшәһен Хоҙай Тәғәлә! Аллаһы Тәғәләгә ҙур рәхмәт, – тип ҡысҡырҙы.

Яланбаш-яланаяҡ йүгереп сыҡҡан Йомабикәһе уны тиҙ генә урамына һөйрәргә тотондо.

– Ҡарт, тим, ҡарт! Иҫәрләнмә, тағы ла баструкҡа киткең киләме ней? – тип иламһыраны ҡарсыҡ. – Беҙҙе кемгә ҡалдыраһың?

– Бер кем дә алып китмәй мине хәҙер. – Ғәйнулла тартҡылашты. – Бер кем дә! Сталин дөмөктө бит. Ха-ха-ха!

Ҡамыт аяҡлы улының да әсәһе артынан сыҡҡанын күреп, Ғәйнулла буйһонлдо. Ғәлене күтәреп, өйөнә инеп китте. Эйе, был юлы уның артынан килеүсе булманы. Ғәйнулла үҙе лә оҙаҡ йәшәй алманы, улы беренсе класҡа барған йылды үлеп китте.

Атаһының һуңғы осорҙа ишек алдында күренмәгәнен абайлап, бер көн кис эштән ҡайтҡас, Фәруҡша уның янына инде. Өммөгөлсөмдө ерләгәндән һуң, нисектер үҙенә бикләнеберәк киткән ҡарт был осорҙа инде туҡһанды ҡыуалай ине. Хәҙер инде ул оло ҡыҙы Мәрфуғаның улы Әхмәт һәм уның ҡатыны Фәйхана тәрбиәһендә йәшәп ята ине. Донъялар шулай ҡапыл үҙгәреп китте шул. Атаһының яңғыҙы интегеп йәшәгәнен күреп, эсенән ҡайғырып йөрөһә лә, уға бер нисек тә ярҙам итә алмай ине Фәруҡша. Үҙ өйөнә алып ҡайтыр ине лә, унда ла тығыҙ бит, бәләкәй генә өйҙә биш йән ғүмер итәләр. Шулай ҙа атаһына әйтеп ҡараны ул, ләкин Мөхәмәтша, уйлап та ҡарамай, кире ҡаҡты:

– Улым, үҙ өйөмдә лә бына тигән. Юҡ белән булма. Үҙемде үҙем генә ҡарарлыҡ әле мин, – тине.

Фәруҡша барып ингәндә, килен кеше алғы яҡты йыйыштырып йөрөй ине. Һуң ғына булыуға ҡарамаҫтан, Әхмәт өйҙә күренмәй. Ике улы һикелә ҡысҡырыша-ҡысҡырыша ниҙер бүлешә. Килен уларға бер ни ҙә өндәшмәй, күрәһең, күнегеп бөткән. Иҫәнлек бирҙе лә Фәруҡша төпкө яҡҡа, атаһы янына, үтте. Ҡарт мейескә терәлеберәк, оҙон һикелә йоҡлар-йоҡламаҫ ята ине. Улын күргәс, тороп ултырҙы.

– Һиңә ошо арала инеп сығырға уйлап тора инем, – тине ул, уң ҡулы менән тубыҡтарын алмаш-тилмәш ыуғылап. – Ярар, үҙең килеп яҡшы иткәнһең.

– Йомошоң бармы әллә, атай? – Фәруҡша яман хәбәр ишетергә ҡолаҡтарын ҡарпайтты.

– Юҡ, юҡ. – Ҡарт шунда уҡ улын тынысландырырға ашыҡты. – Көннәр буйына өйҙә ятып ялҡыта. Атың белән яланға алып сыҡмаҫыңмы, тигәйнем. Күреп ҡайтҡы килә.

“Дә-ә, атайымдың да яҡты донъя менән бәхилләшер мәле етте, – тип уйлап алды Фәруҡша. – Һиҙелә бит. Ололар шулай итә торған”.

– Ярар, атай. Иртәгә үк алып сығам. – Фәруҡша тәүәккәл әйтте. – Йөрөп ҡайтырбыҙ.

Донъя хәлдәре тураһында арлы-бирле һөйләшеп ултырғандан һуң Фәруҡша ҡайтырға сыҡты. Ишек алдында уға лаяҡыл иҫерек Әхмәт тап булды. Күҙҙәре ҡылыйланған, аяҡтарын салыш-солош баҫа. Ниҙер мығырҙай ҙа шикелле.

– Ә-ә, бабай, – тине ул, Фәруҡшаны күреп. – Ни хәлдә, бабай? Беҙҙән сығып киләһең. Бисәкәй өйҙәме?

– Тьфу! – Фәруҡша төкөрҙө. – Һин, дуңғыҙ, ҡасан эсеүеңде ташлайһың, ә!? Айныҡ көнөң дә юҡ бит.

– Эсәм әле, бабай, эсәм. – Әхмәттең тауышы асылыбыраҡ, көсәйеберәк китте. – Армиянан иҫән ҡайта алһам, ун йыл эсергә һүҙ бирҙем мин, үәт. – Әхмәт солан стенаһына етәрәк туҡтап, үҙ хәбәрен һөйләй бирҙе. – Әле ике йыл ғына булды.

Ул арала өйҙән Фәйхана килеп сыҡты ла Әхмәтте елтерәтеп өйгә алып инеп китте.

“Бөтә бит был малай. Күҙ алдында эскегә һабыша. – Һеңлеһенең берҙән-бер улының яҙмышы өсөн, ысынлап борсолдо Фәруҡша. – Әйткәндә һис кенә лә аңларға теләмәй. Нишләп ҡарарға икән мының белән”.

Иртәгәһен кырандасҡа бурлы бейәне ектереп, Фәруҡша атаһы янына килде. Ҡарт күптән әҙерләнеп, өй алдындағы оло ташҡа сығып ултырған да сабыр ғына көтә. Улын күреү менән йөҙө яҡтырып, һаҡал-мыйығына йылмайыу ғәләмәте ҡунды.

– Түрәләр белән ярышлап утырып, кырандасларҙа йөрөр көннәр ҙә бар икән. – Мөхәмәтша әллә шаяртты, әллә уйлағанын әйтте.

Фәруҡша өсөн аҡыллыға ишара ине был. Иҫенә төшөрҙө: ысынлап та, атаһын бер ҡасан да ултыртып йөрөткәне юҡ шул. Бер аҙ ҡыҙара биреп ҡуйҙы.

– Ҡайҙа барабыҙ, атай? – тип һораны ул, һыңар ҡулы менән дилбегә тотҡан килеш йәтешләберәк ултырып. – Юл күрһәт.

– Әйҙә, Ерекле йылға яғынараҡ тот. – Ҡарт аяғын иркенләберәк һуҙырға итеп ҡарағайны ла, табандары кузлаға терәлеп ҡалды.

Бурлы бейә торған урынынан тиерлек юртыуға күсте. Етеҙ мал ине ул. Ҡарамалыға бер барғанында күреп ҡалып, икенсе бер тайға алмашып алғайны уны Фәруҡша. Мөхәмәтша ҡарт үҙенең уйлағанын әйтте:

– Түрәләр яҡшы атларҙа ғына йөрөй торған, – тине ул, улына ҡарамай ғына.

Фәруҡшаның күңеле кителә биреберәк ҡуйҙы. Атаһы бөгөн генә “түрәләр” һүҙен ике мәртәбә әйтте. Тиктәҫкә түгел был, төрттөрә.

Ул арала ауылды сыҡтылар. Берләм ат юлы Ерекле йылғаны аша сыҡҡас та туғай буйлап Шәкәр ауылына табан китә. Әммә Мөхәмәтша ҡарт атты һулға бororға ҡушты.

– Яңғыҙ сағыл яғына барайыҡ, – тине ул хәлһеҙерәк тауыш менән. Үҙе, зыяратты күрмәҫ өсөн, башын Сусаҡ түбәһе яғына борҙо.

Бурлы бейә юлһыҙ ерҙән, тегендә ҡылған, бында таҡырланған үләндән ауылдың көнсығышындағы берҙән-бер ҡалҡыулыҡ яғына ҡарап юртты. Ҡыуманы уны Фәруҡша, ҡыҙыу ҡанлы малдың үҙенең булмышы шундай.

Алда тағы ла бер бәләкәй генә үрҙе артылғас, түбәнгә төшөп бер аҙ барҙылар ҙа Яңғыҙ сағыл итәгенә килеп еттеләр.

– Туҡта ошонда. – Мөхәмәтша ҡарт һул ҡулы менән дилбегәгә тотонғандай итте. – Төшәйек. Атыңдың арҡалағын бушат, ашаһын малҡай. Тиҙ генә ҡайтмаҫбыҙ, ахыры.

Ҡарт башын ҡояш байышы яғына табан борҙо. Йәйге ҡояш байырға иртә ине әле. Бер аҙ ҡояшҡа ҡарап торҙо ла Мөхәмәтша яйлап ҡына Яңғыҙ сағыл битләүенә үрмәләй башланы. Фәруҡшаны ла артынан эйәрергә саҡырҙы.

– Әйҙә, анау түмәргә менеп утырайыҡ, – тине ул, юғарыла бер аҙ ҡалҡыбыраҡ торған урынға ымлап. – Анда утырыуы йәтеш булыр.

Атаһының ниҙер һөйләргә йыйыныуын һиҙә ине Фәруҡша. Тиктәҫкә алып килмәгән бит ул ошонда. Ә ниңә аны саҡырған? Сафа абзыйын түгел.

Мөхәмәтша ҡарт әйткән урынына барып етте лә йәтешләп, ҡояшҡа битен ҡуйып ултырҙы. Улына ла үҙенең эргәһенән урын күрһәтте. Шунан ике ҡулын мосолмандарса һауаға күтәреп, үҙ алдына ғына уҡынды. Атаһының былай эшләгәнен Фәруҡшаның бер ҡасан да күргәне юҡ ине. Шуға күрә нисектер көлкө лә, уңайһыҙ ҙа булып китте.

– Улым, мына ошо ерләр, – доғаһын уҡып бөткәс, Мөхәмәтша ҡарт ҡулы менән туғайға, унан буйлатып Яңғыҙ сағылдың арғы яғына ымланы, – элек беҙҙеке ине. Һин дә аны хәтерләйһеңдер. Ана, Ялбыр өйәңкене күрәһеңдер, аның аръяғы Арыҫлан ҡартларҙыҡы ине. Тегенән, – ҡарттың ҡулы Мөхәррәм күле яғына китте, – Мөхәмәҙғәлеләрҙеке башлана ине...

Ҡарт оҙаҡ һөйләне. Ошо ерҙәрҙә элек урмандар үҫкәнен, кешеләрҙең уларҙы төпләп ер асыуын, артабан батша заманында ерҙәрҙе межалау тигән нәмә килеп сыҡҡас, Табылдының иң яҡшы ерҙәрен Борисовка, Николаевка урыҫтарына, Баҡый татарҙарына биреүҙәрен тәфсилләп һөйләне. Атаһы Мөхәмәтҡужаның унлап дисәтинә ере тәүҙә Борисовканың Кондрашов фамилиялы муҡшыһында ҡуртымда булыуы, артабан теге йылғыр әҙәмдең ошо ерҙе үҙ мөлкәтенә әйләндереү өсөн, ниндәйҙер ялған ҡағыҙҙар туплап, тартып алыуы хаҡында ла әйтте.

– Беҙҙең ата-бабайлар батшаға, үҙ ерләребеҙгә үҙебеҙ хужа булабыҙ, үҙ динебеҙҙә торабыҙ, үҙ илебеҙгә үҙебеҙ идара итәбеҙ, тип ҡушылһа ла, һуңынан урыҫлар беҙҙе мәкерле рәүештә алдаған, – тип Мөхәмәтша ҡарт әллә ҡасан булған ваҡиғаларҙан үҙенсә һығымта яһаны. – Быларҙы һин дә белергә тейеш.

– Һин, атай, үҙең ҡайҙан белдең? – Фәруҡша ғәжәпләнде, сөнки ул атаһының бер ҡасан да китап уҡығанын күргәне булманы.

– Белмәҫкә. Әллә һин мине тома наҙан тип beләһеңме? – Ҡарт үпкәләне. – Һиңә һөйләгәннәр алар, улым, беҙгә ата-бабалар ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа һөйләп ишеттергән нәмәләр ул. Аларҙы бер кем дә яҙып бармаған.

– Атай, һин үҙең дә ҡыҙыллар яғында йөрөгәнһең бит. Әле аларҙы әрләп ултыраһың кеүек, – тине Фәруҡша. Унының ҡайһы бер һорауҙарына яуап алғыһы килә ине. Сөнки атаһы үҙ-үҙенә ҡаршы килә кеүек.

– Йөрөнөм шул. Беҙгә, ҡыҙыллар афтанүмийә бирә, тинеләр. Аҡлар бирергә риза булманы. Шуңа күрә беҙ ҡыҙыллар яғына күстек, – тип аңлатты Мөхәмәтша ҡарт. – Алары ла алданы инде. Ер – крәҫтиәннәргә, тинеләр ҙә калхузға бирҙеләр.

Артабан бабай колхоздарҙы тәнҡитләүгә күсте. Быныһы менән хәҙер Фәруҡша ла тулыһынса килешә ине, сөнки үҙе лә күреп тора бит.

– Һин, улым, калхуз төҙөүҙә алдан йөрөп, яңылышлыҡ иттең, – тине ҡарт, шелтәле ҡарап. – Кәрәкмәй ине. Ана, хәҙер үкенәһең дә, тик эш үткән.

Шунан ҡарт Яңғыҙ сағыл темаһына күсте. Фәруҡша, ниһайәт, бында ни өсөн килгәндәрен аңланы.

– Ҡыҙыллар яғынан ҡайтҡас, – тине Мөхәмәтша, ҡалҡынып, – мин силсәүиткә, ошонан утар ҡорорға ер бирегеҙ, тип рөхсәт һорап барҙым. Ул саҡта, ауыр тупрағы еңел булһын, Ҡорбан брсиҙәтел ине. Бирмәне рөхсәт. Яғаға йәбеште хатта. Ә бит сәүит власы, ер – крәҫтиәннәргә, тине. Мин ошо ата-бабаларымдан ҡалған ергә хужа булып утырырға тейеш инем дә бит. Шуның өсөн кәрәк ине беҙгә афтанүмийә. Яңы власты беҙ яҡлап ҡалдыҡ бит.

Ҡарт, әйҙә, ҡайтайыҡ инде тигәндәй, төшә башланы. Кырандасҡа йәтешләп ултырып алғас, үтә етди тауыш менән былай тине:

– Калхуз, улым, оҙаҡҡа бармаҫҡа оҡшаған. Аның таралғанын мин күрә алмам инде. Һин, мужит, күрерһең. Ана, мин әйткән ерләрҙе ҡайтарып алырһың.

Ҡарт ниндәйҙер тәүәккәллек менән ирендәрен ҡымтыны ла ҡабат һүҙ ҡушманы.

***

1954 йылда сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү кампанияһы башланды. Уға 30 меңдән ашыу партия хеҙмәткәре, 120 меңдән күберәк белгес ебәрелде. Тәүге биш йылда уҡ СССР-ҙа 42 миллион гектар сиҙәм һөрөлдө. Ауыл хужалығында крәҫтиәнде дәртләндереү сәйәсәте алып барып, КПСС әһелдәре ҡайһы бер саралар күрҙе. Ауыл хужалығы тауарҙарына хаҡтар күтәрелде, дәүләт алдында барлыҡҡа килгән бурыстар ғәмәлдән сығарылды, ауылдарҙы үҫтереүгә сығымдар бер нисә тапҡырға артты. КПСС-тың ул саҡтағы беренсе секретары Н.Хрущевтың тәҡдиме менән планлаштырыуҙы түбәндән башлау тәртибе индерелде. Колхозсыларға пенсия тәғәйенләнә башланы. Ләкин...

Бер уҡытыусы Н.Хрущевҡа хатында түбәндәгеләрҙе яҙҙы:

“Кешеләр насар йәшәй һәм уларҙың фекерләүе беҙҙең файҙаға түгел. Аҙыҡ-түлек менән бөтә ил буйынса бик тә ҡыҫынҡы. Тик Мәскәүҙә генә һәйбәт туҡланырға мөмкин. Күп ҡалаларҙың магазиндарында диңгеҙ ҡыҫалаһы менән йәшел борсаҡ тулып ята. Ауылдарҙа шәкәрҙе күрмәйҙәр ҙә тиерлек. Төп бәлә шунда: аҙыҡ-түлек буйынса хәл йылдар үтеү менән дә үҙгәрмәй”.

1950 йылда БАССР-ҙа 4387 колхоз иҫәпләнһә, 1951 йылда улар өс тапҡырға кәмей. Ике йылда Башҡортостанда 500 мең гектар сиҙәм күтәрелә. 1963 йылда колхоздар тағы ла эреләтелеп, республикала улар 599-ға ҡала. Йәштәр күпләп ауылдан китә башлай, “перспективаһыҙ” ауылдар барлыҡҡа килә.

Көҙгө һалҡын көндәрҙең береһендә Фәруҡшаларҙың ҡапҡаһы алдына Головиндың «Виллис»ы килеп туҡтаны. Бер үҙе түгел ине Василий, Олесяһы менән ярышлап ултырғандар. Аҙбар яғында мал ҡарап йөрөгән Фәруҡша уларға ҡаршы сыҡты. Василий менән ҡайнар итеп ҡул ҡыҫыштылар.

– Әйҙә, өйгә үтәйек, – тине хужа, һау ҡулы менән ишек яғына ымлап. – Сәй эсеп китерһегеҙ, ҡатырағы ла табылыр.

Василийҙың Фәруҡшалар ихатаһына аяҡ баҫҡаны юҡ ине, шуға күрә фронтташ дуҫының йәшәгән төйәген күреп китергә ҡуш ҡуллап ризалашты.

– Мөмкин. – Ул баш ҡаҡты. – Йәш ҡатыныңды ла күрербеҙ. Әйҙә, Олесюшка.

Өйгә инделәр. Олесяға күҙ ташлау менән Рабиғаның йөрәге әллә ни эшләп китте. «Теге марйа ошомо икән әллә?» Ирекһеҙҙән Ғәйфулланың Ҡарамалы мәрйәләре тураһындағы ләстите иҫенә килеп төштө. Әле самауырға барып тотондо ул, әле кәстрүлгә. Ҡатынына ярҙамға Фәруҡша килде.

– Танышығыҙ: Рабиға – беҙҙең ауыл ҡыҙы, – тине ул, ҡатынына ымлап. – Ә был, Рабиға, фронтташ дуҫым – Василий. Эргәһендә – ҡатыны Олеся.

Һике тирәләп ултырҙылар. Фәруҡша ҡунаҡтарға тип тотҡан бер шешә араҡыһын сығарҙы.

– Беләһеңме, Мухаметович? – Головин стаканын ҡулына алды. Уның тулҡынланғаны, ниҙер әйтергә теләгәне күренеп тора ине. – Беҙ әле Стәрлетамаҡҡа китеп барабыҙ. Мин бит колхоздан киттем, партийный учеттан да төштөм. Колхозды сдавать иттем. Все подчистую. Мин хәҙер колхозник түгел.

– Туҡта, туҡта! Барыһын да бер юлы һөйләмә! Нисек учеттан төштөң? Колхозды сдавать иттең? Кемгә? – Был хәбәр Фәруҡшаға аяҙ көндө йәшен һуҡҡандай тәьҫир итте.

– Антоновҡа, беҙҙең яңы агрономға. – Василий нисектер уңайһыҙланған кеүек йылмайҙы. – Хәҙер ул һинең коллегаң була.

– Ашыҡма! Аңлатып һөйлә. – Фәруҡша үҙе лә һиҙмәҫтән стаканын ауыҙына ҡапланы. – Нишләп улай бик тиҙ? – тип һорашты ул, ауыҙына бәрәңге ҡабып сәйнәй-сәйнәй.

– Эш былай. – Василий, ҡарашын урам тәҙрәһенә төбәп, һөйләргә тотондо. – Мин һиңә, обкомда бер танышым бар, тип әйткәйнем. Бер көн уның менән телефондан һөйләштем. Оҙаҡламай райкомда үҙгәрештәр буласаҡ икән. Яңы секретарь килә, ти.

Василий һаман эсмәй ҡулында тотоп торған стаканынан бер генә уртланы ла ашъяулыҡҡа ҡуйҙы.

– Колхоздарҙы эреләтәсәктәр икән. Күп кенә председателдәрҙе алмаштырасаҡтар. Партия ауыл хужалығында яңы политика алып барырға йыйына, ти. Бына, ҡыҫҡаса шул. Ҡалғанын, үлтерһәң дә, белмәйем. – Головин һыйға үрелде.

– Ә нишләп китергә булдың һуң?

Василий әңгәмәсеһенә шундай серле һәм тәрән мәғәнәле итеп ҡараны. Был уның, шуны ла белмәйһеңме ни, тигәне ине.

– Мин һиңә уны быйыл, хәтерләйһеңме, һеҙҙең быуа буйында ултырғанда уҡ әйтә биреп ҡуйғайным. Мин бит ата-бабаларымдың осон таптым. Хәҙер шуны юллап ҡарарға ваҡыт етте.

– Куйбышевҡа китмәксеһең инде. – Фәруҡша тулҡынлана ине. Берҙән-бер арҡа терәр, сер сисер кешеһе бар ине. Хәҙер ул да булмаясаҡ. Кем менән эс серҙәрен уртаҡлашыр хәҙер? – Ә Ғабдуллин нисек һине ебәрергә итте һуң? Ауыл коммунистарына тәртип ҡаты ла баһа.

– Ғабдуллин менән оҙаҡ һатыулашырға тура килмәне. Уға нимә: секретарь булып яңы кеше килә бит. Так сказать, под шумок ризалығын бирҙе.

Ирҙәр үҙ хәбәрҙәренә әүрәп китеп, ҡатын-ҡыҙҙар тураһында бөтөнләй онотто. Русса икмәк-тоҙлоҡ ҡына белгән, урыҫтар менән бөтөнләй аралашмаған Рабиға үҙен нисек тоторға белмәй аҙапланды. Ҡапыл килеп төшкән ҡунаҡтарға

нисек хөрмәт күрһәтергә кәрәклеген уйлап алйыны. Олеся ла арлы-бирле ҡапҡылап, өнһөҙ ултырырға мәжбүр булды.

– Шулай, Мухаметович. Переменаларға әҙерлән, – тип хушлашты Головин. – Мин һиңә берәй төрлө хәбәр ебәрермен әле.

Ысынлап та, бер-ике аҙнанан райком пленумы үтте. Унда район коммунистары яңы секретарь һайланы. Дөрөҫөрәге, Өфөнән вәкил алып килеп һайлаттылар. Быға тиклем обкомда бер-ике йыл инструктор булып эшләп алған йәш кенә кеше ине ул. Фамилияһы – Рәхимғолов. Тауышы, муйыны кеүек, нәҙек кенә. Күренеп тора, эшләмәй генә үҫкән. Берәй түрә балаһылыр инде. Буйға ла әллә ни юҡ. Уның ҡарауы, үҙен бик һауалы тота. Бөтә торош-ҡиәфәтендә күҙгә ташланып торған бер нәмәһе: ул да булһа – көлтәләй ҡуйы, бөҙрә сәс. Обком линияһына кем ҡаршы сыҡһын: бер тауыштан үтеп китте яңы секретарь. Унан һуң ҡыҫҡаса телмәр тотто:

– Иптәштәр! Беҙ ошоғаса халыҡ хужалығына һуғыш килтергән зыянды бөтөрөү өҫтөндә эшләнек. Зыян ысынлап та ҙур булды. – Яңы секретарь фекерен раҫлап байтаҡ мәғлүмәттәр килтерҙе. – Хәҙер ауыл хужалығы үҫешенең өр-яңы этабы башлана. Беҙҙең бурыс – уны индустриаль үҫеш юлына сығарыу. Был иһә тармаҡты техника менән тәьмин итеү, хеҙмәт етештереүсәнлеген арттырыу тигән һүҙ. Бер һүҙ менән әйткәндә, сифат яғынан өр-яңы кимәл, – тип ауыл халҡы өсөн бик аңлайышлы булмаған һүҙҙәр һөйләп ташланы.

Пленум ҡарары буйынса колхоздарҙы эреләтеү мәсьәләһен район Советы сессияһы тиҙ арала ҡарарға тейеш ине. Яңы йыл алдынан уныһын да йыйҙылар. Сессия бик шаулы үтте. Райком кабинеттарында ентекле уйланмай ғына әҙерләнгән ҡарар проектын күп депутаттар ҡаты тәнҡиткә дусар итте. Сессия районда әлегәсә эшләп килгән иллеләп колхозды ун бишкә ҡалдырыу тураһында ҡарар сығарырға тейеш ине. «Яңы юл» колхозын бүлгеләп, Үрге Шәкәр менән Түбәнге Шәкәрҙе – «Коммунизмға» колхозына, Ҡараярҙы – «Ашҡаҙар»ға, Табылдыны «Правда» колхозына ҡушырға ҡарар иттеләр. Ҡарамалыларҙың да колхозы бөтөрөлөп, «Правда»ға ҡушылырға тейеш ине. Быны ишетеү менән яңы председатель, баһадирҙарса таҙа кәүҙәле Антонов, бер кемдән дә һүҙ һорап тормай, алпан-толпан баҫып, трибунаға табан атланы.

– Это настоящий произвол! – тине ул, асыуҙан буҙарған йөҙө менән президиумда ултырған Рәхимҡолов менән башҡарма комитет рәйесе Фәтҡуллинға нәфрәт аша ҡарап. – Ҡарамалы ауылдарын «Правда» колхозына ҡушыу киләсәктә был ауылдарҙың бөтөүенә килтерәсәк. Тәүҙә производство объекттары ябыласаҡ, унан – мәктәп, һуңынан ауыл яҙмышына нөктә ҡуйырға ғына ҡала.

– Антонов! – тип сыйылдап ҡысҡырып ебәрҙе Рәхимғолов. – Һин партия линияһына ҡаршы барырға итәһеңме? Мин һине тауыштан мәхрүм итәм. Төш трибунанан!

– Төшәм, әлбиттә. – Антонов сығыр яҡҡа атлап китте. – Тик мин һеҙгә шуны әйтергә тейешмен: ауылдар яҙмышы менән уйнамағыҙ, бының өсөн ҡаты үкенергә тура киләсәк.

Антоновты иртәгәһенә үк вазифаһынан төшөрҙөләр. Уның урынына район үҙәгенән Мозафаров тигән йәш егет ебәрелде.

Һүҙ һорарға уйы булған Фәруҡша, ошондай мөнәсәбәтте күрә тороп, өндәшмәҫкә булды. Тыпырсынып та ни файҙа? Бер ни ҙә үҙгәрмәйәсәк. Сессия тамам булып, ул атына ултырырға торған саҡта, эргәһенә «Правда» колхозы рәйесе Хәби Дәминев килеп туҡтаны.

– Сау гынамы, Фарукша Мухаметович? – тип бик әҙәпле итеп иҫәнләште ул.

Яңыраҡ ҡына райкомдың тәҡдиме менән Баҡый ауылындағы «Правда» колхозына идара итә башлаған был йылғыр һәм хәйләкәр егетте Фәруҡша белеп еткермәй. Һағайҙы. Тиктәҫкә ошолай ҡыланмай бит ул.

– Хәлде нейә һорап тораһың, ҡустым? Ишеттең бит, – тип яуапланы ул тупаҫ ҡына. – Райком башҡорттарҙан власты алып бөтөрҙө инде. Хәҙер, әйҙә, рәхәтләнегеҙ. Влас вис һеҙҙең ҡулда.

– Фарукша абый, кызма әле. Монда минем ни гаебем бар? – Дәминев һаман да итәғәтле ҡыланды. – Иртәгә сезгә барып чыгарга исәп бар. Өйдә буласыздыр бит? Ана шунда иркенләп сөйләшербез. Әле сине председателлектән бер кем дә снимать итмәгән бит. Яңа колхозның, абый, председателе юк бит. Мужет, мине сайларлар.

Фәруҡша тешен ҡыҫып, өндәшмәне. Яңы хужалыҡтың рәйесе итеп ошо Дәминев һайланасағына уның тамсы ла шиге юҡ ине. Беренсенән, йәш, икенсенән, ағзалары иҫән-һау, теүәл, өсөнсөнән, техникум тамамлаған. Тимәк, белемле һәм был – иң мөһиме. Ә Фәруҡшаның белеме лә бит дүрт класс та өс айлыҡ уҡытыусылар курсы. Партия ауыл хужалығында яңы политиканы, әлбиттә, Дәминевтар аша алып барасаҡ.

Уның район үҙәгенән ҡайтҡанын ауылда унлап ир көтөп торған. Ҡайһыһы килтереп еткергәндер – табылдылар «Яңы юл» колхозын «Правда»ға ҡушыуҙы яман хәбәр итеп ҡабул итте. Фәруҡша сананан төшөү менән эргәһенә йыйылып киттеләр.

– Беҙҙе Баҡыйға ҡушалармы ни инде? – тине ауылда үткерлеге, тапҡырлығы менән абруй ҡаҙанған Йәрмөхәмәт тракторсы, алғараҡ сығып.

– Эйе. – Фәруҡша, оҙон юл килеп талсыҡҡан аяҡтарын яҙырға була, урынында арлы-бирле һикергеләне. – Сессия шундай решение сығарҙы.

– Һин, абзый, риза булдыңмы? – Быныһы саялығы һәм үҙ һүҙлелеге менән бер кемде лә алдына сығармаған Хажғәле. – Нейә ҡаршы сыҡманың?

– Сығырһың анда! – Фәруҡша ҡыҙа башланы. – Һеҙ, што такой, мында минән допрос алырға килдегеҙме? Алай шәп булғас, ана, райсавитҡа барып выступайт итер инегеҙ!

– Барырға йыйынып тора инек инде. – Хажғәле һаман һүҙ көрәштерҙе. – Үҙең ҡайтып төштөң.

Ул, яҡлашығыҙ инде, тигән ҡарашы менән тирә-яғындағы ирҙәрҙе һөҙөп сыҡты. Шуны ғына көткән кеүек, ирҙәр умарта күселәй гөжләргә тотондо.

– Элек баҡыйлар беҙгә килеп ҡортомға ер һорап йөрөй торғайны. Уларҙың сәүит власына тиклем үҙ ерләре лә булманы бит. Беҙҙән алдылар. – Әллә ни арала килеп еткән Зәйнетдин ҡарттың тауышы ине был.

– Хәҙер шул килмешәкләр беҙҙең белән рукавадит итәсәкме?

– Юҡ, беҙ Баҡыйға ҡушылмайбыҙ!

– Атларҙы егәбеҙ ҙә киттек Стәрлебашҡа!

– Эйе лә баһа! Нишләп беҙ мында кәм-хур булып ятайыҡ.

– Туҡтатығыҙ был балаганды! – Фәруҡша ҡаты итеп ҡысҡырып ебәрҙе. – Һеҙҙең анда кем тыңнар тиһегеҙ? Райсавит решениеһына ҡаршы сыҡҡан өсөн үҙегеҙҙе КПЗ-ға ябып ҡуйырлар ҙа, шуның белән эшегеҙ ҙә бөттө.

Уның үҙенең дә эсендә буран уйнай ине. Өйөнә ҡайтып тынысланырға була, Фәруҡша атын шул яҡҡа борҙо. Был көндө ул урамға сығып йөрөмәне. Киске яҡҡа ҡатыны мунса яҡты. Әммә иркенләп ял итеү эләкмәне. Йоҡларға ятырға йөрөгәндә, урам ҡапҡаһының шығырҙап асылғаны ишетелде. «Кем йөрөй икән?», тип ҡараһа, ҡар яҡтыһында ике-өс ирҙең ихатаға инеп барыуы күренде. Ҡаршы сығырға уйлағайны ла, мунсанан һуң һалҡын алдырып ҡуйыуҙан ҡурҡты.

Тупһала Йәрмөхәмәт кенә күренде, башҡалар тышта тороп ҡалғайны.

– Фәруҡша, халыҡ зыҡ ҡуба, баҡыйларға ҡушылырға теләмәйләр, – тип һүҙ башланы саҡырылмаған ҡунаҡ, һике ситенә ултырып. – Иртәгә Дәминев килә, тиме? Шунда халыҡты йыйып, сабранйы үткәрһәк, тибеҙ.

– Анда нимә тикшерергә итәһегеҙ? – Фәруҡша ҡунағына тура ҡараны.

– «Правда»ға ҡушылмайбыҙ, тип решение сығарабыҙ инде, – тип яуапланы Йәрмөхәмәт, ишек яғына төбәлеп. – Аңа райсавит ҡаршы сыға алмай.

– Ала, абзый, нисек ала әле! Һин законды белмәйһең. Райсавиттың праваһы күберәк.

– Нишләп ҡарайыҡ һуң? – Йәрмөхәмәт ысынлап та борсола ине. – Ҡуша ҡалһалар, был бик насар барып бөтәсәк. Мин аны һиҙеп торам. Власть беҙҙән бөтөнләй китәсәк. Ана теге волосты бөтөргән йылларҙағы кеүек.

Эйе, Табылды волость үҙәге булған йылдарҙы яҡшы хәтерләй Фәруҡша. Ауыл тирә-яҡтың бер административ үҙәге булып торҙо. Волость идараһы, сельпо, мәктәп, магазин. Ауыл ҡараулы, дәрәжәле, шөһрәтле. Район системаһы индерелеп, уның үҙәге Стәрлебашҡа урынлашҡас, абруй менән дәрәжә лә шунда китте. Хәҙер Табылдыға ҡалған арлы-бирле абруйҙан дә мәхрүм итәләр.

– Нишләп ҡарайбыҙ? – тип ҡунағына ҡабатланы Фәруҡша. – Таң атһын әле. Уйлашайыҡ. Төн бит ул уйлашыу өсөн бирелгән. Ни ти әле урыҫ: утры вичира мудринийы.

Йәрмөхәмәт башын баҫып сығып китте. Председатель менән һөйләшеүҙән ҡәнәғәт түгеллеге уның атлауында уҡ сағыла ине.

Ләкин Дәминев иртәгәһен Табылдыла күренмәне. Колхоз идараһына теләр-теләмәҫ кенә килгән председателде буп-буш коридор ҡаршы алды. Бүлмәләрҙе йөрөп сыҡҡас, ул кире ишек алдына сыҡты. Бер кем дә юҡ. «Халыҡ үҙенең ризаһыҙлығын ана шулай күрһәтә. Хәс тә бала-сағаларса»,– тип уйланды ул һәм ауыл урамы буйлап үргә китте. Аяҡ аҫтында шығырҙаған ҡар тауышын тыңлай-тыңлай, ул фермаға ла барып етте. Малдар ҡараулы ине, аҫтарын да таҙартҡандар. Тик ҡураларҙа ғына бер кем дә юҡ. Хатта мөдир Ғафур ҙа күренмәй. Кире өйөнә ҡайтты Фәруҡша.

Иртәгәһен Баҡыйҙа үтәсәк дөйөм йыйылышҡа саҡырҙылар. Райкомдан Рәхимғолов үҙе килергә тейеш, тинеләр. Табылдынан колхоз идараһы ағзаларын тейәп, Фәруҡша мисәүле аттар менән Баҡыйға юлға сыҡты. Ара һигеҙ саҡрым булыуға ҡарамаҫтан, яҡшы аттар уны тиҙ үтте. Юлда шулай һүҙ нығыттылар: берәй яйын табып, ҡушылыуға ҡаршы сығырға.

Яйы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, сыҡманы. Йыйылышты Рәхимғолов үҙе асты һәм үҙе үк алып та барҙы. Күрәһең, башҡаларға ышанманы. Ике көн элек район Советы сессияһында колхоздарҙы эреләтеү тураһында ҡарар ҡабул ителеүе һәм «Правда» колхозына «Яңы юл»дан Табылды, «Совет»тан Үрге һәм Түбәнге Ҡарамалы ауылдары, «Николаевка» колхозынан Үрге һәм Түбәнге Борисовка ауылдары һәм Гәрәй утарының ҡушылыуы тураһында хәбәр итте.

– Беҙ бөгөн сессия ҡарарын еренә еткереп үтәү өсөн йыйылдыҡ, – тине секретарь, йөҙөнә олпатлыҡ, тәүәккәллек билдәләре сығарып. – Партия ауыл хужалығын күтәреү бурысы ҡуйҙы. Ә ваҡ хужалыҡтар базаһында уны тормошҡа ашырып булмаясаҡ. Оҙаҡламай колхоздарға техника ҡайтарыла. Беҙ партия хәстәрлегенә удар хеҙмәт менән яуап бирергә бурыслы.

Фекер алышыу башланғас, Фәруҡша һүҙ һораны. Ышаныслы аҙымдар менән президиум өҫтәле янына сығып баҫты. Рәхимғолов сығыш яһағанда, ул бер аҙ фекер туплап өлгөргәйне.

– Иптәштәр, беҙ колхоз ойошторғанда, аның уставын яҙып, аның белән риза булғаннарҙы колхозға алып, эш башлап ебәрҙек. Күпселек уставты яҡланы, сөнки ул крәҫтиән хужалығын берләштереп, ныҡлы хужалыҡ итеү яғында ине. Мин мының белән, колхоз колхозсы ихтыяры нигеҙендә эш итә ине, тип әйтергә теләйем. Беҙ ошоға тиклем шулай эшләнек тә. Ләкин райсовет решениеһы мыңа ҡаршы килә. Ул колхозник интересын боҙа, аяҡ аҫтына һалып тапай. Китапса әйтһәк, колхоз демократияһына ҡаршы килә.

– Нигматуллин! – тип тауышын күтәрә биреп өндәште секретарь. – Беҙ бында һеҙҙең демагогияны тыңларға йыйынманыҡ! Иначе мин һеҙҙе һүҙҙән мәхрүм итәм.

Фәруҡша ҡыҫҡараҡ тоторға тырышты:

– «Правда» колхозына ҡушылырға беҙ генә түгел, ҡарамалылар ҙа ҡаршы. Әле генә асыҡланыуынса, мыны «Николаевка» муҡшылары ла хупламай. Мин Табылдыны Баҡыйға ҡушыу менән килешә алмайым. Лутсы беҙҙе «Коммунизмға» колхозына ҡушығыҙ.

Фәруҡша урынына барып ултырҙы. Залда шау-шыу китте: баҡыйҙар менән табылдылар араһында һүҙ көрәштерҙеләр. Идара ҡайҙа буласаҡ: Табылдыламы, әллә Баҡыйҙамы?

– Уныһы – йыйылыш ҡарамағында. – Рәхимғолов демократияға уйнаны.

Был мәсьәлә, күренеүенсә, хәл ителгәйне. Йыйылыштың Баҡый ауылында үткәрелеүе, баҡыйҙарҙың йыйылышта күпселекте тәшкил итеүе үҙе үк шуға ишара итеп тора. Тауышҡа ҡуя торған булһалар, улар, һис шикһеҙ, өҫтөнлөк аласаҡ. Шулай булды ла. Ҡарамалынан килгән дүрт-биш, борисовкаларҙың һәм табылдыларҙың биш-алтышар тауышы баҡыйҙарҙың егермеләп тауышы аҫтында баҫылып ҡалды. Унан председатель һайлауға күстеләр. Йыйылышты алып барған секретарь, бәхәсләшергә урын юҡ тигәндәй:

– Райком Хәби Хәлимович кандидатураһын тәҡдим итә. Ул йәш, арағыҙҙа иң белемлеһе, ауыл хужалығы техникумын тамамлаған. Партия киләсәктә лә шундай перспектив кадрҙарға таянасаҡ, – тип баҫым яһаны.

Залдағыларҙан кемдер:

– Других не будем что ли предлагать? – тип тауыш биргәс, Рәхимғолов уянып киткәндәй һиҫкәнде.

– Предлагайте, – тине ул битараф ҡына. – Райком инициативаны баҫмай.

Мыҡты кәүҙәле, чапаевтыҡылай мыйыҡлы, ерән урыҫ Антоновты тәҡдим итте.

– Юҡ, Антонов – саботажник. Ул председатель вазифаһынан бушатылды, – тип тауышын күтәрҙе секретарь. – Башҡа кешене күрһәтегеҙ.

– Беҙ Антоновты һайланыҡ, – тип ныҡышты теге мыйыҡлы. – Беҙ әле уны снимать итмәнек.

– Прекратите демагогию! – Рәхимғоловтың тауышы был юлы тынысыраҡ сыҡты. Ләкин ул сикһеҙ дәрәжәлә ҡырыҫ ине. – Тағы кемде күрһәтәһегеҙ?

Табылдылар Фәруҡшаны тәҡдим итеп ҡараны. Рәхимғолов ирендәрен мыҫҡыллы бөрөп, беленер-беленмәҫ йылмайҙы.

– Башҡа тәҡдимдәр булырмы? – Ул залды һөҙөп ҡарап сыҡты. Һүҙ һораусы булманы.

Әҙәм көлкөһөнә ҡалмайым тип, Фәруҡша үҙенең кандидатураһын алырға уйлауын әйтмәксе булғайны ла, өлгөрә алмай ҡалды. Тауышҡа ҡуйҙылар. Яңы, эреләтелгән колхоз рәйесе итеп Дәминев һайланды. Баҡыйҙар, ҡәнәғәтләнеүен йәшермәй, ҡул сапты. Секретарь ҙа уңышҡа өлгәшеүенән үтә ҡәнәғәт булып,

көлә-йылмая, яңы рәйестең ҡулын ҡыҫты. Йыйылышты ябыр алдынан ул оҙаҡ итеп телмәр тотто, нотоҡ уҡыны. Баҡыйҙан табылдылар зыяраттан ҡайтҡан кеүек ҡайтып төштөләр.

– Все! – тине Фәруҡша, колхоз идараһы алдында ауылдаштарын санаһынан төшөрөп. – Кәмит тамам, ҡайтышайыҡ. Артабан нишләргә – күҙ күрер.

Ул төнө буйы йоҡлай алмай сыҡты. Төрләнөн уйланы. Үҫмер килеш тиерлек комсомолға инеп, башлыҡтары Мостафа Изекәев менән нисек итеп кулак-байҙар менән алышыуҙарын, кешеләрҙе колхозға инергә өндәп йөрөүҙәрен, егет кенә көйө тәүге колхозда председатель булып эшләүен иҫенә төшөрҙө. Ул саҡта Фәруҡшалар, бына берләшеп колхозды төҙөп алырбыҙ ҙа, көстө бер йүнәлештә туплап, йәшәп алып китербеҙ, күпме кәрәк – шул саҡлы ашлыҡ сәсербеҙ, мал аҫрарбыҙ, барыһын да кәңәшләшеп эшләрбеҙ, тип хыяллана ине. Ул хыялдар, кем әйтмешләй, һабын ҡыуығылай шартлап юҡҡа сыҡты. Райкомға оялап алған, ауыл хужалығының ни икәнен самалап ҡына белгән әҙәмдәр быуаттар дауамында формалашҡан крәҫтиән психологияһын һанға һуҡмаҫҡа, үҙ тәртиптәрен көсләп тағырға маташа. Ул колхоз председателдәрен алмаштырыу тиһеңме, көн һайын өс-дүрт кешенең, йәнәһе, уполномоченныйҙар, килеп еҫкәнеп йөрөүҙәре… Фу, ниндәй түбәнлек! Һин бында, эш барһын тип, ҡырҡҡа ярылырҙай булып, кеше менән талашып, һуғышыр сиккә етеп йөрөйһөң, ә улар?..

Фәруҡша уйҙарының осона сыға алманы. Таң әтәстәре тамаҡтарын һынай башлаған мәлдә уны ҡаты итеп йоҡо баҫты. Күпме йоҡлағандыр, хәтерләмәй, бер саҡ Рабиғаның яурынынан ҡаты итеп һелкетеүенә уянып китте:

– Ана, тышта Фәйзрахман тора, – тине ҡатыны борсолған тауыш менән. – Баҡыйҙан кешеләр килгән, ти. Келәттәге ашлыҡты тейергә итәләр, тиме.

Фәруҡшаның һаман ҡуҙғалмай ятыуын күреп, ҡатыны ҡысҡырып ебәрҙе:

– Эй, алла! Тор инде. Нимә ятаһың урыҫ ужаһы кеүек һуҙылып.

Бирге урамдың көньяғында, Ҡоро Күндрәк йылғаһы яры буйлап һуҙылған келәттәр янында, ысынлап та ылауҙар күренә. Йүгерә-атлай, Фәруҡша улар янына килде. Баҡыйҙарҙың береһе, күрәһең, башлыҡтарылыр инде, келәт мөдире Әғзәм менән аяҡ терәп телләшә. Фәруҡшаны күргәс, Әғзәм ҡабалана-ҡабалана һөйләргә тотондо.

– Ашлыҡты вис тейәп алабыҙ, тип килгәннәр. Дәминев ҡушты, тиләр. Бер ниндәй распражинйылары юҡ, – тине ул, ҡулдарын бутай-бутай.

– Сиңа распражиня кирәкме? Прсидател үзе кушты, дип торам бит. – Оҙон буйлы был ябыҡ кешене күргәне бар Фәруҡшаның, аҫҡыстар бәйләме шылтырата ла йөрөй. Келәт мөдире булып эшләй торғандыр.

– Документ булмағас, игенде ала алмайһың инде, – тине Фәруҡша тыныс ҡына. – Тәртип шундай.

– Син хәзер прсидател түгел. Кысылма, – тине теге. – Я, ач келәтне. – Ул хатта Әғзәмде этәреп ебәрҙе. Ҡурҡытырға итте, ахырыһы.

– Һин әллә алйотмы? Әллә алйот булып ҡыланаһыңмы? – Фәруҡша ҡапыл тоҡанып китте. – Документһыҙ мин ашлыҡты Хәбиҙең үҙе килһә лә тейәтмәйем. Марш бынан! Ату, хәҙер ирләрҙе йыйып, ҡабырғаларығыҙҙы һынап ҡайтарырбыҙ.

Һуңғы һүҙҙәр теге ирҙе айныҡтырып ебәрҙе, ахырыһы. Ул асыулы күҙҙәрен селт-селт йомғолап, оҙон арбаһы яғына атланы. Менеп ултырғас, үҙенекеләргә ҡул болғаны.

– Ярый, әйдәгез, борылыйк. Чынлап та документ сорарга кирәк булган.

Унлап ылау дөбөр-шатыр килеп аръяҡ урамынан Баҡый яғына ҡуҙғалды.

Ләкин ике көндән улар тағы ла күберәк булып килде. Был юлы документтары бар ине. Дәминев Табылдыла ашлыҡтың сәсергә етерлеген генә ҡалдырып, ҡалғанын тейәтергә ҡушҡайны. Көпә-көндөҙ талау ине был. Фәруҡша түҙмәне, райкомға шылтыратты. Ауыл хужалығы бүлеге мөдире Хафизов тигән йәш кеше битараф ҡына:

– Дәминев председатель бит. Ул ҡушҡас, һеҙгә подчиняться итергә генә ҡала, – тине.

– Беләм. Тик Дәминев үҫтермәгән бит аны, – тип ныҡышты Фәруҡша. – Рәхимғоловҡа шылтыратҡайным да, үҙендә юҡ. Ҡайҙа китте икән?

– Секретарҙы андай пустяк менән борсома, абзый. – Хафизов асыуланған һымаҡ итте. – Анан, хәҙер һин председатель түгел бит. Юҡҡа-барға ҡыҫылып йөрөмә. – Ул телефонды шапылдатып һалып та ҡуйҙы.

Баҡыйҙар ашлыҡты ике көн ташыны. Бер аҙнанан йылҡы фермаһына ҡымыҙ бейәләрен алырға килделәр. Имеш, Дәминев, райкомдан, обкомдан килгән ҡунаҡтарҙы ҡымыҙ менән һыйларға кәрәк, тип әйткән.

– Бейәне һауып, беҙҙәлә әсетеп кенә ҡымыҙ буламы? – тип мыҫҡыллы көлөп ҡалды Фәйзрахман. – Һеҙгә ҡымыҙ әсетешергә кеше лә кәрәк булыр әле.

Ләкин бындай ярҙам һорап килеүсе булманы. Күрәһең, үҙҙәре яйын тапҡан. Көҙгә табан баҡыйҙар тауыҡ фермаһын тейәп алырға тип тә килгәйне. Был юлы уларҙы фермаға яҡын да юллатманылар. «Милиция менән килһәгеҙ ҙә бирмәйбеҙ. Аны беҙ үҙебеҙҙең елкә менән һалдыҡ», – тип ҡаты торғас, Дәминев сигенде. Һауын һыйырҙарҙың бер өлөшөн Баҡыйға күсерергә маташыу ҙа килеп сыҡманы. Табылдылар бында ла үҙаллылыҡ күрһәтте. Ә бына йәшелсә баҡсаһын председатель еңел бөтөрҙө, урынына бойҙай сәсергә ҡушты: илгә икмәк кәрәк.

Ҡарамалылар ҙа язаһыҙ ҡалманы. Сессия булғандың иртәгәһенә, Стәрлебашҡа килеп, шаулап йөрөгән бер нисә кешене 15 тәүлеккә ябып та ҡуйҙылар. Көҙ еткәс, Дәминев Түбәнге Ҡармалылағы суҫҡа фермаһын Үрге Борисовкаға күсертте. Һарыҡ фермаһына ла үрелеп ҡараған да, райком ҡаршы төшкән, имеш, тинеләр. Былай ҙа ауылда ҡалып бармаған урыҫтар менән муҡшылар ошонан һуң күпләп ҡалаларға – Стәрлетамаҡ, Салауат, Ишембайға тартылды. Мәктәп тамамлағандарҙың иһә береһе лә ауылда ҡалманы. Һуғыштан һуң әле өс ауылда 170-ләп йорт иҫәпләнә ине, 60-сы йылдар аҙағына иһә шуның яртыһы ла ҡалманы. Эйәһеҙ ҡалған өйҙәрҙе һүтеп утынға яҡтылар, сөнки һатып алырлыҡ кеше табыуы ла ҡыйын булды.

Табылдыла ла хәлдәр шулайыраҡ ине. Ни ҡөҙрәт менәндер, тирә-йүндә башҡорттар өсөн берҙән-бер булған ете йыллыҡ мәктәп япып китте. Һүндерә алманылар. Ауыл Советы тәүҙә Раевка ауылына күсерелде, унан Баҡыйға китте. Сельпо Күндерәк утарына күсерелде. Шулай итеп, ҡасандыр улыҫ үҙәге булған, тормош ҡайнаған ауыл яйлап һүнә башланы. Йәштәр класы менән, бәхет эҙләп, ҡалаларға йәки башҡа яҡтарға китте.

Фәруҡшаны яңы ойошторолған «Правда» колхозы идараһы ағзаһы итеп ҡалдырҙылар. Эшһеҙ ҡалдырмаҫ өсөндөр инде, яңы ойошторолған агротехник вазифаһын уға йөкмәттеләр. Колхоз, ғөмүмән, крәҫтиән өсөн яңы исем булыуына ҡарамаҫтан, агротехник тупраҡ эшкәртеү һәм сәсеү өлкәһендә бай ғына тәжрибә туплаған илдәр өсөн байтаҡ замандарҙан килгән төшөнсә ине. Бәләкәйҙән атаһы менән аҙ-маҙ тары сәсеп, артабан бойҙай, арыш игеп үҫкән Фәруҡшаның, мин ер эшен беләм, тип маҡтанырлыҡ дәрәжәгә еттем, тип иҫәпләүе ерле бушҡа булған. Быға ул район үҙәгенән тупраҡ эшкәртеү һәм сәсеү тураһында махсус китаптар алып ҡайтып өйрәнә башлағас ҡына төшөндө.

Колхозсылар, уларҙан бигерәк председатель Дәминев алдында көлкөгә ҡалмаҫ өсөн ул ярты төн ауышҡансы китап уҡыны. Русса уҡыу тәтемәгәс, аңламаған һүҙҙәр ҙә байтаҡ булып сыҡты. Уларҙы уҡығаныраҡ йәштәрҙән уратып-суратып һорап белде. Күп тырышлыҡ түгергә тура килде, әммә ҡыш уҙыуға ул үҙен тупраҡ эшкәртеү өлкәһендә яҡшы белгес тип иҫәпләрлек дәрәжәгә барыбер етте. Яҙғы сәсеү алдынан, Баҡыйҙа тракторсыларҙың уҡыуын ойошторғанда, сығыш яһаған Фәруҡшаны тыңлап, Дәминев:

– Фәрукша абый, син укымасаң да, эшне яхшы беләсең икән, – тип ҡуйҙы.

– Нишләп уҡымай, ти. Эх, Хәби туған, – Фәруҡша баш сайҡаны. – Уҡымай тороп, бер ни ҙә белеп булмай.

– Дипломың юк, дип әйткәннән инде, – Председатель аҡланып маташты.

Агротехник эшенең мәшәкәте колхоз рәйесенекенән дә күберәк икән. Егерме мең гектарҙан ашыу һөрөнтө ере булып, ете-һигеҙ ауылды берләштергән хужалыҡтың баҫыуҙарын ат менән йөрөп сығыу, ай-һай, арыттыра. Йәш тә бара бит, алтмышты ҡыуа. Йылдар үҙенекен итә, йәш саҡта күргән михнәттәр, алдырған һалҡын, имгәнеүҙәр, олоғая килгәс, өҫкә ҡалҡа, ҡаҡшай барған организм үҙәктәргә үтеп ыңғыраштыра, һыҙларға тотона. Һуғышта алған яралар болотло көндәрҙә, төндәрен һыҙлай башлағанға ла байтаҡ булып китте. Һуңғы осорҙа шуны һиҙҙе Фәруҡша: көндәр еүешкә тарттымы, тын алыу ауырлаша. Тәүҙәрәк ул быны, тамаҡҡа һалҡын тейгән, ахырыһы, тигән кеүегерәк кенә ҡабул итеп, әллә ни әһәмиәт бирмәй йөрөнө. Ләкин тын ҡыҫыуҙан бите күгәрә башлағас, район үҙәгенә дауаханаға китте. Урта йәштәрҙәге һылыу ғына бер ханым, уны оҙаҡ ҡына тыңлағандан һуң:

– Ағай, һеҙ астма менән сирләйһегеҙ бит, – тине.

– Астма? – Был һүҙҙе Фәруҡшаның ишеткәне лә юҡ. – Нимә була һуң ул?

– Астма – ул тын ҡыҫыу ауырыуы була. – Табип ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына һөйләмдәр менән аңлатты, нисек һаҡланырға кәрәклеген өйрәтте. Дарыуҙар өсөн рецепт яҙып бирҙе.

Дәминев, уның тын ҡыҫып сирләүен белгәс:

– Фәрукша абый, мин сиңа күптәннән инде әйтергә йөрим, тик уңайсызлана идем. Әйдә, ял ит син. Санаторийга барып кайт, – тине. – Колхозның эше бетмәс аның.

Фәруҡша ҡапыл ни әйтергә белмәй торҙо. Ял ит, тигәс, пенсияға кит, тип әйтеүе микән? Ул хаҡта уйлап ҡарағаны бар уның, тик иртәрәк бит әле. Ял ит, тип уйланды ул. Ә ял итеп өйрәнелмәгән. Нисек итеп көн үткәрер ул?

"Йоматау" санаторийына путевка биргәс, Фәруҡша тәү тапҡыр һаулыҡхана тупһаһын аша атлап үтте. Тәүҙә ул бер ниндәй мәшәҡәтһеҙ тыныс тормошҡа күнегә, көн үткәрә алмай интекте. Әммә бер нисә көндән өйрәнгән кеүек булды. Ял итергә, тик ял итергә. Ҡымыҙ эсте, туйғансы йоҡланы. Саф һауала йөрөү арҡаһындамылыр, ашауы ла арыуланды. Бер көн дауалау процедуралары тәғәйенләгән табип дорфа ғына:

– Һеҙ оло кеше инде, белергә тейешһегеҙ. Астма менән ауырыған кешегә тәмәке тартырға ярамай, – тине.

Был һүҙҙәр Фәруҡшаға шул тиклем ауыр тәьҫир итте – ул оялды, ҡыҙарынды, ни тип яуапларға ла белмәне. Утыҙ йыллап тартылған тәмәке барлыҡ күҙәнәктәргә лә һеңгән, алама ғәҙәткә әүерелгән. Тәмәкеһеҙ уның бер сәғәт тә тороп ҡарағаны юҡ. Ай-һай, уны ташлап булырмы икән?

Иртәгәһен ул тартыу тураһында уйламаҫҡа, нисек тә ташларға ҡарар итте. Үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр. Ләкин иртәнге аштан һуң, ашхананан сығыу менән,

яман итеп шул күнегелгән төтөндө һурғыһы килде. Ишек алдында йыйылып тәмәке тартыусылар янынан ул ауыҙынан аҡҡан шайығын йота-йота, бүренән ҡасҡан һарыҡ бәрәселәй, аяҡтары ҡалтырай-ҡалтырай ситкә тайшанырлыҡ көс таба алды. Төшкә тиклем процедуралар ҡабул итеп, ваҡыттың үткәне әллә ни һиҙелмәне. Төштән һуң Фәруҡшаның тағы ла үлтереп тартҡыһы килде. Тик, ни хәл итмәк кәрәк, һүҙ биргәнһең икән, һүҙеңдә тора ла бел. Ул тешен ҡыҫып булһа ла түҙҙе. Йоҡлап ҡотолорға тырышты, кисен дә иртә ятты. Ләкин төнө буйы йүткереп сыҡты. Был хаҡта белеп алғас, теге табип:

– Ағай, һеҙгә ҡапыл ташлау ярамаҫ ине. Һирәкләп тартып ташларға кәрәк, – тине, үҙен ғәйепле кешеләй тойоп. – Сирләп китмәһәгеҙ ярай ҙа.

– Мин кисә тартманым. Бөгөн дә түҙермен. – Фәруҡша етди әйтте.

Йоматауҙан ул бер аҙ тулыланып, үҙен яҡшы хис итеп ҡайтты. Тартыуын ташлауын белгәс, Рабиғаһы ла шатланды:

– Маладис, ҡарт! Исмаһам, кәзә тәкәһе кеүек һаҫып йөрөмәҫһең.

Ҡабат колхозға эшкә сығып торманы Фәруҡша. Йоматауҙа саҡта шулай хәл иткәйне. Дәүләт уға, инвалидҡа, былай ҙа пенсия түләй бит. Аҡсаға ғаиләһе бик ҡытлыҡ кисермәй кеүек. Эшләмәне түгел, эшләне. Ял итергә лә кәрәк. Улының артабан колхозға эшкә сыҡмаясағын ишеткәс, Мөхәмәтша ҡарт:

– Ауылда кеше эшһеҙ тора алмай инде. Ана, донъяңды ҡарарһың. Әтеү гел килен менән балаларың ҡарай. Шул калхуз тип үлдең бит, – тип һуҡранған кеүек итте. Өйҙә тороп өйрәнмәгәс, көн үткәреү бигерәк ауыр икән. Ике ҡулы ла булһа, Фәруҡша, моғайын, эш табыр ине. Ихатала ул күп. Тик бер ҡул менән генә ни ҡыраһың? Барыбер ярҙамлашырға берәйһе кәрәк. Рабиғаның былай ҙа эше тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел. Балалары тағы. Ошолай ары һуғылып, бире бәрелеп йөрөнө лә Фәруҡша, колхозға эшкә сығыу тураһында уйлана башланы. Атаһына кәңәш иткәйне:

– Бынағайыш! – тип бот сапты Мөхәмәтша. – Калхузда бушҡа эшләп туймағанһың икән! Йөрөмә, тип әйттем дә инде. Үҙеңдең донъяңды ҡара! Ҡырылмаһа ҡырҡ эшең ярылып ята.

– Һыңар ҡул менән ни ҡылаһың? – тип ҡырталашты улы. – Булмай бит. Аптырағандан әйтәм инде.

– Нисауа! Яйлап өйрәнерһең әле. Үҙем дә ярҙамлашырмын, – тине ҡарт, яғымлыраҡ итеп.

Иртәгәһен улар, аталы-уллы, ситән-ҡоймаларҙы төҙәткеләне. Ҡапҡаларҙы ла йүнәттеләр. Көрәк, һәнәк һаптарын яңырттылар. Эш күп икән шул. Ихата буйлап бер тегеләй, бер былай йөрөп, ҡарт яңы эштәр таба торҙо. Шулай атаһының ярҙамы менән Фәруҡша кәртә-ҡура эштәрен башҡарып та сыҡты.

## VIII

Йәйге эҫе көндәрҙең береһендә Фәруҡшалар ҡапҡаһы алдына дөңгөр-даңғыр килеп ят арба туҡтаны. «Атаһы, ана, һиңә кемдер килгән, – тине Рабиға, тәҙрәгә күҙ ташлап. – Сығып ҡара әле, кем икән?

Фәруҡша ҡапҡа алдына сыҡҡансы, теге кеше шаулай-көлә ҡапҡаны асып, ихатаға килеп тә инде. Танының хужа: Ҡарағош ауылынан Мөбәрәкша бит. Ҡасандыр бергәләп фин һуғышында йөрөгәйнеләр. Мөбәрәкшаның холҡо бер ҙә үҙгәрмәгән, элеккесә күңелсәк, күп һөйләй, шаяра, көлә. Хатта үҙенә олоғайыу ғәләмәте лә ҡағылмаған кеүек. Ҡаҡса кәүҙәһен дә бик еңел ҡуҙғатып йөрөй.

– Кунак бар, каршы ал, дус! – Мөбәрәкша, ике ҡулын ике яҡҡа йәйеп килеп, фронтташ дуҫын ҡосағына алды. Оҙаҡ итеп ҡыҫып торҙо, арҡаһынан яратып

ҡаҡҡыланы. – Нихәлдә генә йәшәп ятаһың? – Ҡунаҡтың ауыҙынан еңелсә генә араҡы еҫе сығып ҡалды.

– Әйбәт, Мөбәрәкша. Яҡшы. – Фәруҡша дуҫының килеүенә бик шат ине. Уның да ҡаҡса йөҙөнән йылмайыу китмәне. – Ҡара әле, килеп бик яҡшы иткәнһең бит. Ҡайҙа барып, кем менән һөйләшергә белмәй ҡаңғыра инем.

– Хәҙер эшләмәйһеңдер инде? – Мөбәрәкша атын урамға индерҙе лә ситән ҡоймаға килтереп терәтте. – Ҡайҙа, буш биҙрә бир әле, атты эсереп алайым. Оҙаҡ килдек бит, һыуһағандыр.

Рабиға ул арала, өйҙә, самауыр ҡуя башланы.

– Юҡ, йортҡа кермәйек әле. – Мөбәрәкша ҡырт киҫте. – Ана, баҡсағыҙҙа сәхрәлә ултырайыҡ. Йортта ҡыш еткәс тә ултырырға өлгөрөрбөҙ.

Фәруҡшаларҙың арт яҡлап, ысынлап та, баҡса бар ине. Унда Әхмәтша ағаһы ултыртҡан ҡайындар ярайһы ғына үҫеп киткән. Ошонда уҡ йәшел һуған, аш сөгөлдөрө, ҡыяр түтәлдәре. Ҡарағат ҡыуаҡтары ла йыл һайын мул емеш бирә. Көньяҡтан иҫкән ел аҡрын ғына баҡсалағы үләндәрҙе тарай. Фәруҡша алып сыҡҡан балаҫты йәйеп, ҡайын төбөнә күләгәгә ултырҙылар. Мөбәрәкша кеҫәһенән таҫтамалдай ҙур ҡулъяулыҡ сығарып, тирләгән битен-елкәһен һөрткөләне.

– Үтә бит был ғәзиз ғүмеркәйҙәр, – тине ул, Фәруҡшаға серле итеп ҡарап. – Ҡасан ғына дөбөрҙәтеп баҫып йөрөгән егеттәр инек.

– Шулай шул. – Фәруҡша һүҙҙе оҙайтманы. Йәш саҡтарҙы хәтеренә төшөрөргә яратмай ине ул. Юҡҡа кәйеф бөтөрөп.

Мөбәрәкша ҡапыл ҡалҡынды ла, арбаһы янына барып, ҡара сумка күтәреп килде. Унда ҡыяр, һуған, бер шешә башланған араҡы, икмәк киҫәктәре ята ине. Хатта стаканы ла бар. Күрәһең, ул араҡыһын юл буйы аҙ-маҙ эскеләп килгән.

Ҡунаҡ шешәнең ҡағыҙ тығынын алды ла стакандарға гөбөрләтеп араҡы ҡойҙо. Баҡса буйлап әсе еҫ таралды.

– Әйҙә, дуҫ. Берәрҙе тотайыҡ. Иртән баш төҙәткәйнем дә ул. Килеп еткәнсе тир менән сығып та бөткән, – тип көлдө Мөбәрәкша. – Һинең иҫәнлеккә, минең иҫәрлеккә. Һа-һа-һа!

Йылы араҡы шунда уҡ Фәруҡшаның башына йүгерҙе. Арлы-бирле ҡыяр, һуған, Рабиғаһы сығарған бәрәңге, ит киҫәктәре менән ҡапҡылаған булды. Икенсене лә түңкәргәс, Мөбәрәкша йырлап уҡ ебәрҙе:

*Җитмеш чакрым җирне үттек без,*
*Бер күрешер өчен килдек без.*
*Ак калфакның табылган чагы,*
*Туганнарның сагынган чагы.*

Матур йырлай ине Мөбәрәкша. Тауышы нисектер ике ҡатлы, берсә юғары, ҡалын, берсә түбән, нәҙегерәк булып сыға. Артабан улар йәш саҡтағы хәтирәләргә төшөп китте. Бынан сирек быуат элек булған ваҡиғалар күҙ алдынан кисә генә булғандай үтеп китте.

Фәруҡша ул саҡта рәйеслектән көс-хәл менән ҡотолоп, Күндрәк МТС-ында келәт мөдире булып эшләй ине. Декабрь аҙаҡтарында көтмәгәндә хәрби комиссариатҡа саҡырып ҡағыҙ килде. «Иртәгә үк килеп етергә!» Атаһы менән иртәнге биштә үк тороп, ат егеп юлға сыҡтылар. Көр, туры ат ҡарлы юлдан еңел генә юрта. Ата менән ул һөйләшмәй, һөйләшәһе һүҙ кисә үк әйтелеп бөткән. Икеһе лә белә: моғайын, фин һуғышына ебәрерҙәр. Яңыраҡ радионан шул хаҡта хәбәр булғайны. Ләкин уны бер кем дә етдигә алманы. Бәләкәй генә Финляндияны бер көндә тар-мар итеп, икенсе көнөндә ҡайтырға сығырға мөмкин, тип уйланды күбеһе.

Хәрби комиссариатта Фәруҡша йәшендәге комсомолдар ғына йыйылғайны. Комиссар, һеҙ һуғышҡа үҙ теләгегеҙ буйынса барыуығыҙ тураһында ғариза яҙырға тейешһегеҙ, тип аңлатты. Яҙҙылар, комсомол кешегә баш тартыу килешмәй. Шул уҡ көндө добровoлецтарҙы Стәрлетамаҡҡа, унан Өфөгә оҙаттылар. Унлап кеше араһында Ҡарағоштан Мөбәрәкша ла бар ине. Фәруҡша менән тиҙ генә яҡынайып, дуҫлашып китте ул.

– Финнәрне дөмектереп кайтыйк әле. Нәрсә алар анда безгә теш кайрап ята, – тине ул, киң йылмайып һәм бер күҙен ҡыҫып. Әйтерһең дә, һуғышҡа, бәлки, үлемгә түгел, ә ҡыҙҙар күҙләргә бара. Хәйер, Карелияның йөҙйәшәр ҡарағайҙары араһында мәңгелек һаҙлыҡтар аша үткәндә лә Мөбәрәкшаның күңеле төшөнкө булманы. Күрәһең, тыумыштан шулай юҡ-барҙан йәм табып, уйнап-көлөп йәшәргә күнеккән. Поезд ғинуар аҙаҡтарында уларҙы Петрозаводск ҡалаһына килтереп төшөрҙө. Ҡаланан йыраҡ түгел һуғыштар бара. Урамдарҙа «полуторкалар» бер тегеләй, бер былай үтеп тора. Уларҙың ҡайһы берҙәренең борттары ҡанға буялған, күрәһең, яралылар йәки үлектәр ташығандыр. Шуныһына иғтибар итте Фәруҡша: бик ныҡ һалҡын. Ул үҙәктәргә үтерлек. Бындай һыуыҡтар Табылдыла бик һирәк була. Ә уларҙың өҫтөндә бындай ҡаты һыуыҡҡа торошло кейем юҡ. Бында кәмендә быйма менән тун кәрәк.

Уларҙы, вагондан төшкәс, сафтарға теҙеп, ҡайҙалыр алып киттеләр. Кейем складына икән. Ысынлап та быйма, һырыған салбар, тун, аҡ халат менән берәр пар саңғы ла бирҙеләр.

– Тау шуарга барабыз, – тип көлдөрҙө Мөбәрәкша.

Кейем-һалым биреүсе старшина, өлкән йәштәге кеше, татар булып сыҡты:

– Сугышка барасың. Нинди тау шуу ул? – тине етди итеп.

Финдәрҙең тылына тәрән үтеп, арттан һөжүм итергә! – бойороҡ шундай. Саңғыла күптән шыуған булмағас, алға барыу уңайһыҙ. Күптәр бер-ике аҙым шыуа ла йығылып китә. Саңғыларын һындырған кешеләр ҙә булғыланы. Әммә алға барыу дауам итте.

– Карале, – ти Мөбәрәкша, иптәшенә өндәшеп. – Ниди матур урыннар, әй! Бу наратлардан йорт салып керергә. Ул исе нинди тәмле.

Мөбәрәкша тирә-яғын иғтибар менән күҙәтеп, күргән бер нәмәһен һөйләп бара. Шул арҡала уға командирҙан да эләгә, әммә Мөбәрәкша туҡтамай. Бер нисә тәүлек барҙылар. Ҡаршыға бер кем дә, бер нәмә лә осраманы. Күрәһең, маршрутты яҡшы белгән кеше алып барғандыр. Иртәгәһенә ниндәйҙер бәләкәй генә ауылға килеп еттеләр. Алға ебәрелгән дозор тиҙҙән кире әйләнде. Үҙҙәре менән бер фин ҡартын да эйәртеп алғандар. Ҡарт русса яҡшы ғына һупалай.

– Һуғыш бөттө, – тине ул, төркөм башлығы эргәһенә килеп. – Кисә радионан тапшырҙылар. Финляндия хөкүмәте капитуляция тураһында килешеүгә ҡул ҡуйған.

Ҡартты күтәреп һауаға сөйә башланылар. Барыһы ла һуғыштың шулай тиҙ тамамланыуына шат ине. Кемдер винтовкаһынан һауаға атып ебәрҙе. Уға башҡалар ҙа ҡушылды.

– Ура! Беҙ еңдек! – тине ерән сәсле бер һалдат.

– Җиңдең атаң башын, – тип уйынға һабыштырҙы Мөбәрәкша. – Дошманны күрмәдең дә бит.

Уларҙы кире бороп, Петрозаводскиға килгәс, Пермь ҡалаһына барған поезға тейәнеләр. Ҡәнәғәт ине һалдаттар. Һуғыш бөттө, уларға эш тә ҡалманы. Хатта бер тапҡыр ҙа атып ҡараманылар.

Эйе, улар һуғышты күрмәне. Ә уның эҙемтәләре улай кәпәренерлек түгел ине.

Мөбәрәкша менән байтаҡ ҡына ҡырын тейәп алғас, шунда уҡ ятып йоҡланылар. Улар уянғанда йәй ҡояшы офоҡҡа етеҙ генә тәгәрәй ине. Баштары ауырта...

– Бисәкәй, бар әле, берәй «ярты» тап, – тине Фәруҡша ишек алдында йөрөгән Рабиғаға.

– «Ярты» күптән һеҙҙе көтөп ултыра, – тип алсаҡ яуапланы ғәҙәттә иренең эсеүен ене кеүек күргән ҡатын. – Аш та беште. Бит-ҡулығыҙҙы йыуығыҙ ҙа кәрәгеҙ.

Мөбәрәкша ҡайтырға уҡталһа ла, Фәруҡша уны ҡалырға күндерҙе. Ярты төн ауғансы тигәндәй тағы ла күңел асып, үткәндәрҙе иҫләп ултырҙылар. Иртән торғас, Мөбәрәкша ҡапыл ғына йыйына башланы.

– Кайтам, дус. Рәхмәт хөрмәтеңә. Анда мине хатын ачып куячак.

Сәй эскәс, атын йән-фарман ҡыуып, аръяҡ урамға төшөп тә китте. Фәруҡша уны ауыл ситенә сыҡҡансы оҙатып барырға уйлағайны ла, Рабиға ҡаршы төштө:

– Йөрөмә! Бер сутҡы эстең бит инде, – тине. – Ҡуйып торһаң да ярар.

Фәруҡша күнде. Ысынлап та, аръяҡҡа сыҡһа, барыбер ауыҙына эләгәсәген белә ине ул.

Көн дә таң менән эшкә китмәй башлағас, Фәруҡшаның ғаилә, тормош көтөү тураһында уйланырға форсаты тыуҙы. Ғаиләлә өс бала үҫә: бер ул, ике ҡыҙ. Уларҙың нисек уҡыуы, үҫкәс кем булырға йыйыныуҙары хаҡында атай кеше ошоғаса бер тапҡыр ҙа уйланып ҡарамаған икән. Фәруҡшаға хатта аҙыраҡ оят та булып китте. Үҙе уҡытыусы ла булып эшләне бит әле.

Балаларҙы уҡытып, кеше итеүҙе хәстәрләргә кәрәк. Тәүҙә ул оло ҡыҙы Клараның ҡылын тартҡылап ҡарарға булды. Быйыл унынсыға бара бит.

– Әлләсе, – тине Клара, атаһы, ҡайҙа уҡырға барырға йыйынаһың, ҡыҙым, тип һорағас. – Уҡып бөтәйем әле.

– Мин, ҡыҙым, йәш саҡта уҡытыусы булып эшләнем. Һин Стәрлетамаҡҡа пединститутҡа бар, – тип уратып-суратып тормай ғына әйтте атай кеше.

– Минең уҡытыусы булғым килмәй ҙә. – Клара, ҡаштарын йыйырып, уйлап та тормай ҡаршы төштө. – Мәктәптә эшләргә яратмайым.

Фәруҡша былдай яуап көтмәгәйне. Была һиңә кәрәкһә! Ҡыҙ бала бит әле. Асыуынан:

– Даяркы булғың киләме, әллә? – тине.

– Юҡ. Башҡа эш бөткәнме ни? – Ҡыҙыҡай асыулана биреп ҡуйҙы.

Артабан һүҙҙе оҙайтманылар. Унынсыны тамамлағас, атаһының һүҙен тотоп, Клара ауылда ярты йыл ғына уҡытып маташты ла, ҡышҡы каникул еткәс, ҡапыл баш тартты:

– Минән уҡытыусы сыҡмай, атай, – тине ул, етди итеп. – Көсләшмә лә.

Һатыусылар әҙерләй торған курс тамамлап, ҡыҙ күрше ауылда магазинда эшләп йөрөгәндә, бер механизатор егеткә кейәүгә сыҡты ла китте. Атаһының юрауы юш килде, тәүге балаһын тыуҙырғас, Клара фермаға эшкә инде һәм пенсияға сыҡҡансы һыйыр һауҙы.

Икенсе ҡыҙы Рәйсә иһә бөтөнләй һөнәр һайлап маташманы. Өлгөргәнлек аттестаты алыу менән, бер әхирәтенә эйәреп, Свердловск ҡалаһына йәштәр төҙөлөшөнә китте лә барҙы. Шунда төпләнде ул. Тормошҡа сыҡты, ике ул тапты ла өй хужабикәһе булып китте.

Ҡыҙҙарын уҡыта алмағас, Фәруҡша улының ҡылын тартҡылап ҡараны. Ләкин ҡайҙа уҡырға барырға теләүе тураһында егет бер ҙә сиселеп китеп һөйләшмәй ҙә ҡуя. Яуабы һәр ваҡыттағыса бер:

– Белмәйем, атай.

Өлгөргәнлек аттестаты алып ҡайтҡас та шулай яуапланы. Фәруҡша етди итеп:

– Кем белә, минме ни? – тине. – Һин хәҙер бала-саға йәшенән үткәнһең. Уйлап ҡарарға кәрәк. Белмәйем, имеш. Беҙгә уҡыу эләкмәне инде, ә быларҙы көсләп уҡытып булмай.

– Белмәйем, атай, белмәйем. – Әхмәтша, ысынлап та, ҡайҙа уҡырға барырға икәнлеген хәл итә алмай яфалана ине. Үҙе лә уңайһыҙлана, төрлөсә уйлап та ҡарай. Ләкин бер генә һөнәргә лә күңеле ятмай.

– Һөнәр алырға кәрәк, улым. Ир кеше һөнәрһеҙ булмай. – Фәруҡша һаман нотоҡ уҡыуын дауам итте. – Ана, Стәрлегә пединститутҡа барып ҡара.

– Пединститутҡа? – Әхмәтша аптыраны. – Анда ни эшләйем мин? Юҡ. Киләһе йыл – барыбер армияға.

Ошоноң менән һүҙ бөттө тигәндәй, Әхмәтша атаһы янынан китеп барҙы. Бер ҡайҙа ла уҡырға китмәне ул. Ҡулына һәнәк-көрәк тотоп, фермаға эшкә сыҡты. «Барыбер бер йылдан армияға». Күтәрелде-бәрелде Фәруҡша, әммә улын еңә алманы.

Балаларының уҡып кеше булыуын ул бик теләй ине. Ярай, үҙе лә, ата-бабалары ла крәҫтиән булыу арҡаһында ерҙә, тиреҫтә соҡоноп ғүмер иттеләр. Итмәй, сараһы бар инеме ни уҡырға: берҙән – аҡсаһы, икенсенән – белеме. Хәҙер барыһы ла бар. Хөкүмәт уҡыған өсөн стипендияһын да түләй. Башҡаларҙың балалары уҡый бит. Ана, Тимерғәлиҙең биш балаһы ла институт тамамланы, өсөһө хатта уҡытып йөрөй. Тимерғәли үҙе кем һуң – мал фельдшеры. Бисәһе лә уҡымаған, колхозница. Хәсәндең балалары ла уҡырға шәп булып сыҡты. Береһе – рәссам, икенсеһе – инженер, өсөнсөһө – тағы уҡытыусы. Сабиттың балалары ла ҡайҙалыр уҡып, ҡалала урында эшләп йөрөйҙәр. Ә минекеләр? Әхмәтша ла шулай тиреҫтә соҡоноп ғүмер итерме икән ни?

Уҡытыусы һөнәре ни яғы менән оҡшамай икән быларға? Ауылда бит уларҙан да белемле, абруйлы һөнәр юҡ уйлап ҡараған кешегә. Мәктәп – изге йорт, ул һәр кемгә аҡыл донъяһын асып бирә. Уҡытыусы кешелек өсөн иң кәрәкле һөнәр ҙә баһа. Эше лә – йылы урында, таҙа. Аҡсаһын да яҡшы түләйҙәр.

Ә колхоз? Үҙе ҡасандыр колхоз ойоштороп йөрөгән кеше булыуға ҡарамаҫтан, һуңғы йылдарҙа Фәруҡшаның колхозға мөнәсәбәте ҡырҡа үҙгәргәйне. «Бөтөрҙөләр,– тип уйланды ул. – Кем генә командывать итмәй колхоз белән. Ни аҡсаһы юҡ, ни тәртибе. Гел талаш-тартыш. Шул да булдымы донъя!»

Гонаһына инә алмай, фермала Әхмәтша яҡшы эшләне. Эсергә яратҡан ирҙәр менән аралашманы, хатта клубҡа ла һирәк, кино ҡарарға ғына сыҡҡыланы. Унан һуң армияға алынды. Тын ҡыҫыуҙан ҡайһы саҡ күгәрер хәлгә еткән атаһы уны оҙатҡанда:

– Ярар, улым. Яҡшы хеҙмәт ит, – тип ҡалды. – Һин ҡайтҡанды әллә күреп була, әллә юҡ.

– Фәруҡша абзый, бына һеҙгә корреспондент алып килдем әле, – тип һөйләнә-һөйләнә тупһа аша атлаған йәш ҡатын күптән түгел генә колхозға Ҡарағош ауылынан килен булып төшөп, партбюро секретары вазифаһында эшләп йөрөгән Фәриҙә ине. – Бөйөк Еңеүҙең 45 йыллығы бит быйыл. Һеҙҙең турала яҙырға килгән.

Секретарь һораулы ҡарашын йорт хужаһына төбәне. Фәруҡша ҡапылғара ни әйтергә белмәй аптырабыраҡ торҙо ла:

– Әйҙә, үтеп ултырығыҙ, – тине, ҡунаҡтарға ҡаршы барып. – Рабиға, ҡунаҡларға сәй әҙерлә инде.

Хәбәрсе урта йәштәрҙәге ир икән. Район гәзите редакцияһында йыш булғаны бар Фәруҡшаның, редактор Ғүмәров менән дә яҡшы таныш. Хатта әшнәләр тиһәң дә була. Әммә был хәбәрсене тәүләп күреүе. Ҡышҡы көндәр яҙға тартыуға ҡарамаҫтан, өҫтөнә йылы тун кейгән, оло, йөнтәҫ шарф ураған. Нәҙек кенә мыйыҡлы был ир, ниндәйҙер ҡыҙыҡһыныуы менән өй эсен байҡай.

– Ҡустым, һине кем тип беләйек? – Фәруҡша уны был шөғөлөнән бүлдерҙе. – “Ленин юлы”нда эшләүселәрҙең бөтәһен дә беләм тигәндәй. Ә мына һине тәүләп күреүем.

– Ҡанзафаров Роберт булам мин, абзый. – Хәбәрсе ниндәйҙер сәсәләк менән йылмайҙы. – Эшләй башлағаныма ике ай ҙа юҡ әле. Ырымбур яҡтарынан килдем мин.

Һөйләшеп киттеләр. Ҡәнзәфәров һорауҙар яуҙырҙы: ҡасан һуғышҡа алындығыҙ, уға тиклем ҡайҙа эшләй инегеҙ, ҡатынығыҙ һуғышҡа нисек оҙатты, ҡайһы фронттарҙа булдығыҙ һ.б. Фәруҡша хәбәрсенең барлыҡ һорауҙарына ла төплө һәм киңерәк яуап бирергә тырышты. Үҙенең хәтере шәплегенә лә аптырабыраҡ ҡуйҙы ул: хәрби подразделениеларҙың номерҙары ла, ҡала һәм ауылдарҙың исемдәре лә – барыһы ла тиерлек хәтерҙә һаҡланған бит. Улар һөйләшкән арала хужабикә самауыр ҡуйып, һикегә сәй әҙерләне.

– Ҡатынығыҙ менән нисә бала үҫтерәһегеҙ? – тип һораны Ҡәнзәфәров, сәй эскән арала. – Улар ҙа һеҙҙең юлды һайланымы?

Блокнотын әллә күпме яҙыуҙар менән тултырып, хәбәрсе ҡайтып китте.

– Еңеү байрамы алдынан район гәзитендә уҡырһығыҙ, – тине ул, йылмайып хушлашып.

Ысынлап та, “Ленин юлы”ның 9 майға арналған сығарылышында “Табылды яугиры” тигән баш менән уның тураһында оло ғына һүрәтләмә баҫылып сыҡты. Хәбәрсенең ҡулынан килгәнсе тырышҡаны һәр юлда, һәр һөйләмдә тиерлек ярылып ята. “Һуғыш башланыу тураһындағы хәбәрҙе Фәруҡша Ниғмәтуллин ярһыу-нәфрәт менән ҡабул итте. Дошмандан үс алырға теләге шул тиклем көслө ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уға бронь бирҙеләр...” Ошондай һөйләмдәр менән сыбарланғайны һүрәтләмә. Хәйер, нимәһенә аптырарға: шулай яҙыу барлыҡ журналистарға ла хас сифат бит.

Әммә ғәжәпкә ҡалдырғаны мөхәббәт, Фәруҡшаның ғаилә ҡороуына ҡағылған урында, имеш. Ул Рабиғаны бер күреүҙә ғашиҡ булған, төнгө йоҡоларында күреп, тамам тынyслығын юғалтҡан һәм үҙенең һөйөүен ҡыҙға еткергән...

– Шыттырған, – тип кенә ҡуйҙы Фәруҡша, гәзитте ҡарсығына һуҙып. – Әйҙә, һин дә уҡып сыҡ. Таныш яугирың белән.

Артабан бер нисә көн Фәруҡша ошо һүрәтләмә, дөрөҫөрәге, уның мөхәббәткә ҡағылған өлөшө йоғонтоһонда йәшәне. Китаптарҙа яҙылғанға, гәзиттә уҡығандарға ул элегерәк тә шик белдереп ҡарай ине, был юлы иһә унда ниндәйҙер ризаһыҙлыҡ тойғоһо үҫте.

“Ҡайҙан алып яҙған уларҙы был Ҡанзафаров? – тип уйланды ул. – Минән бер ни ҙә һорашманы бит. Хәйер, моғайын, мөхәббәткә бирелеүселәр барыһы ла бер төрлө ғашиҡ була, тигән кеүегерәк фекер йөрөткәндер”.

Юҡ шул, юҡ. Ҡайҙа икән ул мөхәббәт тигән нәмә? Бармы ул, ғөмүмән? Фәруҡша ҡайҙалыр уҡығанмы, әллә ишеткәнме һүҙҙәрҙе иҫенә төшөрҙө. Имеш, Хоҙай Тәғәлә ир менән ҡатынды бер бөтөн итеп ярата ла шунан икеһен ике яҡҡа

айырып ебәрә. Шунан бирле кешеләр үҙ яртыһын эҙләй, имеш. Кемдәрҙер таба, бәхетле ғүмер кисерә. Ә таба алмағандары...

Таба алдымы һуң Фәрүҡша үҙенең икенсе яртыһын? Иң тәүҙә уның уйын Биби биләп алды. Һылыу, бер ҙә ғашиҡ булмаҫтайһыҙ ҡыҙ түгел ине ул. Тик, танышыу-ҡауышыуҙар тиҙ булып, бер-береһен һынап өлгөрмәгәйнеләр.

...Бибигөл менән Фәрүҡша Стәрлебашта таныштты. Ул йәйҙе егет, армия хеҙмәтен тултырып ҡайтҡас, район үҙәгенә хәрби иҫәпкә инергә барғайны. Комсомол комитетында осратты ул буласаҡ ҡатынын. Ҡыҙҙы тәү күреүҙә үк күңеленә ниндәйҙер әйтеп аңлата алмаҫлыҡ хистәр килеп тулды. Ҡыҙ ҙа уға күҙенең ҡырыйы менән генә ҡарап алды. Тиҙ генә айырылып китә алманы Фәрүҡша, һүҙ ҡатты. Ҡыҙ ихлас яуапланы һәм улар һөйләшеп китте.

Биби Стәрлебаштан өс-дүрт саҡрымда Стәрле йылғаһы буйындағы Ибраҡай ауылының башҡорт ҡыҙы икән. Былтыр урта мәктәп тамамлаған да ошонда китапханала эшләй башлаған. Тағы ла ике-өс осрашыуҙан һуң, Фәрүҡша уға тәҡдим яһаны, сөнки үҙенең йәше бара ине бит: егерме дүрт тулып, егерме бишкә сыҡты. Ҡыҙ кире ҡаҡманы, шулай тиҙ генә өйләнештеләр ҙә ҡуйҙылар. Айырылышыу ҙа шулай тиҙ булды шул.

Һуңынан аңланы егет: ҡабаланған. Билдәле, армияла ике йыл йөрөп, ҡатын-ҡыҙ заты күрмәгән кеше бит. Табылдылар әйтмешләй, күрҙе лә ҡапланды. Бибиҙең дә тойғоһо етди һәм уйланған булмаған. Хәйер, кем белә: мөхәббәт тигән тойғо мәңгелек тә түгелдер, бәлки. Был фани донъяла туҙмай-иҫкермәй торған нәмә бармы икән? Бибиҙе лә тотош ғәйепләй алмай Фәрүҡша, үҙендә лә бар. Һуғыш сығыр алдынан да йәш ҡатынға иғтибар етешмәне шул. Әлеге лә баяғы, колхоз эше, иртән сығып китеп, кис саҡ ҡайтып тәгәрәйһең. Арып, алманһыҙ булып. Бисә ҡайғыһымы ни. Ә уларҙа ла түҙемлектең сиге бар.

Ә Оксана? Уға эҫенеп китеү ҙә, моғайын, осраҡлы ғына булғандыр. Һуңлап килгән мөхәббәт. Утыҙҙан ары киткәс, ниндәй мөхәббәт булһын инде. Һуғышта ниндәй ҡот осҡос күренештәргә ҡарап, ташҡа әйләнә барған бәғер шундай нескә тойғоларға һәләтле була аламы икән?

Эйе, украин ҡыҙы уға бик нык оҡшағайны. Ундай һылыу һәм күңелдә үҙенә тартып торған ҡатындар бик һирәк була. Оксана үҙе лә Фәрүҡшаға битараф ҡараманы түгелме һуң? Хәйер, шулай тойолған ғыналыр. Шулай булмаһа, ул ҡайтып китер инеме ни? Уның да кисерештәре нисәмә йылдар ир наҙы күрмәү һәм уға һыуһау менән генә үлсәнәлер. Уйҙарының осона сыға алманы Фәрүҡша. Ҡайһылай баш ватһа ла, үҙенсә яуап тапҡан, нимәһелер менән ризалашҡан кеүек булды, ҡайһыһындыр башынан ҡыуҙы.

Ә Рабиға? Рабиғаны яраттымы һуң? Әлбиттә, яратманым, тип өҙөп әйтергә хаҡы юҡ. Шулай уҡ, өҙөлөп һөйҙөм, тип тә әйтә алмайҙыр. Шашып һөйөүҙәр, йоҡоһоҙ төндәр булманы. Хәйер, ниндәй йоҡоһоҙ төндәр тураһында баш вата әле ул? Егеттәй ҡыланып ни. Гонаһына инә алмай, Рабиғаһы уға насар ҡатын булманы. Өҫ-башын таҙа йөрөттө, ашап-эсергә ваҡытында әҙерләне. Өйҙө лә ҡулынан килгәнсе тәрбиәләне. Ә өс бала? Ике ҡыҙ менән улды ла шул Рабиға ҡараманымы ни? Фәрүҡшаның колхоз эшенән башы сыҡмаған мәлдә бар өй-ҡура хәстәре ошо Рабиға елкәһендә булды ла баһа.

Ошоларҙы уйлап, Фәрүҡшаның тамағына төйөр тығылғандай булды. “Эйе, – тине ул, үҙенсә һығымта яһап. – Бисәкәйгә бер генә лә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтмәгәнмен икән. Үкенес”.

Фәрүҡшаның тормошо, әлбиттә, ул үҙе белеп-теркәп барған ваҡиғаларҙан

ғына тормай ине. Ул башына ла килтермәгән ике үтә лә мөһим ваҡиғаны иһә ул бөтөнләй башынан сығарған. 1944 йылдың яҙында Латвия утарҙарының береһендә, ҡарт латыштың өйөндә ҡунаҡ булып ултырыуын, гитарала уйнап йырлашыуҙары ни өсөндөр уның хәтеренән юйылған булып сыҡты.

...Сираттағы еңелсә яраланыуҙан һуң, санитар часта ике-өс көн булып, Фәруҡша үҙе кеүек ике һалдат менән часын ҡыуып китеп бара. Юлдар шул тиклем насар, атлауы ауыр, хәл дә юҡ. Шулай ығыша торғас, алда бер утар күренде. Көн дә кисләп килә, шунда ҡунып сығырға булдылар. Утарға бер генә снаряд та төшмәгән, әйтерһең дә, бынан һуғыш урап үткән.

Уларҙы оҙон буйлы, ҡыҫҡа ғына һаҡал-мыйыҡлы, оло йәштәрҙәге ир ҡаршы алды. Йылмайып һөйләште. Табынды ла мул итеп әҙерләгәйнеләр. Тәү тапҡыр ошо утарҙа Фәруҡша аҡ икмәк күрҙе. Өҫтәлдә сусҡа майы, төрлө йәшелсә, варенье, ҡорт балы ла бар. Хужа яҡшы шарап та сығарҙы. Өҫтәл артында хужабикәнән тыш ике йәш ҡатын да бар ине: ҡыҙҙары икән.

Эсеп-ҡыҙып алғас, йырлаштылар, хатта бейенеләр ҙә. Фәруҡша бейергә төшмәне, башҡортса бер-ике таҡмаҡ әйткән булды. Иптәштәре – украин Михайло менән татар Сиражетдин оҫта ғына бейеүселәр икән. Һөнәрҙәрен күрһәттеләр.

Йоҡларға Фәруҡшаға – ә ул төркөм башлығы, старшина дәрәжәһендә – айырым бүлмәгә йәйҙеләр. Ҡарҙай аҡ простыня, йомшаҡ мендәр. Ул ятыу менән күҙҙәре йомола башлағайны, кемдеңдер һаҡ ҡына битенә ҡағылыуын тойҙо. Һиҫкәнеп, күҙҙәрен асып ебәрһә, хужаның ҡыҙы икән, үҙе эске күлдәктән генә. Уны ҡулынан эләктереп алып, Фәруҡша үҙенә тартты...

Иртәгәһен һалдаттар тағы юлға сыҡты. Хужа юлға уларға байтаҡ аҙыҡ биреп ебәрҙе. Ҡыҙ – уның исемен Фәруҡша хәтерләмәй ҙә – оялып, тәҙрә аша ғына ҡарап ҡалды. Ҡайҙан хәтерләһен инде, фронт юлдарында бындай осраҡлы ғишыҡтар аҙ булманы бит.

Бер айҙан Аурике әсәһенә үҙенең ауырға ҡалғанлығын әйтте. Йәш түгел инде ул, утыҙҙы ҡыуалай. Ирен Герман армияһына алғайнылар, ҡайҙалыр эске Рәсәйҙә үлеп ҡалды. Ҡарт ата менән әсә кәңәшләштеләр ҙә баланы таптырырға булдылар.

– Әллә башҡаса бала тыуҙыра алаһың, әллә юҡ. Үҙеңә иптәш, таяныс булыр, – тинеләр. Ҡыҙ бала сәләмәт, ағзалары теүәл булып тыуҙы. Уға Марта тип исем ҡуштылар.

Оксана иһә ул тапты. Ҡуңыр йөҙлө, ҡара сәсле, әммә әсәһе кеүек үк зәңгәр күҙле малай булып үҫте Остап. Ләкин әсә наҙын татырға яҙмағайны уға. Бандерасылар ҡышҡы һалҡын төндәрҙең береһендә үгәй атаһын да, әсәһен дә бысаҡ менән сәнсеп үлтерҙеләр. Сабый осраҡлы ғына иҫән ҡалды. Бандерасылар ҡараңғыла уны шәйләмәне лә. Остапты ҡалаға илтеп, балалар йортона тапшырҙылар.

Улының хеҙмәте тамамланғанын көтөп ала алды Фәруҡша. Әммә бик нығ бөтөрөнгәйне ул. Кәүҙәһе нисектер бәләкәйләнеп ҡалғайны. Һуғыш йылдарында кискән боҙло һыуҙар, ҡышҡы һалҡындарҙа туңып ирегән тубыҡтар гөбөләй шешеп, түҙҙермәй һыҙланы. Төндәрен йоҡо эләкмәй. Көскә таң аттыра Фәруҡша. Йөрөп сыға. Йөрөһә, аяҡтарҙың һыҙлауы баҫыла, бик борсомай. Әммә ауырыу килеш нисек төнө буйы аяғөҫтө йөрөмәк кәрәк.

Ошолай ғазап сигеүҙәр ике-өс айға барҙы. Һыҙланыуҙары алҡымына килеп тығылғанда Фәруҡша, үҙенең коммунист икәнлеген дә онотоп:

– Йә, Хоҙай! Бармы һин? Булһаң, ҡотҡар мине был ғазаптарҙан! – тип ҡысҡырҙы.

Ирен төндәр буйы йәлләп илап-һыҡтап сыҡҡан Рабиғаһы, түҙмәй:

– Фәруҡша! Алай аҡылһыҙ һүҙләр һөйләмә. Әжәл килмәй, бер кем дә үлмәй. Аны һорап алалармы ней? – тип йыуатырға тырышты. Иренең тубыҡ быуындарына дарыу һөрттө, ыуғыланы.

1975 йылдың тәүге көнөн ана шулай интегеп ҡаршыланы элекке саперҙар ротаһы старшинаһы, рота парторгы Фәруҡша Ниғмәтуллин. Һиҙә ине ул: йәшәйһе көндәр һанаулы ҡалған. Ҡотола ул оҙаҡламай был ғазаптарҙан. Балалары хәҙер үҫте инде, һәр ҡайһыһы үҙен үҙе ҡарарлыҡ. Йәл, береһен дә уҡытыусы итә алманы. Хатта ҡыҙҙары ла ул теләмәгән һөнәр һайланы. Әхмәтша, бәлки, көҙгә берәй ергә уҡырға керер. Әлегә өмөт бар. Тик ауыл хужалығы институты тип ныҡыша бит әле. Атаһының тиреҫтә ҡаҙыныуы етмәгән.

Ғазап-һыҙланыуҙар менән ғинуар ҙа тамамланып килә. Һауа торошо шундай уңайлы, бер-ике көн ҡар яуһа, артынан аяҙытып ебәреп, һалҡын төшә. Шундай салт аяҙ көндәрҙең береһе осланып килгәндә, Фәруҡшаның тәне ҡапыл еңеләйеп киткән кеүек булды. Һикелә бер үҙе ята ине ул, һөйләшкеһе килеп китте.

– Рабиға! – тип өндәште ул. – Бисәкәй! – Ләкин ҡарсығы, күрәһең, тышҡа сыҡҡан, тауыш бирмәне. Ауырлыҡ менән урынынан ҡалҡынып, Фәруҡша, стеналарға тотона-тотона, ишек алдына сыҡты. Мал ҡарап йөрөгән Рабиға эске кейем менән генә һалҡынға сыҡҡан ирен күреп, хәле бөтөп йүгереп килде:

– Ҡарт! Нишләп торҙоң? Әйҙә, кереп ят. Яңылышып-фәлән итеп киткәнһең, ахыры, – тине.

– Минең хәл арыуланды бит, ҡарсыҡ. – Фәруҡша йылмайған кеүек итте. – Әйҙә, инеп һөйләшеп утырайыҡ. Сәй ҡуйып ебәр.

Ул өйгә үҙ аяғы менән атлап инде. Байтаҡ ваҡыт, күңелдәре булғансы, эстәре бушағансы һөйләшеп сәй эстеләр. Күптән шулай һөйләшкәндәре юҡ ине. Унан һуң Фәруҡша түпкө яҡҡа сығып, урынына ятты. Оҙаҡ ятманы ул, ҡапыл ниҙер алҡымынан алған кеүек булды. Тауыш бирергә иткәйне, тыны етмәне. Ул йәненең үҙен ташлап киткәнен һиҙҙе. Ҡапыл тәне еңеләйеп киткәндәй булды. Шундай еңеләйҙе, әйтерһең, нисәмә айҙар ғазаплаған ауыр йөктө өҫтөнән алып ташланылар.

– Ҡарт! – Түпкө яҡҡа ҡартының хәлен белергә ингән Рабиғаның тауышын ул башҡаса ишетмәне.

Фәруҡшаны һуңғы юлға оҙатырға райком вәкиле булып милиция начальнигы Хәмит Исмәғилев килде. Ҡояш байып барғанда, күмәк халыҡ ҡатнашлығында, уны ер ҡуйынына бирҙеләр. Ҡышҡы ҡояш үҙенең һүрән яҡтылығын һуңғы ҡат һипте лә Өй тауы артына йәшенде. Халыҡ аҡрынлап зыяраттан сыға башланы. Тик, бер кеше генә уларға эйәрергә ашыҡманы. Тәүҙә ул яңы ҡалҡҡан тупраҡ өйөмөнә оҙаҡ ҡына текләп торҙо. Унан ҡояш байыған яҡҡа күҙ ташлап, сығыр яҡҡа атланы. Уның артынан һуҙылған күләгә зыяратты аша сығып, Яңғыҙ сағыл тарафтарына тиклем һуҙылды.

Ниғмәтуллиндар нәҫелен дауам итеүсе Әхмәтша ине ул.

Флүрә НИЗАМОВА

## *Тел*

*Урыҫ теле бай ул, тиһең.*
*Ярлымы минең телем?*
*Уй-хистәрҙе аңлатырға*
*Етмәйме телдә һүҙем?*

*Ниндәй һүҙгә тәржемә юҡ,*
*Ниндәй һүҙгә өн етмәй?*
*Урыҫ теле байыраҡ, тип*
*Кемдәр генә кәмһетмәй.*

*Бармы икән урыҫсаһы*
*Аһәң, моң тигән һүҙҙең?*
*Тәржемәһен табып ҡара*
*Ырыҫ, ҡот, хозур, теҙҙең?*

*«Зәр ҡәҙерен зәрҡән белер»—*
*Ауҙарып әйтеп ҡара.*
*«Зәр» тигән һүҙ яу астырһа,*
*«Зәрҡән»е һалыр яра.*

*Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе*
*Һуңғы тарпан, һартаймы?*
*Телем ярлы тип бөлөнгән*
*Телдән тапҡан тартаймы?*

---

*Низамова Флүрә (1951) Баймаҡ районының Билал ауылында тыуған. Темәс урта мәктәбен, БДУ-ның филология факультетын тамамлай. 1977 йылдан тормошон Әбйәлил районы менән бәйләй — Хәлил урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта. Ике бала әсәһе.*

*Үҙ телеңде кәмһетеүҙән*
*Башҡа һине тиң күрәме?*
*Үҙ халҡыңды кәмләйһең, тип,*
*Эргәһенән түр бирәме?*

*Бөлөнгәндән үс алмайҙар,*
*Ҡоймайҙар уның ҡонон.*
*Бөлөнгәнде бөлдөрәләр*
*Тартҡылап телен-болон!..*

*Пушкин теле бай, әлбиттә,*
*Мостайҙыҡы кәм түгел.*
*Ғүмер буйы аралашып,*
*Хәл барынса аңлашып,*

*Бер-береһенән көс алған*
*Телдәр аша айҡайым*
*Илем, ерем, донъя, күген —*
*Бөтә ғәләмде бөгөн.*

## Тутыйғош бәхете

*Тутыйғош шундайын бәхетле.*
*Ситлектә тапты ул бәхетте.*
*Иҫәрҙәр генә ирек һөйә —*
*Ситлектә тапты ул тәхетте.*

*Үтә тиҙ татыны ул тәмен*
*Алйотто аҡыллы тиеүҙең.*
*Бары тик хужаса һөйләүҙең,*
*Бары тик хужаға бейеүҙең.*

*Тоғро тутыйғоштоң хеҙмәте —*
*Хакимы сөскөрһә, сөскөрөү,*
*Ул юҡта һөйләнгән һүҙҙәрҙе*
*Һүҙмә-һүҙ, түкмәйсә еткереү.*

*Ҡушыла уға бит ни бары*
*Түрәсә уйларға, һөйләргә;*
*Түрәһе башлаған йөмләне*
*Йөпләргә, йөйләргә, төйнәргә.*

Күреп тора ул эйәһенең
Ҡырындан да ҡырын эштәрен;
Түбән йән һис тә үртәлмәйҙер —
Исмаһам, ҡыҫмай ҙа тештәрен.

Дөрөҫөн күрһә лә — күрмәмеш,
Сөнки ситлек уға бик яҡын.
Буш килгән ризыҡтан-ниғмәттән
Нисек үҙе теләп баш тартһын.

Ел-ямғырһыҙ, ыҙаларһыҙ тормош —
Данмы, малмы, нәйәт шөғөлмө?
Тутыйғош шикелле бәндәләр
Бигерәк күбәйә түгелме?!

***

Сын-сынаяҡ сылтыраны,
Сатнап китте, ватылды.
Шул мәл тертләп, минең йөрәк
Йондоҙҙарға атылды.

Шунан алып минең күңел
Ерҙә түгел, күктәрҙә.
Әйҙә, һин дә минең янға,
Бурысыңды үткәр ҙә.

Рәнйегәндәр күккә ашыр
Әҙәмдәр тарафынан.
Бик һағынһаң, эҙлә мине
Йондоҙҙар араһынан.

Фани донъя бәндәләргә
Тик әүрәткес, сын алдаҡ.
Һинең менән булған мәлем
Сыңғыр тәңкә, сың балдаҡ.

Күктәрҙә йондоҙ атылһа,
Минең сәләмем булыр.
Көмбәҙгә берәй бағырға,
Бәлки, әмәлең булыр?

Наилә ТИМЕРХАНОВА

# ӘЙТӘМ ҺҮҘ – ТҮҘҺӘҢ ТҮҘ!

*Аҡыл камиллаша — донъя бәхилләшә.*
*Аяғы тартмай — атлай, таяғы һынһа — туҡтай.*
*Аҡыл тешкә түгел, эшкә төҫ.*
*Аҡ араҡы йөҙ ҡарайта.*
*Аш бүлмәһе... киленгә — эш бүлмәһе.*
*Арағы кергәндең бите ҡара.*
*Абруйлының ҡабырғаһына аҡса менән төртһәң, абруйың үҫер.*
*Алдашҡандан юл һорама — нығыраҡ аҙашырһың.*
*Ахмаҡ ғалим — илгә залим.*
*Абынған ерҙә аң бул.*
*Аҡылыңды ат ише егеп, ишәк булма.*
*Алыпһатар... алып ҡынамы? Арттырып һатар.*
*Араны уй, быуаны һыу йыра.*

*Бәреп әйткән һүҙ бәреп төшөрөлмәй.*
*Бала саҡ — һүнмәҫ усаҡ.*
*Бүләк тә түләп алына.*
*Белешмә алғанда телләшмәйҙәр.*
*Бай көрәйә, ярлы бөкөрәйә.*
*Баҡсала аҡса ер аҫтында ята.*

*Гонорар... гонор менән юлланмай.*
*Галуш — ихата араһында табыш.*
*Ғашиҡтың ҡашығы ял итә.*

*Донъя... ҡыуһаң да ҡала.*
*Дингә ҡоҙалап килмәйҙәр, доғалап киләләр.*

*Йүләр ҡыҙылға ҡыҙыҡһа, эскесе — ҡыҙылға ла, аҡҡа ла.*

*Ҡөмөшкә итәк аҫтынан һатыла.*
*Ҡөмөшкә... ҡыумайса төшмәй (тамсыламай).*
*Ҡөрәк — ялҡауға өрәк.*
*Ҡүмер — көл өҫтөндә, ғүмер — ҡыл өҫтөндә.*
*Ҡоньяктың емеше лә, сығышы ла коньяктан.*
*Ҡорректор хатаһы — автор хафаһы.*
*Ҡазинолағы хазина рулетка ярҙамында үлсәнә.*

*Ҡыйыҡ уй мыйыҡ аҫтынан көлдөрә.*
*Ҡыҙҙы урлау — үҙенә күрә ҙурлау ул.*
*Ҡаҙ яҙын аҙа.*
*Ҡара ыуылдырыҡ — аҡ ҡатлам ризығы.*
*Ҡарттар йорто... артыҡ ҡарттар өсөнмө?*

---

*Наилә Тимерханова Туймазы ҡалаһында йәшәй. Һөнәре буйынса рәссам, медицина быялаһы заводында эшләй. Шиғырҙар, афоризмдар ижад итә.*

*Ҡасып китһәң дә, сәсеп кит, тик уңыш артырҙай ергә.*
*Ҡанға тоҙ ни, шәкәр ни, икеһе лә сир — артыҡҡа китһә.*
*Ҡыҙ ҡыҙылға ҡыҙыға, ҡатын — алтынға.*
*Ҡунаҡты хайран ҡалдырғың килһә, айран менән ҡаршыла.*
*Ҡул араһына аяҡ үҫкәсерәк керелә.*

*Малтабарҙа балта бар.*
*Маҡтансыҡтың һүҙе буталсыҡ.*
*Маҡсатҡа аҡһаҡ та еткән.*

*Низаъ та, никах та ике арала тыуа.*
*Низаътың аҙағы — тоҙаҡ.*

*ОМОН менән яҡланған ҡанун — яман.*
*Оҙон тост аш һыуыта.*

*Пеләш төшөндә бетләй, имеш.*

*Сибәр... чинһыҙ ҙа еңәр.*
*Самаһыҙ аң саң ҡаға.*

*Һаҙҙан баҙ эҙләмә.*
*Һәйбәткә ғәйбәт теймәй.*

*Ун туғыҙҙа аҡыл да утыҙ туғыҙлы.*
*Уңған ҡатындан онға ла тынғылыҡ юҡ.*
*Уйнашсы оят еренә, һуғышсы үҙ еренә таяна.*
*Уҡылмаған китап «мода»ла.*
*Ут күршегә һыуға ла керелә.*
*Уйнап ҡосҡандың ҡосағы — бысаҡ.*

*Фекер алдан, хәтер арттан йөрөй.*

*Ырым ҡырын ҡарата, ти.*

*Этлек тә ситлеккә этә.*
*Эше бешмәгән утта яна.*

*Хәтәр һүҙ — хәтерле күҙ.*

*Шатлыҡҡа ат та уйнаҡлай.*

*Өрөп торһаң, мөхәббәт тә һүнә.*
*Әрнеп китһәң дә, эшең көлөп ҡалһын.*

*Юл тәртибе шундай: мент документ юллай.*

*Яртыға һатылған да әсәнән тыуған.*
*Ярышта ялҡау ҡатнашмай.*
*Яҙмаҫтайға ҡул һуҙма.*
*Яман эштең дә, яҡшы эштең дә осона шешә сыға.*
*Ялғансы ла... уйлап табыусы.*
*Яңы дуҫ тиҙ иҫкереүсән.*

Кинйә АБАЙ

# ҠОШТАР ОСОП ЕТМӘҪ ЕРҘӘ...

## *Башҡорт теле*

*Башҡорт теле — йәйҙең еле,*
*Яҙҙың наҙы, көҙ һағышы.*
*Ыжғыр ҡыштың аҡ нағышы,*
*Һәр бер өнө — эй ҡәҙерле!*
*Телемдә тау мәңгелеге,*
*Иҙелемдең тәрәнлеге,*
*Сал далалар иркенлеге,*
*Башҡортомдоң ғәййәрлеге.*

## *Яңғыҙлыҡ*

*Ҡөньяҡ илдә көн итһәм дә,*
*Йәнем һиҙмәй йылылыҡ,*
*Ҡояш — ҡайнар, ҡыҙынаһың —*
*Тик күңелдә йылы юҡ.*
*Ҡояштың ни ғәйебе бар?!*
*Үпкә уға ҡағылмай.*
*Яңғыҙлыҡ бар, дуҫтарым юҡ —*
*Шуға йәнем йылынмай.*

## *Һағыныу*

*Зәңгәр күктә ҡоштар оса,—*
*диңгеҙҙәр аша юлы.*
*Улар менән ҡайтыр инем —*
*һағыныуҙарым тулы.*
*Күрер инем Уралтауҙы,*
*сумыр инем һыуына,*
*Аҡ ҡайындар араһында*
*талыр инем уйыма.*
*Ҡанатланыр ине йәнем*
*изге ерҙе күреүҙән;*
*Ил ҡартының: «Һаумы, улым»,—*
*тиеп күрешеүенән.*
*Ҡоштоң ҡошо, тыуған яҡ тип,*
*юлдарын таба икән.*
*Беҙ, бәндәләр, донъя ҡыуып*
*яңылышмайбыҙ микән?!*

**Италия.**

---

*Италиянан хат килеп төштө. Реджио Калабрия ҡалаһынан милләттәшебеҙ шиғырҙар һалып ебәргән. Үҙе хаҡында — ләм-мим. Хәйер, өс кенә шиғыры аша ла авторҙың тыуған яғын өҙөлөп һағыныуы, телде онотмай ҡәҙерләүе һиҙелә.*

*Сит тарафтарҙа яҡты хәтирәләрең таяныс булһын, яҡташ!*

# *Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

## ӘҘӘБИӘТ ТОРМОШ ДӘРЕСЛЕГЕМЕ БӨГӨН?

*Кешелек – экологик, иҡтисади, ижтимағи, рухи катаклизмдар аша киләсәккә юл яра. Төптәнерәк уйлаһаҡ, бөгөнгө көрсөк тигәнебеҙҙең тамырҙарын, ниндәйҙер элементтарын кешелек үҫешендәге телһә ҡайһы дәүерендә лә табырға мөмкин. Тикшеренеүселәргә уларҙың күбеһе кешенең тәбиғәте, кешелек сифаттары, рух камәле менән бәйле икәнлеге, көрсөккә тап ана шул рухи бөтөнлөк булмауы арҡаһында килеп юлығыуыбыҙ асыҡланыр ине. Көндәлек тормоштан, үткәндән һәр осраҡта ла тейешенсә һабаҡ алабыҙ, тупланған тәжрибәне кәрәгенсә файҙалана беләбеҙ тип әйтеүе ҡыйын. Әгәр ҙә прогресты фәнни-техник үҫешкә генә ҡайтарып ҡалдырмаһаҡ, уны тәү сиратта рухиәт үҫеше, әхләҡи камиллыҡ менән бәйләһәк, уйланаһы, борсолаһы күренештәр бихисап. Һәр ҡырҡылған башы урынына йәнә әллә нисәмәһе үҫкән ун ике башлы аждаһанан да былайыраҡ коррупция менән ни ҡылырға? (Сицилия, Италияның 250 йыл эсендә үткән юлын Рәсәй мафияһы 25 йылда үтеп, үҙенә хәҙер махсус кадрҙарҙы юғары уҡыу йорттарында әҙерләй!) Туғыҙынсы вал булып өҫкә менеп килгән глобализацияһына нисек ҡаршы торорға? Башлыса үҙләштереүгә генә йөҙ тотҡан йәмғиәттә (потребительское общество) ни эшләргә, нисек йәшәргә? Йыш ҡына: “Кешелек ҡайһылыр бер тарихи дәүерҙә хата йүнәлештән китмәнеме икән?” – тигән хафалы шиктәр ҙә күңелде тырнай...*

*Әҙәбиәт ана шул хаҡта уйландырырға тейеш бит. Һүҙ ҙә юҡ – алдынғы әҙәбиәт, тотош кешелеккә хеҙмәт итеүсе әҙәбиәт матурлыҡты, бигерәк тә кешелек сифаттарының бөйөклөгөн, камиллыҡҡа ынтылышын аса, кешеләрсә мөнәсәбәттәрҙең һүнләнгыс булыуына инандыра. Йәғни ниндәй осор, ниндәй ижтимағи-иҡтисади системаныҡы, ниндәй милләттеке булыуына ҡарамаҫтан, ул кешенең күңел матурлығын данлауҙы төп маҡсат итеп ҡуя. Изгелек менән яуызлыҡтың мәңгелек көрәшен оптимистик рухта тасуирлай. Ошо юҫыҡта бөйөк халыҡтың ижади фантазияһы, образлы фекерләүе, зирәк аҡылы тыуҙырған гениаль образ – Урал батырҙың үлеме генә лә үлемһеҙлеккә дан йырлау булып ҡабул ителә.*

*Башҡортостан яҙыусыларының алдағы йыл яҙ айҙарында үтәсәк сираттағы съезы алдынан “Ағиҙел” бөгөнгө әҙәбиәтебеҙ хаҡында һөйләшеү башлай. Ни хәлдә бөгөн рухи көҙгөбөҙ, образлы һүҙебеҙ, ҡанатлы телебеҙ? Заман талаптарына яуап бирәме? Алдынғы ҡарашлы уҡыусылар ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлекме? Традициялар, күтәрелгән бейеклектәр һаҡланамы, дәүергә ярашлы үҫтереләме? Яңы йөкмәтке, яңы форма, яңыса фекерләү, алға әйҙәрлек, өлгө булырлыҡ геройҙар бармы?*

*Әлбиттә, һүҙ менән эш араһы – ер менән күк самаһы. Шулай ҙа ысынбарлыҡты (ерҙәге хәлдәрҙе осар ҡош бейеклегенән – йәғни образлы һүҙ менән йә иһә ер юлдашы приборҙары аша – әҙәби тәнҡит) нисек бар – шулай сағылдыра алһаҡ, изге эштең башы булыр ине ул.*

*Хөрмәтле ҡәләмдәштәр! Әйҙәгеҙ, әҙәбиәтте, Лев Толстой аңлағанса, таҙарыныу (катарсис) урыны тип күҙаллап, бөгөнгөһө хәлебеҙ хаҡында фекер алышайыҡ.*

*Тәүге һүҙ академик Ғайса Хөсәйенов менән Фәнил Күзбәковҡа.*

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Милләтте милләт дәрәжәһендә тотоусы, тиңдәр араһында тиң итеп күтәреүсе мәсьәләләр араһында һәр осорҙа ла актуаллеген юғалтмаусы, һис бер ҡасан да көн ҡаҙағынан төшмәүсе күренеш бар: ул – милли рух кимәле. Кешелек тарихын өйрәнеү күрһәтеүенсә, рухи яҡтан ныҡлы, һау-сәләмәт милләт кенә, һан яғынан күпме булыуына ҡарамаҫтан, төрлө катаклизмдарға, ижтимағи-иҡтисади һәләкәттәргә бирешә һалып бармай, иң сетерекле, иң ҡатмарлы проблемалар ҙа – иртәме-һуңмы – барыбер хәл ителәә.

Милли рух кимәле иһә, тәү сиратта, телдә, һүҙҙә сағылыш таба. Шуғалыр ҙа һүҙ маһирлығы, образлы тел ҡан замандарҙан алып бик юғары баһаланған. Әле лә шулай. Башлы ил хужалары телдең ниндәй көскә эйә булыуын яҡшы аңлап эш итә.

Тап әҙәбиәт, сәнғәт буйынса кешелектең рухи бейеклек кимәлен асыҡлап булалыр. Тимәк, айырым милләттәрҙең бөйөклөгөн дә әҙәбиәтенә ҡарап билдәләргә (нарыҡларға) мөмкин. Әлбиттә, халыҡ тиклем халыҡ – бик ҡатмарлы, ҡапма–ҡаршылыҡлы күренеш. Уны ябайлаштырырға һис кенә лә ярамай. Әйтәйек, талант эйәһе, билдәле милләт вәкиле булараҡ, уның солғанышында формалаша, үҫә, нығына, алдынғы ҡарашлы ағзаһы ролендә халҡын алға әйҙәй башлай. Мәжит Ғафуриҙың был хаҡта нисек әйткәне яҡшы билдәле:

> *Бер аҙым алъа баҫам да*
> *Әйләнәм мин артыма,*
> *Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,*
> *Күҙ һаламын халҡыма...*

Әҙип иңендә рухи фронт «авангардында юл асып барыу» бурысы ята. Бер үк мәлдә авангардтағыларҙы ана нисек иҫкәрткәйне Буранбай:

> *Авангардта барһаң әгәр юл асып,*
> *Артҡа ҡара, –*
> *ҡалъандарың*
> *Бөтмәгәндәрме ҡасып?*

Йәғни күпселек йә битарафлыҡ күрһәтеүе, йә байраҡсыны бөтөнләй аңламауы ла бар. Бына ошондай конкрет шәхескә мөнәсәбәттә лә милләттең, халыҡтың аң кимәле, рухи бейеклеге баһаланасаҡ. Был мөнәсәбәт, шулай итеп, үҙе критерийға, үлсәмгә әүерелә.

Күренеүенсә, рухиәттә бар милли үҙенсәлек, бар дөйөм кешелек өсөн уртаҡ сифат-һыҙаттар. Талант эйәһе, ғәҙәттә, уларҙы тәбиғи берләштерә, тығыҙ үреп бирә. Халыҡтарҙың бер-береһен аңлай алыуы (аңларға теләүе!), бер-береһен хөрмәт итеп, тел-лөғәт алышыуы үҙ-ара асыҡ күңел, ҡуйыныңа таш йәшермәй, үҙеңдең проблемаларыңды улар иҫәбенә хәл итеүҙе маҡсат итмәй, йылы ҡулыңды һәр саҡ дуҫтарса ҡыҫышыу өсөн генә һуҙып килә алыуҙа ла бит. Бына Сыңғыҙ Айытматов. Бер уйлаһаң, уның ҡырғыҙлығы онотола, йәғни милләте ул тиклем үк мөһим түгел: дөйөм кешелек өсөн көнүҙәк булған проблемалар күтәрә, кешене кеше итеүсе сифаттарҙы ҡалҡытып күрһәтә... Икенсе яҡлап ҡараһаң, ҡырғыҙҙы яраттыра, яҡын итә, хөрмәт, ихтирам тойғоһо тыуҙыра. Еҙегәй, мәҫәлән («Быуаттан да оҙон көн»). Ә Мөхтәр Әүәзов? Уның «Абай»ына торошло, энциклопедик ҡоласлы, милли колоритлы эпопея бармы беҙҙә? Әлбиттә, бындай сағыштырыуҙар юлынан китһәк, юҡтан күбе беҙҙә икән ул, тип аптырап та ҡалыуыбыҙ ихтимал. Шуға булғанын тәүҙә тәғәйен баһаларға өйрәнергә кәрәктер. XX

быуат башы башҡорт донъяһын ҡайһылай ылыҡтырғыс та, мауыҡтырғыс та тасуирланы Һәҙиә Дәүләтшина менән Зәйнәб Биишева. Төрки донъяһында ҡатын-ҡыҙҙар араһынан улар менән йәнәш ҡуйырҙай әҙибәне табыуы ла ҡыйын. Йәнәшәлек тигәндән, уҙған быуаттарҙың 30-сы йылдар әҙәбиәтен барлағанда Дауыт Юлтыйҙың «Ҡан» романын Анри Барбюстың (1873–1935) "Ут"ы менән сағыштырып булыр ине. Мостай Кәримдең Әжмәғоло иһә ("Ҡыҙ урлау») Ромен Ролландың (1866–1944) Кола Брюньонынан кәм түгел, ә Тәңкәбикәһе донъя әҙәбиәтенең иң юғары үлсәмдәренә ҡуйырлыҡ.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ:**

«Ағиҙел» ниәтләгән әлеге һөйләшеү, бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙең, ғөмүмән, рухиәтебеҙҙең торошона, бурыстарына бәйле фекер алышыу матур традицияға, дауамлы йолаға әйләнеп китһә икәнсе.

Әйҙәгеҙ, хәҙерге урыҫ, Көнбайыш Европа, Америка әҙәбиәттәре миҫалына мөрәжәғәт итеп, туған әҙәбиәтебеҙҙең бөгөнгө хәлен самалап ҡарайыҡ, алдынғы әҙәбиәттәр менән сағыштырайыҡ.

Мәскәүҙең "Наука" нәшриәте 2005 йылда "Литература народов России. XX век. Словарь" тигән китап сығарғайны. Ул Рәсәй Фәндәр академияһының А.М. Горький исемендәге Бөтә Донъя әҙәбиәте институты тарафынан әҙерләнгәйне. Унда йәмғеһе 48 Рәсәй халыҡтары әҙәбиәте тураһында ҡыҫҡаса дөйөм мәғлүмәт, һәр милли әҙәбиәттән айырым күренекле әҙиптәр биографияһына, ижадына йыйнаҡ ҡына баһа бирелгән. Башҡорт әҙәбиәте Ш.Бабич, Р. Фәхретдинов, Д.Юлтый, Р.Ниғмәти, Ғ.Хәйри, Һ.Дәүләтшина, З.Биишева, С.Агиш, М. Буранғолов, Б.Бикбай, Ә.Бикчәнтәев, С.Ҡудаш, М.Кәрим, Н.Нәжми, Ғ.Хөсәйенов, Р.Бикбаевтар аша күҙаллана.

СССР иле тарҡалып, элекке союздаш республикалар үҙ аллы дәүләттәргә әйләнгәс, Рәсәй Федерацияһында ҡалған автономиялы республикалар асылда союздаш республика хоҡуғын алды. Тимәк, Рәсәй Федерацияһы ҡарамағындағы үҙәк журналдарҙа, Мәскәү нәшриәттәрендә әүҙем ҡатнашыу, китаптар сығарыу өсөн киң мөмкинлектәр ҙә асылды. Бынан беҙгә оҫта файҙалана белеү генә шарт.

Рәсәй аренаһына сығыу юлында Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Әнүәр Бикчәнтәев, Нәжиб Асанбаевтарҙың киң билдәле яҙыусылар, атаҡлы шағирҙар менән ижади дуҫлығы ла ыңғай роль уйнаны. Үҙҙәренең абруйы ла юғары ине. Бер саҡ Мәскәү янындағы Переделкино ижад йортонда булғанда Сыңғыҙ Айытматов, Ҡайсын Кулиев, Мостай Кәрим, Әмирхан Еники, Назар Нәжми тышта әңгәмәләшеп торғанды һис онотмайым. Ниндәйҙер ижади бәхәстең осона сыға алманылар ҙа, бер-береһенә ҡарашҡандан һуң, Мостайға төбәлделәр: «Һинең авторитетлы яуабыңды көтәбеҙ...» Ышаныстарын аҡланы Мостай – ярым мәҡәл, ярым көләмәс рәүешендә әйтте лә һалды тапҡыр һүҙен.

Икенсе бер осорҙа, шул уҡ Переделкинола ниндәйҙер йомошом менән Мостай Кәримдең иркен бүлмәһенә барып индем. Эш өҫтәленең бер ҡырында ятҡан ҡалын китапҡа күҙем төштө. Немец классигы Томас Манндың бер томлығы ине. Һорай ҡуйҙым: «Мостай ағай, шиғырҙар йә поэма яҙаһы урында әллә ҡасанғы Томас Манн романдарын уҡыйһығыҙмы?» – «Томас Манндың стиле, характерҙарҙы биреү алымы ҡыҙыҡһындыра», – тине лә шулар хаҡында һөйләп китте аҡһаҡал әҙип.

Һәр күренекле яҙыусы – үҙе бер оло мәктәп. Һәр әҫәреңә ярашлы стиль алымын таба белеү – үҙе бер оҫталыҡ. Ижади стиль поэтикаһы хаҡында

уйланып, аҙаҡ уны «Башҡорт әҙәбиәтенең поэтикаһы» китабының беренсе киҫәгендә тарихи һәм теоретик планда, башҡорт әҙәбиәте миҫалында нигеҙләргә тырыштым.

Күренеүенсә, Рәсәй киңлегенә сығыу өсөн юғары кимәл дә булырға тейеш. Үҙебеҙгә хаҡ баһаны ҡуя белһәк, шуны күрербеҙ: ижади уңыштарыбыҙ бар барлыҡҡа, тик хәҙерге урыҫ әҙәбиәте ҡаҙаныштары, художестволы кимәле менән сағыштырғанда бөгөнгө башҡорт әҙәбиәте шаҡтай ҡайтыш.

Хәҙерге урыҫ әҙәбиәте бөтә донъя, айырыуса көнбайыш әҙәбиәттәре өлгөһөндә заманса яңырыш, модернистик йүнәлештәр буйынса етди үҫеш-үҙгәрештәр кисерә. Туғандаш татар әҙәбиәтендә лә яңы заман рухы, ижади эҙләнеүҙәр, төрлө йүнәлештәр буйынса табыштар бар. Стиль йәһәтенән дә үҫеш-яңырыштар күҙәтелә. Уларҙа детектив әҙәбиәт йылдам үҫешә, фәнни фантастика, дини йүнәлештә өлгөләр бар. Ә беҙ үткән быуаттағы традицион ижад кимәлендә ҡала киләбеҙ. Әйтерһең, олоғара таш йорттар янында үҙ тирмәләребеҙҙе ҡороп, шунда ашап-эсеп, бары ҡурай моңон тыңлап, үҙ алдыбыҙға ғына йәшәп ятҡан булабыҙ, боронғо көйҙәрҙе һыҙғыртабыҙ, баянға аҙыраҡ тотонабыҙ, пианиноға ҡағылмайбыҙ, симфоник оркестр ҡорамалдарын бөтөнләй белмәйбеҙ тиерлек... Ҡайҙа инде авангардизм, интеллектуализм, модернизм тураһында уйланыуҙар, тәжрибә яһап ҡарауҙар. Ә былдай эҙләнеүҙәрһеҙ нисек заманса бестселлерҙар, интеллектуаль драмалар, фәнни фантастика, детектив әҫәрҙәр тыуһын?!. Быноң бер сәбәбен мин прозаиктарыбыҙ һәм шағирҙарыбыҙҙың иң тәүҙә үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнауҙарында, донъя әҙәбиәте ҡаҙаныштарына иғтибарһыҙ булыуҙарында күрәм. Шуға ижади, мәҙәни кимәлдәре түбән, тип иҫәпләйем.

Үткән быуаттың 20-се йылдары уртаһында, мәҙәни, әҙәби күтәрелеш әле яңы ғына тернәкләнеп килгәндә, шағир Батыр Вәлит бер шиғырында «Халҡыма хаттар яҙам, ә халҡым наҙан» тип бошоноуын белдергәйне. Был шиғыр юлдарын хәҙерге заманыбыҙға күсереп әйткәндә, «Әҫәр яҙам, үҙем наҙан» тиергә тура килер ине.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Рәшит ағай Солтангәрәевтың шундай фекерҙе йыш ҡына ҡабатлауы хәтерҙә: әҙиптәребеҙҙең дөйөм мәҙәни-интеллектуаль кимәле уҡыусыларыбыҙҙыҡынан күпкә ҡайтыш. Бына ошо рухи-мәҙәни ярлылыҡҡа матди фәҡирлекте лә өҫтәп ебәрһәк, хәлебеҙ аңлашылғандай һымаҡ. Бит күптәребеҙ власть әһелдәренең һый өҫтәленән ырғытҡан һөйәкте мөнйөү менән генә лә хушһынырға риза.

Көнбайыш әҙәбиәтенән генә түгел, көнсығыштыҡынан да, ғөмүмән, донъя әҙәбиәтенән хәбәрҙар булыу мотлаҡ, әлбиттә. Тик был үҙмаҡсат түгел. Беҙҙе белмәйҙәр, танымайҙар, һанламайҙар, тип түгел, ә, беҙ башҡаларҙы белмәйбеҙ, тип әсенеү урынлыраҡтыр. Башҡаларҙы белеү иһә, тәү сиратта, үҙебеҙҙе ныҡыраҡ аңлау өсөн кәрәк, кешелек цивилизацияһында, донъя мәҙәниәтендә үҙебеҙҙең тотҡан урыныбыҙҙы, бурысыбыҙҙы, маҡсаттарыбыҙҙы аңлау мөһимерәк беҙгә. Ә һуҡырҙарса эйәреүҙең, эпигонлыҡтың ниндәй эҙемтәләргә килтереүе бик яҡшы билдәле. Әле бер быуат элек үк Ризаитдин Фәхретдинов (1859 –1936) Көнбайыш ҡаҙаныштарына бәйле бөгөн дә актуаль яңғыраған шундай фекер әйтә: “Мосолмандар, европалылар менән бәйләнешкә инеп, ҙур файҙа алды, әммә шул уҡ ваҡытта әхлаҡ юғалыуы төҫөндә оло зыян да күрҙе” (“Шура”, 1917, N 13). Былдай фекергә атаҡлы урыҫ

философы Н.А. Бердяевтың (1874 –1948) килеүе лә күпте аңғарта: “Лишь слегка прикоснувшись к поверхности европейского знания, можно ... упрощенно поклоняться разуму и науке и в них видеть панацею от всех зол. Тот, кто находится внутри, в самой глубине европейского процесса познания, а не со стороны благоговейно на него смотрит, постигает внутреннюю трагедию европейского разума и европейской науки, глубокий их кризис, мучительную неудовлетворенность...” (Бердяев Н.А. Судьба России. М., 1990. Стр. 59). Шул уҡ осорҙараҡ йәшәгән немец философы Шпенглер (1880 –1936) Европаның байыуға йөҙ тотоуын Көнбайыш мәҙәниәтенең сикләнгәнлеге, кешелекте ылыҡтырырҙай идеяларының ҡорғаҡһыуы менән бәйләй. Был фекер бөгөнгө аҡыл эйәләре хеҙмәттәрендә лә үткәрелә. Беҙгә, тимәк, киләсәге перспективалы, күпселекте алға әйҙәрлек үҙебеҙҙең милли идея буйынса эшләү – иң көнүҙәк мәсьәлә. Индивид булараҡ һаҡланыуға ҡарағанда, башҡорт булараҡ һаҡланып ҡалыуҙың мөһимлеген аңлар кәрәк беҙгә.

Әҙәбиәткә килгәндә, оло йорт һалырлыҡ нигеҙ таштарыбыҙ, шөкөр, ныҡлы: атаҡлы сәсәндәребеҙ, XIX быуатта мәшһүр Аҡмуллабыҙ, дәһшәтле XX быуат башының бөтә трагизмын үҙендә туплаған йәшендәй Бабич, ике йөҙ йыллыҡты тоташтырған аҡыл эйәһе Мостай Кәрим...

Донъя кимәлендә танылыу алыу әлеге лә баяғы тотош кимәлебеҙгә бәйле. Һүҙ ҙә юҡ, айырым таланттар – торғаны бер мөғжизә: әҙәм эшләй алмаҫтай хәлдә лә үлемһеҙ әҫәрҙәр ижад итә. Һәҙиә Дәүләтшина, мәҫәлән, “Ырғыҙ“ҙы рухи һәм матди ҡыҫынҡылыҡтарҙа яҙа. Әгәр ҙә уға Лев Толстой шарттары тыуҙырылған булһа, ниҙәр ҡалдырыр ине?!

Күптәребеҙҙең алтын ваҡытын икмәк эшләү, ғаилә ҡарау, ыбыр-сыбыр мәшәҡәттәр ала. Шағир әйткәнсә, “Шул үҙе тормош бит инде” тиеү генә еңеллек килтерә алмай. Зәйнәб Биишеваның «ижади мөхит»ен бына нисек тасуирлай Һылыубикә исемле ҡатын: “Бынауы Ғибаҙулла ағайыңдың, Йәмилә апайыңдың өсәр-дүртәр балаһы алмаш-тилмәш айлап-йыллап һинең өҫтә икән дәһә... Үҙең йонсоп, арыҡланыуҙың сигенә сығып бөткәнһең... Китһәң – эш, ҡайтһаң – эш... Өс ир бала, инвалид ир ҡарайһың, ғүмер буйы Хафаса апайыңды аҫрайһың, шуның өҫтәүенә туп-тулы туғантыумаса... Үҙ ауыҙыңа аш та теймәй ҙә баһа!..” (Зәйнәб Биишева. Әҫәрҙәр. V томда. 5-се том. Өфө, 2007. 247–се бит). Эйе, ижад кешеһе мөғжизәләргә һәләтле. Әммә шарттар, дөйөм кимәл үҙенекен итә барыбер. Мостай Кәримдең көндәлектәрендә бик фәһемле юлдар бар: “11.VIII.97... 19-20 йәшендә өлгөрөп еткән Ромен Роллан тау-тау йөк китаптар ижад иткән... Мине әйҙәп торорлоҡ ижади, рухи, интеллектуаль мөхит етерлек булмаған. Егерме йәшемә тиклем мин ни күрҙем? Нимә менән мауыҡтым, ниндәй маҡсаттар ҡуйҙым алдыма?.. Ромен 21 йәшендә француздың бөйөк композиторы Сен-Сансҡа шаҡ ҡатырлыҡ хат яҙа. Сәнғәт, сәйәсәт, гуманистик принциптар тураһында, сәнғәттең (музыканың) интернациональ йөкмәткеһе хаҡында тәрән фекер йөрөтә... Ҙур музыканттар, артистар, рәссамдар менән аралаша... Ә мин 20 йәшемдә тәү тапҡыр опера тыңланым. Эсем бошто, тәмен дә, йәмен дә тапманым. Сөнки наҙанмын...” (“Ағиҙел”, 2009, N 10, 24-се бит).

Беҙҙә 230-ға яҡын Яҙыусылар союзы ағзаһы иҫәпләнә. Ысын мәғәнәһендәге ижад менән әлегеһе мәлдә шуларҙың биштән бер өлөшө генә шөғөлләнһә шөғөлләнәләр, ҡалғандары йә ижадтан бөтөнләй ситләшкән, йә үҙен-үҙе генә ҡабатлай, асылда, иҫәпкә бар, һанға – юҡ. Мәүлит Ямалетдин әйтмешләй:

*Беҙ, шағирҙар, йылдың-йылы артабыҙ,*
*Дау килгәндә алда түгел, арттабыҙ.*
*Көллөбөҙҙө бергә ҡушһаҡ, Бабичтан*
*Әллә ауыр, әллә еңел тартабыҙ.*

Үҙ-үҙен ҡабатлағандар араһынан “әҙәбиәт генералдары”н айырып күрһәтер кәрәк. Улар әүҙем яҙыша, тик ... ижад итеүҙән күптән туҡтаған (былдай һығымтаны әҙәбиәт фәненә, ғөмүмән, фәнни эҙләнеүҙәребеҙгә ҡағылышлы ла яһарға мөмкин). Был хаҡта уҡыусы түгел, ҡәләмдәштәре түгел, хатта улар үҙҙәре лә артыҡ уйланмай. Күҙ алдына килтерегеҙ: ижад юҡ, ә яҙыша, уның әҫәрҙәренә ҡарап әҙәбиәт кимәле билдәләнә. Аянычлы хәл. Унан аптыраған булабыҙ: ни өсөн әҙәбиәт үҫешмәй, ни өсөн әҙәби тәнҡит юҡ?.. Теге биштән бер өлөш тә эш араһында ғына яҙыша бит. Эйе, шағирмын тигән шағир ҡанундарға һыймай ҙа, яраҡлаша ла алмай (яраҡлашһа, шағирлығын юғалтасаҡ): агрономияның ни икәнен белмәйенсә лә мәңге һулымаҫ рауза гөлдәрен үҫтереүгә һәләтле. Унан айырмалы рәүештә, профессиональ тәнҡитсегә, ни тиклем оло талант булыуына ҡарамаҫтан, донъя әҙәбиәтенән хәбәрҙар булыу мотлаҡ! Одалар баҫтырыуҙы кәсеп итмәһәң, был өлкәлә урыҡ-һурыҡ ҡына, «илһам килгәндә» генә яҙышып эш ҡыйрата алмайһың. Һинең эҙмә-эҙлекле, тәфсирләп-нигеҙләп әйтелгән фекерҙәреңде юҡҡа сығарырға әҙер торған, йомортҡанан йөй эҙләүсе әҙәбиәт әһелдәренә йәнә бер нисә мәҡәләлек кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәрең ҡәләмең осонда ғына булырға тейеш. Был ғына ла етмәй әле. Сөнки бөгөнгөләй алғыр заманда хаяһыҙ бәндәләрҙең ҡоралдары ла, мөмкинлектәре лә бихисап. Һинең юлың берәү (дөрөҫлөк) булһа, уларҙыҡы – йөҙләп, үҙҙәре лә әүермән затынан: ҡырҡмаһа– ҡырҡ ҡиәфәткә инәсәктәр. Рухи бөтөнлөк тигән ҡәлғә генә һаҡлауы бар. Һаҡлауы бар, тик ҡәлғәлә, оборонала ятып еңеүгә өлгәшеүҙәре, ай-һай...

Ҡыҫҡаһы, әҙәби тәнҡит – үҙенә фанатиктарса бирелеүҙе талап иткән өлкә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында бөгөнгө әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнгән махсус бүлек кәрәк, тип сығыш та яһағайным бер. Ҡыҙғаныс, был тәҡдимгә бәйле хатта аралашып йөрөгән ҡәләмдәштәр ҙә бер ни әйтмәне. Был да уйландыра.

Ижадта үҙ-үҙеңде ирекһеҙләп күпкә ирешеү икеле. Халҡыбыҙ бөйөк әҫәрҙәр тыуҙырған, тибеҙ икән – был рухи азатлыҡ менән бәйле. Бөгөнгө мәлдә күпселек былдай азатлыҡтан мәхрүм. Кемгәлер ул кәрәкмәй ҙә, сөнки азатлыҡ менән яуаплылыҡ йәнәш йөрөй.

Әлбиттә, әҙәбиәт – бөгөнгө йәмғиәт емеше: йәмғиәт торошо, йәмғиәт кимәле әҙәбиәттә лә сағылыш таба. Шулай ҙа кеше аңы, кеше хыялы донъяны, әҙәм балаларын, улар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе бөтөнләй көтөлмәгәнсә күрә алыуы, күрергә теләүе мөмкин. Шулай булмаһа, меңәр йыл элгәре ижад ителгән әҫәрҙәр беҙҙе бөгөн тетрәндерә алмаҫ ине.

Ата-бабаларыбыҙ сәсәндәргә рух илселәре, аҡыл эйәләре, ҡанатлы һүҙ, образлы, кинәйәле тел менән милләт исеменән сығыш яһаусылар итеп ҡараған. Салауат феномены... Уның халҡыбыҙ символына әүерелеүе батыр булыуы, халыҡ юлбашсыһы ролендә сығыш яһауы менән генә бәйле түгел (әлбиттә, һәр береһендә ул иң юғары талаптарға яуап бирерлек кимәлгә күтәрелгән) – ялҡынлы шағир-сәсәнлегендә лә. Әнғәм Атнабаев әйткәнсә, “шағирҙар күп, әммә батыр түгел, батырҙар күп, шағир түгелдәр...” Мәңге бөтәшмәҫ ярабыҙ Бабичты ла ошо рәттә ҡарарға мөмкин. Ул да билдәле дәрәжәлә шағир-сәсән дә, батыр яугир ҙа. Сәсәндәр һүҙенең юғарылығы – халыҡ исеменән сығыш яһауҙарында. XVIII быуатта Ҡарас сәсән: “Эйе, мин

– халыҡтың теле, – тип килешеп тора ла, – тик халыҡ ауыҙын асырмы икән?" – тигән бик урынлы, төплө һорау ҡуя. Был һорау бөгөн дә ни тиклем ҡырҡыу! Ауыҙын аса аламы халыҡ? Асырға теләге, әйтә алыр һүҙе бармы? Уның исеменән сығыш яһай алырлыҡ әҙиптәребеҙгә ышанырлыҡмы? Әллә шыма һөйләп, ҡаҡ таҡтаға һалалармы? Әйтә лә алды, ышандырҙы ла, ти, – эйәрерлекме халыҡ?

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ:**

Ысынлап та, егерменсе быуаттың уртаһынан алып тәрән белемле, төрлө йүнәлештәрҙә, тармаҡтарҙа эшләүсе милли интеллигенциябыҙ үҫеп етеште. Улар зауығына, белеменә ярашлы төрлө йөкмәткеле, юғары интеллектлы, төрлө жанрҙағы бай әҙәбиәт кәрәк. Уларҙың проблематикаһы төрлө-төрлө, стилдәре үҙенсәлекле булһын. Иң талапсан, күп ҡырлы тормоштоң һәммә яғын яҡшы белгән уҡыусыларыбыҙ ҡыҙыҡһынырлыҡ әҙәбиәт кәрәк.

Иң яҡшы тип табылған яңы романдарҙы, повестарҙы, драма әҫәрҙәрен, шиғриәт өлгөләрен урыҫ һәм бүтән телдәргә тәржемә итеү, киң донъяға сығарыу зарур. Рәсәй кимәленә сыҡмайынса оло әҙәбиәт хоҡуғын алып та, донъя кимәлен яулап та булмаясаҡ.

Бөгөнгө прозабыҙ кимәлен, күпмелер дәрәжәлә, роман жанрында Таңсулпан Ғарипова, повестар буйынса Әмир Әминевтың хикмәтле әҫәрҙәре, кесе жанрҙа Талха Ғиниәтуллиндың хикәйәләре билдәләй булһа кәрәк. Драматургияла һаман да Нәжиб Асанбаев алғырлыҡ күрһәтә. Уның яңы драмалар серияһы үҙҙәре генә лә ни тора!

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Һүҙ ҙә юҡ: ҡыуаныслы күренештәр ҙә бар. Һеҙҙең исемлеккә тағы ла кемделер өҫтәп булыр ине. Обойма рәүешендә түгел, ә юғары талаптарҙан сығып...

Мәҫәлән, һәр әҫәре күтәреп алынған Талха Ғиниәтуллин ижадына тулайым баһа ла бирелмәгән әле. Ә ул – башҡорт әҙәбиәтенең ғорурлығы, замандаш урыҫ классиктары менән йәнәш торорҙай әҙип.

Эҙләнеүҙәр алып барыусылар ҙа бөтөнләй үк юҡ түгел. Шул уҡ Әмир Әминевтың һәр повесы йөкмәтке йәһәтенән генә түгел, форма яғынан да ниндәйҙер яңылыҡ алып килә. Әйтәйек, "Бер кәмәлә" әҫәре. Унда дини-мифологик сюжет менән бөгөнгө ваҡиғалар тығыҙ үрелештә бирелә, заманыбыҙ етешһеҙлектәре художестволы дөйөмләштерелә, ыңғай герой уларға ҡаршы торорлоҡ көс тә таба, тик... Автор ысынбарлыҡты барса ҡатмарлығында бирергә ынтылғанға ҡуйылған проблеманың сиселеше лә ябайҙарҙан түгел.

Йәки Гөлсирә Ғиззәтуллинаның ижады. Ул бер үк теманы төрлө алымдар ярҙамында асырға ынтыла. Мәҫәлән, "Выждан сире" хикәйәһендә ауырыу йәмғиәтте йыһан эйәһенең техникаһы менән дауалап ҡараһалар, "Мираҫ"та эскелектең сигенә етеп ауырыуға әйләнгән Солтан, бары больницаға эләгеп, үткән тормошоноң мәғәнәһеҙ ҙә, үкенесле лә булыуын аңлап, исмаһам, ҡалған ғүмерен әҙәмсә йәшәргә ҡарар итә. «Өс көнлөк донъя»ла Ишморат быңдай йәшәү рәүешен ҡабул итә алмай. Рәнйеп, әсенеп, был донъяны үҙ теләге менән ҡалдыра. Унда Сыңғыҙ Айытматовтың «Аҡ пароход»ындағы малай образы менән ауаздашлыҡ бар. Тик, ҡырғыҙ малайынан айырмалы рәүештә, Ишморат был тормошто күберәк татып ҡараған, бысрана башлаған. Бөтөнләй хәшәрәткә әйләнгеһе килмәгәнгә йәне дау күтәрә. Мажараға ҡоролған әҫәрҙәре лә бар Гөлсирәнең. Ғөмүмән,

уның кеше психологияһына тәрән үтеп инә алыуы ҡыуандыра. Әҙәм балаларының үҙ-ара мөнәсәбәттәрен, күңел кисерештәрен тормошсан һүрәтләүҙәге уңыштары әҙибә ижадының киләсәгенә ҙур өмөттәр бағларға мөмкинлек бирә.

Фантастик йүнәлештә Фәниҙә Исхаҡованың, Әхмәр Үтәбайҙың эҙләнеүҙәрен хуплар кәрәк. Фәрҙәнә Аҡбулатова әҫәрҙәре уйландырырлыҡ кимәлдә.

Шиғриәттә, төпкә егелеп, емешле ижад иткәндәрҙән Факиһа Туғыҙбаева, Тамара Ғәниева, Мәүлит Ямалетдин, Йомабикә Ильясоваларҙы атап булыр ине.

Драматургияла Наил Ғәйетбай ҡыйыу рәүештә үҙ юлын яра. Уның драматургия мәктәбен булдырыуға бәйле эшмәкәрлеге лә маҡтауға лайыҡ.

Әҙәбиәттең үҙен дә төрлө алымдар менән анализларға мөмкин бит. Бында ниндәй ҡорал һайлау, тәү сиратта, тикшеренеү объектына бәйле. Әйтәйек, романтик комедияны оптимистик трагедия үлсәмдәре менән бесеү һис кенә лә дөрөҫ булмаясаҡ. Рәшиҙә Ғиззәтуллина тигән үҙ аллы тикшеренеүсе, мәҫәлән, «Урал батыр» эпосын мифологик ҡараштар, мистик аң, арийҙар ирешкән рухиәт кимәленән сығып анализларға ынтылған һәм иғтибарға алырҙай һығымталар яһаған. Фән кандидаты иһә, уның хеҙмәте менән танышҡас, ике уйлап та тормай «Туфта!» тигән мисәт баҫа. Асылда үҙенә-үҙе «Сикләнгәнлек» тамғаһын һуҡҡан ул.

Эйе, күпмелер дәрәжәлә төрлөлөккә ынтылыусылар бар. Әммә хикмәт шунда: йәмғиәт уҙған быуат аҙағындағынан ныҡ айырылһа ла, беҙ (әҙиптәр ҙә, уҡыусылар ҙа) элекке ҡараштарҙан арынмағанбыҙ. Әҙәби процесс дөйөмләштерелмәй *(ә бит уны, әҙәби процесты, фәлсәфәүи йәһәттән дә өйрәнеү-тикшереү ихтыяжы үҙен ныҡ һиҙҙерә. Һәр әҙип үҙенә күрә философ. Ошоно күҙ уңында тотоп, әҙәбиәт буйынса профессиональ философтың баһаларына мохтажбыҙ. Н. Бердяев кеүектәрҙең, мәҫәлән. Улай ғына ла түгел, донъя кимәленә сығыуҙы маҡсат иткән хәлдә, философ та, филолог та булған А.Ф. Лосев, культуролог Д.С. Лихачев, социолог Питирим Сорокин, тарихсы Лев Гумилев кеүек милли сикләнгәнлекте ашатлаған, әммә, һәр милләттең тәғәйен урынын яҡшы белгән аҡыл эйәләрен үҫтермәйенсә, күпкә ирешеп булмаясаҡ. Профессиональ философ күҙлегенән башҡорт әҙәбиәтен баһалауҙа тәүге тәжрибәләр ҙә юҡ түгел. Әйтәйек, Дамир Вәлиевтың сығыштары, Зөһрә Рәхмәтуллинаның мәҡәләләре)*, әҫәрҙәрҙең хатта күҙгә элерлеге тейешенсә баһаланмай, перспективалар хаҡында уйланған хеҙмәттәрҙе табырмын тимә. Яҡын арала булырына өмөтләнеүе лә ҡыйын, сөнки әҙәби тәнҡиткә адекват мөнәсәбәт юҡ. Төп бәлә шунда: әҙәби культурабыҙ кимәле бик түбән. Хатта булғанын беҙ иғтибарлай, тейешенсә баһалай, ҡабул итә белмәйбеҙ. Башҡаларҙың етешһеҙлеген тәнҡитләү оҡшай, ә үҙебеҙгә ҡағыла башлаһалар?.. Дөйөм күҙәтеүҙә әҙәбиәт әһеленең яҙмаларына бәйле ике-өс һөйләм менән ҡарашымды белдергәйнем. "Мин һиңә күрһәтермен әле!" – тип янап китте. Башлап яҙыусыға кәңәш рәүешендә уғата итәғәтлелек менән бер кәлимә һүҙ әйтелгәйне. Ҡанат аҫтына алған ағаһы: "Ул бит – гений! Ниңә уға ҡағылаһың?" – тип ябырылмаһынмы!

Ҡайһы берәүҙәр, Толстойға, Пушкинға тәнҡитсе кәрәкмәгән бит, тип асылда әҙәби тәнҡиткә булған мохтажлыҡты шик аҫтына ҡуя. Ысынында иһә хәл былайыраҡ: берҙән, бөйөктәр ҙә профессиональ тәнҡитте инҡар

итмәгән (Лев Толстой көндәлегенән юлдар: “Иртән Белинскийҙы уҡыным... Пушкин тураһында мәҡәлә – мөғжизә. Әле генә мин Пушкинды аңланым”), икенсенән, әҙәби тәнҡиттең уҡыусы өсөн генә түгел, әҙиптәр өсөн дә ниҙә кәрәклеген тәфсирләү – күҙе насарайғандарға күҙлектең ни өсөн кәрәклеген аңлатыуға тиң (эйе, күҙе яҡшы күргәндәргә күҙлектең кәрәге юҡ, дөм һуҡырҙарға ла уның файҙаһы булмаясаҡ).

Әгәр ҙә йәмғиәт тә, әҙип тә, уҡыусы ла, төплө, объектив тәнҡит кәрәк, тип иҫәпләһә, ул булыр ине. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙ ыңғайҙы ғына күрергә, кире күренештәргә күҙ йоморға өйрәндек. Хатта ки шул дәрәжәгә еттек: аҡты аҡ тиеүселәр ҙә революционер итеп ҡабул ителә хәҙер. Күренеүенсә, айырым шәхестәрҙе иҫәпкә алмағанда, әҙәби тәнҡит йәмғиәткә лә, уҡыусыға ла, әҙипкә лә (оданан башҡаһы) кәрәкмәй.

Дөйөм алғанда, әҙәбиәт хаҡында һөйләшеүҙәр үҙ-ара маҡташыуҙан ары китә алмай (әйтеүе лә оят: үҙенә үҙе мәҡәлә яҙып, дуҫ-таныштың ҡултамғаһын ҡуйҙыртып донъяға сығыусылар осрай башланы).

Бер-береңде күтәрмәләүҙәр менән килешеп тә булыр ине, бәлки. Күптәребеҙ хыялында тыуҙырған илдә генә булһа ла үҙе хан, үҙе солтан булып йөрөп ята бит. Шуның менән йыуана, шунан көс-көүәт ала... Эйе, Хоҙай Тәғәләнең беҙҙәй сәйерерәк балаларына ташламалар яһап та булыр ине һымаҡ... Айырым бер утрауҙа ғына йәшәһәк, бер-беребеҙҙе күккә сөйөп, маҡтанышып ҡына тик йөрөр инек. Сөнки, нимәләр генә тиһәк тә, был баһалар үҙебеҙгә генә ҡағылыр, үҙебеҙгә генә ҡайтып ҡалыр ине. Тик – ҡыҙғаныҫҡамы, бәхеткәме – донъя сәнғәт, әҙәбиәт әһелдәренән генә тормай. Был донъяла уҡыусы ла бар. Башҡорттоң рухи булмышы тигән донъя бар. Хәлдәр иһә ҡатмарланғандан-ҡатмарлана ғына бара: халыҡ күбеһенсә үҙ көнөн үҙе күрергә мәжбүр, власть башлыса үҙ мәнфәғәтен ҡайғырта, рухиәт илселәре тигәндәребеҙ үҙ көйөн көйләй, йәғни һәр ҡатлам үҙ яйына йәшәп ята. Осрашыуҙар үтә бит, аралашабыҙ, тиерҙәр. Был аралашыуҙар алыҫтағы туғандарҙың йылына бер күрешеүенә тиң: һағынышҡандар, хәтирәләре күп, тик бергәләшеп ниҙер эшләргә ваҡыттары ла, теләктәре лә юҡ.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ:**

Ижадымды әҙәби тәнҡитсе булараҡ башлаһам да, был ауыр һәм һирәктәр генә исем-ат алыр жанр хаҡында хәҙерге ваҡытта әллә ни әйтә алмайым. Әҙәби тәнҡит өлкәһе беҙҙә һүнеп ҡалды тиерлек. Тәнҡитсе булып танылған исемдәрҙе лә атауы ҡыйын. Сөнки, асылда, был жанр юҡ бөгөн. Был уртаҡул яҙыусыларыбыҙ өсөн, бәлки, йәннәттер, әммә әҙәбиәттең үҫеше өсөн етди тотҡарлыҡ. Тәнҡит юҡ икән – түбән әҙәбиәткә хөрриәт.

Башҡорт әҙәбиәтиенең тарихы һәм теорияһы беҙҙә хәҙер яҡшы эшләнгән. “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” серияһының алты томлығы яҙылып бөттө. Уны бер аҙ йыйнаҡлап, урыҫ телендә өс томлыҡ итеп нәшриәткә тапшырҙыҡ. Яңы “Әҙәбиәт теорияһы” китабы әҙерләнде. Тимәк, был өлкәлә лә мәғлүм уңыштарыбыҙ бар.

**Фәнил КУЗБӘКОВ:**

Социалистик реализм әҙәбиәтенең төп өҫтөнлөгө шунда ине: яҡты идеалдар, шул идеалдарға йәне-тәне менән бирелгән геройҙар, уларҙы өлгө итеп күрһәтә-һүрәтләй алыу. Шул нигеҙҙә әҙәбиәттең тәрбиәүи роле лә бик юғары булды. Йәмғиәттә яҙыусы абруйы тигән төшөнсә бар ине. Хөкүмәт тә быны тейешенсә баһаланы.

Ысынында ла яҡты идеалдар, оло маҡсаттар, халыҡ, милләт тип йәшәү тыуҙыра ысын мәғәнәһендәге геройҙарҙы. Ә уларһыҙ ниндәй әҙәбиәт?!. Тема, проблема ваҡлығы ошонан башлана. Нисек кенә булмаһын, әҙәм балаһына хыял ҡанатында осорторлоҡ маҡсат кәрәк. Ул ҡасан да булһа ғәҙеллек тантана итеренә ынанырға тейеш. Ҡыҙғаnыsҡа ҡаршы, бөгөнгө ысынбарлыҡ бөтә өмөттәрҙе лә селпәрәмә килтерә, изгелектең еңеренә ышанысты ҡаҡшата. Әҙипмен тигән әҙип бына ошондай ҡотолғоһоҙ тип әйтерлек шарттарҙа ла кешесә йәшәргә көс тапҡан, донъяла ғәҙеллек тә булыуына ышандыра алған шәхестәрҙе үҙ геройы итергә бурыслы.

Социаль ғәҙеллек идеяһы СССР менән бергә юҡҡа сыҡты, тип уйларға ярамай. Кешелек хыялындағы был идеяның бөтөнләй юҡҡа сығыуы мөмкин түгел. Әҙәм балаһы уға – стихиялымы, ойошҡан рәүештәме – барыбер ынтыласаҡ. Унан килеп, Швеция кеүек илдәрҙә был идеяның ярайһы уңышлы тормошҡа ашырылыуы ла күпте аңғарта. Иң мөһиме: милләттең, халыҡтың рухи традицияларын, милли ҡиммәттәрен, үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмайынса дөрөҫ йүнәлеш билдәләп тә, аныҡ маҡсаттар ҡуйып та, уларға өлгәшеп тә булмаясаҡ. Күренеүенсә, әҙипкә билдәле дәрәжәлә философ та булырға тура килә. Бөгөнгө башҡорт донъяһына бәйле фәлсәфүәи, социологик хеҙмәттәрҙең күренгеләй башлауы оптимистик уйҙар тыуҙыра (Р.М. Вәлиәхмәтов сығыштары; А.Буранчин. Башкирское общество в XXI в. – Истоки, 2010, 7 июль).

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ:**

Социалистик реализм әҙәбиәте, совет осоро әҙәбиәтебеҙҙең бер дәүере булып, тарихта ҡалғандыр инде хәҙер. Ләкин шуныһы йәл: олораҡ яҙыусыларыбыҙ ул әҙәбиәттең үлсәм һәм критерийҙарынан һаман ҡотолоп етә алмай. Уларҙан күрмәксе йәш көстәр ҙә өр-яңыса, заманса ҡарашҡа ҡыйыу ғына инеп китә алмай йөҙәштерәләр.

Заман башҡа – заң башҡа, тигәндәй, хәҙерге әҙәбиәтебеҙгә яңы заманса фекерләгән, замана философияһын һәм тәжрибәһен һеңдергән яңы әҙәбиәт кәрәк. Шунһыҙ бөтә донъя әҙәбиәте даирәһенә инеп китеү, уның теоретик, эстетик, художестволылыҡ, новаторлыҡ һыҙаттарын үҙләштереп булмай. Милли модернизм хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә лә нығынырға тейеш бит. Алда әйткәнебеҙсә, тирмәләребеҙҙән сығып, заманса йорттарға, донъя әҙәбиәтенең шарлап аҡҡан даръяһы эсенә инеп китеү – мөһим бурыс. Шунһыҙ ҙур әҙәбиәт юҡ, шунһыҙ донъя кимәлендә танылыу булмаясаҡ.

Хәҙерге әҙәбиәтебеҙ тураһында фекер алышҡанда журналдарыбыҙ хаҡында ла бер-ике һүҙ әйтәйек әле.

Шуныһы ҡыуаныслы: балалар, йәштәр, ололар өсөн даими сыға килгән башҡорт телендәге баҫмаларыбыҙҙың йөкмәткеһе, жанрҙары күпкә төрләнде һәм камиллашты, биҙәлеш йәһәтенән дә яҡшырҙы. «Ағиҙел» журналы күҙгә күренеп яңыра бара, рубрикалар аныҡлана. «Шоңҡар»ҙың йөкмәткеһе лә, биҙәлеше лә бөхтәләнә төштө.

«Ватандаш» яңы төр энциклопедик типтағы баҫма булыуы менән заманында ҙур популярлыҡ яулағайны. Ҡыҙғаныsҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа ул үҙ абруйын юғалта бара: күп һандар шаҡы-шоҡо материалдар менән тула, журнал тейешле кимәлдә редакторланмай. Улай ғына ла түгел, сифат яғынан түбән («Ағиҙел»дә «йөҙә» алмаған!) повестар, хатта романдар баҫтырырға тотондо, ә мөһимерәк рубрикалар ҡыҫылды, «үтмәҫ тауарҙар» ишәйҙе. Редакция коллегияһы ултырыштары үткәрелмәй башланы, етешһеҙлектәр хаҡында шыш-быш китте. Тираж кәмеүе лә ерле юҡтан түгел һымаҡ. Һәр хәлдә «Ватандаш» етди яңырыуға мохтажлыҡ кисерә.

Ғөмүмән, республика ваҡытлы баҫмаларындағы кәмселектәр матбуғат өлкәһендәге етәкселек эшенең һөҙөмтәһе булһа кәрәк. Кадрҙарҙы һайлай белмәү, журналистарҙы тейешле кимәлдә әҙерләй алмау мәсьәләләренә лә ҡағыла был.

Әгәр мин Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы ултырыштарында булһам, тәүгеһендә үк әле күрһәтеп кителгән мәсьәләләрҙе ҡарау, ижади йүнәлештәр, модернистик, авангардистик ағымдар хаҡында фекер алышыу ихтыяжы хаҡында әйтер инем. Яҙыусыларыбыҙ берлеге былар тураһында етдиерәк уйланһа икәнсе. Бәхәсһеҙ, дискуссияһыҙ оло әҙәбиәт, киләсәк юҡ. Әҙәбиәт булһа, әҙәби тәнҡит тә ижад донъяһын байҡабыраҡ ҡарар ине, бәлки.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Бөйөк табиптарҙың әйткәне бар: ауырыуҙы (боль, болезнь) түгел, кешене, кеше йәнен дауалар кәрәк. Быуаттар һынауын үткән был фәһемде йәмғиәткә лә күсерергә мөмкин: йәмғиәт тыуҙырған афәт-катаклизмдарҙы, йәғни эҙемтәләрҙе түгел, ә тәү сиратта сәбәпсене – йәмғиәттең үҙен һауыҡтырырға, рухын нығытырға кәрәк. Әҙипкә, рухиәттең кендек инәһенә, тимәк, ниндәй ҙә ҡатмарлы, иҫ киткес яуаплы миссия йөкмәтелгән. Был – Алланың ҡашҡа тәкәһе булып йөрөү, һайланмыш яҙмышҡа эйәмен тип ҡыланыу түгел, ә был донъялыҡта илаһи көс барлығына, ҡасан да булһа уның алдында яуап бирергә тура киләсәгенә инанып, ул ышанып тапшырған утты – талант оскөнөн кешеләргә еткереү юлында ысын мәғәнәһендәге алышҡа сығыу. Тәү сиратта үҙ-үҙең менән, үҙеңдең нәфсең, етешһеҙлектәрең, йомшаҡлыҡтарың менән.

Әҙәбиәтте тормош дәреслеге тип ҡараһаҡ, уны әҙәбиәт дәрестәрендә генә өйрәнеү етмәүе аңлашылыр, сөнки ул, ғәҙәти дәреслектән айырмалы рәүештә, кешенең аңына түгел, ә тәү сиратта уның күңеле аша рухи донъяһына мөрәжәғәт итә, намыҫын уята, выжданын ҡуҙғата һәм ҡуҙғыта. Шуға ла әҙәбиәт тотош мәктәптең, барлыҡ уҡытыусы-тәрбиәселәрҙең ҡулында иң эффектлы ҡоралдарҙың береһе булараҡ файҙаланылғанда ғына төп тәғәйенләнешенә тап киләсәк. Асылда хатта башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының күпселеге әҙәбиәтте йүнләп белмәй һәм белергә лә теләмәй (күп һанлы уҡытыусылар менән осрашыуҙар һөҙөмтәһендә тыуған аяныслы һығымта был). Бындай уҡытыусынан, уның уҡыусыларынан нимә көтәһең?!.

Шундай хәҡиҡәтте онотоrға ярамай беҙгә: совет иленең төп ҡаҙаныштары китапты бик юғары баһалауҙа, иң күп уҡыған халҡы булыуҙа, уҡып белгәнде тормошҡа ашырырға ынтылыуҙа ине.

Әлбиттә, дәреслектәр берәү генә булмай. Мәктәптекеләрҙән тыш матбуғат баҫмалары ла, радио-телевидение ла, интернет та – дәреслек ролендә бит. Хикмәт кемдең нисек файҙалана белеүендә. Төптәнерәк уйлаһаҡ, иң үтемле дәреслек – тормош үҙе инде ул. Тормошобоҙ иһә рухи яңырыш алдында. Был яңырыш үҙенән-үҙе генә килмәйәсәк. Әҙәбиәтебеҙ заман талаптарына яуап бирерлек кимәлгә етеп, тормош дәреслеге итеп ҡабул ителһә, һис шикһеҙ был яңырыш рухи прогресс файҙаһына буласаҡ.

*P.S. Хөрмәтле ҡәләмдәштәр, әҙәбиәт һөйөүселәр! Һеҙҙе съезд алды һөйләшеүендә ҡатнашырға саҡырабыҙ. Әҙәбиәттең бөтә жанрҙары буйынса ла һүҙ барыуы күҙаллана. Мәҡәләләр, хаттар көтәбеҙ.*

"Раҫлайым"
БР Мәғариф министры урынбаҫары
А.Ш. Сурин
«16» август 2010 й.

Уҡытыусылар йылына, Башҡортостан яҙыусыларының
сираттағы съезына бағышланған республика иншалар бәйгеһе

## ҠАҒИҘӘҺЕ

Республика әҙәби — ижади иншалар бәйгеһен Мәғариф министрлығы, «Ағиҙел» әҙәби-нәфис, ижтимағи-сәйәси журнал редакцияһы, район һәм ҡала мәғариф бүлектәре уҙғара.

Бәйге ике этапта үтәсәк:

1. Район һәм ҡалаларҙа — октябрь — декабрь, 2010 йыл
2. Республика кимәлендә — ғинуар — март, 2011 йыл

### Бәйгенең маҡсаты һәм бурыстары:

— йәш быуынды художестволы әҙәбиәткә ылыҡтырыу, уларҙа художестволы әҫәрҙәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу;

— әҙәби геройҙар өлгөһөндә йәштәрҙе патриотик, интернациональ, юғары әхлаҡи рухта тәрбиәләү;

— рухи ҡиммәттәргә өҫтөнлөк биреүсе, алдынғы заманға ярашлы зауыҡҡа эйә ижади шәхес формалаштырыу.

### Бәйгелә ҡатнашыусылар

— Бәйгегә башҡортса яҙылған (күләме — мәктәп дәфтәренең алты бите) иншалар ҡабул ителә. Беренсе этапта бәйгеселәрҙең һанына һәм составына бәйле сикләүҙәр юҡ. Республика кимәлендәге этапҡа дөйөм белем биреү мәктәптәренең район (ҡала) этабында I, II урын алған IX, X, XI синыф уҡыусыларының эштәре (бер райондан йәки ҡаланан йәмғеһе ике эш) ебәрелә. Бәйгелә Рәсәй Федерацияһы төбәктәренең башҡорт мәктәптәре уҡыусылары ла ҡатнаша ала.

### Бәйге үткәреүҙең тәртибе һәм шарттары

**Ижади эштәрҙең дөйөм тематикаһы:**

— «Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?»;

— «Миңә Мостай Кәрим әҫәрҙәренең (теләк буйынса башҡа авторҙы ла алырға мөмкин) геройҙары тормошомдағы ҡыйынлыҡтарҙы еңергә ярҙам итте»;

— «Художестволы әҙәбиәт тормоштоң һоҡланғыс һәм ҡабатланғыһыҙ булыуына инандыра»;

— «Нисек мин художестволы әҙәбиәт ярҙамында һүҙ сәнғәтенә өйрәнәм».

Ижади эштәрҙең жанрын уҡыусы үҙе һайлай. Иншаның теҙмә әҫәр формаһында ла башҡарылыуы мөмкин.

Республика этабына эштәр 2011 йылдың 31 мартына тиклем ҡабул ителә.
**Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г. Уфа, проспект Октября, 2, редакция журнала «Агидель».**

**Белешмәләр өсөн телефондар: 277-76-88, 277-87-73.**

Эштең титул бите республика дәүләт телдәрендә тултырыла.

Республика бәйгеһендә еңеүселәр (I, II, III урын) БР Мәғариф министрлығы, «Ағиҙел» журналы редакцияһы Маҡтау грамоталары, ҡиммәтле приздар менән 2011 йылдың апрелендә уҙасаҡ Башҡортостан яҙыусылары съезында бүләкләнәсәк.

Иң яҡшы эштәр «Ағиҙел» журналы биттәрендә баҫып сығарыу өсөн тәҡдим ителәсәк.

Әхмәт
СӨЛӘЙМӘНОВ

# ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИҘЕҢ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ МЕНӘН ДУҪЛЫҒЫ

Әхмәтзәки Вәлиди Туған ҙур сәйәсмән генә түгел, ә тарихсы-ғалим булараҡ та киң билдәле.

Бишектән үк милли йыр-моңобоҙҙо күңеленә һеңдереп, олаталары ауыҙынан дастандар, әсәһе ауыҙынан фарсы поэзияһы өлгөләрен ишетеп, Муллағол ише сәсән телле шәхестәрҙең репетуары менән дә бик иртә ҡыҙыҡһына башлай. Һүҙ оҫталарын, йыр-моң маһирҙарын бары зауыҡ өсөн генә, пассив тыңлап ултырмай ул: ишеткәндәрен дәфтәр биттәренә төшөрөп йөрөй, башҡорт, татар тикшеренеүселәре баҫтырған милли һәм, ғөмүмән, төрки ҡәүемдәре фольклоры өлгөләрен уҡып бара.

**1. Риүәйәттәр ҙә, дастандар ҙа, хатта әкиәттәр ҙә тарих һөйләй**

«Хәтирәләр»енән аңлашылыуынса, тирә-йүндәге урын исемдәре, ауылына, ырыуына бәйле риүәйәттәр Әхмәтзәкиҙең иғтибарын кесе йәшенән үк йәлеп иткән. Буласаҡ сәйәсмән, дәүләт эшмәкәре һәм ғалим өсөн улар, асылда, тыуған ер, тыуған ил тигән төшөнсәләрҙең ни икәнен аңларға булышҡан тарих дәреслеге хеҙмәтен үтәгән. Шуғалыр ҙа “Хәтирәләр»енең тәүге биттәрендә үк, йәғни үҙенең бала сағына бағышланған өлөшөндә үк, нәҫел-нәсәбенә, ырыуына, тыуған төйәгенә бәйле риүәйәттәрҙе бер тынала бәйән итмәйенсә булдыра алмағандыр.

«Хәтирәләр»ендә генә түгел, тарих буйынса тикшеренеүҙәрендә лә ул риүәйәт, легендаларға урынлы һылтана. Мәҫәлән, 1954-1955 уҡыу йылында Истамбул университетында уҡыған «Колонизаторлыҡ тарихы» тигән лекциялар курсының «Башҡорттар тарихы» тигән өлөшөн генә алайыҡ: *“Башҡорт риүәйәтендә уларҙың һәм башҡаларҙың иң боронғо ата-бабалары булған кенжеләрҙең Бохара тарафынан килгәне әйтелә»*. Әхмәтзәки Вәлидиҙең фекеренсә, Птолемей телгә алған *Паскартия тигән өлкә – башҡорттар йәшәгән ер ул (15, 18).*

Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләһе хаҡында һүҙ алып барғанында ла, Әхмәтзәки Вәлиди башҡорт риүәйәттәренә мөрәжәғәт итмәй ҡалмаған. Тик был юлайы мәсьәләне ике яҡтан яҡтыртырға тырышҡан. Башҡорттарҙың бер

өлөшө Паскартия урынлашҡан Урта Азия менән бәйле икәнен әйтә лә Урта Азия, Иран һәм башҡа тараф халыҡтары хәтерендә лә һаҡланған әҫәрҙәрҙе йәлеп итә һәм былай тип яҙа: *«Иран дастандарында һәм көнбайыш сығанаҡтарында сағылған – Башгирд, Термез янында башҡорт тауы һәм Памирҙың Читрал тарафында Башҡорт исемле ер кеүек географик исемдәр ҙә, боронго болгарҙар һымаҡ, башҡорттарҙың да шул заманда (Птолемей Клавдий йәшәгән дәүерҙә, йәгни беҙҙең эраның икенсе быуаты тирәһендә. –* ***Ә.С.)*** *Төркөстандың көньяҡ-көнсығыш тарафында йәшәүен дәлилләй» (10, 10).*

Уғыҙ төркиҙәренең уртаҡ дастаны иҫәпләнгән *«Угыҙнамә»лә башҡорттарҙың Иҙел буйында һәм уга яҡын болгарҙар менән сиктәш* бер таулы өлкәлә йәшәгән ҡеүәтле халыҡ тип танылған, үҙенең ғорурлығы, ҡыйыулығы арҡаһында һис бер йыһангирға баш эймәгән ҡәүем сифатында иҫкә алыныуы ла Әхмәтзәки Вәлидиҙең иғтибарынан ситтә ҡалмаған. Унда был ҡәүем йәшәгән таулы өлкә (Урал тауҙары) был дастанда *"Башҡорт тауҙары"* (Ҡуһһаи Башҡурт) тип аталыуын билдәләп үткән (10, 9-10).

Был күҙәтеүҙәр һәм һығымталар Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҙма ҡомартҡылар менән бер рәттән фольклорҙы ла, айырым алғанда, риүәйәт һәм дастандарҙы, хатта ки аталышы менән үк фантастика һәм тылсым символы кимәлендәге уйҙырмаға нигеҙләнгән әкиәт жанрын да тарих фәне өсөн мөһим сығанаҡ тип белгәнлеге тураһында һөйләй. Шуға күрә лә улар тарихыбыҙ өсөн дә, фольклор ғилемебеҙ өсөн дә баһалап бөткөһөҙ ҙур әһәмиәткә эйә.

**2. "Хәтирәләр»ҙә ауыл тарихы тип аталмыш риүәйәт алымының файҙаланылғаны**

Һәр төбәктең үҙ риүәйәте. Телдән телгә, быуындан быуынға күсә килеп, әллә нисәмәгә төрләнһә лә, ундай риүәйәттәр бик үк ситкә сайпылмай, шул тирәне генә «хеҙмәтләндереп» йәшәп ятыр булған. Ана шундайҙарҙың бер төрө ауылдың хасил булыуы, үткән юлы, уны нигеҙләгән, төйәк иткән ҡәүемдәр хаҡында бәйән итә.

Башҡорт илен буйын-буйға, иңен-иңгә гиҙеп, күп йөрөгән Әхмәтзәки Вәлидигә «Ауыл тарихтары» рәүешендә йәшәп ятҡан риүәйәттәрҙең тәбиғәтенә хас ошо үҙенсәлек бик тә таныш булғанға оҡшай.

«Хәтирәләр»ендә Әхмәтзәки Вәлиди һүҙҙе тыуған ауылының тарихын бәйән итеүҙән башлай: *«Был тау һәм йәйләүҙәрҙәге бик ябай тормошобоҙ, айырыуса уның һөйкөмлө тарихы, был тарихтың халыҡ хәтерендә йәшәп килгән ауаздары, бәләкәй сағымдан аңыма һеңеп, мине һуңынан көрәш барышында төрлө тәүәккәл ҡарарҙарга этәрерлек, төрөк һәм ислам ғилемдәренең бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә ҡарата төрлө пландар ҡороуга дәртләндерерлек кимәлдә йогонто яһанылар. Бынан аңлашылыуынса,* ***яҙмышым халҡым күңелендә йәшәгән тарихи хәтирәләрҙең айырылгыһыҙ бер һөҙөмтәһе булып ҡабул ителергә тейеш»*** (12, 6).

«Тарих тәрбиәһе» тигән төшөнсә мәғәнәһе асыла бында. Йәшәгән ереңдең үткәндәре хаҡында мәғлүмәттәргә бала саҡтан эйә булыуҙы, шуны зиһенеңә һеңдереүҙе генә аңлатып ҡалмай был, ә шәхестең киләсәктә йәмғиәт тормошонда үҙ урынын билдәләгәндә ғүмер юлы программаһына йоғонто яһарлыҡ сығанаҡ тип таныуҙы ла үҙ эсенә ала.

Ауылдың нигеҙләнеүе, унда йәшәгән этник төркөмдәр (ара, аймаҡ, түбә һ. б.) һәм уларҙың ниндәй ырыуға ҡарауҙары хаҡында мәғлүмәттәр «ауыл тарихы» тип йөрөтөлгән топонимик риүәйәттәрҙә, ғәҙәттә, башта уҡ әйтелә. Әхмәтзәки Вәлиди ҙә ошо принципҡа тоғро ҡала һәм һүҙҙе шулай тип башлай: *«Күпселеге үткән быуат урталарында килеп ерләшкән татар, мишәр һәм мосолман*

*сыуаш күскенселәре лә үҙ иткән ауылыбыҙҙың төп нигеҙен 30 йә 40 йорттан артмаган Суҡлыҡай һәм Уңғут исемле ике башҡорт ырыыуы тәшкил итә ине»* (12, 6-7). Бында һүҙ «род» йә «племя» мәғәнәһендәге ырыу тураһында түгел, ә кесе ырыуҙың эске бүленешен хасил итеүсе ара (аймаҡ, түбә, тармыт) тигән атама алған бәләкәй этник төркөмдәре хаҡында. Суҡлыҡайҙар һәм улар менән ҡатнашып Көҙән тирәһендә йәшәгән Һәнәклекәй, Йөрәктауҡай, Таулыҡай ише этник төркөмдәрҙең аталышының (этнонимының) "-кәй" йә "-ҡай"ға бөтөүе иғтибарҙы тарта. Формаль грамматика күҙлегенән ҡарағанда, улар йә иркәләтеүҙе, йә кеселек төшөнсәһен аңлатыусы аффикс кеүек кенә тойола. Әммә был ҡәүемдәрҙең этногенезына күҙ һалһаң, *«кәй»* менән *«ҡай»ҙың*, аффикс түгел, киреһенсә, шул этнонимдарҙың төп өлөшөн тәшкил итеүсе тамыр һүҙ икәненә төшөнәһең. Әхмәтзәки Вәлиди был этник төркөмдәрҙең боронғо *ҡай (ҡайлы)* ырыуының бер өлөшө булыуын әйткән.

Ҡәҙимге ауыл тарихтарында, ғәҙәттә, тел, диалект, һөйләш мәсьәләһе күтәрелмәй. Әхмәзәки Вәлиди, ғалим буларак, тыуған ауылының этник составының сыбар булыуын иҫәпкә алып, уларҙың һөйләшенең үҙенсәлеген дә асып бирә: *"Был ҡәбиләләр менән бер аҙ танытмаҡ өсөн, шуны өҫтәр инем: башҡа төрки ҡәбиләләрендә "з" һәм "ч" өндәрен ҡулланган урында башҡорттар "ҙ" һәм "с" өндәрен ҡуллана, шуның менән башҡаларҙан айырыла»*, – ти (12, 7). Бынан авторҙың этносты билдәләүҙә тел үҙенсәлегенә ҙур әһәмиәт биреүе лә, ауыл халҡының һөйләш үҙенсәлеге менән генә сикләнмәйенсә, мәсьәләне киңерәк юҫыҡҡа сығарыуы ла яҡшы аңлашыла. Шул нигеҙҙә ул башҡорттарҙы дүрт төркөмгә бүлеп ҡарау яғында. Беренсе төркөмдө ғалим тау башҡорттары тип нарыҡлай һәм уларға Бөрйән, Үҫәргән, Тамъян ырыуҙарын теркәй. Икенсеһен иһә Ялан башҡорттары тип атай ҙа уларының Юрматы, Көҙәй, Ғәйнә, Ирәкте, Йәнәй, Танып ырыуҙарын хасил итеүен әйтә. Өсөнсө төркөмдә, уныңса, Ҡыпсаҡ, Ҡаңлы, Уғыуын, Оран, Ҡайлы, Ҡатай, Бәйләр (Бәйәт) (беҙҙеңсә, Биләр), Кәрәй (беҙҙеңсә, Кирәй йә Гәрә(й) булыуы ихтимал), Сураш, Нуғай, Ҡырғыҙ, Меркет кеүек ырыуҙар тәшкил итә. Тәүге ике төркөмдөң Уралда йәшәүе унынсы "Христиан йыл иҫәбе баштары"нан да мәғлүм. Өсөнсө төркөмгә ингән ырыуҙарҙың иһә Көнсығыштан миграцияланып, башҡорттар араһында башҡортлашыуына ишара яһай. Дүртенсе төркөм хаҡында һүҙ барғанда ла ошо принципҡа таяна. Уныңса, был төркөм "Ҡазан тарафтарынан, ерҙәрен рустар баҫып алғандан һуң, Башҡортостанға килгән *ҡаҫҡын татар* (йәки *типтәр*, йәғни *"дәфтәрле"*), *бүләр (болгар), мишәр* һәм *мосолман сыуаштарҙан"* тора (12, 7). Автор был төркөмгә инеүселәрҙең рәсми телдә *"башҡорт припущенниктары" – ергә ҡабул итеп алынган башҡорттар* тигән исем менән йөрөтөлөүен дә иҫкәртә. Һүҙҙе ауылдың этник составы мәсьәләһенән башлап, уны бына шулай, ғөмүмән, башҡорт халҡының этник сығышы мәсьәләһе кеүек киңерәк юҫыҡҡа күсергәндә лә, Әхмәтзәки Вәлиди үҙенә билдәле кимәлдә диалектолог вазифаһын алғандай итә.

Башҡорт ырыуҙары хаҡындағы белешмәһендә Әхмәтзәки, юлайҡан ғына булһа ла, был ҡәүемдәрҙең кәсебе, көн итмеше хаҡында лә әйтеп үткән. Уның күҙәтеүҙәренсә, тәүге өс төркөм нигеҙҙә *"ярым күсмә тормош алып бара"*, "дүртенсе төркөм борондан уҡ *иген игеүсе крәҫтиән булып,* ауылда йәшәй" (12, 7). Әхмәтзәки Вәлидиҙең фекеренсә, ул төркөмгә, ерҙәрен рустар баҫып алғандан һуң, Ҡазан тарафтарынан Башҡортостанға килгән татар (типтәр, йәғни "дәфтәрле"), бүләр, (болғар), мишәр һәм мосолман сыуаштар кергән.

XVIII быуаттағы болалар ялҡыны Көҙән ауылын да ялмай. Шул сәбәптән

уларҙың ере тартып алына. Атаһы Әхмәтшаһ тыуған 1860 йылда унда Көнбайыш Башҡортостандан Минзәлә мишәрҙәре килеп ултыра. Шунан ғына Көҙән ауылы ҙурайып китә.

Әхмәтзәки Вәлиди үҙ ауылы тарихын бәйән итеү менән генә сикләнмәй – яҡын-тирәләге Әрмет, Төкөн, Үтәк, Туғай (йәғни хәҙер Ишембай, Ҡырмыҫҡалы, Ғафури райондары) ауылдарында йәшәүсе ҡәүемдәрҙең этногенезына ҡағылышлы ҡайһы бер мәғлүмәттәргә лә туҡталған.

Әхмәтзәки, тәңгәл тартып, үҙе әйтмәһә лә, Көҙән ауылының тарихы хаҡындағы мәғлүмәттәрендә уның үҙенең милли-азатлыҡ хәрәкәте юлбашсыһы булып китеүенең осраҡлы булмауына ишара барлығына ла төшөнөүе ҡыйын түгел.

Әхмәтзәки йәшәгән төбәк, ғөмүмән, бай тарихлы булған, тарихҡа инеп ҡалырлыҡ ҡаһарманлыҡ ҡылған шәхестәре менән маҡтана алған.

"Хәтирәләр"ҙә, ауыл тарихына бәйләп, Көҙәндә йәшәгән башҡорт ҡәүемдәренең ҡаһарман үткәненә лә байҡау яһала. Хандар, бей һәм мырҙалар ваҡытында Көнсығыш Себерҙәге Мансилдан, Тубылдағы Ерҡарағайҙан алып Көнбайыш Башҡортостандағы Кәмәлеккә һәм Төньяҡ Кавказдағы Кубан йылғаһынаса йәйрәгән арауыҡҡа үҙ затынан, ырыуҙаштарынан сыҡҡан шәхестәрҙең һөйәге сәселгән. Улар – Кесе Солтан, Морат Солтан, Солтангәрәй – Ҡараһаҡал етәкселегендәге ихтилалдарҙа әүҙем ҡатнашҡан. Көҙән Әхмәтзәкиҙең бишенсе быуын бабаһы Иштуған – Кәмәлек янында, икенсе бер бабаһы – Кубанда, өсөнсөһө Төмән, Мансилға тирәһендә рустарға ҡаршы көрәштә башын һала. Ә Кесе Солтан Көнсығыш Себерҙең мәшһүр ханы Күсемдең XVII быуатта йәшәгән ейәне Аблай Солтандың улы булған. Морат Солтан – Кесе Солтандың улы була. Ул Ҡырымға, Истамбулға барып, солтан менән осраша. Аҙаҡ Дағстанда таулыларҙың азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡанында рустар ҡулына эләгеп, язаға дусар ителә. Солтангәрәй йәки Ҡараһаҡал иһә (уны "Шуна" тип йөрөтәләр) Кесе Солтандың яҡын туғандарының береһе була (12, 10 – 17).

Әхмәтзәки Вәлиди, ахырҙа килеп, риүәйәттәр буйынса мәғлүм бына был факттарҙың тәрбиә сараһы, шәхсән үҙенең иһә бөтә ғүмер юлын билдәләүсе фактор икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алған. Юҡһа: "*Быларҙың барыһы ла, ырыуыбыҙҙың үткәндәре хаҡындағы риүәйәттәр булыу менән бергә, минең рухи үҫешемә тәъҫир итеүсе көс ине*", – тип яҙыр инеме ни (12, 10). Шулай булыуына ҡарамаҫтан, Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең "*Хәтирәләр*"ендә: "*55 йыл буйына тарих менән шөғөлләнеп тә, иң аҙ белгәнем – үҙ ырыуымдың тарихы*", – тигән (12,7). Был һүҙҙәрҙең үкенеү тойғоһо менән әйтелеүе аңлашылып тора (Әхмәтзәки бәйән иткән кимәлдә үҙ ауылы тарихын белгән замана кешеһе, моғайын: "Һо-о, ауылым тарихын мин төбө-тамырынаса беләм!" – тип маһайыр ине). Шул уҡ ваҡытта аңлаған кешегә автор тел төбө менән: "Ғөмүм тарихты белеү кәрәк, әлбиттә. Әммә тарих үҙ тупһаңдан, үҙ нәҫел-ырыуыңдың кешеләрен белеүҙән башлана. Онотмағыҙ, балаларыбыҙҙың һәр кеме үҙенең нәҫел-нәсәбен ете быуынға тиклем белергә тейеш", – тип нәсихәт тә бирә төҫлө.

**3. Йыр-моң яҙмышы хаҡында уйланыуҙары**

1913 йылда "Шура" журналының дүрт һанында (№19–22) Ә. Вәлидиҙең "Бөрйән башҡорттары араһында" тигән сәйәхәтнамәһе баҫылып сыға. Ошо яҙмалары ла йыр-моңдарыбыҙ яҙмышы хаҡында борсолоу тойғоһо менән һуғарылған.

Мәсьәләгә был юлы автор киңерәк ҡарай. Иң әүәл Бөрйән ырыуының урман, тауҙар араһында (хәҙерге Бөрйән районы биләмәһендә) йәшәгән өлөшөнөң (автор уларҙы *урман бөрйәндәре* тип атай) булмышы-яҙмышы, йәшәү рәүеше хаҡындағы күҙәтеүҙәре менән уртаҡлаша. Үҙе әйтеүенсә, был яҡтарға ул тәүгә сәфәр ҡылмаған: “ете йыл элгәре“ бер булып киткән булған (11, 40). Шуға күрә ошо ваҡыт эсендә бындағы тормош ҡайһы тарафҡа ҡарай үҙгәрә бара – шуның хаҡында һығымталар яһауы уға ауыр булмаған.

Башҡорт ғилеменә (башкироведениеға) мөһим өлөш индергән П.И. Небольсин 1852 йылда: “*Башҡорт халҡының сәсәге үҫәргәндәр, түңгәүер, бөрйән халыҡтарылыр. Былар араһында иң сафы бөрйәндәр*”, – тигән (Ырымбур һәм Әстрәхан тарафтарына сәйәхәтемдең хисабы // Вестник ИРГО. – 1852. – 2.4. (Сығанаҡ Ә. Вәлидиҙең мәҡәләһе буйынса күрһәтелде. – 11, 40). Үҙе өйрәнгән ҡәүемдең булмышы хаҡында абруйлы автор фекеренә һылтаныу менән генә сикләнмәгән Вәлиди, бөрйәндәрҙең әле ул үҙе сәйәхәт ҡылған дәүерҙәге хәлен үҙенең күҙәтеүҙәренә таянып, уны ҡеүәтләгән һәм мәсьәләне киңерәк яҡтыртҡан: “*Хәҡиҡәтән* (ысынлап та. – **Ә.С.**) *башҡорттар менән яҡын танышлыҡ [шуны] күрһәтә ки: бөрйәндәр кәрәк мәгишәт* (донъя көтөү, тормош. – **Ә.С.**)*, тел вә гәир хосустарҙа* (башҡа яҡтарҙан. – **Ә.С.**) *башҡорттарҙың иң саф булгандарын тәшкил итәләр*” (11, 40). Шулай ти ҙә ошо саф ҡәүемдең яҙмышы был яҡтарҙа ул йөрөгән саҡта борсолорлоҡ хәлдә булыуына эсе бошоуын белдерә. Ә борсолорлоҡ күренештәр, уның әйтеүенсә, элек тә булған, был килеүенә иһә күпкә арта төшкән.

*“Тәбигәт һәм әхлаҡ боҙолоуы, ярлылыҡ былар араһына ла килеп еткән” (7, 40). Урмандар йоҡарган, “боронго саф тәбигәтле, алдау-нитеү белмәй торган тогро, баһадир башҡорттар инде ҡарт кешеләр булып, башҡорттоң ябыҡ урманы араһында ултырган боронго ҙур-ҙур ҡарагай (нарат) агастары кеүек аҙайып ҡалгандар (11, 40-41). Мал аҙайган, кешеләр ҡымыҙ урынына “бейә айраны эсәләр”. Халыҡ һаны кәмей. “Бөтөн волосҡа рәтле мулла ла юҡ. Булгандары сиктән тыш наҙан” (11, 41).* Бөтә волосҡа бер генә дана ла гәзит алдырыусы юҡ. Бөтөн дәүләттәрен рус кулактарына һаталар.

Урындағы башҡорттарҙың тормошоноң ауыр булыуы, бында мәҙәниәт һәм әхлаҡтың түбәнәйә барыуы хаҡында яҙғандан һуң, Вәлиди шулай ҙа урман бөрйәндәренең элекке сафлығын күреп ҡыуана. Сөнки *“эскә кергән һайын был һәйәт йүнәлә барган кеүек күренә. Эскә кергән һайын башҡорт әҙерәк алдаусан, гәлиерәк тәбигәтле, үҙ-ара иттифаҡлы булган кеүек күренә бара” (11, 41).*

Бына шундай хәлдәрҙе тасуирлағандан һуң ғына, фекер ебен автор беҙҙе ҡыҙыҡһындырған мәсьәләгә бора һәм: *“Шуныһы ҡыҙганыс ки,* – тип беҙҙе һағайта ла артабан шулай ти: – *Русияла этнография галимдары* (былай тигәндә ул халыҡ ижады белгестәрен дә күҙ уңында тота булыр. – **Ә. С.**) *Бөрйән, бигерәк тә ошо урман бөрйәндәренең мәгишәт, әхлаҡ, тәбигәт вә рухиәләрен, музыка, халыҡ әҙәбиәтен өйрәнергә, ҡиәфәт йәһәтенән ысындан тәфтиш итергә* (асыҡлауға, өйрәнеүгә. – **Ә. С.**) *тарихи ядлыҡтарын (исторические памятники) йыйырга өлгөрә алмагандар, эшләгән ҡаҙәре һис тә ҡәнәгәтләнерлек түгелдер (11, 41)... Себерҙең әллә ҡай соҡорҙарындагы бөтөн халҡы ике меңдән гибәрәт булган ваҡ таифәләрҙе өйрәнеү юлында байтаҡ ҡына аҡса сарыф итәләр. Әммә күҙ төбөндәге ошо башҡорттарҙы өйрәнеү хосусында эште эшләмәйҙәр” (11, 42),* – тип, ғалим-ғөләмәләр менән бер рәттән, властарҙы ла тәнҡитләп ала Вәлиди.

Уның был әйткәндәре мәҡәлә авторының Никольский, Атласи (Атласов), Игнатьев, Гурьевич, Мөнир Һади (Һадиев), Киппин, Фирсов, Сомье, Рычков,

Чермшанов, Вишнецкий, Небольсин, Галкин, Өмөтбаев ише тикшеренеүселәрҙең башҡорттарға ҡағылышлы хеҙмәттәренә ҡыҫҡаса күҙәтеү яһауы менән нигеҙләнә. Ахырҙа автор бына былдай һығымтаға килә: *“Ошо рәүешсә беҙҙең башҡорттар вә уларҙың тарихтары, мәғишәттәре, халыҡ әҙәбиәттәре хаҡында бер нәмәбеҙ ҙә юҡ, тиергә мөмкин. Был [әйтелгәндәр] ғөмүм башҡорттар хаҡында булды. Әммә беҙҙең алға алған Бөрйән башҡорттары хаҡында бер ҙә, исмаһам, баяғы тарих китаптарында ғына, “Мөстәфадел-әхбәр”, “Тарих ҡәүеме төрки”ләрҙә булһын бер ауыҙ вә кәлимә лә әйтелгәне юҡ. Шулай итеп, бөрйәндәр – башҡорттарҙың саф булғандары – үҙлектәрен тамам юғалтып баралар”* (11, 43-44).

Шундай үҙлектәрҙең юғала барыуының бер яғын автор шулай аңлатҡан: *“Әле беҙ булған был ауылдар, мәғишәт тарафынан ҡыҫылып, икенсенән, күрше башҡорт вә татарҙар тәьҫиренә бирелә төшөп, бер аҙ үҙгәргәндәр”* (11, 40).

“Ә. Вәлиди телгә алған тәьҫир ниҙә күренә һуң?” тигәндә, яуапты беҙ мәҡәләнең өсөнсө бүлегендә табабыҙ. *Ялтыран* тигән ҙур йәйләүгә (дөрөҫөрәге, яҙлауға) сыҡҡан Кесе Кәбәс, Оло Кәбәс, Ҡолғона тигән өс ауыл халҡы араһынан сәйәхәтселәр *“рәтләп ҡурай уйнай белгән”* бер генә башҡортто ла таба алмайҙар (11, 45-46). Эске Бөрйән башҡорттары белерҙәр әле, тигән өмөттәре лә аҡланып етмәй. Ҡурайсы исемен йөрөткән Зыяетдин, Хәйрулла атлы егеттәр ҙә ҡурайҙа “зарурһыҙ ғына уйнайҙар”. Шулай ҙа юлсыларға “Юлтый”, “Ҡаҙаҡ”, “Ишмырҙа”, “Ашҡаҙар”, “Циалковский”, “Ҡарабаев”, “Йософ майор” кеүек оҙон көйҙәрҙе, “Перовский”, “Суҡ муйыл”, “Заһира” (дөрөҫөрәге, “Заһиҙә”) тигән бейеү көйҙәрен ишетеү насип була. Ә Бәхтиәр тигән егет иһә уларға киске сәғәт туғыҙҙан ун икегә ҡәҙәре “Айыу майор”, “Ҡалматай” (дөрөҫөрәге, “Ҡалмантай” – **Ә.С.**) кеүек көйҙәрҙе уйнап ишеттерә (11, 46).

Бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда, сәйәхәтселәр ярайһы бай табышҡа юлыға. Вәлиди телгә алған йырҙарҙан “Йософ майор” тигән йыр, Ә. Вәлидиҙең “Хәтирәләре”ндә әйтелеүенсә, заманында Аҡ батшаға тәбиғ ҡылған Юрматы ырыуы башлығы Тәтегәс бейгә яр-юлдаш булған Ҡармыш баба нәҫеленән булған Йософ Ҡарамышев тигән майорға бағышлап сығарылған булған. Ул йырҙы аҙаҡ Вәлидиҙең арҡадашы Ғәлимйән Таған профессор Янски менән бергәләп Вена Фәндәр академияһында нәшер иткән. Был йыр ҙа, “Юлтый”, “Ҡаҙаҡ”, “Айыу майор” ишеләре лә хәҙер бөтөнләй халыҡ йырсылары ауыҙынан яңғырамай йә әҙ билдәле.

Юлъяҙма авторын урман бөрйәндәренең йыр-моң репертуары ла, көйҙәренең башҡарылышы ла ҡәнәғәтләндермәй (11, 46). Был иһә башҡорт халҡының, шул иҫәптән бөрйәндәрҙең, борон йырға, моңға ни тиклем бай һәм оҫта булыуҙары хаҡында йәш Әхмәтзәкиҙең ярайһы ғына яҡшы хәбәрҙарлығы хаҡында һөйләй. *“Ҡурайҙа ауыл араһында йыйылып уйнарға уңайһыҙланалар... Кис булғас, йәйләүҙең ситендә, тау башына мендереп, ут (костер) яҡтылар һәм әкертен генә уйнай башланылар... уйнаусылар зарурһыҙ ғына уйнайҙар. Беҙ боронғо көйҙәрҙе һораныҡ. Уйнаштырҙылар. Ләкин аҙ беләләр”*, – тигәне лә шуға дәлил (11, 46).

Заманында Мәскәү вәкиле Самойлов етәкселегендә партияның Башҡортостан өлкә комитеты тарафынан Башҡортостандағы башҡорт өйәҙҙәренең сәйәси комиссары итеп тәғәйенләнгән Шәмиғолов менән уның арҡадашы Исмаилов хаҡында Ә. Вәлиди: **“Һәр икеһе “рустан артыҡ рус” булып күренергә тырышты”**, – тигән үҙенең “Хәтирәләре”ндә (12, 320). Шуның кеүектәр теше-тырнағы менән етәксе посҡа үрләргә йәбешеп ятыусы һәм, шул “ныҡышлыҡтары” арҡаһында, маҡсаттарына өлгәшеүсе ҡайһы бер милләттәштәребеҙ, үкенескә ҡаршы, бөгөн дә бөтмәгән. Ундайҙар ҡатнаш ғаиләләр

артыуына һөйөнә. Шуны прогрессив һәм интернационализм күренеше тип таный. Бала-сағаға татар менән башҡорт милләтенә, хатта рустарға ла хас булмаған исемдәр ҡушылыуын хуплай. Ана шундайҙарҙы күҙ уңында тотоп һәм уларҙың, "**рустан артыҡ рус**" булып күренергә тырышып, раҫламаҫты раҫлауҙарына ҡаршы Вәлиди шулай тип яҙған: *"1860 йылға ҡәҙәр Башҡорт ғәскәрендә йәки айырым рус хәрби частарында хеҙмәт иткән һәм хәрби мәктәптәрҙә уҡыған башҡорттар араһында* ***рус культураһы менән мауығыу күҙәтелмәне.*** *Йософ майор һәм уның кеүек офицерҙар хеҙмәтенән буш ваҡытта ауылдарына рәсми рус ғәскәри кейемендә ҡайтырҙар ине, әммә рус музыкаһын һәм йырҙарын йырлау, рус бейеүҙәрен бейеү һәм уйындарын уйнау булманы. Ҡармыш ауылдарының өйҙәрендә көнбайыш һәм рус йорт йыһаздарынан бер ни ҙә юҡ ине, өй эсе һәм баҡсалар тап Һырдаръя буйындағы Төркөстан кешеһенең йортон хәтерләтә ине.* ***Совет дәүерендә*** *ҡайһы бер башҡорт тарихсылары нәшер иткән әҫәрҙәрҙә, йәнәһе, шул саҡта ул* ***рус культураһының йоғонтоһо көслө булды, тигән раҫлау ысынбарлыҡҡа тап килмәй.*** *Был – рустарҙың бөгөнгө көндәге өгөтөнөң тәьҫире ул. Техника өлкәһендә рустарҙың ул ваҡыттағы өҫтөнлөгө шартһыҙ ҡабул ителгән хәлдә лә,* ***рухи культура яғынан сығып ҡарағанда,*** *башҡорттарҙың, башҡа милләттәр кеүек үк, үҙҙәре йәшәгән урындарҙа өҫтөнлөк итеүе бәхәсһеҙ бер хәл. Арабыҙҙа кибетсе йә тимерсе сифатында ерләшкән рустар бик тиҙ телебеҙҙе өйрәнер һәм балалары оҙаҡ ваҡыт исламиәт тәьҫирендә ҡалыр, бәгзеләре, рус закондарының тыйыуына ҡарамаҫтан, мосолман диненә күсерҙәр ине"* (12, 14).

Әммә XX быуаттың баштарында инде хәл үҙгәрә башлай. Быны Бөрйән тиклем төпкөлдә ятҡан төбәктә лә күҙәтергә була. Ошо төбәккә ҡылған сәйәхәте ваҡытында Вәлидиҙең дә иғтибарынан ситтә ҡалмай был үҙгәреш. Дөрөҫ, юлъяҙманың өсөнсө бүлеген Ә. Вәлиди *"беҙ Бөрйән араһында фәнни бер маҡсат менән килмәнек... Иҫке яҙыу-фәлән йыйманыҡ. Йыр һәм хикәйәләрҙе яҙып маташманыҡ"*, – тип башлаған (11, 46). Әммә, ҡунаҡ әҙ ултырыр — күп һынар, тигән кеүек, ул үҙгәрештәр мосафир Әхмәтзәкиҙең иғтибарынан ситтә ҡалмаған. Шуға ла, үҙенең бошоноуын йәшермәй, былай тип яҙырға мәжбүр булған: *"Боронғо шағирана тормошо йыраҡлашҡан һайын, халыҡ уның* (боронғоноң — ***Ә.С.***) *йырҙарын да, көйҙәрен дә онота баралар. Уның урынына йәнә мәғишерәк булған татар таҡмаҡтарын, частушкаларҙы* (йәғни, аҙаҡ "Хәтирәләр"ендә яҙыуынса, рус тәьҫирен (12, 129) – **Ә. С.**) *ҡабул итә баралар. Хәҙер башҡортта ысын инҡилап ваҡыты. Боронғоноң ҡалдыҡтары инде уларға бик ғәзиз һаналырға тейеш. Оҙаҡ үтмәҫ, ул оҙон моңло көйҙәр кереп ҡалһалар, нота дәфтәрендә генә ҡалырҙар. Уларҙың урынын ишғал итеп бөтөрөр"* (12, 46).

Ә. Вәлидиҙең был фекере яҡташы һәм замандашы М. Ғафуриҙың "Заятүләк менән Һыуһылыу" тигән башҡорт эпосына инеш рәүешендә яҙған мәҡәләһендә сағылған борсолоуҙарға ауаздаш. Халыҡ шағиры булып таныласаҡ был шәхесебеҙ 1910 йылда уҡ: *"Башҡорттарҙың киң сахраларында ҡурай тауыштары менән ҡушылып йырлаған йырҙары, матур көйҙәре барған һайын боҙола, юғала бара...*

*Был матур көйҙәрҙең башҡорттар араһында тиҙҙән юғалып, улар урынына татар таҡмаҡтары урынлашыуы хәтеремә килеп, мине бер аҙ хәсрәтләндерә ине... Башҡорттарҙың бөгөнгө хәленә ҡараған ваҡытта, уларҙың көйҙәрен, йырҙарын һәм башҡа әҫәрҙәрен юғалтмай алып ҡалырға тырышыу кәрәк ине. Ләкин уларҙың тоҙ кеүек ирепиреп бөтөүенә – беҙ ҙә күҙ һалырға тәрбиәбеҙ, егетлек һәм ғәйрәтебеҙ етмәй шул"*, – тип тәрән борсолоу белдергән (16, 164 – 165). Бәлки, Ә. Вәлиди Ғафуриҙың был фекере менән таныш булғандыр һәм шуның йоғонтоһонда Бөрйән

башҡорттарының йыр-моңона иғтибар иткәндер. Был урында уныһы мөһим түгел. Мөһиме шул: халҡыбыҙҙың ике бөйөк шәхесе лә йыр-моңобоҙ яҙмышы хаҡында берҙәй борсолған, уны ят йоғонтонан ҡурсалау, һаҡлап алып ҡалыу хаҡында ла бер төптән бер һығымтаға килгән. М. Ғафури кеүек, Ә. Вәлиди ҙә, халыҡ йырҙарының тоҙ кеүек иреп бөтөүенә, үҙ урынын ят моңдарға биреүенә юл ҡуймаҫ өсөн, уларҙы ихлас йыйыу зарурлығын әйткән.

Мәғлүм булыуынса, рус белгестәренән С. Г. Рыбаков беренсе булараҡ үҙенең "Музыка и песни Уральских мусульман" тигән китабында (СП-б, 1889) башҡорт халыҡ йырҙарын нотаһы һәм тарихы менән бергә баҫтыра, улар хаҡындағы күҙәтеүҙәрен дә бирә. Ә. Вәлиди был хеҙмәт менән яҡшы таныш булған. Ошо хеҙмәттең әһәмиәтен инҡар итеп тормаҫтан, рус музыка белгесе күҙәтеүҙәренең шулай ҙа европоцентристик күҙлектән яҙылыуын билдәләп, былай тип яҙған: *«Ул башҡорт музыкаһында яҡшы ҙур тәрәҡҡи әҫәрҙе таба. Ләкин ундағы матурлыҡты фәҡәт бер тәбиғи генә матурлыҡ тип атай һәм асыл көйҙә ҙур лиризм һәм тәрәҡҡи иткән хасиәт әҫәре тапмай йәки булһа ла быны "беҙ һиҙеп бөтөрә алмайбыҙҙыр" ти. Рыбаков йәнәптәренең ошо һүҙҙәренән һәр икеһе ихтимал дөрөҫ булһа кәрәк, ләкин һуңғыһы тағы ла дөрөҫөрәк булыр. Башҡортта хасиәттең музыкаларында ингиҡас* (сағылыу – **Ә. С.**) *итәрлек ысын тәрәҡҡи булмаҫ. Бәлки,тышҡы культура йәһәтенән түбән булыуы эске бер яҡтан ҙур тәрәҡҡи итеүенә ирек бирмәйҙер. Ләкин вә ниһәйәтһеҙ оҙон ғүмерендә үҙенә күрә бер кимәл тапҡан булыуы ла шөбһәһеҙҙер. Һуңғы өс-дүрт ғасыр эсендә башҡорт үҙенең иркен матур тормошондағы ләззәтенең янына ҡайғы һәм хәсрәттәрҙе лә башҡа төрки ҡәүемдәрҙә күрелмәгән бер һүрәттә күрҙе. Хасиәттең иң ҡаты хөкөмө аҫтында кисергән ошо ғасырҙар эсендә Урал уларҙы үҙенең ямалы* (матурлығы – **Ә. С.**) *менән тәрбиә итте. Һәм шағирлыҡтарын һүндермәй һаҡларға өлгөрҙө. Тарихтың, Уралдың тәрбиәләре арҡаһында башҡорт, тышҡы культураһының бүтән булыуы сәбәпле, ысындан тәрәҡҡи иткән хасиәткә малик була алмаһа ла, тәбиғи шағирлыҡ, тәбиғи лириклыҡтың өҫ кимәленә етә алған. Европа мәҙәниәтенә һис мөнәсәбәте булмаған тәбиғи ҡурайҙарының тишектәренән аҡрын ғына сыҡҡан моңло, тәьҫирле тауыштарҙың серҙәрен төрки телен, төрки ҡәүеменең әхүәле рухиәһен бер ҙә белмәгән Рыбаков йәнәптәре аңламаһа ла, бик хаҡлы булыр. Йәнәб ғәлиҙәре бик белеп иғтираф итәләр.*

*Рыбаков йәнәптәре был көйҙәрҙә «боронғо башҡорттарҙа булмаған» тигән кеүек бер мәғәнә менән – яңылыҡ таба, Европа тәьҫире арҡаһында килеп сыҡҡан, тиергә оялһа ла, «яңылыҡ бар« тигәнен ҡалдырмай. Мин иһә быға мөслим булмаҫ инем"* (11, 50).

Ә. Вәлиди – үҙебеҙҙең уҡымышлылар араһынан *"әле бөтмәгән музыка, халыҡ әҙәбиәте, боронғоноң ҡалдыҡтарын йыйып, өйрәнеүселәр"* булырына, халыҡ йырҙарына таянып, башҡалар һоҡланмалы классик әҫәрҙәр яҙылырынан өмөтөн өҙмәгән һәм шулай тигән: *"Әгәр беҙҙең арабыҙҙа ысын композиторҙар һәм ошо ҡул теймәгән йәки бик аҙ ғына ҡул тейгән көйҙәрҙе йыйып бер эштәр эшләй башлаһалар, беҙҙә башҡа халыҡтар алдында маҡтанырға ярарлыҡ бер милли музыка килеп сығыр ине. Ике мең ҡәҙәре йылдарҙан бирле дауам итеп килгән милли төрөк музыкаһы аяҡҡа баҫһа, ул үҙенең ҡаты ҡулы менән беҙҙе икенсе милләттәрҙең мәғнәүи тәьҫирҙәренә кереп китеүҙән тотоп торор ине"* (11, 52-53).

**4. "Хәтирәләр"ҙә көнкүреш йолаларыбыҙҙың сағылышы**

Башҡорт халҡының йолаларына Әхмәтзәки Вәлидиҙең мөнәсәбәте башҡаларҙың башҡорт йолаһына ҡарашы хаҡында мәғлүмәт биреүендә лә асыҡ сағыла. Әгәр ҙә башҡорттоң йолаларына һоҡланып, уларҙы һаҡлап ҡалыу

тураһында уйланыусыларҙы хуплаһа, милләтең ғөрөф-ғәҙәтен боҙоп күрһәтергә йә уны хурларға тырышыусыларға мөнәсәбәте бөтөнләй кире: *"Башҡорт тормошоноң үҙенсәлектәрен тасуирлап әҫәр яҙған рустар ҙа булды. XIX быуаттың уртаһында Ырымбур губернаһының хәрби губернаторы, сығышы буйынса поляк, генерал Циалковский ҙа, Маҡар ауылында Йософ майорҙа мосафир булған сағында, башҡорт тормошоноң оригиналлегенә һоҡланыуын белдергән һәм башҡорт моңдарын бик ҡәнәғәтләнеп тыңлаған, башҡорттарға үҙ ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡларға саҡырып кәңәштәр биргән"* (12, 14).

*"Европа культураһының мөғжизәләрен күреп, үҙ халҡының рухи байлыҡтарынан баш тартырға әҙер торған уҡымышлылар"*ҙы нәфрәт менән телгә алһа (12, 14), милли ғөрөф-ғәҙәтте боҙоп күрһәтеүселәргә лә ҡарашы шундай. Һуңғыһына – Мәржәниҙең бер хатаһы хаҡында әйткәне миҫал. *"Ҡазанда үҫеп сыҡҡан Мәржәни беҙҙең яҡта "Шиһаб хәҙрәт" исеме менән билдәле булды. Уның исламиәт нигеҙҙәре хаҡындағы иркле фекерҙәре… "Бохара тибындағы муллалар" араһында ла ыңғай ҡаршыланһа ла, тарихҡа ҡағылышлы әҫәрҙәрендә* ***ҡаҙаҡ һәм башҡорт халыҡтарына ҡарата ҡайһы бер түбәнһетеү һүҙҙәре булғанлыҡтан, уны бик яратып етмәйҙәр ине. Мәржәни ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн Фаҙландың шаманлыҡ фетиштарына ҡағылышлы бер һүҙен яңылыш аңлатҡан һәм башҡорттарҙа ла "фаллос" культы булыуы хаҡында яҙған.*** *Ғәрәпсә бик яҡшы белгән Муллаҡай (ауылы –* **Ә.С.***) Ғабдулла хәҙрәт Мәржәниҙең "Мөстәфад әл-әхбар" исемле әҫәрен атайымдың күҙ алдында утҡа яҡҡан"* .

***а) Башҡорттарҙың кәсебенә бәйле йолалары хаҡында Әхмәтзәки Вәлидиҙең әйткәне һәм исемле солоҡ***

Әхмәтзәки Вәлиди һәр йоланы еренә еткереп тасуирлаған. Хәҙерге фольклорсыларҙан айырмалы рәүештә, көнкүреш йолаһымы ул, им-томмо, миҙгел байрамдарымы – бөтәһен дә ситтән күҙәтеүсе йә һорашып яҙып алыусы рәүешендә түгел, ә ҡатнашыусы һәм төп ролдәрҙең береһен башҡарыусы булараҡ тасуирлай. Был иһә уларҙың документаллеген һәм фәнни әһәмиәтен тәьмин итә лә инде. Иң әүәл миҙгел йолаларының тасуирланышын ғына иғтибарға алып ҡарайыҡ: *"Малсы иртә яҙҙа ни менән шөғөлләнер булған? Иртә яҙ менән мәҙрәсәнән ауылға мал ҡарарға ҡайта инем. Сөнки әҙерләнгән бесән март баштарында бөтә, йыла ағасының ботаҡтарын урмандан ҡырҡып алып ҡайтып, малға ашата торғайныҡ. Ҡар ирегәнгә тиклем үк малды ҡарҙан асылған ерҙәргә ҡыуып килтереп ашата инек. Үҙебеҙ ҙә яңы асылған ерҙәрҙә сыҡҡан һарына һәм ҡайһы бер башҡа тамырҙарҙы йыйып, бешереп ашай торғайныҡ. Тәбиғәт ҡосағында мал көтөп яңғыҙ йөрөүҙе, мәҙрәсәлә булыуға ҡарағанда, өҫтөнөрәк күрә инем"* (12, 37).

"Хәтирәләре"нән аңлашылыуынса, ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған, йыл тәүлегенең һәр миҙгеленә хас кәсеп, шөғөлдәрҙең һәр береһе йәш Вәлиди өсөн тәбиғи һәм мауыҡтырғыс тойолған. Ошо хаҡта бына ни тип яҙған ул. *"Иген эшен яратмай инем, мал өсөн бесән сабыу минең өсөн бер зауыҡ булһа, ураҡ менән иген урыу, эйелеп йөрөп эшләү ғазап ине, шуға күрә унда йөрөмәй торғайным. Барлыҡ эшебеҙ урманда була ине. Утыҙ саҡрымда, борондан ырыуыбыҙҙыҡы булған, әммә ҡаҙнаға алынған Айғыр үлгән тигән ерҙән беҙгә ҡаҙна йыл һайын бер аҙ урман бирер ине. Ағас киҫеп, ауылға һәм баҙар булған урындарға алып барып, айырыуса йүкә ағасының ҡабығын аҡкан һыуға һалып сеәтеп, һалабаш яһап һата инек" (12, 38).*

Һәр миҙгелдең – үҙ кәсебе, үҙ шөғөлө. Һәр кәсеп, шөғөлдөң – үҙ ҡыуанысы. Эштең береһен тамамлап, икенсеһенә тотоноу – бер ҡыуаныс, шул арала күңел асыуға форсат табыу – үҙе ҡыуаныс. Ағас, һалабаш кәсебе тамамланыуға Вәлиди, бесән ваҡыты еткәнгә тиклем, *"йәнә мал артынан Аҡбейек тарафтарына*

*йәйләүгә китеп, малдарҙы ҡарап, тоҙ биреп, ҡатындар әҙерләгән ҡымыҙҙы эсеп, башҡа кешеләргә ҡымыҙ эсергә ҡунаҡҡа барып, йәйләүҙәге уйындарҙа ҡатнашыр"* булған *(12, 38).*

Ошо урында Ә. Вәлиди хәҙер инде йола булараҡ ҡына түгел, исемдәре лә онотола башлаған бер миҙгел байрамы менән бер кәсеп төрө хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған. Тәүгеһе – "*Тәкә заманы*" тип, икенсеһе "*Биләм ҡарау*" тип аталыр булған. Уларҙы бына нисек тасуирлай "Хәтирәләр" авторы: "*Июндә, Тәкә заманы тигән һарыҡ һуя торған ваҡыт килеп еткәнсе, атайым һәм бәғзе ваҡыт әсәйем килерҙәр, малдарыбыҙҙы баҡҡан ғаиләләрҙә торорҙар ине.*

*Был ваҡыт умартасылыҡта Биләм ҡарау тип аталған эш иң зауыҡлы һанала. Солоҡтарға "буш ҡорт" күстәренең килеп урынлашыу-урынлашмауын йә иһә ҡырағай бал ҡорто күстәренең яңы айырылғандарының был умарталарҙы ни дәрәжәлә ҡабул итеү-итмәүен ат өҫтөндә ултырған килеш күҙәтеүҙән тора. Беҙҙең милкебеҙ иҫәпләнгән солоҡ ағастары тауҙарҙа йәки үҙәндә булғанлыҡтан, көнөнә һыбай килеш иң күбе утыҙ-ҡырҡ саҡрым юл үтеп, ун-ун биш умартаны ҡарап сығырға мөмкин. Йылына ни бары ун биш көн дауам иткән биләм ҡарауға мин дуҫым Ибраһим Ҡасҡынбай* (Ҡасҡынбай – Вәлидиҙең шәриҡтәше. Ул хәҙерге Бөрйән районы Яңы Мөсәт (Алағуян) ауылы егете булған. – **Ә. С.**) *менән бергә сыға торғайным" (12, 38).*

Ғөмүмән, йәш Әхмәтзәки өсөн солоҡ, умарта ҡарау — мауыҡтырғыс шөғөл булған. Был хаҡта ни яҙыуына иғтибар итәйек: "*Апрель аҙаҡтарында бал ҡорттары менән мәшғүл булдыҡ, йөҙҙән ашыу умартанан торған баҡсабыҙ ауылыбыҙҙан дүрт саҡрым алыҫлыҡта, Ҡарлы бүлектә иҫке йәйләү һәм зыярат булған еребеҙҙә урынлашҡайны. Унда аласыҡ – йәйләү өйө һәм ҡышын умарталар һаҡлау өсөн ыҙма бар ине. Шулай уҡ бейек ағастарҙың өҫкө ботаҡтары араһында урынлаштырылған, бал ҡорто күстәрен ҡундырыу өсөн ҡарағай ағастарына уйылып эшләнгән солоҡ умарталырыбыҙ ҙа булды. Улар йөҙ саҡрымға тиклем алыҫлыҡта төрлө ерҙә, төрлө тарафта урынлашҡайны. Апрелдә боронғо ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған был солоҡтарҙың, ҡырағай бал ҡорто ҡунһын өсөн, эсен таҙалап, балауыҙ һалыу эше башҡарыла. Быларҙы мин ҡустым Нурмөхәмәт һәм Ибраһим Ҡасҡынбай исемле дуҫым менән берлектә эшләй торғайным. Ибраһимдарҙың солоҡтары ла, беҙҙеке кеүек, күп ине" (12, 37).*

Әйткәндәй, әгәр ҙә мәгәр һеҙгә, бер-бер юл төшөп, Бөрйән районында Ибраһим Ҡасҡынбайҙың тыуған ауылы Алағуяндан (Яңы Мөсәттән) Ғәлиәкбәр ауылы яғына үтергә насип булһа, бермә-бер ҡасандыр Руф Игнатьев телгә алған Әлеш батырҙың исеме менән аталған аҡлан аша үтәсәкһегеҙ. Аңғарып барығыҙ. Юл яҡшы, тип һыпыртып үтеп китмәгеҙ. Шул аҡланға барып сыҡҡас та, уң ҡулда инде ҡыуарған, ләкин ыҙғыр елдәргә бирешмәй, бер ҡарағас солоҡ ултырыр булыр. Ныҡ ҡартайған ул ағас. Әҙәм ҡулының аяуһыҙлығы, тәбиғәттең рәхимһеҙлеге арҡаһында хатта күптән инде ҡыуарып ҡатҡан. Әммә ошо хәлендә лә, һомғол һынын терән тотоп, мин – мин икән дә, мин – кем икән, тигән кеүек, донъя менән бәхилләшергә теләмәй, ғорур баҫып тора ул. Әгәр ҙә һеҙ Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Алексей Кузнецовтың "Салауаттан һорау алыу" тигән картинаһы менән таныш булһағыҙ, иманым камил, бөйөк милли батырыбыҙҙың шундағы һынланышы, ирекһеҙҙән, күҙ алдығыҙға килгәндәй булыр. Шулай итмәй һуң! Исеме – есеменә! Был солоҡто *Әхмәтзәки Вәлиди солого* тип атаған бит минең яҡташтарым. Һуңғы һөйләмде ошо көйөнсә ҡалдырһаҡ, ул грамматистар телендә "кәм һөйләм" тигәнде хәтерләткәндәй итер. Шуға күрә лә "атаған" һүҙе алдына

“оло хөрмәт менән” тип өҫтәү дөрөҫ булыр. Ағас хәтлем ағасты хөрмәт итмәһәләр, уны кәртәләп үк ҡуймаҫтар ине бөрйәндәрем. 2005 йылдың йәйендә Иҫәнбикә Вәлиди Туған шул мөһабәт солоҡто күрмәгә Бөрйәнгә махсус рәүештә сәйәхәт ҡылды. Иманым камил, атаһының “Хәтирәләр” тигән китабы буйынса ғына түгел, унын үҙ ауыҙынан ишетеп, башҡорттоң солоҡ ябыу мәҙәниәте менән Төркиәлә сағында яҡшы уҡ хәбәрҙар булыуға өлгәшкән был ханым, ҡарт ҡарағас солоҡтоң ҡытыршы олонона уңлы-һуллы йөҙөн терәп, күҙенә йәш алғанында, атаһының ҡулдарын тойғандай булғандыр… Шулай булмай һуң! Был олонға ҡасандыр елкенеп торған йәшлеген кисереүсе Әхмәтзәкиҙең эшсән ҡулдары әҙ ҡағылмаған бит. Ҡырҙанырак ҡарағанда, күп нөктәләрҙе хәтерләтеп, өҫкә тартылған уйымдарҙың буйы еткәндәрен һыйпай-һыйпай, өҫтәгеләрен күҙҙән кисергәнендә, ҡайыш кирәмен һелтәй-һелтәй, аяҡтарын алмаш-тилмәш терәй-терәй үрләй барған сос солоҡсоно, уның йөҙөндә атаһының йәш сағын күргәндәй булғандыр, тим… Шул саҡта ул уйымдар атаһының эҙҙәре булып тойолғандыр ҡыҙына…

*б) “Ҡыҙ ҡыуыу” уйыны һәм “яңы типтәрҙәр”*

Ярышта, бәйгелә ҡатнашыу ҡомары йәш Әхмәтзәкиҙә көслө генә булған, күрәһең, тыуған ауылы Көҙәндән ете тау, ете йылға аръяғында ятҡан ауылға ятҡан шәриҡтәш дуҫы, йәш шағир Ибраһим Ҡасҡынбайҙың тыуған ауылы Алағуянға тиклем килеп етеп, ярыштарҙа ҡатнашыр булған. “*Ҡыҙ ҡыуыу*” тип аталған ярышта ла ҡатнашҡан ул. Бына нисек тасуирлай ул ошо йола уйынын: “*Йәштәр араһында егет менән ҡыҙ һыбай ҡыуышып уйнай торғайны. Ҡыуып етә алмаған егеткә ҡыҙҙан ҡамсы тәтеүе, ҡыуып еткәне ҡыҙҙы үбергә хаҡлы булыуы – беҙҙән алда йәшәгән быуындарҙан ҡалған ғәҙәт. Ибраһимға әкрәбә* (ҡәрҙәш – **Ә. С.**) *тейеш Өркиә исемле бер ҡыҙ тап шундай ҡыйыу ҡыҙҙар иҫәбенән ине. Ибраһимдың Аҡ килен тип йөрөтөлгән ҡатыны был ярыштарҙа тамашасы булараҡ ҡатнаша торғайны. Мин бәләкәй саҡта ауылыбыҙҙағы Маһия һәм Гөлсөм исемле өлкән апайҙар һыбай йөрөүҙә егеттәрҙән ҡалышмаҫтар ине. Әммә ауылыбыҙға күсеп килгән татарҙар мосолман мәҙәниәтенә бик ныҡ бирелгән ҡатламды тәшкил иткәнлектән, уларҙың йоғонтоһо аҫтында, беҙҙекеләргә лә йөҙөн ярым ҡаплап, саҡ ҡына күрһәтеп йөрөү ғәҙәте инде. Бөрйәндәрҙә иһә урыны менән боронғо ғәҙәттәр оҙаҡ йәшәп килде. Шәп йүгерек юрғаға атланған Өркиә артынан ҡыуып етеп килгән саҡтарҙа ла, егеттең үбеүенән һис тартынмаҫтан, боронғо дастандарҙа һөйләнгән “Ҡара юрға “ йырына оҡшатып, атын дәртләндереп, көйләп барыр ине. Мәғәнәһе: “Үптермәҫтен туташтың, ҡостормаҫмын туташтың” (“Үптермәм дә бикәсте, ҡостормам да бикәсте”). Был шиғырҙа “бей ҡыҙы” һүҙе урынында “бикәс” һүҙе ҡулланыла. Ҡасҡынбайҙарҙың ауылында ул һүҙ дөйөм башҡорт әйтелешенсә “бей ҡыҙы” мәғәнәһендә түгел, “бикәс” мәғәнәһендә әйтелер ине. Һәр хәлдә алда әйтелгән һәм “ҡобайыр” тип йырланган халыҡ шиғырҙарында нуғайҙарҙың тәъҫире бар ине. Мин һуңынан ғына бының айышына төшөндөм. Ярыштар ваҡытында мин ҡайсаҡ Өркиәне ҡыуып етеп, белгенән тота торғайным, әммә үпмәй инем, сөнки беҙҙең нәҫелебеҙҙә ҡыҙҙы кеше күҙе алдында үбеү ғәҙәте булманы. Тамаша итеп тороусы өлкәндәр: “Беҙ үбер инек! Һин дә үп!” – тип көлөшөрҙәр, мине шаяртырҙар ине. Ҡайһы ваҡыт Өркиә, мине ҡыуып етеп, атты ҡамсылай торғайны. Ул саҡ Аҡ килен: “Һыҙыр шул татарҙы!”, – йәғни “Ҡамсы менән арҡаһындағы тиреһен һыҙыра һуҡ шул татарҙың!”, – тип ҡысҡырыр ине. Сөнки беҙ – татарҙар өсөн башҡорт, ә бөрйәндәр өсөн татар инек” (12, 42).* Вәлидиҙең һуңғы һөйләмдә әйткәненең дөрөҫ икәнен был юлдарҙың авторы ла геуаһлай ала. Эйе, бөрйәндәр (ә мин – бөрйән) *–тар, - тәр* ялғауы урынына *– лар, - ләр,* тип әйтеүселәрҙе *лә,*

хатта “ç” өнөн ҡулланыусыларҙы ла татар иçәпләй торғайнылар. Шулай үҙ манарабыҙ бейеклегенән ҡарау һөҙөмтәһендә, этник яҡтан башҡорт булып та, башҡорт әҙәби тел нормаларын үҙләштермәгән, “ç” урынына “с” өнөн, “с” урынына “ч” өнөн ҡулланғандарҙы, уйлап та тормаçтан, филолог, диалектолог, этнолог, антрополог вазифаһын үҙ өçтөнә алыусылар әле лә “татар” тип уларҙы үҙ милләтебеҙҙән биҙҙереүгә булышыуын дауам итә. Ә шундай биҙҙерелеүгә дусар ителеүселәр бөгөн нимә ти? “Ҡазанға барһаҡ:

– Һеҙ татар түгел, – тиҙәр. Өфөгә килһәк:

– Һеҙ башҡорт түгел, – тиҙәр. – Беҙ кем һуң?! – тиҙәр. Шулай беҙҙә яһалма рәүештә “Яңы типтәрҙәр” хасил була тора! Шуға күрә лә Вәлидиҙең: “*Беҙ – татарҙар өсөн башҡорт, ә бөрйәндәр өсөн татар инек*” тигәнен “*Аңлаганга – ишара*” тип тә уҡыу кәрәк.

***

Дөйөмләштереп шуны әйтергә генә ҡала. Ә. Вәлидиҙең яҙмаларына теркәлгән йола, кәсеп һ.б. хаҡындағы фактик материалдар этнография, фольклор күҙлегенән дә, культурология йәһәтенән дә әле сағыштырмаса юçыҡта тәрәндән өйрәнеүсеһен көтә. Ә улар бындай өйрәнеүгә лайыҡ.

### 3. Ә. Вәлидиҙең эпик ҡомартҡылар менән ҡыҙыҡһынғаны

Ә. Вәлидиҙең хеҙмәттәрендә эпик ҡомартҡыларыбыҙ йыш ҡына телгә алына. Автор уларға йә үҙенең таныш-белеше, әҡрәбәләренең рухи донъяһын асыу маҡсатында йә тарихи мәғлүмәттәрҙе ҡеүәтләү өсөн мөрәжәғәт итә.

#### *а) Ун дүрт йәшендә яҙып алган эпос менән ғүмер буйы ҡыҙыҡһынганы*

“Бөрйән башҡорттары араһында” тигән юлъяҙмаһында әйтеүенсә, шул сәйәхәте ваҡытында Бөрйән ырыуынан берәү уға хәҙерге Баймаҡ районы Темәс һәм Күсей ауылдарында “Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосына бәйле “Мораҙым” көйөн белеүсе барын әйтә. Әммә көн торошо авторға уны юллап йөрөргә форсат бирмәй. “*Мин быны ишетергә бик теләнем. Сөнки ул гәйәт ҡыҙыҡлы тарихи бер йырҙың көйөләр. Алтын Урҙа ханы Туҡтамыштың вәзире Иҙеүкәй үҙенең балаһы Нуретдин (Мораҙым) менән боҙолошҡан. Ошо хәдис хаҡында бөтөн шимали төрктәрендә әллә ни ҡәҙәре хикәйәләр вә йырҙар һөйләнелә. Радлов, Потанин, Мелиоранский, Вәлиханов вә гәйреләр был хаҡтагы хикәйә вә йырҙарҙы яҙып алгандар. Башҡорт араһындагы “Мораҙым” йыры “Йәдкәр” сәхибе Өмөтбаев тарафынан яҙып алынган, шул китабында баçылган. Әммә уның йырын, көйөн башҡорт ауыҙынан, ҡурайҙан ишетеп яҙып алганда, ул Хоҙа тарафынан бирелгән донъя баһалы бер нигмәт булыр ине. Хоҙа насип итерме шуны ишетергә вә яҙып алырга? Тик был юлы насип булманы, ямгырҙар ул ергә барып етергә ирек бирмәнеләр. Алланан һораным, шуны ишетһәм икән, тинем. Сөнки ул беҙҙең шимали урта төрктәрҙең мәңгелек бер тарихи романылыр. Халыҡ уны хәҙер биш йөҙ йылдан бирле һаҡлап килә. Әгәр бөтөп югалып китһә, ҙур бәхетһеҙлек булыр,*”– тип яҙыуына ҡарағанда (11, 46), Ә. Вәлидигә “Иҙеүкәй менән Мораҙым” әçәре электән таныш булған, тип әйтергә була.

Атаһының ҡустыһы Вәли мулла менән уңғуттарҙан Хисам ағайы, “Хәтирәләр”ҙә әйтелеүенсә, “боронғо дастандар”ҙы бик күп белгән. Ә. Вәлиди шул “бик күп” эсенән Алтын Урҙа дәүеренә ҡараған Едигей, Ерәнсә, Исай уғлы Әмәт һ.б. тураһындағы шиғри хикәйәттәрҙе айырым күрһәтә. (12, 9). Әйткәндәй, Вәли муллала фарсыса, ғәрәпсә яҙылған дастандар ҙа булған. “*Мин, бәләкәй булыу сәбәпле, унан Иҙеүкәй, Ерәнсә, Исай углы Әмәт кеүек тик төркисә милли дастандарҙы өйрәнә алдым*”, – тип яҙа аҙаҡ Вәлиди үҙенең “Хәтирәләр”ендә (12, 13).

Был мәғлүмәттәр шуныһы менән әһәмиәтле. Быға тиклем беҙгә “Заятүләк менән Һыуһылыу”, “Хикәйәи Күсәкбей”, “Йософ менән Зөләйха”, “Сыңғыҙнамә”, “Аҡһаҡ Тимер”, “Буҙйегет”, “Сура батыр”, “Заманалар ҡиссаһы”, “Мөйтән бей”, “Түлле Мәмбәт” ише күләмле генә ҡомартҡыларыбыҙҙың быуаттар төпкөлөндә үк аҡ ҡағыҙға теркәлеп, халҡыбыҙ араһында күсеректәр рәүешендә лә таралыуы, шундай яҙмаларыбыҙҙың татар уҡымышлыларына ла мәғлүм булыуы хаҡында хәбәрҙар инек (24, 357, 367 – 393; 5, 383; 6, 217 – 220; 364; 7, 11 – 142, 445 – 451, 193 – 263, 507– 515; 8, 143 –174, 258 –270, 275 – 371, 547 – 554, 574 – 592). Вәлидиҙең шул әйткәне ошоноң кеүек миҫалдар өсөн – иш янына ҡуш булды.

Тимәк, борон эпос кеүек күләмле әҫәрҙәрҙе аҡ ҡағыҙға теркәп ҡуйыу, шәжәрә яҙыу менән бер рәттән, фарыз йола төҫөн алғылаған.

Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ: 1911 йылда донъя күргән тәүге ғилми хеҙмәте булған мәҡәләһен Вәлиди Иҙеүкәй тураһындағы дастанға бағышлаған булған. Үкенескә ҡаршы, ул мәҡәләһе беҙгә мәғлүм түгел. Вәлидиҙең башҡортса баҫылған ғилми хеҙмәттәренең библиографияһында ла күрһәтелмәгән.

“Хәтирәләр”енән аңлашылыуынса, Иҙеүкәй хаҡындағы эпос Вәлиди өсөн бик ҡәҙерле булған. Юҡһа, ҡыры сыҡкан һайын, уны телгә алмаҫ ине. Бына шуға тағы ла бер миҫал. Егерме йәшендә Әхмәтзәки дингә үҙенең мөнәсәбәте хаҡында ете битлек яҙма (трактат) әҙерләгән. Заманында өйҙә генә түгел, тирәйүндә шау-шыу тыуҙырған был яҙмаһында йәш ғалим “бәйғәмбәрҙәр, кешеләр үҙҙәренең фекерҙәрен төшөндөрөү өсөн, тарихи хикәйәләрҙе халыҡ аңына барып етерлек һәм инанырлыҡ формала аңлаталар” тигән фекер үткәрә (12, 107). Ҡушмөгөҙлө Зөлҡәрнәй атлы йыһангир (ә ул Ҡөрьәндә 24 тапҡыр телгә алына) хаҡындағы ҡиссаны шуға миҫал итеп килтерә һәм: “*Әгәр беҙҙең төрөктәрҙән дә бәйғәмбәрҙәр үҫеп сыға ҡалһа, улар ҙа, теге йәки был төшөнсәне аңлатыу өсөн, төрөк дастандарына, мәҫәлән, хыянатсыл тәбиғәтле кешене тасуир итеү өсөн, уғыҙ дастанындағы – Ҡолләрҡин Ябғуның ҡатыны хаҡындағы ҡиссаларға, ғәҙеллекте аңлатыу өсөн, “Иҙеүкәй” дастанындағы “Иҙеүкәйҙең дөйәһе” кеүек ҡиссаларға таянырҙар ине һәм фекерҙәрен төрөктәр ышанырлыҡ формала аңлатырҙар ине*”,– тигән (12, 108). Артабан автор беҙҙең өсөн мөһим ике нәмәгә иғтибар итә: беренсенән, Нуретдиндың бөйөк диван бейе, йәғни “Ҡатай ырыуы әширәтенән” бөйөк вәзире булғанын әйтә (15, 37); икенсенән, “*Нуретдин бей башҡорттар араһында Моралым исеме менән билдәле, уның хаҡындағы тарихи шиғырҙар һәм уға бағышланған көйҙәр халыҡ араһында әле лә йәшәп килә*” тип үҙенең “Бөрйән башҡорттары араһында” тигән мәҡәләһенә һылтанған (15, 38).

Шуныһы ла мәғлүм булһын: “Иҙеүкәйҙең Мораҙымға үпкәләгәне” йәки “Иҙеүкәй менән Мораҙым” көйө яңы быуат башында ошо юлдарҙың авторының ҡулына ла юлыҡты. Уны XX быуаттың 70-се йылдарында күренекле музыка белгесе Фәрит Хөснулла улы Камаев (1944 – 1993) Баймаҡ районы Өмөтбай ауылында 70-80 йәштәрҙәге Ғүмәров Хәләфтән магнитофон таҫмаһына яҙып алған булған.

“Башҡорттар тарихы”нда ла Ә. Вәлиди тарихи шәхес булған Нуретдиндең, дастандағы һымаҡ уҡ, үҙ атаһы менән ыҙғышыуына диҡҡәт иткән. Шул ыҙғыш урынын атап уҡ киткән. Юғарыла килтерелгән цитатанан ул урындың Илек йылғаһы буйында булыуын белгәйнек инде. 1913 йылда яҙған “Бөрйән башҡорттары араһында” тигән мәҡәләһендә ул ыҙғышты Ә. Вәлиди аталы-уллы “боҙолошҡан” тип кенә билдәләһә, “Тарих”та ул “боҙолошоу” нимәгә алып барып еткереүен дә конкретлаштыра: ул “ҙур һуғыш” төҫөн алған, имеш.

Ә. Вәлиди дастанды тарихи факт менән сағыштырыу бурысын үҙ өҫтөнә алмаған. Алдына ундай маҡсат та ҡуймаған. Шулай ҙа дастан рәүешендәге художестволы фактҡа әүерелгән тарихи факттың үҙ үҙенсәлеге барлығы хаҡында фекер йөрөтөргә уҡыусыға форсат биргән. Эпос буйынса (һәр хәлдә, уның башҡорт версияһында) Нуретдин – башҡорт батыры. Ә тарихта ул манғыт, йәғни нуғай затлы сардар булған. Дастан буйынса, уның атаһы – Иҙеүкәй, ә "Тарих" Туҡтамыш хан нәҫеленән булған манғыт Әбүгә бей тип күрһәтелә.

Ә. Вәлиди үҙенең "Тарих"ында шул заттарҙың шәжәрәһен төҙөрлөк исемдәрҙе лә атаған. Шунан сығып Нуретдин-Мораҙымдың гениологияһын бына нисек итеп күрһәтергә була.




"Башҡорттар тарихы"нда Мораҙым-Нуретдиндың белгән биләмәләре лә күрһәтелгән. Урус, Тиңәхмәт, Иштирәк мырҙалар Башҡортостанда, Яйыҡ буйҙарында, хакимлыҡ итә. Мамай мырҙа (Шихмамайҙыр, моғайын). Башҡортостандың урта төшөндә – Ағиҙел, Ирәмәл тирәһендә, Яйыҡ башы Ҡара урман тирәһендә йәйләй, ҡышлау урыны – Яйыҡ тамағындағы Өйшөк, Биштамаҡ тирәһе. «Өйшөк – хәҙерге Гурьев ҡалаһы урыны» тигән белешмә лә бирә Вәлиди.

***б) Батшалыҡтың ҡотон алған башҡорт ихтилалдары хаҡындағы күҙәтеүҙәренең эпик ҡомартҡыларыбыҙҙы аңларға булышҡаны, эпостарҙың тарихи сығанаҡ хеҙмәтен үтәгәне***

1734 – 1758 йылдарҙа бер-береһен Ырымбур виләйәтендә вәлилектә алмаштыра килгән Татищев, Урусов, Кирилов, Неплюевтарҙың тырышлығы менән Башҡортостан төньяҡ-көнбайыштан да, көньяҡ-көнсығыштан да 70-ләгән ҡәлғәләр менән уратылып алына. Был, берҙән, башҡорт ерен колонизациялау сәйәсәте көсәйә барғанда, урындағы төп халыҡ улай-былай ыҙғыш күтәргән сүрәттә, уны ауыҙлыҡта тотоу өсөн; икенсе яҡтан, шул сәйәсәтте артабан Ҡаҙағстан, Урта Азияға, Көнсығышҡа уңышлы (Петр I ҡалдырған ун өс пунктлы васыятҡа ярашлы – Ҡыҙыл диңгеҙгәсә) йәйелдереү өсөн кәрәк була. Башҡорттар эштең ҡайҙа барғанын яҡшы аңлаған. Берҙән, ҡала, крепость төҙөү эшенә ҡамасаулыҡ итергә тырышып, әлдән-әле уларға һөжүм итеп торған.

Икенсе юлды ла күҙ уңынан ыскындырмағандар булһа кәрәк. Һәр хәлдә, Аҡай яуы хаҡында яҙғанда, Ә. Вәлиди шуға иғтибар иткән. "Аҡай үҙе, Көнсығыш Башҡортостандағы Тамъян ырыуы бейе була тороп, Минзәлә янында йәшәгән Йәнәй башҡорттарынан ер биләмәһе алып, был ҡаланан 50 саҡрымда үҙ хужалығын ҡорған" (6, 124). Үҙенең төп төйәгенән тыш, уның биләмәләре Нуғай, Уса юлдарында ла булған. Әлегәсә Мәләүез, Саҡмағош райондарындағы берәр ауылдың – Тамъян, Шарандағы бер ауылдың – Иçке Тамъян (яңыһы ҡайҙалыр — мәғлүм түгел), Миәкәлә бер ауылдың Тамъян-Таймаç тип аталыуының тарихы, ихтимал, йә шул Аҡай бей йә уның ата-бабалары йәшәгән дәүерҙәргә барып тоташалыр. Риүәйәттәр быңдай хәлде, ғәҙәттә, малдары ятраҡан урынға эйәләре күсеп килеү менән йә күберәк ер биләп ҡалыу теләге менән аңлата. Һәр хәлдә, теге йә был ырыу этнонимы менән атап йөрөтөлгән ауылдарҙың, йәйләүҙәрҙең тегендә лә, бында ла осрауы – осраҡлы күренеш түгел. Быңдай биләмәләр, Ә. Вәлиди әйтеүенсә, "мотлаҡ рәүештә стратегик маҡсат менән ҡоролған булырға тейеш" тигән фекер үткәрә (6, 124). Быны колонизаторҙар ҙа яҡшы аңлаған булғанға оҡшай. Юҡһа, Аҡай менән ҡан ҡәрҙәшлек бәйләнешенә ингән ҠаЗан сыуаштарын уға ҡаршы һөскөртөп, мал-монятын талаттырмаçтар ине. Аҡайҙың шул ҡараҡтарға күрһәткән язаһынан ҡасып ҡотолған бер сыуаштың ошағы буйынса, уны ҡулға алып, аҙаҡ язалап үлтермәçтәр ине. Ошолар тураһында яҙғанда Ә. Вәлиди яҙма дастан рәүешендә мәғлүм "Хикәйәти Аҡай" рисәләһенә таянған.

Тоҡондағы Аҡайҙы ҡотҡарыу маҡсатында, башҡорттарҙы Минзәлә ҡәлғәһендәге рус башлыҡтарына тыныс юл тәҡдим итеүҙәре, уларҙың үтенесенә властарҙың ҡолаҡ һалмауы арҡаһында ла, яңы ихтилал тоҡанып китеп, яуҙа ла, карателдәрҙең ҡәбәхәтлектәре арҡаһында, уларҙың күпләп ҡырылыуы, ҡайһы бер ҡәрҙәштәрҙең Тәфтиләү (Тевкелев) ише христианлашҡан батша ярандарының ҡотҡоһона бирелеп, уларға яфа өçтөнә яфа өçтәүҙәре хаҡында бәйән иткәндә иһә, Ә. Вәлиди шул яҙма дастан хаҡындағы трагик пафослы әçәр сюжетына эҙмә-эҙлекле таянған. Был иһә – эпик ҡомартҡыны уның тарихи сығанаҡ рәүешендә файҙаланыуына миçал.

"Хәтирәләр"ҙә дастан ҡаһарманы Сура батыр нәçелдәре хаҡында ла мәғлүмәт бар. Тик бик үк аныҡ түгел: Ҡазанға "ҡаттан юл һалған" Сура тураһында һүҙ барамы, әллә Брагиндың башына еткән Сураш хаҡындамы? Һуңғыһы хаҡында булғанға оҡшай. Һәр хәлдә, Брагин ваҡиғаһына бәйле, Әмин ауылы телгә алына. Бына ни ти Вәлиди: "Кире ҡайтҡанда (һүҙ атаһы менән Троицк ҡалаһына барып, Зәйнулла шәйехте күреп ҡайтыуы хаҡында. – **Ә. С**.) атайым үҙҙәрен дастан ҡаһарманы Сура батырҙың ейәндәре тип иçәпләгән Мәһәҙи һәм Әмин ауылы мосолман казактары, Түңгәүер, Тунғатыр, Тамъян һәм Ҡатай ҡәбиләләре юлы менән килеп, ундағы дуçтары менән күрешер ине" (12, 44).

Билдәле булыуынса, 1755 йылғы ихтилалда баш күтәреүсе башҡорттарҙың 50000 ғаиләһе, эҙәрлекләүҙәрҙән ҡасып, ҡаҙаҡтар яғына сыға. Әммә Неплюев менән Тевкелевтарҙың, мәкерле рәүештә ҡаҙаҡтарҙы шул башҡорттарға һөскөртөүе һөҙөмтәһендә, Рәсәй батшалығына ҡаршы күтәрелгән яу ике ҡәрҙәш халыҡтың үҙ-ара низағлашыуына әүерелә: ҡаҙаҡтар башҡорттарҙың ирҙәрен ҡыуып ҡайтара, бала-саға, ҡатын-ҡыҙын үҙҙәренә алып ҡала. Властарға шул ғына кәрәк була. Кире иленә ҡайтҡан башҡорт ир-аты, ҡоралланып, ҡаҙаҡтарға һөжүм итә. Бына шулай барымталашыу, ҡарымталашыуҙар башлана. "Ҡарас менән Аҡша" эпосы бына шул нигеҙҙә тыуған, тимәксе Ә. Вәлиди үҙенең "Башҡорттарҙың тарихы"нда һәм Ҡарас батырҙың Аҡшаны үлтереүе,

ләкин батырға торошло хөрмәт менән уны ерләүен бәйән иткән иң һуңғы ун алты юллыҡ ҡобайырҙы тулыһынса килтергән. Ә ул шулай тамамлана:

*Ут йөрәк арыҫтандай Аҡша батыр,*
*Ҡуяйым тәрбиәләп һине үҙем.*
*Таш менән ҡорған итеп ҡаҙҙым гүрең,*
*Аталыр исемең менән ятҡан урының,*
*Тиһендәр: "Батыр үткән беҙҙән борон!"* (15, 160).

Эпос был осраҡта булып үткән яуҙы батша властарының үҙҙәренең колонизаторлыҡ маҡсатын алға һөргән нигеҙләнгән милли сәйәсәттә оҫта файҙаланыуын һәм шуның һөҙөмтәһен иллюстрациялаусы материал итеп ҡулланылған. Ә был ҡулланыштың идеяһы шунан ғибәрәт. Неплюев: "Мин ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ менән башҡорт араһын шул тиклем бутаным, киләсәктә улар, берләшеп, ниндәйҙер эш сығарырҙар, тигән ҡурҡыныс юҡ", – тип маҡтанһа ла, (15, 161), Нурғәле, Айсыуаҡ һәм Ирғәле солтандарға ҙур-ҙур бүләктәр ебәреп, улар ҡулы аҫтындағы ҡаҙаҡ ырыуҙарының башҡорттарға ташланыуына ирешһә лә (15, 158– 189), Кесе Йөҙҙөң Жағылбайлы, Табын, Тама, Ете ырыу ҡәбиләләре уларға ҡушылмай, хатта ки Көсөк хужа исемле ҙур абруйлы бер ҡаҙаҡ, "рус ҡотҡоһона алданып", ҡәрҙәштәренең бер-береһенә ташланыуы – яҙыҡ эш, тип өгөт-нәсихәт алып барған (15, 161). Улай ғына ла түгел, тәүҙә Неплюевҡа тоғролоҡтарын аңлатып, Рәсәйгә күсеп китәсәктәрен белдергән солтандарҙың береһе, Нурғәле атлыһы, аҙаҡ Ырымбур губернаторына яҙған хатында, һеҙгә тоғро ҡалыуым һөҙөмтәһендә, милләтем ҡаршыһында хурға ҡалдым, тигән.

Бына ни өсөн Ә. Вәлиди "Ҡарас менән Аҡша" эпосының һуңғы өлөшөнә генә иғтибар иткән икән. Ә уның, әле әйтелгәндәр кимәленән ҡарағанда, Аҡша батырҙың, ҡотҡоға бирелеп кенә барымтаға килеүе аңлашыла. Ҡарастың уны хөрмәтләп ерләп, уға таш ҡорған ҡорауы, башы осона бер һаҙаҡ ҡаҙап ҡуйыуы – бына щуны иҫтә тотоуы һәм ҡаҙаҡтың бығаса тирә-йүндә дан алған батырлыҡтарын онотмауы, шуларҙы үҙенә өлгө тип белеүе менән аңлатыла.

***в) Әҙәм өлгө алырлыҡ арғымаҡ һәм ата йорто – алтынбишек икәнен раҫлаусы Ҡуңыр буға***

"Ҡараһаҡал", "Ҡараһаҡал менән Ҡара ат" иртәктәре бер үк ваҡытта йыр һәм уның тарихи рәүешендә башҡарылыусы "Ҡара юрға", "Аҡһаҡ ҡола", "Ҡуңыр буға" ише эпостар традицияһы буйынса һөйләнгән сәсмә һәм көйләнгән теҙмә-телмәр рәүешендә мәғлүм "Ҡара ат" тигән версияһы буйынса, батша властарына ҡаршы сығып, бола күтәргәне өсөн, ҡулға алынған 120 башҡорт батырын язанан ҡотҡарыусы итеп күрһәтелә аҡыллы яу аты. Йәнәһе лә, карателдәр башлығы булған генерал "Бына минең шәп йүгерек аттарым бар. Был аттарым батшалар бәйгеһендә лә уҙып йөрөнө. Шул аттарҙы ла уҙырлыҡ йүгерек ат табып бирһәгеҙ, батырҙарығыҙҙы ла ҡотҡарам, ерегеҙҙе лә кире бирәм" тигән шарт ҡуя була башҡорттарға. Халыҡтың күҙ терәп торған шәп аты – Ҡара ат үтенесен, сәсәндәрҙең:

*"Алға ғына ынтыл, ай, Ҡара атым,*
*Елберҙәтеп ҡырас ял осоң!*
*Аяма ла йәнең, һай, Ҡара атым,*
*Йөҙ егерме батыр ҡаны өсөн!"–*

тип йыр йырлап, дәртләндереүе, ҡеүәтләүе буйынса беренселекте ала. 120 батыр ҡотҡарыла. Алдағы көрөшкә әҙерләнгәндә, һыналған батырҙарын

һаҡлау хаҡында хәстәрлек күреү кәрәк икәнен эпоста халыҡ бына шулай образлаштырған.

Ә. Вәлиди үҙенең хеҙмәттәрендә "Ҡараһаҡал", "Ҡара ат" йәки "Ҡараһаҡал менән Ҡара ат" тип аталған эпосты телгә ала алмай. Әммә төрлө урында төрлө ҡушаматтар алып, йәшенеп йөрөгән, башҡорт халҡын азатлыҡты яулап алырға өндәгән һәм үҙе шуға әйҙәгән Ҡараһаҡал хаҡында әйткәне уның һәм ул менгән данлыҡлы арғымаҡ иҫтәлегенә бағышланған эпик ҡомартҡы – йырҙың йөкмәткеһен тәрәнерәк аңларға булыша.

Вәлидиҙең "Хәтирәләр"ендә шундай бер миҫал да бар. Ул ҡарамаҡҡа эпис ҡомартҡыһының да, уның төп ҡаһарманын да – уларҙың икеһенең береһен дә хәтерләтерлек түгел. Бына ул миҫал тигәнем: "Ерҙәребеҙ һәм көтөүлөктәребеҙ рус хөкүмәте тарафынан ҡаҙнаға тартып алынғалыҡтан, беҙҙекеләр йәйләү тормошон күптән ташлағайны. Ауылдағы йортобоҙ янында Хан йәйләүе һәм Ҡарлы бүлек тауында йәйләү аласыҡтары ҡалғайны әле. Малдарыбыҙ йәйләү тормошонан әле булһа ваз кисмәгән. Улар апрель баштарында уҡ, беҙҙән рөхсәт-фәлән һорап тормаҫтан, Мәсем һәм Аҡбейек йәйләүҙәренә китә һәм унда көҙгә тиклем ҡала торғайны. Иҫке йәйләүҙәребеҙ Ибраһим Ҡаҫҡынбайҙарҙың, йәғни уларҙың Алағуян тигән ауылының ере ине" (12, 37).

Әхмәтзәки Вәлиди үҙе күҙәткән һәм теркәп ҡалдырған ошо хәл, йәйләүгә сығыу мәле еткәс тә, малдарҙың үҙ белдектәре менән йәйләүгә йүнәлеүҙәре хаҡында уҡығас, биолог кеше: "Шартлы рефлекс бына нимә эшләтә!" – тип ҡуйыуы бар, телен шартлатып. Эйе, ул хаҡлы булыр. Фольклорсы иһә шунда уҡ "Ҡуңыр буға" эпосын иҫкә төшөрөр. Әгәр Ҡуңыр буға атлы затлы үгеҙҙең Таңдыса атлы эйәһе килен булып төшкән ерҙә тыуып та, йылдар үткәс, бөтә малды эйәртеп, үҙе (йә әсәһе) тыуған төйәккә ҡайтып төшөүен быҒаса идея кимәлендә: "Бына нисек була ул тыуған ер, ата йорто тойғоһо! Малдың малы сит-ят ерҙә тоҡа тапмай, илен һағынып ҡайтҡас, әҙәм балаһына ни һан!" – тип аңлатыу менән сикләнһә, Вәлидиҙе уҡығас, теге биологҡа ҡушылып: "Хикмәт унда ғына түгел икән дә, шартлы рефлекс та үҙенекен иткән, имеш", – тимәйенсә сараһы булмаясаҡ.

Әхмәтзәкиҙе бала саҡтан уҡ ҡыҙыҡһындырған төрки эпик ҡомартҡыларының береһе "Уғыҙнамә" булған. Аҙаҡ Төркиәлә йәшәгән дәүерендә был дастанды ул, ғилми аңлатмалары менән бергә, айырым китап итеп баҫтырып сығара.

Урта Азияға тәүге сәйәхәте ваҡытында танышҡан башҡорт сығышлы ғалим Ә. Ә. Диваев менән бәйләнеште Ә.Вәлиди ташламай. Уның ғилми эшмәкәрлегенә 25 йыл тулыу уңайы менән ике мәҡәлә яҙып баҫтыра. Уларҙа был тикшеренеүсенең этнография, фольклор, тел буйынса һәм фән өсөн ҡиммәтле бик күп материал йыйыуын, баҫтырып сығарыуын билдәләп, шуларға: "*Әбүбәкер әфәнде йыйған нәмәләр телебеҙ һәм халҡыбыҙ өсөн баһалап бөткөһөҙ бер хазиналыр. Әгәр асыл төрки телендә лә сығып ҡуйһа, ул ваҡыт уның милли тормошобоҙ өсөн булған ҡәҙәре ҡиммәте тағы артыр ине* (14, 112)... Ун томға (1600 биткә) барып еткән әҫәрҙәрендә ул үҙ эсендә тороп белгән ҡырғыҙҙың **бишегенән алып ҡәберенә саҡлы булған тормошон, былина, поэма, хикәйә, мәҫәл, ендәр хаҡындағы хикәйәләр,** риүәйәттәр, мәҡәлдәр, таҡмаҡтар, йомаҡтар, бишек йырҙары, туй йолаһы, үләндәр; бала, егет һәм ҡыҙҙарҙың уйындары, инаныу, арбау, төш юрау, тәжрибәләр, баҡсылыҡ ғәҙәттәрен,

ғөмүмән, был тормоштоң һәммә яҡтарын энәһенән ебенә саҡлы асып бирҙе” (13, 114), – тип юғары баһалаған. Был һүҙҙәрҙе, түкмәй-сәсмәй, Әхмәтзәки Вәлидиҙең үҙенә ҡарата ла әйтеп була торғандыр. Ни өсөн тигәндә, ул да, Әбүбәкер Диваев һымаҡ, халыҡ ижады өлгөләренең рухын үҙ күңеленә бала саҡтан уҡ һеңдергән. Ул да ишеткәнен, күргәнен аҡ ҡағыҙға теркәй-теркәй йөрөр булған. Ул да, Диваев һымаҡ, фольклор өлгөләрен йыйыу менән дә шөғөлләнгән. Тик, Диваевтан айырмалы рәүештә, халыҡ ижады өлгөләрен, беҙгә мәғлүм булыуынса, “Уғыҙнамә”не, Әхмәт Ибн Фазлан теркәп ҡалдырған йола күренештәрен һәм мифологик легендаларҙы иҫәпкә алмағанда, мәҡәлә һәм хәтирәләрендә телгә алыу менән генә сикләнә. Әммә Истамбулдағы йортонда һаҡланған архивында, улы Сүбедәй менән ҡыҙы Иҫәнбикә ханымда фольклор өлкәһенә ҡағылышлы материалдары һаҡланыуы ла бик ихтимал. Уларҙы асыҡлап, ғилми әйләнешкә индереү беҙҙең бурыс булып ҡала.

***

Дөйөм алғанда, шуны билдәләргә ҡала:

1. Беҙгә мәғлүм ҡайһы ғына хеҙмәтенә күҙ һалма, уларҙа мотлаҡ рәүештә фольклорҙың, йолаларыбыҙҙан миҫал телгә алыныуына, айырым өҙөктәргә юлығаһың.

2. Уларға автор йә үҙенең йә таныш-белештәренең, яҡындарының рухи яҡтан күңеленең ни тиклем бай икәнен күрһәтеү өсөн мөрәжәғәт итә, йә үҙенең, башҡаларҙың әйткәндәрен ҡеүәтләү, ҡай саҡ инҡар итеү өсөн мөрәжәғәт итә.

3. Ул мөрәжәғәт иткән ундай миҫалдар халҡыбыҙҙың билдәле дәүерҙәге интеллектуаль кимәлен, милли үҙенсәлектәрен – менталитетын күҙалларға мөмкинлек бирә.

4. Ә. Вәлиди фольклорҙы үҙенең хеҙмәттәрендә иллюстратив материал итеп тә оҫта файҙалана белгән. Урыны менән ул тарихтан, этнографиянан килтергән миҫалдар, киреһенсә, фольклор менән ауаздаш булып, уны нығыраҡ аңларға булыша.

5. Әйтелгәндәр барыһы ла, профессиональ фольклорсы булмаһа ла, Ә. Вәлидиҙең үҙ халҡы ижад иткән рухи хазиналарҙы ғына түгел, яҡын һәм алыҫ ҡәрҙәштәребеҙҙең фольклорын да яҡшы белеүе, улар хаҡында төплө фекер йөрөтә алыуы хаҡында һөйләй. Ә был уның башҡаларҙы бирелеп тыңлай белеү һәләтен күрһәтә.

6. Ә. Вәлидиҙең “Хәтирәләр”е ҡәҙимге мемуар әҫәр генә түгел. Ул халыҡ хикәйәләрен күп тыңлаған, үҙе лә хикәйәләп һөйләргә яратҡан юғары эрудициялы кеше тарафынан яҙылған. Уның күп кенә биттәре телдән һөйләнгән хәтирәләрҙе хәтерләтә. Автор быға үҙенең әҫәрен, оҙон-оҙон тәбәрәккә бирелмәйенсә, ыҡсым ғына хикәйәләр рәүешендә, һәр хикәйәһен берәй эпизодҡа, көнкүрештәге төрлө хәлдәрҙе тасуирлауға ҡороуы менән ирешә. Айырыуса әсәһе, олаталары, атаһы, Муллағол диуана, Ибраһим, Ҡаҫҡынбай, Ҡунаҡбай һылыуы, Харис Сәсәнбай, Бурыл аты, Фрейд хаҡындағы бүлексәләр телдән һөйләнелә торған хәтирәләрҙе ныҡ хәтерләтә. Ғөмүмән, “Хәтирәләр” китабы “исеме – есеменә” тигәнде тулыһынса аҡлай.

7. Иң ахырҙа шуны ла әйтеү лазим: килер заман һәм Әхмәтзәки Вәлидиҙең ташҡа баҫылған ғына түгел, архивтарҙа һаҡланған хеҙмәттәре лә һәр башҡортҡа барып етер. Шул саҡта был мәшһүр шәхесебеҙҙең фольклорсы образы тағы ла баҙыҡланыр.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Алексеева Прасковья. О джунгарском князе Лозануг – Шуну// Тегинь герл (Свет в степи.). — 1999 (Элиста). – ноябрь-декабрь. – С. 123 – 126.
2. Башкирские шежере / Сост., пер. текстов, введ. и коммент. Р. Г. Кузеева. – Уфа: Башкнигоиздат, 1960.
3. Башҡорт халыҡ ижады /Төҙ., инеш мәҡ., аңлатмалар, мотивтар күрһәткесе әҙерләүсеһе Ф. А. Нәҙершина; Яуаплы мөхәрр. Ә. Н. Кирәев (Кирәй Мәргән), Ә. М. Сөләймәнов. – Өфө: Китап, 1997.– 2-се том: Риүәйәттәр, легендалар.
4. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ. Әхмәт Сөләймәнов; Инеш мәҡ. Мөхтәр Сәғитовтыҡы; һүҙ ахыры Әхмәт Сөләймәнов менән Рөстәм Рәжәповтыҡы; Яуаплы мөхәрр. Нур Зарипов. — Өфө: Китап, 1994. III том: Эпос.
5. Башҡорт халыҡ ижады / Томға матер. һайлаусы, төҙ. һәм аңлатмалар бир. Мөхтәр Сәғитов; Яуаплы мөхәрр. Әхнәф Харисов, Салауат Галин. — Өфө: Китап, 1999. – 4-се том: Эпос.
6. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., инеш мәҡәлә, аңлатмалар һәм һүҙлек авт. Нур Зарипов; Яуаплы мөхәрр. Зиннур Ураҡсин. — Өфө: Китап, 2000. — 5-се том: Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр (иртәктәр).
7.Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ. Нур Зарипов, Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов, Зәйтүнә Шәрипова; Инеш мәҡ. Нур Зариповтыҡы; Аңлат. һәм һүҙлек Нур Зарипов, Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов һәм Зәйтүнә Шәриповаларҙыҡы; Яуаплы мөхәрр. Ғайса Хөсәйенов. — Өфө: Китап, 2002. — 6-сы том: Эпос (Ҡиссалар һәм дастандар).
8. Башҡорт халыҡ ижады / Текстарҙы асыҡлап, барлап, томды төҙ. Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов, Миңнеғәле Нәҙерғолов; Инеш мәҡ. Авт. Әхмәт Сөләймәнов; һүҙ ахыры авт. Ғайса Хөсәйенов, Әхмәт Сөләймәнов, Миңнеғәле Нәҙерғолов, Флүр Сибәғәтов; Аңлатмаларҙы Ғайса Хөсәйенов менән Миңнеғәле Нәҙерғолов ҡатнашлығында Әхмәт Сөләймәнов әҙерләне; Яуаплы мөхәрр. Әхмәт Сөләймәнов.. — Өфө: Китап, 2004. — 7-се том: Яҙма ҡисса һәм дастандар.
9. Башҡорт халыҡ ижады / Текстарҙы асыҡлап, барлап, томды төҙ., инеш мәҡ. Һүҙлек әҙерләүсеһе, яуаплы мөхәрр. Ә. М. Сөләймәнов. — Өфө: Китап, 2006. 8-се том: Иртәктәр, эпик ҡобайырҙар.
10. Вәлиди Туған Әхмәтзәки. Башҡорттарҙың тарихы. Төрк һәм татар тарихы / Тәрж. Әхәт Вилданов. — Өфө: Китап, 1994.
11. Вәлиди Туған Әхмәтзәки. Әҫәрҙәр: 1917 йылға ҡәҙәр яҙылған әҫәрҙәре / Тәрж., аңлатмалар биреүсе, библ. төҙөүсе һәм инеш мәҡ. Авт. Әхәт Сәлихов; Фәнни мөхәрр. Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов. — Өфө: Китап, 1996.
12. Вәлиди Туған Әхмәтзәки. Хәтирәләр / Тәрж. Әмир Юлдашбаев; фәнни мөхәрр. Әхиәр Хәким. — Өфө: Китап, 1996.
13. Вәлиди Туған Әхмәтзәки. Диваев юбилейы рус йәмғиәтенәдә // Ватандаш. 2005. — № 12 — 113 — 114-се б.
14. Вәлиди Туған Әхмәтзәки. Өфөбөҙҙән сыҡҡан бер ғалимдың хеҙмәтенең егерме биш йыл тулыу мөнәсәбәте менән // Ватандаш., — 2005. — № 12 — 108 — 113-се б.
15. Вәлиди Туған Әхмәтзәки. Башҡорттар тарихы / Тәрж. Ә. М. Юлдашбаев. Өфө: Китап, 2005.
16. Ғафури М. Әҫәрҙәр: 6 томда. — Өфө, 1953. — 2-се том.
17. Гилязутдинов Салим. Татарские исторические предания и легенды и их художественные особенности: Автореф... канд. Филол. Наук. — Казань, 2000.
18. Даль В. И. Башкирская русалка // Башкирия в русской литературе / Сост., предисл., комментарии М. Г. Рахимкулова. — Уфа: Башкнигоиздат, 1989.
19. Иҙеүкәй менән Мораҙым / 1928 йылда Нәки Исәнбәт хәҙерге Әбйәлил районындағы Күсем ауылында Баймаҡтағы Төрөкмән, Нуғай ауылдарында яҙып алып, Сәғит Мираҫ, Дауыт Юлтый яҙмаларын файҙаланып төҙөлгән йыйылма текст // ҒА, ф. 3. оп. 12. хр. 221, 222, 225, 231, 232.
19а. История Башкортостана с древнейших времен до 60-х годов XIX в/ Отв. Ред. Х. Ф. Усманов. — Уфа: Китап, 1997.
20. Исәнбикә Туған. Баш һүҙ // Ә.-З. Вәлиди Туған. Башҡорттар тарихы. Төрк һәм татар тарихы. — Өфө: Китап, 2005. — 10 — 16-сы б.
21. Йәнғәлин Әхмәт-Гәрәй. Һуңғы башҡорт ханы йәки Аҡай — Ҡараһаҡал яуына яңы ҡараш // Ағиҙел. — 2009. — № 10 — 164 — 181-се б.
22. Лепехин И. Продолжение древних записок путешествия... Сп-б., 1882.
23. Манас; Сағынбай Оразбаҡ уулунун варианты боюнчы. — Фрунзе: Кыргызстан, 1981. — III китап: Көкөтөйдүн ашы.
24. Насиров Р. Х. Ата-бабам баҡҡан ер: Учалы яҡтары тураһында тарихи очерктар. — Учалы: Панорама, 1994.
25. Сулейманов А. М. Башкирские народные бытовые сказки: Сюжетный репертуар и поэтика / Отв. Ред. Л. Г. Бараг. — М.: Наука. 1994.
26. Тукай Ғабдулла. Әсәрләр. Биш томда / Тексларны әзерл. Рашат Гайнанов, Лена Гайнанова; Гали Халит ред-дә. Казан: Татарстан кит. Нәшр., 1985. — 4-че том: Проза, публицистика (1907 — 21913).
27. Юлдашбаев Әмир. Тәржемәсенән // Ә. З. Вәлиди Туған. Башҡорттар тарихы. — Өфө: Китап, 2005. — 5 — 9-сы б.

## ТУҠАЕВТАР – АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТ ИМАМДАРЫ

Ошо тәржемәне халыҡҡа тәҡдим итеүсе мөәллифкә (авторға – **F.F.**), Себер яҡтарында имамлыҡ эшен үтәгәндә, йыш ҡына ауылдарға йөрөп дини йолаларҙы башҡарырға тура килгеләне. Шулай бер ваҡыт Тобольскиҙан алыҫ түгел Кутарбитка ауылында мәйет ҡуйғас, яныма зыялыларса ыҫпай кейенгән оло йәштәге ир килеп хәл-әхүәл һорашҡас, кемлегем һәм ҡайһы яҡтан икәнлегем менән ҡыҙыҡһынды. Башҡорт булыуымды белгәс, күптән күрергә теләгән туғанын осратҡан кешенеке кеүек, күҙҙәрендә шатлыҡ саткылары, йөҙөндә оялсан ғына йылмайыу шәйләнде. Хаҡлы ялға сыҡкан тарих укытыусыһы икән, минең өсөн башҡа һыйғыһыҙ мәғлүмәттәр еткерҙе. Күбеһе дингә бәйле ине.

– Беҙҙе «Себер татарҙары» тип йөрөтәләр. Ләкин татарҙар менән беҙҙең һис тә уртаҡлығыбыҙ юҡ. Шулай тип әйтһәләр, күңелдә ризаһыҙлыҡ тыуа. Сөнки беҙ – «себерле»ләр, – тип башланы һүҙен Саҙретдин ағай. – Уралтау яҡлап башҡорттар менән аралашып йәшәһәк, көнсығыштан яҡут халҡы беҙгә яҡын булды. Шул яҡуттарҙан күрепме, беҙ шаманға буйһоноп йәшәгәнбеҙ, әле лә ҡайһы бер йолаларыбыҙ һаҡланып ҡалған. "Астана"ға тип хәйер бирәбеҙ, һаҡлаймы икән беҙҙе ул Астана? – белмәйбеҙ. Һуңынан урыҫтар тарафынан "вор"ға тиңләп һөргөнгә ҡыуылған башҡорттар халҡыбыҙға исламды күндерә башлай. Ауылдарҙа күпләп "каторжный"ҙар йәшәгән, уларҙың күбеһе мосолмандарҙан булып, намаҙ уҡырға, башҡа йолалар атҡарырға өйрәткән. Халыҡ әле булһа башҡорттарҙан булған мәшһүр Байыш, Имаметдин, Байым шәйехтәрҙе онота алмай, улар рухына бағышлап мәсеттәрҙә ҡөрьән уҡытып, доға ҡылалар.

XIX быуат урталарында, беҙгә килеп еткән һөйләүҙәр буйынса, башҡорттан 1400 шәйех килеп, халыҡты исламға ныҡлап өндәй башлаған. Халҡымда мосолманса тәртип урынлашҡан, – тине оло кеше. Тыңлап шатланып торам, ҡайһылай башҡортсаға оҡшатып һөйләй, тик айырмаһы шунда: ҡайһы саҡ, беҙҙең типтәрҙәр һымаҡ, һүҙ йәки һөйләм аҙағында "те" ялғауын ҡушып ҡуя.

Әңгәмәсем "1400 шәйех" тигәс, шикләнеп тә ҡуйҙым. Ысынлап та, мәшһүрлеге менән тирә-яҡҡа исеме таралған мәҙрәсәләр боронғо тарихи башҡорттар йәшәгән урындарҙа күп булған. Троицк, Орск, Ырымбур, Юлыҡ, Байым, Муллаҡай, Темәс,Ҡарғалы, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Ҡуғанаҡбаш, Тайһуйған – былар мәҙрәсәләре менән дан тотҡан ҡала һәм ауылдарҙың тулы булмаған исемлеге. Ошо исемлектәге мәшһүрҙәрҙең дә даны сыҡҡандары араһындағы мәҙрәсәлеләрҙән Стәрлебаш һәр яҡлап айырыла. Башҡорт халҡынан булған аталыуллы Туҡаевтар был ауылдың тарихы, булмыш-йәшәйеше һәм тәржемәи хәле менән ныҡ бәйле. Имеш-мимешкә һылтанып, бер ниндәй дәлилһеҙ уларҙы татарҙарға теркәп ҡуялар. Ул ваҡыттағы зыялылар төрки халыҡтар өсөн уртаҡ булған Сығатай (үзбәк халҡының төп ҡәбиләһе булған Чығатай – **F.F.**) телен файҙаланған. Уҡымышлылар, ғөләмә һәм шағирҙар ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен дә ҡушып һөйләгән, әҫәрҙәр һәм рәсми ҡағыҙҙар яҙған. Ошо сәбәптәндер,

Әхмәтзәки Вәлиди Туған да башҡорт Биксура хан нәҫеленән булған Ризаитдин Фәхретдинде «Хәтирәләр»ендә «татар халҡының ғалимы» тип яҙа. Шул уҡ «Хәтирәләр»ҙә Ш. Мәржәниҙең башҡорттар тураһында ялған мәғлүмәт биргәнлеген уҡығас, мөәллиф Муллаҡай мәҙрәсәһе мөҙәррисе Ғабдулла бин Сәид әл-Болғари әл-Бөрйәни әл-Һаҡмариҙың был китапты утҡа яҡҡанлығы хаҡында яҙып ҡуя. Сит илдә, йәғни Бағдад ҡалаһында вафат булған Ҡатай ырыуы башҡорттарынан зөфәнин ғалим Низаметдин бин Сиражетдин әл-Илһамиҙан үҙ заманында һәндәсә (геометрия – **F.F.**) фәнен өйрәнгән Ш. Мәржәниҙең һүҙенә эйәреп, мәшһүр ғалимыбыҙ Р. Фәхретдин дә “Аҫар”ында (“Әҫәрҙәр”– **F.F.**) Туҡаевтарҙы Вятка виләйәте Малмыж өйәҙе Салавуч ауылы татарҙарына теркәп ҡуя (“Аҫар”, Ырымбур, 1905 й. Жилд 2, бүлек 9, рәҡым 226). Уҡып сыҡҡас, иҫемә төшөп, архивтан алған Верхнеурал (Үрге Яйыҡ – **F.F.**) өйәҙе V кантонға ҡараған Темәс ауылының (бөгөн Баймаҡ районына ҡарай) 1848 йылда уҙғарылған IX рәүиз мәғлүмәттәрен ҡарап сыҡтым. Үрҙә әйтелгән ерлектән килеп, Темәстә төпләнгәндәрҙән татары – “татар”, мишәре “мишәр” тип теркәлгән.

Рәүиз үткәндән һуң, мәғлүмәттәрҙең теүәл-тулылығын асыҡлау өсөн, халыҡты (казак ҡатламында булһалар – старшиналар) бер урынға йыйып, исемлектә нимә яҙылған, шуларҙы ишеттереп, дөрөҫлөгөн тикшереп, һәр кемгә еткерер булғандар. Етешһеҙлек табылһа, шунда уҡ халыҡ алдында теркәп, старшина, ауыл түрәһе (сельский – **F.F.**) һәм станицанан килгән сәркәтиб (секретарь – **F.F.**) йәки башҡорт телен һәм уҡыу-яҙыуҙы яҡшы белгән урыҫ дәүләт крәҫтиәне имзаһын ҡуйған. Рәүиз тәртибе Стәрлебашта башҡасараҡ булған, тип әйтеүе шикле. Батша фарманы ҡайҙа ла урынына еткереп үтәлгән. Әлбиттә, “башҡортмон” тип яҙылыу өсөн нигеҙ етерлек. Минеңсә, бына улар: ҡулайлашырға тырышыу; ярамһаҡланыу; башҡорт халҡын өҫтөн күреү; татарҙар йәки башҡа халыҡтар араһында һыя алмау; йәшәгән ерендә оло енәйәт йә боҙоҡлоҡ ҡылып ҡасып китеү; көсләү йәки өгөтләү; ата-әсәһе һәм ата-бабаларының башҡорт булыуҙары сәбәпле яҙылыу һ.б.

Телен һатҡан, илен һатҡан – әсәһен дә һатыр, тигән боронғолар. Әйҙәгеҙ, күмәкләп «Кемдәр һуң Туҡаевтар?» тигән һорауға яуап эҙләйек!

1. V рәүиз мәғлүмәттәрендә Стәрлебашта теркәлгән татарҙар араһында Туҡаевтар күренмәй. Ә татарҙар йәмғеһе 12 ғаилә теркәлгән. 1816 йылғы VII рәүиздә башҡорт Туҡаевтарҙың бер нисә ғаиләһе яҙылған. Хәҙрәтлеге раҫланған Ниғмәтуллаһ Туҡаевтың бер туған ҡустыһы йорт яһауылы – Ғисмәтуллаһ Туҡаев иләү (волость – **F.F.**) старшинаһы булараҡ теркәлгән. Беренсенән, башҡорт старшинаһы булыу өсөн VII Башҡорт кантоны түрәһенең тәҡдиме кәрәк булһа; икенсенән, башҡорт иләүендә йәшәгән башҡорт булыу мотлаҡ. Ошо талаптар үтәлгән осраҡта ғына, виләйәт үҙәге Ырымбурҙа был заттың старшиналығын раҫлаған ҡағыҙ бирелә.

2. “Хәҙрәттең (Мөхәммәд-Харис хәҙрәттең тип аңларға кәрәк – **F.F.**) шөһрәте лә һәр кемгә етте, ти, хайуандарға ла игелек итеүе, дәүләткә лә мөхәббәте ил ағаларына мәғлүм булып, әхүәле батша ағзам хәҙрәттәренә етеп, император Александр II хәҙрәттәре 1869 йылдың 16 августында бирҙе ки, батшаларға хас фарманы менән тарханлыҡ дәрәжәһенә мәрхәмәт әйләне,”– тип яҙа Мөхәммәд-Шакир хәҙрәт атаһы хаҡында.

Хәҙер энциклопедияға мөрәжәғәт итәйек. Бында: “Башҡортостанда “тархан” дәрәжәһе эре башҡорт феодалдарына хәрби, дипломатик һәм башҡа баһалы хеҙмәттәре өсөн бирелә торған дәрәжә булараҡ таралған,”– тип яҙыла. (Ҡара: Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия. Өфө, 1997 й., 553-сө бит). Мөхәммәд-Харис хәҙрәттең юғары дәрәжәгә лайыҡ булыуы – уның шикһеҙ башҡорт халҡынан булғанлығын күрһәтеп тороусы дәлил ул.

3. Ошо тарих китабының мөәллифе Мөхәммәд-Шакир Туҡаевтың улы Мөхәммәд-Закир Туҡаев Ырымбур Мөхәммәд руханиҙары мәжлесенә (Хәҙер "Мосолмандарҙың Ырымбурҙағы диниә назараты" – **F.F.**) үтенес ҡағыҙы яҙа. Урыҫ телендә яҙылғанлыҡтан, был тарихи мәғлүмәтте уҡыусыларға үҙгәртмәйенсә тәҡдим итәм:

*" В Оренбургское Магометанское Духовное Собрание,*
*от башкира д. Стерлибашевой, Калкашевской волости,*
*Стерлитамакского уезда Уфимской губернии*
*М-Закира М-Шакировича Тукаева*

*Прошение*

*Имею честь покорнейше просить Магометанское Духовное Собрание допустить меня к испытанию в знании правил Магометанской религии, в чем мне, какое докажу успеха выдать свидетельство на звание муллы. Присем предоставляю свидетельство Стерлибашевского мударриса и для свидетельства Гербовой марки января 21-го дня 1916 г.*




*М-Закир М-Шакирович Тукаев".*

Туҡаевтарҙың башҡорттарҙан булғанлығын раҫлаған был рәсми мәғлүмәт архивта һаҡлана. Улар башҡортлоҡтарын урыҫтар ҙа аңларлыҡ итеп, шул телдә аҡҡа ҡара менән яҙып ҡуйған. Ырымбур, Өфө архивтарындағы мәғлүмәттәр әленәнәле үҙҙәренең ынйылай тарих биттәрен асып, беҙҙе хайран ҡалдырасаҡ әле. Әлхәмдүлилләһ.

Мөәллиф Мөхәммәд-Шакир хәҙрәттәре тарихи әҫәрендә үҙ заманы күҙлегенән сығып һөйләй. Ул ваҡыттарҙан бер быуат дәүер айырһа ла, уҡып, ундағы шәхестәрҙең ниндәй эшһөйәр, йүнсел булғанлыҡтарына ҡарап һөйөнәһең, ғорурланаһың. Журналды уҡыусылар ҙа шул уҡ уйҙа ҡалыр, тигән фекерҙәмен.

Уларҙың иғтибарына халҡыбыҙҙың арҙаҡлы имамдарынан, мәшһүр башҡорт зыялыларынан булған Мөхәммәд-Шакир Мөхәммәд-Харис улы Туҡаевтың тәржемәи хәлен, уның тарафынан яҙылған "Эстәрлебаш тарихы"ның тәржемәһен тәҡдим итеп, фекерҙәштәрем булыр, тигән уйҙа ҡалам.

**Ғариф хәҙрәт ҒАБДРАХМАНОВ.**

## Туҡаев Мөхәммәд-Шакир Мөхәммәд-Харис улы

Аталы-уллы Туҡаевтарҙың Эстәрлебаш ауылында быуындан быуынға күсереп мәҙрәсә тотҡан имам-мөҙәрристәрҙең береһе, Өфө виләйәтенән һайланған II һәм III саҡырылыш Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Мөхәммәд-Шакир бин Мөхәммәд-Харис Туҡаев 1862 йылда Ырымбур (1865 йылдан – Өфө) виләйәте Эстәрлетамаҡ өйәҙе Эстәрлебаш ауылында тархан, имам-мөҙәррис ғаиләһендә донъяға килә, башҡорт. Эстәрлебашта атаһы тотҡан мәҙрәсәлә ғилем эстәгәс, Ырымбур ҡалаһында ике йыллыҡ татар уҡытыусылары әҙерләү мәктәбендә уҡый. Ҙур ер биләүсе: яҡынса 490 гектар ере бар. Эстәрлетамаҡ өйәҙе земствоһының билдәле ағзаһы, Өфө виләйәте статистика комитеты ағзаһы була.

«Иттифаҡ әл-мөслимин» фирҡәһе ағзаһы, 1906 йылдың ғинуарында Петербургта үткәрелгән II мосолмандар ҡоролтайы вәкиле. 1907–1912 йылдарҙа Дәүләт Думаһы депутаты, Мосолмандар берләшмәһе төркөмә ағзаһы. 1914 йылдың

июнендә Петербургта үткәрелгән Дини идаралыҡтарҙы үҙгәртеп ҡороу мәсьәләһенә бәйле ҡоролтайҙа мосомандар вәкиле. «Эстәрлебаш тарихы» китабының мөәллифе.

Вафаты 1932 йылда, Ырымбур ҡалаһында.

## Эстәрлебаш тарихы

**Мөхәммәд-Шакир мәхдүм ТУҠАЕВ**

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахииим.

Бер Аллаһ Тәғәләгә маҡтау, Ул барлыҡҡа килтерҙе төндәрҙе һәм көндәрҙе, төн менән көндөң үтеүе менән айҙарҙы һәм быуаттарҙы. Маҡтау һәм сәләм хөрмәтле, хәйерле беҙҙең Аллаһ ебәргән Рәсүлебеҙгә. Уның"саллалаһү ғәләйһи үә сәлләм"дең (мәғәнәһе: уға Аллаһ Тәғәләнең салауаттары һәм сәләмдәре булһын! – **Ғ.Ғ.**) һижрәте менән ислам тарихы башланды. Уға һәм уның ғаиләһенә һәм хөрмәтле сәхәбәләренә (Аллаһ Рәсүленең булышсыларына – **Ғ.Ғ.**) маҡтау һәм изге доғалар.

Шунан (доғанан – **Ғ.Ғ.**) һуң, Эстәрлебаш – виләйәте менән Өфө ҡалаһынан 150 саҡрым ерҙә, өйәҙ үҙәге Эстәрлетамаҡ ҡалаһынан 50 саҡрым ҡибла тарафында, олуғ Себериә тимер юлында барлыҡҡа килгән Шафран станцияһынан 75 саҡрым ерҙә, яҡынса алғанда 73-сө дәрәжә (градус – **Ғ.Ғ.**), теүәлдә 53-сө дәрәжә киңлек битендә, Эстәрле һыуының башынан биш саҡрым ерҙә барлыҡҡа килгән бер мәшһүр ауыл. Әүәл замандарҙа ошо башҡорт еренә Ҡазан яҡтарынан һәм Ҡарғалы шәһәренән ҡайһы бер кешеләр ризалашыу һәм мәслихәттәре менән килеп, сауҙа һәм кәсептәр менән шөғөлләнеү өсөн, ошо Эстәрлебаш урынында утар яһап ултырған. Шунан аҙлап кәсеп һәм сауҙалары алға барғанлыҡтан кешеләр ҙә күбәйеп, ауыл булып киткән. Был ваҡиға ҡайһы замандарҙа һәм нисәнсе йылдарҙа булғанлығы мәғлүм булмаһа ла, Эстәрлебаш ауылы Пугач ваҡиғаһынан йөҙ йылдар элек булған, тиҙәр. Пугач ваҡиғалары беҙҙең был тарафтарҙа 1773 йылдарҙа булған. Эстәрле башынан өс саҡрым ерҙә "Боҫҡон" тигән урын Пугач ваҡиғаһында ҡасып һәм йәшеренеп ҡалғандан исемләнгән, имеш, тип телдән-телгә һөйләйҙәр.



*"Эстәрлебаш тарихы"ның тышлыҡ бите.*

Бәғзе кешеләрҙең һөйләүҙәренә күрә, Эстәрле башында әүәл ултырған кешеләр бер аҙ заман торғас, ерҙе башҡорттарҙан ижарәгә алған. Ижарәләре 50 йылға булған, имеш. 1809 йылдың 25 апрелендә яҙышҡан ҡағыҙҙары Әбүлнәғим Мөхәммәд-Латиф улы тигән кешенең ҡулында бар. Уның олатаһының олатаһы Йософ сауҙагәр тигән кеше Ҡарғалынан килеп сауҙа итеп, поташ заводы тотҡан. Мәғлүм ҡағыҙҙы 1809 йылда башҡорттар менән ул яҙышҡан. Ошо ҡағыҙ өсөнсө мәртәбә алыу, имеш: һәр мәртәбәлә 50-шәр йылға яҙышҡандар, имеш, тип һөйләйҙәр. Шуға нигеҙләнеп, башҡорттан ҡағыҙ менән 1809 йылдан йөҙ йыл элек ала башлағандар, һәм дә ҡағыҙһыҙ 30 йылдар торған булһалар, Эстәрле башы 1680 йылдар самаһында була башлаған булһа кәрәк. Әммә, ти ҡайһы кешеләр, ошо ваҡыттағы кешеләрҙең нәҫеле һәм ата-бабалары булғанлыҡтары күренмәй һәм беленмәй. Пугач ваҡиғаларында, һуңыраҡ булған эштәрҙе белеүсе әбей-бабайҙар бер 25 йыл мөҡәддәм замандарҙа

бар ине. Бәғзе кешеләрҙә иҫкенән һаҡланған яҙыуҙар араһында 1774 һәм 1797 йылдарҙа бәғзе мөғәмәләт ҡағыҙҙары бар.

Эстәрлебаш – төньяҡтан бейек тау буйында, Эстәрле йылғаһының ике яғында ултырған ауыл. Ҡибла һәм көнсығыш тарафында асыҡ һәм аҙ-маҙ урмандары бар. Урыны бейек ерҙә һәм төньяҡ тарафынан тау менән ихата ҡылынғанлыҡтан, Эстәрле башында хуш һауа булып, емеш баҡсалары бар. Баҡсаларҙа алма, ҡарбуз кеүек емештәр кимәленә етеп хасил була. Мәшһүр хәҙрәттәр баҡсаһы менән мәғлүм олуғ баҡсаларҙан башҡа тағы ла дүрт-биш ерҙә алма баҡсаһы бар. Уртаса ҡыштарҙа һыуыҡлыҡ 12 дәрәжәгә тура килеп, йәй көндәре уртаса 17 дәрәжәгә тура килә.

Эстәрлебаштың халҡы – татарҙар. Күпселеге ашлыҡ сәсеп кәсеп итә, аҙыраҡ сауҙа итеүселәр ҙә бар. Ҡайһы халыҡтар йәй көндәрендә ураҡ һәм бесән кәсептәре өсөн Ырымбур һәм Һамар тарафына барып, бер-ике ай кәсеп итеп, кеше башына уртаса хисаплағанда 10 – 15 һум эшләп ҡайта. Кешеләр араһында бәғзе сәнәғәт һәм һөнәр эйәләре лә бар. Бер ун ҡәҙәр ташсы һәм мейес сығарыусы, ун ҡәҙәр ситек-кәүеш тегеүсе, унлап балта оҫтаһы, унлап бысҡысы бар. Эстәрле башында ҡатын-ҡыҙҙарҙан да бәғзе сигеү һәм тегеүгә, балаҫ һуғыуға маһиралары ла бар.

Эстәрлебаш ауылында 1897 йылдағы дөйөм иҫәп буйынса 1072 ҡәҙәр ир, 1052 ҡатын, йәмғеһе 2124 саҡлы халыҡ күренде. Инша Аллаһ, хәҙер ҙә шул ҡәҙәре, бәлки, артығыраҡтыр. Эстәрле башында һәр һәфтиә дүшәмбе баҙар булып, унда сауҙагәрҙәр араһында сама менән уртаса 700 тәңкәлек ҡәҙәре нәмә һатыу ғәҙәтләнелә.

Эстәрлебаш мәшһүр ауылдарҙан иҫәпләнгән. Шөһрәте оло мәҙрәсәләрендә һәр йылда нисәшәр йөҙ шәкерттәр билгеле ғилем тәхсил ҡылып һәм нисә йөҙҙәр фән серенән ләззәтләнеп, йөҙ йылдан күберәк, бәлки, ике йөҙ йылға яҡын. Бынан күп ғалим һәм ғөләмә һәр тарафҡа таралып, мосолман йортона ғилем һәм әхлаҡ таратыла. Тәүге имам Монасип мулла тигән кеше булған, имеш, тиҙәр. Уның хаҡында мәғлүм булған хәбәрҙәр һәм нәҫеленән кемдәр ҡалғанынан белеп, хәбәр бирер кеше табылманы. Мәҙкүр Монасип мулла 1710 – 1720 йылдар араһында булһа кәрәк.

1720 йылдарҙан һуң Эстәрле башында мәсет һалынып, әүәл мәҙрәсә бина ҡылып дәрес башлаған кеше Хөсәйен мулла Ғабдрахман (Ғәбд әр-Рахман – **Ғ.Ғ.**) улы. Мәрхүм әүәл мәртәбә Эстәрле башында мәсет бина ҡылып, йома уҡый башлап, был көндә ауылдағы минбәр таяғы ошо Хөсәйен хәҙрәттән ҡалған. Шул таяҡта яҙыу ҙа бар: “Хөсәин бин Ғәбд әр-Рахман”. 1870 йылдарҙа, был таяҡҡа 150 йыллап бар, тип һөйләйҙәр ине. Бик белеп һөйләгән кешенән мәҙкүр Хөсәйен мулла әүәл мәртәбә мөфтөй булып килгән, Мөхәмәтйән мөфтөй Хөсәйеновтың атаһы. Мөхәмәтйән Бөйөк Екатерина II әмере менән 1789 йылда мөфтөй булып килгән. Ошо юғарыла мәҙкүрҙәргә бинаи Хөсәйен мулла яҡынса 1720 йылдарҙа Эстәрле башында дәрес башлаған, шул ваҡыттарҙа мәсет һәм мәҙрәсәләр бина ҡылынған. Ә инде Эстәрлебаш мәҙрәсәһенең тарихын 1720 йылдарҙан иҫәпләргә ярай. Хөсәйен мулла хәҙрәттәренең ҡайһы йылда вафат булғанын белгән кешеләр булманы, нисә йыл дәрес әйткәне беленмәне. Әммә ки, изге һәм халыҡ күңелендә һәр кемгә билгеле булған эше менән танылған кеше булған, тип әйтәләр, рәхмәтуллаһи ғәләйһи! (Уға Аллаһ рәхмәте булһын! – **Ғ.Ғ.**).

Эстәрлебаш мәҙрәсәһенә икенсе мәртәбә мөҙәррис булып дәрес биргән кеше Ғәҙелшаһ хәҙрәт бин Ғабдуллаһ Боғданов булған. Ул мәшһүр Себенлелә булған Дәүләтшаһ-Ниязҡули әт-Төркмәни хәлифәһенең (рәхмәтуллаһи ғәләйһи!) – атаһы. Ғәҙелшаһ хәҙрәт (рәхмәтуллаһи ғәләйһи!) хаҡында мәғлүм булған хәбәрҙәрҙән сыҡмай, Ғабдуллаһ хәҙрәт мәрхүм (рәхмәтуллаһи ғәләйһи!) һөйләй ине: Минзәлә өйәҙендә Үәраш мөслим ауылында Шәмғун мулла тигән кеше Эстәрле башында Ғәҙелшаһ хәҙрәттең мәҙрәсәһендә уҡып ҡайтып, мәншурлы (указлы – **Ғ.Ғ.**)

имам булып тороп, 85 йәки 90 йәштәр самаһында 1860 йылда вафат булған. Мәрхүм Шәмғун мулланың Эстәрле башында торған замандары 1795 йылдар самаһында булырға тейеш. Балыҡлы ауылында мәшһүр булған Хөснөтдин ахун хәҙрәт мәрхүмдең Ғәҙелшаһ хәҙрәт (рәхмәтуллаһи ғәләйһи!) мәҙрәсәһендә 1799 йылда яҙған китабы бар. Ошо мәҙкүрҙәргә бинаи Ғәҙелшаһ хәҙрәт 1785 йылдарҙа, бәлки, алдараҡ булһа кәрәк, Хөсәйен мулланан һуң Эстәрле башында Ғәҙелшаһ хәҙрәткәсә, йәғни уларҙың икеһе араһында мөҙәррис булдымы юҡмы, йәки Хөсәйен мулла бик ҡарт булып, Ғәҙелшаһ хәҙрәт унан һуң мәсет һәм мәҙрәсәләргә хәлифәме булып ҡалған – әйткән-белгән кеше булманы.

Ғәҙелшаһ хәҙрәт заманында Эстәрле башынан төрлө фәндәрҙе белеүсе ғалимдар сығып, араларында хөрмәтлеләре сит ерҙәрҙә дәрес әйтә башлаған. Шул замандан сама менән 1700 йылдарҙа Эстәрле башынан бер төркөм кешеләр сыға башлаған. Бәлки, унан алдынғыраҡ булһа ла булыр тип хисапларға мөмкин. Ғәҙелшаһ хәҙрәт 80 йәшендә 1812 йылда вафат булған. Уны ахун, айырым дәрәжәле кеше, дәрескә ғәйәт тә маһир һәм тәҡүә әҙәм ине, тиҙәр (рәхмәтуллаһи ғәләйһи!). Ғәҙелшаһ хәҙрәт заманында һәм бер ҡәҙәре Ниғмәтуллаһ хәҙрәт заманында, улы Дәүләтшаһ хәҙрәт Эстәрле башында бик ижтиһад менән дәрес әйткән һәм һуңынан Бохараи-Шәрифкә киткән, тиҙәр.

Ғәҙелшаһ хәҙрәттән һуң Эстәрле башында шәйех Ниғмәтуллаһ хәҙрәт бин Биктимер бин Туҡай бик тә мәшһүр хәҙрәт (рәхмәтуллаһи ғәләйһи!) булған. Ул 1773 йылдарҙа донъяға килеп, 1801 йылдарҙа Бохараи-Шәриф тарафына тыштан да, серҙән дә билгеле ғилемдәр тәхсиле өсөн киткән. Шул 1801 йылда Ниғмәтуллаһ хәҙрәт рәхмәтуллаһи ғәләйһинең Эстәрле башынан әүәл мартта сығып киткәне бәғзе иҫке ҡағыҙҙарҙа яҙылғаны күренә. Мәрхүм Ниғмәтуллаһ хәҙрәт Бохараи-Шәрифкә бармаҫтан алда Мәчкәрәлә Мөхәммәд-Рәхим (Мөхәммәд әр-Рахим – **F.F.**) ахун хәҙрәттә дәрес уҡып торған. Ғәҙелшаһ хәҙрәт ваҡытынан һуң 1812 йылдан башлап 1813 йылдың 22 августа мәншур алып Эстәрлебаш мәҙрәсәһендә мөҙәррис һәм мәсетендә имам булып, билгеле ғилемдәрҙән дәрес биреп, тариҡәт ғилемдәрен һәм әл-хаҡиҡәттә камил мөршид һәм фазыл шәйех булып, ишанлыҡҡа рөхсәтле кешеләр менән шөғөлләнеп, заманында мөмкин ҡәҙәре боҙолоп бидғәткә (динебеҙҙә ҡаралмаған, ләкин кемдер индергән яңылыҡтарға – **F.F.**) аҡ һөйәктәр һәм хеҙмәт эйәләре сөннәтте Рәсүлуллаһ саллалаһу ғәләйһи үә сәлләмгә  эйәреп, өлгө алыуға кәмселекһеҙ ижтиһад һәм тырышып, матурлыҡ менән ижтиһад һәм төҙөк ҡылдылар.

Атрафта йыйындар, һәм науруз көндәрен туйлауҙан тыйылыр, һәм мәйеттән һуң өсөнсө, етенсе, ҡырҡынсы көндәрҙә аш биреү кеүектәр бөтөрөләр. Һәм атрафта нурландырыу тәбиғәттәре һәм иғтикафтар булып тороуы Ниғмәтуллаһ хәҙрәт Рәхмәтуллаһи ғәләйһинең ижтиһады менән була башлап ҡалған ине, тиҙәр. «Кем яҡшы, сөннәт (мәғәнәһе: ғәҙәт, Аллаһ рәсүле ғәләйһиссәләмдең һүҙҙәре һәм эштәре – **F.F.**) эш башҡара, һәм башҡалар уның ошо эшен ҡабатлаһа, был ғәмәлдең әжере тәү эшләгән кешегә һәм уның артынан ҡабатлаусыларға ла бер ниндәй кәмселекһеҙ әжер булыр» – хәҙис шәрифенең дәлиле була.

Ниғмәтуллаһ хәҙрәт заманында Эстәрле башынан күп ғөләмә серле һәм асыҡ ғилем хасил итеп, төрлө-төрлө тарафтарға таралды. Заманында ҡара халыҡ һәм юғары ҡатлам  ғөләмәгә һәм фәҡирҙәрҙең наҙандарына һәм күп осраҡта дошмандарға бойороусы мосолман ине. Эстәрле башына килгән оло кешеләрҙән мәрхүм Йыһангир хан һәм Ширғазы хан ине, тип  һөйләп еткерәләр. Йыһангир хандың улдарынан бер-икеһе 1840 йылдар самаһында Эстәрле башында мәҙрәсәлә ғилем тәхсил ҡылып торған. Был замандарҙа Эстәрле башында ғилемдә тәрәҡҡи табып шәкерт күбәйә башлағанлыҡтан, мәсет һәм мәҙрәсәләрҙе ҙурайтырға хәжәт төшөп, бының өсөн күп аҡса һәм һиммәт һәм ижтиһад сарыф ителгән. Мәсет әүәлге урындан йөҙ таяҡ (оҙонлоҡ үлсәме булһа кәрәк – **F.F.**) ҡәҙәре түбәнерәк, ауылдың уртаһына күсереп һалынған.

1814 йылда Эстәрле башында баҡсаларҙа ағастар ултыртыла башланған. Шул заман ултыртҡан ҡарағайҙар һәр ҡайһыһы бар. Ағас ғилемен белеүселәр, ҡарағайҙарҙы 80 йәки 90 йыллыҡ булһа кәрәк, ти.

Ниғмәтуллаһ хәҙрәт мәрхүм, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, заманында 1836 йылда Эстәрле башына фонтан килтертелгән, шул фонтан һаман бар. Башынан бирле өс мәртәбә төҙөкләндерелде; һыуынан шул көндән бөгөнгә ҡәҙәр һәр көн нисә меңйән инсан һәм хайуан файҙаланып тора, Аллаһ Тәғәлә сауабын насип итһен!

Мәрхүм хәҙрәт ғилем серендә камил булып, күберәк заман тариҡәт ғилеме менән шөғөлләнеп, билгеле ғилемгә лә кәмселекһеҙ ижтиһад итә ине. Заманында баҫмахана һәм китаптар аҙ булғанлыҡтан, китаптар булдырыу өсөн күп ижтиһад һәм малдар сарыф итте, тиҙәр. Үҙ ҡулы менән яҙған мәжмүғәләре бар һәм күренә, һәр ерҙән һәм һәр фәндән күсермәләр бар. Заманында "Тәфсир Ҡаҙый"ҙан дәрес булғанлыҡтан, "Тәфсир Шәйех Задә" нөсхәһен күсертеп алыу өсөн Эстәрле башынан Байәркәгә яңғыҙ барып ҡайтты, тиҙәр. Заманынан ҡалған Эстәрле башында яҙылған һәм Бохараи-Шәрифтән алдырған күп ҡульяҙма китаптар был көнгәсә барҙар.

Ниғмәтуллаһ хәҙрәттең 1810 йылда өлкән улы Мөхәммәд-Харис, 1814 йылда икенсе улы донъяға килде, Мөхәммәд-Харрас тип исем әйтелде. 1833 йылда улы Мөхәммәд-Харис хәҙрәт, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, Бохараи-Шәрифкә Ырымбурҙың генерал-губернаторы тарафынан 1833 йылдың 24 сентябрендә 1380-се рәҡымда (номерҙа. – **F.F.**) Бохараға барырға бирелгән рөхсәт ҡағыҙы менән серле һәм тышҡы ғилем тәхсил өсөн сәфәр ҡылды, 1841 йылда ғилем тәхсил ҡылып сәләмәт ҡайтты. 1830 йылдың 14 июлендә, Ырғыҙ буйынан был ергә сәләмәт килдек, тип яҙған хаты бар. 1841 йылда кәттә хәҙрәт шәйех Ниғмәтуллаһ бин Биктимерҙең заманында улы Мөхәммәд-Харис хәҙрәт, рәхмәтуллаһи Тәғалә ғәләйһим әджмәғин (мәғәнәһе: уға Аллаһ Тәғәләнең барса рәхмәте булһын – **F.F.**), Бохараи-Шәрифтән йәшерен һәм асыҡ ғилем тамамлап һәм маҡтауға яраҡлы әхлаҡ хасил итеп, сәләмәт ҡайтып, шул йыл дәрес башлап, бер-ике йылдан һуң яран тәрбиәләй башланы, тиҙәр.

1844 йылда икенсе улы Мөхәммәд-Харрас мәрхүм-рәхмәтуллаһи ғәләйһи-хәҙрәттәре Бохараи-Шәрифкә ғилем тәхсил өсөн сәфәр итте. Был йылдарҙа Эстәрле башында йәмәғәт күп ине, һәр тарафтан билгеле ғилем һәм серле ғилем, кәмселекһеҙ ғилем эстәүсе шәкерттәр ижтиһадта ғилем һәм әхлаҡ, айырыуса камил тәраҡҡи әҙәптә булды. 1844, йәғни һижри менән 1260 йылда кәттә хәҙрәт шәйех Ниғмәтуллаһ бин Биктимер –рәхимһум Аллаһ Тәғәлә (Аллаһ Тәғәлә шәфҡәтлеген күрһен. – **F.F.**) хәҙрәттәре 27 мартта бөтә торған донъянан мәңгелек йортҡа күсте. Мәрхүм ғәйәт уҡымышлы, эшһөйәр, диндар һәм яҡшы эштәре хәтерҙә ҡалған шәйех, камил түрә, тыйыу инҡар ителгәндән, Рәсүлуллаһ сөннәте менән мәшғүл ғилем хеҙмәтсеһе һәм камил мөршидтәрҙән булып, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, рәхмәтле һәм бик бәхетле 73 йәшендә ине.

Мәрхүм Ниғмәтуллаһ-ишан хәҙрәттән һуң улы Мөхәммәд-Харис бин Ниғмәтулла әл-Шәһир (бик данлыҡлы. – **F.F.**) ишан булған хәҙрәт Эстәрле башында имам-мөҙәррис һәм Эстәрлебаш шәйехе булды. Мөхәммәд-Харис хәҙрәткә әүәл ҡануна мәншур алғансыға ҡәҙәре Ырымбур мөфтөйө тархан Ғәбделвахит Сөләйманов хәҙрәттәре тарафынан 1844 йылдың 4 апрелендә Эстәрлебаш ауылында мәсеттә имам булып һәм мәҙрәсәләрҙә һәр фәндән дәрес әйтеп, мәхәллә әһеле эшенә тәдбир ҡылыу өсөн тип биргән ҡағыҙы бар. Бәлки, шул йылдарҙа ҡануна мәншур килгән булһа кәрәк. Мөхәммәд-Харис хәҙрәт 1833 йылда Бохараи-Шәрифкә барып тышҡы һәм серле ғилем тәхсил ҡылып, 1841 йылда сәләмәт ҡайтып, дәрес әйтә һәм тәғлим ҡыла башлап, шәйехлеккә лә башлап тотоноп, 1844 йылда атаһының урынына камил хәлифә булып ҡалды. 1846 йылда Ҡарғалыла Ғабдуллаһ бин Дәүләтшаһ кантон дәрәжәле хәҙрәттәренең ҡыҙын алып, кейәү булды.

Мәҙкүр Ғабдуллаһ кантон мәхдүм аҡыллы ла, йылҡысылыҡ әһеле һәм иғтибарҙан булған бер кеше ине. 1883 йылда вафат булды. Мөхәммәд-Харис хәҙрәт, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, заманында Эстәрле башында ғилем һәр фәндән тәраҡҡи өҫтөндә дәрес биреү һәм тәғлимдәр күбәйтеп башланды, хәлфәләр күп булып, һәр ҡайһыһы төрлө фәндән дәрес һәм тәғлим итеп, яҙыу эше менән шөғөлләнеү һәм һөйләшеү менән мәшһүр булды. Хәлфәләр, һәр ҡайһылары үҙҙәренә махсус мәҙрәсәләрҙә шәкерттәргә һәр ҡайһыһының дәрәжәһенсә дәрестәр өйрәтеп, үҙҙәре хәҙрәттең үҙендә булған дәрескә ваҡытын да табып, һис кисектермәй хәҙрәттең дәресенә әҙер булалар ине. Был дәрестәр “Ысул” һәм “Хәҙис”тән, “Тәүҙих тәлхис” һәм “Мишкат”тән һәм “Тәфсир Ҡаҙый”ҙан булалар ине. Уҡыусылар бәхетендә уҡымышлылары һәм һүҙләшергә ғәйрәтлеләре, хәҙрәт тарафынан камил рөхсәт һәм билге алғанынан, дәрестәрҙә күп һөйләшеү һәм һәр кем үҙ белдегенсә аңлатып һөйләүҙәр һүҙләшер булып, бәғзе дәрестәр ике-өс сәғәткә ҡәҙәре лә күберәк булып ҡала ине.

Боҙ мәлдәрендә Эстәрлебашҡа серле һәм тышҡы ғилем тәхсиле өсөн килеүселәр әүәлдән күберәк булды. Ҡырғыҙ тарафынан, Минзәлә һәм Ырымбурҙан, Ҡазан тарафтарынан һәр төр ғөләмә: байҙар ҙа, әмирҙәр ҙә һәм ҡара халыҡтарҙан күп кешеләр ҡайһылары серле һәм тышҡы ғилем тәхсиленә, ҡайһылары Аллаға ҡәрҙәшлеген күрһәтеү өсөн килә ине.

Ии Аллаһ, ошо тырыштарҙы шөкөр итеүселәрҙән ҡыл! Был замандарҙа кәттә хәҙрәт, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, заманынан ҡалған Эстәрлебаштағы мәсеткә йәмәғәт һыймай башланы. Шул сәбәптән оло бүлмәне 1858 йылда төҙөнөләр, унда 400 ҡәҙәре кеше һыя.

1852 йылда ҡустыһы Мөхәммәд-Харрас бин Ниғмәтуллаһ, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, хәҙрәттәре Бохараи-Шәрифтән сәләмәт ҡайтып, шәкерттәр араһына ғилем таратырға башлап тотондо. Был ваҡыттар Эстәрлебашының камил алға китеү һәм шөһрәт тапҡан ваҡыттарынан иҫәпләнгән. Һәр тарафтан Эстәрлебашҡа ғөләмәнән күп кешеләр килеп, ҡәнәғәт булып Эстәрлебашты тәхсин иттеләр. Мәрхүм Ғәбделсәләм һәм Ғәбделвахит мөфтөй хәҙрәттәр Эстәрле башына тәкрар килде, тиҙәр, һәм мөфтөй Сәлимгәрәй Тәфтиләү хәҙрәттәре Эстәрле башын яратыусыларҙан берәү ине. Килеп торор теләк менән Эстәрлебашында бер өй ҙә бина ҡылдырыр ине, уңайлы булманы, ваҡыф итеп ҡалдырҙы, Аллаһ Тәғәлә ҡабул итһен!

Ғөләмә һәм хөрмәтле кешеләрҙән: Ҡыям Хәсән хәҙрәт, Урманай Ғәбделғәзиз хәҙрәт, Бикбау Ғәбделғәлим хәҙрәт, Саҡмаҡ Ғабдуллаһ хәҙрәт, Байраҡә Ғәбделғәли хәҙрәт, Мачәти Әхмәтйән хәҙрәт, һәм Такта-Аласыҡ шәйехе Фазлуллаһ хәҙрәт, Аллаһ рәхимлеләре, һәр йылда Эстәрлебашҡа килеп, бер ҡәҙәре тороп ғилем таратып һәм Аллаһ хаҡына орлоҡ асып һалып китәләр ине.

Эстәрле башында шәкерт күп булғанлыҡтан, Мөхәммәд-Харис хәҙрәт мәрхүм заманында күп мәҙрәсәләр яңынан бина ҡылынды һәм таштан һыухана бина ҡылынып, өҫтөндә Мөхәммәд-Харрас хәҙрәт өсөн дәресхана төҙөлдө. Хәлфәләр һәр ҡайһылары дәрестә камил һәм сикләнгән булғанлыҡтан һәм Мөхәммәд-Харрас хәҙрәт Эстәрлебашта икенсе имамлыҡҡа мәншур алып тариҡәт фәнен юлға һалырға тотонғас, дин һәм донъя ла алға үрләү тапҡандан һуң, Мөхәммәд-Харис хәҙрәт хаж сәфәренә барыуға ниәтләне. 1859 йылдың 24 декабрендә Ырымбурҙың генерал-губернаторы тарафынан рөхсәт йәғни хаж тәҙкирәһе (билеты. – **Ғ.Ғ.**) бирелеп, 1860 йылда хажға сәфәр ҡылды. Сәфәрҙә Шам-Шәрифкә һәм Мәҙинәи-Мөнәүүәрәгә барып хаж ҡылып, 1860 йылда сәләмәт ҡайтып етте. Тәҙкирәһендә, 3 августа Истамбулда, 1860 йылдың 11 августа Одессала, тип яҙылған теркәүҙәре күренә. Хәҙрәт киткән ваҡытта оҙата килеүселәр 3000-дән артыҡ булды, тип һөйләйҙәр. Хаж сәфәренән сәләмәт йөрөп, ул күп китаптар алып ҡайтты. Хаждан һуң Мәккә һәм Мәҙинә тәртибенсә рамазан шәрифтең һуңғы көнө кисендә тәрауихта (рамаҙан айында уҡыла торған махсус намаҙ. – **Ғ.Ғ.**)

Ҡөрьән уҡып, сәхәрҙән һуң таң атып ҡояш сығыуғаса булған ваҡытта “Сахих Бохари”ҙы уҡыу , доға мәжлесе була ине.

Мәрхүм Мөхәммәд-Харис хәҙрәт ике-өс мәртәбә Ҡазан тарафына саҡырылып, ҡунаҡ булып, өс мәртәбә Урал өлкәһе, йәғни Яйыҡ тарафына, тәүге мәртәбә 1863 йылда Глинный тигән ергә Иҫәнбаевтарға саҡырылып, махсус ҡунаҡ булып барҙы. Шуның икенсе йылында шул уҡ Иҫәнбаевтарға улы Ғабдуллаһ мәхдүмгә ҡәрҙәштәрҙе никах ҡылыу өсөн туй мәжлесенә барҙы. 1860 йылда Яйыҡ ҡалғаһенә Әбүбәкер менән Ғәббәс Белоусовтарға улы Ғәбиҙуллаһ мәхдүмгә ҡыҙ ярашырға туйға барҙы. Барғанда һәм ҡайтҡанда юлда һәм барған ерҙәрҙә һәр тарафтан ғөләмә һәм байҙар ҙа, ҡара халыҡтарҙан йәмәғәт ниһайәт дәрәжәлә булды, тип һөйләйҙәр. Был йылдарға ҡәҙәре һаман шул мәжлестәрҙе күргән һәм сәфәрҙәрҙә булған кешеләр һәр ҡайһылары был ваҡиғаны бер тәуарих кеүек шатлыҡ һәм мөхәббәттән иҫәпләп телгә алалар. 1893 йылды Ялпаҡ-Талға барған ваҡытыбыҙҙа ҡаҙаҡтарҙан бер ҡарт, мәрхүм хәҙрәт был тарафтарға сәфәр ҡылған ваҡытында мәжлестәрендә булған бер ҡаҙаҡ ҡарты: “Балалар Лоҡман-Хәким мең йәшәне, тип мәшһүр, әммә, – ти ул, – мең йыл тормаған икән, һәр мәжлесенә ҡарап, бәғзеһенә бер йылға, бәғзеһенә биш йылға иҫәпләп, мең йәш шуның менән иҫәпләгән икән. Әммә, – ти, – һеҙ балаларһығыҙ. Был хәҙрәттәрҙең мәжлесе еңел үтәлешле булды, һеҙ мең йәшәнегеҙ, ғафил булмағыҙ, ғәнимәт белегеҙ”, – тип һөйләне, тип еткереп әйтте.

Мөхәммәд-Харис хәҙрәт белеме камиллашҡан, тәҡүә һәм матур, килешле итеп һөйләгән телле, ер эшкәртеүгә маһир, матур тәбиғи үҙенсәлек эйәһе һәм ғәйәт тә йомарт булып, игелеге һәр кемгә: хәуасҡа ( аристократтарға. – **F.F.**) һәм ярлы халыҡҡа бәрәбәр ине. Йортонда һәр ваҡыттарҙа нисә кемһәнәләр ҡунаҡта булып, ҡайһы көндәрҙә нисә йөҙ кеше ашъяулыҡтан ниғмәт ейҙе. Был йомартлыҡтарынан башҡа, тыйб (медицина. – **F.F.**) фәненән дә өлгөргәнлектән, күпме ауырыуҙарҙы дауалап, ғәриптәргә кейем биреп, Утархана тигән урында ҡырҡ ҡәҙәре етемдәр һәм фәҡирҙәр өсөн фәҡирхана тотоп, нисә йылдар уларҙы туйҙырып аҫраны. Бер аслыҡ йылды атрафта иген һәм бәрәкәт булмағанлыҡтан, мохтаж һәм бик аслыҡ менән тынғыһыҙ булған халыҡҡа бер йылда өс мең бот ҡәҙәре ашлыҡ таратты, тиҙәр. Хәҙрәттең шөһрәте лә һәр кемгә етте, ти, хайуандарға ла игелек итеүе һәм дәүләткә лә мөхәббәте ил ағаларына мәғлүм булып, әхүәле батша ағзам хәҙрәттәренә етеп, император Александр II хәҙрәттәре 1869 йылдың 16 августында бирҙе ки батшаларға хас фарманы менән тарханлыҡ дәрәжәһенә мәрхәмәт әйләне. Тархан Мөхәммәд-Харис хәҙрәттең Эстәрле башындағы биналары бәйәнендә барса инсан һәм хайуанға ҡарағандар ғөмүми беренсе булып иҫкә төшөрә. Кәрәкле аҡ таштан юнып ысбут менән эшләнгән бер оло таш төйгөһө бар. Тархан Мөхәммәд-Харис хәҙрәт ғилеме, аҡылы һәм йомартлығы менән һәр кем алдында ҡабул булып, һүҙе һәр кем хәтерләп белгән бойороғо һәм тыйыуға ышанмаусыларҙа үҙ заманында кәмселекһеҙсә йөрөнө. Заманының ил ағалары ҡайһы бер старшиналарҙы хәҙрәткә әҙәп биреү өсөн ебәрерҙәр ине.

1869 йылда Ырымбур тарафындағы күсмә ҡаҙаҡтар араһында ғауға һәм тынғыһыҙлыҡтар барлыҡҡа килгәндә, Ырымбурҙың генерал-губернаторы Крыжановский тархан Мөхәммәд-Харис хәҙрәтте саҡырып, башлыҡтарҙы бик яраҡлы тапҡан кеше Дивайштармерҙан, ҡаҙаҡтарға мәслихәт әйтеп үлтереш булмаҫлыҡ һәм тыныслыҡҡа иғтибар итеүҙе дәғүәт итеп ҡағыҙ яҙыуҙы үтенеүе буйынса, шул 1869 йылдың 23 хәмәлендә ( 13 апрелдә. – **F.F.**) ҡаҙаҡтарға нәсихәт яҙҙы. Шул нәсихәт буйынса ҡаҙаҡтар ғауғаны ташлап, именлектә булды. Ошо ҡағыҙҙың Эстәрле башында нөсхәһе, имзаһы һәм мөһөрө бар. Нөсхәһендә күпселек «Дин һәм ислам милләтте ҡеүәтләндереү өсөн тыныслыҡ кәрәк» тигән бүлек исемендә яҙылған.

Мөхәммәд-Харис тархан донъя хәлдәренә хәбәрҙар кеше булып, “фәндәр

өйрәнеү һәм телдәр белеү зарур һәм кәрәк” тип әйтте, тиҙәр. Ул, рәхмәруллаһи ғәләйһи, тырышлыҡ күрһәтеү, өлфәт һәм нәсихәт ағзаһы ине. Ғәйәт тә ғалим, тәҡүә һәм камил шәйех булып, Бохараи-Шәрифтә иң тәүҙә шәйех Ниязҡоли әт-Төркмәни хәҙрәттәренең хәлфәһе ине. 1870 йылдың 2 ноябрендә, һижри менән 1286 йылда шағбан-шәрифтә сәнәи ҡәмәриә менән 63 йәшендә фани донъянан мәңгелек донъяға күсте. (Аллаһҡа маҡтауҙар һәм киң рәхмәт!) Йыназаһында 3 меңдән дә күберәк кеше булды, һәм вафаты һуңында бер ни саҡлы мәрҫиәләр яҙылды.

Мөхәммәд-Харис хәҙрәт, рәхмәтуллаһи ғәләйһинән, һуң Эстәрле башында мәсет һәм мәҙрәсәгә рәйес булып Мөхәммәд-Харрас бин Ниғмәтуллаһ хәҙрәт, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, ҡалды. Ул 1844 йылда Бохараи-Шәрифкә китте. 1856 йылда Бохараи-Шәрифтән сәләмәт ҡайтып, имам булып, тәғлим һәм дәрес менән шөғөлләнде. 1870 йылда Эстәрле башында хәлфә булғайны. Әммә күпселек ваҡыт, ауырыуы арҡаһында, өйҙән сыға алманы. 1871 йылдың 30 ноябрендә 57-се йәшендә фани донъянан мәңгелек донъяға күсте. Мәрхүм уҡымышлы ла, дәрәжәле лә һәм камил шәйех ине, рәхмәтуллаһи ғәләйһи.

Мәрхәмәтле һәм бик бәхетле мәрхүм Мөхәммәд-Харис тархандан һуң урынына улы Ғабдуллаһ мәхдүм имам булды. Мөхәммәд-Харрас хәҙрәттән һуң урынына улы Лотфуллаһ мәхдүм имам булып, ул 1878 йылдың августа вафат булды. Иннәә лилләәәһи үә иннәә иләйһи раджиғуун (Мәғәнәһе: Әлбиттә, һәммәбеҙ Аллаһ Тәғәләнеке һәм Уға ҡайтасаҡбыҙ. – **F.F.**). Лотфуллаһ мәхдүмдән һуң урынына тархан Мөхәммәд-Харис хәҙрәттең икенсе улы Ғәбиҙуллаһ мәхдүм имам итеп ҡуйылды. Был йылдарҙа Эстәрлелә ахун һәм мөҙәрис Ғәбиҙуллаһ хәҙрәт булып, мәҙрәсәләрҙә дәрес әйткән хәлфәләрҙең өҫтөнән рәйес һәм идара итеүсе мөдир ине.

Мәрхүм тархан Мөхәммәд-Харрас хәҙрәттән һуң Эстәрлебаш шәйехе булып ҡалған Зәйнуллаһ бин Хасир һәм Хәлфә Шир әш-Шәһир Бамир. Хәлифә хәҙрәт Ниязҡол әт-Төркмәни хәҙрәттең хәлфәләренән булып Эстәрлетамаҡ Шәрәфетдин хәҙрәттең Силәбе тарафындағы хәлфәһе Ғәбделхәким мәрхүм хәҙрәттәрҙән камиллыҡ хасил итеп, рөхсәт һәм ижазәтнамә (диплом. – **F.F.**) алып, шәйехлеккә ишаралары булғанлыҡтан, Эстәрлебаш шәйехе булдылар. Әмир хәҙрәт 1810 йылдарҙа донъяға килде, 1827 йылда Өфө өйәҙе Арыҫлан ауылынан Эстәрле башына шәкерт булып килеп, ғөмүми тәхсил итеп, мәҙрәсәлә суфыйлыҡ әһеле булып тороп, хәҙрәттәрҙең хеҙмәтендә тауу булып, әҙәп хасил итеп, һәр саҡ йортта һәм сәфәрҙә ваҡыттарында көн дә һәм төн дә һәр өс хәҙрәт заманында яҡындарынан булып, матур холоҡ һәм тәҡүәлек менән камиллыҡ тапты. Мөхәммәд-Харис хәҙрәттең хәлфәләре Мөхәммәд-Хафиз һәм Мөхәммәдйәр хәлфәләр үҙ заманында вафат булды һәм күпселеге ауылдарында имам һәм мөҙәррис булды.

1875 йылдарҙа мәрхүм тархан Мөхәммәд-Харис хәҙрәт рәхмәтуллаһи ғәләйһинең заманынан ҡалған хәлфәләрҙән мәшһүрерәге Ғабдуллаһ хәлфә бин Ниғмәтуллаһ әш-Шәһир Бихажи хәлфә (Сарапул өйәҙе Буби ауылынан) 1864 йылдар самаһында Эстәрле башына Ҡазандан, Махәд-Кәрим хәҙрәт мәрхүм рәхмәтуллаһи ғәләйһинең мәҙрәсәһендә ғилемдәр һәм фәндәр тәхсил ҡылып килгәйне. Эстәрле башында һәр ғилемлеккә ижтиһад итеп, хосусан фиҡһә (юриспруденция. – **F.F.**) фәне һәм әлысулға (методикаға. – **F.F.**) һәләтлелек хасил итте, 1880 йылдарҙа әғләм Эстәрлебаштан иҫәпләнә ине.

Мәрхүм тархан Мөхәммәд-Харрас хәҙрәт заманынан һуң Эстәрле башының күпселек талиптары һәм мәхдүмдәре Ғәбиҙуллаһ һәм Лотфуллаһ һәм Хәбибуллаһ һәм башҡалар һәр ҡайһылары Ғәбдуллаһ хажи хәлфә мәрхүмгә шәкерт инеләр. Ғабдуллаһ хажи-хәлфә 20 йыл ҡәҙәре Эстәрле башында камил ижтиһад менән дәрес өйрәтеп, тәғлим итеп, 1883 йылда рамаҙан-шәриф ғәйетенән һуң августа хаж сәфәренә китеп, шул йыл сәләмәт хаж ҡылғайны. Әммә хаждан һуң

ауырыбыраҡ Мәҙинәи-Мөнәүәрәгә килеп ауырыыуы көсәйеп, ғашүрә көн – 1883 йылдың 2 ноябрендә фани донъянан мәңгелек донъяға күсте. Ҡәбер - шәрифе Мәҙинәи-Мөнәүәрәлә. Мәрхүм дәрәжәле ғалим һәм тәҡүәле фән хеҙмәтсеһе, ышанысслы кеше ине, уға Аллаһ Тәғәләнең мәрхәмәте, бәхет һәм тынғылыҡтары насип булһын!

Мәрхүм тархан Мөхәммәд-Харис хәҙрәт рәхмәтуллаһи ғаләйһинең бишенсе улы Ғәбделмәжит мәхдүм ете йәшенән Минзәлә өйәҙенең Шаҡмаҡ ауылында тәүҙә Ғабдуллаһ хәҙрәт мәҙрәсәһендә шәкерт булып ғилем тәхсил ҡылып, һәммә Шаҡмаҡ тарафында һөйөү хасил итеп, 1886 йылда хәҙрәттәрҙең фатихаһы менән Бохараи-Шәрифкә барып, фән һәм ғилем тәхсиленә тотондо. 1890 йылда Эстәрле башының ихлас мөриттәренән Илек шәһәренең бер хөрмәтле изге сауҙагәрҙәренән Ғәбиҙуллаһ хажи тигән кешеһенә яҡын дуҫ итеп сығымдар ебәреп, Бохараи-Шәрифтән ҡайтарып ҡыҙын бирҙе һәм июндә никах бурысы һәм туй мәжлестәре булды. Йәйҙе Илек  һәм Эстәрлебаш араһында үткәреп, көҙ булғас, сентябрҙә тағы Бохараи-Шәрифкә фән һәм ғилемдәрҙе тамамлау өсөн сәфәр сыҡты. 1892 йылда Эстәрле башына ҡайтып, ғилем тәғлименә һәм фәндәрҙән дәрес бирергә тотондо. Ғәбделмәжит мәхдүм дәрескә һәм тәҡриргә (докладҡа. – **F.F.**) маһир һәм эшендә ижтиһадлы әҙәм булғанлыҡтан, дәрес башлағанда талиптар һәр ҡайһылары күпләп һөйөү әйләнә. 1893 йылдың 10 мартында хаж сәфәренә китте. Хаждан ул Мәҙинәи-Мөнәүәрәгә барып, ағаһы Ғәбделҡадир мәхдүмгә сәләмәт ҡауышыуҙан һәм хаж тамамлағандан һуң ваба ауырыуы менән фәҡәт ун сәғәт ауырып 1893 йылдың 12 зөлхизәһендә (14 июндә) 26 йәшендә вафат итте. Ҡәбере Мәккәи-Мөкәррәмәлә “Күтәреү баҡсаһы”нда билдәле урында. Мәрхүм хажи Ғәбделмәжит мәхдүм ғәйәт тә фазыл, уҡымышлы ла, йомарт та һәм һәр кемгә һөйкөмлө бер зат ине, ғүмерен ғилем юлында сарыф итте. Аллаһ Тәғәлә аҙ ғүмеренә күп сауаптар бирһен, рәхмәтуллаһи ғәләйһи рәхмәт үә әсғәт.

Мәрхүм Мөхәммәд-Харис рәхмәтуллаһи ғәләйһинең өсөнсө улы Хәбибуллаһ хәҙрәт мәхдүм 1856 йылда донъяға килде. Йәш ваҡыттарында Эстәрле башында Ғабдуллаһ хажи-хәлфәнән дәрес уҡып, 1872 йылда Шаҡмаҡ ауылында Ғабдуллаһ хәҙрәткә мәҙрәсәгә барҙы. 1872 йылдан 1878 йылға ҡәҙәре шунда дәрес уҡып һәм “Иман”дан бәғзе шәкерттәргә дәрес уҡытып, шул уҡ йылда Бохараи-Шәрифкә китте. Бохараи-Шәрифтә ике йәки өс йыл тороп, ғилемдәр һәм фәндәр алғандан һуң, Ургәнштә мәрхүм шәйех Ниязҡули әт-Төркмәни хәҙрәттең хәлифәһе иң башта, мәрхүм шәйех Мөхәммәд-Шәриф әл-Ургәнеши ән-Нуғайи хәҙрәттең улы һәм хәлифәһе Мөхәммәд-Закир хәҙрәткә яран булып эшләргә ирек һәм рөхсәт алып, 1884 йылдың 24 августында Бохараи-Шәрифтән Эстәрле башына сәләмәт ҡайтты һәм шул йыл ноябрҙә тәүҙә “Тәфсир Ҡаҙый”ҙан дәрес башланы. Дәрестең башында кешегә игелек, Ҡөрьән тәғлимәте һәм хәҙис-шәриф ғөләмәләрен уҡып, шуларға яҡшылыҡ булһын ине, тип нотоҡтар һүҙләп, доғалар уҡынып, Бохараи-Шәриф низамынса асыу мәжлесе яһап дәрес башланы.

Хәбибуллаһ мәхдүм хәҙрәт Эстәрле башында 1884 йылдан башлап “Тәфсир” һәм “Хәҙис”тән, “Ысул” һәм “Фиҡһә”нән, “Нәхү” (Синтаксис – **F.F.**) һәм “Ҡәләм”дән (“Фраза”нан – **F.F.**) 1893 йылға ҡәҙәре ысын ижтиһад менән мәшәҡәт һәм кәсептәрҙән бушанып, ун йыл ҡәҙәре дәрес әйтте. 1893 йылдарҙа мүраҡиб (инспектор – **F.F.**) тарафынан эшләтмәү ҡағыҙы килеү сәбәбенән, бер заман туҡтап торһа ла, 1895 йылдарҙа вәзир (министр – **F.F.**) тарафынан рөхсәт булып, тағы дәрескә башлап тотондо.

Хәбибуллаһ мәхдүм хәҙрәт уҡымышлы һәм фазыл, батыр һүҙле кеше ине: «Ургәнштә шәйех Мөхәммәд-Закир бин шәйех Мөхәммәд-Шәриф хәҙрәт тарафынан тариҡәткә лә иршад (инструкция – **F.F.**) әмерҙәре булһа ла, ҡарт  хәҙрәттәр ҙә әҙәп йөҙөнән әшкәрә яран тәрбиәһе менән шөғөлләнмәне. Тәүҙә заһир белем

кәрәк. Зaһир ғилем күнәк тулы хаталыҡҡа, серле ғилем тамсы-тамсы һалған һыу хаталығында, тәүҙә күнәк таҙа булһын, күнәк таҙа булмаһа, тамсылап тамған һыу бысраныр ҙа торор һәм файҙаһы ла булмаҫ, әүәл күнәк таҙа булһын, һуңынан инша Аллаһ һыу булыр»,– тип миҫал килтерә ине.

Хәбибуллаһ мәхдүм хәҙрәт һәр кем белгән түрә һәм ғәйрәт эйәһе булып, Эстәрле башында бер осор кеше араһында белем таратып, 1897 йылдың 20 ғинуарында 41 йәшендә вафат булды, рәхмәтле Аллаһ Тәғәләнән уға киң рәхмәттәр насип итһен!

Тархан Мөхәммәд-Харис хәҙрәт рәхмәтуллаһи ғәләйһинең бишенсе улы Ғәбделҡадир мәхдүм 1866 йылда донъяға килә. Тәүҙә Эстәрлебаш мәҙрәсәһендә тороп, һуңынан 1889 йылда хажға барып, хаждан һуң Мәҙинәи-Мөнәүәрәлә тәхсил ғөлүм һәм уҡыу тасхихын (корректураһын – **F.F.**) үтеп, ике мәртәбә хаж ҡылғандан һуң, 1903 йылдың 10 октябрендә сәләмәт Эстәрле башына ҡайтты. Инде шәкерттәргә уҡыу тәғлиме әйтеп һәм мәҙрәсәнең мөдирҙәренән булып тора. Эстәрле башында ғилем тәхсил итеп был замандарҙа исемдәре офоҡҡа таралған ғалим һәм ғөләмәләрҙән сәләмәт булып фән уҡытыу менән мәшғүл һәм мәсеттәрҙә имам булып, вәғәз, нәсихәт һөйләүселәрҙән бер ҡәҙәре мәшһүрерәк һәм хөрмәтле кешеләрҙән: Байракәлә Ғәбделғәли хәҙрәт, Ялпаҡ талда Ғәбиҙуллаһ ахун, Яйыҡ ҡәлғәһендә Ғәбделсалих ахун, Әстерханда Ғәбделфәрит ахун, Күксәтауҙа Мөхәммәд-Садиҡ мулла, Түбәнге Новгородта, йәғни Мәкәрйәлә Сәмәрҡанд ахун, Семипалатта Мөхәммәд-Хәлим ахун, Ҡарғалы ҡалаһында Хәйруллаһ мәхдүмдәр – һәр ҡайһылары Эстәрле башында шәкерт булып торған зат. Эстәрле башында был йылдарҙа әүәлгесә, һаман 16 мәҙрәсә булып, һәр йыл яңыртыуҙары һәм тәрбиәләре күренеп тора. 14 хәлфә Ғәбиҙуллаһ ахун хәҙрәт бин Мөхәммәд-Харис мәрхүм хәҙрәт, рәхмәтуллаһи ғәләйһинең тәдбирендә шәкерттәрҙе тәғлим итәләр, һәр фәндән дәрестәр уҡыла, шәкерттең иҫәбе 650-нән түбән төшкәне юҡ.

1897 йылғы халыҡ иҫәбендә Эстәрлебаш мәҙрәсәһендә йоҡлап йөрөүсе шәкерттәр 570 кеше яҙылды. Иҫәптән һуң 40-лап шәкерт тағы мәҙрәсәгә тәғлим өсөн килгән. Мәҙрәсәлә ятмайынса йөрөп уҡыусы шәкерттәр тағы 40-ҡа ҡәҙәр иҫәпләнде. Шул иҫәпсә, Эстәрле башында барыһы 630-ға ҡәҙәре талиптар дәрес һәм тәғлим алып, дин таныу ижтиһадындалар. Эстәрле башының бер өҫтөнлөгөнән һәм мәрхүм хәҙрәттәрҙең доғаһынан иҫәпләнә торған шул йәмәғәттәргә ҡыш көндәрендә мәсеттә, күпселек йәмәғәт намаҙында, бер имам артында меңгә саҡлы йәмәғәт булып, намаҙҙар үтәлеүе “Рәхмәтуллаһи үә бәракәт” (мәғәнәһе: Аллаһ рәхмәте – **F.F.**) доғаһынан һанала.

Мәрхүм тархан Мөхәммәд-Харис хәҙрәт, рәхмәтуллаһи ғәләйһинең дүрт улы, һәр ҡайһыһы Эстәрлебаш мәҙрәсәләренең яңыртылыуы, тәртибе һәм тәрбиәләре өсөн ижтиһад менән тора. Аллаһ Тәғәлә ғилемгә алға китеү һәм ғалимдарҙы күп итеп, ғилем талиптарына тәүфиҡ, һиҙайәт бирһен! Батшабыҙ Император ағзам Николай Александрович хәҙрәттәренә оҙон ғүмерҙәр биреп, мосолмандарға миһырбан һәм шәфҡәттәрҙе күп арттырып, тормоштарыбыҙҙы шат әйләһәсе.

Даими ғилем тәхсил һәм маҡтаулы ғөләмә ҡылып, ғилем мәҙехендә һәм ғилемлек теләгендә булып, үткәндән дә элек ҡабул ителгән ғибәҙәттәр менән ҡәнәғәтлек үҙгәлегендә ғүмерҙәр кисер?! Беҙгә яҡшыларҙы зикер итеп, мәжлестәрҙә ниһайәтһеҙ рәхмәттәрҙе өҫтөбөҙгә файҙалы ямғырҙар кеүек яуҙырып, изгеләргә ҡауышыуҙы насип әйләһәк ине тиеү. Һәр уҡыусынан ихласлы доға һәм фатихалар уҡыттым. Амин.

Төрки телдә ғәрәп әлифбаһы менән яҙылған
тарихи әҫәрҙе **Ғариф хәҙрәт ҒАБДРАХМАНОВ** тәржемә итте.

*2010 – Бөтә Рәсәй*
*халыҡ иҫәбен алыу йылы*

## ҒАИЛӘ: БАТША РӘСӘЙЕ, СОЦИАЛИЗМ ҺӘМ БАҘАР КАПИТАЛИЗМЫНДА

Ғаилә – кешегә аң инә башлаған дәүерҙәрҙән үк барлыҡҡа килгән бик боронғо институт, һәм уның йәмғиәттәге әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Әхлаҡты ла, әҙәпте лә, ғәҙеллекте һ.б. социаль күренештәрҙе ғаиләһеҙ күҙ алдына килтереү ҡыйын. Һәр ҡоролош тарафынан тейешенсә баһаланып, халыҡ иҫәбен алыу кеүек мөһим кампанияларҙа ғаилә үҙ урынын биләй барған. Билдәле, был эшмәкәрлек иң элек хакимдарҙың ғаилә институтына ниндәй әһәмиәт биреү йәһәтенән сығып алып барылған. 1897 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға тиклем башҡорттар араһында үткәрелгән рәүиздәрҙә, мәҫәлән, башлап ғаилә хужаһы булараҡ ир кеше, унан һуң ир балалар теркәлеп, был ерҙең башҡорттарҙа ир енесенә генә бирелеүе менән бәйләнгән. Хужаның нисә ҡатыны булыуы, уларҙан тыуған ир балалар батша рәүиздәрендә айырым урын алған.

2008 йылда «Китап» нәшриәтендә сыҡҡан «Население Башкортостана: XIX – XX века» (авторы – БР Статистика идаралығы) тигән ҡалын йыйынтыҡ буйынса, 1897 йылғы Бөтә Рәсәй империяһының халыҡ иҫәбен алыуҙа Өфө губернаһында 2,9 миллионлап кеше, йәғни ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙ бер сама күренә. Ғаилә ҡороу 17 – 19 йәштәрҙә башланып, 1897 йылда ошо йәштәге ир енесенең – 5,5, ҡатын-ҡыҙҙың 25 проценты самаһы «башлы-күҙле» булған. Хатта 13-14 йәшлектәрҙән – бер, 15 – 16 йәштәгеләрҙән иһә 389 ҡатын-ҡыҙ «никахлы». 20 – 29 йәшлек ир-егет араһында өйләнеп өлгөрмәгәндәр – 40 процент самаһы, ә бына ҡатын-ҡыҙҙар төркөмөндә ундайҙар өс мәртәбәгә аҙыраҡ. Ҡатын-ҡыҙҙар, ғәмәлдә, 30 – 40 йәштә «башлы-күҙле» булып бөткәндә, ир-егеттәрҙең ғаилә ҡормағандары ла осрай. 60 йәштән ололар араһында яңғыҙлыҡ йышыраҡ осрай, айырыуса ҡатын-ҡыҙ мөхитендә.

Ҡалаларҙа кейәүгә бирелгәндәрҙән 15-16 йәшлек никахлы бер ҡатын-ҡыҙ күренә. Ғөмүмән, ҡала халҡының ғаилә ҡороуға мөнәсәбәте һалҡынығараҡ. 17 – 19 йәштә, ғәҙәттә, егеттәр өйләнмәй, ҡатын-ҡыҙҙың да өстән ике өлөшө самаһы кейәүгә сыҡмай. 20 – 29 йәшлек ир-егеттең һәр икенсеһе буйҙаҡ, ә ҡатын-ҡыҙҙың иһә һәр дүртенсеһе генә. 30 – 37 йәшлек ике енес ағзаларының һәр унынсыһы – яңғыҙ. 60 йәштән өлкән ҡатындар араһында ла яңғыҙҙар аҙ түгел.

Ауылдарҙа хәл төрлө социаль сәбәптәр арҡаһында айырыла. 30 йәшкә тиклемге ир-егеттәрҙең һәр өсөнсөһө тиерлек, ә 40 йәштәрҙә, ғәмәлдә, барыһы ла өйләнә. Ҡатын-ҡыҙ иртәрәк кейәүгә барһа ла, 20 – 29 йәштә лә донъя ҡормағандары осрай.

Батша Рәсәйендә нәҫелле дворяндар, дворян булмаған чиновниктар, христиан руханиҙары, почетлы граждандар, сауҙагәрҙәр, мещандарҙың ғаилә хәле айырым теркәлгән. XIX быуат аҙағында дворяндарҙың 4-әр меңдән ашыу ир һәм ҡатын-ҡыҙ енесе ғаиләһеҙ, 3-әр меңгә яҡыны парлы. Был ҡатламда тол ҡатындар

ирҙәргә ҡарағанда биш тапҡырға күберәк. Руханиҙар араһында, тәбиғи, буйҙаҡтар күберәк: 667 ир һәм 650 ҡатын ғына ғаиләле күренә. Почетлы граждандар, сауҙагәрҙәр араһында буйҙаҡтар күберәк, тол ир һәм ҡатындар ҙа йышыраҡ осрай. Шуныһы күҙгә ташлана: батша Рәсәйендә айырылышыу, ғөмүмән, һирәк күренеш һаналған.

Инородецтар, бер ҡатламға ла ҡарамағандар, финдар, сит илдәр подданныйҙары иҫәпкә айырым алынған. Дөйөм алғанда, Өфө губернаһында 635,5 мең ир, 585,3 мең ҡатын-ҡыҙ (бәлиғ булмағандар менән бергә – **М. Х.**) енесе парһыҙ күренә. Ғаиләлеләр, енестәр тиңдәшле рәүештә – 4 27,5 мең һәм 441,2 мең самаһы.

Советтар осоронда халыҡ иҫәбе тәү тапҡыр 1926 йылда алынған. Унда ғаилә хәле шәхси (личный) листоктың 8-се пунктында йәйәләр эсендә «буйҙаҡ», «ҡыҙ», «өйләнгән», «кейәүҙә», «тол», «айырылған» тип бирелә. Пунктҡа ҡағылышлы «Нәсихәт»тә, «теркәлмәгән никах теркәлгәненә тиңләштерелә» тиелгән. Айырылышыу тураһында мәғлүмәт рәсми документы булғанда ғына теркәлгән. 15 – 19 йәшлек 141 мең ир-егеттең 9,2 меңе өйләнеп, 189-ы никах боҙоп та өлгөргән. Хатта тол ҡалыусылар ҙа күренә. Тимәк, социаль хәл шундай булған. 20 – 24 йәшлектәр төркөмөндә буйҙаҡтар аҙыраҡ, өйләнгәндәр күберәк осрай. 30 – 34 йәштә, ғәҙәттә, ирҙәр енесенең «башлы-күҙле»һе күберәк булһа, 40 – 44 йәштә күпселеге үҙ ғаиләһен ҡора. 70 һәм унан да өлкәнерәктәр төркөмөндә ҡотолғоһоҙ социаль күренеш – яңғыҙлыҡ йыш осрай.

15 – 19 йәштә ҡатын-ҡыҙ кейәүгә сығып, никах боҙоп өлгөрә. 15 йәштән өлкән 186 меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙҙың өстән ике өлөшө самаһы үҙ пары менән йәшәй. Тол ҡалғандар күберәк, айырылышҡандар ҙа аҙ түгел. Тол ҡатындарҙың күбеһе 50 йәштән ололарға тура килеп, 70 йәштән уҙғандарҙың 24 меңләбе үҙен тол итеп күрһәткән.

Совет осоронда мәғлүмәттәрҙе һәр 1000 кешегә иҫәпләп күрһәтеү ғәмәле лә индерелә. 15 – 19 йәштә һәр 1000 ҡатын-ҡыҙҙың 137-һе ғаилә ҡорһа, егеттәр араһында ундайҙар икеләтә һирәгерәк. Киреһенсә, 20 – 24 йәшлек ирҙәр араһында өйләнмәгәндәр мең кешегә 433 тура килһә, ҡатын-ҡыҙҙарҙа өс тапҡыр кәмерәк. Айырылышыуҙар күберәк 30 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙ араһында осрай: һәр мең кешегә 38.

1939 йылғы иҫәп алыуҙа ғаилә хәле 9-сы пункттағы «Никахта тораһыңмы?» тигән һорауҙа сағылыш таба. Был кампанияла дәүләт халыҡтың иҫәбенә, енесе һәм йәшенә, милли составына, туған теленә, уҡый-яҙа белеүенә, белем кимәленә, йәшәү сығанаҡтарына иғтибарҙы күберәк бүлә. Ике иҫәп араһында республикала 1 йәшкә тиклемгеләр ике тапҡырға тиерлек кәм теркәлә. 19 йәшкә тиклемгеләр араһында ир балалар өҫтөнлөк итһә, 35 – 39 йәштән юғары ҡатын-ҡыҙ күберәк булып, 50 – 55 йәшлектәр араһында һәр ир енесенә ике ҡатын-ҡыҙ тура килә. Был иҫәп алыуҙа Башҡортостанда 80 йәштән өлкән 3,1 мең ир һәм 5,7 мең ҡатын-ҡыҙ теркәлгән. 85 –89 йәштән юғарылар төркөмөндә ҡатын-ҡыҙ абсолют күпселекте тәшкил итә. Шул йылда республикала йөҙ йәштән өлкән 546 кеше, шул иҫәптән 403 ир (йыйынтыҡта шулай – **М. Х.**) теркәлгән.

1959 йылғы иҫәп алыуҙа ғаилә мөнәсәбәттәре 1-се пункттағы ғаилә хужаһына мөнәсәбәттә һәм 6-сы пункттағы «әле никахта торамы»? тигән һорауҙарҙа бирелгән. Ҡыҙыҡлы һәм ғибрәтле мәғлүмәттәр осрай. Мәҫәлән, 14 йәшлек 11,4 мең үҫмерҙең дүрте ҡатынлы булырға өлгөргән. Үҫмер ҡыҙҙар араһында ундайҙар икәү. 15 һәм 16 йәшлек үҫмерҙәрҙең дә ғаилә ҡорғандары бар – дүрт һәм 45. Башҡортостанда ул дәүерҙә 17 йәштә өйләнеүсе егеттәр – 171, 18 йәштә «башлы-күҙле» булғандар 777 теркәлгән. Ҡатын-ҡыҙ төркөмөндә иртә тормошҡа

сығыусылар ике тапҡыр йышыраҡ осрай. Шул уҡ ваҡытта 20 – 24 йәшлек егеттәрҙең һәр өсөнсөһө генә никахта торһа, ҡатын-ҡыҙҙарҙың иһә – һәр икенсеһе. Йәш артҡан һайын яңғыҙҙар кәмей барып, 40 менән 50 араһында тағы ла күбәйә башлай. Мәҫәлән, 54 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙың ни бары 40,9 проценты ғына ғаиләлә донъя көтә. 65-йәштән уҙғандарҙың һәр өсөнсөһө генә ире менән йәшәй. 1959 йылда Башҡортостанда йөҙҙән оло йәштәге 64 ир һәм 283 ҡатын-ҡыҙ күренә.

Иртә ғаилә ҡороу – ҡалаларға ла хас күренеш. 14 йәшлек ҡыҙ һәм 15 йәшлек үҫмер «башлы-күҙле» булырға өлгөргән. 18 йәшлек егеттәрҙән 241-е, ҡыҙҙарҙан 17 йәштә 260-ы үҙ парын тапҡан. 23-24 йәшлек егеттәрҙең яртыһы өйләнһә, ошо йәштәге ҡыҙҙарҙың өстән ике өлөшө – кейәүҙә. 40 йәштән уҙғандар ҡалаларҙа башлыса үҙ ғаиләһендә йәшәй. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа ғаиләлеләрҙең иң күбе 30-ҙы уҙғандар араһында – 78,4 процент, ә бына 40 йәшлектәрҙә иһә һәр өсөнсөһө генә «тормош иптәшле» тип теркәлгән. Оло йәштәгеләрҙә, ғөмүмән, яңғыҙлыҡ йыш осрай.

Был иҫәп алыуҙа һәр 1000 иргә күпме ҡатын-ҡыҙ тура килеүе хаҡында ла мәғлүмәт йыйылған. Бер йәшкә тиклемгеләр төркөмөндә ир балалар күберәк – 1039. Был нисбәт 15 йәшкә тиклемгеләр араһында тотороҡло һаҡланып, 16 йәштән өлкәндәрҙә иһә ҡатын-ҡыҙ өҫтөнлөк ала. 36-37 йәшлектәр араһында һәр 1000 ҡатын-ҡыҙға – 584, 46 йәшлектәрҙә ике ҡатынға – бер, 100 йәштән ололарҙа биш ҡатын-ҡыҙға бер ир енесе тура килә.

1970 йылғы иҫәп алыуҙа ғаилә хәлен асыҡлаған һорауҙар үҙгәрмәй. 18 йәшкә тиклемгеләр төркөмөндә һәр 1000 ҡатын-ҡыҙға 1022 ир енесе теркәлгән. Артабан ҡатын-ҡыҙҙар арта. Алтмышҡа етмәҫ элек үк ирҙәр төркөмөндә һәр ике ҡатын-ҡыҙға – бер, 80 йәштән ололар араһында бер ир енесенә өс ҡатын тура килә. 1970 йылда Башҡортостанда йөҙҙән өлкән 1209 кеше, шул иҫәптән 625 ҡатын-ҡыҙ, теркәлгән.

15 йәшлек һигеҙ үҫмерҙең һәм 38 ҡатын-ҡыҙҙың үҙ ғаиләһе күренә. 16-17 йәшлектәр төркөмөндә ундайҙар йышыраҡ осрап, 25 –29 йәшлектәр төркөмөндә парлылар ике енестә лә бер ни тиклем тигеҙләнә. Ғаилә ҡороусылар башлыса – 30 – 44 йәштәгеләр. 45-тән һуң өйләнеүселәр һәм кейәүгә сығыусылар икеләтә, артабан өсләтә кәмей.

Ҡала халҡы араһында ла иртә ғаилә ҡороусылар күренә. Мәҫәлән, 15 йәшлек ике үҫмер, 12 ҡыҙ «башлы-күҙле» булырға өлгөргән. Күптәр ғаиләһен 30 – 34 йәштә ҡора. 70 йәштән оло 11 меңдән ашыу ир, 7 меңдән күберәк ҡатын-ҡыҙ никахлы күренә. 1000 кешегә иҫәпләгәндә, ғаиләле ирҙәр 50 – 69 йәштәгеләр төркөмөндә (975 кеше) һәм 30 – 34 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙарҙа – 864.

Ауыл ерендә лә 15 йәштә өйләнгән ике үҫмер, кейәүгә сыҡҡан 26 ҡатын-ҡыҙ теркәлгән. 20 – 24 йәшлектәр араһында ғаилә ҡороусылар күбәйә. Ҡатын-ҡыҙ башлыса үҙ ғаиләһен 30 – 34, ә ир-егеттәр 35 – 39 йәштәрҙә ҡорған. Һәр 1000 кешегә ғаиләлеләрҙең иң күбеһе 45 – 49 йәшлек ир һәм 30 – 34 йәшлек ҡатын-ҡыҙға тура килә. 70 йәштән өлкәндәр төркөмөндә һәр 1000 ирҙең 850-һе, ҡатын-ҡыҙҙың 205-е генә пары менән донъя көтә.

1979 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа никахты күрһәткән 6-сы пунктҡа «тол», «бер ҡасан да никахта тормаған», «айырылған» кеүек өҫтәмәләр индерелгән. 1979 йылда Башҡортостанда 1,7 миллиондан ашыу ир енесе һәм 2 миллиондан күберәк ҡатын-ҡыҙ йәшәгәне күренә. Ҡалаларҙа халыҡ арта: ирҙәр 1 миллиондан, ҡатын-ҡыҙ 1,1 миллиондан күберәк теркәлә. 15 – 19 йәштә ғаилә ҡороусылар күренә башлай. Ә бына 10 үҫмер һәм 62 ҡатын-ҡыҙ тол ҡалырға ла өлгөргән. Айырылышыусылар ҙа юҡ түгел. «Башлы-күҙле»ләр, ғәҙәттә, 40 – 44 йәшлек

ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙа осрай. Ләкин ошо йәштәге 3 меңләп ир һәм 4 меңләп ҡатын-ҡыҙҙың бер ҡасан да ғаиләһе булмаған. Бер тапҡыр ҙа өйләнеп ҡарамаған (кейәүгә сыҡмағандар) 70 йәштән өлкәндәр араһында ла иҫкәрмә түгел. 50 – 54 йәшлек 1,6 мең тол ир һәм 65 – 69 йәшлек 56,3 мең тол ҡатын теркәлгән. Никах боҙоусылар араһында йәшкә ҡарап әллә ни айырма күҙәтелмәй, әммә ундайҙарҙың иң күбе 40 – 44 йәшлек ир һәм 50 – 54 йәшлек ҡатын-ҡыҙ араһында күренә.

Был осорҙа республикала 17,1 мең тол ир һәм 311,7 мең тол ҡатын йәшәүе йәмғиәттә социаль тормошта кире күренештәр барлыҡҡа килеүе хаҡында һөйләй. Никах боҙоу «ныҡ үҫешкән социализм»дың таралған күренешенә әүерелә. Ҡалаларҙа 70 йәштән оло 60 мең самаһы тол ҡатын теркәлгән. Ауыл халҡы ике тапҡыр һирәгерәк айырылышып, тол ирҙәр унда аҙыраҡ булыуға ҡарамаҫтан, тол ҡатындар ҡалалағынан күберәк. Бер ҡасан да ғаилә ҡормағандар 40 – 44 йәшлек ирҙәрҙә меңдән ашыу булһа, ҡатын-ҡыҙҙарҙа – илле тапҡыр күберәк. 70 йәштән оло 1407 ҡатын-ҡыҙҙың бер ҡасан да никахта тормауын ғәҙәти күренештәр рәтенә индереп булмай.

Советтар Союзында тәү тапҡыр ғаиләләрҙең ҙурлығы иҫәпкә алына. Бер ғаиләлә уртаса 3,6, шул иҫәптән ауылда, 3,9 кеше теркәлгән. Ун һәм унан да күберәк кеше йәшәгән ике меңләп ғаилә күренә. Дүрт кешелек ғаиләләр 238 меңдән ашыу, ҡалала – 157 меңләп, биш кешелеләр – 117 мең (ҡала менән ауыл тиң – 6 мең самаһы), алты кешелек 54 мең, ете кешеле 24 меңләп, һигеҙ кешеле 10 мең ғаилә күренә.

1979 йылда Башҡортостандың даими халҡы 3,8 миллиондан ашыу булып, 2,2 миллионға яҡыны ҡалаларҙа көн күргән. 3,4 миллион кеше ғаиләлә, 190 меңдән ашыуы ғаиләһенән ситтә йәшәгән. Яңғыҙҙар 219 меңдән күберәк, шул иҫәптән ауылдарҙа – 78,3 меңдән ашыу. Ир енесенең ғаиләнән ситтә йәшәгәне йөҙ меңдән күберәк булһа, ҡатын-ҡыҙ иһә бер ни тиклем аҙыраҡ. Яңғыҙ ирҙәр яңғыҙ ҡатындарҙан өс тапҡыр кәмерәк күренә. Ҡалаларҙа буйҙаҡ ирҙәр ауылға ҡарағанда дүрт тапҡыр күберәк теркәлһә, яңғыҙ ҡатындар шул уҡ ауылда ирҙәрҙән алты мәртәбә күберәк осраған.

Республикала 955 меңләп, шул иҫәптән ҡалала 556 меңдән ашыу, ғаилә теркәлгән. 18-ҙән йәш балалы ғаиләләр 651 мең самаһы. Бер һәм ике балалы ғаиләләр ҡалаларҙа йышыраҡ осраһа, ауылдарҙа өс балалылар ҡалалағынан ике тапҡырҙан күберәк.

1989 йылғы иҫәп алыуҙа никахта тороу тураһындағы һорау 16 йәшкә тиклемгеләргә бирелмәгән. Әгәр яуап биреүсе үҙе был хаҡта белдерһә, һорау ҡағыҙында билдә ҡуйылған. 30 – 34 йәшлек буйҙаҡтар ирҙәр араһында – 19 мең, ҡатын-ҡыҙҙарҙа 12 мең теркәлгән. Хатта 55 – 59 йәшлек ирҙәрҙең меңдән ашыуы бер ҡасан да өйләнмәгән. Никах боҙғандар 1979 йылғы иҫәпкә ҡарағанда йышыраҡ күҙәтелә.

60 – 64 йәшлектәр араһында тол ҡатындар тол ирҙәрҙән ун тапҡыр күберәк. Тәүгеләре 30 – 34 йәштә күберәк никах боҙһа, икенселәре 50 – 54 йәштә йышыраҡ ҡатын айыра. 70 йәштән өлкән тол ирҙәр 10 меңдән ашһа, тол ҡатындар иһә 14 тапҡырға күберәк. Никах боҙоусылар ирҙәр араһында ҡатын-ҡыҙҙан ете тапҡыр һирәгерәк осрай.

Ун йылда ғаиләләр үҙгәреш кисергән. Мәҫәлән, ун кешелек ғаиләләр меңгә лә тулмай. Һигеҙ кеше йәшәгән ғаиләләр 4444 теркәлһә, туғыҙ кешелектәре иһә өсләтә кәмегән. Башҡортостанда дүрт кешелек ғаиләләр иң күбе – 284,6 меңдән күберәк. Ҡалаларҙа халыҡ күберәк йәшәгәнлектән, унда ғаиләләр ҙә күберәк, ә бына алты – һигеҙ кешелек ғаиләләр ауылдарҙа йышыраҡ осрай. Ике иҫәп

араһында яңғыҙ ғаиләләр артҡан – 213 меңдән ашыу. Ҡала ерендә был хәл ике тапҡыр йышыраҡ күҙәтелә. Ауылдарҙа һирәгерәк.

2002 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙа ғаилә институтына ҡағылышлы һорау 4-се пунктта тора. Уҙған иҫәптәргә ҡарата үҙгәреш, дөрөҫөрәге – өҫтәмә «Никахығыҙ теркәлгәнме?» тигән һорауҙа сағыла. Был тәбиғи, сөнки үҙгәртеп ҡороу йылдары, унан һуңғы капиталистик мөнәсәбәттәр ғаилә институтына ла либераллектең үтеп инеүенә булышлыҡ итте. 17 йәшкә тиклемге егеттәрҙең 102-һе теркәлмәгән никахта йәшәгән. 18-19 йәшлек егеттәр төркөмөндә бындай ғаиләләр – дүрт, 20 – 24 йәшлектәрҙә тағы ла ун тапҡырға йышыраҡ осрай һәм артабан тағы ла күбәйә. 40 – 44 йәшлек 13,6 мең ир рәсми теркәлмәгән никахта йәшәй. Республикала барлығы 86 меңдән ашыу ир менән ҡатындың ғаилә мөнәсәбәттәре теркәлмәгән. Был рәсми никахта тороусыларҙың ундан бер өлөшө тигән һүҙ.

Айырылышыусы ғаиләләр ҙә һирәк күренеш түгел. Мәҫәлән, 20 – 24 йәштә никах боҙғандар 1,6 меңләп пар булһа, 25 – 29 йәштәгеләрҙә был хәл дүрт ярым тапҡыр йышыраҡ күҙәтелә. 40 – 44 йәшлек ирҙәрҙең иһә 18 меңдән ашыуы ҡатын айырған, пенсия йәшен үткәндәр ҙә никах боҙоуҙан тартынмай.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың 16 йәштән өлкән 972 меңләбе ғаиләлә йәшәп, һәр унынсы ҡатын-ҡыҙ ире менән ирекле мөнәсәбәттә тора. 16 йәшкә тиклем ундайҙар 18 кеше иҫәпләнһә, 20 – 24 йәшлектәр – 9,5 мең, артабан тағы ла күберәк. Хатта 60 йәштән өлкән ҡатындарҙың 10 меңе ошондай ғаиләлә йәшәй.

Быуат башында йәмғиәттә яңғыҙлыҡ тағы ла ҡатмарлыраҡ социаль күренешкә әүерелә. 30 – 45 йәшлек ирҙәрҙең бер ҙә өйләнеп ҡарамағандары 55 меңдән ашыу. 50 йәштән уҙғандарҙа ла быны һирәк күренеш тип әйтеп булмай. Ҡатын-ҡыҙҙың бер ҡасан да ғаилә ҡормағаны 300 меңдән ашыу. Хатта 30 – 34 йәшлектәрҙең 13 меңгә яҡыны бер үҙе йәшәй. 40 – 44 йәшлектәрҙең дә 9 меңләбе яңғыҙ ғүмер һөрә. 310 меңдән ашыу тол ҡатын-ҡыҙ теркәлгән. 70-тән оло ҡатын-ҡыҙҙарҙың 155 меңләбе яңғыҙ ҡартая.

Ғаиләлә күпме бала булыуы хаҡында ла мәғлүмәттәр бар. Әммә улар был юлы «йорт хужалығы» тип алынған. Бер кешелек хужалыҡтар 270 меңдән артһа, 6 кешелектәр дүрт мәртәбә кәмегән. Иң күп ғаиләләр ике – 368,6 мең һәм өс кешеле – 336,4 мең. Биш кеше йәшәгән ғаиләләр 100 меңдән күберәк. Һәр йорт хужалығында уртаса 2,8, ауылда өс кеше көн күрә. Йортһоҙ хужалыҡтар ҙа бар: мәҫәлән, бер кешеле – 928. Был башлыса ҡалаларға хас күренеш. 18-ҙән йәш балалы ғаиләләр айырым теркәлеп, уларҙың 764 меңләбе атаһы йәки әсәһе менән генә йәшәй.

Рәсәй ерлегендә бер быуаттан ашыу ғүмер эсендә ғаиләләр шундай булып күҙ алдына баҫа. Үҙгәрештәр күп, һәм уларҙың борсолорлоҡтары ла күбәйә төшкән. Иң насары: ғаилә институтының абруйы ҡаҡшау дауам итә. Ғаиләһеҙ ир йәки ҡатын, боронғолар әйтмешләй, – йүгәнһеҙ ат. Дәүләткә, йәмәғәтселеккә уйланыр урын бар. Тағы ла бер проблема – йәмғиәт ҡартая: балалар аҙ тыуа, үлем арта. Был проблема ҡатмарлыраҡ, уны «әсәлек капиталы» менән генә хәл итеп булмай.

2010 йылғы иҫәп ғаилә мөнәсәбәттәрендә нимәләр күрһәтер? Быны, һәр ҡайһыбыҙ ҡатнашмай тороп, асыҡлау мөмкин түгел.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

## ҺОРО КҮМЕР БИРГӘН ҒҮМЕР

– Заманында ошондай продукция етештерә торғайныҡ. Тотоп ҡара әле, ҡустым, – тип Закир Аҡһаров тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейында ҡиммәтле экспонат булараҡ ҡәҙерләп һаҡланған сувенир брикеттарҙы миңә һондо. – Күпме өйҙәрҙе йылытты ошо һоро күмерҙән эшләнгән яғыулыҡ! Күмертау брикет фабрикаһында мин егерме бер йыл эшләнем. Ул ваҡытта фабрика илебеҙҙәге күмер сәнәғәте предприятиелары араһында иң алдынғылар рәтенән төшмәне.

Закир ағай хаҡлы: ҡасан ғына әле Күмертауҙы «Шахтерҙар ҡалаһы» тип йөрөтә инек. Уның хаҡында йырҙарҙы сәхнәләрҙән йырлап, шиғырҙарҙы яттан һөйләп йөрөй торғайныҡ. Хәҙер иһә уны «Авиаторҙар ҡалаһы» тип беләләр.

1942 йылда геологтар тарафынан Көйөргәҙе районында күмер ятҡылығы асылып, уға шундағы шишмә исемен – «Бабай»ҙы ҡушалар. Боронғо мәғлүмәттәр буйынса, ошо ерҙәрҙә элек Бошман-Ҡыпсаҡ ырыуы башҡорто Бабайғол йәшәгән. Ул һалған ауыл да, эргәһендәге тау менән шишмә лә Бабайғол тип йөрөтөлгән. Тулы һыулы шишмә үҙенең сафлығы менән айырылып, Оло Юшатыр йылғаһының ҡеүәтен арттырған.

Бабайғолдың Ишемғол, Наҙарғол, Ниязғол исемле улдары булып, Наҙарғоло Көйөргәҙе районындағы шул исемдәге ауылға нигеҙ һалған.

Оҙайлы геологик тикшеренеүҙәрҙән һуң, Ермолай ҡасабаһынан һигеҙ саҡрымдағы Бабай һоро күмер ятҡылығы бассейны СССР-ҙағы брикет фабрикаһын урынлаштырыу өсөн иң ҡулайлы урын тип табыла. Шулай итеп, 1947 йылда Бабай ҡасабаһы барлыҡҡа килә. Был тарихи дата шофер Афанасий Серяктың Мәләүездән ағас, таҡта тейәлгән материалдарҙы булаҡаҡ ҡала биләмәһенә килтереүенән башлана. 1947 йылдың 8 сентябрендә тәүге йорттоң нигеҙе һалынып, митинг үткәрелә.

Элекке Советтар Союзының төрлө төбәктәренән күмер сәнәғәтенә бәйле һөнәр эйәләре ошонда эшкә килә. Тирә-яҡ ауылдарҙан, райондарҙан да йәштәр ағыла. Автобустар булмау сәбәпле, яҡындағы ауылдарҙан, ваҡытлыса ҡоролған палаткаларҙан эшселәргә йәйәү йөрөп эшләргә тура килә.

1948 йылдың яҙында Стәрлетамаҡ районының Аллағыуат ауылынан Ермолаево станцияһына тиклем тимер юл төҙөлә башлай. Унда Башҡортостандың 14 районынан 1400 ат, үгеҙ егелгән арбалар тимер юл полотноһына йөк ташый. Ул замандарҙа Көйөргәҙе, Мәләүез, Күгәрсен райондарында күпләп йәшәгән ҡаҙаҡтар ҙа дөйәләре менән йөк ташыу өсөн төҙөлөшкә йәлеп ителә.

1953 йылдың 16 февралендә РСФСР Юғары Советы Президиумы Указы менән Бабай ҡасабаһына ҡала статусы бирелә. Был ваҡытта уның биләмәһендә Ермолаево күмер разрезы, 9 шахта төҙөү һәм төҙөлөш идаралығы булған «Башуглеразрезстрой» тресы, 1250 автомашиналы парк, ҡеүәтле тимер юлы

хужалығы, 3839 гектар биләгән 46 ойошма һәм предприятиеһы була. 1955 йылда СССР Хөкүмәте Күмертау төҙөлөшөнә 300 миллион һум бүлә. Тиҙҙән бер-бер артлы 200 мең квадрат метр торлаҡ, өс киске мәктәп, дүрт урта, биш башланғыс һәм ете йыллыҡ, музыка, ике тау сәнәғәте мәктәптәре, техник училище, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге клуб, туғыҙ балалар баҡсаһы, китапхана, 10 мең урынлыҡ «Шахтер» спорт йәмғиәтенең үҙәк стадионы, 18 магазин, «Урал» рестораны, ашханалар, төрлө көнкүреш учреждениелары ҡалҡып сыға. Урамдарға ағастар ултыртыла, асфальт түшәлә. Ул йылдарҙа ҡала ҙур төҙөлөштө хәтерләтә: теплица комбинаты, күп ҡатлы йорттар һалына. 1956 йылда Күмерселәр мәҙәниәт һарайы төҙөлгәс, ул ысын мәғәнәһендә мәҙәни ял итеү урынына әүерелә. Бында тәүге көндәрҙән үк хор, бейеү, драма түңәрәктәре, һуңыраҡ башҡорт йыр һәм бейеү ансамблдәре, халыҡ театры ойошторола. Тиҫтә йыллап ваҡыт эсендә Башҡортостандың көньяғында күмерселәр ҡалаһы ҡалҡып сыға.

Күмертауҙың исеме нисек барлыҡҡа килгән һуң? 1949 йылда эш сәфәре менән Көйөргәҙе районына килгән ВКП(б) өлкә комитетының беренсе секретары Сабир Ваһапов Бабай ҡасабаһы эшсәндәре менән осрашҡанда: «Эшселәр ҡасабаһын нисек атаясаҡһығыҙ?» – тип һорай. Берәүҙәр «Шахтерск» тиһә, икенселәре, күберәк йәштәр эшләүенә баҫым яһап, «Комсомол» тип атауҙы хуп күрә, кемдер, яҡтылыҡтың яңы үҙләштерелә башлауын иҫәпкә алып, «Йәш күмер» атамаһын урынлы тип иҫәпләй. Сабир Ваһапов уларҙың береһен дә оҡшатмай. «Эшселәр ҡасабаһын Күмертау тип атаһаҡ, һеҙ быға нисек ҡарайһығыҙ?» – тип һорай ул аҙаҡтан. Исем барыһының да күңеленә хуш килә. «Ошо исемгә бәйле документтар тултырығыҙ», – ти ул, һөйләшеүгә нөктә ҡуйып. Ҡаланың яңы исеме ул ваҡыттағылар, йәғни хәҙерге оло быуын кешеләре өсөн ҙур яңылыҡ була, сөнки улар әлеге ҡасабаны «Бабай ҡала» тип әйтергә өйрәнеп, күнегеп бөткән була.

1954 йылда Күмертау ТЭЦ-ы электр энергияһы һәм йылылыҡ бирә башлай. 1955 йылда брикет фабрикаһының беренсе сираты сафҡа индерелә.

Закир Аҡһаров менән, тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейынан сығып, Ленин урамынан ҡаланың көньяғына йүнәләбеҙ. Оҙаҡламай Карл Маркс һәм Ленин урамдары киҫелешендәге дүрт ҡатлы матур бина күренә. Ул дәүләт тарафынан XX быуаттың архитектура ҡомартҡыһы булараҡ һаҡлана икән.

– Беҙҙе, күмерселәрҙе, туплаған ойошма – «Башкируголь» етештереү берекмәһе ошонда урынлашҡайны, – ти юлдашым.

Уның стенаһындағы бер мемориаль таҡтаға яҙылған түбәндәге юлдарға иғтибар итәм: «Башҡорт күмерен, шахтерҙар хеҙмәтен данлаған, Күмертауҙың үҫешенә, сәскә атыуына ҙур өлөш индергән кеше – «Башкируголь» етештереү берекмәһе генераль директоры Шевченко Николай Михайловичҡа». Ысынлап та, Күмертауҙы ҡала иткән был предприятие эшсәндәре тарафынан етештерелгән продукция үткән быуаттың 60 — 80-се йылдарында СССР-ҙағы брикеттың 40 процентын тәшкил итә ине.

Илебеҙҙә башланған үҙгәртеп ҡороуҙарға бәйле, Башҡортостандағы күмер сәнәғәтен артабан йәшәтеү өсөн Рәсәй Хөкүмәтенең ҡаҙнаһы наҡыҫ булып сыҡты. 90-сы йылдарҙан башлап ҡеүәтле предприятие йылдан-йыл һүнә барҙы. СССР Күмер сәнәғәте министрлығына алмашҡа килгән Рәсәй Федерацияһы Күмер сәнәғәте министрлығы, унан һуңғы «Росуголь» акционерҙар компанияһы, үҙ көнөгөҙҙө үҙегеҙ күрегеҙ тип, Башҡортостан күмерселәренә ҡул һелтәне. Башҡортостан Хөкүмәте менән ҡала хакимиәте сәнәғәттең был төрөн һаҡлап ҡалыу өсөн ҡулынан килгәндең барыһын эшләһә лә, «Башкируголь» етештереү берекмәһендә эш туҡтаны. Уның коллективы эшһеҙҙәр һанын тулыландырҙы.

– Күмертауҙа брикет етештерә башлау ауылдар, бигерәк тә минең тыуған ауылым Ҡотлоюл кеүек далала урынлашҡандары өсөн, заманында ҙур ҡыуаныс ине. Шулай булмай, халыҡ тиҙәк һуғып, шуны яғыулыҡ итеп файҙаланды. Өйҙәргә «зәңгәр яғыулыҡ» ингәнгә тиклем социаль-мәҙәни ойошма, учреждениелары, ауыл йорттары ла төп яғыулыҡ итеп брикет ҡулланды, — ти Закир Аҡһаров.

— Бөгөн дә газ индерелмәгән ауылдар бар. Улар нисек йәшәй? Айырыуса оло йәштәгеләр, күп балалы йә фәҡир ғаиләләргә ҡыйын, – тим уға.

– Уларҙы «Баштопсбыт» унитар предприятиеһының Күмертауҙағы филиалы Кемерово, Красноярск яҡтарынан килтерелгән ташкүмер менән тәьмин итә. Предприятиеға Көйөргәҙе районы Ҡунаҡбай ауылы ҡыҙы Ләлә Айтуғанова етәкселек итә. Халыҡ уның эшенән ҡәнәғәттер, тип уйлайым. Уларҙың эшсәндәре хатта ярты метр итеп бысылған утын да һата, – тине Закир ағай.

Мин уның менән әңгәмәләшкәндән аҙаҡ ҡыҙыҡлы фактҡа тап булдым: Күмертауҙың ҡайһы бер уңғандары, брикет фабрикаһы эшләүҙән туҡтаны, тип аптырап ҡалмайынса, яңы төр яғыулыҡ етештерә башлаған. Мәҫәлән, яңы предприятие – «Башҡорт аҙыҡ комбинаты» ширҡәте ҡарабойҙай ҡабығынан биояғыулыҡ брикеттары етештерә. Экологик яҡтан таҙа был яғыулыҡты ябай мейестә лә, ҡаҙанлыҡтарҙа ла ҡулланырға мөмкин. Ҡырҡ биш минут тирәһе ялҡынланып янғандан һуң, 5—7 сәғәт буйына ҡуҙлы күмер булып ята, тимәк, оҙайлы йылылыҡ бирә. Элекке яғыулыҡ – һоро күмер брикеты тирә-яҡ мөхиткә һаулыҡ өсөн хәүефле матдәләр бүлеп сығарһа, яңы биояғыулыҡтың атмосфера озонын боҙоусы углекислый газ бүлеп сығарыу хәүефе лә юҡ.

Элекке «Башкируголь» бинаһында хәҙер Өфө дәүләт авиация-техник университетының Күмертау филиалы урынлашҡан. Беҙҙең ҡаршыға уҡыу йорто директоры Әнүәр Дауытов килеп сыҡты.

– Егеттәр үткәндәрҙе һағынып, йәш саҡтарҙы иҫкә төшөрөп йөрөп ятамы? – тине ул, ҡуш ҡуллап күрешеп. Уның менән уҡыу йортоноң хәл-торошо, ҡаланың бөгөнгө социаль-иҡтисади хәле хаҡында байтаҡ ҡына әңгәмәләшеп торҙоҡ.

Әнүәр Ибраһимович етәкселек иткән уҡыу йорто «Башкируголь» етештереү берекмәһе урынына юҡҡа ғына алмашҡа килмәгән: күмертауҙар, заман ауырлыҡтарынан баҙап ҡалмай, авиация берекмәһендә вертолеттар эшләп һатыу менән урта һәм кесе эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә тотонған. Бинаның бер өлөшөн «Күмертаустрой» тресы биләй ине. Ҡала менән бер ваҡытта ойошторолоп, әллә күпме торлаҡ йорттары, производство һәм социаль объекттар төҙөгән ойошма ла һүнеп ҡалды.

Закир ағай үкенесле һағыш менән:

– Эй, һоро күмер, бигерәк ҡыҫҡа булды һинең ғүмер! – тиһә лә, шахтерҙарҙың шаулы, шанлы хеҙмәте тынып ҡалһа ла, тормош дауам итә. Ҡаланың социаль-иҡтисади тормошо яңы етештереү, төҙөлөш, сауҙа ойошмалары менән тулылана.

Һуңғы ун-ун биш йылда «Күмертаустрой» тресына алмашҡа «Акрополь» ширҡәте килде. Ул республикала табышлы эшләүсе предприятиеларҙан иҫәпләнә. Ширҡәт директоры, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Хәйҙәр Ғайсин:

– Күп фатирлы йорттар төҙөү – үтә лә ҡатмарлы эш. Хәҙерге талаптарға яраҡлаштырып һалынған биналарҙың матур ҙа, сифатлы ла булыуы мотлаҡ. Архитектура биҙәлеше хаҡында ла хәстәрлек күрәбеҙ, – ти. Төҙөлөш йәмғиәте ҡалала торлаҡ йорттар, магазин, коттедждар төҙөү менән генә сикләнеп ҡалмайынса, күрше Көйөргәҙе, Күгәрсен, Ейәнсура райондарында, Салауат,

Стәрлетамаҡ ҡалаларында ла төҙөлөш алып бара. Был төбәктәрҙә «Акрополь» фирмаһы тарафынан тиҫтәнән ашыу автомобилгә яғыулыҡ ҡойоу станцияһы төҙөлөп сафҡа индерелеүе генә лә унын эшмәкәрлеге хаҡында асыҡ һөйләй.

– Беҙ Башҡортостаныбыҙҙа етештерелгән төҙөлөш материалдарына өҫтөнлөк бирәбеҙ, – ти Хәйҙәр Ғайсин. – Был республикабыҙ производствоһы тотороҡлолоғон һаҡлау маҡсатынан сығып эшләнә. Етмәһә, үҙебеҙҙең тыуған тупраҡта үҫкән ҡарағайҙар ныҡ та була бит ул.

Бынан алты тиҫтә йыл элек үҙ эшмәкәрлеген беренсе йорттан башланған төҙөлөш ойошмалары киләсәк быуындарға хәҙерге Күмертауҙы төҙөп ҡалдырҙы. Был эш хәҙер ҙә уңышлы дауам итә.

Күмертауҙар эшһеҙлек, иҡтисади кризис алдында ҡаушап, юғалып ҡалманы, урта һәм кесе эшҡыуарлыҡты уңышлы үҫтереүгә ныҡлы йүнәлеш алды. Улар араһында башҡорт егеттәре менән ҡыҙҙарының да байтаҡ булыуы ҡыуандыра. Зиннур Исхаҡов – шуларҙың береһе. 2001 йылдан бирле ул етәкләгән «Южуралойл» сауҙа йорто» ширҡәтенең эшмәкәрлеге бөтә Рәсәйгә билдәле. Ул — ҡалала иң күп һалым түләүселәрҙең береһе лә. Ширҡәт эшсәндәре «Роснефть», «Башнефть», «Лукойл» кеүек ҡара алтын сығарыусы предприятиеларға трактор, төрлө автомобилдәр, нефть промыслаһы ҡоролмаларына запас частар етештереп, күмәртәләп һатыу менән шөғөлләнә. Шулай уҡ Өфө, Ырымбур, Һарытау, Быҙаулыҡ, Дондағы Ростов, хатта Ҡаҙағстандағы эре филиалдар менән хеҙмәттәшлек итеү был коллектив өсөн ғәҙәти күренешкә әйерелгән. Зиннур Закир улын, оҫта, һәләтле етәксе булыуы өҫтөнә, күмертауҙар менән яҡташтары, көйөргәҙеләр меценат, йәғни бағымсы тип тә беләләр. Ул тыуған ауылында – Яҡупта үҙ иҫәбенә мәсет астырҙы, Ермолаево ауылындағы «Рамаҙан» мәсетенең уңышлы эшләй башлауы шулай уҡ унын ихлас ярҙамына бәйле. Күмертау ҡала башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетына, Көйөргәҙе районы ауылдарында «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!», шәжәрә байрамдарын ойоштороуға матди ярҙам күрһәтә. Зиннур Исхаҡов кеүек оҫта, даланлы һөнәр эйәләре йәшәтә, тотоп тора ла инде хәҙерге Күмертауҙы.

– Ҡалалар ҙа кешеләр кеүек, – ти Закир Аҡһаров. – Һәр ҡайһыбыҙҙың ҡабатланмаҫ биографияһы булған кеүек, Күмертауҙың да тарихи йылъяҙмаһы үҙенсәлекле. Ул – иллене үткән ир уртаһы йәшендә. Бәлки, ҡала йылъяҙмаһын кеше ғүмере менән сағыштырыуым дөрөҫ тә түгелдер, сөнки беҙҙең ғүмер ҡыҫҡа, бер быуатҡа ла тулмай, ә ҡалалар йөҙәр, меңәр йылдар йәшәй. Күмертау күҙ алдыбыҙҙа төҙөлдө. Мин үҙем Бабай ҡасабаһы менән йәштәшмен, ә Күмертау минән алты йылға йәшерәк ҡала. Шулай булғас, мин уға ағай булып сығам да инде, – тип шаярып алырға ла өлгөрә ул. Беҙ ҡаланың төп урамындағы «Дуҫлыҡ» мәҙәниәт һарайы янында торабыҙ. Унын ҡаршыһында – Күмертау шахтерҙарына ҡуйылған ике һәйкәл.

– Ошоларҙың береһе мин булам инде, – тип йәнә һүҙҙе шаярыуға бора яҡташым. Һәйкәлдәр янындағы эскәмйәгә барып ултырабыҙ. Закир ағайҙың күҙҙәре ҡапыл уйсанлана. Моғайын, ул яңынан йәшлек, Күмертау брикет фабрикаһында эшләгән йылдарын, иптәштәрен иҫенә төшөргәндер. Көйөргәҙе районы Ҡотлоюл ауылы уҙаманы Закир Аҡһаров, Күмертауға йәшәргә һәм эшләргә килгәнсе, Маяҡ ҡасабаһындағы һөнәри-техник училищела тракторсыға уҡыған. Уны тамамлауға егетте әрмегә алғандар. Венгрия тарафтарында хеҙмәт итеп ҡайтып, тыуған колхозында бер йыл эшләгәс, донъя күрергә тип Төркөстан яғына сығып китә. Тимер юлда машинист ярҙамсыһы булып эшләй. Шунда мөхәббәтен – Мәләүез районы Айтуған ауылы ҡыҙы Әминәне осрата. Ике йәш йөрәк, ғаилә ҡороп, тыуған яҡтарына –

Күмертауға ҡайта. Брикет фабрикаһында яңы хеҙмәт юлын башлайҙар: Әминә апай – конвейерҙа, ә Закир ағай брикет преслаусы булып эшләй. Предприятие ябылғансы улар ятаҡкан һөнәрҙәренә тоғро ҡала. Закир ағайҙың тынғыһыҙ, фиҙакәр хеҙмәте «Шахтер даны» миҙалы менән билдәләнә.

– Брикет етештереү еңелдән булманы, – тип ҡапыл телгә килде яҡташым. Уның йөҙөндә баяғы шаярыуҙың әҫәре лә ҡалмағайны. – Төйләгән разрезын асҡанда мәшәҡәтлерәк булды. Унан килтерелгән күмерҙең метаны күп ине, яна ла китә. Беҙҙең егеттәр ундай осраҡтарҙа янғын хәүефен булдырмау өсөн, хәрбиҙәр кеүек, һәр саҡ әҙер торҙо… Барыбыҙ ҙа сағ-туҙанлы, шау-шыулы, физик көс талап иткән урында эшләнек. Ауыр булһа ла, зарланманыҡ, әсе тир тамған һоро күмерҙең кешеләргә бик тә кәрәк икәнлеген яҡшы аңлай инек. Уларға шундай шатлыҡ бүләк итә алыуыбыҙ менән бәхетле лә инек.

Бер нәмә лә мәңгелек түгел. Донъя туҡтауһыҙ үҫеш-үҙгәрештә, ул, яҡшыһын да, насарын да бер санаға тейәгән ярһыу арғымаҡтай, бары тик алға елеүен генә белә. Хәҙер һоро күмергә алмашҡа газ килде.

Шул саҡ вертолет тауышы ишетелде.

– Егеттәр сит илгә һатыу өсөн сираттағы «яраплан»ды һынай, – тип, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, зәңгәр күккә баҡты яҡташым.

Ысынлап та, бөгөнгө Күмертауҙың төп иҡтисади нигеҙен машиналар төҙөлөшө тәшкил итә. Шундай предприятиелар араһында Күмертау авиация заводы ҡаланы йәшәтеүсе, «туйындырыусы» иҫәпләнә, уның йөҙөн билдәләй. Элек ҡалаға күмерселәр дан килтерһә, бөгөн уның данын авиаторҙар күтәрә. Күмертау хәҙер республикала ғына түгел, унан ситтә лә «вертолеттар төҙөүселәр ҡалаһы» булараҡ билдәле. Алтын ҡулдар етештергән вертолеттар Ҡытай, Испания, Һиндостан, Иран, Көньяҡ Корея, Сингапур һ.б. илдәр күген иңләй.

«Күмертау ремонт-механика заводы» исеме менән йәшәп килгән был предприятиеға 1966 йылда уның баш инженеры Александр Палатников яңы һулыш өрә: Ка-26 вертолетын төҙөүгә заказ алыуға ирешә. 1967 йылдың 15 мартында вертолетты етештереүгә әҙерлекте башлау тураһында бойороҡ сыға. А.С. Палатников был ваҡытҡа предприятиеның етәксеһе итеп тәғәйенләнгән була.

Тәүге вертолет 1968 йылдың 4 ноябрендә һауаға күтәрелә, ә бер йылдан Ка-26 вертолеты Күмертау машиналар заводында конвейерға ҡуйыла. Заманында ҡаланың һәр икенсе ғаиләһе тиерлек ошо предприятие менән бәйле булды. Эйе, вертолет төҙөүселәр насар йәшәмәне, эш хаҡы башҡаларҙыҡынан юғары булды. КүмАПП ҡалала бик күп торлаҡ йорттары, социаль объекттар төҙөнө.

СССР-ҙың тарҡалыуы, предприятиелар араһында хеҙмәт бәйләнештәренең өҙөлөүе, армияның, флоттың хәле мөшкөлләнеүе бик күп хәрби заводтарҙың ябылыуына килтерҙе. Күмертау авиация предприятиеһы ла XX быуаттың 90-сы йылдарында етди юғалтыуҙар кисерҙе. Эшселәр һаны ҡыҫҡарыу ғына түгел, эш хаҡын да ваҡытында түләй алманылар. Әммә авиаторҙар бирешмәне: ресурстарҙы дөрөҫ файҙаланып, яңы технологиялар үҙләштерҙе, хәҙерге заман вертолеттарының бер нисә төрөн, уникаль техника етештереп, үҙ продукцияһын сит илдәргә сығара.

Авиация предприятиеһынан ҡала, Күмертауҙың социаль һәм коммуналь тармағына ҙур өлөш индереп, ҡаланың йөҙөн билдәләгән предприятиеларҙың береһе – «Искра» заводы. Элекке СССР Оборона сәнәғәте министрлығының техника идараһына буйһонған завод 1978 йылдан башлап махсус техника төҙөү өсөн технологик йыһаздар, инструменттар, технологик комплекстар, һанлы-программалар булдырҙы. Уның эшсәндәре әле 200-ҙән ашыу

төрлө изделие сығара. Халыҡ ҡулланыуы тауарҙары исемлеге бик бай – балалар өсөн музыкаль уйынсыҡтарҙан башлап, икмәк бешереү, тирмән комплекстарына тиклем етештерелә. Продукцияны Мәскәү, Новосибирск, Магнитогорск, Выкса, Һамар, Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Ишембай ҡалалары предприятиелары ҡуллана.

Биш тиҫтә йылда Һоро күмере, вертолеттары менән генә түгел, ҡала республиканың көньяғындағы ҡеүәтле мәҙәниәт, мәғариф үҙәктәренең дә береһенә әүерелде. Өфө дәүләт авиация-техник, Ырымбур дәүләт университеттарының Күмертау филиалдары, педагогия һәм тау колледждары, авиация техникумы кеүек юғары, урта техник уҡыу йорттары Башҡортостандың көньяғында кадрҙар әҙерләү буйынса ҙур эш башҡара.

Һуңғы 10 – 15 йылда Юрий Гагарин исемендәге 2-се интернат-мәктәптең 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты итеп үҙгәртеп ҡоролоуы, Республика политехник лицей-интернаты асылыуы ҡалаға Башҡортостандың төрлө төбәктәренән, Ырымбур өлкәһенән уҡырға килеүселәрҙе ишәйтте.

XX быуаттың 80-се йылдарында үҙгәртеп ҡороу елдәре иҫә башлағас, Күмертауҙа йәшәүсе титуллы милләт вәкилдәре үҙ мәҙәниәтен, мәғарифын тергеҙеү, яңы шарттарҙа яңыса үҫтереү эштәренә ең һыҙғанып тотондо. «Тере шишмәләр» ижтимағи ойошмаһы барлыҡҡа килде. Уның әүҙем ағзалары: Альберт Юлдыбаев, Спартак Хөсәйенов, Самат Күҙәшев, Ирек Агишев, Нурия Хәлилова, Зилә Аҙнабаева, Хаят Собханғолова, Һәҙиә Фәтҡуллина, Ринат Хәйбуллин һ.б. бик күп милләттәштәребеҙҙең фиҙакәр эшмәкәрлеге арҡаһында 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты, Мөхәммәт Исҡужин исемендәге 13-сө башҡорт башланғыс мәктәбе, «Айгөл» башҡорт балалар баҡсаһы асылды. Ҡаланың рус телле мәктәптәрендә лә башҡорт кластары ойоштоpолдо.

Күмертауҙың үҙенсәлекле мәҙәни мөхитендә байтаҡ арҙаҡлы шәхестәр үҫеп сыҡты. БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, арҙаҡлы ҡурайсы, «Берҙәмлек» халыҡ-ара милли мәҙәниәт фестивалдәре, республика конкурстары дипломанты мәрхүм Зыя Хәлиловтың исеме республикабыҙҙың сәнғәт һөйөүселәренә яҡшы таныш. Күмертауҙар уны «Башкируголь» етештереү берекмәһенең Күмерселәр мәҙәниәт һарайында, аҙаҡ «Дуҫлыҡ» мәҙәни-методик үҙәгендә уңышлы эшләп килеүсе Кинйә Арыҫланов исемендәге фольклор ансамблен ойоштороусыларҙың береһе һәм оҙаҡ йылдар уға уңышлы етәкселек итеүсе уҙаман тип белә. Зыя Ишбулдович ғүмеренең һуңғы йылдарында үҙ оҫтаханаһында ҡурай, ҡумыҙ әҙерләү буйынса ал-ял белмәйенсә эшләне. Уның оҫта ҡулдары яһаған башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарын күп йәш быуын вәкилдәре бөгөн дә яратып ҡуллана.

РФ һәм БР Рәссамдар берлеге ағзаһы Флүр Исмәғилевтың (Мишәр Фельдери) ҡатмарлы сюжеттарға ҡоролған, фәлсәфәүи пландағы картиналары республикабыҙ күләмендәге күп күргәҙмәләрҙә урын алды. Шулар араһынан, әйтәйек, төп эштәренең береһе булған «Урал» картинаһы айырыуса үҙенсәлекле. Рәссам төшөргән ябай ғына пейзажға – Көньяҡ Урал убалары теҙмәһенә ныҡлап иғтибар итһәң, унда ял итергә ятҡан мөһабәт батыр һынын күрәһең. Ул – бик күп изге эштәр башҡарғандан һуң, һыңар ҡулын баш аҫтына һалып, серем итеүсе Урал батыр образы. Рәссамдың тыуған районындағы Кинйәбыҙ ауылының Кинйә Арыҫланов музейы түрендә урын алған, шул ауылдан сыҡҡан өс Советтар Союзы Геройы: Ғәфиәт Арыҫланов, Сәлмән Биктимеров һәм Хәсән Ғайсиндарҙың портреттары ла – уның уңышлы ижад емеше.

Даланлы егет һәм ҡыҙҙарыбыҙҙы тормоштоң һәр өлкәһендә лә осратырға мөмкин. Быға ирешеү өсөн, берҙән, тыуған ҡалаңды, икенсенән, үҙ эшеңде

яратырға, был тәңгәлдә энтузиаст, хатта фанатик булырға кәрәктер. Шундай уңған, талантлы башҡорт егеттәренең береһе – психология фәндәре кандидаты, реабилитация үҙәге директоры Ришат Ибраһимов. Ул ошонда тыуып үҫкән. Урта мәктәпте тамамлағас, Ленинградта психологтарҙың юғары мәктәбен, аҙаҡ Мәскәү дефектология институтын, аспирантура тамамлай, кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай.

Үткән быуат аҙағындағы иҡтисади ауырлыҡтарға бәйле «Искра» заводы профилакторийы эшмәкәрлеген туҡтатырға мәжбүр булғас, Ришат Йәүҙәт улы бушап ҡалған бинала мөмкинлектәре сикләнгән балалар менән үҫмерҙәрҙе дауалау, ысын мәғәнәһендә аяҡҡа баҫтырыу үҙәге ойоштора. Был эшкә ул үҙе тотона, бер кем дә мәжбүр итмәй. Мәктәптә педагог, башҡорт балалар баҡсаһында дефектолог булып эшләгән сағында уҡ уны имен булмаған ғаиләләр хәле, мөмкинлектәре сикләнгән балалар яҙмышы борсой, һәм ул, реабилитация үҙәге асырға кәрәк, тигән ныҡлы ҡарарға килә.

Уның фиҙакәрлеге менән асылған был үҙәктә ай һайын 45 – 50-ләп бала дауалана. Аҙаҡ, тәненә, йәненә сихәт эҙләп, бында ололар ҙа килә башлай. Директор 125 кешелек коллектив туплай. 90 урынға иҫәпләнгән үҙәктә улар йыл әйләнәһенә дауаланыусыларға шифахана хеҙмәттәре күрһәтә. Тиҫтә йылға яҡын ваҡытта үҙәк, ҙур уңыштарға өлгәшеп, илдә иң яҡшылар иҫәбенә сыға.

Биш тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт эсендә Күмертау йылъяҙмаһында байтаҡ ҡына күренекле кешеләрҙең исем-шәрифтәре теркәлгән. Шулар араһынан, мәҫәлән, Кемерово өлкәһе губернаторы Аман Тулеев менән Советтар Союзы Геройы Николай Антошкин заманында 4-се урта мәктәптә уҡыған. Икеһе лә туған мәктәптәрен онотмай: йыл да тиерлек уға матди һәм финанс ярҙамы күрһәтә, уҡыуҙа һәйбәт өлгәшкән уҡыусыларға, уҡытыу-тәрбиә эшендәге алдынғы уҡытыусыларға ҡиммәтле бүләктәр тапшыра.

Башҡорт яҙыусыларынан Зиннәт Ғәлимов Күмертауҙа йәшәп, эшләп киткән. Башҡорт яҙыусыларынан Ғәлим Хисамов, Зөһрә Ҡотлогилдина, Салауат Кәримов әҙәбиәттәге юлдарын, журналист булараҡ, урындағы «Ильич юлы» гәзитендә башлаған. Шағирә Миңлегөл Хисамова Юрий Гагарин исемендәге 2-се интернат-мәктәптә тәрбиәсе булып эшләгән. Сатирик шағир, балалар яҙыусыһы һәм журналист Хөснулла Түләкәевтың да тормош, ижад биографияһы күмерселәр ҡалаһы менән тығыҙ бәйле.

Күмертау үҙенең барлыҡҡа килеүе, уның сәнәғәтенең артабанғы үҫеше менән Бабай, Маяҡ, Төйләгән һоро күмер яткылыҡтарына бурыслы булып, хәҙерге ваҡытта уны сығарыу туҡтатылһа ла, ҡалала машиналар эшләү, урта һәм кесе эшҡыуарлыҡ төп йүнәлеш булып ҡала. Эшһөйәр, тыуған ҡалаһын яратҡан, киләсәкке тормошон унан башҡа күҙ алдына ла килтерә алмаған күмертауҙар, тырышып эшләп, яңы уңыштарға өлгәшә.

Бабай, Маяҡ, Ҡалдар, Ворошиловка, Теләүембәт, Тәүәкән, Наҙар, Төйләгән ятҡылыҡтарындағы һоро күмерҙең артабанғы яҙмышына килгәндә, киләсәктә уға ихтыяж ҙур буласаҡ әле. Республикабыҙҙың киләсәк быуын вәкилдәре Башҡортостандың көньяғында химия заводтары төҙөп, бик күп төрлө продукция етештерәсәк. Уны сығарыуы әллә ни ҡыйынлыҡтар тыуҙырмаясаҡ, сөнки һоро күмер ер өҫтөнә яҡын ҡатламда ята. Ул – иҡтисади яҡтан отошло ҡиммәтле яғыулыҡ түгел, ә бик кәрәкле химик сеймал.

**Тәлғәт ШАҺМАНОВ.**

## ЙЫҺАН ҠОН ҠАЙТАРА

Ағиҙел – һәр ҡайһыбыҙға үҙенсә ҡәҙерле, матур иҫтәлектәр менән байытыла, шул уҡ ваҡытта илһөйәрлек, милли ғорурлыҡ тойғоһо уятып, гүзәллекте, мәңгелекте кәүҙәләндерә. Бала саҡта бер ярынан икенсеһенә етә алмаҫтай киң, йәйҙәре иркә тулҡындарында бәүелткән наҙлы, яҙғы ташҡында кәмәне түңкәрерҙәй ажғырып аҡҡан ярһыу Ағиҙел булып хәтерҙә ҡалһа, олатайҙарҙың тәмле сәйгә фәҡәт Иҙел һыуы ҡулланыуы, әсәйҙең ҡәҙерле кейемдәрен тик Иҙелгә алып барып йыуыу ғәҙәте уның һыуының шифалы, тылсымлы булыуы тураһында хәҡиҡәтте күңелгә һеңдергән. Ә инде оләсәйемдең Мәләүезгә килеп еткән пароходтар хаҡында хәтирәләре Ағиҙелдең шундай гәйрәтле, мул һыулы сағына шаһит була алмағанға үкенес тә ҡалдырған. Ә һуңынан, беҙҙең менән бергә «үҫкән» индустрия гиганттары эшкә егелгәс, йырҙарҙа йырланған, ҡобайырҙарҙа данланған Иҙелдең йәйге селләләрҙә тауыҡ та аша сығырлыҡ хәлдә ҡалыуы, бысраныуы йөрәкте әрнетә…

Халҡыбыҙҙа киң таралған «Бер ағас ҡырҡһаң, икене ултырт» тигән аҡылы ла юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән. Ләкин цивилизация алға барған, илебеҙ фәнни-техник яҡтан үҫешкән һайын әҙәм балаһы үҙ асылынан алыҫлаша, булмышын юғалта кеүек. Тышҡы юғары мәҙәнилек артында – бушлыҡ, битарафлыҡ, ә күңел күҙе һуҡырая, нәфсе үҫкәндән-үҫә: үҙләштерергә, тик үҙләштерергә. Ҡайтарыу кеүек изге бурыс онотола. Ҡайҙа унда берәү урынына – икәү, ҡалған тамыры, орлоғо юҡ ителә. Яңғырауыҡлы лозунгылар, маҡтауҙар, маҡтаныуҙар – берәү сирәм аҡтарған, күпме ағас ауҙарған, кемдер һыу ағымын кире борған, бәғзеләр «кәрәкмәгән» һаҙлыҡтарҙы киптергән. Ә Ер-әсәнең һыҡраныуын бер кем ишетмәй, эсер һыуҙар, йылға-күлдәр ҡороуы әҙәм балаһы «эшмәкәрлеге» булыуын танырға теләмәй. Ғәзиз еребеҙҙе талаусыларға маҡтаулы исемдәр бирелә, күкрәктәре наградаларҙан һығыла.

Ә тәбиғәт өнһөҙ бирә лә бирә. Ағиҙел дә беҙгә алһыҙ-ялһыҙ хеҙмәт итә. Үҙ дәүерендә күпме һал ағыҙа, ә һыу аҫтында батып ҡалған ағастар күпме?! Аяуһыҙ ҡырылған урман да – йылға ҡороуына сәбәпсе. Ҡеүәтле завод-фабрикалар биш йыллыҡ пландарҙы арттырып үтәй, тик таҙартыу ҡоролмаларына мәңге аҡса етмәй, улары иҫәпкә бар, һанға юҡ. Иҙелдә үрсегән һирәк балыҡтар юғала. Сәнәғәт етештереүен ҡотҡарыу һәм, моғайын, Ағиҙелгә лә ярҙам итеү маҡсатында Иштуған һыуһаҡлағысын төҙөү планы өлгөрә. Ә таяҡ ике осло – һыуҙар ағышын бороу, юлын быуыу, тәбиғи ҡанундарҙы тупаҫ боҙоу ҡоһоро әҙәм балаһы башына төшә.

Аҙ ғына ситкә тайпылып, хәҙерге хәлебеҙгә күҙ һалайыҡ: тәбиғәт, әйтерһең дә, аҡылдан шашҡан, бөтә донъяла катаклизмдар цивилизацияны ҡыйрата, кеше ғүмерҙәре ҡыйыла! Мәңге һалҡын күрмәгән, мейес яҡмаған яҡтарҙа климат ҡапыл һыуына, ҡар күрмәгән урындарҙы көрт баҫып, тормош ағымын туҡтата. Мәңгелек боҙлауыҡтар ирей башланы. Бындай тәбиғәт аномалияларының ҡорбандары бик күп, ә был бит аңлаған кешегә – әҙәм балаһының ҡомһоҙлоғо, яуызлығы, вайымһыҙлығы, тәкәбберлеге өсөн яза. Йыһан ҡон ҡайтара түгелме?!

Халыҡ быны аңлай, әлбиттә, шуға күрә Иштуған һыуһаҡлағысы төҙөлөшөнә тешетырнағы менән ҡаршы торҙо, әлегә тиклем кеше ҡулы ботарламаған хозур тәбиғәт мөйөшөн һаҡлап ҡалырға тырышты. Эргәләге ҡурсаулыҡта бик һирәк ҡалған үҫемлектәр, ҡош-ҡорт, йәнлектәрҙең юҡҡа сығыу хәүефе йәмәғәтселекте күтәрҙе. Бында тәбиғәттең ҡабатланмаҫлығын тәьмин иткән ағастарҙы ҡырыу, дымлылыҡ артыуы флора һәм фаунаға йоғонто яһаясаҡ, ә карст күренештәренең әүҙемләшеүе быуалар йырылыуы, ер тетрәү кеүек аяныслы эҙемтәләргә килтереүе ихтимал, тигән һығымта яһалды. Етмәһә, бар донъяға танылған, палеолит осоро ҡомарткыларын һаҡлаған Шүлгәнташ мәмерйәһе зыян күрәсәк. Бына ошо кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәргә таянып,

ҡеүәтле йәмәғәтселек фекере Иштуған һыуһаҡлағысы төҙөлөшөн туҡтатҡайны. 1989 йылдың 1 августында экологик тикшеренеү нигеҙендә СССР-ҙың Тәбиғәтте һаҡлау дәүләт комитеты, ә 1990 йылдың 17 апрелендә БАССР-ҙың Юғары Советы төҙөлөштө туҡтатыу тураһында ҡарар сығарҙы.

Һуңыраҡ был идея яңынан ҡалҡып сыҡты. Республика хөкүмәтенең 1999 йылдың 17 августындағы ҡарары менән «Башҡортостан» милли паркының сиктәре асыҡланды һәм уның биләмәләренән ситтә Йомағужа һыуһаҡлағысы төҙөүгә фатиха бирелде. Ун ике ғалим: «Ағиҙел буйында урынлашҡан Күмертау, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ ҡалаларындағы химия, нефть химияһы һәм башҡа комплекстарҙа, йәйен көнкүреш ихтыяждарына ла даими һыу етмәүе күҙәтелеп, был Башҡортостандың көньяғында экологик хәлде ҡатмарлаштыра»,– тигән фекер белдерҙе.

2007 йылдың 21 июлендә БР Президенты Мортаза Рәхимов ҡулынан шатлыҡ эсемлеге – шампан шарабы Ағиҙел һыуына ҡушылып аҡты – Йомағужа һыуһаҡлағысы һәм 45 мегавольт ҡеүәтле һыу электр станцияһы рәсми асылды. Төҙөлөш 8,5 миллиард һумға төшөп, ул үҙ сығымдарын ун йылда ҡайтарасаҡ, тип иҫәпләнә. РФ Дәүләт Думаһының экология буйынса комитеты рәйесе Владимир Грачев Йомағужа һыуһаҡлағысын Байкал күле менән сағыштырҙы. Һыуһаҡлағыстың оҙонлоғо 124 километр, уртаса тәрәнлеге – 26 метр, бөтәһе 890 миллион кубометр һыу һыйҙырышлы. Президент һыуһаҡлағыстың файҙаһына айырыуса баҫым яһаны: «Төҙөлөштөң ыңғай яҡтары бик күп. Күпселек торлаҡ пункттар, мөһим халыҡ хужалығы объекттарына хәҙер ташҡын ҡурҡыныс түгел. Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез, Ишембай ҡалалары һыу менән тотҡарлыҡһыҙ тәьмин ителәсәк. Яҡын райондарҙың сәнәғәт предприятиелары һәм халҡы арзан электр энергияһынан файҙалана. Ҡайһы бер экологтарҙың хәүефләнеүе урынһыҙ: һыуһаҡлағыс «Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығы»на, урындағы фауна, флора, данлыҡлы Бөрйән бал ҡортона йоғонто яһаманы. Быны хәҙер абруйлы тикшеренеүҙәр раҫлай» («Деловой мир Башкортостана» гәзите, № 87).

Әлбиттә, тәбиғәт һағында тороусыларҙың ҡайһы берҙәре үҙ фекерендә ҡала. Башҡортостандың экологик хәле тураһында йәмәғәтселек 80-се йылдарҙа ныҡлы саң ҡаҡты. Ә 90-сы йылдарҙағы сәйәси-иждтимағи ваҡиғаларҙан һуң был мәсьәлә тулыһынса республика иңенә ятты. Башта контроль һәм тәбиғәтте һаҡлау нормаларын боҙған өсөн иҡтисади һәм финанс механизмы кәрәклеген Рәсәйҙә беренселәрҙән булып аңлаған Башҡортостан етди аҙымдар яһаны. 2000 йылда уҡ «Экология мониторингы тураһында» закон ҡабул ителде. Ул экологияны күҙәтеү өлкәһендә берҙәм фәнни-техник сәйәсәттең законлы нигеҙен тәшкил итте. Һөҙөмтәлә, экологик белешмә буйынса, республикабыҙҙың төп йылғаһы Ағиҙелдең дөйөм хәлендә ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелә. Сәнәғәт һәм көнкүреш ҡалдыҡтар ағын һыуға эләкмәһен өсөн, быуат башынан «Ҡалдыҡтар» һәм уға ярашлы урындағы аныҡ программалар тормошҡа ашырыла. Учалыла асыҡланған сәнәғәт предприятиеһының һыуҙы бысратыуына сик ҡуйылды. «Сода» йәмғиәтендә ҡалдыҡтарҙы юҡ итеү һәм һыуҙы таҙартыу мәсьәләһе Ағиҙелгә «иркен тын алыу» мөмкинлеге бирҙе. Торлаҡ пункттарҙа файҙаланылған һыуҙы йылғаға ағыҙғансы таҙартыу проблемаһы буйынса һөҙөмтәле саралар күрелде. Былтыр Өфөлә уникаль таҙартыу ҡоролмаһы эшләй башланы, ҡулланылған һыу Ағиҙелгә тик юғары кимәлдәге фильтр аша ағыҙыла, йылына бысраҡ матдәләр 20 мең тоннаға кәмейәсәк, тип билдәләй етәкселек. Республикала һыу ятҡылыҡтарының торошо һаҡлыҡ сараларының финанс яҡтан да үҙен аҡлауын күрһәтә.

Артабан да республикала экологик проектты ғәмәлгә ашырыу төбәктең уникаль тәбиғәтен һаҡлауға булышлыҡ итәсәк. Был тарафта эшҡыуарҙар ҙа әүҙемлек күрһәтергә бурыслы. Һис шикһеҙ, беренсе сиратта республиканың Өфө, Белорет, Мәләүез, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Бөрө, Дүртөйлө кеүек төп ҡалаларын һуғарған Ағиҙел йылғаһының сафлығын, тулы һыулылығын тәьмин итеү – изге бурыс. Беҙҙән һуңғы быуындар ҙа уның көмөш һыуында ҡойоноп, саф һыуын эсеп, тәбиғәт хозурлығында кинәнер, йән-тән сихәте алыр, «һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ, үҙем һыу буйҙарында» тип зарыҡмаç… Ғөмүмән, тәбиғәт – халыҡ байлығы, әгәр беҙ уны файҙаланыу менән бергә һаҡлау, яңынан тергеҙеү һәм арттырыу хәстәрен күрмәһәк, килер быуын беҙҙе ҡәһәрләр.

**Айзирәк КАНТИКОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

***

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 130 йыл тулыу айҡанлы Башҡорт дәүләт академия драма театры майҙанында тантана уҙҙы. Сарала йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ғалимдар, яҙыусылар, әҙиптең туғандары һәм яҡташтары ҡатнашты. Тантананың ойоштороусыһы – Мәжит Ғафури исемендәге мәҙәниәт фонды Өлкә йәмәғәт ойошмаһы советы. Шағирға арналған митингыны билдәле журналист, Мәжит Ғафури исемендәге премия лауреаты, фонд директоры Мадриль Ғафуров асты һәм алып барҙы. Шағирҙың ейәне Хәлит Ғафури олатаһына бәйле иҫтәлектәре менән бүлеште, уның шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе. Митингыға йыйылыусылар Башҡортостандың халыҡ артискаһы, Мәжит Ғафури исемендәге премия лауреаты Илһөйәр Ғазетдинованың әҙиптең спектаклдәрен республика театрҙары сәхнәһендә тергеҙеү тәҡдимен хупланы, быйыл көҙ Өфөлә, Ғафури һәм Бүздәк районында шағирҙың иҫтәлеге көндәре уҙғарырға килеште. Митинг аҙағында унда ҡатнашыусылар Мәжит Ғафуриҙың һәйкәленә сәскәләр һалды.

***

Өфөлә Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейында Силәбе ҡалаһының Шәйехзада Бабич исемендәге китапханаһы хеҙмәткәрҙәре һәм «Айгөл» халыҡ бейеүҙәре ансамбле коллективы менән осрашыу булды. Китапхана мөдире Көнһылыу Әйүпова етәкселегендәге делегация Ш. Бабич эҙҙәре буйлап Башҡортостанға сәйәхәткә сыҡҡан. Башҡортостандың халыҡ шағиры, БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев изге юлға сығыуҙары менән ҡотлап, ҡунаҡтарға рәхмәт белдерҙе һәм Шәйехзада Бабич тормошо тураһында һөйләне. Башҡортостандың халыҡ шағиры Абдулхаҡ Игебаев Ш. Бабичҡа арналған поэмаһынан өҙөктәр уҡыны.

Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары, шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов бөйөк шағирҙың һоҡланғыс ижады хаҡында һөйләп, шиғырҙар уҡыны. Сарала шулай уҡ Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаттары Зөлфиә Ханнанова менән Лариса Абдуллина сығыш яһаны.

Осрашыуҙа Светлана Чураева, Лира Яҡшыбаева, Ринат Камал, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Фәнис Янышев һәм башҡалар ҡатнашты.

***

Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә билдәле башҡорт яҙыусыһы Һәҙиә Дәүләтшинаның тыуыуына 105 йыл тулыуға арналған уникаль фотоальбом донъя күрҙе.

Башҡорт һәм рус телдәрендә төҙөлгән хеҙмәт биш бүлектән тора. Альбомға архив материалдары һәм әлегә тиклем бер ҡайҙа ла баҫылмаған фотографиялар, яҙыусының рәссамдар Ә. Лотфуллин, Р. Абдуллин, А. Ғәлин эшләгән портреттары, скульпторҙар Ғ. Мөхәмәтшин, Х. Ғарипов ижад иткән бюстарҙың фотокүсермәләре индерелгән. Шулай уҡ яҙыусы Ғәзим Шафиҡов, ғалимдар Марат Минһажетдинов, Роберт Байымов, Әхмәт Сөләймәнов, Әнғәм Хәбиров, Рима Сөләймәноваларҙың мәҡәләләре, Һәҙиә Дәүләтшинаға арналған «Һәҙиә» драмаһы (Ғәзим Шафиҡов), «Төн» трагедияһы (Наил Ғәйетбай) буйынса сәхнәләштерелгән спектаклдәрҙән күренештәр, «Ырғыҙ» романының прототиптарын мәңгеләштергән фотоһүрәттәр һәм башҡа мәғлүмәттәр бар.

***

Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте китаптарҙың электрон вариантын булдырыу һәм таратыу эшен башланы. Электрон варианттағы тәүге китап – «Тыл геройҙары»ның күп томлығы. 20 томлыҡ был йыйынтыҡта Башҡортостанда йәшәп, «1941 – 1945 йылдарға Бөйөк Ватан һуғышында фиҙакәр хеҙмәте өсөн» миҙалы менән наградланғандарҙың исемлеге бирелгән. Баҫма Еңеүҙең 65 йыллығына ҡарата 2010 йылдың май айында сығарылғайны. Китапты Интернеттан PDF форматында алырға мөмкин буласаҡ.